# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАҘЫ



## IV ТОМ

# BASHKORT PEOPLE'S CREATIVE ACTIVITY

## EPOS

# БАШКИРСКОЕ НАРОДНОЕ ТВОРЧЕСТВО

## ЭПОС

# BASKURT HALIK FOLKLORU

## EPOS

УФА
«КИТАП»
1999

# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ

## IV ТОМ

## ЭПОС



ӨФӨ
«КИТАП»
1999

ББК 82. 3 (2 Рәс=Баш)
Б 29

Мөхәрририят: *Әхмәт Сөләймәнов* (баш мөхәррир), *Ҡәҙим Аралбаев, Рауил Бикбаев,* *Наиль Бикбулатов* , *Салауат Галин,* *Нур Зарипов* , *Фәнүзә Нәҙершина, Зиннур Ураҡсин, Сабир Шәрипов, Ғайса Хөсәйенов.*

Томға материал һайлаусы, төҙөүсе һәм аңлатмалар биреүсе — *Мөхтәр Сағитов* , *Берйән Байымов.*

Инеш мәҡәлә авторҙары — *Мөхтәр Сағитов*, *Берйән Байымов, Салауат Галин.*

Томдың яуаплы мөхәррирҙәре — *Әхнәф Харисов* , *Салауат Галин.*

Нәшриәт мөхәррирҙәре — *Гөлназ Исхаҡова, Венер Кунафин.*
Күсереп баҫҡанда томға һылтаныу мотлаҡ.

Редакционная коллегия: *Ахмет Сулейманов* (главный редактор), *Кадим Аралбаев, Фануза Надршина,* *Наиль Бикбулатов* , *Салават Галин, Равиль Бикбаев,* *Нур Зарипов* , *Зиннур Ураксин, Сабир Шарипов, Гайса Хусаинов.*

Подбор материала для тома, составление, комментарии — *Мухтар Сагитов* , *Бурзян Баимов.*

Авторы вступительной статьи — *Мухтар Сагитов*, *Бурзян Баимов, Салават Галин.*

Ответственные редакторы — *Ахнаф Харисов* , *Салават Галин.*

Редакторы издательства — *Гульназ Исхакова, Венер Кунафин.*

При перепечатке ссылка на том обязательна.

**Башҡорт халыҡ ижады.** Дүртенсе том. Эпос — Өфө: Ҡитап, 1999. — 400 бит.

«Башҡорт халыҡ ижады» тупланмаһының сираттағы баҫмаһы — эпостар йыйынтығының дауамы, йәғни икенсе китабы (III том 1998 йылда сыҡты).

Китап тулыландырылып, заманса вариантта әҙерләнгән «Алпамыша», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Алдар менән Зөһрә», «Һуңғы һартай», «Күсәк бей», «Ҡоблан батыр» һ. б. тормош-көнкүреш эпостарынан төҙөлгән.

ТП — 33

ISBN 5-295-02263-3 (т. IV)
ISBN 5-295-01393-6

© Составление Сагитова М. М., Баимова Б. Б., 1999

## МӨХӘРРИРИӘТТӘН

Был томға Мөхтәр Сәғитов төҙөгән һәм 1973 йылда нәшер ителгән «Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. 2-се китап» тигән йыйынтыҡ нигеҙ итеп алынды. Китап йәнә алты текст, атап әйткәндә, «Мактымһылыу», «Уҙаҡ менән Туҙаҡ — балабәшнәк ярсығы», «Һуңғы һартай», «Ҡобланды батыр», «Күсәк бей» (вариант) һәм «Ҡарағөлөмбәт менән Аҡколомбәт» әҫәрҙәре менән тулыландырылды. Инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар бүлегендә, Мөхтәр Сәғитов яҙғандарға өҫтәп, яңы текстар хаҡында тейешле мәғлүмәттәр бирелде.

Баҫмаға әҙерләгәндә инеш мәҡәләгә, текстарға һәм аңлатмаларға яңы орфография ҡағиҙәләренән сығып, төҙәтмәләр индерелде.

Тәүге баҫманан айырмалы рәүештә, был томда аңлатмалар бүлеге яңыса эшләнде, йәғни уҡыусыларға аңлашылмаған һүҙҙәр айырым өлөш — глоссарий итеп бирелде.

Шулай итеп, был томды тормош-көнкүреш эпостарын үҙ эсенә алған тәүге баҫманың ҡабатланмаһы түгел, ә тулыландырылған яңы вариант тип ҡарарға кәрәк.

# БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ ТОРМОШ-КӨНКҮРЕШ ЭПОСЫ

Фәнгә күптән инде билгеле булыуынса, эпос бер генә осор емеше түгел. Унда һәр бер дәүер үҙенең эҙен ҡалдыра килгән. Шуға күрә лә эпос төрлө осорҙарға, дәүерҙәргә хас билдәләрҙе үҙендә туплаған ҡатмарлы күренеш буларак күҙ алдына баҫа. Бер үк әҫәрҙә бик боронғо ҡараштарҙы, мөнәсәбәттәрҙе сағылдырған мотивтар менән бергә сағыштырмаса һуңғы осорға хас мотивтарҙы ла күрергә мөмкин. Ындай күренеш һәр бер эпик ҡомартҡыла тиерлек осрай. Был томда тупланған эпик әҫәрҙәр ҙә ошо уҡ фекерҙе раҫлай.

Тарихтан билдәле булыуынса, ырыу ҡоролошон алмаштырған феодализм йәмғиәте кешелек тормошона яңы ижтимағи-иҡдисади мөнәсәбәттәр, социаль үҙгәрештәр алып килә. Ысынбарлыҡтың үҙенсәлекле поэтик сағылышы булып тыуған эпос йәмғиәттәге ошо үҙгәрештәрҙе һүрәтләндереүҙән ситтә ҡалмаған. Әгәр боронғорак эпик әҫәрҙәрҙә мифик образдар аша кәүҙәләндерелгән тәбиғәт көстәренә ҡаршы көрәш өҫтөнлөк алған булһа, тора-бара эпостың тематикаһы, образдар системаһы үҙгәрештәргә осрай. Кешелек йәмғиәтендә формациялар ҡапыл ғына алмашынмаған, ә оҙайлы күсеш процесы кисергән, төрлө ижтимағи-иҡдисади мөнәсәбәттәр йыш ҡына аралашып киткән кеүек, эпостарҙың эволюцияһында ла был үҫеш-үҙгәрештәрҙең үҙенсә сағылышын, төрлө мотивтарҙың ҡатмарлы аралашып китеүен күҙәтергә мөмкин. Әйтәйек, ырыу ҡоролошонон тарҡалыу дәүерен сағылдырған «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһылыу» әҫәрҙәрендә феодализм дәүеренә хас мотивтар һәм деталдәр ҙә бар. Йәки, киреһенсә, феодализмдың башланғыс осорона ҡараған «Алпамыша», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» хикәйәттәрендә ырыу ҡоролошо осорона хас мотивтарҙы, образдарҙы күреп була.

Башҡорт эпосы әҫәрҙәренең байтағында феодализм дәүерендә, бигерәк тә уның башланғыс осоронда, эре ырыу-ҡәбилә союздарына ойошоу тенденцияһы, ырыуҙар берҙәмлеге, тыуған илде сит дошмандарҙан һаҡлау темаһы өҫтөнлөк итә. Ырыу ҡоролошо осорон сағылдырыусы эпостарҙа төҫмөрләнә генә башлаған социаль тигеҙһеҙлек һуңғарак дәүерҙә тыуған әҫәрҙәрҙә асыҡлана төшә һәм

гөп мотивтарҙың береһенә әйләнә. Бына ошо социаль факторҙарҙың көсәйә барыуы, ҡәрҙәш ырыу-ҡәбиләләрҙең (ҡайһы бер осраҡтарҙа сағылышы менән төрлө булған ырыуҙарҙың) ойошоуға, берҙәмлеккә ынтылыу тенденцияһы «Алпамыша», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Зөһрә менән Алдар» әҫәрҙәренең төп үҙенсәлеген билдәләй.

Башҡорт халыҡ ижадында киң таралған эпик әҫәрҙәрҙең береһе — «Алпамыша менән Барсынһылыу» иртәге. Академик В. М. Жирмунскийҙың раҫлауынса, был сюжет Төрки ҡағанаты осоронда, йәғни VI—VIII быуаттарҙа уҡ, Алтай тауҙары төбәгендә киң билдәле булған[1]. Әммә һуңынан был сюжет, һәр халыҡтың үҙ фольклор традициялары нигеҙендә үҙгәрештәргә осрап, ерләшеп киткән. Әйтәйек, «Алпамыша»ның алтай милли версияһында ваҡиғаларҙың Алтай тауында, әзербайжан, шулай уҡ төрөк версияларында Кавказда, үзбәк, ҡарағалпаҡ, ҡаҙаҡ версияларында Ҡуңғрат-Байсунда барыуы, ә башҡорт версияларында Уралда барған тип һүрәтләнеүе, һәр халыҡтың конкрет тормош-көнкүреш үҙенсәлектәрен сағылдырыуы, — ана шул ерләшеүҙең бер күренеше ул. Сюжет уртаҡ булыуға ҡарамаҫтан, милли версияларҙың нигеҙендә һәр халыҡтың үҙ тарихына, үҙ тормошона ҡағылышлы төрлө осор ваҡиғалары ята. Мәҫәлән, «Алпамыша»ның ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, үзбәк версиялары сюжеты сағыштырмаса һуңғараҡ дәүерҙә булып үткән ҡалмыҡ баҫҡынсыларына ҡаршы алып барылған оҙайлы көрәш ваҡиғалары тәьҫирендә үҙенсәлекле үҫеш алған. Башҡорт фольклорындағы был эпостың тарихи ерлеге бүтәнсәрәк: унда әйләр һәм бүләр ырыуҙары араһындағы көрәш күрһәтелә. Тик С. Ғ. Сафуанов тарафынан 1961 йылда Ырымбур өлкәһендә (Лоҡман һәм Ғәйникамал Юлдашевтарҙан) яҙып алынған вариант кына, нәҡ үзбәк версияһындағы кеүек, Алпамышаның ҡалмыҡ баҫҡынсыларына ҡаршы көрәшен һүрәтләй.

«Алпамыша менән Барсынһылыу» иртәгенең нигеҙендә ижтимағи тормоштоң бик боронғо осорҙары өсөн хас булған күренештәр ята. Шуларҙың иң мөһиме — Әйләр хандың ҡыҙы Барсынһылыу ир-егеттәр менән көрәшеп, үҙенә кейәү һайлауы. Ҡыҙҙың Алпамыша менән туй алды көрәше бөтә вариант һәм яҙмаларҙа ла тотороҡло һаҡлана һәм ҡалыплашҡан традицион формала бирелә. Кирәй Мәргәндең хаҡлы раҫлауынса, «уны матриархат һәм патриархат араһындағы оҙайлы көрәштең образлы сағылышы итеп анларға кәрәк»[2].

Әҫәрҙә никахтың матриархаль характерҙа булыуын да, йәғни ир-егеттәрҙең ҡатын-ҡыҙ йортона (иленә) күсеп йәшәүен, күрмәү мөмкин түгел. Шул уҡ ваҡытта «Алпамыша менән Барсынһылыу»ҙа матриархат тәртиптәренең һәм матрилокаль никахтың һуңғы осорҙары сағылып ҡалған, тип уйларға кәрәк.

---

[1] Жирмунский В. М. Тюркский героический эпос. Л.: «Наука», 1974. 218-се бит.

[2] Кирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. Өфө, 1961. 201-се бит.

Барсынһылыуҙың ата-әсәһе, ағалары, еңгәләренең ул өйгә алып ҡайтҡан Алпамышаға тороп ҡул бирмәүҙәрен быңа ошоноң менән аңлатырға мөмкин. Икенсе төрлө итеп әйткәндә, ҡыҙҙың кейәү эҙләп майҙанда көрәш тотоуы уның үҙ туғандарында яҡлау тапмай. Был инде әҫәрҙә матриархат осорҙарының һуңғы дәүере сағылып ҡалған, тип раҫларға нигеҙлек бирә[3].

Башҡорт фольклорындағы «Алпамыша менән Барсынһылыу» идея-эстетик айышы ил-йорт именлеген һаҡлау, ырыу-ҡәбиләләр берлеген һәм татыулығын булдырыу идеяһы менән тығыҙ бәйле. Ул идея, күп кенә халыҡ эпостарына хас булғанса, ике ырыу йәки ҡәбилә вәкилдәренең, ҡыҙ менән егеттең өйләнешеүҙәре, ырыу-ара туғанлыҡ, ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ урынлаштырыу аша еткерелә. Алпамыша, үҙ ғаиләһен, Барсынһылыуҙы, ырыуын яҡлап, яу менән килгән Бүләр хан ғәскәрен ҡыйрата һәм, йорт-еренең иркен, тыныслығын һаҡлап ҡала. Алпамыша батырҙың Әйләр хан ҡыҙы Барсынһылыуға өйләнеүе ырыуҙар туғанлығын нығытыуға ярҙам иткән булһа, ырыуҙы яҡлап, Бүләр ханды ҡыйратыуы менән Алпамыша ил-йорт именлеген һаҡлар батыр дәрәжәһенә күтәрелә.

Башҡорт «Алпамыша»һының бүтән төрки версиялары менән уртаҡ яҡтары байтаҡ. Алпамыша менән Барсынһылыуҙың икеһе бер үк көндә тыуыуы, сабый саҡтан уҡ ғәйрәтле булыуҙары, Барсынһылыуҙы көс менән алмаҡ булып килгән дошманға Алпамышаның ҡаршы сығыуы, уның аяуһыҙ көрәше, аҙаҡ, йоҡоға талып, дошман ҡулына төшөүе, хан ҡыҙҙары ярҙамында тотҡонлоҡтан ҡотолоуы, юлда көтөүселәр менән осрашыуы, көтөүсе ҡиәфәтендә ҡатынының туйына ҡайтыуы, үҙ урынына хан булып алған Ҡолтабаны үлтереүе кеүек традицион эпизодтар «Алпамыша» сюжетының башҡа милли версияларында ла бар.

Геройҙы һүрәтләгәндә, боронғо эпоска характерлы гипербола алымы киң ҡулланылған. Алпамышаның ғәҙәттән тыш матур, ғәйрәтле булыуы, мөғжизәле шарттарҙа тыуған бала икәнлеге айырып әйтелгән. Ул, йыл үҫәһен көн үҫеп, алты йәшендә тиңһеҙ батырға әйләнә. Алпамыша ғәйәт ирәбе, ғәләмәт көслө батыр булып күҙ алдына баҫа: уның буйы ғына ла алтмыш (ҡайһы бер вариантта етмеш) аршын, яурыны — алты аршын. Был бәһлеүән, осо эләгеп, ыштан төбөн йыртa тип, эре ҡарағайҙарҙы тамыры менән йолҡоп, үҙенә юл яра йәки, икенсе вариантындағыса, һабан һөргән кешеләрҙе үгеҙе-һабаны менән бергә кеҫәһенә һалып ҡуя. Геройҙы гипербола алымы менән һүрәтләү Алпамышаның дошман менән көрәш картиналарында ла айырым-асыҡ күренә. Мәҫәлән, ул уҫаҡ ағасын тамыры-ние менән йолҡоп алып, шуның менән дошмандарын ҡыра (А. Г. Бессонов варианты). Икенсе бер вариантта ул өс уғын өс пар үгеҙ егелгән арбаға һалып алып бара (Төхфәт Сөләймәнов варианты). Ошо уҡтарҙы атып, дошмандарҙың иҫәпһеҙ-һанһыҙ ғәскәрен ҡыйрата. Батыр бер нисә көн буйына арымай-талмай дошмандар менән алыша ала. Шулай уҡ ул әллә нисә көн һәм

---

[3] Галин Салауат. Тарих һәм халыҡ поэзияһы. Өфө, 1996. 49-сы бит.

төп буйына тотошлай йоҡлай ҙа. Был оҙайлы тәрән йоҡо — төрки халыҡтар фольклорында киң таралған күренеш.

Халыҡ араһында Алпамыша хаҡындағы эпос сюжеттары менән бергә айырым-айырым легендалар ҙа йәшәй. Ирәндек буйында (Әбйәлил районы) «Алпамыша ташы» исемле бер ҡая тураһында шундай легенда таралған. Был ҡая Алпамыша тигән батырҙың таш һыны, имеш. «Ул батыр бик ҙур кәүҙәле булған, тауҙан тауға атлап кына сыға торған булған. Бик күп йыл төрлө ерҙә булып, ил гиҙеп, һуғышып яу ҡайтарып йөрөгәндән һуң, Алпамыша ошо тауға хәл алырға килеп ултырған да шунан тормаған, батырҙың һыны таш ҡаяға әйләнеп ҡалған»[4]. Алпамышаны башҡорт ерлегенә күсереү, Уралдағы тау-таш, ер-һыуҙың барлыҡҡа килеүен уның исеменә бәйләп аңлатырға тырышыу шул уҡ китапта килтерелгән «Алпа комо айырытау» легендаһында ла сағыла: Алпа батырҙың ҡынйырағынан ҡаҡҡан ҡомдан Ағиҙел тамағына яҡын ике айырытау барлыҡҡа килеүе әйтелә. Был легенда 1939 йылда Ә. Исламғолов тарафынан яҙып алынған. Ошо йәһәттән Алпамыша батыр образы боронғо грек мифологияһындағы изгелекле титандар, шулай уҡ Кавказ халыҡтары эпосындағы мөһабәт нарт образдарына яҡын тора.

Алпамыша ла ҡоро батыр ғына түгел, һәләтле йырсы ла, һүҙ оҫтаһы ла. Ул — ғәҙеллекте яҡлаусы бәһлеүән. Уның йыры ла дөйөм мәнфәғәткә хеҙмәт итә. Зинданда ятҡан Алпамыша, йыр йырлап, ҡурай (йә думбыра) уйнап, хан ҡыҙҙарын үҙенә ҡарата һәм улар ярҙамында әсирлектән ҡотола.

Алпамыша батыр образының бер үҙенсәлеге шунда, ул Урал йәки Һәүбән кеүек мифик яуыз көстәргә ҡаршы көрәшмәй, тылсымлы ҡылыс, ынйы башлы таяҡ, тылсымлы уҡ менән дә эш итмәй. Иң тәүҙә үҙ көсөнә таяна. Шул яҡтан ул шаҡтай реаль герой булып тоҫмаллана.

Барсынһылыу ҙа, Алпамыша шикелле, ғәйәт көслө. Әммә ошо боронғо эпосҡа хас батырлыҡ һыҙаттары был юлы эҫәрҙең аҙағына тиклем үҫтерелмәй: Барсынһылыу Алпамыша менән көрәштә еңелгәндән һуң уның тыңлаусан, инсафлы ҡатынына әйләнә, батырлыҡ сифаттары артабан күрһәтелмәй, онотолоп ҡала.

Орхон-Енисей һәм башҡа төрки яҙма ҡомартҡыларынан билдәле булыуынса, мосолман диненә күскәнгә тиклем, төрки халыҡтар йәмғиәтендә ҡатын-ҡыҙҙарға ҙур ихтирам булған, ижтимағи тормошта улар мөһим роль уйнаған. Ҡатындар хатта ирҙәр менән бер ҡатарҙан һуғыштарҙа ҡатнашҡан[5]. Күп кенә фольклорсы ғалимдар Барсынһылыу образында ла күсмә тормош кисергән боронғо төрки ҡәбиләләр йәмғиәтендәге ҡатын-ҡыҙҙарға хас һыҙаттарҙы күрәләр. Барсынһылыу үҙен бик иркен тота, кейәүҙе лә үҙе һайлап ала, ху-

---

[4] Кирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. Өфө, 1961. 191-се бит.

[5] Башҡорт халыҡ ижады. Риүәйәттәр, легендалар. II том. Төҙөүсеһе, инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар яҙыусы Фәнүзә Нәҙершина. Өфө: Китап, 1997. 78-се бит.

жалыҡ һәм йәмғиәт эштәрендә әүҙем ҡатнаша, атаһы һәм ырыуҙаштары уның фекере менән иҫәпләшә. Барсынһылыу ата-әсәһенә, ҡайны-ҡәйнәләренә, ырыу-ҡәбилә йолаларына ихтирамлы. Һылыуҙарҙың һылыуы, батырҙарҙың батыры булыу өҫтөнә ул аҡыллы һәм әҙәпле ҡыҙ. Һәр хәлдә сәсәндәр батыр ҡыҙҙың олпатлы образын тыуҙырыу өсөн поэтик биҙәктәрҙе йәлләмәгәндәр. Шул яғы ла бар, Барсынһылыу образын кәүҙәләндереүҙә гиперболаға ҡарағанда реалистик буяуҙар өҫтөнлөк ала. Халыҡ был образға тормошсан реаль күркәмлек сифаттарын бирергә тырышҡан, унда халыҡтың ҡатын-ҡыҙға ҡарата талабын, идеалын күрергә мөмкин.

«Алпамыша менән Барсынһылыу»ҙың ҡайһы бер варианттары поэтикаһы һәм стиле менән әкиәт жанрына тартым. Башланышы ла традицион әкиәтсә («Борон-борон заманда күрше булып Әйләр хан менән Аҡкүбәк хан йәшәгән, ти»), геройҙың ҡылыҡһырланыуы һәм батырлыҡтары ла әкиәтсә. Эпосҡа ҡарауы иһә, нигеҙҙә, әҫәрҙең героик йөкмәткеһе, үҙәктә батыр егет менән ҡыҙҙың дөйөмләштерелгән образы тороуы, образ һәм ваҡиғаларҙың киң планда һүрәтләнеүе, ҡыҙ менән егеттең ҡайнар мөхәббәте тасуирланыуы, һөйөү тойғоларының, ғөмүмән, күңел кисерештәренең, шулай уҡ диалогтарҙың шиғыр аша еткерелеүе менән билдәләнә.

Башҡорт фольклорындағы «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» хикәйәте лә «Алпамыша» шикелле, күп кенә төрки халыҡтар ижадында урын алған ҡомартҡы. Ул айырыуса ҡаҙаҡ һәм ҡарағалпаҡ халыҡтарында киң таралған. Әммә был әҫәр ҙә, уртаҡ исемле, яҡын сюжетлы, берҙәйерәк йөкмәткеле булыуға ҡарамаҫтан, һәр халыҡ фольклорында ҡабатланмаҫ милли үҙенсәлекле ижад.

«Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» әҫәренең башҡорттар араһынан яҙып алынған егермеләп варианты бар. Шуларҙың күпселеге Ырымбур, Силәбе, Ҡурған өлкәләрендәге башҡорттарҙан яҙып алынған.

Күпселек варианттарҙа әҫәр ике йәштең фажиғәле үлеме менән тамамлана, тик Т. Беляев версияһында ғына ул Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыуҙың ҡауышыуы, ике ҙур ҡәбилә һәм уның башлыҡтарының дуҫлашыуы менән тамамлана. Варианттарҙың барыһында ла нигеҙе, төп сюжеты бер булыуға ҡарамаҫтан, әҫәрҙең тамамланышы, ҡайһы бер мотивтары, эпизодтары буйынса улар ике версияға бүленә. Уңайлылыҡ өсөн Т. Беляев тарафынан русса баҫылған һәм 1966 йылда Башҡортостандың Архангель районы Бәйес ауылында Зәкиә Ҡотлоәхмәтованан яҙып алынған варианттар «Тимофей Беляев версияһы» тип, ҡалған варианттар «Ғ. Сәләм версияһы» тип аталды. Был ике версия бер-береһенән йөкмәткеһе, поэтикаһы менән дә ныҡ ҡына айырыла. Мәҫәлән, Т. Беляев версияһы варианттары героик йөкмәткеле булыуы, шулай уҡ Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыуҙың ҡауышыуы, ҡәбиләләрҙең берләшеү идеяһының тантана итеүе менән тамамланһа, Ғ. Сәләм версияһына ҡараған варианттарҙа, Урта Азия халыҡтарының романтик дастандарындағы һымағыраҡ, саф мөхәббәт хаҡына йәштәрҙең үҙ-үҙҙәрен ҡорбан итеүҙәре һүрәтләнә. Һуңғыларында батырлыҡ мотивтары, һуғыш картиналары сағыштырмаса аҙ урын алған. Әкиәт элементтары ла

күп. Шул сәбәпле был версияның варианттары быға тиклем әкиәт йыйынтыктарында ла урын алып килде. Уны яҙыусылар араһында әкиәт һөйләнем» тип башкарыусылар ҙа йыш осрай.

Әйтергә кәрәк, башҡорт эпосында әкиәт жанры йоғонтоһо бик көслө. Бындай хәл «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» әҫәренә айырыуса хас. Был бигерәк тә геройҙың сәйәхәттә йөрөүен, уның тылсымлы әйберҙәр ярҙамында мифик ҡаршылыктарҙы үтеүен һүрәтләгән картиналарҙа асыҡ күренә. Мәҫәлән, Ҡуҙыйкүрпәс өс тапҡыр Маянһылыуҙың көлгә күмеп бешереп киткән икмәген таба һәм уға ҡарап юл алыҫлығын билдәләй, атаһынан ҡалған тылсымлы айбалтаһы, көҙгө, тараҡ ярҙамында юлда осраған ҡыйынлыҡтарҙы үтеп сыға. Геройҙар үлгәндән һуң, ҡәберҙәренән ике алмағас, уларҙың дошманы Ҡарағол ҡәберенән дегәнәк үҫеп сығыу күренеше шулай уҡ әкиәт традицияһынан килә.

Т. Беляев версияһында ла геройҙың ғаилә, мөхәббәт өсөн көрәшен хикәйәләү төп сюжет нигеҙен тәшкил итә. Әммә әҫәрҙәрҙең иң мөһим яғы шунда: мөхәббәт темаһы ырыу-ҡәбиләләрҙең берләшеү идеяһы менән бергә үрелеп китә.

Патриархаль-ырыу ҡоролошоноң тарҡалған, феодаль мөнәсәбәттәр нығына барған дәүерҙәрҙә ырыу-ҡәбилә берекмәләренең барлыҡҡа килеүе һәм көсәйеүе характерлы хәл. Ул берекмәләр йыш ҡына дөйөм хәүеф тыуған, сит ил баҫҡынсылары ябырылған осорҙа ойошор йәки ҙур ырыуҙың бәләкәй ырыуҙы үҙенә көслөк менән ҡушыуы рәүешендә барлыҡҡа килер булған. Көсһөҙөрәк ырыуҙарҙың үҙ хәүефһеҙлектәрен тәьмин итер өсөн көслөрәк, эрерәк ырыуҙарға һыйыныуҙары ла йыш осраған.

Ҡайһы бер осорҙарҙа бындай берекмә йәки союздар ике ырыу-ҡәбилә башлыҡтарының ҡоҙалашыуы, туғанлашыуы аша ла нығытылған. Халыҡтың поэтик ижадында, айырым алғанда эпоста, ырыу һәм ҡәбиләләрҙең берләшеүе нәҡ ошо юл менән, йәғни ҡоҙалашыу, туғанлашыу юлы менән, хәл ителә.

«Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»ҙың Беляев версияһында ырыуҙарҙы дуҫлаштырыу, берләштереү идеяһы баштан аҙаҡкаса ярылып ята. Эпостың экспозиция өлөшөндә үк Иртыш йылғаһы башында уҡ йәшәгән башҡорт ырыуы башлығы Ҡарабайға башҡа башҡорттарҙың ҡушылып, уларҙың бергәләп көн итеүҙәре әйтелә. Ҡарабайҙың абруйлы, ырыуының ҡеүәтле булыуы башҡорт ырыуҙарында ғына түгел, хатта ҡаҙаҡ ырыуҙарында ла туғанлашыу тойғоһо уята. Бигерәк тә ҡаҙаҡ батырҙарынан Сарыбай тигәне Ҡарабай менән күрешергә һәм дуҫлашырға теләй. Уның теләге ҡабул була. Балалары тыуғас уҡ, ҡоҙалашып, ике ырыу союзын нығыталар. Ошо ваҡиғанан һуң эпос һәм уны ижад иткән халыҡ ҡәбилә союзын нығытыу, уны тарҡатыуға юл ҡуймау кәрәклеген хикәйә итә.

Эпос, күрәһең, берҙәмлекте боҙорға ярамай тигән фекерҙе һеңдерергә тырышып, дуҫлыҡ ҡәҙерен һаҡламаған эскерле Сарыбайҙы йыш ҡына ғибрәт алырҙай ҡурҡыныслы хәлгә ҡуйып һүрәтләй. Сарыбай һунар ваҡытында, Ҡарабай батырҙан һәм башҡа һунарсыларҙан айырылып сығып китеп, йырткыс юлбарыҫҡа юлыға.

Ҡоралдары һынып, ғүмере ҡыл өҫтөндә ҡалғанда, уға ярҙамға Ҡарабай батыр килеп өлгөрә һәм юлбарыҫты үлтерә. Икенсе юлы Ҡарабай Сарыбайҙы баҫҡынсылар һөжүменән алып ҡала.

Ҡарабай үлгәндән һуң, ҡәбилә союзы емерелә. Эскерле Сарыбай ҡыҙы Маянһылыуҙы Ҡуҙыйкүрпәскә бирәм тигән вәғәҙәһен боҙа һәм ырыуы менән алыҫҡа күсеп китә. Сарыбай унда ла һәр төрлө ҡурҡыныска, дошман һөжүмдәренә дусар була. Ҡуҙыйкүрпәс килеп төрлө хәүефтәрҙән аралағас ҡына, Сарыбай үҙенең яңылышҡанын, ырыуҙар берҙәмлеге кәрәклеген аңлай. Аҙаҡ Маянһылыуҙы Ҡуҙыйкүрпәскә бирергә риза була.

Т. Беляев версияһында ырыу берекмәһенең артабанғы яҙмышы хаҡында бик мөһим эпизод бар. Изгелекле Мәскәй Ҡуҙыйкүрпәсте тылсымлы көҙгө янына килтерә. Ҡуҙыйкүрпәс көҙгөлә баштан-аяҡ ҡоралланған мөһабәт батыр егетте күрә. Мәскәй уға: «Был һинең буласаҡ ҡатының Маянһылыуҙан тыуасаҡ Барлыбай батыр! Ул, атаһы менән олатаһына оҡшап, шундай олпатлы ир буласаҡ. Уның артында баҫып торған тимер күлдәкле ете улына ҡара, улар, Бөрйән, Үҫәргән, Тамъян, Ҡыпсаҡ, Бошмаҫ, Ҡараҡыпсаҡ, Түңгәүер тип аталырҙар. Уларҙан башҡорттарҙың ете ырыуы барлыҡҡа килер; ул ырыуҙарҙың һәр ҡайһыһы ана шул башлыҡтары исеме менән йөрөтөлөр», — тип аңлата. Эпос, ете башҡорт ырыуын Ҡуҙыйкүрпәс улы Барлыбай тоҡомдары тип күрһәтеп, ырыуҙар татыулығы һәм берҙәмлеге кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә ала, ул берҙәмлектең тарҡалыуына юл ҡуймаҫҡа тигән фекерҙе киҫәтеп ҡуя.

Т. Беляев версияһында ил батыры хаҡында бик мөһим фекерҙәр әйтелә, ил ағаһына ҡарата халыҡтың ҡарашы бирелә. Батырҙың ҡылған эше — халыҡҡа изгелек итеү, еңеллек килтереү, уға тоғро хеҙмәт итеү, ти эпос. Үҙ мәнфәғәтен генә ҡүҙәтеп йөрөгән, талау юлы менән мал йыйған батырҙарҙы эпос ҡырҡа ғәйепләй. Ят халыҡтарға яу сабыр батырҙың үҙ халҡына ла, буйһондоролған халыҡтарға ла аһ-зар, ҡайғы, бөлгөнлөк алып килеүе әйтелә, илбаҫарлығы менән яманаты таралған батырҙарға бары ләғнәт белдерелә. Эпоста урта быуаттың яуыз илбаҫар хандары хаҡында, мәҫәлән, былай тиелә:

Борон булған хан-батырҙар:
Искәндәрҙәр, Батыйҙар,
Аҡһаҡ Тимер, башҡалар
Һанһыҙ яуҙар туплаған,
Яттар еренә уҡталған,
Ҡаршы торған халыҡтарҙы
Аҫҡан, киҫкән, туҡмаған;
Хәләл ҡандар ҡойолған,
Тупраҡ ҡанға туйынған.
Яуҙан ҡотайып ҡайтҡандар
Үҙ дуҫтарының да ситтә
Баштарын юғалтҡандар;
Етем ҡалған өйҙәргә
Илаш, ҡарғыш, зар ҡайтҡан,

Хан-батырҙар донъяға
Яманатын тараткан.

Яманаты сыҡкан яуыз хандарға эпос, башҡорт халҡының именлеген һаҡлаусы, сит халыктарҙы яулап, талап йөрөмәгән изгелекле батырҙарын ҡаршы ҡуйып, былай ти:

Беҙҙең ирҙәр ҡаһарман,
Сит ерҙәргә бармаған,
Ҡанға ҡанһырамаған,
Унда уттар һалмаған,
Йыйыр өсөн харам мал,
Ҡырған улар дошманды,
Донъяла иң уҫалды;
Ҡурҡыныстыы еңгәндәр,
Илгә именлек биргәндәр;
Беҙҙең батыр сапсандар
Илгә зарар итмәгән,
Бары һунар сапҡандар.

«Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосы, нигеҙҙә, башҡорттарҙың татар-монгол яуына тиклемге тормошон тасуирлай. Унда һуңғыраҡ дәүерҙәр киләсәккә күҙ ташлау рәүешендә генә килеп ингеләй. Мәскәй әбейҙең «киләсәкте» күрһәтер көҙгөһө тап шундай. Көҙгөлә, мәҫәлән, XVIII быуаттағы башҡорт восстаниелары һәм уларҙың етәкселәре күрһәтелә, уларға Мәскәй ауыҙынан кире баһа бирелә. Был « Ҡуҙыйкүрпәс» әҫәрен яҙып алған ҡурайсы йәки уны урыҫ теленә тәржемә иткән Беляев тарафынан өҫтәлгән эпизод булырға оҡшай.

Әҫәрҙә Мәскәй — торғаны бер монархист ҡарсыҡ. Ул рус батшаһын изге йән итеп күрә һәм уның колонизаторлыҡ эшмәкәрлеген маҡтай, уға ҡаршы көрәште шелтәләй. Мәскәй исеменән Башҡортостанда булып үткән тарихи ваҡиғаларҙы монархистар позицияһынан сығып аңлатыу Т. Беляевтың әҫәр тексына ниндәйҙер дәрәжәлә ҡул тейҙереү һөҙөмтәһе булырға тейеш[6]. Мәскәй образының бүтән варианттарҙа бөтөнләй осрамауы уның шулай уҡ ят, өҫтәмә элемент икәнен раҫлай.

Әкиәттәрҙә Мәскәй, ғәҙәттә, өйҙә яңғыҙ ҡалған ҡыҙ балаларҙың ҡанын һурып китер, шулай уҡ өйөнә килеп кергән бер юлаусыны ашап торор әбей рәүешендә һүрәтләнеүсән. Йә ул юлсыны юлынан яҙлыҡтырырға, бәләгә төшөрөргә теләүсе алама зат. «Ҡуҙыйкүрпәс» әҫәрендә иһә Мәскәй үҙенең традицион образынан башҡасараҡ. Эпостағы Мәскәй ҡаршылыҡлы, ҡатмарлы образ. Ул, бер яҡтан, эпик геройға ярҙам итеү теләге менән янған ыңғай тип төҫлө. Ул, мәҫәлән, Ҡуҙыйкүрпәскә Маянһылыуҙың ҡайһы яҡта икәнлеген,

---

[6] Ҡарағыҙ: Әхнәф Харисов. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы. XVIII—XIX быуаттар. Өфө, 1965. 96—97-се биттәр.

уны нисек табырға, юлда дейеү-ендәрҙән нисек һаҡланырға кәрәклеген өйрәтеп ебәрә. Икенсе яҡтан, Мәскәй — башҡорт халҡының батша самодержавиеһына ҡаршы көрәшеп ғәйепләүсе, тырышып-тырышып монархизмды яҡлаусы, реакцион идеологияны алға һөрөүсе кире образ.

Әҫәрҙең төп геройҙары — Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу. Эпоста хәл ваҡиғалар ошо геройҙарҙың эшмәкәрлегенә, эш-хәрәкәтенә бәйләп һүрәтләнә. Күпселек варианттарҙа уларҙың икеһе лә бер үк көндә тыуа. Ҡайһы бер варианттарҙа өлкән йәштәге балаһыҙ ике дуҫ һунарҙан ҡайтып килешләй бер изге ҡарсыҡты осрата һәм бала юҡлыҡтан зарлана. Ҡарсыҡ уларға ярҙам итмәксе була: бер алманы уртаға яра ла ҡатындарына ашатырға ҡуша (Һамар өлкәһе Алексеев районы Моратша ауылы Ҡорманғәле Фазлиәхмәтов яҙҙырған вариант). Ошо алманы ашаған ике ҡатын ауырға ҡала, һәм береһе — Ҡуҙыйкүрпәсте, икенсеһе Маянһылыуҙы таба.

Төп геройҙарҙың ана шулай мөғжизәле шарттарҙа тыуыу күренеше бигерәк тә әкиәт жанры өсөн хас, һәм ул сығышы менән матриархат дәүерен сағылдырған мифологияға барып тоташа. (Әкиәттәрҙә ҡатындарҙың, ғәҙәттә, тылсымлы алма, еләк-емеш йәки йәнлек йөрәге ашағанлыҡтан ауырға ҡалып, изге бала табыу күренеше фәндә партеногенез тип йөрөтөлә.) Был поэтик деталь әҫәрҙә геройҙарҙың артабанғы эшмәкәрлеге ниндәй йүнәлештә үҫәсәгенә, уларҙың изгелекле, саф буласаҡтарына ишара яһай. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»ҙа төрки-монгол эпосына хас традицион мотивтар, эпизодтар ныҡ һаҡланған. Мәҫәлән, Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыуҙың, аталары өйҙә юҡ саҡта, донъяға килеүҙәре, балалары тыумаҫ борон уҡ, ҡоҙа булышырға һүҙ беркетеп ҡуйыу, ҡыҙ атаһының үҙ вәғәҙәһен тотмауы һәм күсеп китеүе, Ҡуҙыйкүрпәстең кесе йәштән бик ғәйрәтле булыуы, үҙ тиҫтерҙәрен йәберләүе, әйттерелгән ҡыҙы барлығын әсәһенең усына эҫе ҡурмас баҫып серҙе асыуы кеүек хәлдәр ана шундай уртаҡ яҡтарҙы асыҡлай.

Ҡуҙыйкүрпәс — башҡорт эпосындағы иң һәйбәт ынғай герой образдарының береһе. Халыҡ Ҡуҙыйкүрпәсте үҙ заманының идеаль геройы дәрәжәһенә күтәргән, һәм эпик батыр образында ниндәй яҡшы сифаттарҙы күрергә теләһә, уны шундай сифаттар менән биҙәгән. Уны ғәйәт көслө лә, аҡыллы ла, таҫыллы ла итеп күрһәткән. Ҡуҙыйкүрпәстең батырлыҡ сифаттары бигерәк тә Т. Беляев версияһында сағыла. Ул арыҫландарҙы үлтерә, дейеү-пәрейҙәрҙе ҡыйрата, ҙур ҡыйынлыҡтар үтеп, Маянһылыуҙы эҙләп таба. Сарыбайҙы һәм уның ырыуын илбаҫарҙарҙан һаҡлап алып ҡала, ике ҡәбиләне дуҫлаштырыуҙа төп ролде уйнай.

Ә инде был әҫәрҙең Ғ. Сәләм версияһына ҡараған варианттарында Ҡуҙыйкүрпәстең батырлыҡ сифаттарын һүрәтләү сағыштырмаса әҙ урын алған. Баш бирмәҫ толпарҙы буйһондорған, ҙур ауырлыҡтарҙы еңеп сыҡҡан, тылсымлы кәртәләрҙе үтә алған Ҡуҙыйкүрпәс, Маянһылыу атаһы йәйләүенә килгәс, меҫкенләнеберәк

кала, үҙен-үҙе яҡлай алмай һәм дошман ҡулынан фажиғәле һәләк була. Был хәл геройҙың героик характерын һүрелтә төшә.

Әҫәрҙең икенсе төп геройы — Маянһылыу. Ул башҡа эпостарҙағы Айһылыу («Урал»), Нәркәс («Акбуҙат»), Барсынһылыу («Алпамыша») кеүек ҡыйыу ҡыҙ. Маянһылыу образы барыһынан да элек матурлығы, саф мөхәббәтенә тоғролоғо, намыҫлылығы менән хәтерҙә ҡала. Ул һуңғы һулышына тиклем Ҡуҙыйкүрпәскә тоғро ҡала һәм үҙе һөймәгән кешегә кейәүгә сығыуҙан үлеүҙе артыҡ һанай.

Маянһылыу образында боронғо эпосҡа хас эпик батыр ҡыҙ сифаттары менән һуңғы дәүер фольклор әҫәрҙәренә хас реаль ҡатынҡыҙ сифаттары органик ҡушылған. Мөхәббәт, тоғролоҡ хаҡында ул йәшәп килгән иҫке ырыу йолалары менән дә иҫәпләшмәй, ата-әсәһе тыйыуға ҡарамаҫтан, Ҡуҙыйкүрпәсте үҙ тирмәһендә йәшереп тота, уны дошмандарҙан һаҡлай. Ғ. Сәләм версияһы варианттарының финалында ҡыҙ туранан-тура үс алыусыға әйләнә: Ҡуҙыйкүрпәсте һәләк иткән ҡутыр башлы Ҡолтор таҙҙы сәнсеп үлтерә.

Маянһылыуҙың һуңғы көндәрен һүрәтләү өлөшөндә ислам дине йоғонтоһо, шулай уҡ исламға тиклемге боронғо ышаныуҙар сағылып ҡала. Мәҫәлән, Маянһылыу Ҡуҙыйкүрпәстең киҫелгән башын кире урынына тегеп ҡуя һәм алланан өс көнгә, өс төнгә (ҡайһы бер варианттарҙа ете көнгә, ете төнгә) йән индереүҙе үтенә. Алла ҡыҙҙың теләген ҡабул итә. Ошо бирелгән ваҡыт үткәнсе, улар икәү һөйләшеп, күңел асып ғүмер итәләр. Ҡуҙыйкүрпәс тамам үлгәндән һуң, Маянһылыу үҙ-үҙен сәнсә. Ғ. Сәләм версияһы варианттары финалында тағы бер мөһим деталь бар. Ике ғашиҡ үлгәндән һуң да, яуыз йәндәр уларҙы айырырға тырыша. Ҡуҙыйкүрпәсте йылғаның бер яғына, Маянһылыуҙы икенсе яғына күмәләр. Ҡәберҙәренән ике аҡ тирәк үҫеп сыға һәм баштарын бер-береһенә эйеп ҡауышалар. (Ҡайһы бер варианттарҙа ике ғашиҡ ҡәберенән ике алма ағасы, ә ҡутыр башлы Ҡолтор таҙ ҡәберенән дегәнәк үҫеп сыҡҡанлығы әйтелә.) Был деталдә, бер яҡтан, тормош «теге донъяла» ла дауам итә тигән ҡарашты, икенсе яҡтан, ғәҙеллеккә, мөхәббәткә үлем юҡ, һәм уны бер ниндәй яуыз көс тә еңә алмай тигән идеяны тойорға мөмкин.

«Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосында ғәҙеллекте, ырыуара татыулыкты яҡлаған ҡурҡыу белмәҫ Ҡарабай, батырҙы төрлө хәүефтән ҡурғып йөрөр изгелекле әүлиә, үҙ һүҙендә тормаусы, ырыуҙар берҙәмлеге менән иҫәпләшмәй, аҙаҡ уның аяныслы һөҙөмтәһен татыған Сарыбай, ил әсәһен кәүҙәләндергән Алтыша, күрәҙәлек ҡылыусы Мәскәй, батыр егеттең мәкерле дошманы ҡутыр башлы Ҡолтор таҙ кеүек образдар ҙа бар. Улар халыҡтың тормошҡа, теге йәки был ваҡиғаға ҡарашын, ижтимағи-эстетик фекерҙәрен асырға ярҙам итә. Был образдарҙа изгелек һәм яуызлыҡ көрәше кәүҙәләнә.

Әҫәрҙә батырҙың тоғро юлдашы булған толпар ат образы бар. Т. Беляев версияһында ул Йондоҙ юлаусы тип аталған. Ә башҡа варианттарҙа төрлөсә аталып йөрөй. Күпселек яҙмаларҙа Ҡуҙыйкүрпәс ҡыҙ артынан сәфәргә сығыр алдынан иң тәүҙә үҙенә ат һай-

лай. Ат һайлауҙа төрки-монгол халыҡтары эпосы өсөн характерлы традицион ысулдар ҡулланыла: егет йылҡы көтөүенә килеп, йүгәнен шылтырата, ҡороғон ҡолтората, ҡайһы ат тауышҡа әйләнеп ҡараһа, шуны тотоп менә. Ҡайһы бер вариантта Ҡуҙыйкүрпәс йылҡыны һыртына ауыр ҡулын һалып һынай: ниндәй ат күтәрһә, шуны менеп юлға сыға. Ғәҙәттә, егеткә баҡта ғына тай ҡарай. Егет, тәүҙә икеләнһә лә, шул тайҙы һайлай. Атланыу менән, баҡта тай ел еткермәҫ толпарға әйләнә. Әлбиттә, ҙур ҡыйынлыҡтарҙы үтергә тейешле ат ҡәҙимге йылҡы итеп һүрәтләнмәй. Ул кәрәк ваҡытта телгә килә, батырға файҙалы кәңәштәр бирә, уны һәр төрлө ҡурҡыныстан һаҡлай, тоғро хеҙмәт итә. 1930 йылдарҙа «Баян менән Ҡуҙыйкүрпәс» исеме менән яҙып алынған бер варианттың финалында толпар аттың эйәһенә булған мөнәсәбәте йән тетрәткес лирик-драматик картинала һүрәтләнә. Ат Баянһылыуға Ҡуҙыйкүрпәстең үлтерелеүен хәбәр итә. Баянһылыу үҙен-үҙе үлтергәндән һуң, ат уны соҡор ҡаҙып күмә. Етем ҡалған улын Ҡуҙыйкүрпәстең әсәһенә алып ҡайтып тапшыра.

«Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»ҙа «Алпамыша» менән ҡайһы бер уртаҡ яҡтар бар. Ике әҫәрҙең дә сюжеты батырҙарҙың ҡатын эҙләп сығып китеүенән башлана. Шулай уҡ айырым ҡәбиләләрҙе татыулаштырыу, берләштереү идеяһы ике әҫәрҙә ауаздаш яңғырай. Яҡынлыҡ ҡайһы бер поэтик деталдәрҙә лә асыҡ күренә. Мәҫәлән, әсирлеккә төшкән Алпамыша ҡыр ҡаҙҙарына тыуған иленә, ҡатыны Барсынһылыуға хат аша хәлен аңғартмаҡ булып мөрәжәғәт итә. Уның үтенесен тубынан артта ҡалған ҡыр ҡаҙы ғына үтәй. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»ҙа батырҙың бындай үтенесен суҡ турғай үтәй: ике арала хат йөрөтә, Ҡуҙыйкүрпәскә йәрәхәтен уңалтыр өсөн яра ташы, аслыҡтан интекмәһен өсөн бауырһаҡ ташый. Ат һайлау, уны һынау, бәйгеләрҙә ярышыу кеүек күренештәрҙә лә уртаҡлыҡ ҙур.

Әҫәрҙә башҡорт халҡының боронғо көнкүреше, йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре, ырыу-ара мөнәсәбәттәре, ғаилә һәм ижтимағи тормошо хаҡында бик мөһим тарихи-этнографик мәғлүмәттәр бар. Унда башҡорттарҙың күсмә тормош менән йәшәүҙәре, шулай уҡ һунарсылыҡ, малсылыҡ менән шөғөлләнеүҙәре тулы ғына сағыла. Халыҡтың һәйбәт йолалары, күркәм сифаттары маҡтала. Шул уҡ ваҡытта халыҡтың социаль тормошонда синфи бүленеш тә шаҡтай асыҡ күренә. Эпос сюжеты нигеҙенә лә социаль конфликт һалынған (Сарыбай ҡыҙын, атаһы үлгәндән һуң, ярлыланып ҡалған Ҡуҙыйкүрпәскә кейәүгә биргеһе килмәй һәм ырыуы менән күсеп китә). Әҫәр буйынса ҡәбиләләр тормошонда аҡһаҡалдар институтының ҙур ғына роль уйнаған булыуы һиҙелә.

Башҡорт ырыуҙарының бер халыҡ булып ойоша барыуының артабанғы бер этабы «Зөһрә менән Алдар» хикәйәтендә үҙенең бынамын тигән сағылышын тапҡан. Был хикәйәттең табылыу тарихы, «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»ҙың 1812 йылғы Т. Беляев варианты менән идея-тематик оҡшашлығы, композиция, тел-стиль үҙенсәлектәренең берҙәмлеге хаҡында әлегәсә башҡорт фольклористикаһында байтаҡ һүҙ булды. Хәҙер инде ул һәр йәһәттән «Ҡуҙый-

күрпәс менән Маянһылыу» хикәйәтенең Т. Беляев вариантының дауамы буларак кабул ителде.

«Зөһрә менән Алдар» хикәйәтендә, күп осрактарҙа уларҙың конкрет исемдәре әйтелмәһә лә, ырыу-кәбилә төшөнсәһе бик киң кулланыла. Ырыу-кәбилә структураһына бәйле йыш кулланылған шундай төшөнсәләрҙең береһе — ырыу — абстракт төшөнсә түгел. Шундай ырыу союзы XIV—XVI быуаттарҙа хәҙерге Башкортостандың көньяк-көнсығышындағы үҫәргән, бөрйән, кыпсак (кара-кыпсак, сәңкем-кыпсак), түңгәүер, тамъян ырыуҙарын берләштергән булған. Күренеүенсә, хикәйәттә башкорт ырыуҙарының кеүәтле ырыу союзына берләшеүенең бер һынланышын күрергә мөмкин.

«Зөһрә менән Алдар» хикәйәте беренсе биттән үк ете ырыу халкының тормош-көнкүреше, ғөрөф-ғәҙәт, йолалары хакында хикәйәләүҙән башланып китә. Хикәйәсе әҫәргә биргән бағышлауҙа ла, артабан да унда хәл-вакиғаларҙың ете ырыу тормошона бәйле булыуын һәр сак һыҙык өҫтөнә алып килә. Хикәйәттең төп геройҙарының береһе — ете ырыу халкының данлы батыры, каһарманлыкта бөтә Йайык, Һакмар буйында үҙенә тиңдәше булмаған Алдар батыр.

Ырыуҙар консолидацияһы берҙәмлегенән карағанда, «Зөһрә менән Алдар» хикәйәтендә өс моментка туктальрға мөмкин.

Билдәле булыуынса, тарихи-этнографик әҙәбиәттә, айырыуса XIX быуат әҙәбиәтендә, башкорттар ике ҙур төркөмгә — ялан һәм урман башкорттарына бүлеп йөрөтөлгән. «Зөһрә менән Алдар» хикәйәтендә лә беҙ башкорт халкының ошо ике төркөмөн күрәбеҙ. Әҫәр ете ырыу халкының, йәки хикәйәттә исемләнгәнсә, ялан халкының, тормош-көнкүреше хакында ғына хикәйә итеү менән сикләнмәй. Артабан иһә вакиғалар хәҙерге Башкортостандың көнбайыш һәм төньяк-көнбайышына, урман башкорттары йәшәгән төбәктәргә күсерелә. Хикәйәттә төп вакиғалар ҙа батыр кыҙ Зөһрәнең атаһы йәйләүендә, уның ырыуҙаштары биләмәһендә бара, ә был биләмәләр ифрат ҙур территорияны үҙ эсенә ала.

Кыҙғаныска каршы, хикәйәттә ғәйнә ырыуынан башка урман башкорттарының ырыу исеме бирелмәгән. Кыҙрас йәйләүенә килгән кунактар хакында Зөһрәнең Алдарға һөйләүен иҫкә алғанда, бындай ырыуҙар байтак йыйыла. Ул, мәҫәлән, Кармасан, Бөрө, Дим, Өфө, Ашкаҙар, Сәрмәсән буйҙарынан килгән кунактар хакында айырым-айырым һөйләй, улар йәшәгән төйәктең тәбиғәте, халкының кейем-һалымы, һөнәр-кәсебе, батырҙары менән таныштыра.

Шулай итеп, башкорт ырыуҙарының күбеһенең, исемләп әйтелмәһә лә, «Зөһрә менән Алдар» хикәйәтендә һүҙ бөрйән, үҫәргән, кыпсак, түңгәүер, тамъян, юрматы, меңле, ғәйнә, йәнәй, таҙлар кеүек тиҫтәләгән эреле-вакль ырыуҙарҙың тормош-көнкүреше, ғөрөф-ғәҙәте, йолалары, традициялары тураһында бара. Ундағы хәл-вакиғалар ҙа ифрат ҙур географик ерлектә һүрәтләнә. Хикәйәттә Йайык һәм Һакмар, Ағиҙел һәм Кариҙел, Ашкаҙар һәм Дим, Кармасан һәм Сәрмәсән, Бөрө һәм Танып, хатта Иртыш һәм Уйыл буйҙарының данлы батырҙарын күрергә мөмкин.

Кыҫкаһы, ифрат киң диапозонлы һәм күп планлы был хикәйәттә башкорт ырыуҙарының бер халык булып ойошоу, берләшеү осоро-

на бәйле моменттар сағылып ҡалған. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»ҙағы ике ырыу халҡының берләшеүгә булған ынтылышы мотивтары «Зөһрә менән Алдар» хикәйәтендә, һуңғыраҡҡы осорҙар өсөн хас тарихи шарттарҙа яңыса, заманса киңерәк планда дауам ителә. Ошо күҙлектән ҡарағанда, ялан халҡы батыры Алдар менән урман халҡы батыры Зөһрәнең никахы күренешендә образлы ҙур мәғәнә ята: был инде ике ырыу халҡының ғына берләшеүе түгел, ә ике ҙур ырыуҙар союзын тәшкил иткән этник төркөмдәрҙең бергә ҡушылыуы булып ҡабул ителә. Аныҡлап әйткәндә, хикәйәттә башҡорт ырыуҙарының бер халыҡ булып берләшә барыуына бәйле ваҡиғаларҙың образлы сағылышын күрергә мөмкин.

Хатта улай ғына ла түгел, «Зөһрә менән Алдар» хикәйәте күп һанлы башҡорт ырыуҙарының бер халыҡ булып ойоша барыу процесын ғына сағылдырмай, ә уларҙың дуҫлығына, татыу тормошона дан йырлай. Унда ырыу-ара ыҙғыш-талаш, низағ-бәхәстәр, һуғышалыштар инде күптән булып үткән тарих итеп кенә һөйләнә. Хәҙер инде бер ырыуҙың икенсеһенә барымта, ҡарымта менән килеүе генә түгел, хатта тормош тыныслығын, һый-мәжлес хозурлығын һүҙ менән боҙоу, боронғо бола замандарҙы иҫкә алыу, ғауға-бола күтәреү үҙе генә лә халыҡ, ил алдында енәйәт һәм гонаһ һанала. Хикәйәттә илдәге һәр бер бәхәсте батырҙарҙың ҡорал көсө менән түгел, ә ырыуҙарҙың зирәк аҡһаҡалдарының үҙ-ара килешеп йылы һүҙ, яҡты йөҙ менән хәл иткән заманалар һүрәтләнә. Шул уҡ ваҡытта унда ырыуҙар араһында ҡасандыр булып алған күңелһеҙ моменттарҙың ҙур булмаған саҡтыларын да күрергә мөмкин. Әммә был осраҡтарҙа ла халыҡ аҡылы өҫтөн сыға, бына-бына башланып китер ғауға, ыҙғыш ырыу аҡһаҡалдары ярҙамында тыныс ҡына хәл ителә килә. Хикәйәттә башҡорт ырыуҙары араһында дуҫлыҡ һәм туғанлыҡ идеялары еңеп сыға, сөнки хәҙер инде ҡанға ҡан алышып, барымтаға барымта менән яуап бирерлек замандар тарих булып ҡалған. Эпос геройҙары барыһынан элек халыҡ мәнфәғәтенән сығып эш итәләр, ҡунаҡсыллыҡ күрһәтәләр, хәйлә һәм мәкерлеккә ҡаршы көрәшәләр. Хикәйәт баштан-аяҡ берҙәмлек һәм туғанлыҡ, дуҫлыҡ һәм гуманизм идеялары менән һуғарылған.

Аҙаҡ килеп, ырыуҙар консолидацияһы күҙлегенән ҡарағанда, тағы бер моментҡа иғтибар итмәү мөмкин түгел: шуныһы мөһим, «Зөһрә менән Алдар» хикәйәтендә берҙәмлек һәм туғанлыҡ идеяһы бер башҡорт халҡының тормош-көнкүрешен һүрәтләү менән генә сикләнмәй. Алдар туйҙан һуң ырыуҙаштары менән үҙ йәйләүенә ҡайтып барғанда дейеү бәрейе тотҡонлоғонан бик күп әсирҙәрҙе азат итә. Улар араһында башҡорт батырҙары менән бергә бик күп башҡа халыҡ кешеләре лә (төркмән, нуғай, монгол) була. Шулай итеп, ете ырыу батыры Алдар үҙ халҡының ғына түгел, ә башҡа халыҡ батырҙарын да әсирлектән ҡотҡарыусы кеше булараҡ сығыш яһай. Улай ғына ла түгел, хикәйәт артабан төрлө халыҡ вәкилдәре араһында никах союзы төҙөү хаҡында һөйләй. Юрматы батыры Ҡарабай, мәҫәлән, төркмән ҡыҙы Таңһылыуға, Зөһрәнең ырыуҙашы, урман батыры Байегет нуғай ҡыҙы Гөлбостанға, Иртыш буйҙарында йәшәгән Үзбәк хандың улы Аҡкүбәк башҡорт ҡыҙы Гөл-

бикәгә өйләнә. Бына шул рәүешле ырыуҙар берҙәмлеге, уларҙы эреләндереү мотивтары «Зөһрә менән Алдар» хикәйәтендә башҡорт ырыуҙарының бер халыҡ булып берләшеүен һүрәтләү һәм башҡорт халҡының башҡа халыҡтар менән туғанлығын ололау идеяһы юғарылығына хәтле үҫтерелә.

«Зөһрә менән Алдар» хикәйәтенең мөһим бер композицион үҙенсәлеге шунда, ул «хикәйә эсендә хикәйәләүгә» ҡоролған. Әҫәрҙә тәүҙә көнбайыш башҡорттарының ҡәбилә башлығы Аллабирҙе хаҡында хикәйә ителә, унан һуң хикәйә Зөһрәнең үҙ тормошон Аллабирҙегә бәйнә-бәйнә һөйләүенә, монологына әйләнә. Әҫәрҙә реаль тормош ваҡиғалары әкиәткә хас фантастика менән аралашып китә. Ғөмүмән, унда әкиәт элементтары ҙур ғына урын ала. Был бигерәк тә ен-пәрейҙәр образын һүрәтләгәндә, геройҙарҙың тылсымлы ҡорал (ҡамсы, бетеү һ. б.) ярҙамында дошмандар менән көрәш эпизодтарын тасуир иткәндә асыҡ күренә.

«Ҡуҙыйкүрпәс»тәге кеүек үк, «Зөһрә менән Алдар»ҙа ла ислам дине йоғонтоһо һиҙелерлек урын алған. Эпос геройҙары ысын мосолмандар итеп күрһәтелә, ауырлыҡ килгәндә, Мөхәммәт пәйғәмбәргә таяналар. Хызыр Ильяс геройҙарҙы дейеү-пәрейҙәр хәүефенән һаҡлап йөрөй, ә инде күрәҙәсе Брахим, ислам ҡыҫымына түҙә алмайынса, үҙ позицияһын юғалта барыусы мәжүсилек идеологы итеп бирелә. Халыҡ ижады рухына ярашып етмәгән бындай элементтар күбеһенсә әҫәрҙе яҙып алыусы йәки тәржемәсе ҡулы менән индерелгән өҫтәмәләргә, эшкәртеүҙәргә оҡшай.

Башҡорт ырыу-ҡәбиләләренең берҙәмлеген һүрәтләү күҙлегенән ҡарағанда, «Бабсаҡ менән Күсәк» йәки «Күсәк бей» хикәйәте үҙенә бер урын алып тора. Уның төп айырмалы үҙенсәлеге шунда: башҡорт ырыуҙарының берҙәмлеккә, ҡеүәтле ҡәбиләләр союзы төҙөүгә ынтылышы бөрйән һәм ҡыпсаҡ ҡәбиләләре араһында булып үткән ҡанлы бәрелештәрҙе һүрәтләү аша бирелә.

Иң башта шуны әйтергә кәрәк: хикәйәттә һүрәтләнгән ваҡиғалар бөрйән һәм ҡыпсаҡ ҡәбиләләренең төп төркөмө әлегесә йәшәгән төбәктә — көньяҡ Уралдың Ағиҙел, Нөгөш, Ыҡ буйҙарында бара. Тарихи этнографик әҙәбиәттән билдәле булыуынса, был ике башҡорт ҡәбиләләренең яҙмышы элек-электән быуаттар буйы бер-береһенә бәйләнеп килә. Бөрйән (бурджан) ҡәбиләһе тарихҡа VI быуаттан башлап билдәле. «Урта Азияла һәм Арал буйында бөрйәндәр күп һанлы ҡәбиләләрҙең береһе булып ҡына түгел ә Азия һәм Европалағы күп кенә халыҡтарҙың этник яҡтан ойошоуында билдәле роль уйнаған эре ҡәбилә берләшмәһе булараҡ билдәле»[7]. Бөрйән ҡәбиләһенең, «Бабсаҡ менән Күсәк» хикәйәтендә һүрәтләнгәнсә, тау-урманлы райондарҙа тарала башлауы VIII—IX быуаттарға тура килә. Р. Г. Кузеевтың яҙыуына ҡарағанда, «монгол яулап алыуҙары киңәйә барған һайын бөрйән ҡәбиләһе Уралдың көньяҡ-көнбайыш төбәгенән китеп, көньяҡ Уралдың тау-

---

[7] Кузеев Р. Г. Происхождение башкирского народа. М.: «Наука», 1974. 141-се бит.

урманлы урындарын килеп биләй, Урал һәм Ағиҙел йылғаларының башына үтеп инә, һуңғараҡ Урал аръяғы далаларына уҡ барып сыға»[8].

Хәҙерге Башҡортостан территорияһына ҡыпсаҡтарҙың күсенеүе, күрәһең, бөрйәндәрҙән һуңыраҡ башланған һәм монголдарҙың көнсығыш Европаны яулап ала башлау осорона тап килә. Сыңғыҙ хандың оло улы Джучиҙың ҡыпсаҡтар менән булған бер һуғышбәрелешен хикәйәләгәндән һуң Абулғазы, мәҫәлән, былай тип яҙа: «Джучи хан яуҙа еңеп сыҡты һәм ҡулына эләккән бөтә ҡыпсаҡтарҙы ҡырып бөтөрҙө. Уларҙың ҡотолоп ҡалғаны иштәктәргә (йәғни башҡорттарға — С. Г.) китте»[9]. Күрәһең, ҡыпсаҡтар килгәнсе Башҡортостандың тау-урманлы көньяҡ-көнсығыш районарын бөрйән һәм башҡа ҡәбиләләр биләп алған булған һәм ҡыпсаҡтарға ул төбәктәргә үтеп инеү бик үк еңел булмаған. Ер-һыу өсөн бөрйән һәм ҡыпсаҡ ҡәбиләләре араһында бер туҡтауһыҙ бәрелештәр булып торған. Тарихи әҙәбиәттән билдәле булыуынса, оҙайлы һуғыш-талаштарҙан һуң ҡыпсаҡтар, бөрйәндәрҙе ҡыҫырыҡлап, урман-таулы райондарҙың күп кенә төбәктәренә үтеп ингәндәр. Һөҙөмтәлә ҡарағай-ҡыпсаҡ һәм гәрәй-ҡыпсаҡ ырыуҙары бөрйән ырыуы менән күрше йәшәп китә, шуға күрә лә көньяҡ Башҡортостандың урман-дала өлөшөндә ҡалған ҡыпсаҡ ырыуҙары уларҙы «бөрйән ҡыпсаҡтары» тип йөрөткәндәр.

Билдәле, ер-һыу биләмәләре өсөн барған оҙайлы көрәш-талаш, бәрелештәр ике ҡәбилә араһындағы мөнәсәбәттәрҙең дә киҫкенләшә, ҡырҡыулаша барыуына килтергән. «Бабсаҡ менән Күсәк» хикәйәтендә беҙ ана шул ырыу-ара мөнәсәбәттәр сағылышын күрәбеҙ ҙә инде.

Образдарҙы һүрәтләүҙәге, ваҡиғаларҙы аңлатыуҙағы һәм поэтик формалағы айырмаға ҡарап, «Күсәк бей» варианттары ике төп версияға — ҡыпсаҡ һәм бөрйән версияларына бүленә. Ҡыпсаҡ версияһы варианттары форма яғынан урыны-урыны менән проза аралашып килгән шиғри текстарҙан тора, күләм яғынан да ҙурыраҡ. Ә бөрйән версияһына ҡараған варианттар күләм яғынан ҙур түгел һәм, нигеҙҙә, прозанан ғибәрәт.

Һәр сәсән үҙ ырыуы батырын данлар һәм ғәҙел итеп күрһәтер булған. Ҡыпсаҡ сәсәндәре Бабсаҡ менән уның улы Күсәкте ыңғай образ итеп күтәргән, ә бөрйән батыры Ҡарағөлөмбәтте тик тиҫкәре ҡылыҡтар менән генә һүрәтләгән. Бөрйән сәсәндәре, киреһенсә, Ҡарағөлөмбәтте аҡыллы, ыңғай батыр итеп күрһәтә һәм шул яҡтан уны ҡыпсаҡ батырҙарына ҡаршы ҡуя. Шулай итеп, бер үк ваҡиғаны һүрәтләгән эпик әҫәр ике ырыу сәсәндәре башҡарыуында ике төрлө аңлатыла. Һәр ырыу сәсәне үҙ ырыуы батырын аҡларға һәм уны яҡларға тырыша. Әммә ике версияны поэманың бер үк

---

[8] Кузеев Р. Г. Происхождение башкирского народа. М.: «Наука», 1974. 158-се бит.

[9] Абулгази. Шэжэрэ-и тюрки. М. Л., 1961. 44-се бит.

«тел төбө» берләштерә: ырыу-ара ыҙғыштарҙы ғәйепләү, татыулыҡты яҡлау.

Әҫәр үҙәгендә Мәсем хан, Бабсаҡ бей, Күсәк бей, Ҡарағөлөмбәт бей образдары тора. Шулар араһында айырылыбыраҡ торғаны — ун ике ырыу башлығы Мәсем хан. Ҡыпсаҡ версияһының күпселек варианттарында Мәсем халыҡ мәнфәғәтен күҙәтеүсе, ғәҙел хан, ыңғай образ итеп һүрәтләнә. Ул ғәскәр башлығы булыу менән бергә ырыуҙарҙы ойоштороусы ла. Мәсем хан элек ыҙғышып йәшәгән ете (ҡайһы бер варианттарҙа ун ике) ырыуҙы берләштерә, ул хакимлыҡ иткән заманда күсмә халыҡтарҙың һөжүмдәре баҫылып ҡала. Уны башҡорт ҡәбиләләр союзының дөйөмләштерелгән етәксеһе тип әйтергә мөмкин. Һәр хәлдә, Мәсем хан образы «Аҡбуҙат» эпосындағы халыҡты иҙеүсе яуыз хан итеп һүрәтләнгән Мәсемдең киреһе — ыңғай герой итеп бирелгән.

Өммөхаят Ҡолдәүләтова вариантында (ҡыпсаҡ версияһы) Мәсем хан, алдыҡҡа ышанып, мәкерле рәүештә Бабсаҡ батырҙы үлтергән Ҡарағөлөмбәт яғына күсә, уны яҡлай. Башҡа ырыу батырҙарын Ҡарағөлөмбәткә ҡаршы сығыуҙан тыя. Ошоноң өсөн халыҡ уға үҙенең мөнәсәбәтен үҙгәртә. Ҡайһы бер варианттарҙа ул Ҡарағөлөмбәткә ҡыпсаҡтарҙы ҡыйратышыуға ярҙам итә, шуның менән ырыуҙар союзының емерелеүен тиҙләтә (М. Өмөтбаев варианты).

Феодаль йәмғиәттә синфи ҡаршылыҡтарҙың үҫеүе, халыҡтың хандарға, бейҙәргә мөнәсәбәте үҙгәреү арҡаһында, Мәсем хандың ыңғай образы ла аҙаҡ кире сифаттар менән һүрәтләнә башлаған, тип әйтергә мөмкин.

«Бабсаҡ менән Күсәк» сюжетының нигеҙендә башҡорт ырыуҙарының Мәсем хан ҡулы аҫтында эре ырыу-ҡәбилә союзына берләшеүенә һәм йәшәүенә, үҙ-ара мөнәсәбәттәренә хас ваҡиғаларҙың поэтик сағылышы ята. Ҡыҙғаныска ҡаршы, Мәсем хан тураһында фольклор мәғлүмәттәренән башҡа бер нәмә лә билдәле түгел. Ҡарағай-ҡыпсаҡ ырыуының шәжәрәһендә Бабсаҡ менән Ҡарағөлөмбәттең хандың ике яғында ултырыуы хаҡында әйтелһә лә, уның исеменең кем булыуы билдәле түгел. Һәр хәлдә беҙгә шуныһы мәғлүм: хикәйәттең барлыҡ вариант һәм яҙмаларында ла Мәсем хан ун ике ырыу башында торған кеше булараҡ һүрәтләнә. Хикәйәттә ниндәй ырыуҙар хаҡында һүҙ барыуын әйтеүе ҡыйын. Шул уҡ ваҡытта Мәсем хан ҡул аҫтындағы ырыу-ҡәбилә союзы составында бөрйән, ҡыпсаҡ, тамъян һәм түңгәүер ҡәбиләләренең булыуы асыҡ билдәле: илгә афәт килгәс, Мәсем хан саҡырыуы буйынса был ҡәбиләләр хан торағына үҙҙәренең батырҙарын һәм ғәскәр ебәрәләр. Был осраҡта шуны ғына күрһәтергә мөмкин: XVIII быуаттар бөрйән ҡәбиләһенең мөнәш, ямаш, янһары, баюлы, ә ҡыпсаҡ ҡәбиләһенең бошман ҡыпсаҡ, сәнкем ҡыпсаҡ, гәрәй ҡыпсаҡ, ҡарағай ҡыпсаҡ, ҡара ҡыпсаҡ, һары ҡыпсаҡ кеүек ырыуҙарҙан торғанлығы билдәле.

Поэмала образдар бер генә планда — ыңғай йәки кире итеп кенә бирелмәй. Ҡыпсаҡ версияһына ҡараған варианттарҙың ҡайһы береһендә Күсәк батыр ҡаршылыҡлы образ итеп һүрәтләнә. Мәсем

хан образына килһәк тә, шул уҡ хәл. Геройҙарҙың эске тойғоһона ла байтаҡ урын бирелә. Был инде традицион эпик фольклор өсөн ятыраҡ, яңыраҡ күренеш. Геройҙың эске донъяһына иғтибар итеү эпосы художестволы әҙәбиәткә бер аҙ яҡынайта һәм уның профессиональ әҙәбиәткә яҡын кешенең ҡулынан үткәнлеген күрһәтә.

«Ҡусәк бей» ике өлөштән тора һәм ике быуын геройҙарын һүрәтләй. Беренсе өлөш Бабсаҡ батырҙың һәләкәте, ҡыпсаҡ ырыуының ҡырылыуы менән бөтһә, икенсе өлөшө Күсәк батырҙың бөрйән ырыуына ҡарымтаға килеүен, Ҡарағөлөмбәттән үс алыуын хикәйәләй.

Төрки халыҡтарҙың эпик фольклорында геройҙарҙың бер нисә быуынын һүрәтләгән байтаҡ миҫалдарҙы күрергә мөмкин. Шуныһы характерлы, был эпик әҫәрҙәрҙә геройҙың улдары һәм ейәндәре (икенсе һәм өсөнсө быуын батырҙары), ғәҙәттә, аталарының эшен туранан-тура тормошҡа ашырыусылар, дауам итеүселәр, халыҡ мәнфәғәте өсөн көрәшеүселәр булып һүрәтләнә. Шулай уҡ икенсе быуын геройы йыш ҡына ниндәй ҙә булһа берәй сәбәп арҡаһында дошманға әсирлеккә төшкән туғандарын ҡотҡара, әгәр ҙә ата-әсәһе үлтерелгән булһа, уларҙы берәй мөғжизәле дарыу табып терелтә лә.

Әммә «Күсәк бей» әҫәрендә бындай традицион принцип әҙмә-әҙ һаҡланмаған. Атаһының эшен дауам итергә, ғәҙел етәксе булырға, хыянат арҡаһында тарҡалған ырыуҙар берекмәһен яңынан аяҡҡа баҫтырырға тейеш булған Күсәк батыр бөрйән ырыуына ҡарымтаға бара һәм бер йәндән башҡа бөтә кешеһен ҡыра. Л. Н. Лебединский яҙып алған вариантта Күсәктең бөрйәндәргә яһаған ҡарымтаһы уның ырыуҙаштары, хатта үҙ әсәһе тарафынан да яҡлау тапмай, һәм әҫәр Күсәк батырҙың фажиғәле үлеме менән тамамлана.

Әҫәрҙә феодализм осорона характерлы бик күп күренештәр, сифаттар бар. Унда феодаль аристократия иерархияһы ярайһы ғына һүрәтләнә: һәр ырыу йәки ҡәбиләнең башында бей тора, бейҙәр ханға буйһона. Ун ике башҡорт ырыуы башында Мәсем хан тора. Ил-йорт алдында берәй ҡурҡыныс тыуа ҡалһа, хан үҙенә буйһонған бейҙәрҙе, ырыу батырҙарын хәрби дружиналары менән бергә саҡырып ала. Бейҙәр сикләнмәгән власть менән файҙалана, улар, ырыу мәнфәғәтен яҡларға тейеш булһалар ҙа, йыш ҡына үҙ мәнфәғәтен өҫтөн ҡуялар. Был осорҙа инде бер ырыуҙы икенсе ырыуға ҡаршы ҡуйыу, айырым ырыу исеменән генә эш йөрөтөү хупланмай башлай. Бер ырыуҙы башҡаларынан өҫтөн ҡуймау теләгенән сығып, күрәһең, поэмала Мәсем хандың ҡайһы ырыуҙан икәнлеге күрһәтелмәй. Тик әҫәрҙең 1928 йылда Сәғит Мирасов тарафынан яҙып алынған һәм «Башҡорт аймағы» журналының 7-се һанында баҫылған вариантында ғына Мәсем хандың бөрйән ҡәбиләһенән булыуы әйтелә.

Шулай итеп, ике ырыу араһындағы ҡырылышты кәүҙәләндереүе менән «Күсәк бей» поэмаһы феодализм осоронда ла әле һаҡланған патриархаль-ырыусылыҡ күренештәрен, реакцион йолаларҙы сағылдыра. Әммә унда һуңғыраҡ осор өсөн характерлы моменттар

ҙа юҡ түгел. Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуы кеүек тарихи ваҡиғалар сағылып ҡала, айырым варианттарҙа киҫкенерәк социаль мотивтарҙың килеп инеүе һиҙелә, икенсе ырыуға йәки уның кешеһенә ҡарата ҡарымта яһау кеүек ҡырағай йола менән ырыуҙар татыулығы һәм берҙәмлеге кеүек прогрессив идея киҫкен бәрелешә.

Боронғо эпоста саҡ төҫмөрләнә генә башлаған синфи дифференциация, социаль тигеҙһеҙлек күренеше феодализмдың башланғыс осорона ҡараған эпик әҫәрҙәрҙә асыҡлана төшә һәм артабан төп мотивтарҙың береһенә әйләнә, башҡорт халҡының формалашыуында ҡатнашлыҡ иткән ырыуҙар, этнографик төркөмдәр, ырыуҙар берекмәһе телгә алына, һәм эпик геройҙар теге йәки был ырыу, йыш ҡына халыҡ исеменән сығыш яһай. Әҫәрҙәрҙең поэтикаһында ла мифологик образдарҙан, фантастик һүрәтләүҙәрҙән тормошсанырак геройҙарға, реалистик пландағы һүрәтләүҙәргә табан үҫеүҙе күҙәтергә мөмкин. Эпос мифологиянан арына бара.

Сәсәндәр тарафынан ижад ителеп, быуындан быуынға күсә килгән эпос әҫәрҙәренең ҙур поэтик оҫталыҡ, аһәңлек менән заманының алдынғы идеалдарын алға һөрөүе, кеше көсөнөң тәбиғәт көстәренән өҫтөнлөгөн, ғәзеллектең тантана итеүен раҫлауы, тыуған илде һөйөргә өйрәтеүе, башҡорттарҙың элекке тормош-көнкүрешен, йолаларын сағылдырыуы менән улар халыҡтың рухи байлығы, поэтиклаштырылған тарихы булып әүерелгән.

Ырыу-ҡәбиләләрҙең үҙ-ара бәйләнештәре хаҡында һүҙ барғанда тағы бер нисә эпик ҡомартҡы иғтибарға лайыҡ. Шуларҙың береһе — һуңғы йылдарҙа ғына фән донъяһына билдәле булған «Уҙаҡ-Туҙаҡ — балабәшнәк ярсығы» хикәйәте. Унда Азов диңгеҙе (яҙмала Аҙаҡ диңгеҙе) менән Ҡанҡа йылғаһы араһында малсылыҡ менән көн күреп йәшәүсе боронғо бәшнәк (урыҫ яҙмаларында печенег, көнбайыш Европала — пацинаки, ғәрәптәрҙә — баджнак, төрөктәрҙә — беченек) халҡының фажиғәле яҙмышы һүрәтләнә.

Бәшнәк халҡы тарихҡа IX быуаттың урталарынан ғына билдәле. Был исем ҡәбилә союзының тәүге башлығы Бече исеменән алынған тип фараз ителә. Яҙма сығанаҡтарҙа бәшнәктәр һуңғы тапҡыр 1188 йыл менән иҫкә алына. Бәшнәктәрҙең ике ҙур төркөмө билдәле: төрөк бәшнәктәре, хазар бәшнәктәре[9]. Бәшнәктәрҙең бер төркөмөнөң X быуатта Яйыҡ буйындағы Шалкар күле тирәһендә йәшәүе билдәле. Һәр хәлдә Әхмәт ибн Фаҙлан 922 йылда бәшнәктәрҙе тап ошо төбәктә осратҡан[10].

Ләкин бәшнәктәр тарихы бик оҙаҡҡа бармай. XII быуат аҙаҡтарына бәшнәктәр төрлө халыҡтар (византиялылар, урыҫтар, ҡыпсаҡтар һ. б.) менән бәрелештәрҙә тарҡалып, төрлө халыҡтар эсендә юғалып бөтә. Был осраҡта шуны айырып әйтергә кәрәк: башҡорттарҙың тарихы бәшнәктәр менән тығыҙ бәйләнгән. Кузеев Р. Г., мәҫәлән, бөрйәндәрҙе бәшнәктәр менән ҡан-ҡәрҙәш ҡәбилә тип һанай.

---

[9] Плетнев С. А. Печенеги / Исчезнувшие народы. М.: «Наука», 1988. 35, 45-се биттәр.

[10] Шунда уҡ, 37-се бит.

Уның яҙыуына ҡарағанда, көнсығыш Европаға күсенгән ваҡыттарында башҡорттар һәм бөрйәндәр этник йәһәттән бәшнәктәр донъяһына ҡарағандар[11]. Бына шуға күрә лә башҡорт эпосында бәшнәктәрҙең иҫкә алыныуы — тәбиғи күренеш.

«Уҙаҡ-Туҙаҡ — балабәшнәк ярсығы» хикәйәте тыныс тормош кисереүсе бәшнәктәр иленә Көнсығыштан килеп сыҡҡан уҫал һәм һуғышсан балауҫандарҙың баҫып кереүен хикәйәләүҙән башланып китә. Улар бәшнәктәрҙең ҡәлғәләрен, нығытмаларын емерә, малдарын, байлыҡтарын баҫып ала, ә үҙҙәрен аяуһыҙ ҡыра. Иҫән ҡалған балабәшнәктәр ҡасандыр ата-бабалары йәшәп киткән маҡтаулы Урта Уралға күсеп китергә ҡарар итә. Балабәшнәктәр юлда оло ғазаптарға, үләткә тарый. Уларҙың бик аҙы ғына Уралға килеп төпләнә. Ҡобайырҙа ошо Уралға килеп ырыу йәйгән балабәшнәктәр хаҡында һүҙ бара.

Боронғо бәшнәктәр тураһындағы эпос — уникаль күренеш. Бындай эпос башҡа төрки халыҡтар фольклорында осрамай. Шулай уҡ «Уҙаҡ-Туҙаҡ — балабәшнәк ярсығы» әҫәре боронғо бәшнәк ҡәбилә-ырыуҙарын элек ассимиляциялаған, йә булмаһа оҙаҡ ваҡыттар улар менән бәйләнештә, контактта булған славян, угор халыҡтары ижадында ла юҡ.

«Уҙаҡ-Туҙаҡ...» — күләме ҙур булмаған эпик ҡомарҡы. Уның тексы нигеҙҙә һирәк-һаяҡ проза менән аралашҡан шиғри юлдарҙан тора. Ул яғы менән әҫәр традицион башҡорт эпосы формаһынан айырылмай. Ҡобайырҙа боронғо бәшнәк ҡәбиләләре тормошоноң сағыштырмаса оҙайлы осоро, бигерәк тә яңы эраның беренсе меңе аҙағында һәм XI быуат башындағы киҫкен боролошло тарихи ваҡиғалар сағылған булырға тейеш.

Әҫәрҙең төп персонаждары — Йәноҙаҡ ҡарт менән Уралбикә әбей, уларҙың улы Уҙаҡ-Туҙаҡ, балабәшнәктәр һәм олобәшнәктәр, геройҙың дошмандары — балауҫандар, төрлө йәнлектәр, тәбиғәт эйәләре (тау эйәһе, урман эйәһе, ер-һыу һ. б.).

«Уҙаҡ-Туҙаҡ — балабәшнәк ярсығы» ҡобайырының иң ҙур әһәмиәте шунда: ул халыҡҡа яфа, фажиғә алып килеүсе ырыу-ара ыҙғыштарҙы илбаҫарлыҡ һуғыштарын ғәйепләй, ҡаты тәнҡит итә, халыҡтар үҙ-ара татыу йәшәргә тейеш тигән идеяны күтәрә. Унда шулай уҡ кешеләр тормошоноң тәбиғәт менән гармонияһы хаҡында уйланыуҙар ҙур урын алып тора.

«Уҙаҡ-Туҙаҡ...» эпосында бәшнәк ҡәбиләләренең ҡалҡыныу, күтәрелеүҙәре, Евразия далаларында хакимлыҡ итеүҙәре, һуңынан ҡыпсаҡтарҙың көслө һөжүмдәренән еңелеүҙәре һәм әкренләп тарих аренаһынан төшөүҙәре кеүек мөһим тарихи ваҡиғалар художестволы дөйөмләштерелеп тасуирлана. Ҡобайырҙа бәшнәктәрҙең боронғо замандарҙа Алатауҙа (Тянь-Шандең төньяҡ-көнбайыш армытында) йәшәгәнлектәре, һуңыраҡ Аҙаҡ диңгеҙе буйына күсеп барышлай байтаҡ ваҡыт Уралда мажарҙар (мадьярҙар, венгрҙар) менән

---

[11] Кузеев Р. Г. Происхождение башкирского народа. М., 1974. 143, 149-сы биттәр.

бергәләп күсмә малсылыҡ тормошо алып барыуҙары хаҡында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бирелә.

«Уҙаҡ-Туҙаҡ — балабәшнәк ярсығы»нда боронғо бәшнәктәрҙең тормош үҙенсәлектәре сағылыш алған. Был әҫәр буйынса бәшнәктәрҙең көнкүреше, хужалығы, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолаһы, инаныуҙары, үҙ-ара, ырыу-ара мөнәсәбәттәре, ижтимағи тормошо тураһында ҡыҙыҡлы һәм мөһим мәғлүмәттәр алырға мөмкин.

Ҡобайыр йолалары — мәжүсиҙәр, ислам динен дә, башҡа классик донъя динен дә белмәйҙәр. Улар үлгән ырыуҙаштарын мәжүси йола буйынса ерләйҙәр. Мәҫәлән, Йәноҙаҡ ҡарт үлгәс, Уҙаҡ-Туҙаҡ уны йылға ярынан, алыҫыраҡ ҡалҡыуға килтерә, йылғаға буй итеп соҡор ҡаҙа һәм башын һыу уренә ҡаратып һалып ерләй. Боронғо Үҙәк Азия, Алтай төркиҙәрендә ошо йола буйынса мәйет ерләү таралған булған.

Бәшнәктәр тәбиғәтте йәнләндереп ҡабул итә, төрлө тәбиғәт эйәләренә табына. Улар боронғо төрки ҡәбиләләрендә киң таралған ер-һыу эйәһенә, йылға, урман, тау, һәр төрлө йәнлек хайуан эйәләренә инана, ҡыйынлыҡ килгәндә ошо эйәләргә ярҙам һорап мөрәжәғәт итә. Тәбиғәт эйәләре йәки илаһтары эпос геройҙарын нисек йәшәргә, кешеләр һәм тәбиғәт менән ниндәй мөнәсәбәттә булыу кәрәклеген өйрәтә. Ҡобайыр геройҙары үҙҙәрен тәбиғәттең айырылғыһыҙ бер өлөшө итеп иҫәпләй. Боронғо эпик әҫәрҙә кешеләр менән тәбиғәт мөнәсәбәтендә боронғо рационализм асыҡ ярылып ята. Эйә-илаһтар эпос геройына тәбиғәт байлыҡтарын һаҡсыл файҙаланырға, кәрәгенсә генә тотонорға, ул байлыҡтарҙы әрәм-шәрәм итмәҫкә кәңәш бирә. Ҡобайырҙа тәбиғәт менән кешеләр мөнәсәбәте гармоник рәүештә үҫергә тейеш тигән тәрән фәлсәфәле фекер үткәрелә. Тәбиғәт, йәнлек эйәләре балабәшнәк ырыуын, унан ҡалған берҙән-бер Уҙаҡ-Туҙаҡты ҡурғаусы, һәр төрлө бәлә-ҡазанан һаҡлаусы булып һүрәтләнә.

Әҫәрҙә ырыу ҡоролошоноң емерелеү дәүеренә ҡараған ижтимағи мөнәсәбәттәр ҙә сағыла. Бәшнәктәрҙең ырыу йәмғиәте ябай ырыу ағзаларынан, ырыу бейҙәренән тора. Ә ырыу бейҙәре, үҙ сиратында бөтә ырыуҙар, ҡәбиләләр менән етәкселек иткән олуғ бейгә буйһоналар. Бәшнәктәр тормошондағы мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә аҡһаҡалдар институты традицияһы тоторокло һаҡланғаны күренә. Балауҫандар тарафынан туҙҙырылған бәшнәктәр артабан нишләргә, ҡайҙа китергә тигән мәсьәләне аҡһаҡалдар һәм ир затынан булған ырыу ағзалары йыйынында кәңәш итә һәм, Уралға күсеп, ошо тауҙар ҡуйынына һыйынып йәшәүҙе хуп күрә.

«Уҙаҡ-Туҙаҡ — балабәшнәк ярсығы» ҡобайырының образдар һәм мотивтар бирелешендә «Урал батыр» эпосы менән оҡшашлыҡтар бар. «Урал батыр»ҙа Йәнбирҙе ҡарт менән Йәнбикә ҡарсыҡ, мәҫәлән, бөтә тереклеге ҡырылған тыуған төйәктәрен ташлап, кеше аяғы баҫмаған, һәр тарафтан диңгеҙ менән уратылған ергә килеп нигеҙләнә. Унда Йәнбирҙе ҡарт менән Йәнбикә ҡарсыҡ кешеләр тоҡомон башлап ебәреүсе, тәүге кешеләр итеп һүрәтләнә. Уларҙың улдары Урал батыр тәбиғәттең, тереклектең яуыз дошмандары — аждаһа, дейеү, йыландарҙы юҡ итә, уларҙың имәнес тәндәренән

тауҙар яһай, диңгеҙҙән ерҙе ҡотҡара, тәбиғәткә мәңгелек тереклек яулай, кешеләрҙе һәр төрлө яуызлыҡтан ҡотҡара, ғәҙеллек өсөн көрәшә. Урал батыр тоҡомдарынан башҡорт ырыуҙары тарала. «Уҙаҡ-Туҙаҡ — балабәшнәк ярсығы» ҡобайырында ла ошоға оҡшаш ситуациялар күҙгә ташлана. Йәноҙаҡ ҡарт менән Уралбикә әбей фажиғәле яҙмыш арҡаһында үҙҙәре йәшәгән Азов диңгеҙе менән Ҡалка буйын ташлап китергә һәм Уралда төйәкләнергә мәжбүр була.

Балаһыҙ ҡартайған Йәноҙаҡ менән Уралбикә бер юлы ике ул тыуыуын теләйҙәр, әммә уларҙың бер генә улдары тыуа. Уның бер үҙенә алдан әҙерләнгән ике исемде лә ҡушалар. Ике исемгә ике мәғәнә һалына: «Һунар сыҡһам, һунарҙа, йорт йүнәтһәм, йортта үҙемә иш, уҙаҡ (иптәш) булыр», — тип, ҡарт Уҙаҡ исемен ҡуша: «Исеменән үлем өркһөн, пыр туҙҙырып тормош көтһөн», — тип Уралбикә әбей Туҙаҡ исемен бирә.

Ҡобайырҙа Уҙаҡ-Туҙаҡ образы үҙәк урынды алып тора. Ул әҫәрҙә атаһы Йәноҙаҡтың изге эштәрен һәм балабәшнәк ырыуын дауам итеүсе ыңғай герой булып һүрәтләнә. Уға характеристика, уның балалыҡ осорон һүрәтләү алымдарын башҡорт халыҡ эпосы традицияларындағыса: ул ҡыр кәзәһенеке кеүек һикерәндәк, толпарҙыҡы кеүек талмаҫ аяҡлы, юлбарыҫ беләкле, ҡыҫала бармаҡлы, арыҫлан күкрәкле, бөркөт ҡарашлы, һағыҙаҡ билле, йыуан елкәле, ҡолан ҡолаҡлы, ҡош танаулы, болан сираҡлы ғәжәйеп батыр булып тыуа. Шундай етеҙ хәрәкәтле, хуш күңелле, тәбиғәт серҙәрен аңларға тырышыусан Уҙаҡ-Туҙаҡ — атаһының кәңәштәрен, теләктәрен, ырыу йолаларын, традицияларын тайпылышһыҙ еренә еткереп үтәүсе идеаль герой.

Әҫәрҙә, төрки-монгол халыҡтары героик эпосына хас булғанса, батырҙың ҙур ҡыйынлыҡтар үтеп, үҙенә кәләш эҙләп табыу мотивы ла асыҡ һыҙатлана. Тап ошо юлда Уҙаҡ-Туҙаҡ тормош һәм тәбиғәт менән таныша, нисек йәшәргә кәрәклеген өйрәнә. Әҫәр аҙағында Уҙаҡ-Туҙаҡ Аҙаҡ диңгеҙе буйынан килгән бер ырыу ҡыҙын осрата һәм уға өйләнә. Шулай итеп, Уралда балабәшнәк ырыуы тарала.

Уҙаҡ-Туҙаҡ тураһындағы ҡобайырҙа башҡорт халҡының башҡа эпик ҡомартҡылары, конкрет алғанда, «Ҡуңыр буға», «Күсәк бей», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» һ. б. менән уртаҡ, оҡшаш моменттар бар. «Ҡуңыр буға» эпосында, мәҫәлән, Урал һырты буйлап тыуған төйәгенә касып кайтыусы һыйырҙарҙы эҙләп барыусы Таңдыса — төньяҡ башҡорттарынан көньяҡ башҡорттарына килен булып төшкән сәсән ҡатын. Ул япа-яңғыҙ юғалған һыйырҙар эҙенән бара. Юл буйынса ул төрлө кейек йәнлектәр, сәскәләр, ағастар, тау-таштар менән һөйләшеп бара, кәңәшләшә. Тәбиғәт эйәләре уны һәр төрлө хәүефтән һаҡлай, кәңәштәр бирә. Ошондай уҡ эпизодтар был ҡобайырҙа ла осрай. Уҙаҡ-Туҙаҡ йәнлектәр менән аралашып йәшәй, тәбиғәт эйәләрен ихтирам итә һәм үҙе лә улар яғынан яҡлау, ярҙам таба.

«Уҙаҡ-Туҙаҡ — балабәшнәк ярсығы» эпик ҡомартҡыһында кешеләргә, халыҡҡа сикһеҙ ҙур яфа, фажиғә килтереүсе илбаҫарлыҡ, талау һуғыштары ҡаты тәнҡитләнә. Был йәһәттән ул «Ҡуҙыйкүрпәс

менән Маянһылыу», «Ҡусәк бей» кеүек ҡаһарманлыҡ эпостары менән ауаздаш яңғырай.

«Һуңғы һартай» — башҡорт халҡының татар-монгол иҙеүенә ҡаршы көрәшен сағылдырыусы тарихи хикәйәт. Конкретыраҡ әйткәндә, башында һарытай — һарт ырыуы бейе Ялыҡ торған башҡорт ырыуҙары союзының Алтын Урҙа хандарына ҡаршы көрәше һүрәтләнә.

Архивта һаҡланған был хикәйәткә иң беренсе булып этнограф Р. Г. Кузеев иғтибар итте. Ул хикәйәттә башҡорт халҡының татар-монгол иҙеүенә ҡаршы көрәше сағылғанын, шулай уҡ Ялыҡ бейҙең көнбайыштағы бер нисә башҡорт ырыуы союзы башында торғанлығын күрһәтте[12].

Кемдәр һуң һарттар? Этнография фәнендә һарттарҙың үзбәк халҡы составында ла барлығы билдәле. Октябрь революцияһына тиклемге хәҙерге Үзбәкстандың көньяғында йәшәгән үзбәк халҡының бер этнографик төркөмөн һарт тип йөрөткәндәр. Урта Азия халыҡтары тарихын өйрәнеүсе ғалимдарҙа һарттар тураһында ике төрлө ҡараш йәшәй. Бер төркөм ғалимдар (П. И. Лерх, В. П. Наливкин, Н. А. Аристов һ. б.) борон Урта Азияла иран телдәренең берәһендә һөйләшкән һарт тигән ерле халыҡ, ҡәбилә булған, аҙаҡ ул төркиләшкән тигән фекерҙә торалар. Икенселәре (В. В. Бартольд С. П. Толостов һ. б.) һарт этнонимы менән ултыраҡ тормошта көн күргән үзбәктәрҙе генә атағандар, ул халыҡтың көнкүрешенә ҡарап ҡына әйтелгән һүҙ, тип баралар. Ә уны айырым халыҡ йә ҡәбилә булған өсөн генә бирелгән исем түгел тиҙәр[13]. Беҙҙеңсә, беренсе төркөм ғалимдарының үзбәк һарттары тураһындағы фекере дөрөҫлөккә яҡын һәм уларҙың дәлилдәре нигеҙлерәк. Көньяҡ Урал, йәки башҡорт һарттары, менән Урта Азия һарттары (үзбәктәр) араһында борон этногенетик бәйләнеш булған булһа кәрәк. Мәҫәлән, һарт әйле ырыуы башҡорттары, легенда буйынса, үҙҙәрен Урта Азиянан килгән тип һанайҙар[14]. Һарт атамаһы ҡушылған башҡорт ауылдарының булыуы ла (мәҫәлән, Ҡурған өлкәһенең Сафакүл райондарында) ошо фекерҙе кеүәтләй.

Ғөмүмән, һарттарҙы, йәғни иран телле ырыуҙарҙы, Көньяҡ Уралға яңы эраға тиклемге дәүерҙә үк килгәндәр, тип әйтергә нигеҙ бар. Археологик мәғлүмәттәргә ҡарағанда, яңы эраға тиклемге VIII—V быуаттарҙа Көньяҡ Уралда савромат ҡәбиләләре һәм һуңғараҡ уларға туранан-тура этногенетик бәйләнеше булған боронғо сармат (беҙҙең эраға тиклемге IV—II быуат), урта (яңы эраға тиклемге II быуат һәм яңы эраның II быуатында) һәм һуңғы осор сарматтар, шулай уҡ алан ҡәбиләләре (яңы эраның II—VII быуаттарында) йәшәгәнлектәре билдәле. Археологтар савромат, сармат һәм аландарҙы иран телле булғандар тип ҡарайҙар. Башҡортостан

---

[12] Очерки по истории Башкирии, т. I, ч. 1. Уфа, 1956. 46-сы бит.

[13] Народы Северной Азии и Казахстана, т. I. Москва, 1962. 169—170-се биттәр.

[14] Башкирские шэжэре. Сост., вступ. статья, комм. Кузеев Р. Г.. Уфа, 1960. 219—220-се биттәр.

территорияһында савромат-сармат культураһының хәҙерге иң ныҡ таралған урыны Дим — Ашҡаҙар бассейнына ҡайтып ҡала. Был инде хикәйәттә һүрәтләнгән һарт ырыуы башҡорттарының йәшәгән урынына тап килә. Башҡорт тел ғилеме лә иран (фарсы) теленең башҡорт теленә йоғонтоһо булғанлығын таный. Конкрет әйткәндә, телселәр хәҙерге башҡорт телендәге «һ» өнөн билдәле дәрәжәлә боронғо иран телле халыҡтан ҡалған мираҫ тип тә ҡарай. Урта Азия һарттары төркиләшкән кеүек, Көньяҡ Урал һарттары ла аҙаҡ төркиләшкән булһа кәрәк. Хикәйәттә һүрәтләнгән һарт башҡорттары археология, тарих фәндәренә билдәле булған савромат, сармат, алан ҡәбиләләренең тоҡомдары булған булырға тейеш.

Көньяҡ Уралда иран телле ҡәбиләләренең йәшәгәнлектәре башҡорт топонимияһында ла (ер-һыу; тау-таш, ауыл, урын исемдәре) сағылып ҡалған. Мәҫәлән, Ашҡаҙар йылғаһы (саф йылға) һәм шулай уҡ Авдон (ауыл исеме, йылға тигәнде аңлата) ауылы атамаһы һ. б. иран телле ҡәбиләләр ҡалдырған тигән фекер йәшәй (Кейекбаев Ж. Ғ. һ. б.).

Тарихтан билдәле булыуынса, башҡорттар ныҡышмалы көрәш алып барыуҙарына ҡарамаҫтан, татар-монгол иҙеүе аҫтында өс йөҙ йылдан ашыу ваҡыт йәшәргә мәжбүр булалар. Алтын Урҙа дәүләтенең тарҡалыу осоронда Башҡортостанда хәл айырата ҡырҡыулаша. Урҙа хандарының власть өсөн үҙ-ара көрәштәре арҡаһында ил бөлгөнлөккә төшә, халыҡ ҡырыла. Бигерәк тә Аҡһаҡ Тимер (1336—1405) менән Алтын Урҙа ханы Туҡтамыш (тыуған йылы билдәһеҙ, 1406 йәки 1407 йылда үлгән) араһында көрәш башҡорттарға һәләкәтле була. Аҡһаҡ Тимерҙең Башҡортостанда ерле халыҡҡа үтә ныҡ аяуһыҙлыҡ күрһәткәнлеге хаҡында легендалар беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланған. Аҡһаҡ Тимер 1391 йылда ғәскәре менән Башҡортостанды талап үтә һәм ошо уҡ йылдың июнендә хәҙерге Саратов өлкәһенә кергән Ҡондоҙло исемле башҡорт ауылы янында Туҡтамыш хан ғәскәрен ҡыйрата. «Һуңғы һартай» хикәйәтенән аңлашылыуынса, һарттар башҡа башҡорт ырыуҙары менән берлектә Алтын Урҙа хандарына, Аҡһаҡ Тимергә ныҡ ҡаршылыҡ күрһәтә. Ләкин был тиңһеҙ көрәштә еңелә. Элек көслө, ҙур булған һарт ырыуы ла аяуһыҙ ҡырыла. Һарттарҙың иҫән ҡалғандары башҡа ырыуҙарға ҡушылып йотолған булһа кәрәк.

Хикәйәттә бик күп реаль тарихи шәхестәр (татар-монгол хандары, атабәктәр, мырҙалар, башҡорт бейҙәре һ. б.) мөһим ваҡиғалар телгә алына.

Был героик тарихи хикәйәттең тағы мөһим яғы — уның яҙма әҙәбиәткә мөнәсәбәте. Уны яҙма ҡомартҡы күсермәһе тип һанарға нигеҙ бар. Был фекерҙе боронғо традицион фольклор һәм яҙма әҙәбиәт алымдарын сағыштырыу аша ла раҫлап була. Беренсенән, традицион фольклор жанрҙарында (ҡобайырҙар, әкиәттәр, легендалар) хикәйәләү, ғәҙәттә, 3-сө заттан алып барыла. Ә «Һуңғы һартай»ҙа 1-се заттан хикәйәләнә. Әҫәрҙең һүрәтләү алымдарында, композицияһында, телендә фольклор алымдарынан айырмалыҡ, әҙәби стилгә яҡынлыҡ көслө. Был айырма хатта образдар биреләшендә лә һиҙелә. Мәҫәлән, Ялыҡ бей әҫәрҙә бер планда ғына (ыңғай

йәки кире) хәл ителгән образ түгел. Ул ҡаршылыҡлы образ. Ялыҡ бей, беренсенән, әҫәрҙә Урта быуат хакимдарына хас феодал-тиран, деспот булһа, икенсенән, ул үҙ илен йәне-тәне менән һөйөүсе, уны батырҙарса яҡлап көрәшеүсе ялҡынлы патриот.

Хикәйәттә яҙма әҙәбиәткә хас геройҙың эске донъяһына иғтибар итеү, лиризм да бар. Ялыҡ бейҙең улдарына ҡарата трагик мөхәббәте ҙур йылылыҡ менән һүрәтләнә, унын үлгән улдарына булған тәрән тойғоһо йөрәк тетрәткес итеп бирелә. Халыҡ ижады нигеҙҙә дөйөмләштерелгән тип, образдар менән эш итә. Ә «Һунғы һартай»ҙа Ялыҡ бейҙең героик образы характер кимәленә күтәрелгәнлеге күренә. Әҫәрҙең композицияһы Ялыҡ бейҙең монологына ҡоролған. Был яҡтан да хикәйәт яҙма әҙәбиәт традицияһына яҡын тора. Эҫәрҙең шәжәрәләрҙәгесә Ялыҡ бейҙең нәҫел-нәсәбен һанауҙан башланыуы уҡ унын яҙма әҙәбиәткә мөнәсәбәтен күрһәтә. Ошолар бөтәһе бергә «Һунғы һартай» хикәйәтен башҡорт халҡының XIV быуат аҙағындағы тормошон сағылдырыусы әҙәби ҡомартҡы тип ҡарарға мөмкинлек бирә.

Томға ингән «Ҡоблан батыр» эпосы ла дөйөм төрки ҡомартҡы. Ул бигерәк тә Нуғай урҙаһына ҡараған халыҡтар араһында киң таралған булған. Ҡаҙаҡтарҙа, ҡарағалпаҡтарҙа «Ҡобланды батыр» әҫәренең меңәр юлдарҙан ашып киткән варианттары һаҡланған. XV—XVI быуаттарҙа, башҡорттар Нуғай урҙаһына ҡараған замандарҙа, был эпик ҡомартҡы беҙҙең халыҡ араһында ла киң билдәле булғандыр, тип уйларға нигеҙ бар. Ҡаҙаҡ халҡының бөйөк ғалимы Чокан Вәлиханов XIX быуатта ла башҡорттар араһында «Ҡобланды батыр» эпосының йәшәп килеүен билдәләй. Әҫәрҙең башкорт эпик репертуарында булғанлығын академик М. Ауэзов та атап китә. Шулай ҙа бөгөнгө көнгө был эпостың беҙгә теүәл сюжетлы бер генә варианты килеп еткән.

Эпосты өйрәнеү һәм тикшереү нигеҙҙә ҡаҙаҡ версияларына таяныл атҡарылған. «Ҡобланды батыр» тураһында Октябрь революцияһына тиклем дә, унан һуң да байтаҡ ентекле хеҙмәттәр донъя күрә. Был әҫәр хаҡында В. Радловтан башҡа рус прогрессив ғалимдары П. А. Фалев[15], йәнә Туземец[16] яҙып сыға. Улар эпостың ҡаҙаҡ ауыҙ-тел ижадында тоткан урынын, әһәмиәтен билдәләгән. Әммә эпос хаҡында иң ентекле тикшереүҙе М. Ауэзов атҡарған. Үҙенсәлекле был әҫәр тураһында С. Муканов, академик А. С. Орлов, Б. Кенжебаев, К. Жумалеев, Е. Исмаиловтар ҙа үҙ һүҙҙәрен әйткән. Улар башлыса әҫәрҙең поэтикаһына ҡағылышлы тикшеренеүҙәр үткәргән һәм унын ҡайһы ерҙә, ҡайһы дәүерҙә тыуыуы, ниндәй ваҡиғаларҙы бәйән итеүе хаҡында һүҙ алып барған. М. Ауэзов,

---

[15] Записки восточного отделения Русского археологического общества. Т. 24. Вып. 3—4, 1916.

[16] Туркестанские ведомости. № 34, 35, 38, 42, 1899. «Женщины по киргизской былине «Кобланды».

[17] «Таң» журналы. № 1, 1925; Журнал: «Литература и искусство Казахстана», Алма-Ата, № 8—9, 1939; Журнал: «Литературный критик». Москва, 1939 и № 1, 1940.

мәсәлән, «Ҡобланды батыр» XVI быуатта ижад ителгән һәм ундағы ваҡиғалар Иван Грозныйҙың Ҡазанды баҫып алыуына бәйле, тигән фекер әйтте. Быға ул әҫәрҙәге Ҡазан ҡалаһының телгә алыныуын дәлил итте. Уның фекеренә ҡаҙаҡ әҙәбиәтен тикшереүсе Сабит Муканов менән Калижан Бикхожин да ҡушыла.

Әммә улар үҙҙәренең һуңғы тикшеренеүҙәрендә был фекерҙән кире ҡайттылар. Ҡазан ҡалаһы телгә алыныуҙан ғына дәүерҙе билдәләп булмай, тигән уртаҡ фекергә килделәр. Ысынлап та, ауыҙ-тел ижадының ниндәй генә жанрын алма, ул ысынбарлыкты сағылдырған кире ҡаҡҡыһыҙ тарихи документ була алмай. Шуға күрә һәр фольклор әҫәрен тарихи материалдар менән сағыштырып тикшереү зарур. Шул йәһәттән ҡарап, үрҙә аталған ҡаҙаҡ ғалимдары әҫәрҙең нигеҙендә ҡыпсаҡтар менән ҡыҙылбаштарҙың (фарсы телле ырыуҙар, ҡайһы бер варианттарҙа ҡалмыҡтар менән) бәрелеше ята, тип билдәләнеләр. Ҡазан һүҙенең дә икенсе төрлө, йәғни Ғазан булыуы ихтималлығы хаҡында ла һүҙ ҡуҙғатылды. Ғазан иһә, боронғо яҙма сығанаҡтарға ҡарағанда, ҡыҙылбаштарҙың ханы, яу башлығы булған.

Ҡаҙаҡ ғалимы Мәлик Ғабдуллин билдәләүенсә, әҫәр Алтын Урҙа заманынан алдараҡ булған ваҡиғаларҙы һүрәтләй һәм шул замандарҙа уҡ ижад ителгән. Уның һәм башҡа ғалимдарҙың фекеренсә, әҫәрҙәге һүрәтләнгән ваҡиғалар ғәмәлдә XII быуатҡа ҡайтып ҡала.

Ошо әйтелгәндәргә бәйләнешле, Ҡоблан (Ҡобланды) батыр тарихи шәхесме, әллә әҙәби образмы тигән һорау тыуа. Был мәсьәләгә ҡарата ике ҡараш йәшәй. Берәүҙәр уны тарихи шәхес тип билдәләйҙәр һәм бында түбәндәге мәғлүмәттәргә һылтаналар. Беренсенән, Ҡаҙағстандағы Елек тигән ҡасабанан 40 саҡрым ерҙә Ҡобландының кәбере (кәшәнәһе) барлығын һәм Ырымбурҙан Манғыстауға ҡарай барған юлда Ҡобланды тип аталған станцияның (ауылдың) булыуын дәлил итеп килтерәләр.

Әммә шуныһы бар, элек төрки халыҡтарҙа яуҙа һәләк булған батырҙарҙы үлгән ерендә ерләү йолаһы йәшәгән. Ислам дине буйынса ла шундай йола һаҡланған (хәтерегеҙгә төшөрөгөҙ Мөхәммәт саллаһу ғәлиәссәләм, үҙ васыяты буйынса, үҙ йортонда ерләнгән). Ошонан сығып ҡайһы бер ғалимдар, атап әйткәндә, Мәлик Ғабдуллин, Ҡобландыны әҙәби образ тип билдәләй. Ошо урында улар түбәндәге фактҡа ла таяна: XVIII быуатта Ҡесе Йүҙдә Ҡобланды тигән батыр булған. Уны халыҡ Бала Ҡобланды тип атаған. Әҫәргә, уның оҙайлы йәшәү дәүерендә, ниндәйҙер кимәлдә ошо батырҙың образы ла инеп китеүе ихтимал. Шуларҙан сығып, беҙ ҙә Ҡобландыны әҙәби образ тип атау яғындабыҙ.

Беҙҙең тарафтан яҙып алынған «Ҡоблан батыр» эпосы иң әүәл йөкмәткеһендәге героик һыҙаттар менән айырылып тора. Композицион йәһәттән әҫәрҙе шартлы рәүештә ике ҙур бүлеккә бүлеп ҡарарға мөмкин. Беренсе бүлектә геройҙың тыуыуы, үҫеүе, кәләш яулауы, шул тәңгәлдә батыр булып танылыуы һүрәтләнә, йәғни бында тормош-көнкүреш эпосына хас сюжет һыҙығы күҙаллана. Икенсе бүлектә иһә шәхси мәнфәғәтен ҡайғыртып батыр исеме

алған егеттең ил именлеге, халыҡ азатлығы өсөн көрәше, ошо юлда күрһәткән ҡаһарманлыҡтары тасуирлана.

Иртәк боронғо эпостарға һәм героик әкиәттәргә хас алым, йәғни геройҙың мөғжизәле тыуыуы менән башлана. 80 йәшкә еткән Ҡаҙирбай менән 50 йәшлек Миңһылыу балалары булмағанға көйөнөп йәшәйҙәр. Көнө-төнө хоҙай тәғәләнән бала һорайҙар. Уларҙың теләге ҡабул була. Аллаһы тәғәлә ҡөҙрәте менән Миңһылыу ҡарсыҡ игеҙәк бала таба. Геройҙың мөғжизәле рәүештә (оло йәштәге ҡарттарҙан) алла ҡөҙрәте менән тыуыуы, унын киләсәктә ниндәйҙер ҡаһарманлыҡтар яһаясағына ишара итә.

Артабан да сюжет героик әкиәт ҡалыбында үҫтерелә. Ҡоблан ай үҫәһен көн үҫә, алты йәштә толпар менә, ете йәштә далалар иңләй. Үҫеп еткәс, тормош-көнкүреш эпосына хас булғанса, егет үҙенә кәләш эҙләргә сыға, уны яулау өсөн ҡатмарлы һынауҙар үтә. Күркәм исемле ҡыҙҙы үҙенә алырға тырышҡан ҡырҡ аршынлы бәһлеүәнде еңеп, ил-йорт алдында батыр булып танала. Әммә был унын ҡаһарманлыҡтарының башы ғына. Уны артабан да яңы һынауҙар, батырлыҡтар көтә. Быны шул да аңғарта: Күркәм үҙененең иренә торошло толпар әҙерләй. Көтөүҙә күҙенә салынған күк ала бейәне күрҙемдеккә* һоратып алып, тәрбиәләп ҡолонлата. Ҡолон да батыр шикелле мөғжизәле тыуа: тыуғанда унын кескәй генә ике ҡанаты була.

Күркәм ҡолондо тәрбиәләп үҫтереп, арҡаһына затлы эйәр-өпсөн һалдыра, алмас ҡылыс һуҡтыра. Былар барыһы ла Ҡобландының алда башҡарасаҡ батырлыҡтарына ишара. Ошонан башлап сюжет героик эпос ҡанундарына ярашлы үҫтерелә башлай.

Икенсе өлөштә иһә Ҡобландының ил именлеге һәм халыҡ азатлығы өсөн көрәшкә күтәрелеүе һәм ҡаһарманлыҡтар күрһәтеүе һүрәтләнә. Йәғни әҫәр тулыһынса героик эпос төҫөн ала.

Ҡыҙылбаштарҙың Ҡазан тигән ханы ҡыпсаҡ иленә яу менән килеүе тураһында хәбәр ишетеп, ҡырҡ нуғайлы батыры, йәнә Ҡараман тигән батырҙың саҡырыуына ҡушылып, Ҡоблан атҡа атлана.

Ҡаҙаҡ варианттарында батырҙың яуға юлланыуы, туғандары менән хушлашыуы эпизоды ентекле тасуирлана. Туған-тыумасалары Ҡобландыны яуға бармаҫҡа, үҙ ғүмерен хәүефкә ҡуймаҫҡа өндәйҙәр. Быға яуап итеп, Ҡоблан батыр бурысы — ил һаҡлауҙа, тип, яуға атлана. Был иһә әҫәрҙәге төп идеяларҙың береһе. Беҙҙең вариантта хушлашыу эпизоды ҡыҫынҡыраҡ бирелә, һәм ул йөкмәткеһе менән дә башҡараҡ. Ҡобландының яуға атланыуына унын һеңлеһе Ҡолансәс кенә борсолоу һәм хәүеф белдерә. Ә ата-әсәһе, кәләше батырҙың бурысын аңлап, унын изге эшенә фатиха бирә. Күркәм хатта, күрәҙәлек ҡылып, яуҙың нисек үтәсәген, батырға кем йә нимә терәк буласағын аңғарта.

Барыһынан да ҡәҙерле ил һәм халыҡ икәненә төшөнгән Ҡоблан батыр, уларҙы баҫҡынсыларҙан ҡурсалау өсөн, ажарланып яуға сыға. Ошонан башлап ил именлеге өсөн яу сапҡан батырҙың эшмәкәрлеген, көрәшен бәйән ҡылыу эпостың сюжет нигеҙен тәшкил итә.

Ил ҡурсалар батырҙы халыҡ бер сифатта, йәғни физик яҡтан көслө бәһлеүән итеп кенә, һүрәтләмәй, ә күп һәләткә эйә идеаль герой итеп күрергә теләй. Шуға күрә Ҡоблан батыр аҡыллы ла, үткер телле сәсән дә, ҡурайсы ла булып ҡылыҡһынландырыла. Мәҫәлән, Ҡазан хан менән алыш алдынан Ҡоблан уны тел көрәшендә еңә, дошманының мәкерле һорауҙарына сәсәндәрсә һәм батырҙарса яуап ҡайтара.

Алышта ла Ҡоблан өҫтөн сыға. Бының менән эпос ижадсылары яуызлыҡ (был осраҡта баҫҡынсылыҡ) еңелергә тейеш тигән идея үткәрә. Ә икенсе алышта иһә, яуҙаштары ҡотҡоһона бирелеп, үҙе баҫҡынсыға әйләнгән Ҡоблан әсирлеккә эләгә, ауырлыҡтар кисерә. Бында ла тәрән идея ята: ниндәй генә мыҡты батыр булма, баҫҡынсылыҡ яһама, юҡҡа-бушҡа ил талама, унын аҙағы барыбер хурлыҡ тигән фекер үткәрелә.

Бына ошо эпизод менән дә «Ҡоблан батыр» әҫәре башҡа эпик сюжеттарҙан айырылып тора. Героик экиәттәрҙә һәм эпостарҙа герой ғәмәлдә идеаллаштырылып ҡылыҡһынландырыла. Ул үҙ юлында аҙашмай ҙа, яңылышмай ҙа, һәр саҡ ҡаһарман булып ҡала. Ә Ҡоблан иһә оло хаталыҡ яһай, баҫҡынсыға әүерелә. Ошо яғы менән эпос әҙәби әҫәр ҡанундарына яҡыная. Күрәһең, был эпизод әҫәргә һуңғыраҡ дәүерҙәрҙә, яҙма әҙәбиәт йоғонтоһонда килеп ингәндер.

Артабан әҫәр йәнә героик экиәт һәм эпос ҡанундары нигеҙендә дауам итә. Ҡоблан зинданда ҡурай уйнап, хан ҡыҙын үҙенә ҡарата, унын һәм толпары ярҙамында әсирлектән ҡотола, тарҡалған ырыуҙаштарын йыйып, коллоҡҡа төшкән ата-әсәһен, һеңлеһен һәм илен азат итә, йәғни бөтә батырлыҡ сифаттарында яңынан пәйҙә була. Бында иһә ауыр яҙмыш һынауҙарын кисереп тә ҡаһарманлыҡ сифаттарын юғалтмаған, иленә һәм халҡына тоғро ҡалған шәхес кенә ысын батыр була тигән идея үткәрелә. Әҫәр оптимистик тонда — Ҡобландың еңеүе, ата-әсәһен, ҡарындашын, илен ҡурсалап ҡалыуы, үҙен әсирлектән ҡотҡарыусы хан ҡыҙына өйләнеүе менән тамамлана. Һуңғы эпизодта әҫәр батырының йәнә бер ыңғай сифаты асыла. Ил алдындағы яһаған батырлығы, шуға тәғәйен эйәлек (хужа булыу) хоҡуғы алыуға ҡарамаҫтан, ул Күркәмде ризалыҡһыҙ үҙенеке итмәй. Бында боронғо башҡорт ирҙәренең үҙ хәләл ефетенә ҡарата ихласлығы һәм тоғролоғо үҙенсәлекле кәүҙәләнеш таба.

«Ҡоблан батыр» эпосының башҡорт варианты композицион төҙөклөгө менән айырылып тора. Әҫәр сюжеты ваҡиғаларҙың хронологик теҙмәһенә нигеҙләнә, йәғни һәр ваҡиға икенсеһен, икенсеһе өсөнсөһөн тыуҙыра. Лирик сигенеүҙәр, хәтирәләр рәүешендә үткәндәргә ҡайтыуҙар юҡ дәрәжәһендә. Был иһә әҫәргә йыйнаҡлыҡ, төҙөклөк бирә. Ғөмүмән алғанда, «Ҡоблан батыр» эпосы башҡорт эпик ҡомартҡылары араһында үҙенең йөкмәткеһе менән дә, художестволы эшләнеше йәһәтенән дә үҙенсәлекле бер күренеш ул.

Сюжет ҡоролошо йәһәтенән «Маҡтымһылыу» эпосы башҡа тормош-көнкүреш хикәйәттәренән айырылып тора. Сюжет бында батырҙың мөғжизәле тыуыуы, үҫеүе, үҙенә кәләш эҙләп сығыуы менән башланмай. Ваҡиғаларҙың үҙәгендә лә ир батыр түгел, ә Маҡтымһылыу исемле ҡыҙ тора. Унын берҙән-бер мөғжизәле сифаты —

сибәрлеге, өс саҡрымдан уҡ балҡып торған нурлы йөҙө. Ана шул нуры менән ул хатта нағыш теккән, тиелә эпоста.

«Алдар менән Зөһрә» хикәйәтендәге Зөһрә кеүек, ул батырлыҡтар ҙа ҡылмай, дан да яуламай. Йәй һайын ағаһы менән бер утрауҙа туғыҙ тирмә ҡороп, иркенлектә һәм тыныслыҡта көн үткәрә. Был турала Таймаҫ тигән хан белеп ҡала һәм Маҡтымһылыуҙы көс менән алып китергә ниәт ҡыла. Бына ошонан һуң инде эпос сюжеты көсөргәнешле төҫ ала. Ағаһының Таймаҫ хан һәм уның ярандары менән аяуһыҙ алышы, ҡыҙҙың ахырҙа дошман ҡулына төшөүе ентекле тасуирлана. Ошоноң менән әҫәрҙең беренсе өлөшө тамамлана.

Икенсе өлөштә Маҡтымһылыуҙы ҡотҡарыуҙы үҙ өҫтөнә алған ярлы егетенең эшмәкәрлеге тасуирлана. Ул аҡыл һәм хәйлә менән Маҡтымһылыуҙы Таймаҫ ҡулынан ҡотҡара, атаһына алып килеп тапшыра. Бында иғтибарҙы йәлеп итерҙәй бер эпизод бар. Ҡасып китер алдынан Маҡтымһылыу ике улын биленән ергә күмеп ултырта, алдарына ярыҡ табаҡ, ярыҡ ҡалаҡ, ҡалдыҡ-боҫтоҡ аш һала, унан өйөр айғырын, дөйә атанын, ҡуй ҡусҡарын, һыйыр көтөүендәге үгеҙҙе үлтерә. Йәғни Маҡтымһылыу башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына хас булмаған ҡаты бәғерлелек, мәрхәмәтһеҙлек күрһәтә. Әммә бында ҡасандыр ҡылынған яуызлыҡ (көслөк менән бисәлеккә алыу, илдән яҙҙырыу) үҙ яҙаһын алырға тейеш, тигән идеяны күрмәү мөмкин түгел. Йәнә лә илгә булған һөйөү тойғоһо барынан да өҫтөн булыуы ла һыҙыҡ өҫтөнә алына.

Эпоста синфи тигеҙһеҙлек мәсьәләһе лә күтәрелә биреп ҡуя. Һарыбай ҡарт ҡыҙын ҡотҡарыуҙы һорап, хан балаларына ла, бей балаларына ла, бай балаларына ла мөрәжәғәт итә. Тик ярлы ҡатлам вәкиле генә уның теләген тормошҡа ашыра һәм дан ҡаҙана. Ә бей һәм бай балалары иһә кире яҡтан, ҡурҡаҡ булараҡ кәүҙәләнә.

Ғөмүмән, «Маҡтымһылыу» эпосы үҙенең эстәлеге менән дә, образдар яһалышы йәһәтенән дә, проблемаларҙың үҙенсәлекле хәл ителеше яғынан да иғтибарҙы йәлеп итерҙәй әҫәр.

Күләме яғынан ҙур булмаған «Ҡыҙыбәк менән Түлебай» хикәйәтенең сюжет һыҙығы дөйөм тормош-көнкүреш эпосына хас булған экспозициянан башлана. Әҫәрҙең төп өлөшө Түлебайҙың кәләш эҙләп юлға сығыуынан, күрше ырыу ҡыҙы Ҡыҙыбәккә өйләнеүенән, уларҙың бәхетле тормош ҡороп китеүҙәрен тасуирлай. Хикәйәттең кульминацияһы иһә — тыуған илен һағынып, осар ҡоштарға эйәреп, ҡанатланып ҡайтып барған Түлебайҙың Ҡыҙыбәккә дәғүә итеүсе көндәштәре тарафынан яуыздарса үлтерелеүе. Бына ошонда инде бығаса күҙгә ташланмаған яңы бер сюжет һыҙығы хасил була: Түлебайҙың ҡонон «Күсәбей»ҙәге кеүек батырҙың улы йәки «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»ҙағы кеүек һөйгән кәләше түгел, ә бер туған ҡустыһы ҡайтара. Ул ғына ла түгел ҡустыһы еңгәһе менән яратышып ҡауышалар һәм матур итеп донъя көтөп китәләр. Быны иһә левират күренешенең бер саҡтыһы, тип ҡарарға кәрәктер. Ҡылынған изгелек, ҡаһарманлыҡ һис кенә лә юҡҡа сыҡмай, ә һәр саҡ тейешле мәрхәмәткә һәм әжергә лайыҡ була, тигән идея ята әҫәр нигеҙендә.

Шулай итеп, башҡорт халҡының тормош-көнкүреш эпосы — ауыҙ-тел ижадындағы бығаса асылып бөтмәгән серле лә, тылсымлы ла үҙенсәлекле бер донъя ул. Ул донъяға ҡараған әҫәрҙәрҙе йыйыу, системалаштырыу, фәнни нигеҙҙе өйрәнеү, уларҙы кире халыҡҡа ҡайтарыу хәҙерге һәм алда торған мөһим бурыстарыбыҙҙың береһе.

*Мөхтәр СӘҒИТОВ, Берйән БАЙЫМОВ, Салауат ГАЛИН.*



## АЛПАМЫША

Борон-борон заманда күрше булып Әйләр хан менән Аҡҡубәк хан йәшәгән, ти. Был ике хан, бер-бере менән дуҫ булып, һунарға сығып, бәйгеләр үткәреп, сәсәндәр ярыштырып, батырҙар көрәштереп, күңел асып, кәйеф-сафа ҡороп көн иткән, ти. Тик уларҙың балалары булмауҙан ғына күңелдәре китек булған, ти.

Берҙән-бер көндө туҡһан йәшлек Аҡҡубәк хандың һикһән йәшлек әбейе ул тапты, ти. Унан күп тә үтмәй тағы бер ҡыҙ тапты, ти. Аҡҡубәктең теләге ҡабул булып, күңеле теүәлләнде, ти. Бәхет Әйләр ханды ла урап үтмәне, ти. Уның һикһән йәшлек әбейе бер бите көн, бер бите ай һылыу ҡыҙ тапты, ти. Әйләр хандың шатлығының сиге булмай. Ул, ат еккән ергә ат саптырып, хат еткән ергә хат ебәреп, ҡунаҡтар саҡырып, ғәйәт ҙур туй яһаны, ти. Әйләр хандың ҡыҙына Барсынһылыу тип исем ҡуштылар, ти.

Аҡҡубәктең улы һәләк теремек булып тыуа. Ул, ай үҫәһен көн үҫеп, йыл үҫәһен ай үҫеп, бер көнлөк сағында аяҡ атлап, икенсе көнөндә урамға сығып, балалар менән йүгерешеп, бура һуғып уйнай башланы, ти. Аҡҡубәк был хәлгә ғәжәп ҡылып, үҙенең атаҡлы һынсыһын саҡырта. Һынсы*. «Баланың былай үҫеүенә аптырамағыҙ. Ул бик көслө, мөһабәтле алып* булыр. Уға исемде Алпамыша тип ҡушайыҡ!» — ти.

Алпамышанан һуң тыуған ҡыҙына Аҡҡубәк Ҡарлуғас тип исем атаны, ти. Аҡҡубәк балалар шатлығын оҙаҡ күрә алмай: берҙән-бер көндө ауырып китә лә вафат була.

Йылдар үтә тора, Алпамыша бик ғәйрәтле булып үҫә. Тирә-яҡта үҙенең көслөлөгө менән айырылып торған, ергә баҫһа, һыу сығарыр, ташҡа ултырһа, таш емерер, тауға таянһа, тау емерер данлы батыр булып таныла. Батырлыҡ өҫтөнә уның унған һунарсы, мәргән уҡсы, оҫта ҡурайсы булыуы Алпамышаның данын арттырҙы ғына, ти.

Ә инде Әйләр хандың ҡыҙына килһәк, ул, бик уңған, аҡыллы булып, ун һигеҙ йәшенә еткән, ти. Барсынһылыу, бала саҡтан уҡ бәһлеүән булып, көрәш һалып, бик күп батырҙарҙы еңеп, хур ҡылды, ти. Матурлығы менән тиңе булмаған Барсынһылыуҙы кәләшлеккә һоратыусыларҙың иҫәбе-һаны булмаған. Әйләр хандың тирмә алдындағы бағананан яусыларҙың бәйле аты өҙөлмәгән. Хатта бик

алыҫта йәшәгән Бүҙәр хан да, Барсынһылыуҙы улына һоратып, яусылар ебәргән була. Әйләр хан яусыларға: «Ҡыҙымды үҙ иркенән тыш бер кемгә лә бирә алмайым!» — ти. Яусылар теләктәренә ирешә алмай ҡайтып китәләр.

Көндәр артынан көндәр үтә тора, Барсынһылыуға ла йән юлдашын һайларға ваҡыт етә. Уның йөрәген һағыш ала. Барсынһылыу хыялында йөрөткән батыр егетте юҡһына, бойоға. Һағыш уның йөҙөнә һары булып сыға. Барсынһылыу йыш ҡына атаһы бүләк иткән арғымаҡҡа атланып, урман, тауҙар гиҙеп йөрөй, тик һис кенә лә йөрәген баҫа алмай.

Берҙән-бер көн уның бойоғоп йөрөүен күргән еңгәһе тейешле ҡатын:

Нурлы йөҙөң һары алған,
Серле күҙең ҡайғы алған,
Барсынһылыу, әйтсе һылыу,
Һинең күңелең кемде уйлай,
Йәш йөрәгең кемгә һыҙлай,
Барсынһылыу, әйтсе, һылыу? —

тигән, ти. Барсынһылыу:

Ҡуйсы, еңгәй, ҡуйсы еңгәй,
Йән серҙәшем булсы, еңгәй.
Нурлы йөҙөм һары алды,
Серле күҙем ҡайғы алды,
Йәш йөрәгем бик һыҙлана,
Берәй дауа бирсе, еңгәй,
Берәй дауа бирсе, еңгәй?

Шунан зирәк еңгә, эштең ниҙә икәнен һиҙеп:

Йән серҙәшең булайым, һылыу,
Йөрәк серең беләйем, һылыу, —

тип әйтте, ти.

Барсынһылыу былай тип яуап бирҙе, ти:

Ирмен тигән ир-егеттең
Толпар ҙа булыр менгәне;
Иләҫ күңелле ҡыҙ баланың
Батыр ҙа булыр һөйгәне.

Еңгәһе:

Иле барҙың — ире бар,
Илдә батыр күп булыр;
Барсынһылыуҙың күңеле
Ҡайһы батырҙа булыр?

Барсынһылыу:

Батыр булһа, сос булыр,
Оскан ҡыйғыр ҡош булыр;
Уҡ атҡанда, ян түҙмәҫ,
Ул баҫҡанда, таш түҙмәҫ;
Ултырһа, уба емерер,
Таянһа, тау емерер;
Йөрөгәндә ер һелкенер,
Арыҫландай өркөтөр.
Ҡурай өсөн тын кәрәк,
Егет өсөн һын кәрәк, —
Һыны булһын батырҙың.
Күлдең күрке ҡамыштыр,
Әҙәм күрке намыҫтыр, —
Намыҫы булһын батырҙың.
Ирмен тигән егеттең
Әйткән һүҙе хаҡ булыр,
Күңеле уның аҡ булыр,
Яман эштән һаҡ булыр.
Атҡа менгән ил гиҙәр,
Батыр егет ил биҙәр, —
Батыр тигән шул булыр,
Шундай егет тиң булыр.
Батыр Барсынға килһен,
Барсынға көрәш бирһен,
Көрәш тотҡан батырға,
Еңеп сыҡҡан батырға
Барсын йөрәген бирер.

Барсынһылыуҙың үҙе һайлап кейәүгә сығыуға ниәт тотоуы Әйләр ханға ишетелә. Атаһы ҡыҙын саҡыртып алып, борондан килгән йоланы боҙорға ярамағанлығын әйтә. Әммә Барсынһылыу һаман үҙенекен итә: «Ханға ла, батшаға ла бармайым. Кем дә кем мине көрәшеп еңә, шуға кейәүгә барасаҡмын!» — ти.

Әйләр хан ҡыҙының ихтыярына ҡаршы килмәй.

Шунан Барсынһылыу ҙур майҙан алып, үҙен көрәшеп еңгән егеткә кейәүгә сығасағы хаҡында тирә-йүнгә хәбәр тараткан, ти. Был хәбәрҙе ишетеү менән, төрлө ырыу бәһлеүәндәре Әйләр хан иленә, Барсынһылыуҙы еңеп, үҙҙәренә кәләш итеп алмаммы тип өмөтләнеп, ағыла башлаған, ти. Барсынһылыу әхирәттәрен эйәртеп, бейек тау башына менеп, аҡ сатыр ҡороп, шунда йәшәй башлай. Барсынһылыу үҙен көрәшкә саҡырған бер бәһлеүән егетте күтәреп һауаға сорғотоп тик тора икән. Шулай итеп, күп ил бәһлеүәндәре Барсынһылыуҙы еңә алмай ҡырыла икән. Был хәлде ишетеп ҡалған Алпамыша әсәһенән:

— Мин шул ҡыҙҙы көрәшеп еңеп алып ҡайтайым, ризалығыңды бир? — тип һорай. Әсәһе:

Барма, балам, барма, балам:
Ҡурайсының ҡулы өҙөлгән,
Көрәшсенең биле өҙөлгән,
Барма, балам, барма, балам! — ти.

Алпамыша:

Барсынһылыу майҙанына
Барам, әсәй, барам, әсәй,
Батыр ҡыҙҙы көрәш һалып
Алам, әсәй, алам, әсәй, — ти.

Алпамыша бик ныҡ үтенгәс, әсәһенең күңеле йомшарып китеп, юлға сығырға ризалығын биргән, ти. Алпамыша юлға сығыу өсөн әсәһенән ат һорай.

«Өйөрөмдә һине күтәрерлек йылҡы юҡ. Ҡолтаба ағайыңа элек бер тай биргәйнем, шуны барып һорап ҡара», — тип өйрәтеп ебәрә. Һеңлеһе Ҡарлуғас уға алтмыш ҡолас оҙонлоғо ебәк арҡан ишеп бирә. Алпамыша Ҡолтаба ағаһына барып:

Ҡолтаба ағай, Ҡолтаба ағай,
Ҡолйерәнде бирсе, ағай, бирсе, ағай,
Туғай тулы туры йылҡы,
Ялан тулы ҡола йылҡы
Һиңә бирәм, ағай, бирәм, ағай, — ти.

Ҡолтаба:

Туғай тулы туры йылҡың,
Ялан тулы ҡола йылҡың
Үҙеңә булһын, үҙеңә булһын,
Өйөр башы Ҡолйерәнде
Бирмәйем, энем, бирмәйем, энем, — ти.

Алпамыша:

Ҡолтаба ағай, Ҡолтаба ағай,
Ҡолйерәнде бирсе, ағай, бирсе, ағай.
Көтөү, көтөү, һыйырҙарым,
Кәртә тулы һарыҡтарым
Һиңә булһын, ағай, булһын, ағай! — ти.

Ҡолтаба:

Көтөү-көтөү һыйырҙарың,
Кәртә тулы һарыҡтарың
Үҙеңә булһын, үҙеңә булһын,
Өйөр ҡото Ҡолйерәнде
Бирмәйем, энем, бирмәйем, энем, —

тип ризалығын бирмәй.

Алпамыша:

Ҡолтаба ағай, Ҡолтаба ағай,
Ҡолйерәнде бирсе, ағай, бирсе, ағай,
Мине тапҡан ҡарт әсәмде,
Ҡарындашым Ҡарлуғасты
Һиңә фиҙа ҡылам, ағай, ҡылам ағай! — ти.

Шул һүҙҙе ишетеү менән, Ҡолтаба шатлығынан ҡысҡырып ебәрә. Ул Алпамышаға ебәк арҡан менән өйөрҙән Ҡолйерәнде тотоп алырға ҡуша.

Алпамыша Ҡарлуғас ишкән ебәк арҡан менән Ҡолйерәнде тоторға китте, ти. Өйөргә килеп, Ҡолйерәнгә арҡан ташлап, муйынынан быуып алған икән, Ҡолйерән, үрле-ҡырлы һикереп, тирә-яҡтағы ағастарҙы үләндәй иҙеп, Алпамышаны күккә сөрөтоп, ергә һуға башланы, ти. Бик оҙаҡ алышҡандан һуң, Алпамыша Ҡолйерәнгә йүгән һалып, ауыҙлыҡлап алды, ти. Алпамыша Ҡолйерәнгә менеп, Ҡолтабаның тирмәһе ауыҙына килеп:

Ҡолтаба ағай, Ҡолтаба ағай,
Бирсе ҡулың, бирсе ҡулың,
Бәхиллегең алайымсы, алайымсы, — ти.

Ҡолтаба ҡулын биргәс, Алпамыша уның ҡулын шытырлатып ҡыҫып алды, ти. Теге, түҙә алмайынса:

Алла, ҡулым, сыҡты йәнем,
Ебәр, энем, ебәр, энем, — ти.

Алпамыша тағы ла нығыраҡ ҡыҫа.

Ҡолтаба:

Алла, ҡулым, сыҡты йәнем,
Ебәр, энем, ебәр, энем,
Туғай тулы туры йылҡың,
Ялан тулы ҡола йылҡың,
Көтөү-көтөү һыйырҙарың,
Ҡәртә тулы һарыҡтарың,
Һине тапҡан ҡарт әсәйең,
Ҡарлуғас атлы ҡарындашың
Үҙеңә булһын, энем, үҙеңә булһын! —

тип Ҡолйерәндең хаҡынан баш тарта.

Шунан һуң ғына Алпамыша Әйләр хан иленә юлға сыға. Килә торғас, ул бейек тау башында, көрәшергә килеүсе батырҙарҙы көтөп, бөйөрөнә таянып торған Барсынһылыуҙы күреп ҡала. Алпамыша тау аҫтынан Барсынһылыуға:

— Йә үҙ иркең менән төшөп, минең менән китәһең, йә һине көрәшеп еңеп алып ҡайтам! — тип ҡысҡыра.

— Ә, улаймы ни, мә, еңеп алып ҡайт! — тип Барсынһылыу тирмән ташы ҡәҙәрле ташты тау башынан Алпамышаға тәгәрәтеп ебәрә. Ер тетрәтеп, ҡолаҡ тондороп тәгәрәгән ташты, килеп етер-етмәҫтән, Алпамыша йүгереп барып, кире тибеп ебәргән, ти. Ул таш Барсынһылыу баҫып торған тау түбәһен осортоп алып киткән, ти. Барсынһылыу саҡ-саҡ ҡына ҡотолоп ҡала. Ул асыу менән Алпамышаға өй ҙурлығы ташты тәгәрәтеп ебәргән, ти. Алпамыша йәнә йүгереп барып тибеп ебәреүе була, таш кире осоп барып, бейек тауҙың яртыһын айырып алып китә, ти. Барсынһылыу көс-хәл менән тауҙың икенсе яртыһында тороп ҡала.

Алпамыша Барсынһылыу эргәһенә күтәрелә лә көрәш һорай. Көрәшә башлайҙар. Алпамыша Барсынһылыуҙы биленән алып һауаға сөйөп ебәрә лә, ергә төшөп имгәнмәһен тип, ҡулына тотоп ала. Шул ваҡыт ҡыҙ: «Мин һинеке, һин минеке», — тип егеткә башын эйә.

Алпамыша менән Барсынһылыу тау башына ҡоролған сатырҙа байтаҡ бергә йәшәйҙәр. Барсынһылыу, ғоманлы булғас ҡына, Алпамышаны ата-инәһе менән таныштырмаҡсы булды, ти. Алпамыша Барсынһылыуҙы Ҡолйеранена менгәштереп, Әйләр хандың йәйләүенә сапты, ти. Барсынһылыу Алпамышаны Әйләр хандың ун ике ҡанатлы аҡ тирмәһенә алып инә лә атаһына:

Торсо, атай, торсо, атай,
Тороп, билең быусы, атай, быусы, атай!
Өйгә кейәү алып килдем,
Тороп, ҡулың бирсе, атай, бирсе, атай!
Арҡа тулы ала бейә,
Туғай тулы туры бейә,
Бирнә итеп бирсе, атай, бирсе, атай! —

тип һамаҡланы, ти.

Әйләр хан:

— Ҡит, минең кейәүгә биргән ҡыҙым да, кейәүем дә юҡ! — ти.

Барсынһылыу, әсәһенә ҡарап:

Торсо, әсәй, торсо, әсәй,
Күҙ йәшемде күрсе, әсәй, күрсе, әсәй!
Һеҙгә кейәү алып килдем,
Тороп, ҡулың бирсе, әсәй, бирсе, әсәй!
Арҡа тулы ала бейә,
Туғай тулы ҡола бейә,
Бирнә итеп бирсе, әсәй, бирсе, әсәй! —

тип илаулап һамаҡлаған икән, әсәһе Әйләр ханға:

— Берҙән-бер ҡыҙыбыҙҙҙың күҙ йәшен түктермәйек, тороп кейәүгә ҡулың бир! — ти.

Әйләр хан ыңһарлай-ыңһарлай ғына тороп, Алпамышаға ҡулын биргән, ти. Әйләр хан шунан Алпамыша менән Барсынһылыуға аҡһаҡалдар күрмәгән, ата-бабалар ишетмәгән данлыҡлы туй яһап ташлай.

Алпамыша Барсынһылыуҙы иленә алып ҡайтып, ҡайғы килһә, бергә ҡайғырып, шатлыҡ килһә, бергә шатланып, донъя көтөп ятҡанда, сапҡын килеп, Бүҙәр хандың яу менән килеүен хәбәр итә. Баҡһаң, ул Барсынһылыуҙы улына һоратып ала алмағас, яу менән алмаҡ булған икән.

Алпамыша Ҡолйерәнгә атланып, алмас ҡылысын тағып, уҡ-яйын алып, әсәһе, һеңлеһе, Барсынһылыу менән хушлашып, яу ҡайтарырға киткән, ти.

Бүҙәр хан ер яуын алған бик ҙур ғәскәр менән килә икән. Алпамыша алмас ҡылысы менән дошман ғәскәрен ҡырырға тотондо, ти. Өс көн, өс төн һуғышҡандан һуң, Алпамышаның көсөнә сыҙамай, Бүҙәр хан ғәскәре сигенгән, ти. Батыр бер аҙ ял итеп тә өлгөрә алмай ҡала, Бүҙәр хан йәнә ғәскәр туплап, һөжүмгә күсә. Алпамыша ажарланып тағы ла дошман яуына ташлана. Һуғыш бик ҡаты була. Ҡан даръя булып аға. Бик оҙаҡ һуғышҡандан һуң, Бүҙәр хан ғәскәрҙәре тырым-тырағай ҡасып бөтәләр.

Алпамыша Ҡолйерәнен кешәнләп ебәрә* лә йоҡларға ята. Ул, ғәҙәте буйынса, бер йоҡлаһа, алты көн, алты төн йоҡлай торған булған. Унын йоҡоға китеүе менән, Бүҙәр хандың шымсылары килеп тә етәләр. Ҡолйерән күпме генә эйәһен уятыр өсөн кешнәһә лә, сапсынһа ла, Алпамыша уянмай. Шымсылар тиҙ генә Бүҙәр ханға батырҙың үлек кеүек йоҡлап ятыуын хәбәр итәләр. Бүҙәр хан иҫән ҡалған ғәскәрен туплап килеп, Алпамышаны ҡорос сынйырҙар менән сырмап, бығаулап арбаға һалып алып ҡайтып китә. Ул батырҙы ер аҫтындағы тәрән зинданға һалдыра, ә Ҡолйерәнде таш һарайға бикләтә.

Бер саҡ Алпамыша уянып китһә — аяғы-ҡулы бығаулы, ҡорос сынйыр менән сырмаулы, тәрән соҡор эсендәге ҡараңғы зинданда ятҡанлығын күрә. Сынйырҙан һис кенә лә ысҡынырлыҡ хәл юҡ, ысҡынғанда ла, соҡорҙан сығырлыҡ түгел икән. Бик оҙаҡ аҙаплана торғас, ул ике ҡулын ысҡындырып ала. Бүҙәр хан кешеләре, Алпамыша имеп ятһын тип, зинданға бер кәзә менән бер йөк бесән ташлаған булғандар икән. Алпамыша шуның һөтөн эсеп кенә көн итергә мәжбүр була.

Берҙән-бер көндө Алпамыша салкан төшөп моңланып ятҡанда, һауанан бер төркөм ҡыр ҡаҙҙары осоп барғанын күреп ҡалып:

Ҡырасай ҡаҙым, ҡырасай ҡаҙым,
Ҡилсе, ҡаҙым, килсе, ҡаҙым,
Ҡанатыңа хат яҙайым,
Тыуған илгә, кәләшемә
Китһәңсе, алып, китһәңсе алып, —

тип әйткән икән, ҡаҙҙар:

Күлдә булһаҡ, күлдә ҡырҙың,
Ҡырҙа булһаҡ, ҡырҙа ҡырҙың, —
Ята бир, алып, ята бир, алып? —

тип осоп китеп барғандар, ти.

Теге ҡаҙҙарҙан артҡа ҡалып ҡына яңғыҙ ҡаҙ осоп бара икән. Алпамыша уны күреп ҡала ла:

Ҡырасай ҡаҙым, ҡырасай ҡаҙым,
Ҡанатыңа хат яҙайым,
Тыуған илгә, ҡәләшемә
Китһәңсе алып, китһәңсе алып, —

тип әйтеүе булған, ҡаҙ, ҡаңғылдап, зиндан эсенә ҡанатын йәйеп кенә килеп төшкән, ти. Алпамыша ҡулын ҡырҡып, ҡаны менән ҡаҙ ҡауырһынына хат яҙып: «Минең илгә осорһоң, унда ун ике ҡанатлы аҡ тирмәне күрерһең, шул тирмә тәңгәленә еткәс, хат яҙылған ҡауырһынды ташларһың!» — ти.

Ҡыр ҡаҙы, Алпамыша йәйләүенә етеп, әйләнеп осоп йөрөгәндә, ун ике ҡанатлы аҡ тирмәнән бер малай йүгереп сығып уҡ менән тоҫҡаған мәлдә, ҡаҙ, ҡапыл ҡурҡып, хатты төшөрөп ебәрә. Был малай Алпамышаның үҙе юҡта тыуып үҫкән Айҙар исемле улы булған икән. Хат яҙылған ҡауырһын елфер-елфер итеп аҡ тирмә тәңгәленә төшмәй, бер яҡ ситтәрәк торған Ҡолтабаның ҡара тирмәһе алдына килеп төшә. Ҡолтаба хатты уҡый ҙа эштең ниҙә икәнен һиҙеп ала. Тик ул быны бер кемгә лә белдермәй.

Алпамыша оҙаҡ ҡайтмай торғас, Әйләр хан уны эҙләргә үҙенең сапҡындарын ебәргән икән. Сапҡындар бик оҙаҡ йөрөй торғас, Бүҙәр хандың иҫәпһеҙ-һанһыҙ ҡырылып ятҡан һуғышсыларына тап булғандар, ти. Улар шулай уҡ бер ағас төбөндә Алпамышаның үҙенән башҡа бер кем дә тарта алмаҫ ике ҡолас оҙонлоғондағы мөгөҙ янын, алмас башаҡлы уҡтарын табып алып ҡайталар.

Сапҡындар Алпамышаны үлгән тигән хәбәр тараталар. Барсынһылыуҙың был хәбәргә ышанғыһы килмәй, көтөргә була.

Ҡолтаба, Алпамыша юҡлыҡтан файҙаланып, уның бөтә байлығына хужа булып ала, Ҡарлуғасты хеҙмәтсе итә, Барсынһылыуҙы үҙенә ҡатынлыҡҡа алмаҡ була. Бер туҡтауһыҙ Барсынһылыуға яусылар ебәреп тора. Ә Барсынһылыу һаман да ризалыҡ бирмәй икән. Туйҙы һуҙыу өсөн, ул бер хәйлә уйлап таба: «Кем дә кем Алпамыша янынан алтын йөҙөктө уҡ менән үтә ата, шуға кейәүгә барам!» — ти. Сөнки ул яндың керешен Алпамышаның үҙенән башҡа бер кемдең дә тарта алмаҫын яҡшы белгән була.

Әйләр хан, ҡыҙының теләгенә риза булып, ҙур майҙан аса. Тирә-яҡтан бик күп уҡсылар килеп, Барсынһылыуҙың бейеккә элеп ҡуйған алтын йөҙөгөнә атмаҡ булалар, ләкин һис кенә лә Алпамышаның янын тарта алмайҙар. Шулай итеп Барсынһылыу, туй ваҡытын юрый һуҙып, Ҡолтабаны алдай торһон, беҙ киләйек Алпамыша әхүәленә.

Алпамыша, ебәргән хатына яуап-хәбәр булмағас, бик ҡайғырған, ти. Ул, һәр саҡ итек ҡуңысында йөрөй торған ҡурайын алып, бик моңло итеп тарта торған булған.

Бүҙәр хандың өс ҡыҙы була. Хан ҡыҙҙары бер көн ҡурай тауышын ишетеп ҡалалар ҙа зиндан алдына киләләр. Ҡыҙҙар килеп өҫтән зинданға ҡараһалар, шул хәтлем мөһабәт баһадир егеттең ҡурай тартып ятҡанын күрәләр. Алпамыша ҡыҙҙарҙы күреп ҡала ла уйнауҙан туктай.

Ҡыҙҙар:

Алпамыша батыр, баҡһаңсы,
Ҡурайынды тағы тартһаңсы,
Бер-ике көй бүләк итһәңсе,
Хан ҡыҙҙары күңелен күрһәңсе? —

тип инәләләр. Ләкин Алпамыша уйнамай, ялындыра: «Һеҙгә иркенләп ҡурай уйнай алмайым: ҡул-аяғым бығаулы, аслыҡтан йонсоғанмын, күңелегеҙҙе асырға форсатым юҡ!» — ти. Был көндө ҡыҙҙар Алпамышаға бер ярҙам итә алмай ҡайтып китәләр. Хандың бәләкәй ҡыҙы, атаһының һандығынан бик күп алтын аҡсаларын алып, йәшерен рәүештә кешеләр яллап, зинданға туралап ер аҫтынан юл ҡаҙыта. Ул көн дә ошо ер аҫты юлы менән зинданға килеп йөрөй башлай. Килгән һайын Алпамышаға ашарға, эсергә аҙыҡ алып килә. Алпамыша һимереп, көсләнеп китә. Берҙән-бер көн Алпамыша ҡыҙға: «Әгәр мине бығауҙан ҡотҡарырға теләһән, атайыңдын алтын аҡса һандығына бикләнгән алтын һаплы алмас ҡылысымды алып кил. Шул ҡылыс булмай тороп, бығауҙар менән бер нәмә лә эшләй алмабыҙ», — ти.

Ҡыҙ ҡылысты алып килә. Алпамыша алмас ҡылыс ярҙамында бығауҙарҙан ҡотола. Ул, бығауҙан ҡотолғас та, ун биш көн самаһы зинданда ята. Сөнки бығауҙар тәнгә бик нык батҡан, тәрән яралар яһаған була. Хан ҡыҙы, батырҙың яралары уңалғас та:

— Һине бынан нисек сығарырға мөмкин? — тип һорай.

Алпамыша:

— *Һин мине сығара алмаҫһың*. Бына мин һинә ҡулъяулығымды бирәм. Таш һарайҙа минең Ҡолйерәнем бикле торор. Ошо ҡулъяулыҡты таш һарайҙың алдына алып барып яндыр. Ҡолйерән сыҡһа, мине ҡотҡарыр! — тип ҡулъяулығын бирә.

Ҡыҙ Алпамышаның ҡулъяулығын таш һарай алдына алып барып яндыра. Ҡолйерән, яулыҡ еҫенән эйәһенең иҫәнлеген һиҙеп, елкенеп китә. Ул таш һарайҙың тимер ҡапҡаларын емерә тибеп сығып, зиндан алдына килеп баҫа. Ҡолйерәндең муйынында Ҡарлуғастың ишкән алтмыш ҡолас ебәк арҡаны була. Хан ҡыҙы ебәк арҡандың бер осон ат муйынына бәйләп икенсе осон зинданға төшөрә. Алпамыша ебәк арҡанға йәбешеп зиндандан сығып, алмас ҡылысын тағып, Ҡолйерәненә менеп, туп-тура хан һарайына юл тота. Ул, Бүҙәр хан алдына барып: «Эй, Бүҙәр хан, яуызлығың өсөн

бына ошо ерҙә башыңды ҡырҡыр инем, тик миңә мәрхәмәт күрһәткән өс ҡыҙың хаҡына ғына һау ҡалдырам!» — тип сығып китә.

Алпамыша үҙ иленә ҡайтып килгәндә, йылҡы өйөрө тап була. Ҡараһа, таныш өйөр кеүек күренә быға. Ул йылҡы көтөүсеһенән:

— Кем көтөүе был? — тип һорай.

— Элек Алпамышаныҡы ине, хәҙер Ҡолтабаныҡы, — ти көтөүсе.

— Һиңә Алпамыша арыу инеме, әллә Ҡолтабамы? — тип һорай батыр.

— Ҡолтаба арыу. Алпамыша хан булған саҡта, мин ябай көтөүсе, Ҡолтаба баш йылҡысы ине. Алпамыша үлгәс, мин баш йылҡысы, Ҡолтаба хан булды! — тигән көтөүсе.

Алпамыша көтөүсене башына бер сиртеп үлтерә лә ары китә. Килә-килә торғас, Алпамыша һыйыр көтөүенә тап була.

— Был кем көтөүе? — тип һорай ул көтөүсенән?

— Ҡолтабаныҡы, — ти көтөүсе. Ул үҙе бау ишеп ултыра икән.

Алпамыша:

— Нимәгә бау ишәһең? — ти.

Көтөүсе:

— Был бау менән Алпамыша еңһә — Ҡолтабаны аҫыр. Ҡолтаба еңһә — Алпамышаны аҫыр! — ти.

Алпамыша быныҡ да башына бер сиртеп үлтерҙе лә юлына китте, ти. Бер аҙ барғас, ул ҡуй бағып йөрөүсе бер малайға осрай. Ҡуйсы малай бер ҡулына туҡ эсәк, икенсе ҡулына оса майы тотоп һурып йөрөй, ти. Алпамыша малайҙан:

— Бөгөн берәй туй барамы әллә? — тип һорай.

Малай:

— Йәйләүҙә, алтын йөҙөк аша уҡ атып, Барсынһылыуҙы алыу өсөн бәйге бара. Туй өсөн Ҡолтаба Алпамышаның һимеҙ-һимеҙ йылҡыларын, ҡуйҙарын һуйҙыртты. Миңә лә әҙерәк өлөш сыҡты, — тигән малай. Ә үҙенең күҙҙәренән мөлдөрәп йәш аҡты, ти. Алпамыша, төҫмөрләп, ҡуйсы малайҙың үҙ улы булыуын таный, ләкин уға үҙен танытмай. Ул үҙ кейемен малайына кейҙереп, уның ҡырҡ ямаулы иҫке кейемен кейә. Шулай итеп, ул көтөүсе ҡиәфәтендә Барсынһылыу йәйләүенә юл тота. Йәйләүгә етер саҡта ул атын кешәнләп ҡалдыра ла туп-тура бәйге барған майҙанға килә. Майҙанда бейек ағасҡа алтын йөҙөк элек ҡуйғандар ҙа Алпамышаның яны менән егеттәр уҡ атып маташалар икән. Тик уларҙың береһе лә ике ҡолас оҙонлоғондағы мөгөҙ янды йүнләп тарта алмай, ти.

Алпамыша кеше араһынан ҡыҫылып алға сыға ла тәхеттә бик эре генә ултырған Ҡолтабанан:

— Ҡолтаба ағай, ҡана мин дә бер атып ҡарайым әле? — ти.

— Кит, кит, йолҡош! Һинән былайыраҡ егеттәр ҙә ата алмайҙар әле, — тип ҡыуып ебәрә. Тағы бер нисә мәртәбә һорағас ҡына, уға уҡ-ян бирәләр. Алпамыша үҙенең уғы менән янын күреп, илап ебәрә. Ә үҙе, кешеләр һиҙмәһен тип: «Һай, атайымдан ҡалған уҡ-ян!» — тип һөйләнгән була. Шунан янын еңел генә күтәреп, йөҙөккә атып ебәрә. Алтын йөҙөк зыңғыр итеп икегә бүленеп төшә. Шул ваҡыт Ҡолтаба көтөүсе булып кейенгән егеттең Алпамыша икәнен танып ала ла:

Беләгемдә ҡороғом,
Ҡайҙа минең боронғом, —

тип йылҡы көтөүе яғына йүгереп китә. Алпамыша икенсе уҡ алып, Ҡолтабаны атып үлтерә. Ситтән ҡарап торған Барсынһылыу менән Ҡарлуғас, Алпамышаның ҡайтҡанлығын күреп, йүгереп килеп ҡосаҡлап алалар. Шул ике арала атаһының кейемен кейенгән Айҙар ҙа килеп етте, ти. Алпамышаның шатлығының сиге булманы, ти. «Мин бында әсәйемде генә күрмәйем!» — ти ул.

Баҡтиһәң, ул, Барсынһылыу бәйге ҡороп кейәүгә сығырға йөрөй, тип үпкәләп, өйөндә бикләнеп ята икән. Барсынһылыу, Алпамышаны эйәртеп, ҡәйнәһе йортона килеп:

— Ҡәйнәм, ишек ас! — ти.

— Ҡит, ары йөрө! Иреңә хыянат итеп йөрөйһөң, һинең менән һөйләшмәйем! — ти уға ҡәйнәһе.

Шунда Барсынһылыу, һамаҡлап:

Торсо, ҡәйнәм, торсо, ҡәйнәм,
Тороп, билең быусы, ҡәйнәм,
Илдең ҡото Алпамыша
Илгә ҡайтты, күрсе, ҡәйнәм, —

тип әйтте, ти.

Был һамаҡты ишетеү менән, ҡәйнәһе ишекте шар асып ебәрҙе, ти. Алпамыша әсәһе менән күреште, ти. Батырҙың илгә иҫән-һау ҡайтыу хөрмәтенә өс көн, өс төн туй яһайҙар. Ҙур майҙан асып, алыҫтан ат саптыралар, яҡындан тай саптыралар, сәсәндәр ярыштыралар, батырҙар көрәштерәләр, таҙҙар төкөштөрәләр[2]. Ат сапҡанда, Ҡолйерән башҡа аттарҙы уҙып килә, батырҙар көрәштергәндә, Алпамыша еңеүсе булып сыға, таҙҙар төкөштөргәндә, Алпамышаның улы Айҙар беренселекте ала.

Алпамыша ҡайтып хан булғас, илдә ғәҙеллек, тыныслыҡ урынлашып, халыҡ иркенләп йәшәп ҡалды, ти.



## АЛТЫЙӘШӘР АЛПАМЫША

*(Беренсе вариант)*

Бик борон замандарҙа Байдәүләт тигән бер аҡһаҡал була. Бының Барсынһылыу тигән берҙән-бер ҡыҙы була. Был ҡыҙ үҙе сәсән, үҙе матур, бик батыр ҙа була. Алты батман ташты орсоҡ урынына сорғотоп йөрөткән. Был ҡыҙҙы төрлө ерҙәрҙән төрлө аҡһаҡалдар һораһа ла, ҡыҙ риза булмай, кейәүҙе һайлауҙы үҙ теләгенә ҡуйҙырған.

Берҙән-бер көндө Хөнәле тигән хан үҙенә өсөнсө бисәлеккә алырға тип яусы ебәрә. Ҡыҙҙың бөтә теләктәренә лә риза булырға һүҙ бирә. Ҡыҙ, атаһына әйтеп, бик ҙур майҙан йыйҙырырға була. Был хәбәр ат-хат еткән ергә тарала. Ул хәбәр, атаһынан алты йәштә тороп ҡалып, атаһы урынына алты йәшендә аҡһаҡал булған Алпамышаға ла ишетелә. Алпамыша үҙенең бер туған ҡәрендәше Баллышәкәр менән, икеһе ике ат менеп, майҙанға китәләр. Ат ҡарауға кәрәк булыр тип, үҙ ауылдарының йылҡы көтөүсеһе Ҡолтабаны ла үҙҙәре менән бергә алалар. Өсәүләп барып еткәндә, бөтә тирә-яҡтан аҡһаҡалдар йыйылған була.

Барсынһылыу, аҡбуҙ юрға менеп, күлдәксән генә, билен суҡлы билбауҙар менән быуып, сикә сәстәрен ваҡ толомдарға, елкә сәсен айырып ике толомға үреп, остарын ебәк менән һапланған ынйылар менән биҙәп, майҙан уртаһына сыға. Майҙанды әйләнеп, бөтә батырҙарға күҙ һала. Килгән бай балалары, аҡһаҡалдар, аҡһаҡал балалары бөтә байлыҡтарын сағылдырырлыҡ кейенгәндәр, аттарын биҙәгәндәр. Алпамыша уларға ҡарағанда ярлы, тик аҡһаҡаллыҡты атаһы ла, үҙе лә батырлыҡ үңгәненә һалып алып китәләр[3].

Шуға күрә уларҙың ырыуҙарын «үкһеҙ», байҙарға ҡәҙер итмәй торған ырыу тип йөрөткәндәр. Үҙ ырыуҙарында Алпамышаны ла, атаһын да өлөшлө кешеләрҙән тип йөрөткәндәр. Шуға күрә, майҙанда халыҡ күҙендә ярлы күренһә лә, үҙенең көсөнә Алпамыша ышанған.

Майҙан асыла. Барсынһылыу алты батман ташты майҙан уртаһына сығарып ҡуя ла батырҙарҙы саҡыра, ҡайҙа илтеп ҡуйырға урын күрһәтә. Күп кенә батырҙар уны урынынан ҡуҙғата алмайҙар. Тирә-яҡта дан тотҡан Хөнәле ташты күтәреп алып китә, ләкин ҡыҙ билдәләгән урынға илтеп еткерә алмай, туҡырап ҡала. Халыҡ:

— Ярағанǃ.. Шулай күтәргәс тә ярарǃ.. Уның саҡлы хәҙер пәйғәмбәрҙән бүтән күтәрә алмаçǃ Ярай, ярайǃ.. Ҡыҙ, бүләгенде Хөнәле батырға бирǃ.. — тип зыу килә.

— Ҡыҙҙын батыр менән көрәшәһе бар, — тигән тауыштар ҙа ишетелә.

Халыҡ араһынан Алпамыша сығып, ташты кире килтереп урынына ҡуйыуҙы аңлатып һүҙ аса ла шау-шыуҙы туҡырата.

Халыҡ Алпамышаның төç-башына ҡарап бик ғәжәпләнә. Булдыра алмаç; ҡарама беләккә, ҡара йөрәккә тигән төрлө яҡлашыу, кире ҡағыу һүҙҙәре ишетелә. Ҡыҙ, Алпамышаның теләген ҡабул итеп:

— Егет, дәрт итеп, ат тирләтеп килгән, наçыры ҡоромаһын![14] — тип уға ташты кире килтереп, күрһәткән урынына илтеп ҡуйырға ҡуша. Алпамыша ташты бер ҙә көсәнмәй генә урынынан күтәреп ала ла, бер яҡ ҡултығына ғына ҡыçтырып, ҡыҙға ҡарап:

— Һылыу ҡыҙǃ Бер ҡултығым бушǃ Тағы ла ташыңмы, берәй батырыңмы бар? Бер юлы күтәреп алып барайымǃ — тигәс, бөтә халыҡ аптырап ҡала.

Алпамыша туҡталмай ташты кире күтәреп килтереп урынына ҡуя. Халыҡ араһында аптыраулы һөйләшеүҙәр, бының ҡайҙан икәнен һорауҙар китә. Байҙар, бейҙәр Алпамышаның кәмһетелгән бер ырыуҙан икәнен белеп сырайышалар. Кәмһетелгән халыҡтар аяҡҡа баçалар ҙа ҡыҙҙың егет менән көрәшеүен һорайҙар. Ҡыҙ көрәшә, егет йыға. Хөнәле батыр егет менән дә, ҡыҙ менән дә көрәшеүҙе иртәгәгә кисектерә. Ҡыҙ атаһына барып:

Торсо, атай, торсо, әсәй,
Тороп, ҡулың бирсе, атайǃ
Менеп килгән Аҡколаһын
Ҡалыным тип алсы, атайǃ — ти.

Иптәш ҡыҙҙары
Барсынһылыуға:

Сәсән бала, сәсән бала,
Беҙҙең өсөн баһа даның,
Нөгәр-нөгәр* ирҙәр йыйып,
Ил яғалай китте даның.

Майҙанда дан алған йүгерек аттай,
Ҡыйғыр ыласын һымаҡ осҡан ҡоштай.
Алдында майҙан алған егет тора,
Күктәге яңғыҙ янған таң сулпандай.

Барсынһылыу
атаһына килеп:

Тауҙар ашып, сайға төшөп, бында килеп,
Намыç сәскән майҙанымда көс һыналды.
Ҡырҙағыны ҡырҙа ҡырған баһадир егет
Майҙанымда ир сыҡмаçлыҡ ир һаналды.

Торсо, атай, торсо, әсәй,
Тороп, ҡулың бирсе, атай!
Менеп килгән Аҡколаны
Ҡалыным тип алсы, атай!

Атаһы ҡыҙына:

Атаң Байдәүләт[5] бирҙеме уға,
Әсәң Фатима бирҙеме уға?
Сәсән бала, уҫал бабай биҙәү була,
Үҙең табып, үҙең һайлап барҙың уға.

Барсынһылыу:

Хушсы, атай, хушсы, атай,
Һуңғы теләгең әйтсе, атай.
Туғыҙ туғай күк-ала һыйырың, —
Ул да булһа, үҙеңә булһын.

Туғыҙ туғай ҡара йылҡың, —
Ул да булһа, үҙеңә булһын,
Ҡобасай сәсән менән йәйем, —
Ул да булһа, һиңә булһын,
Бәғерем тигән йылы һүҙең,
Ул да булһа ситкә булһын;
Тыуар ҡыҙың өсөн көйләп ҡалып биргән
Бәхет ҡошоң — Хөнәле бай, ул да булһа,
шуға булһын.

Илай-илай, күҙем шешер,
Һулай-һулай, тешем төшөр,
Һулағанда, аһым төшөр,
Илатмағыҙ мин баланды.

Иптәш ҡыҙҙары Байдәүләткә инәлеп, кейәүҙе ҡабул иттереү өсөн, түбәндәге йырҙы йырлайҙар:

Балағыҙ килде алдығыҙға,
Майҙан данлар илебеҙгә;
Майҙанда дан тотҡан егет кенә
Кейәү булды ҡыҙығыҙға.

Барсынһылыу теләп барғас,
Бәхил булып, ҡул биреңсе!
Ике шоңҡар бергә килеп,
Күҙ йәш түгә, күрегеҙсе!
Данлы итеп туй яһағыҙ,
Күрер күҙҙәр таңға ҡалһын;

Ҡаһарман егет, данлы ҡыҙ,
Икеһе лә бергә булһын.

Аталары:

Ҡара көс илдә дан булмаç,
Нәçелһеҙ беҙгә тиң булмаç.
Хөнәле хан һорап торғас,
Ҡыҙым уға биреп булмаç, —

тигән һүҙҙәрен Алпамыша менән Барсынһылыу ишеткәс, бер-бере менән етәкләшеп сығып китәләр. Хөнәле Алпамыша менән көрәшергә ҡурҡа.

Берҙән-бер көндө Байдәүләт менән Хөнәле нисек тә Алпамышаны үлтерергә уйлайҙар.

Хөнәле Алпамышаны ҡунаҡҡа саҡыртып, иçертеп йоҡлата. Ул йоҡлаһа, өс көн, өс төн йоҡлай торған була. Хөнәле быны бер зинданға яба. Ул көндө үк үлтерергә Барсынһылыу менән Алпамышаның туғаны Баллышәкәрҙән шикләнә. Барсынһылыу менән Баллышәкәр Алпамышаны юҡһынып һорашалар, бары ла, һунарға китте, тип яуап бирә. Баллышәкәр ҡайтып китә. Алпамышаның Аҡколаһы тимер һарайға бикләнгәс, Барсынһылыу ҙа уны, һунарға киткән, тип ай көтә, йыл көтә. Алпамыша һаман юҡ, Барсынһылыу уны эҙләп китә. Алпамышаның ауылына барһа, унда ла юҡ.

Барсынһылыу, атам ҡәһәре төштө, өлкәндәр һүҙен тыңламаным, тип шомлана башлай. Атаһы Хөнәлегә кейәүгә барыуын ҡабатлай. Алпамышаны үлтерергә кешеләр яллайҙар. Уны ҡырға алып китәләр. Юлда алып барғанда, Алпамышаның хәлен һорашып, ялланған кешеләр ҡыҙғаналар ҙа, үҙең сыҡһаң, ошонан сығырһың, үҙ ҡулыбыҙ менән үлтермәйбеҙ, тип, бик тәрән соҡорға һалалар.

Алпамыша тәрән соҡорҙа ятҡанда осоп барған ҡыр ҡаҙҙарының күсен күрә лә йырлай:

Ҡарасай ҡаҙым, ҡарасай ҡаҙым,
Ҡанатыңа хат яҙайым,
Барсынһылыу — һөйгән ҡыҙым,
Баллышәкәр — уң ҡанатым,
Төшөгөҙсө, мин уларға
Ҡанатыңа хат яҙайым.

Шунда түбән осоп килгән ҡаҙҙар, бының тауышын ишетеп, ҡапыл талпынған ыңғайға, ике ҡауырһын төшөп ҡала. Алпамыша бынан һыбыҙғы яһап уйнап ултырғанда, уны эҙләй сыҡҡан Баллышәкәр, аты һыуһағанға, һыу эҙләп, соҡорға ҡарап торғанда, колағына һыбыҙғы тауышы салына. Бында енме, дейеүме — йән эйәһе бар икән, ти ҙә:

Төбөң атка ай тиңәлгән
Тәрән сай*, сереҥ һөйлә:

Йөрәгеңдә кемең ята,
Сәсем бирәм, тотоп буйла, —

тип алты ҡолас ҡолан сәсен соҡорға төшөрөп ебәрә. Сәсте буйлап сыҡҡан егет ағаһы Алпамыша була. Былар ҡосаҡлашып күрешәләр, аңлашалар. Баллышәкәргә таралғы, тибенгегә тейеп йөрөгән ыштан балағынан бер тотам сепрәк йыртып бирә лә:

— Бар, Аҡколаны тап, ошо сепрәкте унын танауына еҫкәт! — тип ҡуша.

Баллышәкәр батша һарайына барып, нисек етте алай алдашып, бер ат ҡараусыға бармаҡсы булып, Аҡкола янына килә.

Аҡкола Баллышәкәрҙе күргән ыңғайға кешнәп ебәрә. Баллышәкәр сепрәкте еҫкәтә. Ат тимер ҡапҡаларҙы ватып сығып, Алпамышаны эҙләп китә. Барып таба. Унын артынан Баллышәкәр ҙә барып етә. Былар үҙ илдәренә ҡайталар. Ул саҡта уның бөтә донъяһына, малына, иленә, Барсынһылыуға Хөнәле хужа булып көн итә торған булған.

Был ҡайтып, Хөнәлене лә, Барсынһылыуҙы ла үлтереп, үҙ ырыуына баш булып китә.



# АЛПАМЫША

*(Икенсе вариант)*

Борон-борон заманда бер әбей менән бабай булған, ти. Бабайҙың исеме Олтанбей, әбейенең исеме Бикә булған. Былар ашлыҡ сәсеп, мал көтөп, ағай-энеләре менән бик иркен торғандар, ти.

Бер заман Бикә ауырға ҡалған була. Әбей бик ҡеүәтле була, бабай менән бергә ашлыҡ сәсергә йөрөй. Ашлыҡты утарға ваҡыт килеп етә. Бикәнең көнө етеп, ауырыҡһынып ултыра. Олтанбей ҡарт:

— Әбей, ашлыҡ утарға ваҡыт етте. Бөгөн китербеҙ, — ти.

Бикә, ауырып ултырғанын әйтмәй, бабай менән ҡырға китә. Ҡырҙа Бикә, хәле ауырая башлағас:

— Бабай, бар, йәһәт кенә ҡайтып, ҡымыҙ алып кил, ҡымыҙ бөткән, мин бик ныҡ һыуһаным, сарсаным, — тип бабайҙы ҡайтарып ебәрә.

Бикә ситкә, ағас һалҡынына барып ята, эргәһендә берәү ҙә юҡ. Бик ныҡ, бик яман ауырытып, ир бала тыуа. Бикә бала кендеген ураҡ менән ҡырҡа, үҙе аптырай, сөнки бала харап ҙур, аҫлы-өҫлө икешәр теше бар, ти. Әсә баланы үлсәп ҡарай — ете ярым ҡарыш була. Бикә баланы ташлап китмәксе булып, уны йөҙтүбән һалһа, теге бала телгә килеп:

— Әсәй, мине мороном менән йөҙтүбән һалма, атайым килгәнсе, үлеп ҡуйырмын! — ти. Әбей яман ҡурҡа, үҙенең бер күлдәгенә төрөп, ҡырын әйләндереп һалып ташлай ҙа китә.

Бабай ҡымыҙ алып килһә, әбейе ултыра, ҡобараһы осоп, ап-аҡ булып. Бабайы һорай:

— Әллә берәй нәмәнән ҡурҡтыңмы, ҡобараң осҡан? — ти.

Бикә:

— Мине арбаға ултыртып алып ҡайт, мин ауырып киттем, — ти, бушанғанын әйтмәй, йәшерә.

Ҡайтҡас, бабай әбейенең хәлен һиҙеп, эсен һәрмәй, әбейҙән һармаҡлап* һорай:

Бөлдөк, бутам, бөлдөк, бутам!
Ҡорһағыңдағы йәш улан
Ҡайҙа, бутам, ҡайҙа, бутам?

Әбейе әйтә:

Бөлдөк, бутам, бөлдөк, бутам!
Ҡорһағымдағы йәш улан
Ҡырҙа, бутам, ҡырҙа, бутам! —

ти ҙә аршын ярым бала тапҡанын һөйләп бирә. Бабай әйтә:

— Алайһа, балуан тыуған! Атайым балуан булды, ул да шулай булырға тейеш. Әйҙә барып алып ҡайтайыҡ! — тип әбейен алып китә. Әбей алып бара ағас төбөнә:

— Ошонда бушанғайным, күлдәк ята, бала юҡ. Эт-ҡош алып киткәндер, — тип илай.

Бабай эҙләй башлай. Селек араһында йөрөһә, бер бала ултыра, шыр яланғас, ал сәскәнең һутын һурып. Ул ураҙан сыҡҡан да киткән имгәкләп, сәскәне күреп, ынтылып алған. Бер көндә бер йәшлек булған, ти.

— Атай, һаумы! — ти сабый. Әсәһенә күрешмәй. Атаһы шунда уҡ:

— Алпамыша булһын! — тип исем ҡушып, ҡыуанып алып ҡайтып китә. Ағай-энеләрен саҡырып, йыйып әйтә:

— Енгәгеҙ балуан тапты. Алпамыша тип исем ҡуштым. Дүрт теше бар, теле асылған. Аршын ярым буйы. Бер көндә бер йәш үҫә, — ти. Энеләре:

— Ҡеше күҙенә күрһәтмәгеҙ, күҙ тейер, тышҡа сығармағыҙ, — тип ҡайтып китәләр.

Алпамыша егерме биш көндә егерме биш йәшкә етеп, етмеш аршын булып китә. Бер көндө Алпамыша атаһына әйтә:

— Атай, һин бай бит, малың күп, йылҡың күп. Миңә дуҫтар кәрәк, юҡһа мине бер үҙемде ситләтерҙәр. Миңә аттар бир, мин үҙемә дуҫтар табып дуҫлашайым, — ти.

Атаһы Олтанбей риза була. Ҡырҡ балуан табып, ҡырҡына ла ат бирә, ҡырҡын да улының дуҫы итә. Шунда бер ярлы ғына кешенең балаһы — Ҡарыниле Ҡара Туҡай[6] Алпамышаға килеп:

— Миңә лә ат бирһәң ине? — ти. Алпамыша быға ла алама ғына ат бирә. Атаһының һуғыш аты булған Аҡколайҙың көмөш суҡлы йүгәнен йәшереп бирә. Ҡарыниле Ҡара Туҡай, йүкә нуҡтаһын һыпырып алып, атына көмөш суҡлы йүгән кейҙергәйне — аты һәйбәт, уйнап торған ат булды, ти.

Ҡарыниле Ҡара Туҡай, ҡыуанып:

— Бер кеше лә мине әҙәмгә һанамай ине. Бер Алпамыша, әҙәмгә һанап, мине дуҫ итте. Ғүмеремә онотмам! — тип ҡайтып китә.

Олтанбей Алпамышаның был ҡылығын белеп, йәне әсей:

— Һуғыш йүгәнемде бер йүнһеҙ әҙәмгә биреп әрәм иттең! — ти.

Алпамыша:

— Ҡырҡ беренсе дуҫым Ҡарыниле Ҡара Туҡай иң тоғроһо, иң яҡшыһы булыр, атай, йүгәнеңде йәлләмә! — ти.

Бер көндө Олтанбейҙең бер энеһе килә лә:

— Нишләп өйҙә ултыраһың егерме биш йәшеңә хәтле? Ҡайһындай балуан егет булғанһың, торһаң, түбәң күккә тейер. Әйҙә, сәхрәгә сығайыҡ! — ти. Алпамыша көлә:

— Мин егерме биш көнлөк кенә бит әле, ағай!

Хәҙер ағаһы артҡа, яланға алып сыға Алпамышаны. Алпамыша алыҫ ҡалҡыулыҡта ғәскәр кеүек күмәк халыҡ күрә.

— Ағай, был ниндәй ғәскәр, әллә яу киләме? — ти.

— Юҡ, ул яу түгел, икенсе шәһәрҙең батшаһы Әләр хан[7] үҙенең ҡыҙын кейәүгә бирә. Ҡыҙы сикһеҙ матур икән, тиҙәр. «Алтын балдаҡтан уҡ атып үткәргән егеткә генә барам», — ти икән, ти, ағаһы.

— Атайым ебәрмәҫме икән, ағай? Мин дә барыр инем! — ти.

Икәүләп ҡайталар ҙа атаһынан рөхсәт һорайҙар. Әсәһе Бикә ороша башлай:

— Ниңә ҡотортаһың баланы? Егерме биш көнлөк кенә баламды ебәрмәйем, күҙ тейер, алып барма! — ти. Алпамышаның башында тыумыштан алтын айы булған була. Болот көндәрҙә ҡояш шикелле нур һибеп торған. Йөҙө шул тиклем һылыу булған, нурҙан бөтөп торған. Алпамыша һаман ныҡыша, рөхсәт итегеҙ, ти. Әсәһе:

— Нишләп тик ултыраһың, атаһы? Ҡырҡ ат биреп, ҡырҡ дуҫ булыштырҙым, тинең, ҡырҡ дуҫын саҡырт! Ҡырҡ беренсе Ҡарыниле Ҡара Туҡайҙы үҙем барып алып киләм. Һинең энеләреңә ышанып ебәрмәйем егерме биш көнлөк кенә баламды! — ти.

Атаһы ҡырҡ дуҫын саҡырта, әсәһе Ҡарыниле Ҡара Туҡайҙы барып алып килә. Ҡырҡ дуҫтары килеп етә.

— Һаумы, һаумы, Алпамыша! — тип иптәштәре күрешәләр ҙә һин инде етмеш аршын булғанһың, беҙҙәй үҫтең. Беҙ ҙә балуан, беҙ ҙә етмеш аршын. Һин дә хәҙер беҙҙең кеүек, — тип көлөшәләр.

Бикә Ҡарыниле Ҡара Туҡайҙы алып килеп, туҫтаҡҡа ҡымыҙ һалып, иң тәүҙә Ҡарыниле Ҡара Туҡайға тоттора. Шунан башҡалары эсә. Хәҙер Ҡара Туҡай былай ти:

— Рәхмәт, еңгә! Бындай ҡымыҙҙы бер саҡта ла эскәнем юҡ ине. Һин мине әҙәмгә һанап, миңә ҡымыҙ эсерҙең. Алпамышаның юлы изге булһын! — тип аҙарынып рәхмәт уҡый. Әсәһе Алпамышаға етмеш ҡат ебәктән күлдәк кейҙерә, башына бүрек һала, күҙ тейә, тип. Алпамыша: «Эҫе бит», — тиһә лә, уның һүҙенә ҡарамай.

Алпамышаның ике ағаһы, дуҫтары килә. Олтанбей Алпамышаның ҡырҡ дуҫына бер иш кенә ҡырҡ ат бирә. Алпамыша Аҡколайҙы менә, аттарға бер һуғып, күмәкләп сығып китәләр. Әбей менән бабай оҙатып тороп ҡала.

— Бүркеңде башыңдан берүк алма! — тип ҡысҡырып ҡала әсәһе.

Бик һәйбәт бер ҡалҡыу ерҙә Әләр хан тәхетендә бисәһе менән ултыра. Батша ҡыҙы, Барсин[8], урталарында ултыра. Ян-яҡтан меңләгән халыҡ йыйылған. Бәйге бара. Егеттәр уҡ ата, әммә алтын балдаҡҡа, берәүһе лә үткәрә алмай.

Ҡапыл Барсин ырғып тора: ҡырҡ өс һыбай килә, бөтәһенән дә айырылып, уртаһында Алпамыша килә, Барсин һармаҡлай:

Атай, атай, алпа килә,
Алпа эсендә берәү килә.

Ултырҙиһә, уй һиңкетә,
Йөрөниһә, ер һиңкетә.
Ул да булһа, бераү икән, бераү икән,
Миңә булыр кейәү икән, кейәү икән! —

тип Алпамышаға ғашиҡ була.

Хан был хәлде күреп, асыуы ҡабара, ҡара һөрөм булып, артын ҡуйып ултыра, асыуланып.

Ул ике арала Алпамыша ағалары менән аттан төшә, ситкәрәк китеп. Барса халыҡ былар эргәһенә йыйнала, күрешәләр. Алпамышаның матурлығына, мөһабәтлегенә иҫтәре китеп ҡарап торалар. Батша менән Барсиндә бераүһенең дә эше юҡ. Ағалары асыу менән:

— Егерме биш йәшлек егет күрмәгәнһегеҙме? — тип ҡысҡыра.

— Батша ҡыҙына, бәйгегә тамаша ҡылырға килгәнһегеҙ бит! — тип мылтыҡ атып ебәрәләр, халыҡты тараталар. Шунан һуң Алпамышаның иптәштәре, ҡырҡ балуан, алтын балдаҡҡа тигеҙмәксе булып, уҡ атып ҡарай. Ҡырҡыһының да уғы ситкә китә. Ике ағаһы ата — тигеҙә алмай. Хәҙер Алпамыша бара ла ике ағаһынан уҡ һорай:

— Мин дә атып ҡарайым әле, — ти.

Ағаһы:

— Бынау маңҡаға ян бирегеҙ әле, тарта алһа, атып ҡараһын! — тип мыҫҡыл итә. Батша:

— Аҡколайҙарға менеп, Олтанбей яуҙарға күп сапты. Күп яуҙарҙа еңеп сыҡты, күбеһенән үлмәй сыҡты. Был йәш егет тә, минең ҡыҙымды алмаҡсы булып, атырға рөхсәт һорай, алалмаҫ! — тип ҡысҡыра.

Шул ике арала Ҡарыниле Ҡара Туҡай сабып килеп етә. «Алпамышаны бер ни эшләтеп ҡуймаһындар, йәһәт кенә алып ҡайт!» — тип уны Бикә әбей ебәргән булған. Ҡарыниле Ҡара Туҡай Алпамышаны тарткылай башлай:

— Ҡуй, юҡ менән булма, әсәң ҡайтһын тип әйтте, — ти.

Алпамыша шыбырҙай:

— Тороп тор саҡ ҡына, ваҡыт бар, ҡайтырбыҙ. Мең кеше үткәрә алманы уҡты, мин атып ҡарайым, — ти. Ағалары, Алпамышаны майҙанға алып килеп:

— Килтерегеҙ ян, уҡ, — тип ҡысҡыралар. Батша, асыуланһа ла, рөхсәт итергә мәжбүр була. Алпамыша көлә-көлә янды ала:

— Ҡана, ағайҙар, янды тота белерменме, уҡты ата белерменме? — тип кәпәсен ергә һалды. Болот көндә ҡояш балҡығандай, тирә-яҡҡа нур сәселеп китте. Бөтә әҙәм, күҙҙәре ҡамашып, хайран ҡалып тора. Батша ла, аптырап, әйләнеп ултырҙы. Алпамыша, сигә-сигә артҡа китеп, күкрәген киреп атын ебәрә — уҡ зыңлатып алтын балдаҡ эсенән үтеп китә. Мең ғаләм геү итеп ҡала. Алпамышаның янына дуҫтары, ағалары килә. Барсин ырғып төшөп:

— Барымсығым* ошо минең! — тип Алпамышаға ҡаршы йүгерә. Алпамыша Барсинды күтәреп алып, Аҡколайға менеп сабып китә. Арттарынан ҡырҡ дуҫы төшә, батша кешеләрен ебәрмәйме тип, күҙәмәләп киләләр. Ә батша, бисәһе иҫһеҙ ҡолап ятып ҡалалар. Үҙҙәренен еренә кергәс, Алпамыша менән Барсин, ҡырҙа

ҡара ҡаҙ атып, аҡҡош атып йөрөп ҡала ҡырҡ дуҫы менән. Ағалары менән Ҡарыниле Ҡара Туҡай алдан сабып ҡайтып, һөйөнсө һорайҙар. Әбей: «Ҡарыниле Ҡара Туҡай, ҡайҙа улым?» — ти. Ҡарыниле Ҡара Туҡай хәлдең нисек булғанын һөйләп бирә. Әсә: «Уңар егет шулай булыр», — ти. Атаһы һөйөнсөһөнә ике ат бирә.

Алпамыша ҡайтып килә. Дуҫтары ҡысҡыра:

— Әссәләмәғәләйкүм! Килен килә, ҡаршы алығыҙ!

Сығып киленде ҡаршы алалар, бик ҡыуана әбей менән бабай. Туй яһап, дуҫтарын ҡунаҡ иткәс, атаһы: «Һеҙ ашанығыҙ-эстегеҙ, хәҙер батшаны ризаландырайыҡ, мәһәр ебәрәйек, туғыҙ туғай тыу бейә, һәйбәт ебәк тышлы инә туны, Аҡҡолайҙы батшаның үҙенә бирерһегеҙ», — тип Аҡҡолайҙы егеп, Барсинды, Алпамышаны ултыртып, ебәрәләр батшаға. Ҡырҡ дуҫы ла оҙатып бара. Аҡкейек тигән тау башына менгәс, туҡтайҙар. Алпамыша ҡырҡ дуҫын бороп ҡайтарып ебәрә, хушлашып. Аҡкейек тауы сик була, аръяғы уларҙың ере түгел. Үҙе Барсинды алып китә. Ҙур урманды үткәс, ул аттан төшөп:

— Барсинһылыу, хуш инде! Атаң риза булһа, ҡауышырбыҙ. Һәләк ҙур япан* тирәк бар ошо тирәлә, шул япан тирәк эргәһендә һине көтөп ятырмын, — тип Барсинды оҙатып тороп ҡала. Ул япан тирәк тигән ер данлыҡлы әҙәмдәр төйәге булған. Шунда улар һуғышҡандар ҙа үҙ-ара ыҙғышты ла шунда хәл иткәндәр. Барсин ҡайтып китә. Ул Аҡҡолай менән, шаңғырҙап, батша шәһәренә килеп керә. Бөтә халыҡ сығып, Барсинды ҙурлап ҡаршы ала. «Олтанбей Аҡҡолайҙы биргән мәһәргә!» — тиҙәр.

Ә был арала батша, Барсиндың мәһәр менән ҡайтып килеүен күреп, ҡапҡаларҙы бикләтә, ишектәрен бығаулата. Улы Ғәфәрҙе бишенсе ҡатҡа мендереп ебәрә, киленен бейә һауырға сығара, бисәһенә билен сисергә ҡуша, үҙе лә билен сисеп ята. Барсин ата йортона килеп туҡтай. Ҡараһа, ҡапҡалар бикле. Эҫе, түҙерлек түгел, бейәләр кешнәшә, сыҙамай. Халыҡ туғыҙ туғай тыу бейәләрҙе тотоп бәйләй. Барсин йүгереп йөрөп ҡапҡаларҙы ҡаға. Атаһын, ағаһын әрләй, ҡапҡаны туҡмап-туҡмап ҡысҡыра. Берәү ҙә яуап бирмәй. Шунан Барсин аяғын һыпырып ташлай ҙа ялан аяҡ ҡоймаға менеп китә. Эс яҡҡа ырғып төшөп атаһына барһа, атаһы ята, билен сисеп. Барсин әйтә:

Торһон атам, торһон атам,
Тороп, билен быуһын атам!
Туғыҙ туғай тыу йылҡыны
Ҡалыным тип алһын атам.
Өйөр башы Аҡҡолайҙы
Баш атым тип алһын атам,
Тимер яллы кеш тундарҙы
Инә тун тип алһын атам!

Атаһы яуап бирә:

Тормаҫ атаң, тормаҫ атаң,
Тороп, билен быумаҫ атаң!

Туғыҙ туғай тыу йылҡыны
Ҡалының тип алмаҫ атаң!
Өйөр башы Аҡколайҙы
Баш атым тип алмаҫ атаң,
Тимер яллы кеш тундарҙы
Инә тун тип алмаҫ атаң!
Атаң — батна — ул бирҙеме?
Инәң — ҡушна — шул бирҙеме
Ағаң — Ғәфәр — шул бирҙеме?
Ҡиттең*, бутам, киттең, бутам!

Барсин илап сығып китә лә әсәһенә бара:

Торһон әсәм, торһон әсәм!
Тороп, билен быуһын әсәм!
Туғыҙ туғай тыу йылҡыны
Ҡалының тип алһын әсәм!
Өйөр башы Аҡколайҙы
Баш аты тип алһын әсәм!
Тимер яллы кеш тундарҙы
Инә тун тип алһын әсәм.

Батша сығып, әсәһен тыя:

Тормаҫ әсәң, тормаҫ әсәң,
Тороп, билен быумаҫ әсәң!
Туғыҙ туғай тыу йылкыны
Ҡалының тип алмаҫ әсәң!
Өйөр башы Аҡколайҙы
Баш атым тип алмаҫ әсәң,
Тимер яллы кеш тундарҙы
Инә тун тип алмаҫ әсәң!
Атаң — батна — ул бирҙеме?
Инәң — ҡушна — шул бирҙеме?
Ағаң — Ғәфәр — ул бирҙеме?
Ҡиттең, бутам, киттең, бутам!

Барсин, илап, Ғәфәр ағаһын эҙләй. Малдар тора кешнәп. Ғәфәр ағаһы бишенсе ҡаттан тәҙрәнән ҡарап илап ята, ҡарындашына йәне әсеп. Тороп индерер ине, атаһынан ҡурҡа. Барсин, эҙләй торғас, үргә бишенсе ҡатҡа менә, ағаһына әйтә:

Торһон ағам, торһон ағам,
Тороп, билен быуһын ағам!
Туғыҙ туғай тыу йылкыны
Ҡалының тип алһын ағам!
Өйөр башы Аҡколайҙы
Баш атым тип алһын ағам!
Тимер яллы кеш тундарҙы
Инә тун тип алһын ағам!

Батша сығып, әйтә:

Тормаç ағаң, тормаç ағаң,
Тороп, билен быумаç ағаң!
Туғыҙ туғай тыу йылҡыны
Ҡалының тип алмаç ағаң!
Өйөр башы Аҡколайҙы
Баш атым тип алмаç ағаң,
Тимер яллы кеш тундарҙы
Инә тун тип алмаç ағаң!
Атаң — батна — ул бирмәне,
Инәң — ҡушна — шул бирмәне,
Ағаң — Ғәфәр — ул бирмәне,
Ҡиттең, бутам, киттең, бутам!

Барсин, иçе китеп, ҡолап төшә, тештәре ырғып, яңаҡтары ҡуба. Еңгәһе ике күнәк бейә һөтө тотоп килеп инеп:

Илай-илай күҙе шешер,
Һөйләй-һөйләй теше төшөр,
Тотоғоҙ баланы, тотоғоҙ баланы! —

тип ҡысҡыра.

Ғәфәр ағаһы йүгереп килеп төшөп, Барсинде ҡулына ала. Бала үлде, тип батша бисәһе килеп сыға. Батша тиҙ генә ҡапҡаны астыра, малды ҡыуып индерәләр, малды алып ҡалырға кәрәк, тип. Ғәфәр ҡарындашын Аҡколайға һала ла табибҡа алып китә. Ул ваҡытта шәһәрҙә табиб булған. Табиб:

— Йәне бар, үлмәгән, — ти.

— Нисек булһа ла шәбәйтегеҙ, алтын тештәр ҡуйығыҙ, осамдан ит бирәм, битен ямағыҙ! — ти Ғәфәр. Табиб Барсинды терелтә, алтын теш ҡуя, оса итенән ямау һала. Ғәфәр әсәһе менән кәңәшләшә:

— Ни яуап бирәйек Барсинға.

Әсәһе кәңәш итә:

— Аҡкейекте төшкән саҡта, Аҡколай алып ҡасып китеп, аттар тапаны тип әйтербеҙ, — ти.

Өс көн үткәс, Барсинды алып ҡайталар. Барсин көҙгөнән ҡарап, аптырай:

— Ни булды миңә? — ти.

Ғәфәр әйтә:

— Һине Аҡкейектән мин ҡаршы барып алдым. Аттар алып ҡасып, һине тапап китте, — ти.

Ул да булмай, Әләр ханға Бүләр хандың, улыма ҡыҙын бирмәне, тип үсегеп, яу менән килеүе тураһында хәбәр ишетелә. Әләр хан килә йүгереп ҡыҙына:

— Балам, мин ризамын. Бөтә мәһәреңде Олтанбейгә кире ҡайтарам. Алпамышаны, балуан, тиҙәр. Мин мәһәрһеҙ ҙә ризалыҡ бирәм! — ти. Барсин ҡыуана, ләкин хат яҙырға ояла, берәй яуап бирермен әле, тип уйлай. Шунан һуң Барсин ҡайтырға теләк белдерә.

Әләр хан утыҙ ылау ектереп мәһәр ебәрә. Утыҙ беренсе булып Ғәфәр бара. Баяғы Аҡкейек тауына менәләр, төнгә ҡаршы була. «Алпамыша япан тирәк янында булырға тейеш», — ти Барсин. Инде Алпамышаға килһәк, ул Барсинде көтә-көтә лә, хан бирмәйҙер, риза түгелдер, тип ҡайғырып ҡайтып китә. Атаһына ҡайтып һөйләй. Олтанбей Алпамышаның ҡырҡ бер дуҫын да ҡоралландырып, кире Аҡкейек сигенә ебәрә:

— Яу сыҡмай булмаҫ, ахыры, Аҡкейеккә барып көтөп ятығыҙ, — ти.

Шулай итеп төнгә ҡаршы һаҡта ятҡан саҡта Алпамышаның иптәштәре ығы-зығы тауыш ишетәләр. Арба, ат тояҡтары тауышын Әләр хан яғынан япан тирәккә ҡарай юл тотоусы ғәскәр тип аңлап, иптәштәре ҡурҡа төшә. Алпамыша шунда:

— Һеҙ урынығыҙҙа ятығыҙ. Уларға ҡаршы мин үҙем сығам. Барсин өсөн үҙем яфа сигәм, — тип япан тирәккә яңғыҙ китә. Барып етеп, башындағы бүркен ала. Тирә-яҡ яп-яҡты булып яҡтырып китә. Барсин Алпамышаны күреп йүгереп килә. Алпамыша Барсинде ҡосағына ала.

— Хан ризамы, нишләп оҙаҡланың? — ти.

Барсин:

— Атам-инәм риза. Утыҙ ылау ҡаралдым килә. Ғәфәр ағам оҙатып килде, — ти. Ҡүмәкләшеп ҡайтып китәләр, ҡыуанышып. Өйҙә Алпамыша менән Барсинды ҡаршы алалар. Иң алда Алпамышаның ҡарындашы Баллышәкәр йүгереп сыға. Ғәфәр бер төн генә ҡунаҡ була, Бүләр хан һуғыш асмаҡ була, тип ҡайтырға йыйына. Алпамыша Барсин менән бер төн генә була: Барсин ауырға ҡала. Иртәгеһен Алпамыша, иптәштәрен алып, Әләр ханға ярҙамға китергә була. Барсин иренән ҡалмай. Аҡкейеккә килеп еткәс, Ғәфәр Барсинды ҡайтарырға итә. Барсин:

— Ҡайтмайым. Алпамыша эргәһендә булам, унын менән бергә үләм! — тип ҡала.

Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, Бүләр хандың ғәскәре япан тирәк янына килеп етә. Алпамыша гәскәренә әйтә:

— Һеҙ минең ҡатынды һаҡлағыҙ. Дошман менән мин үҙем һуғышам, — тип уларға ҡаршы китә.

Алпамыша өс көн, өс төн һуғыша. Дошман ғәскәре күп була, ахыр сиктә, Алпамыша, тирәктәрҙе осора тибеп, дошман ғәскәрен баҫып үлтереп бөтә. Ҡалғандары ҡаса.

Алпамыша Барсин эргәһенә килә лә:

— Мин йоҡлайым. Дошман килһә, һин мине йоҡа еремдән хәнйәр менән ергә ҡуша сәнсеп уятырһың, шунһыҙ мин уянмам. Тик йөрәгемә тейгеҙмә, — тип аяҡ-ҡулын дүрт яҡҡа ташлап йоҡлап китә.

Барсин ике көн, ике төн һаҡлап ултыра, хәнйәр тотоп. Өсөнсө көнөнә тағы ла яу килә, дүрт яҡлап — хәтһеҙ күп була дошман ғәскәре. Барсин алып барып терәп-терәп ҡарай хәнйәрҙе — сәнсергә йәлләй, ҡулы бармай. Шунан Алпамышаның битенә эйелеп ҡайнар күҙ йәшен түгеп илай башлай:

«Ҡайнар күҙ йәшем битенә ут булып төшһөн, ғәзиз иремде уятһын!» — ти.

Барсиндың ҡайнар күҙ йәше Алпамышаның битен яндырып үтеп ергә төшә. Алпамыша уянып китә.

— Уй, оҙаҡ йоҡлағанмынмы әллә? — тип ырғып тора. Барсинде ҡайтарып ебәрә. Үҙенең ғәскәре менән дошманды ҡыра башлай. Һуғыш шул ҡәҙәрле көслө була, Алпамышаның иптәштәре үлеп бөтә. Иҫән ҡалған бер генә иптәше Ысыға улы Мысыҡтың да ҡулы өҙөлә, сулаҡ булып ҡала. Шулай ҙа яуҙы ҡайтаралар.

Барсин кис тағы килә. Алпамышаның ата-инәһе ҡайғырып һары була.

Алпамыша Барсинға әйтә:

— Инде һин мине күҙ йәшең менән генә уята алмаҫһын. Хәнйәр менән ергә ҡуша сәнс! Тик йөрәгемә тигеҙмә. Шулай итеп уятмаһаң, биш-алты яҡтан баҫырҙар, мине үлтерерҙәр! — ти ҙә ҡолас ташлап йоҡлап китә.

Шунан һуң тағы ла биш-алты яҡтан яу ҡалҡа. Барсин хәнйәрҙе алып ҡарай, сәнсә алмай.

— Минен ҡулымдан үлмәһен! — тип саҡ ҡасып китеп ҡала.

Дошмандар Алпамышаның нурынан килеп табып алалар. Алпамыша үлек кеүек йоҡлай. Быны үлсәйҙәр. Етмеш аршынлыҡ бик ҙур, бик тәрән зиндан ҡаҙалар. Аяғына етмеш ботлоҡ бығау һалалар, ҡулын артҡа сынйырлап, күкрәгенән кирле арбаға һала ла ҡалған кәүҙәһен һөйрәтеп алып китәләр. Зинданға бер ҡат ебәк күлдәк менән төшөрәләр. Тик баш аҫтына сей тиренән яһалған үндек кенә һалалар. Эргәһенә һыңар ҡуллы Ысыға улы Мысыҡты төшөрәләр, һыңар имсәк кәзә бирәләр, имеп ятһындар тип. Түбәнән әҙ генә тишек ҡалдыралар. Алпамышаны ҡырҡ йылға яптыра Бүләр хан. Олтанбейҙең йөрәге янһын, йәне әсеһен тип, зинданды улар яғына сыҡҡан тау итәгендә ҡаҙҙыра. Тереләй ҡәберҙә ятһын, шунда үлә ул Алпамыша тип уйлай ҡара эсле Бүләр хан.

Шулай итеп, көндәр үтә, айҙар үтә, былар ята зинданда. Ысыға улы Мысыҡ һыңар ҡулы менән кәзәнең һыңар имсәген һауып Алпамышаға һөт эсереп тора, әҙерәк үҙе лә эсә. Оҙаҡ ваҡыттар үткәс, кәзәнең дә һөтө бөтә, ашарына булмағас.

— Нишләйбеҙ? Был кәзәне әллә һуйып ашайыҡмы? Һөтө бөттө бит? — ти Ысыға улы Мысыҡ. Бәкеһен аса. Ҡәзәнең күҙенән мөлдөрәп кенә йәш тәгәрәп ята. Алпамыша йәлләй:

— Ҡуй, көйшәп ятыуы сәғәт бит уның. Минең сәғәтем ул. Үлһәк, бергә үлербеҙ. Һин сыҡҡан ғына һөт тамсыһын ялап булһа ла торорһоң! — тип һуйҙырмай. Шулай ята торғас, Алпамыша ҡыр ҡаҙҙарының үҙҙәре яғына осҡанын күрә. Барсинен һағынып, һарғайып, ҡош телендәй генә хат яҙып, үҙенең хәлен белгертмәксе була.

Ысыға улы Мысыҡҡа күлдәгенең арҡа йейөнә алтын ҡәләм осо тегелгәнлеген әйтеп, шуны таптыра.

— Ошо ҡыр ҡаҙҙарының береһе генә туҡтаһын ине, ҡанатына хат яҙыр инем! — ти Алпамыша, бер өйкөм ҡыр ҡаҙҙарын күреп, ул зарығып йырлай:

Ҡараса ҡаҙым, ҡараса ҡаҙым,
Килсе, ҡаҙым, килсе, ҡаҙым,
Ҡанатыңа хат яҙайым!

Ҡаҙҙар ҡыскыра:

Ҡый-ғаҡ! Алпамыша, һиндермеһең,
Һин дә былай булырмыһың?
Үткән кошто үткәрмәнең,
Ҡайтҡан кошто ҡайтарманың,
Ятһаң, ята бир әле! —

тип үтеп китәләр.

Тағы бер өйкөм ҡара ҡаҙҙар күренә. Алпамыша йырлай:

Ҡараса ҡаҙым, ҡараса ҡаҙым,
Ҡилсе, ҡаҙым, килсе, ҡаҙым,
Ҡанатыңа хат яҙайым!

Былар:

— Ҡый-ғаҡ! Ҡый-ғаҡ! Артта, артта-а! — тип ҡыйғаҡлашып үтәләр.

Иң артта көтөүгә ҡушылмай ғына бер зәғиф ҡара ҡаҙ, ҡааҡ-ҡааҡ тип ҡысҡырып осоп килә. Алпамыша тауышынан танып, йырлай:

Ҡараса ҡаҙым, ҡараса ҡаҙым,
Ҡилсе, ҡаҙым, килсе, ҡаҙым,
Ҡанатыңа хат яҙайым!

Ҡара ҡаҙ тишек ситенә генә ҡунып, бер генә аҡ ҡауырһынын төшөрә. Ысығ улы Мысыҡ тартып ала. Алпамыша хат яҙырға куша баяғы алтын ҡәләмдең осо менән. Ысығ улы Мысыҡ, мин хат яҙа белмәйем, ти.

— Үҙем әйтеп яҙҙырам, — ти ҙә йырлай.

Алпамыша үле, тирһең,
Үле, тигәс, тере тирһең;
Етмеш аршын ер зинданды
Алпамыша гүре, тирһең.
Етмеш ботлоҡ тимер сынйыр
Аяғымда бығау, тирһең;
Етмеш аршын ебәк арҡан
Ҡулдарымда тышау, тирһең.
Алпан-алпан атлаған
Айыу килмәç был зинданға;
Бүлә-бүлә йүгергән
Бүре килмәç был зинданға;
Төнә-төнә йөрөгән
Төлкө лә килмәç был зинданға;
Ҡырҡ дуçымдың бере-бере
Ҡилмәç микән был зинданға?
Ҡарыниле Ҡара Тукай,
Ул да килмәç был зинданға.
Аш ҡәҙерен ана белер, ана белер;

Һөт ҡәҙерен тана белер, тана белер,
Минең бында ятҡанымды кем белер!

— ЫсыҒ улы Мысыҡ, ынтылып ҡауырһынды еккә ҡыҫтыр, ҡаҙ үҙе тешләп алып китер! — ти Алпамыша.

ЫсыҒ улы Мысыҡ, ынтылып ҡауырһынды һалайым тип, кәзә мөгөҙөнә баҫып, һыңар ҡулы менән тәҙрәгә тотонам тигәндә, емерелеп килеп төшә. Алпамыша алыҫта күгәреп ятҡан тау биттәрен күрә. Күп йылҡы, бейәләр, кешеләр күренә.

— Кемдәр икән ул әҙәмдәр? — тип һорай Алпамыша.

— Береһе Барсинға, икенсеһе Баллышәкәргә оҡшай, — ти ЫсыҒ улы Мысыҡ.

Алпамыша һармаҡлай:

Барса-барса тауҙарға
Килгән минең Барсинһылыу;
Ҡором кеүек оҙон сәсен
Йәйгән минең Барсинһылыу.
Алымсығым* Барсинһылыу,
Ҡарындашым Баллышәкәр,
Туғай-туғай сәләм һеҙгә.

ЫсыҒ улы Мысыҡ көс-хәлгә ҡауырһынды ер өҫтөнә һала. Ҡаҙ ҡый-ғаҡ, тип ҡурҡып ситкә ырғый, шулай ҙа тешләп осоп китә. Алпамыша был ҡаҙҙы элек атҡан булған да, йәлләп, тәрбиәләп йүнәлткән икән. Алпамыша үлде, тип әсәһе уны ҡырға осороп ебәргән булған. Ҡара ҡаҙ үҙенең элекке таныш төйәген күреп: «Ҡый-ғаҡ!» — тип ҡыҫҡыра, ҡауырһын осоп барып, бейә һауып йөрөгән бисәләр эргәһенә төшә. Барсиндың бикәсе Баллышәкәр матур ғына яҙыулы аҡ ҡауырһынды күреп ҡала, алып, еңгәһенә бирә:

— Мә, еңгә, мырҙамдың сәңгелдәгенә тағырбыҙ, бигерәк матур! — ти, яҙыу танымай. Барсин уҡып ҡарай ҙа иҫһеҙ тәгәрәп китә, һөтө түгелеп китә. Бикәсе һелкетеп-һелкетеп ҡарай ҙа аптырап көтөп ултыра, ауырыу һуғылды, тип. Барсин иҫен йыйғас, бикәсе:

— Еңгә, ауырыу һуғылдымы әллә, ҡанатты тоттоң да ҡоланың? — ти.

— Юҡ, юҡ, башым әйләнеп, иҫем таралып китте әллә нигә, — тип белгертмәй, ҡауырһынды ең осона тығып ебәрә.

Өйгә ҡайтҡас, Барсин, аласағым бар ине тип сәбәп табып, тиҙ генә сығып китә. Ҡарыниле Ҡара Туҡайҙы табып, Алпамышаны эҙләтергә ебәрә.

— Нисек кенә булһа ла хәлен белеп ҡайт! — ти.

Ҡарыниле Ҡара Туҡай сығып китә эҙләп Алпамышаны, Аҡҡолайҙы. Был ваҡытта Алпамыша:

Алпамыша үле, тирһең,
Үле, тигәс, тере, тирһең;
Етмеш аршын ер зинданды

Алпамыша гүре, тирһең.
Алпан-алпан атлаған
Айыу ҙа килмәҫ был зинданға;
Бүлә-бүлә йүгергән
Бүре лә килмәҫ был зинданға;
Төнә-төнә йөрөгән
Төлкө лә килмәҫ был зинданға;
Ҡырҡ дуҫымдың бере-бере
Килмәҫ инде был зинданға;
Ҡарыниле Ҡара Туҡай,
Ул да килмәҫ был зинданға.
Аш ҡәҙерен ана белер, ана белер.
Минең бында ятҡанымды кем белер? —

тип зарығып йырлап ята.

Ошо ер аҫтынан ғына һарылып сыҡҡан йырҙы ишетеп, Ҡарыниле Ҡара Туҡай килеп таба Алпамышаны.

— Килдем, дуҫым! — тип ҡысҡырып ебәрә. Былар илашалар. Алпамышаның арҡалары ергә тамырланып үҫеп киткән. Һыңар имсәкле кәзә, етмеш аршын ерҙе кимереп, тамыр ашап саҡ йөрөй. Ҡарыниле Ҡара Туҡай түбәне тырнап асҡан була. Әҙерәк икмәк төшөрә. Алпамыша ашамай, кәзәһенә ашата, әҙерәк Ысыған улы Мысыҡҡа ашата. Үҙе ашай алмай. Ысыған улы Мысыҡ кәзәнең бер тамсы ғына һөтөн ауыҙына һөртөп тора, үҙе ярты ҡалаҡтайын эсеп тора икән. Алпамыша һорай:

Ҡарыниле Ҡара Туҡай,
Килденме, дуҫым, килденме, дуҫым?
Мин киткәндәге уландар
Яуға ҡаршы сыҡҡылай
Булдымы, дуҫым, булдымы, дуҫым?

Ҡарыниле Ҡара Туҡай:

Булды, дуҫым, булды, дуҫым,
Һөйөнсө, дуҫым, һөйөнсө, дуҫым,
Һинең үҙеңдең улың бар!

Алпамыша:

Беләм, дуҫым, беләм, дуҫым,
Төшөмдә күрҙем! — ти.

Ҡарыниле Ҡара Туҡай:

— Бүләр хан бөтә малдарығыҙҙы үҙенә алды. Бейәләр генә ҡалды. Барсин менән ҡарындашың бейә һауып йөрөй. Атаң-инәң, өс йыл буйына һиҙә илап, һуҡыр булдылар. «Бүләр хан Барсинды алырға йөрөй», — тине Ҡарыниле Ҡара Туҡай. Алпамыша әйтә:

— Мин бынан сыға алмам инде, арҡаларым үҫеп китте, бармағымды ла ҡыбырҙата алмайым. Ҡотҡарһа, минә Аҡҡолайым ғына

коткара алыр. Ул урманда башынан аҫып бәйләнгәйне, Шоңкар этем эргәһендә калды. Акколайҙы нисек булһа ла эҙләп тап, — ти.

Карыниле Кара Тукай Акколайҙы эҙләп китә. Урманға барып таба. Карай: Акколай күптән үлгән, башынан аҫылған коро кәүҙә тора. Тырнап, сапсып тора торғас, кешнәп тубығынан ала ергә төшкән. Шоңкар ҙа моронон ике аяғына һалып көтөп яткан көйөнсә үлгән.

Карыниле Кара Тукай атка орона алмай. Хәбәр алып барырға куркып, илап кайтып китә.

Бүләр хандың ике еткән кыҙы була. Бер вакыт улар тышка, сәхрәгә сығып йөрөйҙәр еңгәләре менән. Еңгәләре, уларҙы карап, һаксы булып сығалар. Кыҙҙар ерҙән һарылып кына сыккан зарлы моң ишетәләр, кемдер оҙон көй көйләй. Кыҙҙар тыңлап торалар. Еңгәләре:

— Әйҙәгеҙ, әйҙәгеҙ, нигә туктап калдығыҙ! — ти.

— Бер моңло йыр ишетелә. Улниндәй йыр? Кем йырлай икән? — тип аптырайҙар кыҙҙар.

— Ул кайнымдың коло йырлай. Кайным Әләр хандың кыҙы өсөн һуғыш асып, кешеләрен коллокка төшөрөп, үҙе шул кыҙҙы алам тип йөрөй! — ти еңгәләр.

— Ул әҙәм нисек ята унда?

— Ул — Алпамыша. Нурҙан яратылған кеүек матур егет ине, шуны, аяк-кулын бығаулап, кырк йылға һалдылар зинданға.

— Кайҙа һуң ул зиндан?

— Ана, анау тауҙа ғына!

Былар кайтып китәләр. Бүлмәләрендә ике кыҙ һөйләшә, нисек ул зинданға юл табырға. Ипләп кенә һорашалар. Бакһаң, уға ер аҫтынан үтеп була, тик ер аҫты таш келәттәренең аскысы батшаның үҙендә генә икән. Батшаның яраткан бәләкәй кыҙы аскысты атаһының кеҫәһенән һиҙҙермәй генә алып сыға.

Ике кыҙ төндә сығып, ер аҫтындағы таш келәтте асалар. Күрәләр: ак булат эленеүле тора. Кыҙҙар ак булатты алып тыңлап торалар. Тауыш сыккан якка ак булатты һелтәйҙәр — ер ярылып, таштар актарылып, юл асылып китә. Кыҙҙар шулай ак булатты һонoп баралар — алда юл асылып бара. Сәғәттәренә караһалар, таң атып килә. Былар йәһәт кенә кайтып, йыуынып-сайынып, бүлмәләренә инеп яталар. Еңгәләре, бер нәмә һиҙмәй, быларҙы көн дә алып сығып, тышта йөрөтөп индерәләр. Өсөнсө төндө кыҙҙар ак булатты алып, йәнә юл ярып, зинданға барып инәләр. Карайҙар: нурҙан бөткән коро һөлдә ялтырап ята. Кыҙҙар, йөрәге өҙөлөп йәлләп, һүҙ кушалар:

— Ағай, беҙ һине коткарырға килдек! Беҙ батшаның кыҙҙары.

— Һай, һылыуҙар! Сей тимер бит бығауҙар. Нисек коткараһығыҙ. Һеҙҙең генә көсөгөҙҙән килмәҫ, — ти Алпамыша, кибеп, сатнап бөткән ирендәрен ялап йылмая.

Кыҙҙар ак булатты ике куллап күтәреп, йән-көс менән сабып ебәрәләр бығауҙы — сей тимерҙәр онталып, бығауҙар тирелеп төшә.

— Инде ҡулдарымды ысҡындырығыҙ! — ти Алпамыша. Ҡыҙҙар ебәк тышауҙарҙы өҙә-өҙә сапҡылап ташлайҙар.

— Мине ҡырын һалығыҙ, саҡ ҡына әйләндереп, — ти Алпамыша. Ҡыҙҙар егеттең ергә ереккән арҡаһын, аҡ булат менән ерҙе һөрөп, ере менән аҡтарып апарып сығаралар. Ҡулдары ла ергә тамырланып үҫеп киткән. Алпамыша аҙ ғына бармаҡтарын ҡыбырҙата-ҡыбырҙата:

— Һеҙ көсөгөҙҙән килгәнен эшләнегеҙ. Инде бынан сығарыуға көсөгөҙ етмәҫ. Мине Аҡколай ғына бынан сығарып алыр. Шул атым урман уртаһында башынан аҫып бәйләүле тора. Бәләкәй генә ҡағыҙ бирегеҙ, шуға доға яҙып бирәйем. Шул ҡағыҙ менән өс тапҡыр һыйпаһаң, ул ат терелер, — ти. Ҡыҙҙар ҡағыҙ бирә. Алпамыша доға яҙып бирә. Былар бүлмәләренә ҡайтып, атаһының ситкә киткәнен көтәләр. Бүләр хан сит илдәрҙән яңы ғына ҡайтып төшкән була. Ер аҫтындағы таш келәттәр асҡысын алайым тиһә, асҡыс юҡ. Эҙләй-эҙләй, таба алмай. «Моғайын, ситтә ҡалдырып киткәнмендер асҡысты», — тип, сәбәптән сәбәп табып, батша тағы китә өйөнән сығып. Шуны ғына көтөп йөрөгән ҡыҙҙар, көтөүҙән ике ат тотоп алып менеп, китәләр урманға. Урманда йөрөй торғас, япан тирәкте табып алалар. Ҡараһалар, ҡурҡып китәләр: иҫ киткес ҙур, яман ғәйрәтле ҡоро һөлдә ат тора, башы үргә аҫып бәйле, аяҡтары тубығынан ала ергә батҡан. Ҡыҙҙар ипләп кенә килеп теге ҡағыҙ менән аттың башын уң яҡтан һыйпайҙар — атҡа йән килеп, ҡыбырҙап ҡуйҙы. Уратып һыйпап сығалар — ат, элекке сүрәтенә инеп, соҡорҙан сығып баҫып торҙо. Өсөнсө тапҡыр һыйпағанда, ат шаңғыратып кешнәп тә ебәрә, осоп сығып та китә. Аҡколай бара сабып, ер һеңкетеп, Алпамышаны эҙләп! Тауға сабып менеп, табып ала зинданды. Көс-ғәйрәт менән яман кешнәп ебәрә — тирә-яҡтағы тау-таш һелкенеп китә, зиндан түбәһе ҡойолоп төшә. Аҡколай уң аяғын зинданға тыға, шунан һул аяғын тыға, ике артҡы аяғын тығып ҡарай — Алпамыша тора алмай, хәле юҡ. Аҡколай кешнәп ебәрә лә, артҡа сүгәләп, оҙон ҡойроғон төшөрә. Алпамыша ҡойроҡто ҡулына урап тотона, уға ЫсыҒ улы Мысыҡ йәбешергә итә һыңар ҡул менән.

— Һин миңә йәбешә алмаҫһың, һыңар ҡулың менән кәзәнең ҡойроғон урап тот, кәзә миңә йәбешһен! — ти Алпамыша. Кәзә алғы тояҡтарын Алпамышаның соҡорайып төшкән янбашына һала, ЫсыҒ улы Мысыҡ һыңар ҡул менән кәзә ҡойроғона йәбешә. Аҡколай ипләп кенә һөйрәй башлай. Инде сыҡтым тигәндә, кәзә ҡойроғо өҙөлөп китә! ЫсыҒ улы Мысыҡ ҡолап барып төшә лә эсе ярылып үлә. Кәзәне һуйып ашайыҡ, тип әйткәне өсөн үҙ яҙаһын үҙе күрә. ЫсыҒ улы Мысыҡ шулай үлмәһә, яралы, зәғиф әҙәмдәр үлмәҫ ине. Кәзәнең ҡойроғо шунан ҡыҫҡа булып ҡала. Алпамыша, сыҡҡас, ҡабығып ятҡан кейемдәрен, ҡоралын күрә, ҡағып-һуғып кейеп ала ла ҡоралын тағып китә Бүләр ханға. Аҡколай бара сабып, ер һеңкетеп. Бүләр хандың бисәһе әйтә:

— Бүләр хан, ер һеңкетеп Аҡколай килә бит!

— Нишләп Аҡколай булһын. Ул урманда аҫыулы тора, үлгән бит ул! — тип тик ултыра, ти. Аҡколай сабып килеп туҡтай. Бикле капҡаны емерә тибеп инеп китә. Бүләр хан ярһып килеп сыға:

— Ҡайһыһы ул рөхсәтһеҙ инеп йөрөй?!

Алпамышаны танып, шыр ебәрә. Алпамыша ҡылысын Бүләр хандың муйынына һала. Шул арала ике ҡыҙы йүгереп сығып, Алпамышаға йығылалар, аяғын ҡосаҡлап үтенәләр, беҙҙең хаҡыбыҙға ҡалдыр тип. Алпамыша боролоп сабып сығып китә. Үҙ иленә ҡайтып китеп бара. Бара торғас, ат көтөүсеһенә тап була. Ат көтөүсеһе, оҙон ҡаҙыны ҡамсы итеп яурын аша һалып, көтөү көтөп йөрөй. Алпамыша:

— Әссәләмәғәләйкүм!

Көтөүсе:

— Вәғәләйкүмәссәләм!

Алпамыша:

— Был ҡайһы байҙың көтөүе?

— Нишләп?

— Ҡаҙыны ҡамсы итеп йөрөйһөң бит!

— Был көтөү әүәле Олтанбейҙеке ине. Хәҙер уның ҡоло Ҡолтабаныҡы.

— Ҡайһы бай яҡшы ине?

— Тегенеһе лә насар түгел ине. Быныһы яҡшыраҡ. Ашауҙан арттырып, ҡаҙыны ҡамсы итеп йөрөйбөҙ.

Алпамыша көтөүсенең башын өҙә сабып китә. Китеп ултыра, китеп ултыра. Һыйыр көтөүе тап була. Көтөүсе һыйырҙың туғэсәген һөйрәлтеп сыбыртҡы итеп йөрөтә, себен эйәләтеп, саңға буяп.

— Был тикле көтөү ҡайһы байҙыҡы?

— Был әүәле Олтанбейҙеке ине. Хәҙер Ҡолтаба алды.

— Ҡайһыһы яҡшы ине?

— Ҡолтаба туғэсәкте сыбыртҡы итеп тотторҙо. Ул яҡшыраҡ.

Алпамыша һыйыр көтөүсеһенең башын өҙә сабып, китеп бара.

Алпамыша китә артабан, йылҡыларҙы, һыйырҙарҙы үҙ юлына төшөрөп. Бер ваҡыт һарыҡ көтөүсеһенә килеп етә. Теге көтөүсе үргә ҡарай ҙа илай, түбән ҡарай ҙа көлә.

— Әссәләмәғәләйкүм, ҡустым! Нишләп улайтаң?

— Үргә ҡараһам, Алпамышаның үлек кәүҙәһен күрәм, шуға илайым. Түбән ҡараһам, Алпамыша килә яткан кеүек, шуға көләм, — ти.

— Мин ҡайттым, мырҙа, илама, — тип кәпәсен ҡултығына ҡыҫтыра Алпамыша. Малай таный, барып ҡосаҡлап ала:

— Атаң менән әсәң һинә илай-илай һуҡыр булдылар. Атаңдың таянған таяғы тирәк булып үҫте. «Улымды күреп, ҡулынан тотоп өс ауыҙ һүҙ әйтһәм, үлһәм дә үкенмәҫ инем», — тип ултыра ҡарт. Әсәйең: «Баламдың арҡаһынан бер һөйөп, башынан бер һыйпап үлһәм, риза булыр инем», — тип ултыра, — ти малай.

Алпамыша был егеткә кейемен бирә. Аҡколайҙы мендереп ҡайтарып ебәрә. Үҙе көтөүсенең алама ғына сапанын кейеп, башына таҙ кәпәсен һалып, китә һарыҡтарҙы ҡыуып. Китеп ултыра торғас, бер әбей күрә. Ул сытыр-мытыр йыйып йөрөй, бер илай ҙа бер көлә.

— Һаумы, инәй! Әллә енләнеп йөрөйһөңмө? Бер илайһың, бер көләһең!

— Юҡ, балам, енләнмәнем. Бына Барсин килен ҡайны ишегендәге ҡолона барырға йөрөй. Алпамыша юҡ бит, үлгәндер. Шуға илайым. Сытыр-мытыр йыйып, алып барып бирһәм, һурпа-һарпа эсерерҙәр әле, тип шуға ҡыуанам, — ти әбей.

— Сеү, инәй, илама! Мин Алпамыша, мин ҡайтып киләм. Сытыр йыймаһаң да, һурпа эсерһең! — ти. Әбей ҡыуанып ҡайтып китә.

Хәҙер Алпамыша ҡуйҙы илтә, ҡояш байымаҫ борон, алып ҡайта. Аш өйөнә инә. Барсин йөрөп ята. Ул шунда уҡ таный Алпамышаны, тик һиҙҙермәй. Балаһы эре һөйәкле, ҙур була, атаһына оҡшап. Бала йөрөп ятканда шап итеп ҡолап китә. Барсин асыу менән баланы һуғып ебәрә:

— Бәхетһеҙ бала! Бәхетең булһа, үлер инең, атанан етем ҡалмаҫ инең! — тип әрләй, үҙе аҫтан ғына Алпамышаға күҙ ташлай. Алпамышаның ике күҙе балала, күҙен мөлдөрәтеп балаға ҡарай, күңеле илай. Алпамыша сыҙамай сығып китә.

— Ҡуйҙарҙы бикләйем, — тип.

Барсин Баллышәкәргә:

— Күрҙеңме, бикәсем? Ағайың бит! Баланы ҡалай йәлләй, ике күҙен алмай!

Баллышәкәр:

— Түгелдер, еңгә.

— Шул, шул! Һин һепертке ал да өйҙө һеперә башла, туй килә, тип. Шунда ағайыңдың таҙғарының осора һуҡ та төшөр! — ти. Алпамыша инеп тамағына һорай. Ҡарындашы Баллышәкәр:

— Беҙҙең ҡымыҙ тәмле була торғайны, эсеп ҡара әле, ағай! — ти. Алпамыша өндәшә алмай, ҡымыҙ эсә. Шунан Баллышәкәр:

— Еңгә, һиңә туй килә. Һин ултыраң, туй килмәгән кеүек, әҙерләнмәй. Өйҙө таҙартайыҡ! — тип һепертке алып мөйөштәрҙе һеперреп һуҡҡылап-ҡаҡҡылап, Алпамышаның алама кәпәсен һуғып төшөрөп ебәрә. Еңгәһе кәпәсте яңылыш урындыҡ аҫтына тибеп ебәргән була. Өй эсен нур алып, яҡтырып, балҡып китә. Барсин йүгереп сығып китә ҡайны-ҡәйнәһенә:

Һөйөнсө, ҡайным,
Һөйөнсө, ҡайным!
Күҙең нуры тулды, ҡайным:
Күҙен нуры — балаң ҡайтты,
Өйөрөң башы — Аҡҡолай ҡайтты!

Ҡайны:

Кит бынан, йөрөмә ырылдап,
Ишегемдәге ҡолома барам, тип,
Ҡыуанһаң да, миңә ҡыуаныс юҡ!
Мин ултырамын илап.

Минең күҙ йәшемә ҡулымдағы таяғым тирәк булып үҫте. Балам ҡайтып өс кенә ауыҙ һүҙ әйтеп, ҡулын тотоп үлһәм ине... — тип сығара ҡайны. Барсин кәйнәһенә йүгереп бара:

Һөйөнсө, бейем,
Һөйөнсө, бейем!
Күҙең нуры тулды, бейем:
Күҙең нуры — балаң ҡайтты,
Өйөр башы — Аҡколай ҡайтты!

Ҡәйнәһе:

— Кит, йөҙө ҡара бисә, ларҡылдап йөрөмә бында! Ишегем алды колға барам тип ҡыуанып йөрөйһөңмө?! Мин Алпамышамды, арҡаһынан бер һөйөп, башынан бер һыйпап үлһәм ине, тип ултырам илап! — тип ҡыуып сығара. Барсин илап килә аш өйөнә. Алпамыша күптән балаһын ҡосаҡлап ултыра. Барсин үкһей-үкһей һөйләп бирә. Алпамыша әйтә:

— Миңә етмеш ҡат хөлләмде кейҙереп апар. Шунһыҙ әсәм танымаҫ, — ти.

Барсин быны кейендереп алып сығып китә. Атаһына алып бара. Атаһы улының ҡулынан тотоп өс ауыҙ һүҙ әйтә лә иҫе китеп ҡолай. Әсәһенә баралар. Әсәһе Алпамышаның, арҡаһынан бер һөйөп, башынан бер һыйпай ҙа аунап китә.

Алпамыша ҡәбер һатып алып, ата-инәһен ерләй, йыя атаһы менән әсәһен.

Хәҙер Алпамыша сығып китә ҡоралын алып, кейәүҙе, Ҡолтабаны, ҡаршы алырға. Теге Ҡолтаба килә ҙур ғәскәр менән, ҡоралдар менән, Алпамыша япан тирәккә барып, ҡылысын тотоп көтөп тора былярҙы.

Ҡолтаба, әллә ҡайҙан уҡ Алпамышаны таный һалып, ырғып төшә аттан, ҡулын күтәреп һөрәнләп килә:

Күнәгем дә ҡороғом,
Ҡайҙа барһам, ҡоллоғом!
Инде һинә ҡол булам!

Алпамыша япан тирәкте тамыры-уты менән аҡтарғанса тибеп ебәрҙе, ти. Теге тирәк бөтә ғәскәрҙе лә, Ҡолтабаны ла баҫып үлтереп бөттө, ти.

Алпамыша ҡайтып Барсинын алып, улы менән донъя көтөп китте, ти. Әле лә бар, ти, уларҙың зат-ырыуҙары.



## ҠУҘЫЙКҮРПӘС

*(Т. Беляев версияһы)*

Борон Иртыш йылғаһы башланып киткән ерҙә бер башҡорт ырыуында Ҡарабай тигән бик абруйлы кеше ғүмер иткән. Уның яңғыҙ көн иткәнен күреп, башҡа башҡорттар ҙа тирмә ҡороп шул тирәгә килеп ултырғандар.

Ҡарабайҙың мал-тыуары ишле булған, ырыуҙаштарын да ул мал аҫырауға һәүәҫләндергән. Уның өс бисәһе булған, иллә-мәгәр береһенән дә бала булмаған. Бының өсөн ул бик бошонған. Ҡарабай йәйләү кешеләре менән бергәләп ҡырғыҙ[9] далаларына һунарға йөрөр булған. Уңышлы юл йөрөү, табышлы һунарҙар Ҡарабайҙы бик сәмсел һунарсыға әйләндереп ебәргән. Аты яҡшы булғанлыҡтан, ул, юлдаштарынан йыш ҡына алға сығып китеп, ҙурыраҡ табыш менән әйләнеп ҡайтыр булған.

Берҙән-бер көндө һунарҙа йөрөгәндә, улар өҫтөнә бер арыҫлан килеп сыға. Элек бер ҙә күренмәгән был йыртҡыс януар һунарсыларҙы сигенергә мәжбүр итә. Тик бер Ҡарабай ғына урынынан ҡуҙғалмай тора бирә. Ул, ғәйрәтләнеп, ҡырма башлы уғын йәйәһенә ҡуя ла керешен тарта. Арыҫлан, ҡот оскос ялын тырпайтып, ҡойроғо менән янбаштарына һуға-һуға, батырға табан аҡрын ғына килә башлай; яҡынлашҡас, бер һикереүҙә уның өҫтөнә ҡапланып, өҙгөләп ташламаҡсы була. Ә Ҡарабай ҡаушап ҡалмай, уғын атып ебәрә. Уҡ арыҫландың алҡымын үтә сығып, йыртҡысты үлтерә йыға. Батыр, йәйәһен ырғытып, арыҫланға ташлана, шунан, күккә ҡарап, Аллаһы тәғәләгә шөкөр итә. Шул арала юлдаштары ла килеп етәләр. Улар Ҡарабайҙың иҫ киткес ҡыйыулығына таң ҡалып, батыр ир икәнһең, тип һоҡланалар. Ошо көндән алып уны Ҡарабай батыр тип йөрөтә башлағандар.

Ошондай уң һунарҙан ҡайтыу менән Ҡарабай батыр бөтә ауыл[10] халҡын саҡырып йыйын уҙғарған. Тәүҙә ул өйөрөнән иң һимеҙ байталын һуйып, ихлас күңелдән ярлы-ябағыны һыйлай, арыҫлан тиклем арыҫланды үлтерергә ярҙам биргән өсөн алла менән уның пәйғәмбәренә рәхмәт уҡый. Шуға өҫтәп, Мөхәммәттән алла ҡаршыһында уға берәй ир бала биреүен үтенеп, түбәнселек менән доға ҡыла.

Ашап-эсеп туйғандан һуң, ҡарттар түңәрәкләп һәшел үлән өҫтөнә ултыра, ә йәштәр көрәшергә, уҡ атып ярышырға. сабып барған ерҙән бер-берeһен ат өҫтөнән тартып төшөрөшә башлайҙар. Был көн шулай күңелле үтә. Ҡояш байып барғанда, ауыл халҡы, һый-хөрмәт күрһәткәне өсөн хужаға рәхмәттәр әйтеп, ҡайтышырға ғына торғанда таныш булмаған бер аҡһаҡалдың килеп төшөүен күреп, таралыуҙан туҡтап ҡала. Ҡунаҡтар, шау-шыуҙан тыйылып, был аҡһаҡалдың ни йомош менән килгәнен белмәксе булалар. Ҡарабай ят уҙамандың сәләмен алып, үҙен яғымлы ҡаршылай, уға һый-хөрмәт күрһәтергә тырыша. Ауыл кешеләре, үҙ-ара шыпырт ҡына һөйләшә-һөйләшә, килеүсенән берәй яңы хәбәр көтә башлайҙар. Әммә көндөң кисләп китеүе уларҙы таралышырға мәжбүр итә. Аулаҡта ҡалғас, Ҡарабай батыр ҡәҙерле ҡунаҡ менән бер аҙ һөйләшеп ултыра, арыған юлсыны борсомаҫ өсөн, уның бында ниндәй йомош менән килеүен һорашып тормай, тирмәгә индереп, түрҙәге аҫыл келәм өҫтөнә йәйелгән түшәктән ял итер өсөн урын бирә. Иртәгеһенә, ҡояш Ҡараташ һыртына күтәрелә башлаған саҡта, ят ҡунаҡ йоҡоһонан уяна, түшәгенән тороп, ниндәй йомош менән килеүен белдереп:

— Ҡарабай! Мөхәммәт[11] арҡылы һинең үтенесең Аллаһы тәғәләгә еткерелде. Ҡатының Алтыша һиңә бер ир бала табасаҡ. Пәйғәмбәребеҙ мине һиңә шуны хәбәр итергә ебәрҙе, — ти. Ошо һүҙҙәрҙе әйтеүе була — карттың күҙҙән юғалыуы була.

Ҡарабайҙың теге яман арыҫланды үлтереүе, уға ниндәйҙер бер аҡһаҡалдың килеп китеүе, йәш ҡатынының ауырға ҡалыуы тураһындағы хәбәр шунда уҡ башҡорт-ҡырғыҙ ырыуҙарына таралып та өлгөрә, тирә-яҡтағы иң яҡшы батырҙарҙың инде Ҡарабай менән танышыу теләге арта. Бөтәһенән бигерәк ҡырғыҙ батырҙарынан Сарыбай тигәне уның менән көрәшергә һәм дуҫлашырға теләй. Тиҙҙән ул теләгенә ирешә лә. Берҙән-бер көндө, юлдаштарынан айырылып, Ҡаҙкүл тигән күл буйында һунарсылап йөрөгәндән һуң ял итеп ятҡан Ҡарабайҙы тап итә. Сарыбай, истәкте[12] үҙ ереңдә күргәс, был беҙҙең яҡҡа барымтаға килгәндер, тип уйлай. Ҡырыҫ тәбиғәтле Сарыбай Ҡарабайға айбарланып, ҡырҡа тауыш менән:

— Йә хәҙер үк миңә биреләһең, йә минең ҡулымдан һәләк булаһың! — тип ҡысҡыра, керешен тартып, уғын тоҫҡай. Унан ҡалышмаҫ Ҡарабай урынынан тора һалып, бер ҡулына йәйәһен, икенсеһенә бер юлы дүрт уғын алып, дошманына яуап ҡайтарырға була. Үҙенә ҡаршы торорға әҙерләнгән истәкте күреп, Сарыбай: — Атып йыҡмаҫ борон исемеңде әйтеп ҡал! — тип ҡысҡыра.

— Мин Ҡарабай булам! — ти батыр ғорур тауыш менән.

Ҡырғыҙ, был яуапты ишеткәс, Ҡарабайҙы тубығынан ҡосаҡлап, дуҫлашыр өсөн мин ҡайҙарҙа ғына булманым, тип көрәшеү теләген белдерә. Ошолай яғымлы итеп бер аҙ һөйләшкәндән һуң, Сарыбай, нығырак дуҫлашыр өсөн, Ҡарабай батырҙы үҙ йәйләүенә ҡунаҡҡа саҡыра. Ҡарабай, быға ихлас күңелдән риза булып, Сарыбай менән уның ауылына бара. Сарыбайҙың уландары, атаһы менән бергә ҡайтҡан ят ҡунаҡты күргәс, был, моғайын, Ҡарабай батырҙыр, тип уйлайҙар, ахырҙа, атаһы ла уларҙың был уйҙарын раҫлай. Улар

кунакты, кырғыҙҙарға хас кунаксыл йола буйынса, киң күңел күрһәтеп, каршылайҙар: өлкән улы атының башынан етәкләп ала; икенсеһе менән өсөнсө улы Карабайҙың аяктарын өҙәнгенән ыскындырып, ат өҫтөнән күтәреп ала; йәнә ике улы уны култыклап атаһының тирмәһенә индерә, ә атаһы калған ике улы менән кунакты түргә уҙҙырып, келәм менән капланған ҙур мендәр өҫтөнән урын бирә.

Кәҙерле кунакка һый-хөрмәт күрһәтеү өсөн, Сарыбай бер нәмәһен дә аямай. Тирә-яктағы бөтә батырҙарҙы, атта иң оҫта йөрөүсе егеттәрҙе сакырып, арыҫлан үлтергән батыр менән якындан таныштырыр өсөн, һуғым һуйып, ҙур йыйын уҙғара. Бында һәр кем алдан калғансы ит ашап, кыҙара-бүртенгәнсе кымыҙ эсә. Шунан уйын башлап ебәрәләр: көрәшәләр, ук атышалар, ат сабышалар. Ошолай итеп, Сарыбайҙың үҙ дуҫы хакына ойоштorған был йыйыны өс көн буйы бара. Шунан һуң бөтә кунактар бындай йыйын өсөн хужаға рәхмәт әйтеп, Карабайҙың батырлығын мактап, таралышалар. Карабай ҙа өйөнә кайтырға ашыға, ни өсөн тиһәң, унын ғаиләһе лә, үҙе менән бергә һунарға сыккан иптәштәре лә был хакта бер ни белмәйҙәр әле. Тиҙерәк кайтып уларҙы тынысландырғыһы килә.

Кырғыҙ батыры, дуҫы менән хушлашып, уға ин якшы ике арғымағын бүләк итеп бирә, шунан кинйә улы Яланбайға уларҙы илтешә барырға куша. Алты көнлөк юлды үткәс, Карабай үҙ ауылына кайтып төшә, ғаиләһен, борсолоп торған ырыуҙаштарын кыуандыра. Карабайҙың ят кыр-каҙак егете менән кайтып төшөүен ишеткәс тә, уның тирмәһенә йыйылалар. Ауылдаштарының Карабайҙы ҙурлап, ысын күңелдән яратыуҙарын күреп, Сарыбай улының иҫе китә. Батыр үҙе менән килгән кунак егетте ауыл халкы менән таныштыра. Унын атаһы бүләк иткән арғымактарҙы күрһәтә. Шунан һуң Сарыбай менән кайһылай осрашыуын, уның нисек кунак итеүен, үҙен оҙатырға хатта улын эйәртеп ебәреүен бәйнә-бәйнә һөйләп бирә. Карабай кунак егете Яланбайға һый-хөрмәт күрһәткәндән һун, бүләккә каршы бүләк итеп ин якшы ике арғымағын бирә. Арғымактарҙын береһен боронғо Бохар оҫталары эшләгән эйәр менән эйәрләтә, эйәр өҫтөнә ак тула сәкмән, кама бүрек һалып, ике аҫыл келәм менән каплата; икенсеһенә юл аҙығы итеп бер турһык кымыҙ, корот, май аҫтыра. Быларҙан тыш Яланбайға йәйәһе менән бер һаҙак ук бирә. Хушлашкан сакта, атаһы Сарыбайҙы кунакка сакырыуын белдереп, уны түҙемһеҙлек менән көтөүен әйтә, ә тәүге кырпак кар төшкәс була торған һунарҙа осрашыу урынын Каҙкүл янына билдәләй. Яланбай, Карабайҙын һыйы менән бүләктәре өсөн рәхмәт әйтеп, кайтыр юлға сыға. Бер нисә көн үтеүгә, ул инде икенсе урынға күскән атаһының йәйләүенә кайтып төшә.

Яланбай атаһына Карабайҙын сәләмен әйтеп, ебәргән бүләктәрен тапшыра. Карабайҙың был дуҫлык хөрмәтен кабул итеп, Сарыбай бик кыуана, янынан осрашыу көндәрен түҙемһеҙлек менән көтә башлай.

Был көн килеп тә етә, иллә-мәгәр Сарыбай йәйләүендә әле бөтәһе лә һил була. Эттәр өрөүе лә, йылҡылар кешнәүе лә, һыйырҙар мөңрәүе, ҡуйҙар баҡырыуы ла ишетелмәй. Иртә уянған Сарыбай түшәгенән һикереп тороп сыға, кейеҙҙәр өҫтөндә бисәләренең ҡосағында иҙерәп йоҡлап ятҡан уландарының тирмәләренә бара.

Көн яҡтыра башлауға, уландарын уятып, һәр ҡайһыһына йомош ҡушып сыға. Береһенә йылҡы өйөрөн йәйләүгә ҡайтарырға бойора; икенсеһенең ҡулына ҡороҡ биреп, иң яҡшы аттарҙы тоторға, өсөнсөһөнә уларҙы биҙәлгән эйәр менән эйәрләргә ҡуша; дүртенсеһенә аҡ тирмәләрҙең иң яҡшы тигәнен алырға әмер бирә, — ул унда үҙенең дуҫы Ҡарабайҙы ҡунаҡҡа алмаҡсы була, ә бишенсе улына юл кәрәк-яраҡтары, аҙыҡ-түлек әҙерләргә ҡуша; өлкән ике улын хужалыҡ эштәрен башҡарырға өйҙә ҡалдыра.

Быларҙың бөтәһе лә үтәлгәс, Сарыбай улдары менән бергә юлға сыға. Ике көн тигәндә улар билдәләнгән ергә килеп етәләр, ашыҡҡанлыҡтан, юлда осраған йәнлектәрҙе лә аулап тормайҙар. Ҡарабай ҙа әйтелгән көнгә килеп етергә тырыша, әммә ул юлда дауыллап яуған көслө ямғырға осрай. Шунлыҡтан уға, тирмә ҡороп, көн яҡшырғанын көтөп ултырырға тура килә. Сарыбай Ҡарабайҙың оҙаҡлауына аптырап ҡала. Икенсе көн төштән һуң кире ҡайтып китергә тип торһалар, улы Ҡоланбай алыҫта күтәрелгән саң болотон күреп ҡала. Шуға улар урындарынан ҡуҙғалмаҫ булалар. Саң яҡынлашҡандан-яҡынлаша бирә, бына саң эсенән Ҡарабай, уның артынса юлдаштары күренә. Ҡыуанысы эсенә һыймаған Сарыбай уларға ҡаршы бара ла дуҫын ҡосаҡлап ала. Был көндө улар, дуҫтарса әңгәмәләшеп, уйын-көлкө менән күңел асып уҙғаралар. Үҙҙәре менән килгән йәш егеттәрҙең берәүҙәре көрәшә, уҡ атышалар; икенселәре ҡурай уйнай, йыр йырлайҙар.

Иртәгеһенә улар төркөмдәргә бүленеп, һунарға сығалар. Был көндө уларҙың һунары уңышлы була, ә көтмәгән бер хәл ике батырҙың дуҫлығын тағы ла нығыта.

Сарыбай яңғыҙы ҡуйы ҡамышлыҡ буйлап китеп барһа, уға аңғармаҫтан ғәләмәт ҙур бер юлбарыҫ тап була. Йыртҡыс уның өҫтөнә ташлана. Батыр, тайшанмайынса, уға һөңгөһөн ҡаҙай, шулай ҙа боғаҙына тейгеҙә алмай, ҡалаҡ һөйәктәрен генә үтә тишә. Яраланған юлбарыҫ, ҡотороноп, ҡулы менән батырҙың һөңгөһөнә һуға, һөңгөнөң ағас һабы селпәрәмә килә. Ҡоралһыҙ ҡалған Сарыбай атынан һикереп төшә. Ярһыған йыртҡыс, аҡты-ҡараны күрмәй, Сарыбайҙың атын ботарлап ташлай. Ошо мәлдән файҙаланып, батыр үткер ҡылысын һурып алып, көс менән йыртҡыстың биленә саба. Тәрән яраланып, ауыҙынан ҡанлы күбек урғылған януар, тағы ла нығыраҡ ҡотороноп, инде өҙгөләнгән атты ҡалдырып, эйәһенә ташлана. Сарыбай ҡылысы менән уның асыҡ ауыҙына саба, ә өлгөр йыртҡыс, ҡылыстың йөҙө тейеү менән, уны тешләп ваҡ киҫәктәргә һындырғылай, батырҙың ҡулында ҡылыстың һыныҒы ғына тороп ҡала. Шул ерҙә юлбарыҫ, күҙ асып йомғансы Сарыбайға ташланып, теше-тырнағы менән уны өҙгөләмәксе була, ләкин, батыр тимер күлдәкле булғанлыҡтан, уны бик ныҡ йәрәхәтләй алмай. Аяғына саҡ баҫып торған Сарыбай, бөтә ҡалған көсөн йыйып,

ҡулындағы ҡылыс һынығы менән йыртҡыҫҡа ҡаршы көрәшә. Унын һуғыуы инде, көсһөҙ булғанлыҡтан, юлбарыҫҡа зарар килтерә алмай. Әгәр ҙә шул ваҡыт иптәштәренән айырылған дуҫы Ҡарабай килеп сыҡмаһа, был айҡашыу, һис шикһеҙ, ҡырғыҙ батырының һәләкәте менән бөтөр ине. Ошо ҡурҡыныс хәлде күреп ҡалған Ҡарабай батыр, атынан һикерә төшә һалып, инде Сарыбайҙың алҡымына йәбешкән йыртҡыстың уң аяғын бер һелтәүҙә өҙә саба. Йыртҡыс үҙенең табышын ташлап, Ҡарабайға ынтыла, әммә башына сабылған үткер ҡылыстан үҙе батырҙың аяҡ аҫтына ауа. Йыртҡыстың баш һөйәге нисек кенә ҡаты булмаһын, Ҡарабайҙың көслө ҡулындағы үткер ҡылысы уны ҡап урталай яра.

Сарыбай, шатлығынан ни тип әйтергә лә белмәй, ҡатып ҡала. Унын урынында бүтән берәү булһа, күптән инде хәлдән тайып йығылыр ине, ул, ҡулдарын һауаға күтәреп, доға ҡыла. Шунан үлән өҫтөнә ултыра, Ҡарабай йыртҡыс менән эште бөтөрөп, дуҫын муйынынан ҡосаҡлап:

— Ваҡытында килеп өлгөрөп, йыртҡысты үлтерешергә ярҙам итеүем менән мин сикһеҙ бәхетлемен, дуҫҡайым! — ти.

— Ярҙам итеп кенә ҡалманың, — ти дуҫы, — хәлдән тайған ерҙә мине ботарлап ташларға әҙер торған йыртҡыстын теше-тырнағынан тартып алдың. Юлбарыҫты үлтереү даны һинең бер үҙенә ҡарай. Атым ботарланып ташланғайны, үҙем ҡоралһыҙ тороп ҡалғайным. Мине бәләнән ҡотҡарыр өсөн алла ебәргән һине.

Ҡарабай, иң элек һин үҙең йыртҡысты йәрәхәтләп көсөн алғанһың, тип дуҫын маҡтай. Улар бер-береһенә ошондай бик күп маҡтау һүҙҙәре әйтешәләр, әгәр ҙә шул ваҡыт Сарыбайҙың улдары менән Ҡарабайҙың юлдаштары килеп етмәһәләр, бәлки, был һөйләшеү тағы ла оҙаҡҡа һуҙылыр ине. Хәлдән тайған атаһын күргән улдары, тимер күлдәге менән өҫ кейемдәрен һалдырып, яраһын таҙа һыу менән йыуғас, яраһы ҡурҡыныс түгел икәнен беләләр. Ҡарабай етәктәге аттарҙын береһенә Сарыбайҙы атландыра. Шулай итеп, улар төйәктәренә ҡайтып китәләр. Ҡайтышлай ҡырғыҙ батыры улдарына юлбарыҫ менән нисек алышыуҙары хаҡында:

— Дуҫымдың көслө ҡулдары йыртҡысты дөмөктөрмәһә, мин хәҙер ат өҫтөндә лә ултыра алмаҫ инем, һеҙҙе лә, әсәләрегеҙҙе лә күрә алмаҫ инем. Әсәләрегеҙ тол, һеҙ етем ҡалыр инегеҙ. Шулай, улдарым, яҡшылығы өсөн һеҙ ҙә уға яҡшылыҡ менән яуап ҡайтарырға тырышығыҙ! — тип һөйләй.

Сарыбай батырлығын батыр ҙа, тотороҡло кеше түгел икән шул: Ҡарабайға әле рәхмәт әйтеүен әйтһә лә, аҙаҡ унын яҡшылығын онота.

Төйәккә ҡайтып төшкәс, өшәнгән аттарынан эйәрҙәрен алып, аттарына хәл кертер өсөн, берәр туҫтаҡ ҡымыҙ бирәләр, шунан уларҙы кешәнләп, Ҡаҙкүл буйындағы йомшаҡ үләнгә ебәрәләр. Сарыбайҙың улдары менән дуҫының юлдаштары үҙҙәре аулап алған йәнлек, ҡош иттәренән майлап-ҡоротлап аш бешерергә тотоналар, ә ике батыр Сарыбайҙың аҡ тирмәһенә инә. Шунда улар, ҡымыҙ эсә-эсә һөйләшеп, иртәгеһенә нисек һунарсыларға тип кәңәш ҡороп ултыралар. Шул арала бешеп сыҡҡан тәмле ит еҫе уларҙы тышҡа,

ҡаҙан янына тарта. Тирмәнән сығыуға, алыҫтан йән-фарман сабып килгән бер һыбайлы күренә. Тиҙҙән был ят һыбайлы уҡ алырлыҡ ерге яҡынайғас, Ҡарабай быйыҡ үҙ көтөүсеһе Ҡараман икәнен танный ҙа:

— Ниндәй хәбәр алып килдең? — тип ҡысҡырып һорай.

— Һөйөнсө! — ти көтөүсе. — Йәш бисәң Алтыша һиңә ул тапты!

Был хәбәрҙе ишетеүгә, бик ҡыуанған Ҡарабай дуҫы менән юлдаштарын ҡосаҡлап ала, шатлыҡлы хәбәр өсөн көтөүсеһенә рәхмәт әйтеп, уға үҙенең яҡшы атын бүләк итә.

Ул арала йәшел үләнгә йәйелгән келәмдәр өҫтөнә табаҡтар ҡуйылып, бешкән иттәр бүлеп һалынған була. Ҡарабайҙың юлдаштары ит турарға бысаҡ ҡайрайҙар. Бешкән ҡуй баштарын, хөрмәт билдәһе итеп, ике батырға тотторалар[13]. Ҡарабайҙың яҡшы хәбәр алып килгән көтөүсеһен дә аш янына ултырталар. Ит ашап, ҡымыҙ эсеп ҡанғас, башҡорт батыры ҡырғыҙ батырына ҡарап һүҙ башлай:

— Ҡәҙерле дуҫым! Һинең менән һунарға йөрөү бик күңелле булһа ла, улымды ҡайтып күрергә йөрәгем ашҡына. Һин үҙең дә, ата кеше булғанлыҡтан, минең хәлемде аңлап, юлға сығыуыма ҡаршы килмәҫһеңдер, тип уйлайым, — ти.

Был һүҙҙәрҙе ишетеүгә, ете бала атаһы Сарыбай, арыҫлан үлтереүсе батыр дуҫы менән айырылышҡыһы килмәһә лә, уның бик ҡайтҡыһы килеүен күргәс, ирекһеҙҙән риза була.

Һунарсыларҙың ике төркөмөндә лә аттар эйәрләнә, һауыт-һабалар ат өҫтөнә артылған була. Шул саҡта Сарыбайҙың бер көтөүсеһе сабып килеүен күреп ҡалалар. Көтөүсе, килеп еткәс тә, хужаһына: һинең һөйөклө ҡатындарыңдың береһе һылыу ҡыҙ тапты, тип хәбәр итә. Сарыбай, шатлығынан дуҫының муйынына һарылып:

— Мине үлемдән ҡотҡарған хөрмәтле дуҫым! Ҡыҙымды үҙ улыңа кәләш итеп бирәм! — ти.

Ошо һүҙҙән һуң ике дуҫ ҡосаҡлаша ла бөтәһененең күҙ алдында ҡулға-ҡул һуғышалар. Шунан һуң улар йәнә хушлашып, оҙаҡламай ҡайтанан күрешергә һүҙ бирешеп, үҙ юлдарына китәләр.

Улын тиҙерәк күрергә ашҡынған Ҡарабай, бөтә юлдаштарын артта ҡалдырып, атына ял да бирмәй, алты көнлөк юлды ике тәүлектә үтеп, йәйләүенә ҡайтып төшә. Ҡыйынлыҡ килгәндә ҡыйыу, тыныс тормошта ирәүән булған Ҡарабай үҙен бала өсөн йәне өҙөлгән кеше икәнлеген күрһәтә. Ошондай һәйбәт тойғо менән ҡайтып инеүгә, ҡатыны ҡулындағы сабыйҙы күреп:

— Сәләм! — тип ҡысҡырып, баҫҡан урынында туктап ҡала, шатлығынан йөрәге күкрәгенә һыймай дөп-дөп тибә. Ҡатын-ҡыҙға бер ваҡытта ла сәләм бирелмәүен белгән ҡатыны иренән:

— Һин был сәләмеңде кемгә бирҙең? — тип һорай. Ҡарабай:

— Донъяға яңы килгән батырға, минең ҡәҙерле улыма бирҙем, — ти ҙә ҡатынын ҡосаҡлап, улын иркәләп, икеһен дә һөйкөмлө исемдәр менән атап, яғымлы һүҙҙәр әйтә. Шунан һуң мулла саҡыртып, улына Ҡуҙыйкүрпәс тип исем ҡуштыра.

Ошо арала икенсе яҡта яңы тыуған ҡыҙын күрер өсөн Сарыбай үҙ йәйләүенә ашыға. Ул, улдарынан алға сығып, бишенсе көн тигәндә ҡайтып төшә, бала килтергән бисәһен имен-һау, ҡыҙын бик

һәйбәт хәлдә күрә. Шунда уҡ кисектермәй, мулла саҡыртып, ҡорбан салдыра һәм балаға Маянһылыу тип исем ҡуштыра.

Ошо ваҡыттан алып ике дуҫ һунарға гел бергә йөрөр, бер-береһенен ауылына килеп хәл белешер, ҡайтҡас, үҙ ғаиләләренә Ҡуҙыйкүрпәстең таҫыллығы, сослоғо хаҡында, Маянһылыуҙың иҫ киткес һылыулығы, тегеү-сигеү һөнәренә оҫталығы тураһында һөйләр булғандар.

Көндәрҙән бер көндө Ҡарабай, үҙ иптәштәре менән Сарыбай ауылына барып, уның хәл-әхүәлен белешергә булған. Ауылға яҡынлап килгән саҡта, ни күҙҙәре менән күрһендәр, ят урҙанан килгән ҡораллы баҫкынсылар уны талап, мал-тыуарын әйҙәп йөрөйҙәр икән; яраланып хәлһеҙләнгән Сарыбай үҙе һыбайлы баҫкынсыларҙың Сағыҙаҡ тигән иң сос батырына саҡ ҡаршы торған була. Был хәлде күреүгә Ҡарабай батыр үҙ дуҫына ярҙамға ташлана. Ул һөнгөһөн киҙәнеп, Сағыҙаҡҡа шул хәтле ныҡ итеп сәнсә, һөңгө уның күкрәген үтә тишеп, батырҙың кәүҙәһен эйәренән ауҙарып төшөрә. Сағыҙаҡтың һыбайлылары, үҙ батырына ярҙамға килеп, уны яҡламаҡсы булалар, әммә шунда уҡ үҙ елкәләрендә Ҡарабай ҡулының һәлмәклеген тоялар. Бына батыр һөңгөһөн ташлап, ҡылысын ҡынынан һурып ала ла шундай бер иҫ киткес көс һәм өлгөрлөк менән уңлы-һуллы сабырға керешә. Шулай итеп баҫҡынсыларҙың күбеһен ҡырып һала, ә ҡалғандары быны күреп, ҡасып китә. Ҡарабай үҙ юлдаштары менән был дошман төркөмөн ҡыйраткас, Сарыбайҙың мал-тыуарын әйҙәп барған һыбайлыларҙы баҫтыра килә. Һыбайлылар һөжүм итеүселәргә ҡаршы һуғышырға баҙнат итмәйенсә, малды ҡалдырып, йән-фарман ҡасалар. Ҡарабай, Сарыбай дошмандарының юҡҡа сығыуын күргәс, малды ҡайырып, йәйләүгә табан ҡыуырға ҡуша, үҙе яраланып хәлдән тайған дуҫына ярҙамға ашыға. Ул Сарыбайҙы үлтерелгән ҡатыны менән ике улы араһында үлән өҫтөндә иҫһеҙ ятҡан хәлдә таба. Ҡарабай иң элек Сарыбайҙың яраларын таҙа һыу менән йыуа; элек-электән шифалы үләндәрҙең дауаһын белгәнлектән, шуларҙы йыйып, дуҫының яраһына ябып бәйләй. Шул ваҡыт Сарыбай уға дуҫтарса ҡараш ташлап, ошо һүҙҙәрен әйтә:

— Арҙаҡлы дуҫым! Һин инде икенсе тапҡыр мине үлемдән ҡотҡарып, ҡатындарым менән балаларымды ҡыуандырҙың, минең таланған мөлкәтемде ҡайтарып бирҙең, ахырҙа шифалы үләндәр менән яраларымды уңалттың.

Хуш күңелле, намыҫлы Ҡарабай уның һүҙҙәренә артыҡ ҡолаҡ һалмай, шаштырып маҡтауына яуап ҡайтармай, бары тик уны бәлә-ҡазанан йолоп ҡалыу бәхетенә ирешкәне өсөн генә бөтә йөрәктән шатлана. Башҡорттар, ҡырғыҙҙар һымаҡ уҡ таҫма телле булмаһалар ҙа, тәбиғәттәре шәфҡәтле, намыҫлы кешеләр.

Сарыбайҙың хәле көндән-көн яҡшыра бара. Уның янында ун тәүлек буйы торған Ҡарабай дуҫы, хужаның сәләмәтләнеп аяҡҡа баҫыуын күргәс, үҙ юлдаштары менән ҡайтып китә. Ғаиләһе менән ауыл халҡы Ҡарабайҙы ғәҙәттәгесә шатланып ҡаршы ала. Ҡарабай иһә, үҙ халҡына хас ғәҙәт буйынса, дуҫы Сарыбай батыр менән

булған хәлде һөйләп бирергә тейеш була. Был хәл ырыуҙаштарының Ҡарабайға булган ихтирамын, мөхәббәтен тағы ла арттыра.

Арыҫлан ише арыҫлан үлтереүсе Ҡарабай үҫә барған улына карап, ғаиләһенең ҡыуанысын уртаҡлашып, шулай шат йәшәй бирә. Ҡайһы сакта, уйынға ҡыҫылып, улын үҙ тиҫтерҙәре менән көрәштерә. Бөтәһенә ҡарағанда ла теремек, таҫыллырак Ҡуҙыйкүрпәс үҙе менән көрәшкән берәүҙе анһат кына еңер булған. Көрәшеүсенең көслөрәк икәнен һиҙһә, хәйлә менән алдырган; йә янбашын бороп, йә тубығын терәп, ергә төшөргән, һис тә булмаһа, унын биленән һыға тоткан көйө үҙе ергә йығылып, көрәшсене өҫтөнән алып ташлай торған булған. Үҙе менән бер тин көслө көрәшсегә тура килеп, уны еңерҙәй булмаһа, бер тубығын ергә терәп, тегенең култыҡ аҫтына инеп алып, башы аша ергә ташлаған. Көс яғынан үҙенән ҡайтышырак булғандарын инде юғары күтәреп, башы осонда бер нисә тапҡыр өйөрөлдөргәс кенә, ергә ырғытҡан. Көрәштән һуң Ҡарабай улынан уҡ аттырған. Әммә уға балалар йәйәһен бирмәгән, ни өсөн тиһәң, Ҡуҙыйкүрпәс атаһының уғын йәйәһенән башағына тиклем тартып, йыуан имәнде яра атыр, осҡан ҡошто һауала, кейек йәнлекте йүгереп барышлай атып үлтерер булған. Улы атып алған ҡош йәки ҡоралай итенән әсәһе Алтыша уға аш бешереп бирер булған, ә ул атаһын һыйлаған. Ҡуҙыйкүрпәс һыбай йөрөүҙә лә ҡыйыу, сос булған: йүгән һуғылмаған аҫау аттарҙы ла ул шул тиклем тиҙ өйрәткән, атта оҫта йөрөүсе ҡыйыу егеттәр ҙә быға хайран калғандар. Ҡуҙыйкүрпәстең ошондай батырлыктары, ризығы бөтөп, әжәле яҡынлашыуын да һиҙмәгән Ҡарабайҙы бик ҡыуандырған.

Шул арала инде үҫеп, буйға еткән улы атаһы артынан ҡалышмай, гел һунарға йөрөй торған булған.

Берҙән-бер көндө Ҡарабай улы менән һунарҙан ҡайтып килешләй далала тибендә йөрөгән йылҡы өйөрөн ҡарап үтмәксе булған. Иң яҡшы айғырынын өйөрөнә яҡынлап килгән саҡта, ғәжәп хәл күрәләр: бөтә бейәләр һерлегеп сабышып йөрөй, ә ярһыу айғыр үҙе елә-елә өйөрөн ҡыуа, берсә артҡы аяҡтары менән өҙлөкһөҙ типкеләй, берсә артына боролоп үрәпсей ҙә алғы аяҡтары менән елгә ҡаршы тибенә, ҡолаҡтарын шымартып, ҡуршылдап, әсе сыркырай һәм үткер тештәре менән ерҙе кимерә. Ҡарабай менән улы быны күреп, ҡапылда сәбәбенә төшөнә алмайынса, аптырап ҡалалар. Был хәл бәләкәй, әммә ҡуйы бер ҡыуаҡлыҡ тирәһендә булғанлыҡтан, йылҡы өйөрөн өркөткән ҡурҡыныс нәмә күренмәҫме икән тип, Ҡуҙыйкүрпәс шунда ташлана. Ҡыуаҡлыкка яҡын килгәс, унын икенсе яғынан барып сыҡкан ғәләмәт ҙур, үҙе ҡот осҡос, ытырғаныс бер януарҙы күрә. Биле буға кеүек бөгөлгән, ерәнһыу йөнө ҡаҫмаҡланып, урыны-урыны менән төләп бөткән йәмһеҙ дәү башында оҙон ҡолаҡтары һалынып төшкән, ике ҡолаҡ араһында сак-саҡ күренеп торған күҙҙәре бар. Был йыртҡыс януарға күҙ йүгертеп алғас, Ҡуҙыйкүрпәс шундағы бер тәпәш ҡалҡыулыҡҡа менә, булып үткән хәлдең сәбәбениҙә икәнен атаһына белдерер өсөн елә-сабып бер нисә тапҡыр әйләнә, шунан теге имәнес януарҙың артынан баҫтыра китә. Ҡарабай быны күреүгә үҙе лә унын артынан төшөп ала. Теге

ҡурҡыныс януар артынан уҡ ата-ата ярһып сабып барған улын ҡыуып еткәс, уға ҡабаланмаҫҡа ҡуша, яйын белеп атмаһаң, ул имәнес януарҙы дөмөктөрә алмаҫһың, ти. Әммә ике батыр ҙа һаҙаҡтағы уҡтарын атып бөтөрөп тә атҡан бере йыртҡыстың тәненә үтмәүен, ә ташҡа тейгән еңел нәмә кеүек ҡаҡлығыуын күргәс, аптырап ҡалалар. Шул арала был ҡот осҡос йән эйәһе ҡая ташлы бейек тауға барып етә һәм шул тау итәгендәге тар ғына таш егенә инеп, күҙҙән юғала. Батырҙар, был еккә һыбай кеше түгел, йәйәүле лә үтеп инә алмаҫлығын күреп, ни эшләргә белмәй аптырап ҡалалар. Шулай аптырашып торғанда, улар янына бер ҡарт килеп туҡтай. Ул өҫтөнә оҙон йәшел сапан кейгән, башына ҙур аҡ сәллә ураған, ҡулына үҙенән оҙон таяҡ тотҡан. Ҡартлыҡтан бер аҙ бөкөрәйә төшкән, әммә әле ныҡ кәүҙәһен, таралған аҡ һаҡалын, тыныс сырайын, изгелекле ҡиәфәтен күреп, батырҙар уға ихтирам күрһәтәләр. Ошо ҡиәфәтенә ҡарап, Ҡарабай теге ваҡытта үҙенен улы тыуасағы хаҡында килеп хәбәр иткән ҡартты сырамыта, улай тиһәң, ул бөтөнләй бүтән кейемдә ине, тип уйлай йәнә. Һунарсылар, аттарынан төшөп, кәҙер итеп ҡартҡа яҡын киләләр. Ҡарт иһә, уларға сәләм биреп, һамаҡларға керешә:

Уғығыҙҙы юҡҡа ғына атаһығыҙ,
Уны барыбер еңә алмаҫһығыҙ;
Унын тәненә уҡ үтмәй, аңлаһағыҙ.
Ул ҡырағай йәнлек түгел,
Дейеү пәрейе ул,
Мөхәммәтте һәм өммәтен
Күрә алмай ул...

Батырҙар ғәжәпләнеп тынып ҡалалар, ҡулдарын күкрәктәренә ҡаушырып, баштарын эйәләр, ә әүлиә, көйөн алмаштыра төшөп, һамаҡлай бирә:

Торған урыны ер ситендә,
Ете дингеҙ аръяғында;
Ете үркәсе күккә ашҡан
Ҡомло тауҙар артында;
Шыр урмандар араһында,
Ете ҡат ерҙең аҫтында.
Ул яуыз дүҫтарынан белеп алған:
Һинең изге теләктәрең ҡабул булған,
Пәйғәмбәр һиңә батыр бүләк ҡылған,
Яландарың өйөр йылҡы менән тулған.
Дейеү шунда ант иткән, ти, дуҫтарына:
Етермен, тип, батырҙарҙың баштарына,
Туҙҙырырмын өйөр-өйөр аттарын да,
Тамуҡ үҙе шаһит булып торһон быға!..

Батырҙар, быны ишеткәс, тубыҡланалар. Әүлиә ҡарт уларҙың ҡыйыуын күреп, бер аҙ ғына тынып тора ла, аҡ һаҡалын һыйпап, һамаҡлауын түбәндәге һүҙҙәр менән бөтөрә:

Әммә Мөхәммәт илсеһе буламын мин,
Һеҙгә ярҙам итер өсөн килгәнмен мин,
Дейеүҙең йәнен бергә алышырмын,
Пәйғәмбәрҙең исеменә дан ҡушырмын.
Ләкин уны еңеү һеҙгә анһат булмаç:
Кереш йомшар, уктарығыҙ үтә алмаç,
Һөңгө тишмәç, ҡылысығыҙ киçә сапмаç.
Ә шулай ҙа уны еңеү мөмкин һеҙгә:
Уң аяғы табанында йәне булыр[14],
Шул еренә сабығыҙ һеҙ унын өҙә!

Әүлиә һуңғы һамағын бүтәндәргә ҡарағанда ҡыçҡырыбыраҡ һуҙып әйтеп бөтә лә күҙҙән юғала, ә иçтәре киткән батырҙар нисек баçып торһалар, шул килеш тороп ҡалалар.

Шул ваҡыт тау ярығынан ҡапыл болот һымаҡ томан бөркөлә, һәүҙә ул ергә ятып, һуңынан һауаға күтәрелеп, тауҙы ҡаплап ала. Шунан, майға ут төрткәндәге кеүек, ниҙер, күҙ асып йомғансы тоҡанып, тотош утҡа әйләнә. Шул ут эсенән ҡорос күлдәк кейеп, ҡулына иç киткес дәү суйын суҡмар тотҡан Дейеү пәрейе, ер ситенән килгән юлбарыçына атланып, кеше һынында килеп сыға. Ул күк күкрәгән һымаҡ тауыш менән тау түбәләрен, бар тирә-яҡтарҙы дер тетрәтеп, ошо һүҙҙәрен әйтә: «Эй, дыуамал мосолмандар! Ер йөҙөндәге булған иң көслө һәм барлыҡ йән эйәһе өçтөнән хакимлыҡ итеүсе, бөтә байлыҡты биләп тороусы Дейеү хәтле Дейеүгә ҡул күтәрергә һеҙ нисек баҙнат иттегеҙ? Мин һеҙҙе аяп, язаһыҙ ҡалдыра буламмы һуң?»

Ул арала инде батырҙар аттарына менеп тә өлгөргәндәр. Күрелгән хәлдән, ишеткән һүҙҙәрҙән тертләп ҡуйһалар ҙа ҡаушап ҡалмайҙар. Йәш батыр, бер ни тип тә яуап һүҙе ҡайтарып тормаçтан, беренсе булып һөңгөһөн төбәй һәм, ат өçтөндә йән-фарман сабып килеп, туп-тура Дейеү пәрейенең күкрәгенә сәнсә. Был сәнсеүҙән унын һөңгөһө шыраулаңып һына. Ҡуҙыйкүрпәс сабып үтеп китә, ә Дейеү тирә-яҡтағы тау-таштарҙы ҡалтыратып, шарҡылдап көлә генә. Пәрейҙең көлөүенә сыҙап тора алмаған Ҡарабай һөңгөһө менән унын ҡабырғаһына сәнсә, һөңгө селпәрәмә килә, пәрей сайҡалып китә, әммә шунда уҡ иçенә килә. Ҡарабай ҡылысын ҡынынан алып, уға ҡайтанан ташлана, Дейеү ҡотороноп үҙенең баяғы ғәләмәт суҡмарын күтәрә һәм ел-дауылға оҡшаш шау-шыу менән батырға һуға. Олоғайған, әммә әле сос Ҡарабай суҡмарҙан ялтана ла, ҡылысын һелтәп, ҡаты көс менән Дейеүгә саба. Ҡылыс Дейеүҙең ҡорос күлдәгенән осҡон сығарып, тоҙ кеүек һибелә, ә пәрейҙең суҡмары Ҡарабай атының һыртына һуғылып, уны урталай өҙә. Был ваҡытта батыр атынан һикереп төшөп өлгөргән була. Дейеү менән төрлөсә алышып, аты менән бөтә ҡоралын юғалтҡан Ҡарабай ни эшләргә белмәй аптырап ҡала...

Ошо урында башҡорт хикәйәтен һөйләүсе аҙ ғына тымып тора һәм, тыңлаусыларҙың иғтибары тағы ла арта төшһөн тип, һамаҡлап алып китә:

Эй минең яҡын дуҫтарым,
Айырылмаҫ юлдаштарым,
Ҡөслө, ҡыйыу батырҙар,
Атта оҫта сапҡырҙар,
Тыңлағыҙ минең һүҙемде!
Өләсәһенән ишетеп,
Ҡасандыр олатайым
Миңә әйтте ул һүҙҙе:
Беҙҙең бөтә ете ырыуҙа[15],
Бар ҡыр-ҡаҙаҡ урҙаһында
Шундай ҡыйыу батырҙар
Ул саҡ һирәк булғандар.
Ә һеҙ, ҡыйыу арыҫландар!
Улар ярған һуҡмаҡтан
Барығыҙ алға һаман!..

Шунан һуң сәсән көйләп китә лә батырҙарҙың алышы тураһындағы хикәйәтен түбәндәге һүҙҙәр менән бөтөрә:

Аты үлһә лә, уҡ бөтһә лә,
Батыр үс менән яна,
Ҡылды ҡырҡҡа ярыр
Ҡылысын ҡулға ала, —
Шуның менән сабыр ул,
Пәрей йәнен алыр ул.
Дейеү пәрейе шунда уҡ
Был хәлде күреп ҡала,
Йәш батырҙы юҡ итергә
Ҡулына суҡмарын ала,
Инде һуҡтым тигәндә,
Ҡуҙыйкүрпәс ялтана,
Йән асыуы менән ул
Дошманына ташлана.
Дейеү пәрейе дер ҡалтырай
Ҡылыс менән һуғыуҙан,
Алты батман суҡмары
Төшөп китә ҡулынан;
Күрпәстең дә ҡылысы
Киҫәктәргә ыуалған.
Алыш шундай ҡыҙғанда,
Ҡарабай килгән үҙе,
Пәрей суҡмарын алып,
Башына биргән үҙе.
Ошо ҡаты һуғыуҙан
Юлбарыҫ та, Дейеү ҙә

Берҙәй сайҡалып киткән;
Эйәргә баш эйгән пәрей,
Элеп ҡуйған ҡамсылай,
Ҡулдары һалынып төшкән.
Йәш батыр, әүлиәнең
Һүҙҙәрен иҫкә алып,
Аңына килмәҫ борон
Яуызды тотҡан матҡып.
Уны эйәрҙән айырып,
Янбашына күтәргән,
Пәрейҙең ҙур кәүҙәһен
Ергә быrғыта бәргән;
Быңдай ҡаты бәрелеүҙән
Хатта ер ҙә иңрәгән.
Дейеү пәрейе асыуҙан
Шыҡырҙатҡан тештәрен,
Батырҙарҙы еңергә
Әмәле юҡ, ни эшләһен?..
Ҡуҙыйкүрпәс шул ваҡыт
Билдән бысағын алған,
Дейеүҙең уң табанына
Бик ҡаты яра һалған.
Дейеү ҡот осҡос үкереп,
Шул урында йән ҡуйған.
Яраһынан ҡап-ҡара ҡан,
Ҡаҙанда ҡайнатылған
Ыҫмалалай, урғылған.
Ҡафтауҙағы йылан һымаҡ һыҙғырған ул,
Урмандағы арыҫландай үкергән ул;
Даръялағы кит һымаҡ ыңғырашҡан ул,
Далалағы ел-дауылдай һикергән ул.

Дейеү пәрейенең ғүмере ана шулай өҙөлгән, — тип һүҙен дауам итә хикәйәтте һөйләүсе.

Батырҙар, шул ерҙә һис кисекмәҫтән әрҙәнә әҙерләп, ут яғып ебәрәләр ҙә, был хәшәрәт йәндән яңылары яралмаһын тип, мәйетен яндырып, көлөн ергә осоралар[16].

Шунан һуң Ҡарабай, улы менән ҙур соҡор ҡаҙып, аты менән ҡоралдарының һыныҡтарын бергә күмә. Уларҙы ерләгән саҡта Ҡарабай, һинең кеүек тоғро дуҫты, шундай ныҡ ҡоралды ҡабат таба алмам инде, тип һөйләнә-һөйләнә илап ала. Ҡәбер өҫтөнә, дала халыҡтары йолаһы буйынса, һәйкәл рәүешендә уба өйгәс, йәйләүҙәренә ҡайтырға ашығалар[17]. Әммә батырҙарҙың икеһенә бер ат ҡалған, уныһы ла ауыр алыштан һуң хәлдән тайған була. Ҡуҙыйкүрпәс иһә, ошо хәлде күреп, атаһына хөрмәт күрһәтергә һылтау табылыуына шатлана ғына. Дала кешеләре элек-электән шулай ата-әсәһен һүҙһеҙ тыңларға, үҙенән өлкәндәргә хөрмәт итергә, уларҙың кәңәштәренә ҡолаҡ һалырға ғәҙәтләнгән. Ҡуҙыйкүрпәс, атаһының берәй һүҙ әйтеүен көтөп тормайынса, үҙ атын уның яны-

на етәкләп килтерә лә, үҙе генә атланып ҡайтыуын һорай. «Ә мин, — ти ул, — бик үк йонсомағанмын, аяҡтарым да ныҡ әле, йәйәү генә ҡайтырмын». Улар шулай ҡайтып китәләр.

Ҡарабай йәйләүенең көтөүселәре, тау башында үҙ хужаларының малдарын ҡарап йөрөгән саҡта, алыҫтан Дейеү пәрейе менән алышҡан батырҙарҙы күргәндәр, әммә ҡурҡыуҙан алыштың ахырын көтөргә баҙнат итмәйенсә, аталы-уллы ике батыр үлгәндер инде тип, ҡобаралары осоп йәйләүгә сабышып ҡайтҡандар һәм күргәндәрен халыҡҡа һөйләп биргәндәр икән. Халыҡтың был ҡурҡыныс хәбәрҙән ҡото алынған. Ни өсөн тиһәң, улар Дейеү пәрейен бер төрлө лә кеше көсө менән еңеп булмаҫын элек-электән белгәндәр. Батырҙарға булған яратыу тойғоһо уларҙы ярҙам күрһәтергә ынтылдырһа, Дейеү пәрейенән ҡурҡыу иһә уларҙы туҡтатып ҡалдырған. Ошолай бер яҡҡа ла була алмай аптырашып торғанда, улар алыҫтан бер һыбайлы кеше менән уға эйәреп килгән йәйәүлене күреп ҡалалар, юлсылар яҡынлашыуға тәүҙә Ҡарабайҙы, унан улын танып алалар. Шунда уҡ һыбайлылар сабышып, йәйәүлеләр йүгерешеп барып, батырҙарҙы ҡосаҡлап ҡаршы алалар, уларҙың Дейеүҙән ҡотолоп, һау-сәләмәт ҡайтыуҙарын күреп, шатланышалар. Дейеү пәрейенең дөмөктөрөлөүен белгәс, халыҡ бөтөнләй таң ҡала, ҡыуаныс тағы ла арта, үҙ батырҙарының ҡыйыулыҡтарын маҡтап, Дейеү пәрейе менән булған алыш хаҡында ныңраҡ белергә теләп, өҙлөкһөҙ һораша башлайҙар. Әммә йонсоған Ҡарабай тәүҙә үҙ тирмәһендә ял итергә форсат биреүҙәрен һорай, шунан һуң булған хәлде бәйнә-бәйнә һөйләп бирергә, ахырҙа бөтә йәйләү халҡын йыйып, күңелле туй яһарға вәғәҙә итә.

Таң атыр-атмаҫтан ҡасандыр Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең алтын мөгөҙлө һарыҡ тәкәһенә[18] атланып үткәнлеген белдереүсе Ҡош юлын йондоҙҙар уратып алған ай яҡтыртҡан саҡта уҡ Ҡарабайҙың ҡыҙыҡһыныусан ауылдаштары уның тирмәһе янына йыйылып, йоҡоһонан уяныуын көтәләр. Инде ҡояш та ҡалҡып, юғары күтәрелә, Ҡарабай һаман уянмай. Йыйылған халыҡ тын ғына көтөп ултыра бирә. Бына йылҡы өйөрө төшлөктәге ҡыҙыу ҡояш эҫеһенән ҡасып һыулауға төшә башлай. Шул ваҡытта ғына Ҡарабай йоҡоһонан тороп, улы менән икәүләшеп дуҫтары янына килеп сыға. Улар шатланышып был икәүҙе сәләмләйҙәр. Йыйылған халыҡҡа ҡыуанған Ҡарабай әүлиәнең күренеүе, уның биргән кәңәштәре, шулай уҡ Дейеү пәрейенең төрлө ҡиәфәткә инеүе, уның үлтерелеүе, аҙаҡ килеп яндырылыуы хаҡында түкмәй-сәсмәй һөйләп бирә. Шунан һуң йыйылышып намаҙ уҡыйҙар. Өлкән батыр, үҙ ауылының хөрмәтле уҙаманы булғанлыҡтан, намаҙҙы мулла янында ултырып, йәш сағында үҙе үлтергән арыҫлан тиреһенән яһалған намаҙлыҡ өҫтөндә уҡый. Был тирене ул намаҙлыҡтан башҡа бер нәмәгә лә ҡулланмаҫ булған. Ҡарабай батыр артында ҡарттар, шунан инде өлкәнерәктәр менән йәштәр йөгөнләп ултырғандар. Намаҙ уҡып бөткәс, ошо йыйында Ҡуҙыйкүрпәсте ҡыйыу батыр тип атайҙар. Шул көндән алып ул ошо исем менән бөтә дала халыҡтарына танылған.

Артабан батырҙар, йәйләү халҡын ике табынға бүлеп, ике байтал итенән бешерелгән бишбармаҡ менән һыйлай башлайҙар. Ҡарттар менән күренекле ирҙәр беренсе табынға ултыра. Унда түшәлгән келәм өҫтөнә ашъяулыҡҡа дәү-дәү табаҡтар менән ит, һаба-һаба ҡымыҙ ҡуйыла. Икенсе табын аҡ кейеҙ өҫтөнә аяҡ салып ултырған йәштәрҙән, бәләкәстәрҙән тора, уларға ла күпме кеше булһа, шул саҡлы ит менән ҡымыҙ ҡуялар. Тәүге табында ултырыусыларҙы Ҡарабай үҙе, икенсе табындағыларҙы Ҡуҙыйкүрпәс һыйлай. Табаҡтағы ит ашалып, һабалағы ҡымыҙ эселеп, һый мәжлесе тамамланғас, ҡунаҡтар хужаларға рәхмәт әйтеп, урындарынан торалар. Инде ҡалған көндө улар көрәшеп, ат саптырып, ҡурай уйнап, йыр йырлап бик күңелле уҙғаралар. Йырсылар Дейеү пәрейенең нисек ҡыйратылыуын һүрәтләндереп, һынландырып йырлайҙар. Бына шул йырҙарҙың береһе:

Һай, данлыҡлы ҡурайсылар[19],
Һоҡландырып уйнаусылар,
Буласаҡты юраусылар!
Тартығыҙ ҡурайҙы нығыраҡ,
Йырлатығыҙ моңлораҡ!
Асыҡ һеҙгә күп заман,
Барлыҡ батыр, уҙаман,
Исемдәре, эштәре, —
Уларҙан ни уҙмаған...
Бейек убаға менеп,
Имән төбөнә теҙелеп,
Һөйләп бирегеҙ хаҡты,
Баштан уҙған заманды —
Хәҙерге көнгә саҡлы.
Борон булған хан-батырҙар:
Искәндәрҙәр[20], Батыйҙар[21],
Аҡһаҡ Тимер[22] башҡалар.
Һанһыҙ яуҙар туплаған,
Яттар еренә укталған,
Ҡаршы торған халыҡтарҙы
Аҫҡан, киҫкән, туҡмаған;
Хәләл ҡандар ҡойолған,
Тупраҡ ҡанға туйынған;
Яуҙан ҡотайып ҡайтҡандар,
Үҙ дуҫтарының да ситтә
Баштарын юғалтҡандар;
Етем ҡалған өйҙәргә
Илаш, ҡайғы, зар ҡайтҡан,
Хан-батырҙар донъяға
Алама дан таратҡан.
Беҙҙең ирҙәр ҡаһарман,
Сит ерҙәргә бармаған,
Ҡанға ҡанһырамаған,
Унда уттар һалмаған,

Түкмәгәндәр ҡара ҡан
Йыйыр өсөн харам мал;
Ҡырған улар дошманды
Донъяла иң уҫалды;
Ҡурҡынысты еңгәндәр,
Илгә именлек биргәндәр;
Беҙҙең батыр-сапсандар
Илгә зарар итмәгән,
Бары һунар сапҡандар.
Ҡарабай айбар ир булған,
Һыйсанлыҡта бер булған,
Аттары елгер булған,
Мал-тыуары күр булған;
Ҡатындары йәш, матур,
Улы тыңлаусан: батыр, —
Бына шулар хаҡында
Донъя күп дан таратыр.

Батырҙар ауыл халҡы менән был көндө шулай күңел асып уҙғаралар. Ҡараңғы төшкәс кенә, һәр кем үҙ тирмәһенә таралыша.

Иртәгеһенә Ҡарабай менән улы ял итә. Шулай ҙа, һунарға йөрөргә бик һәүәҫ булғанлыҡтан, ул көндө үҙҙәренә яңы ҡоралдар — йәйә менән уҡтар, һөңгө менән ҡылыстар яһайҙар. Ат та, ҡорал да, юл кәрәк-яраҡтары ла әҙерләнеп бөткәс, улар иптәштәре менән бергә бик алыҫ ергә — ҡырғыҙ далаларына һунарға сығып китәләр. Бәләкәй-бәләкәй төркөмдәргә бүленеп, улар өс көн буйы һунарҙан көн дә кис табыш менән ҡайталар. Дүртенсе көндө һунарға таң атыр-атмаҫтан сығалар. Улынан, үҙ юлдаштарынан айырылып киткән Ҡарабай бер ҡоралайға осрай. Быны ҡоралай ҡая ташлы үркәсле тау битләүенән тәрән йырындар аша күҙ эйәрмәҫ тиҙлек менән һикереп ҡасып китә. Ризығы бөтөп[23], әжәле[24] яҡынлашыуын һиҙмәгән Ҡарабай, ҡурҡыныс урындарға ҡарап та тормаҫтан, ҡоралай артынан күҙ яҙлыҡтырмай саба ла саба. Шул мәлдә, әлеге үлтерелгән Дейеү пәрейенең Ҡарабайҙы һәләк итеп, үс алырға уйлап ҡына йөрөгән ҡустыһы, уның ошондай ҡурҡыныс урындарҙан сабып килеүен күреп, бик уңай тура килде бит әле тип, үҙенең мәкерле уйын бойомға ашырмаҡсы булған. Көс менән батырға күрәләтә ташланырға баҙнат итмәгән был пәрей ана шулай мәкер менән эш итергә булып, бөркөткә әүерелә лә кереше тартылған йәйәһе менән ҡоралайҙы ҡыуып текә тауҙан түбәнгә сабып барған Ҡарабайҙың башы тапҡырына юғарыға күтәрелә; шунан ҡанаттарын йыйып, тырнаҡтарын тарбайтып, йәшен тиҙлеге менән шыйылдап түбәнгә шыҡыя һәм был хәйләне алдан һиҙмәгән Ҡарабайҙы аты менән бергә тау итәгендәге упҡынға тибеп төшөрә. Быны батыр бөтөнләй иҫһеҙ ята. Ҡолаҡтарынан, ауыҙ–танауынан ҡан аға. Аты, башы менән ташҡа һуғылып, тын да алмай йән биргән. Яуыз сихырсы, ҡурҡаҡ ҡуянға ташланған ҡыйғыр кеүек, батырға ташланып, уның иҫһеҙ кәүҙәһенә үткер тырнаҡтары, осло суҡышы менән өҙгөләргә керешә, ә үҙе былай тип һөйләнә: «Ер йөҙөндә иң

көслөләрҙән булған ағайымды үлтергәнен өсөн ҡаты язам һинә ошо булыр. Улыңды ла, үҙең кеүек үк, йәки унан да ҡатыраҡ интектереп дөмөктөрәсәкмен, ҡәһәрле ғаиләңде лә ҡырасаҡмын! Һинең таянысын Мөхәммәт ҡайҙа хәҙер? Бында килһен дә, шәп булғас, һине минең тырнаҡтарымдан ҡотҡарып ҡараһын!» Бөркөт һынлы пәрейҙең суҡышы менән тырнаҡтары, өҙгөләй торғас, Ҡарабайҙы иҫенә килтерә, ул бөркөт әйткән һүҙҙәрҙе ишетә, уның үлтерелгән Дейеү пәрейенең ҡустыһы икәнен аңлай. Бына Ҡарабай, аҡтыҡҡы көсө менән ҡыйыулығын туплап, бөркөттөң ике аяғын бер юлы эләктереп ала һәм шул килеш киҙәнеп, уны йән көскә ташҡа бәрә. Бынан сихырсының һөйәктәре шытырҙап китә. Ошоно күреп күңеле күтәрелгән батыр, сихырсының аяҡтарын ҡулынан ысҡындырмайынса, аяғы менән муйынына баҫып, бөтә көсө менән башын өҙә тартып ала. Ә үҙе, һуштан яҙып, ергә ауа һәм шунда ук йән бирә.

Шул арала атаһын эҙләп йөрөгән Ҡуҙыйкүрпәс янына теге әүлиә өсөнсө тапҡыр килеп сыға.

— Туҡта, Ҡуҙыйкүрпәс! Атайыңды даланан эҙләмә, — ти ул. — Уның ризығы бөтөп, әжәле килеп етте инде. Анау ҡая ташлы тауға бар, унда атайыңдың мәйетен табырһың. Шунда, бейек тау башында, үҙен ҡәҙерләп ерлә! — ти. Шунан әүлиә уға Ҡарабайҙың яуыз пәрей менән һуғышыуы, пәрейҙең мәкерлелеге, ә Ҡарабайҙың батырлығы хаҡында һөйләп биреп, былай тип өҫтәп ҡуя. — Атайың хаҡ мосолман, Мөхәммәттән тоғро ҡоло ине. Ул, уның яуыз дошманын үлтереп, үҙенең һуңғы һулышын да уға бағышланы. Ошоноң өсөн һәм үҙ ғүмерен яҡшылыҡ, изгелек менән үткәргәне өсөн, пәйғәмбәребеҙ уның әрүәхе дин әһелдәре йәшәгән ожмах түрендә булыуын теләй; ул унда һылыу хур ҡыҙҙары араһында мәңге рәхәтләнеп торасаҡ! Һин дә, атайың шикелле, изгелекле бул, шундай ук бәхеткә ирешерһең.

Ошо һүҙҙәренән һуң әүлиә юҡ була. Ҡурҡыныс килгәндә ҡаушау белмәҫ Ҡуҙыйкүрпәс был юлы әүлиә күрһәткән тауға ҡарап ҡурҡаҡ ҡуян шикелле генә сабып китә. Шунда атаһының йәнһеҙ кәүҙәһен таба. Атаһын ҡосаҡлап үкһеп-үкһеп илай, унан айырылып ҡалғаны, уны һаҡлай алмағаны өсөн үҙен ҡәһәрләй.

Ҡуҙыйкүрпәсте алыҫтан күреп ҡалған юлдаштары ла уның артынса йән-фарман сабып килеп етәләр: Ҡарабайҙың үлек кәүҙәһен ҡосаҡлап, ул беҙҙең атабыҙ ине, ә беҙ уның етем ҡалған балалары, тип илашалар. Бөркөт һынлы пәрейгә ләғнәт уҡыйҙар, хәшәрәттең емтеген утҡа яндырып, көлөн елгә осоралар. Ҡарабайҙың мәйетен йыуып, иңбаштарына күтәреп алып бейек тау башына мендерәләр һәм, әүлиәнең васыяты буйынса, шунда ҡәҙерләп ерләйҙәр, йола буйынса, ҡоралдарын да үҙе менән бергә күмәләр[25]. Батырҙың иҫтәлегенә бейек уба өйәләр. (Шул замандан алып был убаны Ҡаратау тип йөрөтәләр.) Шунан һуң ырыуҙаштары, Ҡарабай менән хушлашып, бергә һунарҙа йөрөгән саҡтарын иҫкә алып, уба түңәрәтеп сабышалар ҙа, шунан ҡәберенә баш эйеп, бойоҡ ҡына ҡайтып китәләр.

Шул арала һунарсыларҙың береһе, Ҡарабайҙы эҙләп-эҙләп тә тапмағас, йәйләүгә ҡайтҡан, батыр бында ла булмағас, уның күп-

тән инде бер үҙе айырылып китеүен, һаман кире әйләнеп килмәүен һөйләп бирә. Был хәбәр ауылдаштарын бик нык борсой, улар шунда уҡ ат менеп Ҡарабайҙы эҙләргә ҡырғыҙ далаларына сығып китәләр. Батырҙың ҡатыны Алтыша, аҡылдан шашыр хәлгә етеп, баяғы юлдашы килгән яҡҡа табан йүгерә. Алыҫтан һунарсыларҙың ҡайтып килеүҙәрен күргәс, ул бик ҡыуана; әммә тегеләр яҡынлашҡан һайын аттары менән үҙҙәрен танып, Ҡарабайҙың атын да, үҙен дә күрә алмағас, үкһеп илай-илай ошо һүҙҙәрҙе һамаҡлай:

Ҡарабайҙың менгәнен —
Дуҫ толпарын күрмәйем.
Аты елдәй елә ине,
Аяғы ергә теймәй ине;
Муйыны аҡкош муйыны ине,
Дуғаланып торошо
Балдаҡ менән тиң ине.
Йөрәгем янып яратҡан,
Батыр даны таратҡан
Ҡарабайҙы ла күрмәйем.
Ул ир ине, ир ине,
Ҡыйыулыҡта, батырлыҡта
Үҙ илендә бер ине...

Шул арала Ҡарабайҙың юлдаштары ауылға килеп етәләр, ә Алтыша уларға аттарынан төшөргә лә ирек бирмәй, һамаҡлап һорашырға керешә:

Ҡайҙа, улым, атайың,
Батыр Ҡарабайҡайым?
Ҡайҙа минең иргенәм,
Йәнем һөйгән бергенәм?
Ҡарабайҙың дуҫтары,
Миңә хаҡты асығыҙ:
Ҡайҙа һеҙҙең башығыҙ?

Ҡуҙыйкүрпәс менән юлдаштары аттарынан төшөп, Ҡарабай батырҙың үлеме хаҡында илай-илай һөйләп бирәләр. Быны ишетеүгә йөрәге ярылырҙай булып типкән Алтыша, бөтә быуындары ҡалтырап, һушын юғалтып ергә ауа. Ҡуҙыйкүрпәс иптәштәре менән уны күтәреп алып инә. Бер аҙҙан әсә иҫенә килгәс, илай-илай йәнә һамаҡлай башлай:

Бәлә-ҡаза килерен
Көн элгәре һиҙгәйнем:
Уҙған төнөн йоҡомда
Хәтәр бер төш күргәйнем.
Яланда япа-яңғыҙ
Батырым ята, имеш,
Ҡымыҙ ҙа эсмәй, имеш,

Ҡорот та еймәй, имеш;
Усал йыртҡыстар үҙен
Ҡамап алғандар, имеш.
Ҡаты яны яҙылған,
Кереше лә өҙөлгән,
Уғы урталай һынған,
Тос уҡ башы ярылған;
Ҡулында һөңгө тоталмай,
Һөңгө осо тозоролған.
Ай, минең яҡты ҡояшым,
Ниңә шулай тиҙ баттың?
Инде мәңге тыумаҫһың,
Күҙ йәшемде йыумаҫһың,
Ишетмәҫһең аһымды,
Көнөм сыуағы булмаҫһың.
Аусы тоҙағына ҡапҡан,
Йылы ояһын һыуытҡан,
Балаларын юғалтҡан,
Ашамай-эсмәй, бойоҡҡан,
Тар ситлеккә ябылып
Тилмергән меҫкен ҡош һымаҡ,
Мин дә ҡалдым яңғыҙаҡ.
Мин дә, бығау кейгәндәй,
Көнгә ҡарай алмайым,
Ашамайым, эсмәйем,
Ҡанға ҡатты иренем,
Кибеп бөттө тамағым.
Алыр һулышым тарыҡты,
Күкрәгемә ҡыҫылып,
Йөрәгем туңып бөттө,
Күҙҙәремдә йәш кипте.
Бөтә ҡоштар араһында
Иң татыуы аҡҡоштор,
Аусы уғы аҡҡошто
Йән дуҫынан айырһа,
Балаларын эйәртеп
Йөҙөр тын күл өҫтөндә,
Дуҫына һөрән һалыр;
Ҡаршы яуап килмәһә,
Үртәнеп үҙен талар,
Бөтмәҫ хафаға ҡалыр.
Мин дә, ошо аҡҡоштай,
Йән дуҫымдан айырылдым,
Йәп-йәш батыр улым менән
Шыпа етемгә ҡалдым.
Инде шатлыҡ таба алмам,
Ҡунаҡтар ҡаршыламам,
Йән дуҫым күрә алмам,
Хәбәр ҙә ала алмам.

Ҡуҙыйкүрпәс, әсәһе менән генә ҡалғас, мин һине ихлас күңелемдән хөрмәт итеп, һүҙенде һәр саҡ тыңлармын, минә ышан, тип, атайым изгелекле кеше ине, әүлиә һүҙҙәренә ҡарағанда, Мөхәммәт уға дин эһелдәре өсөн вәғәҙә ителгән ожмахтың түрен биргән, тип әсәһен йыуатырға тырыша. Шулай итеп, әсәһенен ҡайғыһын бер ни тиклем еңеләйткәс, атаһының етеһен уҙғарырға әҙерләнергә кәңәш бирә[26]. Алтыша, Сарыбай йәйләүенә алдан илсе ебәреп, Ҡарабайҙың вафатын хәбәр иттерергә, әйттерелгән ҡыҙы хаҡында ла иҫенә төшөрөп, дуҫының етеһен уҙғарыу өсөн уны үҙҙәренә саҡырыу кәрәклеген иҫкәртә. Ҡуҙыйкүрпәс, атаһын юғалтыуға нисек кенә ҡайғырмаһын, әсәһенен был һүҙҙәрен ишеткәс, күңеле күтәрелеп китә. Атаһы буласаҡ кәләшенең һылыулығын, тегеү-сигеү һөнәренә оҫталығын һәр саҡ маҡтап, Сарыбай йортонан йыш ҡына Маянһылыу эшләгән сигеүле таҡыя, нағышлы серге, биҙәкле артмаҡ кеүек бүләктәр алып ҡайтҡанлыҡтан, ҡыҙҙы бөтөнләй күргәне булмаһа ла, уны күптән ярата ине. Ҡуҙыйкүрпәс был бүләктәрҙе фарсы нағыштарынан өҫтөн күреп, үҙ тирмәһендәге зиннәттең иң аҫылы, тип иҫәпләй ине. Әсәһенән бойороҡ бирелгәс тә, ул атаһының элекке иптәштәренә китә, уларҙың Сарыбайға илсе булып барыуҙарын үтенә. Тегеләр, быға риза булып, юл кәрәк-яраҡтарын әҙерләйҙәр ҙә иртәгеһенә үк сәфәргә сығалар. Ҡуҙыйкүрпәс иһә, буласаҡ ҡайным Сарыбайҙы алып ҡайтырҙар, тип ышанып ҡала, инде үҙем хужа булып, уға көн элгәре һый-хөрмәт күрһәтермен, шунда унан фатиха алып, оҙаҡламай туй ҙа уҙғарырмын, тип уйлай.

Шул арала Сарыбай йәйләүендә бының бөтөнләй киреһе эшләнеп ята икән.

Сарыбай Ҡаҙҡул янында юлбарыҫ үлтергән батыр мин инем ул, тип шапырынған. Бына шунан уның даны бөтә ҡырғыҙ урҙаларына таралған. Ошо ялған дан уны атаҡлы хан һәм иң яҡшы батырҙар менән аралашыуға килтергән. Маянһылыуҙың гүзәллеген, өҫтәүенә атаһының уңышлы барымтанан һун байығыуын да күреп инде, бик күптәр Сарыбай менән ҡоҙа булышырға тырышҡан. Сарыбай, үҙенең ошо өҫтөнлөгө менән маһайып, батырҙарҙың был теләктәрен ҡырҡа кире ҡаға килгән, ахырҙа, бер йыраҡ ырыуҙың ханы менән һүҙ ҡуйышып, ҡыҙы Маянһылыуҙы шуның улы Айҡара солтанға бирмәк булған. Шул арала хан тарафынан мәһәр менән илселәр ҙә килеп төшкән. Илселәр хан һүҙен ҡабатлап, Сарыбайҙың үҙ йәйләүен Ҡараһыу йылғаһы буйына күсереүен һорағандар. Ана шул йылға буйына ике яҡтың да туған-ырыуҙары алдында егет менән ҡыҙ осрашҡандан һуң, туй уҙғарырға тейеш булғандар.

Тап ошо ваҡытта Ҡуҙыйкүрпәстән Сарыбай йәйләүенә килеп төшкән илселәр Маянһылыуҙың инде Айҡараға әйттерелеүен ишетеп, бик ғәжәпкә ҡалалар. Шулай ҙа батырҙарҙың элекке дуҫлығын, үҙ балаларын мотлаҡ ҡауыштырыу ниәтен белгән илселәрҙең, үҙҙәре лә саф күңелле булғанлыҡтан, быға ышанғылары килмәй тора. Сарыбайға үҙе биргән вәғәҙәһен иҫенә төшөрөп, уны үҙ яҡтарына ауҙармаҡсы булалар. Әммә был теләктәре барып сыҡмай. Бер нисә тапҡыр үтенеп һорағандан һуң ғына тәкәббер Сарыбай уларҙы үҙ тирмәһенә индерә. Келәм өҫтөндә хан улдары

менән уларға барасаҡ илселәре араһында ултырған Сарыбай, килеүселәргә эре генә ҡараш ташлап:

— Истәктәрҙең миндә ниндәй йомошо булыуы бар? — тип һорай. Уның был һорауына илселәр:

— Беҙ ҡасандыр һине үлемдән ҡотҡарған дуҫың Ҡарабай батырҙың донъянан китеүен хәбәр итергә уның тол ҡатыны Алтыша менән улы Ҡуҙыйкүрпәс тарафынан ебәрелгәнбеҙ. Ҡарабайҙың ҡайғылы ҡатыны менән кейәүең буласаҡ улы һинең, үҙ бала-сағаң менән килеп, етемдәрҙең хәл-әхүәлен белешеүеңдә, үҙ дуҫыңдың етеһен үткәреүҙә ҡатнашыуыңды, ошоноң менән бергә ҡыҙың Маянһылыуҙы дуҫыңдың улы Ҡуҙыйкүрпәскә бирергә ҡуйышҡан һүҙеңде дөрөҫләүҙе һоранылар. Әгәр ҙә инде быға бер төрлө лә ҡаршылыҡ юҡ икән, дуҫыңдың етеһенән һуң туй ҙа яһарға теләктәрен белдерҙеләр, — тиҙәр.

Илселәр тынып ҡала, тиҫкәре холоҡло Сарыбай, уларға бик тәкәббер ҡарап:

— Хәҙер үк минең йәйләүемдән китегеҙ һәм һеҙҙе бында ебәреүселәргә Сарыбай батыр килеү түгел, уларҙы белергә лә теләмәй, истәктәр менән туғанлашыуҙы бөтөнләй кәрәкле тапмай, тип әйтегеҙ, — ти. — Айкара солтанға әйттерелгән ҡыҙын Сарыбай бахыр истәккә бирер тигән уй нисек уларҙың башына килде икән, тип әйтегеҙ, — ти.

Башта илселәрҙең был һүҙҙәргә ышанғылары килмәй тора. Ни өсөн тиһәң, улар Ҡарабайҙың бер нисә тапҡыр Сарыбайҙы үлемдән ҡотҡарып, мөлкәтен, мал-тыуарын һаҡлап алып ҡалыуын, унын менән ныҡ дуҫ булыуын яҡшы беләләр ине. Дуҫлыҡты онотоп, үҙе биргән һүҙҙән баш тартыуҙы, изгелеккә яуызлыҡ менән яуап ҡайтарыуҙы улар баштарына ла һыйҙыра алмайҙар. Әммә шашынған Сарыбай Ҡуҙыйкүрпәс илселәрен һис кисекмәҫтән үҙ йәйләүенән ҡыуып ебәрергә бойора.

Бер нисә көндән һуң инде Сарыбай хан менән һүҙ ҡуйышҡан урынға — Арал диңгеҙенә ҡойған Ҡараһыу буйына, Амударъя тамағы тирәһенә — күсеп тә китә.

Ҡуҙыйкүрпәстең илселәре, яҡшылыҡҡа яманлыҡ менән яуап ҡайтарған Сарыбайға асыу тотоп, ҡайтып төшәләр, булған хәл-әхүәлде бәйнә-бәйнә һөйләп бирәләр. Ҡыр-ҡаҙаҡтарҙың дуҫлығы ныҡ булмауын, үҙ һүҙҙәрендә тормауын, башҡорттарға ҡарата үҙҙәрен эре тотҡан булыуын мәрхүм иренән элек тә күп ишеткән Алтыша быға артыҡ ғәжәпләнмәй. Улына ҡара эсле Сарыбайҙы ла, уның ҡыҙын да онотоорға кәңәш бирә, бүтән ырыуҙан бер тигән кәләш әйттерергә вәғәҙә итә. Иллә-мәгәр йәш күңеле елкенгән Ҡуҙыйкүрпәс бөтөнләй киреһен уйлай. Бәләкәй саҡтан уҡ Маянһылыуҙың гүзәллеген маҡтауҙы гел ишетеп килгәнгә, уны үҙ кәләшем тип йөрөгәнгә, Сарыбайҙың был кире ҡағыуын әсәһе кеүек тыныс ҡына кисерә алмай. Әсәһенең ҡайғыһын арттырырға теләмәгәнлектән генә, уға буйһоноп, кәңәше менән тыштан килешкән була. Ә үҙе, бер нәмәгә ҡарамай Сарыбай йәйләүенә барып, Маянһылыу риза булһа, уны алып ҡасырға уйлай... Ете ырыуҙың алсаҡ кешеләре! Гүзәллекте яратыу йыһандағы бөтә нәмәне бе-

леүҙәре менән дан тоткан халыктарҙы кайһылай көслө борсоһа, һеҙҙе лә шул тиклем нык борсой. Кҙыйкүрпәстең Маянһылыуҙы өҙөлөп яратыуы үҙ әсәһен дә алдарға мәжбүр итә.

Ирен иҫкә алыу мәжлесен күптән уҙғарырға йыйынған Алтыша, үҙ йорто халкының бөтәһен дә сакырырға кушып, улын ауылдарға ебәрә.

Сакырылған кешеләр иң якшы аттарын менеп, Алтыша тирмәһе янына йыйылалар һәм, мулла менән Кҙыйкүрпәскә эйәреп, Карабай мәрхүм кәбере янына юл тоталар; ук атырлык ер барып етмәҫ борон, киблаға йөҙ куйып туктайҙар ҙа, аттарын калдырып, кәбер янына йәйәү китәләр. Ошо ерҙә мулла, касандыр Карабай намаҙлык итеп йәйеп йөрөткән арыҫлан тиреһе өҫтөнә йөгөнөкләп, үҙ эргәһенә Кҙыйкүрпәсте ултыртып, көрьәндән аят укый башлай. Калғандар тын ғына тыңлайҙар, ғүмер буйы изгелекле кеше булғаны өсөн Карабайға ихлас күңелдән доға кылалар. Ғибәҙәт кылынып бөткәс, мәрхүмдең кәберенә баш эйәләр ҙә, аттары янына барып, уларҙы сабышка әҙерләй башлайҙар.

Мәрхүмде иҫкә алыу мәжлесендә унын үҙ ғүмерендә яраткан мәрәкәләрен кабатлау элек-электән йола булып калған. Кҙыйкүрпәс, атаһының бойороғон үтәгәндәй, атта сабышыусылар өсөн бүләк итеп кәбер тирәһенә ете бәйге куйып сыға. Беренсеһенә алма сыбар ат бәйләй, икенсеһенә тимер күлдәк куя, өсөнсөһөнә — көмөш кыяклы эйәр, дүртенсеһе — йәйә менән ук, бишенсеһенә — семәрләнгән көмөш һаплы кылыс, алтынсыһына — көпләнгән камыш һаплы һөңгө, етенсеһенә кырғыҙҙар эшләгән якшы калта куя. Атта ярышыусылар үҙ бәйгеләрен алыҫтан күрһендәр өсөн был яу корамалдарының бөтәһен дә оҙон колға башына элдерә. Кҙыйкүрпәс, ярышта аттары уҙып килеүселәр атайым кәберендәге бына ошо бүләктәрҙе алалар, тип бөтә йыйынға белдерә. Үҙе атта сабышыусылар менән бергә бәйге башланыр урынға китә. Ғәҙәттәгесә йөрөгәндә сирек көнлөк ерҙә туктап, ук атымы ара алға сыға, шунан тороп ул ярышты башларға ишара яһай, ә үҙе кемгә ниндәй бәйге эләгеүен күрер өсөн алдан сабып китә.

Шул вакыт бөтәһе лә һөрән һалып, дауыл һымак куҙғалып сабалар. Акбуҙ атка атланған Алдар аранан һурылып алға сыға. Бүтәндәре, кыл кеүек тартылып, унын артынан һуҙылалар. Алдар, бәйгегә иң алда сабып килеп, корҙаш дуҫы Кҙыйкүрпәс кулынан алма сыбар арғымакты етәкләп ала. Унан ике генә һикерешкә артта калып килгән Ишкара икенсе бәйгегә етеп, колға осонан тимер күлдәкте тартып ала. Унан үҙ атының башы тиклем генә калышып килгән ак һакаллы Аралбайға — Карабайҙың айырылмаҫ дуҫына — көмөш кыяклы эйәр эләгә. Был өсәүҙән ук атымы ер, арттарак бер туған ике һунарсы Бүребай менән Күсәрбай йән-фарман ярышып килә, бер бейәнән тыуған аттары колакка-колак килеп сабалар. Шулай ҙа, Бүребай атына йышырак һуғып, шәберәк һөрән һалғас, аты алға һурылып сыға, һәм егет дүртенсе бәйгене — колға башындағы йәйә менән укты — эләктереп алырға өлгөрә. Тап ошо мәлдә Күсәрбай ҙа семәрләнгән көмөш тоткалы кылысты һыпыра тартып ала. Улар артынса Карабайҙың замандашы, күптән инде

дала уйын-көлкөһөнән һыуынған, һунарсылыҡты ташлаған Муйнаҡ аҡһаҡал[28], батырҙың иҫтәлеген хөрмәтләйһе килеп, ҡара ат өҫтөндә саба. Ул үҙ өлөшөнә төшкән алтынсы бәйгене — ҡамыш һаплы һөңгөнө — ала һәм, ярһыған атын тыя алмайынса, бәйге ҡуйылған ерҙән алыҫҡа үтеп китә. Шунан һуң уның йәш кенә улы, сос Байегет, бәйге алыуҙан өмөттәрен өҙөп, тырым-тыраҒай сабып килеүсе һыбайлылар төркөмөн артта ҡалдырып, аҙаҡҡы бәйге булған ҡалтаны ала. Ҡарабай иҫтәлегенә үткәрелгән бәйге шуның менән тамам була.

Бынан һуң Ҡуҙыйкүрпәс көрәшселәргә бәйге билдәләй. Беренсеһенә кәрмәзин елән ҡуя, икенсеһенә — ебәк фарсы билбауы, өсөнсөһөнә — мәрйен теҙелгән ҡама ҡырпыулы таҡыя, дүртенсеһенә — ҡара төлкө менән ҡырпыуланған ҡолаҡсын, бишенсеһенә дәү юлбарыҫ тиреһе билдәләй.

Башҡортса көрәш түбәндәгесә уҙғарыла.

Үҙе менән тәүге алышыусыны еңгән көрәшсе йәнә икенсеһен дә, өсөнсөһөн дә еңгәндән һуң ғына беренсе бүләкте ала. Әммә икеһен еңеп тә, өсөнсөһөн йыға алмаһа, бүләктән мәхрүм ҡала; уны еңгән көрәшсе бүләкте алыр өсөн тағы ике көрәшсене еңергә тейеш. Ошолай итеп, бәйгегә ҡуйылған бүләктәр бирелеп бөткәнсе, көрәш бара.

Йыйынға килгәндәрҙең бөтәһе лә аттарынан төшөп, ҡор булып түңәрәкләнеп ултырышалар. Быуа Ҡуҙыйкүрпәс билдәләнгән бәйгеләрҙе уртаға сығарып ҡуя һәм, көрәштә еңеп сығыусылар ошо бүләктәрҙе алырҙар, тип белдерә. Шул ваҡыт оҙон буйлы Бөркөтбай түңәрәк уртаһына килеп сыға, билбауын бушата биреп, үҙе менән көрәшергә тейеш кешене көтә башлай. Күп тә үтмәй, киң яурынлы Яғылбай, түңәрәктәге халыҡ араһынан сығып, көрәшсе янына килеп баҫа һәм тарамыш ҡулдары менән уның биленән ала. Улар тәүҙә бер-береһен уңлы-һуллы ҡайырғылап, билдәрен һыҡҡылап көс самалашалар. Бөркөтбай, үҙе менән көрәшеүсегә көсө етерлеген һиҙеп, уны йәһәт кенә күтәреп алып, янбашы аша ергә ташлай. Шуның менән ул тәүге еңеүгә ирешә. Еңелеүсе халыҡ араһына инеп китә, еңеүсе үҙ урынында ҡалып, икенсе көрәшсенең сығыуын көтә. Инде таҫыллы йәш егет Төлкөбай Бөркөтбай менән алыша башлай, әммә бөтә таҫыллығын, көсөн һалып ҡараһа ла, еңелеп сығып китә. Ә еңеүсе өсөнсө көрәшсене көтә, уны ла йығып кәрмәзин еләнде алмаҡ була. Халыҡ аранан тығыҙ тәнле бәһлеүән Батырғолдо һайлап сығарып, Бөркөтбай менән көрәшергә ҡуша, ләкин ул ҡарышҡан була, еңелеүҙән ҡурҡҡандай, уртаға сығыуҙан тартына. Ахырҙа, халыҡ бик һорағас, күҙҙәрен ергә теклəп, ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына һын менән уртаға сыға, ә үҙе батырҙарса ҡыйыулыҡ менән Бөркөтбайҙың билбауына йәбешә. Ике бәһлеүән, уртала өйөрөлөп йөрөп, көс һынашалар. Береһе таҫыллыҡ менән алдырмаҡсы булһа, икенсеһе шунда уҡ үҙ алымын ҡаршы ҡуя. Шулай итеп, улар бик оҙаҡ алышалар, алыша торғас, ҡаҙанға һалынған ит бешеп сығырлыҡ ваҡыт үтә. Инде уларҙың ҡарыуҙары ҡайтып, ҡулаяҡтары талыға, таҫыллыҡтары бөтә, хәйлә тигән нәмә лә ҡалмай, шулай булһа ла береһе лә бирелмәй. Шул ваҡыт Ҡуҙыйкүрпәс

менән уҙамандар, көрәште туктатып, тәүге ике бәйгене — кәрмәзин елән менән ебәк билбауҙы — икеһенә бүләк итеп бирергә булалар.

Шунан һуң Ҡуҙыйкүрпәстең ҡорҙашы Алдар менән Муйнаҡ улы — сабышта һуңғы бәйгене алған сос Байегет килеп сыға. Улар алышалар, бөтә көстәрен һалып, бер-береһен йығырға тырышалар. Көрәштә берҙәй оҫта, берҙәй үк сос булған был егеттәр ике яҡтан да ниндәй генә йылғырлыҡ, ниндәй генә алым ҡулланмайҙар! Аҙаҡ килеп, Алдар янбашын күтәрергә теләгән кеше булып, Муйнаҡ улын алдай, тегенеһе быға ҡаршы яуап ҡайтарыуға, Алдар йәһәт кенә бер аяғы менән тубыҡланып, Байегетте үҙе аша алып ташлай. Уның урынына ат сабышында бүләккә йәйә менән уҡ алған Бүребай сыға. Ул, үҙенән алда көрәшеүсенең хәйләнән еңелеүен күргәс, Алдарҙың үҙен дә шул юл менән еңмәксе була, ләкин барыбер үҙе алдана. Бүребайҙың был уҫал уйын һиҙеп ҡалған Алдар уны үҙенә яҡынайтырға бирмәй, башын уның күкрәгенә, тубығын ҡорһағына терәп, иңбашына күтәреп алған көйө салҡан һала, шунан үҙе, майҙан уртаһында ҡалып, хәл йыйырға ултыра. Иллә-мәгәр Бүребайҙың ҡустыһы Күсәрбай уға оҙаҡ ял итергә бирмәй, янына килеп, ҡыйыуланып билбауына йәбешә, ныҡ итеп билен һыға, үҙе унан байтаҡ көслө булғанлыҡтан, инде арыған Алдарҙы тирә-яҡҡа анһат ҡына борғолай башлай. Ә көрәштең бөтә таҫыллығын, алымын яҡшы белгән Алдар Күсәрбайға үҙен күтәрергә ирек ҡуя, уны шул юл менән хәлһеҙләндермәксе, ә үҙе хәл йыймаҡсы була. Шулай ул Күсәрбайҙы албырғатып салҡан йығыла һалып, елкәһе аша ергә шул саҡлы нык бырғай, тегенеһе хатта һуштан яҙа. Алдар, халыҡтың шау-гөр килеп маҡтауы аҫтында һикереп тороп, дуҫының ҡулынан йәнә бер бәйгене — мәрйен теҙелгән ҡама ҡырпыулы таҡыяны — ала. Шунан һуң майҙанға урта йәштәге көрәшсе, баҙыҡ кәүҙәле Көслөбай батыр сыға, аяҡтарын кирә баҫып, бәһлеүәндәрҙе үҙе менән көрәшкә саҡыра. Уның бик көслө икәнен белгәнлектән бер кем дә ҡаршы сығырға тәүәккәллек итмәй. Халыҡ араһынан оҙаҡ һайлағандан һуң, үҙе менән бер йәшле, берҙәй батыр, әммә көрәштә бик отҡор булмаған Арыҫланбай уртаға сыға. Улар билбауҙарынан тотошоп көрәшә башлайҙар: бер-береһенең билен һығышып, күтәрешеп ҡарайҙар, ләкин аяҡтарын ерҙән айыра алмайҙар, бары тик бүртенгән биттәренән, бөтә тәндәренән соролдап тир генә аға. Шул саҡлы ныҡышып ҡарыулашыуға асыуы ҡабарған Көслөбай ҡулдарын үҙенә бер оҫталыҡ менән Арыҫланбайҙың яурындары аша ташлап, башын ҡултығы аҫтына ҡыҫа, шулай итеп тегенең бөтә көсөн ала; шул ерҙә уны арҡыры тотоп, баштүбән юғары күтәрә лә арҡаһы менән үҙ башына һала. Шунан һуң инде, үҙ егетлеген күберәк күрһәткеһе килеп, уны баш осонда бер нисә тапҡыр өйөрөлдөрә лә ергә бәрә, ә үҙе бер ни булмағандай аяғүрә тороп ҡала. Көслөбайҙың сослоғона, көсөнә хайран ҡалған майҙан халҡы бына ошо бер тапҡыр еңеүе өсөн генә лә уға дүртенсе бүләкте — ҡара төлкө менән ҡырпыуланған ҡолаҡсынды — бирергә була, сөнки бындағыларҙан уны бер кем дә еңә алмаясағы асыҡ була.

Көслөбай был бүләкте алһа ла, юлбарыҫ тиреһе өсөн әле көрәш булмағанын күреп, майҙандан китмәй, үҙенә ҡаршы көрәшсе сығыуын көтә. Шул ваҡыт уҙамандар менән бөтә халыҡ, атаһының иҫтәлеге хөрмәтенә Ҡуҙыйкүрпәс тә көрәшһен, Көслөбай менән көрәште ул бөтөрһөн, тип бер тауыштан ҡысҡыралар. Ә йәш батыр кеселеклек күрһәтеп, тәүҙә бынан баш тарта, әммә халыҡ һүҙен ергә йыҡмай, ахырҙа, ирекһеҙҙән уртаға сыға һәм Көслөбай менән алыша башлай. Ҡуҙыйкүрпәстең таҫыллы һәм көслө икәнен, йәшлек өҫтөнлөгөн дә белгән Көслөбай үҙенең тәүәкәллегенә эстән үкенеп тә ҡуя, шулай ҙа көрәштән баш тарта алмай. Ул Ҡуҙыйкүрпәстең билбауынан тотоп ала, икәүләп көс һынаша башлайҙар. Урта йәштәге батыр бөтә көсө менән йәш батырҙың билен шул саҡлы ҡыҫа, егеттең бөтә тәненән тир сығып, күҙҙәренә йәш эркелә. Ул үҙе лә Көслөбайҙың ҡабырғаларын шытырҙатҡансы ҡыҫа, хатта тегенең тыны ҡыҫыла, дауылға бөгөлгән имән һымаҡ, ах та ух килә башлай. Ошондай ныҡышмалы көс һынашҡандан һуң беренсе алымды Ҡуҙыйкүрпәс яһай. Ул Көслөбайҙы күкрәгенә ҡыҫып алып, аяҡтарын ерҙән айыра ла әйөрөлдөрә башлай, әммә өлкән көрәшсе аяҡтары менән уны ҡыҫып алып, үҙен юғары күтәрергә ирек бирмәй. Шунлыҡтан йәш батыр уны йәнә ергә төшерә. Көслөбай иһә, аяҡтары ергә тейеү менән, Ҡуҙыйкүрпәсте инбашы аша ергә алып ташламаҡсы булып, яурыны менән күкрәге аҫтына инә лә уны үҙенә табан тарта башлай. Йәш батыр инде еңелер төҫлө булып күренә, ләкин күҙ асып йомғансы ул аяҡтарын артҡа табан терәй биреп, Көслөбайҙы күтәреп ала һәм, башы өҫтөнә салҡан һалып, артҡа ырғыта. Шунының менән ул атаһы ҡәберендәге көрәште бөтөрә.

Хайран булып ҡарап ултырыусыларҙың бөтәһе лә ҡыуаныстарынан һикерешеп торалар, йәш батырҙың оҫта көрәшсе булыуын маҡтайҙар, күрһәткән батырлығы өсөн юлбарыҫ тиреһен килтерәләр. Әммә Ҡуҙыйкүрпәс быны алыуҙан баш тарта, сөнки ул: мин Көслөбайҙы көсөм, оҫталығым менән түгел, унай тура килгәнлектән генә еңдем, бүләкте лә атайым иҫтәлеге хөрмәтенә көрәшеүселәр өсөн генә ҡуйҙым, ә үҙем инде, бөтә кеше хөрмәт итеп, ихлас күңелдән яратҡан кешенең улы булғаным өсөн дә бик ҡәнәғәтмен, ти. Шулай ҙа был һуңғы бәйге минең ҡарамаҡҡа бирелә икән, мин уны, Көслөбайҙан еңелһә лә, бүләккә лайыҡ булған Арыҫланбайға бирер инем, тип һүҙен бөтөрә.

Ҡуҙыйкүрпәстең был кеселеклегенә, мәрхүм атаһының изге тупрағын хөрмәтләүенә тағы ла нығыраҡ һоҡланған халыҡ Арыҫланбайға, еңелһә лә, юлбарыҫ тиреһен бирергә тигән һүҙен хуплай.

Йәш батыр мәрхүм атаһы Ҡарабай хөрмәтенә батырлыҡ күрһәтеүселәргә, йыйылған бөтә халыҡҡа ихлас күңелдән рәхмәт әйтә һәм, йәйләүгә ҡайтып, иҫкә алыу көнөн табын ҡороу менән бөтөрөргә саҡыра. Быны ишетеү менән барыһы ла аттарына менә, Ҡуҙыйкүрпәстең тирмәләренә ҡарай юл тота. Унда бөтәһен дә әҙерләп көтөп торған Алтыша, халыҡты ҡаршы алып, ҡыҫтайҡыҫтай һыйларға кереша, ҡунаҡтарҙың һәр ҡайһыһы мәрхүм ире Ҡарабайҙың яҡын дуҫы, юлдашы, серҙәше булғанға, уларҙан итте лә, ҡымыҙҙы ла йәлләмәй. Ҡунаҡтар ашап-эсеп ҡанғас, һый-хөрмәт

күрһәткәне өсөн хужа ҡатынға ысын күңелдән рәхмәт уҡып таралышалар.

Ҡуҙыйкүрпәс, әсәһе менән яңғыҙ ҡалғас, атаһы ҡәберендә батырҙар ярышы нисек үтеүен һөйләп бирә. Мәрхүм иренең изге тупрағы хөрмәтенә һуңғы бурысын үтәгән Алтыша аҡтыҡҡы күҙ йәшен ҡоя, әммә был инде йөрәктәге ҡайғыны бүҫкәрткән йәш, бер-беренә тоғро булып ғүмер итеүҙән ҡәнәғәтләнеүҙе күрһәткән йәш була. Алтыша улына ла: «Һин дә атайың кеүек намыҫлы һәм киң күңелле булып ғүмер ит, иҫән сағында ла, үлгәс тә ватандаштарың хөрмәт менән иҫкә алырлыҡ йәшә», — тип нәсихәт уҡый.

Маянһылыуҙы ғына уйлап йөрөгән Ҡуҙыйкүрпәс уны нисек эҙләп табырға икән, тип баш вата башлай, тик әсәһен яратҡанлыҡтан ғына, уның ихтыярынан тыш был эшкә тәүәккәллек итә алмай. Бер нисә көндән һуң ул әсәһенә: «Атайымдың теләгеп үтәп, Сарыбай ҡыҙына өйләнеүҙе үҙемдең бурысым һанайым, шуға һин рөхсәтеңде бирер инең», — ти. Бер яҡтан, ошо бурыс уға тынғы бирмәүен, икенсе яҡтан, бигерәк тә Маянһылыуҙы өҙөлөп яратыуын, унан башҡа йәшәй алмауын белдерә. Сарыбай кире ҡаҡҡандан һуң, ул Маянһылыуҙы бөтөнләй онотҡандыр инде, тип уйлаған Алтыша улының шундай өҙөлөп әйткән һүҙҙәренә аптырап ҡала. Әммә уның мотлаҡ ошондай уйға килеүен күргәс, ҡуй, был уйынды ташла, улым, тип өгөтләргә керешә. Шундай алыҫ ерҙә Сарыбайҙарҙың дошманлығы арҡаһында әллә ниндәй бәлә-ҡазаға юлығыуың бар, ти. Шунан һуң, көрьәндә яҙылғанса, балалар ата-әсәләренә буйһонорға тейешле булыуын иҫкәртә. Шуларға өҫтәп, йәнә былай ти:

— Һүҙемде тыңламай, мине ташлап юлға сыға торған булһаң, шуны бел: һине тапҡан саҡта булған ауырыуым, талыҡтырғыс һағышым йөрәгеңде һурып бөтөрөр. Һине бала саҡта имеҙгән һөтөм күкрәгеңде ҡыҫыр. Минең күҙ йәштәрем өсөн тулҡынланып ятҡан күҙ йәш даръяһы юлыңды киҫер. Ахырҙа, һин күңелең табырға тырышҡан мәрхүмдең үҙ әрүәхе лә, былай ҙа етемһерәгән әсәйеңде ҡайғы-хәсрәт эсендә ҡалдырғаның өсөн, көн һайын төшөңә кереп борсор.

Әсәһенең был һүҙҙәренән һуң күҙенә йәш эркелгән Ҡуҙыйкүрпәс ошо мәлдә Маянһылыуҙы онота, уны эҙләп китеү уйымдан дүнәм тип һүҙ бирә, әммә әсәһе янынан киткәс тә, биргән һүҙен онотоп, йәнә Маянһылыуҙы уйлай башлай. Ошо тойғолар көрәшендә Ҡуҙыйкүрпәс ни эшләргә лә белмәй. Әсәһенә булған хөрмәт уны тыуған еренән ебәрмәй тота, ә Маянһылыуға булған дәрт уны донъя ҡыҙырып ҡыҙҙы эҙләп сығып китергә әйҙәй. Оҙаҡ уйлағандан һуң, икенсе уй еңә һәм йәш батырҙы әсәһенә әйтмәй сығып китергә мәжбүр итә.

Ҡуҙыйкүрпәс Алдар дуҫы менән һунарға барырға тип рөхсәт һорай, ә Алдар иһә уның был уйын әле белмәй. Шулай уҡ быны һиҙмәгән әсәһе лә юлға ни теләһә, шуның бөтәһен дә биреп, улын һунарға оҙата. Ҡуҙыйкүрпәс йылҡы өйөрөнән иң яҡшы, иң сыҙамлы ат һайлап ала, уға Йондоҙ ҡашҡа тип исем ҡуша, шунан әсәһе менән хушлашып, ҡасандыр атаһы менән Сарыбайҙың төйәге

булған Ҡаҙкүлгә ҡарап Алдар менән юл тота. Ошонда ат ашатырға туҡтағас, Ҡуҙыйкүрпәс дуҫына ошо һүҙҙәрҙе һөйләп бирә:

— Алдар! Беҙ бала саҡтан уҡ яҡын дуҫтарбыҙ, шулай ҙа тормошта һыналмаған дуҫлыҡты ныҡ та, ышанысл ы ла, тип әйтеп булмай әле. Инде дуҫың Ҡуҙыйкүрпәсте тынысландыра торған уңайлы ваҡыт килеп етте. Мин иң элек бер һүҙемде лә кире ҡаҡмай, ни һораһам, тик шуны ғына үтәргә ант итеүеңде һорайым, — ти.

Дуҫының яҡшы күңелле икәнен белгән Алдар, минән бер төрлө лә ғәҙелһеҙлек йәки яманлыҡ талап итмәҫ, тип ул ни генә ҡушмаһын, шуны һис һүҙһеҙ үтәргә ант итә.

Ҡуҙыйкүрпәс һүҙен дауам итә:

— Һин атайымдың миңә Сарыбай ҡыҙы Маянһылыуҙы алып бирергә теләүен беләһең. Сарыбай уға дуҫтарса һүҙен биргән. Шуға ышанып, атайым мине бала саҡтан уҡ Маянһылыуҙы үҙ кәләшем тип атарға өйрәтте. Беҙ бер-беребеҙҙе бер тапҡыр ҙа күрмәһәк тә, мин Маянһылыуҙы, ә ул мине яратты. Беҙҙең ата-әсәләребеҙҙең дуҫлығынан, татыу йәшәүенән килгән ошо ғәҙәт ахырҙа минең үҙ ғәҙәтем булып китте. Әммә Сарыбай, атайым үлгәс тә уның менән булған дуҫлығын онотоп, мине ек күрә башланы. Уның ҡарашы үҙгәрҙе, минең йөрәгем иһә шул көйө ҡалды. Ҡыҙы Маянһылыуҙы миңә биргеһе килмәй, ә мин унһыҙ йәшәй алмайым. Шулай, дуҫҡайым! Инде Маянһылыуҙы эҙләп китәм һәм табырмын да. Әгәр ул атаһы тарафынан Айҡара солтанға көсләп бирелә торған булһа, минең менән ҡасырға риза булыр, ул саҡта миңә үҙ йөгөмдө алып ҡайтыу ауыр булмаҫ, әгәр мине онотоп, ҡасып китергә риза булмаһа инде, үҙен ек күрермен һәм тиҙ арала әйләнеп ҡайтырмын. Мин әле һиңә үҙемдең уйҙарымды, шулай уҡ эштең ҡалайыраҡ тороуын ғына әйтеп бирҙем. Һинең дуҫлығыңа таянып өмөт иткән төп йомошом шунан тора: һин әсәйемдең мине яратыуын, ә минең уны нисек хөрмәт итеүемде яҡшы беләһең. Ул минең бер үҙемде ят һәм алыҫ илгә ебәрергә һис ҡасан да ризалығын бирмәҫ ине. Шунлыҡтан, мин уға әйтмәй генә китергә булдым. Инде һинән шуны үтенәм, хәҙер үк ҡайт та минән ишеткәндәреңде бөтәһен дә әсәйемә һөйләп бир; минең урыныма ҡалып, үҙ улы кеүек үк, уға хәстәрлек күрһәт, бигерәк тә мин киткәс бошона ҡалһа, ҡайғыһын тарат. Маянһылыуҙы өҙөлөп яратыуымды, атайымдың теләген үтәргә бурыслы булыуымды үҙенә төшөндөр; шунын менән уның алдында минең ғәйебемде кәметеп, оҙаҡламай ҡайтыуымды әйтеп, өмөтләндер.

Уның был уйын көн элгәре белмәгән Алдар үҙенең ант итеүенә үкенеп тә ҡуя. Ҡуҙыйкүрпәсте бөтә күңелдән ятраҡанлыҡтан, дуҫынан айырылып ҡалғыһы ла килмәй, яңғыҙына ҡурҡыныс булмаһын өсөн, үҙен дә бергә алып барыуын һорай. Әммә Ҡуҙыйкүрпәс, дуҫының биргән антынан файҙаланып, уға һөйләргә лә ирек бирмәй. «Мин Маянһылыуҙы бер үҙем яратам икән, бер үҙем алып ҡайтырға тейешмен, ебегән егет кенә бүтәндәр ярҙамына һалыша, ә мин ундайҙарҙан түгел!» — тип ҡырт киҫә. Шулай итеп, дуҫтар күҙҙәренән йәш ағыҙып хушлашалар ҙа айырылышалар.

Алдар үҙ дуҫының йомошон нисек үтәргә икән, әсәһен ҡапыл ҡайғыға ҡалдырмаһам ярар ине, тип уйланып ҡайта. Шулай оҙаҡ

баш ватһа ла, бер төрлө лә төплө фекергә килә алмай тора. Тыуыштан борғолап һөйләргә яратмаған башкорт егете дөрөҫлөктө йәшереп, юкты бар тип һөйләргә бәҙнат итмәй. Йәйләүгә ҡайтып төшкәс, ул Алтыша янына инә һәм улы ни ҡушһа, шуның бөтәһен дә түкмәй-сәсмәй һөйләп бирә. Әсәһе был хәбәрҙе тыныс ҡына тыңлай, шунан Алдарҙан улы урынына ҡалып, хужалык эштәрен алып барыуын һорай. Әммә оҙаҡламай уның күңеле бошона башлай. Бәлки, ул үҙ улынан бөтөнләйгә айырылып ҡалғандыр, шуға күрә әсә үкһеп илай-илай ошоларҙы һамаҡлай:

Йәйрәп яткан йәйләүем,
Ҡалдың ҡола далаға.
Эс серемде аңлатырға,
Һүҙҙәремде тыңлатырға
Инде кемгә барырмын?
Ҡарабайым ҡәберенә
Түтә һуҡмаҡ һалырмын,
Башка төшкән ҡайғымды
Уға һөйләп барырмын.
Һай, дуҫым, йән юлдашым!
Һин үлгәстен көн бөттө,
Миңә ҡара төн етте,
Бар ҡыуаныс юғалды,
Арынмаҫ ҡайғы ҡалды.
Янып һөйгән улың да
Йыуаныс түгел әсәгә:
Минән фатиха һорамай,
Ҡиткән алыҫ ырыуға,
Үҙе һөйгән һылыуға
Ғүмерлек дуҫ булырға,
Кәләш итеп ҡылырға.
Һай, онотолмаҫ йән дуҫым,
Ишетмәйһең зарымды.
Хур ҡыҙҙары ҡосағында
Онотканһың ҡайғымды!
Бар ҡоштарҙан ҡайғылы —
Оя баҫмаҫ кәкүктер.
Ул оя ла яһамай,
Балалар ҙа сығармай;
Шуға йәйҙең яртыһын
Күкләп йөрөй, ҡанғырып;
Тиң-тоштарым араһында
Иң бәхетһеҙ тол ҡатын,
Шулай көн-төн ҡайғырып,
Дала гиҙәм ҡанғырып.
Юктыр батыр ирем дә,
Һөйгән улым сит ерҙә,
Күргәнем юҡ килен дә...
Ҡуҙыйкүрпәс булмағас,

Ябығып ҡалды йылҡылар,
Көтөү-көтөү һыйырҙар
Бер төптән һыуалдылар;
Имсәктәре катканға,
Һауып булмай уларҙы;
Ғүмере кәртә белмәгән
Оҙон йөн һарыҡтарҙың
Ваҡ бөҙрәһе юғалды.
Ошо ҡаты ҡайғымдан,
Һөйгән улым ҡайтҡансы.
Усағыма ут алмам.
Ҡаҙанымды тут басһын,
Бешерергә ит һалмам;
Бысаҡтарым тупайһын,
Һалмаға ҡалъя тураһам.
Һыйырҙарымды һаумам,
Бешмәмен ҡаймаҡ та,
Ҡәрәк түгел ҡорот та.
Май яҙырға һауыт юҡ:
Ҡорғаҡһыған һабалар,
Бешкәктәрем һындылар,
Һөт һөҙгөстәремә лә
Саң-туҙандар ҡундылар.
Һаумамын бейәләрҙе,
Миңә ҡымыҙ ниңә ул?
Ҡымыҙ эсер эшем юҡ.
Күңел китек, яңғыҙ саҡта
Уны бирер кешем юҡ.

Ҡайғыға ҡалған Алтыша ошондай ауыр уйҙарға сумып йөрөй башлай, ә был ваҡыт улы Ҡуҙыйкүрпәс ҡаҙаҡ далалары буйлап Сарыбай ауылына табан юл тотоуында була. Оҙаҡламай уның йәйләгән еренә барып етә, тик унда Сарыбай менән ғаиләһен генә түгел, уларҙың ҡайһы яҡҡа күсеп китеүҙәрен һорашырлыҡ кеше лә таба алмай аптырап ҡала. Ул Сарыбайҙан ҡалған йәйләү урынын тирәләп ике тәүлек буйы туҡтауһыҙ йөрөп сыға, ләкин бынан бер файҙа ла булмай. Өсөнсө көндә лә эҙләүен башларға ғына тип торғанда, ҡапыл теге әүлиә ҡарт килеп сыға. Ҡуҙыйкүрпәсте туҡтатып, ул ошо һүҙҙәрен әйтә:

— Ҡарабай улы! Бында Сарыбайҙы табырға өмөтләнеп юҡҡа ғына ваҡытыңды әрәм итәһең. Ул хәҙер Амударъя тамағында йәйләй. Унан, хан менән һүҙ ҡуйышыу буйынса, туй уҙғарыу өсөн оҙаҡламай Ҡараһыуға күсәсәк. Инде һиңә шунда тиҙерәк барып, әйттерелгән Маянһылыуыңды күрергә кәрәк. Был бик алыҫ юл, етмәһә, уны үтеүе лә бик ҡыйын: теге ваҡытта һеҙ үлтергән дейеү пәрейенең тыумасалары һине һәләк итергә, үҙ уйҙарын һис кисектермәй бойомға ашырырға ант иткәндәр, иллә-мәгәр һин, улым, ҡаушап ҡалма, нык бул, Мөхәммәттең ярҙамына таян. Миңә иһә инде ризығым бөтөп, әжәлем килеп еткән, һиңә артабан ярҙам итә ал-

мам. Һиңә ярҙам күрһәтһен өсөн, тик шәфкәтле Мәскәй[29] әбейгә нисек барырға юл өйрәтеп кенә ебәрә алам. Ул бынан ун биш көнлөк юлда, ҡибла яғында тора. Шул әбей һиңә, Сарыбайҙы нисек эҙләп табырға кәнәш итеп, фатиха бирер. Мине, теге донъяға китергә әҙерләнгән һәм ожмахта иманлы кешеләр өсөн тәғәйенләнгән хур ҡыҙҙары араһында йәшәр алла бәндәһен, Мөхәммәт ҡушҡанса, йөҙөм менән ҡиблаға ҡаратып ерлә.

Ошо һүҙҙәренән һуң уҡ ул ятып йән биргән.

Ҡуҙыйкүрпәс әүлиәнең теләген тулыһынса үтәй — уны үҙе һорағанса итеп ерләй, шунан ҡәберенә баш эйеп, Мәскәйҙе эҙләп ҡиблаға ҡарай китә.

Юлда уға йыртҡыс януарҙар ҙа, кейек йәнлектәр ҙә осрай. Йыртҡыстарҙы ул, һунарға һәүәҫ егет буларак, үлтерә[30], йәнлектәрҙе иһә, уҡ атып йәки атта ҡыуып етеп, ирмәк өсөн ҡамсыһы менән һуғып, ҡайһы берҙә, өйҙән алып сыҡҡан аҙығы бөткәнлектән, уларҙы тотоп бешереп ашай. Йондоҙ ҡашҡаһын ашатырға туҡтаған саҡтарында, атып алған боландың, ҡоралайҙың йәки ҡуяндың тиреһен тунап ботарлай ҙа ите көймәһен өсөн тоҙлоҡ һибә-һибә шешкә ҡаҙап ҡура. Шулай итеп, үҙенә киске аш әҙерләй, һәйбәтләп ашап туйғандан һуң аҫтына серге түшәп, башы аҫтына күпсеген һалып, таң атҡансы татлы йоҡоға сума. Хәүефһеҙлек өсөн йоҡо алдынан ҡылысын эргәһенә, ә ҡамсыһын, әүлиә күрһәткән юлдан яҙлыҡмаҫ өсөн, туп-тура ҡиблаға ҡаратып һалып ята. Иртән торғас, ошо билдәһенә ҡарап тағы ҡибла яҡҡа юл тота. Ун бишенсе көндә ул әҙәм менә алмаҫ тауҙар янына килеп етә. Дүрткел мөйөшкә оҡшаған был тауҙарҙың һәр яғы биш-алты уҡ атымы оҙонлоҡта була. Егет һоҡландырғыс тауҙар теҙмәһенә ғәжәпһенеп ҡарап торғандан һуң, уны урап үтмәксе булып уңға борола. Уның төньяҡ, көнбайыш һәм көньяҡ ҡабырғаһынан урап сыҡһа ла тауҙар араһынан үтерлек бер генә ыҙан да таба алмай. Тауҙарҙың бөтәһе лә, гүйә, бергә тоташҡан, тик болоттарға тейеп торған түбәләре генә шар төҫлө булып айырылған. Батыр, был тауҙар араһында ни барлығын уйлап та тормайынса, ары китмәксе була, әммә күңеле ниҙер һиҙенеп, көнсығыш яғынан да урап үткеһе килә. Шул яҡҡа табан боролғас, ул тауҙар араһындағы еккә ағып ингән бер йылға күреп ҡала.

Йылғаның ярҙарына, ҡыл тартҡандай теҙелеп, ике рәт булып ағастар үҫкән, Ҡуҙыйкүрпәс, былар әҙәм балаларының оҫта ҡулдары менән ултыртылғандыр инде, тип уйлай. Шул ерҙә ул йомшаҡ үләнлектә утлап йөрөгән йылҡы өйөрө менән һыйыр, һарыҡ көтөүҙәрен күрә, үҙенең аты ла өҙлөкһөҙ шул үләнгә һуҙыла башлай. Йылға тамағына яҡын килгәс, үтеп сығырлыҡ бер генә һуҡмаҡ та таба алмай, сөнки йылға кәштәләнеп торған ике ҡая араһынан шау-гөр килеп ҡаты ағып ята икән. Ҡыйыу егет, бынан нисек үтергә икән, тип оҙаҡ уйлап та тормай, эйәренең айылын бушатып, йылға ағышына табан төшөп тә китә. Көслө ҡул менән ташланған таш алыҫлығы араны йөҙөп үткәс инде, бер киң аҡланды, шунда ҙур түңәрәк күл булып йәйелеп ятҡан йылғаны, уның өҫтөндә йөҙөп йөрөгән төрлө ҡоштарҙы күрә. Аты менән шул йылғаны саҡ йөҙөп сығыуға, ул күргән ҡоштар ҡолаҡ тондорғос тауыш менән ҡысҡы-

рынырға керешәләр, бынан аты өркөп үрәпсей башлай. Егет атын үҙе артынан етәкләп аҡлан буйлап бара торғас, алыҫта ҡар кеүек ап-аҡ кейеҙ менән көпләп ҡоролған бер тирмә күрә. Ауыҙын ыржайтып, күҙҙәренә ҡан тулған ҡот осҡос ҙур бер эт уға ҡаршы туп-тура сабып килә башлай. Ҡуҙыйкүрпәс, ҡындан ҡылысын һурып алып, эттең муйынын өҙә сабырға әҙерләнгәндә генә, эт уға биш аҙым ер етмәҫ борон туҡтап ҡала. Шул ерҙә ул, батырҙың күҙенә ҡарап, үҙ эйәһенә ялағайланған кеүек, ҡойроғон болғай ҙа, күҙ асып йомғансы боролоп, тирмәгә табан кире сабып китә. Егет, теге әүлиә өҙөп кенә әйтмәһә лә, Мәскәй әбейҙең тап ошонда торғанлығын һиҙенә. Ул тирмә ишеге төбөндә үҙенә ялағайланып торған этте ҡабат күрә. Бының яҡшылыҡҡа икәнен төшөнөп алған батыр:

— Рөхсәтме? — тип тауыш бирә һәм ҡыйыуланып тирмә эсенә инә. Инһә, ергә түшәлгән фарсы келәме өҫтөнә һалынған сәхтиән мендәр өҫтөндә Мәскәй ултыра. Уның ҡиәфәте уҫал түгел, төҫкә ҡарт күренһә лә, әле бәлйерәмәгән. Сәстәре, ҡыҙ икәнлеген белдереп, ваҡ толомдарға бүлгеләнеп үрелгән. Өҫтөндәге күлдәге ап-аҡ, ҡулындағы тиҫбе төймәләрен тарта-тарта ауыҙ эсенән генә шыбырҙанып ултыра. Ҡуҙыйкүрпәс килеп ингәс тә унан иҫәнлек-һаулыҡ һораша, уға баштан-аяҡ күҙ йүгертеп сыҡҡас:

— Минең һил торлағыма Ҡарабай улын килтергәне өсөн бөйөк пәйғәмбәребеҙгә рәхмәт. Ултыр, улым, тыныс бул! — ти.

Шунан ул үҙенең Солтоҡҡош исемле баяғы этен саҡырып алып: «Һелкен, этем, һелкен!» — ти өс серле һүҙ әйтә. Эт, тирмә уртаһына сығып келәм өҫтөнә баҫа ла, йөндәрен көҙрәйтеп, һелкенергә тотона, шул ваҡыт уның йөндәре араһынан ап-аҡ бойҙай ҡойола башлай. Мәскәй, урынынан тороп, уны йыйып алып ҡаҙанға һала, өҫтөнә таҙа һыу ҡойоп, шунан уға май, ҡорот өҫтәп ҡурмаҡ бешерә. Ҡунағы алдына ҡаймаҡтың сей һөттән дә, бешкән һөттән дә айырылғанын ҡуя, шулай уҡ әсе ҡатыҡ килтереп айран яһай, шул айран менән ҡымыҙҙы дәү-дәү туҫтаҡтарға һалып, ҡунағының ашап-эсеүен һорай, ә үҙе бүтән яҡшыраҡ һый ҡуя алмағаны өсөн ғәфү үтенә. Миңә ит ашарға ярамай, шуға ит-маҙарым юҡ, ти. Шунан һуң ул Ҡуҙыйкүрпәстең мәрхүм атаһы хаҡында һораша башлап, ошо һүҙҙәрен әйтә:

— Үҙ ырыуҙаштарымдан атайың хаҡында күп маҡтау һүҙҙәре ишеткәнем бар, уны белмәгән саҡта ла үҙен бик ҡәҙер итә инем. Ул үҙе лә һәр төрлө мосолманды ихлас күңелдән ярата ине, кешегә гел генә ҡунаҡсыллыҡ күрһәтер, аш-һыуын аямаҫ, ҡомһоҙ булмағанлыҡтан, кешегә барынса ярҙам итер ине; һәр кемде яҡын күреп яратҡанлыҡтан, уны кәңәшһеҙ ҡалдырмаҫ, хуш күңелле булғанға күрә, кешеләр менән бик татыу йәшәр ине. Был сифаттар батыр исемен йөрөтөргә лайыҡ булған хаҡ мосолманда ғына булырға мөмкин. Ындай кешене мин биш йөҙ йыллыҡ ғүмеремдә үҙ ырыуҙаштарым араһында күргәнем булманы, хатта ундай әҙәмдәр тураһында ишеткәнем дә юҡ. Күптәрҙе батыр тип йөрөтәләр, иләмәгәр уларҙың береһе лә был исемгә лайыҡ түгел; ундай батырҙарҙың барлыҡ даны алдашыуҙан, маһайыуҙан, ҡомһоҙлоҡтан, барымтаға йөрөүҙән тора. Тап бына ошондай холоҡло Сарыбай ба-

тыр һине, истәкте, яратмаған, маһайыуынан яҡшылыҡты онотоп, ҡыҙын һиңә биреүҙән баш тартҡан, үҙ файҙаһын ғына күҙәтеп, уны хан улына бирергә булған. Һин иһә, улым, атайыңдың юлынан барып, уның менән бер тиң дан ҡаҙанырға тейешһең, шулай ҙа яҡшылыҡта унан уҙҙыра алмаçһың. Килер быуын, һеҙҙең икегеҙҙе лә ырыу башлыҡтары һанап, данығыҙҙы оҙаҡ йылдарға һаҡлар. Ҡурайсылар һеҙҙең маҡтаулы эшегеҙҙе йырлап-көйләп ырыуҙан ырыуға еткерерҙәр, халыҡ уларҙы ярыштыра-ярыштыра шатланып тыңлар. Аҡһаҡалдарҙың һеҙҙең хаҡта һөйләнеп һөйләгән һүҙҙәре һис ваҡытта тынмаç. Бер генә әсә лә балаһын, Ҡарабай батырҙай бул, тип иркәләмәй тороп имеҙмәç; бер генә ата ла улын атҡа мендергән саҡта, Ҡарабай батыр атын ошолай йөрөтөр ине, тип әйтмәй ҡалмаç. Йәки уның ҡулына йәйә биргәндә, Ҡуҙыйкүрпәс йәйә керешен бына ошолай тартыр булған тип әйтер. Батырмын тигән кешенең эшләгән берәй эшен Ҡарабай эшләгән эшкә оҡшаталар икән, был инде уның өсөн ҙур бүләк булыр. Нәçел-нәçелгә ҡалырлыҡ яҡшылыҡ менән уҙғарылған ғүмер бына ошолай була ул, улым! Ә быларҙың бөтәһен дә һин асығыраҡ күрһен өсөн бөйөк пәйғәмбәребеҙ миңә бөтә киләсәкте тылсым көсө менән күрһәтеп бирергә ҡушты.

Мәскәй батыр егетте тауҙағы өс ҡорос йоҙаҡ менән бикләнгән баҡыр ишекле мәмерйә янына алып бара. Ул шыбырҙап өс һүҙ әйтеүгә йоҙаҡтар төшөп, ишек яман шығырҙап шар асылып китә. Мәмерйәнең алғы өлөшөнә ингәс, Мәскәй батырҙы шунда ҡалдыра ла үҙе, икенсе ишекте асып, ары үтә, ә уның артынса ишек шарт ябылып ҡала. Оҙаҡ та тормай, өçтөндәге аҡ күлдәген алмаштырып оҙон ҡара күлдәк кейгән, ҡара бөркәнсек ябынған, бер ҡулына тиçбе, икенсеһенә хуш еçтәр сығарып төтәп торған һауыт тотҡан әбей кире килеп сыға. Ишек тирәһендә Ҡуҙыйкүрпәсте лә биш тапҡыр төтәçләп алғас, егеттең күҙҙәрен бәйләй, шунан ҡулынан етәкләп мәмерйә эсенә индерә. Унда егеттән аңлайышһыҙ бер нисә һүҙ әйттереп, күҙҙәрен аса. Шул ерҙә Ҡуҙыйкүрпәс, ғәҙәттән тыш күренеште күреп, таң ҡала. Был мәмерйәгә ҡояш нуры инмәй, көмбәҙле түшәменә ике рәт булып аçылған һигеҙ ҡәндил менән яҡтыртыла икән. Ҡаршы стенала тирәһе ынйы һәм аçыл таштар менән йөрөтөлгән дүрт мөйөшлө шыма таҡта тора[31]. Уның һәр яғы өсәр аҙымдан ашыуыраҡ. Таҡта шул ҡәҙәр шыма булғанлыҡтан, нур һибеп ялтырап тора. Бөтәһенән элек батырҙы ғәжәпләндергән нәмә шул була: янып торған ҡәндилдәр, шулай уҡ мәмерйә эсендәге барлыҡ нәмә ошо таҡтала сағылып күренә башлай, ул унда Мәскәй әбей менән үҙен дә күрә. Ул тура баçып тора икән, унда ла үҙен тура баçҡан көйө күрә, эйелһә, йөрөһә, боролһа инде, таҡтала үҙен шул рәүешле күрә, әйтерһең дә, ул үҙен-үҙе үсекләй. Батыр шулай оҙаҡ шаҡ ҡатып ҡарап тора.

Мәскәй, йылмая биреп, Ҡуҙыйкүрпәсте йөҙө менән таҡтаға ҡарата баçтырып ҡуя, шунан уның алдына баҡыр табаҡҡа таҙа һыу тултырып ултырта, үҙе өс тапҡыр тирәләй әйләнә һәм, ҡулдарын юғары күтәреп, ниндәйҙер аңлайышһыҙ һүҙҙәр әйтә. Шул ваҡыт ҡапыл күк күкрәп, тау ҙа, мәмерйә лә тетрәй, табаҡтағы серле һыу

сайпыла башлай, ә аяғөҫтө баҫып тора алмаған егет тубыклана төшә. Оҙакламай бөтәһе лә һил булып калғас, Мәскәй әбей, Ҡуҙыйкүрпәс эргәһенә килеп, ошо һүҙҙәрен әйтә:

— Улым! Тыныслан да бына ошо серле тактаға текләберәк ҡара. Унда күргәндәреңдең бөтәһен дә мин аңлатып барырмын, берүк артыңа боролоп карайһы булма! Һин боролоп ҡарау менән ер ярылып китер ҙә шунда төшөп мәңгегә һәләк булырһың!

Мәскәй артка, иң караңғы мөйөшкә, сигенгәс, егет серле таҡтала уға ғәжәп һөйкөмлө карап торған бик һылыу бер ҡыҙҙы күрә. Быны күреүгә батырҙың йөрәге дөп-дөп тибә башлай, йәне күкрәгенән сығып шул кыҙға күсер төҫлө тойола, ә бының нилектән икәнен ул үҙе лә белмәй. Бик күпте тоя, әммә бер ниҙә аңламай, ни теләгәнен үҙе белмәй. Ул, үҙе лә төшөнмәгән ошондай тойғо менән елкенеп, байтак ваҡыт баҫып торғандан һуң, сыҙамлығын юғалтып, алға ташлана һәм ҡыҙҙы косаклап алмаҡсы була. Әммә тылсымлы таҡта уны ебәрмәй, егет онотолоп, был күренеш хаҡында һорашмаҡсы булып, Мәскәй әбейгә табан саҡ боролмай ҡала. Шул ваҡыт әбей уның был уйын һиҙеп алып, ҡысҡырып ебәрә:

— Туҡта, дыуамал! Артыңа ҡарама, хәҙер үк үҙеңде упҡын убып алыр. Һин күҙеңә күренгән ҡыҙ хаҡында һорамаҡсы булаһың. Был — һиңә әйттерелгән Маянһылыу. Уның күңеле лә, үҙең күргән йөҙө кеүек үк, бик яҡшы.

Был серле таҡтаның көсө ни саҡлы ғына ҙур булмаһын, унда күренгән һылыу Ҡуҙыйкүрпәстең тойғоһон унан да көслөрәк сихырлай, ул ни ҡәҙәр күберәк ҡараһа, шул хәтле йөрәге нығырак тибә башлай. Әммә ҡаты бәғерле Мәскәй уға туйғансы карарға ирек бирмәй, бер һүҙ әйтеүгә күҙгә күренгән ҡыҙ юкка сыға. Уның урынына Ҡуҙыйкүрпәс ат өҫтөндә баштан-аяҡ коралланған үҙе батыр, йөҙө матур бер егетте күрә.

— Был — һинең буласаҡ ҡатының Маянһылыуҙан тыуасак Барлыбай батыр! — тип аңлата Мәскәй. — Ул атаһы менән олатаһына оҡшап, шундай уҡ олпатлы ир буласаҡ. Уның артында баҫып торған тимер күлдәкле ете улына ҡара, улар: бөрйән, үҫәргән, тамъян, ҡыпсаҡ, бошмаҫ, ҡараҡыпсаҡ, түңгәүер[32] тип аталырҙар. Уларҙан башҡорттарҙың ете ырыуы барлыкка килер; ул ырыуҙарҙың һәр ҡайһыһы үҙҙәренең ана шул башлыҡтары исеме менән йөрөтөлөр. Ҡара, ана уларҙың ырыуҙары ҡайһылай ишәйгән.

Ҡуҙыйкүрпәс, бөтә был күренештәрҙе ошо ырыуҙарҙың атаһы булып, ысын күңелдән ҡәнәғәтләнеү менән ҡарай. Ахырҙа, ул ниндәйҙер аңлайышһыҙ сыуалыш күреп:

— Ҡоралланған шул тиклем күп халыҡ ниңә былай мыжғыша икән? Ҡайҙа карама, шунда ҡурҡыныс күрәм. Миңә улар йыртҡыс арыҫландарҙан, ҡанға һыуһаған юлбарыҫтарҙан һаҡланырға әҙерләнгән һунарсылар һымаҡ күренә? — ти.

— Улым! — тип яуап бирә Мәскәй. — Һинең нәҫелдәрең һуғышҡа әҙерләнә.

— Һуғышҡа! — тип ҡысҡырып ебәрә батыр. — Аһ! Минең ундай ҡот осҡос нәмәне күргәнем юҡ әле. Был саҡлы халыҡ йыйылғас,

ул нәмәкәй барлыҡ арыҫлан менән юлбарыҫтарҙан да уҫалыраҡтыр инде.

Мәскәй йәш батырҙың аңһыҙлығына йылмайып ҡуя ла артабан һөйләп алып китә:

— Игелекле Ҡарабай улы! Һуғыштың нимә икәнен һәм уның ни сәбәптән килеп сығыуын төшөнөү кәрәк һиңә. Хаҡ яҙмышы буйынса, һинең ишәйә барған нәҫелдәреңә донъялағы иң көслө Аҡ хандың[33] хакимлығы аҫтында йәшәргә яҙған. Улар, Дейеү пәрейҙәренең ҡотортоуы буйынса атай-олатайҙарының ғәҙәтен ташлап, аҙғынлыҡҡа биреләсәктәр. Шунлыҡтан үҙбелдеклек, тәртипһеҙлек, унан ҡала ҡотолғоһоҙ рәүештә ыҙғыш менән татыуһыҙлыҡ килеп сығыр. Шул сәбәпле мосолмандар именлеген ҡайғыртыусы бөйөк Мөхәммәт уларҙы Аҡ ханға ҡол булыуҙарын ярлыҡар. Күп халыҡты үҙенә буйһондорған был бөйөк хан, үҙ еренең сиген көньяҡҡа табан Аҡ диңгеҙгә ҡойған Раа йылғаһына тиклем киңәйтеп, көнсығыштағы һинең ырыуҙарың йәшәгән Иртыш менән Яйыҡ йылғаһына саҡлы барып етер. Уның ҡоралына бер ни ҙә ҡаршы тора алмаған кеүек, башҡорт халҡы ла буйһонор.

— Минең тоҡомом аҡ хандар хакимлығы аҫтында имен йәшәрме һуң? — тип һорай Ҡуҙыйкүрпәс.

— Бөйөк пәйғәмбәребеҙ шулай ҡушҡан, — тип яуап бирә Мәскәй. — Әммә ете ырыу халҡы был имен тормошто тиҙ генә татый алмаҫ. Яуыз сихырсылар, үҙ теләктәренә бик үк ирешә алмаһалар ҙа, уларҙы ҡырып бөтөрөргә биш тапҡыр ынтылып ҡарарҙар, йәки, һис булмағанда, уларға яуызлыҡ эшләргә тырышырҙар. Хәйләкәр сихырсылар, күрәләтә яу менән күтәрелергә баҙнат итмәй, аҫтыртын эш итеп, тоҡомдарыңды ыҙғыштырырға керешерҙәр. Шунан инде башҡорттар ҡотороноп, аҡ ханға ҡаршы ҡорал күтәрмәксе булырҙар (бына ошо һуғыш була ла инде). Әгәр ҙә эштәр уң сыҡҡанда, улар Аҡ ханға буйһоноуҙан ҡотолорға тырышырҙар (был инде һуғыштың сәбәбе булыр).

Бына, улым, әлегәсә тыныс ауылдарҙа йәшәгән һинең тоҡомдарыңды ашаусы яуыз йыртҡысҡа аңлатма ошо. Инде шул болаларҙы башлап ебәреүсе дүрт батырға ҡара. Улар дүртеһе лә ат өҫтөндә. Аҡылдары, батырлыҡтары менән айырылып торған был батырҙар бер-береһенән бик күп йылдарҙан һуң килеп сығырҙар. Һин күреп торған беренсеһе, тимер күлдәк кейеп, уйнаҡлап торған атҡа атланғаны, — Ҡараһаҡал[34] батыр булыр. Ул үҙенең ырыуҙаштарын урыҫтарҙың аҡ ханына ҡаршы ҡотортор. Уларҙың күбеһе аҡ һуғышсыларға ҡаршы һөжүм итер, шул яуҙа ырыуҙаштарындың байтағы ҡырылыр, әммә аҡ хан һуғышсыларының көсөнә кемдәр генә ҡаршы тора алһын? Ҡараһаҡал күп кенә хаталарҙан, уңышһыҙлыҡтарҙан һуң үҙенең юлдаштары менән ҡайтанан аҡ хандың хакимлығын таныр.

Уның эргәһендә ултырған икенсеһе — ҡурҡыу белмәҫ Аҡай[35] батыр булыр. Был бик баҙыҡ һәм көслө етәксе. Ул батыр урыҫтарҙың беренсе бөйөк батшаһына ҡаршы ҡорал күтәрер. Был иҫ киткес батыр барымта ваҡытында ҡаҙаҡ батыры Сарығолдан тартып алған ҡылысын ялмап яуға сығыр. Иллә-мәгәр Аҡайҙың көслө ҡулындағы

был һоҡландырғыс ҡылыс батыр батша һуғышсыларын кире ҡаға алмаç.

Өсөнсөһө — ажарлы Ҡилмәк[36]. Ул атланған юлбарыçтан көслө, елдән етеҙ аҡбуҙ ат һинең Йондоҙ юлаусы менән тау бейәһе тоҡомонан сығыр. Уға атланыусы үҙенең батырлыҡ өлгөһө менән ырыуҙаштары урыçтарҙың тол ҡатын батша һуғышсыларына ҡаршы яуға күтәрер, әммә кемдәр генә алла менән аҡ батшаға ҡаршы тора алһын инде! Ҡилмәк батыр, үҙенең ҡоралдаштары менән бергә еңелеп, уның алдында теҙ сүгер.

Баштан-аяҡ ҡоралланып, алма сыбар арғымаҡ өçтөндә ултырған дүртенсеһе — ҡыйыу һәм ғәйрәтле Батырша[37]. Был батыр Бөрйәндән башланып киткән бер ырыуы менән урыçтарҙың ҡыҙ батшаһына ҡаршы баш күтәрер. Ҡалған алты ырыу тыныслыҡта булыр[38], сөнки яуыз йәндәр уларҙың тоғролоғон ҡаҡшата алмаç. Бөрйәндәр иһә, күп уңышһыҙлыҡтарға осрағандан һуң, еңелерҙәр. Урыçтар уларҙы батшаларына буйһондорор, батша уларға мәрхәмәтен күрһәтер һәм ғәфү итер.

Инде, улым, бөйөк әбей батша хакимлыҡ иткән заманда баш күтәргән башҡорттарҙын бишенсе һәм һуңғы болаларын күр[39]. Уның киң батшалығында яуыз болаһы күтәрелер, шуға был фетнә лә ҡушылыр. Аҡылы менән дә, эше менән дә бөйөк батша ул ҡотороноуҙы көс менән баçырға тырышмаç, ә уға аяусанлыҡ менән шәфҡәтлелекте ҡаршы ҡуйыр. Ошоноң менән боласыларҙы ҡоралһыҙландырып, баш һалырға мәжбүр итер һәм үҙ батшалығында тыныслыҡ урынлаштырыр. Шунан һуң яуыз Дейеү пәрейҙәр һинең улдарыңдың маҙаһын китерергә баҙнат итмәçтәр.

Инде беҙҙең батырҙарға ҡаршы йыйылған аҡ һуғышсыларға ҡара.

Ҡарабай улы, бығаса үҙе һис күрмәгән икһеҙ-сикһеҙ күп халыҡты күреп, тертләп китә. Бөтәһенең дә бер иш кейемдәре, бер төрлө ҡоралдары, атлылар менән йәйәүлеләрҙең ыҡсым сафтары уны ғәжәпкә ҡалдыра. Урыçтар сафындағы бөтә нәмәгә ентекләп оҙаҡ ҡарап торғандан һуң, ул ике тәгәрмәс өçтөндә алып барылған йомро баҡыр бағаналарҙың нимә икәнен һорай. Мәскәй, көрһөнөп:

— Аһ, минең улым! — Был ут бөркә торған һәләк иткес көбәктер! Уға ҡара саң онтағы менән бер нисә суйын шар һалалар. Шул сангa саҡ ҡына ут тейҙеме — баҡыр көбәк йәшен атҡан кеүек дөрһөлдәй ҙә эсенән ҙур йәҙрә атып сығара, был иһә йөҙләп йәки унан да күберәк батырҙы бер юлы ҡырып һала. Донъяла был һәләк иткес көскә ҡаршы торорлоҡ бер ни ҙә юҡ.

Батыр ауыр көрһөнөп ҡуя, уның бите буйлап йәш бөрсөктәре тәгәрәп китә. Шунан ул:

— Ул зарарлы ҡара санды кем уйлап сығарған? — тип һорай.

— Һеҙ үлтергән Дейеү пәрейҙәренең яуыз балалары. Улар Ҡарабай ырыуын ҡырып бөтөрөргә ант иткәндәр. Ошо анттарын үҙҙәренең бөтә мәкерле нәçел-нәсәбенә еткергәндәр.

Бына ул һинең ырыуыңа ырыç килеү мәле! Ҡыҙ батша тарафынан төшлөк илгә хаким итеп ебәрелгән хөрмәтле мырҙа[40] алдында илтифатлы бул. Батыр батшаның тәрбиәһен алған һәм уның шәкер-

те булған кешенең нисек итеп буш ятҡан Яйыҡ ярҙары буйлап икһеҙ-сикһеҙ Аҡ диңгеҙгә тиклем һуҙылған ерҙәрҙе байҡап һәм үлсәп йөрөүен күр; ул оҡшашы булмаған ҡалалар төҙөй һәм уларҙы кешеләр менән тултыра, һыбайлы ҡыр-ҡаҙаҡтар үтмәһен өсөн нығытмалар менән урата, урыҫтарҙың хәүефһеҙлеге өсөн отрядтар, маяҡтар ҡуя. Унда һин уның саң эсендә, тирләп-бешеп төҙөлөштә тырышып йөрөгәнен, ә бында төрлө дингә табынған кешеләргә хөкөм сығарып, ғәҙеллек күрһәтеп ултырыуын күрәһең. Бер кешенең барыһын да күреп, бөтәһен дә эшләп, бойороп өлгөрөүенә ышаныуы ла ҡыйын. Әммә уның емешле, арыу белмәҫ аҡылы һәр ергә өлгөрә: уйлап таба, ижад итә һәм төҙөй.

Уның тарафынан тирә-яғы үтеп ингеһеҙ стена, тәрән соҡор менән уратып төҙөлгән мөһабәт ҡалаға ҡара[41]! Урыҫтар өсөн ул төҙөткән алтын түбәле храмына ҡара. Ҡаты таштарҙан, йыуан бүрәнәләрҙән һалынған манараларға, ҡунаҡханаларға, торлаҡ йорттарына ҡара. Яйыҡтың аръяғына ҡара, — унда киң һәм мөһабәт Каруанһарайын, шунда йыйылған төрлө ырыу халҡын күр. Тегендә ҡыр-ҡаҙаҡтар урыҫтарға мал, бында һарттар[42] — үҙ еренән килтергән тауар алмашалар. Хәстәрлекле хужа барыһын да алдан белеп, алдан күреп урынлаштырған. Ул ошоноң менән үҙ батшаһына, ватандаштарына ҙур файҙа килтерер. Ул, беренсе булып, һинең ырыуҙаштарыңда төшлөк яҡты ҡыр-ҡаҙаҡтар сапҡынынан һаҡлау өмөтөн нығытыр. Ете ырыу кешеләрендә ул тәртип урынлаштыра башлар: уларҙы волостарға, меңдәргә, йөҙҙәргә һәм башҡаларға бүлер. Шуның менән ул баш-баштаҡлыҡтан килгән үҙ-ара ыҙғышты туҡтатыр. Улар ғөрөф-ғәҙәтенең ябайлығын яратыр, уларҙы етеш тормошло итеп күрергә теләр, һәм ер йөҙөндә Мөхәммәттән башҡа уға тиң изгелекле кеше булмаҫ.

Батыр, теҙләнеп һәм ҡулын түшенә ҡуйып, үҙенең тоҡомона изгелек итеүсегә ихтирамын белдереп ҡарай.

— Изгелекле Мәскәй! — тип ҡапыл ҡысҡырып ебәрә батыр, — тоҡомдарымдың ауылдарын, йәйләүҙәрен аралап, уларға бүләктәр таратып йөрөүсе ни саҡлы яҡшы күңелле кешеләрҙе күрәм мин. Уларҙың изгелекле ҡиәфәттәре мосолман икәнлектәрен күрһәтеп тора. Улар баштарына сәллә урап, әленән-әле тәһәрәт алып, Ҡөрьән уҡый-уҡый минең тоҡомдарыма Мөхәммәттең васыяттарын өйрәтә.

— Юҡ, ҡәҙерле Ҡуҙыйкүрпәсем! — ти Мәскәй. — Һин уларҙы ырыуҙаштарыңдың дуҫтары тип уйлауың менән бик хаталанаһың. Был кешеләр — һинең ырыуҙарыңды сағып, уларҙың мейеһендә төҙәлмәҫ ағыуҙарын ҡалдырырға ҡырындап килеүсе йылан һымаҡтар.

— Аһ, инәй! Ғәфү ит мине, — тип ҡаршы төшә батыр. — Һинең был һүҙҙәреңә ышанғым килмәй минең. Бер алла менән уның пәйғәмбәренә табынған мосолмандарға былай булырға яраймы һуң? Мин уларҙы күреүгә әүлиә тип белдем.

— Ғәжәп түгел, улым, — ти Мәскәй. — Улар үҙ ҡиәфәттәре менән һинең тоҡомдарыңа ла шулай булып күренерҙәр. Уларҙың аллаһы — табыш, дине — алдау, закондары — тышҡы ҡиәфәттәрендә генә, ә выжданында түгел.

Уларҙың сығышы, сифаттары, кәсептәре хаҡында тыңла һәм үҙең фекер йөрөт!

Был ҙур булмаған төркөм мин һөйләп үткән аҡ батшаға буйһонған К...-нан тора[43]. Улар Яйыҡҡа ҡойоусы Һ... йылғаһы буйына, Яйыҡ буйлап ҡалалар төҙөүсе хакимдың төшлөк иленә килеп ултырырҙар. Ошо көсеп килеүселәр урыҫтарҙыҡына оҡшаш йорттар төҙөрҙәр, мин күрһәткән теге Ҡаруанһарайҙа ҡыр-ҡаҙаҡтар менән алыш-биреш алып барырҙар. Шунан килгән табыш менән генә ҡәнәғәтләнмәй, һинең улдарыңдың һимеҙ мал көтөүҙәренә күҙҙәре ҡыҙыр. Ас бүреләр шикелле, барлыҡ ауылдарға, йәйләүҙәргә таралырҙар, һәр кемдең мөлкәтен иҫәпкә алырҙар, һәм кем күберәк маллы булһа, шул күберәк уларҙан михнәт күрер. Дуҫ булған булып, бер ни тормаған ваҡ-төйәккә юғары хаҡ ҡуйып, затлы башҡорт малына, йылҡыһына алмашырҙар. Ошоноң менән улар кәрәк-яраҡ тигән булып, быуаса билдәле булмаған яуызлыҡ индерерҙәр. Хуш күңелле тоҡомдарыңдың ышанысын күберәк яулар өсөн, йыш тәһәрәт алып, наҙан булыуҙарына ҡарамаҫтан, ғәрәп мәҡәме менән Ҡөрьән уҡыған булырҙар, уны нисек теләһәләр, шулай боҙоп аңлатырҙар. Бының менән улар, үҙҙәре лә йүнләп белмәй тороп яҙма уҡыуға, Мөхәммәт өйрәтеүҙәрен белергә өндәгән булып, икенсе хилафлыҡ эшләрҙәр. Шул арҡала ырыуҙаштарың малсылыҡҡа күңел бирмәй башларҙар, мәрәкәләрен дә, һунарсылыҡты ла онотоpҙар. Шулай итеп ете ырыу кешеләре, вәғәзсе дуҫтары менән нығыраҡ таныша барған һайын, йылдан-йыл өйөр йылҡыларын, аулаған йәнлек тиреләрен затлы еләндәргә, билбауҙарға, түбәтәйҙәргә һәм башҡаларға алмашып, быуаса һис беленмәгән «ярлылыҡ» тип аталған өсөнсө яуызлыҡтың тыуыуын күрерҙәр. Хәҙер уларҙың затлы кейемдәре күп булыр, әммә мал көтөүҙәре, йылҡы өйөрҙәре баяғы дуҫтарының ҡулына күсер. Ә дуҫтары был табышҡа айлы манараһы күккә тейеп торған ҙур-ҙур мәсеттәр һалырҙар. Ләкин алланың рухы унда булмаҫ, ялғанлыҡ менән булдырылған эшкә йөҙөн бирмәҫ.

— Үҙҙәрен остаз һанап, башҡаны өйрәтеүселәрҙән ялған дуҫлығын тоҡомдарым бер саҡ аңлармы икән?

— Аңларҙар, тик бик һуң, ҡәһәрле хәйерселек бөтә ауылдарҙа ҡоторона башлағас ҡына, — тип яуап бирә Мәскәй.

Боронғо ғәйрәттәре ҡайтып, арыҡланып, батырлыҡҡа, һунарсылыҡҡа һәүәҫлектәре бөтөп, бөлгөнлөктә көн итеүсе тоҡомдарын уйлап, батырҙың йөрәге әрней. Сөнки ул заманда, — тип өҫтәй хикәйәтте һөйләүсе, — былар бөтәһе лә маҡтаулы эш һанала ине.

— Тыныслан, улым! — ти Мәскәй. — Һиңә ырыуҙаштарыңдың тәүләп көс-ғәйрәт алыуҙарын да күрһәтәм.

Шунан һуң, ҡулы менән Ҡуҙыйкүрпәстең күҙен ҡаплап, аңлайышһыҙ һүҙҙәр әйтә лә ҡулын кире алып:

— Нимә күрәһең? — тип һорай.

— Бөтә матурлығында ҡояшты күрәм, — ти ул.

— Тағы нимә күрәһең? Ныҡлабыраҡ ҡара!

— Оҙон буйлы, һылыу йөҙлө бер батыр сығып килә, шуны күрәм. Башында таж, иңбашында алтын төҫөндәге оҙон елән, ҡалған

кейеме ҡар кеүек аҡ; билендә ҡылыс, ә ҡулына миңә билдәһеҙ ҡорал тотҡан, шуның менән беҙ йәшәгән төшлөк яҡҡа күрһәтеп тора.

— Эй әсәкәйгенәм, тағы ни күрәм! Ырыуҙаштарым, уның бойороуынса, йоҡонан уянған шикелле хәрәкәткә килә, яу төркөмдәренә йыйыла. Ҡоралдары ялтлай, һуғышҡа инергә әҙерләнгән кеүек, ярһыу аттары кешнәй, һәм, миңә элек күрһәткәндәгегә ҡарағанда ла, төҙөгөрәк сафтар менән төркөм артынан китә бара, күҙҙән юғала бара. Барыһын да белеүсе, Мәскәй, әйт әле? Был нимәне аңлата? Ни өсөн миңә ҡояшты күрһәттең? Күк кешеһе кем ул? Ундай батырҙы ер йөҙөндә табыу мөмкин түгел. Минең күргәндәрем тураһында әйт!

— Һинең ҡыҙыҡһыныуыңды, улым, йәһәтерәк ҡәнәғәтләндерергә тырышырмын, ни өсөн тиһәң, ғилемемдең аҙағы яҡынлашып килә, — тип яуап ҡайтара Мәскәй. — Ҡояшты һинә йылытҡаны, донъяны йәнләндергәне һәм туҡландырғаны өсөн күрһәттем. Һин күргән бөйөк ир нәҡ шуның кеүек үҙенең ете иклим* биләмәһенә муллыҡ менән йәм бирә. Ул — урыҫтарҙың, уларҙың биләмәһендә йәшәүсе һеҙҙең һәм башҡа ырыуҙарҙың аҡ батшаһы. Уң ҡулындағы һин күргән ҡорал менән ул үлтермәй, ә тик тынысландыра һәм йығылғандарҙы торғоҙа. Һиҙҙеңме? Ул шуны һеҙҙең илгә табан һуҙыу менән ырыуҙаштарың ҡалҡып торҙолар һәм, төркөм-төркөм булып сафтарға теҙелеп, уның дошмандарына ҡаршы яуға киттеләр.

— Еңеү менән ҡайтырҙармы икән? — ти түҙемһеҙ Ҡуҙыйкүрпәс.

— Ҡайһы бер батырҙар, — тип яуап ҡайтара Мәскәй, — дан сығарып танылырҙар, бөйөк батшанан бүләкләнерҙәр, йәйләүҙәренә ҡайтып, уның державаһында бәхетле йәшәрҙәр.

Күҙгә күренгән хуш күңелле, мөһабәт һынлы кешенең күк кешеһе булмайынса ерҙеке булыуына ышана алмайынса, батыр теҙ сүкте. Ул шул хәлдә торған мәлдә ҡапыл күк күкрәп, тау һәм мәмерйә тетрәп китә, тылсымлы һыу тултырылған табаҡ түңкәрелә, серле таҡта иҙәнгә төшөп селпәрәмә килә. Мәскәй иҫһеҙ булып йығыла, батыр егет тә аяғына баҫып тора алмай.

Бер аҙ ваҡыт үтеүгә, бөтәһе лә тынысланғас, Мәскәй иҫенә килә һәм, шунда уҡ мәмерйәнән сығып, Ҡуҙыйкүрпәскә ошо һуңғы һүҙҙәрен әйтә:

— Улым, бөтәһе лә үтәлде, мин һиңә тоҡомоңдоң киләсәген күрһәтеүемә шатмын. Ошонон менән минең ғилемемдең бөтөүен, серле таҡтаның ватылыуын алла алдан билдәләп ҡуйған. Ошо ваҡыттан алып яуыз сихырсылар тоҡомдоң маҙаһын боҙорға тәүәккәллек итмәҫ. Инде һиңә Сарыбай йәйләүенә ашығырға ваҡыт. Һаҡ бул, пәрейҙәрҙең мәкерлегенә ҡаршы нык тор. Мөхәммәттең ярҙамына таян. Намыҫлы бул, дөрөҫ уйла, ғәҙел эшлә, шул ваҡытта ғына бөтә ҡаршылыҡтарҙы еңеп, үҙеңә әйттерелгән Маянһылыуыңды алырһың. Ғәҙеллек һәр ваҡыт яуызлыҡты еңә.

Мәскәйҙең ошо нәсихәтен алып, үҙе менән хушлашып, батыр килгән юлы менән китә, әммә элеккенән күберәк ҡыйынлыҡ күрә. Ул йылға ағышына ҡаршы йөҙөргә тейеш була. Юлдың ҡыйынлығы шунда икән. Шулай ҙа ул үҙенә хас ҡыйыулыҡ, йылғырлыҡ менән

тауҙар араһынан йөҙөп сығып, көньяҡ менән көнбайыш араһындағы Мәскәй ере буйлап артабан китә.

Ҡуҙыйкүрпәс мәмерйәлә булған саҡта, яуыз пәрейҙәр уға бер ни ҙә эшләй алмаған, сөнки изгелекле Мәскәйҙең тылсым көсө уларҙың көсөн кире ҡағып торған. Хәҙер пәрейҙәр, уның бынан сығыуына ҡыуанып, үҙҙәренең туғандарын үлтереүсенең анһат ҡына башына етмәк булалар. Ошондай яуыз уй менән улар өсөнсө көн инде батырға һөжүм итәләр. Егет Мәскәйҙә күргән серле күренештәрҙе, үҙ йөрәгендә урынлашҡан һоҡландырғыс Маянһылыуын уйлай-уйлай үҙ юлы менән бара торғас, ҡапыл аты дулай, үрәпсеп куршылдай башлай, аяҡтары менән сапсынырға тотона[44]. Ҡуҙыйкүрпәс, тирәйүндә бер нәмә лә күренмәгәс, атының былай ҡотороуына ғәжәпләнеп, уға бер-ике тапҡыр ҡамсы төшөрөп, үҙ юлына бара, ә аты уны тыңламай, ауыҙлығын сәйнәй биреп, бөтөнләй икенсе яҡҡа тарта. Шул ваҡыт ергә ҡуйы томан төшә, тауҙарҙы, бөтә тирә-яҡты ҡаплап ала. Алдындағы юлды күрмәгән ярһыу Йондоҙ юлаусыны тыя алмаған батыр туҡтап, эйәренән төшөргә мәжбүр була. Шул ерҙә ул атының һум иттәренең бүре талағандай йолҡоноп бөтөүен күреп, аптырап ҡала. Инде батыр атын бикәргә рәнйетеүенә бик үкенә, сөнки ул уны бөтә мөлкәтенән артыҡ күреп ярата, иң тоғро юлдашы итеп һанай ине.

— Шунлыҡтан, тыңлаусыларым, — тип һүҙен дауам итә хикәйәне һөйләүсе, — һеҙҙең бөтәгеҙ ҙә өҙөлөп һөйгән ҡыҙына барған саҡта юлдың ниндәй оҙон булып тойолоуын яҡшы беләһегеҙҙер. Ул саҡта бик йылдам йөрөүсе ин яҡшы ат та сабан һәм йүнһеҙ булып күренә. Ул шәп атлап бара икән, уны юрттырабыҙ; был ғына аҙ: беҙ уны саптырабыҙ; был да етмәй әле: уның ҡоштан да етеҙерәк осоуын теләйбеҙ. Мөмкин булһа, хатта быға ла ҡәнәғәт булмаҫ инек, сөнки беҙ ашығабыҙ, ә йөрәгебеҙҙең елкенеүенән йәһәтерәк йөрөп булмай. Ә йөрәге лә, күргәндәре лә Ҡуҙыйкүрпәсте Маянһылыуына ашыҡтырған мәлдә генә, был һылыу тылсымлы таҡтала күҙҙән юғалғаны кеүек, юғалмаһа ярар'ине, тип атлығып барғанда ғына, егет йәйәү тороп ҡала.

Хикәйәне тыңлап ултырыусылар, был һүҙҙәрҙән һуң рәхәтләнеп көлөшәләр, һәр кем янында ултырыусыға кәләш алған саҡта үҙ башынан кисергән ирмәк хәлдәрҙе һөйләргә кереша. Шулай итеп, улар һөйләүсегә бер аҙ ял итергә, хикәйәһенең дауамын иҫенә төшөрөргә ирек бирәләр. Инде бөтәһе лә һөйләшеп туйғас, усаҡ ҡыҙыуы кәмей барған һайын эркет ҡайнаған ҡаҙандың бығырҙауы тынған һымаҡ, тауыштар ҙа аҡрынлап тына башлай. Шул ваҡыт бөтәһе лә баш ҡағыу менән сәсәндең мәрәкә һүҙҙәрен хуплайҙар һәм тағы бер тапҡыр көлөп алыуҙары менән уның уйҙары дөрөҫ булыуын белдерәләр, шунан бер тауыштан: «Һай, ирҙең аҫылы! Йөҙ йәшә!» — тип ҡысҡырып ебәрәләр.

Атаһынан шифалы үләндәрҙе таный белергә өйрәнгән Ҡуҙыйкүрпәс томан таралғас та шул үләндәрҙе эҙләп китә. Бер нисә аҙым алға атлауға өҫтө сыбыҡ-сабыҡ менән ҡапланған, йәшел үлән менән күмелгән тәрән соҡорҙар күрә. Шуларҙы һаҡлыҡ менән генә асып ҡараһа, төптәренә ҡағылған ярты һөңгө һабы бейеклегендәге осло

имән ҡаҙыҡтарҙы күреп шаҡ ҡата. Бая атын бөтә көсө менән ошо соҡорҙарға табан бороуын уйына килтергәс, батырҙың тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китә. Бының Мәскәй әбей иҫкәрткән уҫал сихырсыларҙың мәкерле эше икәнен аңлай. Күрәләтә уға ташланырға баҙнат итмәгән шул яуыздар уның юлы үткән бөтә урындарға ошо соҡорҙарҙы ҡаҙып ҡуйырға булғандар икән. Сихыр көсө менән ҡуйы томан ебәреп, атын өҙгөләү ҙә шуларҙың яуызлығы булған. Дулаған ат үҙенең эйәһе менән ошо соҡорҙарҙың берәйһенә килеп төшһөн өсөн шулай эшләгәндәр улар. Әммә һиҙгер Йондоҙ юлаусы үҙен пәрейҙәрҙән талатырға ирек биреп булһа ла эйәһен үлемдән алып ҡалған.

Ҡуҙыйкүрпәс, шифалы үләндәр йыйып, шунда үҙе атып алған ҡоралайҙың таҙартылған ҡарыны эсенә һала ла уға һыу тултырып, бөрөп бәйләй. Шунан һуң бәләкәй соҡор ҡаҙый, уның эсенә шул ҡарынды һалып тупраҡ менән бер ая ҡалынлығында күмә лә өҫтөнә ут яға. Шулай итеп, ут аҫтында төшкә тиклем ятҡан үләндәр яҡшылап быҡҡас, уларҙы атының яраларына яба. Шул көндө кискә үк аттың хәле яҡшыра төшөп, яралары уңала башлай, ә иртәгеһенә инде ул хужаһына хеҙмәт итергә әҙер була.

Иртәгеһе көн, ҡояш ағас бейеклеге күтәрелгәндә, атына атланған түҙемһеҙ Ҡуҙыйкүрпәс, баяғы соҡорҙарҙы урап үтеп, юлға сыға. Юлда барғанда был хаҡта оҙаҡ уйлай, сихырсыларҙың бындай үлемес хәйләне уйлап сығарыуҙарын башына ла килтерә алмай. Эскерһеҙ йәш батыр быны алдан һиҙеү йәки мәкерлеккә мәкерлек менән яуап ҡайтарыу түгел, кешене шулай аңғармаҫтан үлтереү мөмкин икәнен аңлай алмай. Сөнки атаһы Ҡарабай тәрбиәһендә үҫкән Ҡуҙыйкүрпәс алланы таныуҙан, яҡындарынды яратыуҙан, дошмандарҙан батырлыҡ һәм ҡорал менән үс алыуҙан башҡа һабаҡты өйрәнмәгән. Атаһының ғүмере ишетмәгән бындай хәйләле алышы хаҡында уйлағанда уның бөтә тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китә. Шунан һуң ул дейеү пәрейҙәренең яуыз уйҙарынан һаҡланыуға ҡарағанда, йыртҡыс арыҫландар менән алышыу анһатыраҡ икән тигән уйға килә.

Артабан ул ҡалған алты көндө бәлә-ҡазаға осрамай тотҡарһыҙ үтә. Етенсе көндө, ҡояш кискә ауышҡан саҡта, ул бер ҡара урманға етеп, шунда ял итеп китмәк була. Шул саҡта тырнаҡтары менән дәү-дәү таштар матҡып тотҡан бөркөттәрҙең ҡапыл һауаға күтәрелеүен күрә. Бер үк ваҡытта урмандан үкерә-үкерә, олой-олой сығып, уның өҫтөнә бер өйөр йыртҡыс януарҙар ябырыла. Бергә йыйылған шул саҡлы күп урман һәм күк дошмандарын күргәс, ул аптырап ҡала, шулай ҙа ҡойолоп төшмәй, уларға ҡаршы торорға әҙерләнә. Уның бәхетенә, урман ҡырында ғына тарбағай ботаҡлы өс йыуан имән үҫеп ултыра икән. Батыр егет, атынан һикереп төшөп, шул имәндәр аҫтына туҡтай, ҡулына йәйә алып, уғын төҙәй ҙә дошманын көтә башлай. Иң алдан иҫ киткес ҙур айыу килә. Батыр, йәйәһенең керешен тартып, уғын шул хәтле көс менән мәргән атып ебәрә, уҡ айыуҙың асыҡ ауыҙына инеп, үтә сығып китә, шулай ҙа айыу йығылмай, бары тик зыр өйөрөлә лә бер нисә аҙым артҡа сигенә. Шунда уҡ бүтән йыртҡыстар айыуҙы һырып алып, яраһын

ялай башлайҙар. Батыр, януарҙар араһында быңдай сәйер ярҙамлашыуҙы күреп, уғымды йомшаҡ атҡанмын икән тип үкенә, сөнки атылған айыуҙа бер тамсы ла ҡан күренмәй.

Шул ваҡытта унын баш осонда осоп йөрөгән бөркөттәр батырҙың үҙен дә, атын да һәләк итмәксе булып, ҡот оско с саңҡылдап, тырнаҡтарындағы таштарын ырғытырға керешәләр. Ағастың ҡуйы ботаҡтары аҫтына ышыҡланып тормаһа, был һауалағы дошмандарҙан ул ҡотола алмаҫ ине. Шулай ҙа юғарынан ҙур көс менән төшкән таштар ағастың ботаҡтарын һындырғылай, уларҙы бик һирәгәйтә. Шул арала яраланған айыуҙы алыҫыраҡ алып киткән януарҙар, шул хәтле көслө ырылдап олой башлайҙар, бынан батыр ҡаушай төшә. Шул ерҙә аты менән булған бәхетһеҙлек уны тағы ла ныҡыраҡ бошондора: Йондоҙ юлаусы, яуыз сихырсыларҙың ҡот оскос тауыштарына сыҙай алмай, ағас аҫтынан ситкә ташлана. Тап шул ваҡыт ҡанаттарын йәйеп өҫтөнә төшкән ике бөркөт, үткер тырнаҡтары менән атты эләктереп алып, һауаға күтәрәләр ҙә урман араһына инеп юғалалар, ә батыр бер ни ҙә эшләй алмай тороп ҡала. Бына шунан һуң инде Ҡуҙыйкүрпәс, йоҡоһонан уянғандай, ерҙән һәм күктән килгән януарҙарҙан бөтөнләй ҡурҡмаҫ була, ҡылысын ҡулына тотоп, ҡот оскос олоп торған януарҙарҙың туп-тура өҫтөнә ташлана. — Бик сәйер улар, башҡорт батырҙары, — тип өҫтәй хикәйәсе, — тик үҙ дуҫтарының, иптәштәренең йәки яратҡан яҡын кешеләренең ҡурҡыныс аҫтында ҡалыуы ғына уларҙы ҡаушата, ә үҙҙәренә килгән ҡурҡынысты һанға ла һуҡмайҙар, ҡурҡыныс ҙурая барған һайын батырлыҡтары арта ғына бара, ҡыйыулыҡтарын һуңғы һулышҡа тиклем юғалтмайҙар.

Инде ҡаушауҙы онотоп үс ала башлаған батырҙы күреп, уға сонтоҡ арт һандары менән боролған януарҙар (ни өсөн тиһәң, улар бөтәһе лә ҡойроҡһоҙ икән) урман эсенә тырым-тыраҡай таралышалар ҙа шарҡылдап көлөшә башлайҙар. Был көлөү урман шаңдауы менән ҡушылып йәнә көсәйә төшә. Аты өсөн йәне әсегән батырҙың үҙен һәләк итә алмаған, унын йәнен ныҡыраҡ көйҙөрмәксе булып шулай көләләр икән. Аҡтыҡ сиккә етеп ярһыған Ҡуҙыйкүрпәс, ҡылысын ҡулына тотоп, уларҙы эҙәрләүҙән туҡтамай, урман буйлап унда ла, бында ла ташлана бирә. Иллә-мәгәр береһен дә таба алмай: яуыз сихырсылар тырым-тыраҡай ҡасып бөткәндәр икән. Яуызлыҡтары менән мәкерлектәре баштарынан ашҡан бындай йыртҡыстар ғәҙәттә ҡурҡаҡ ҡуян йөрәкле булалар.

Ахырҙа шул тиклем арыған батыр абынып йығыла һәм, шунда ағасҡа һөйәлеп, сабып килгән ат һыуынырлыҡ ваҡыт ятып тора. Яҡында ғына әллә ҡасандан бирле ҡоҙғон ҡарҡылдай, батыр шунын сәбәбен белмәксе була: ҡоҙғон тауышы килгән урынға барып ҡараһа, ни күҙҙәре менән күрһен: унын тоғро аты ботарлап ташланған да ҡоҙғондарға емгә бирелгән. Атын ҡыҙғаныуҙан батырҙың ҡайнар күҙ йәш бөртөктәре сикәһен яндыра. Быға бик оҙаҡ ҡайғыра, әммә бер ни ҙә эшләй алмай. Ахырҙа тәрән соҡор ҡаҙый ҙа атының төрлө яҡҡа ботарлап ташланған һөйәк-һаяҡтарын йыйып, эйәре менән бергә шунда күмеп ҡуя. Шунан ҡылысын ҡынына һалып: «Һин бер үҙең минең яҡын дуҫым, юлдашым булып ҡалдың инде, — тип илап

ала ла, күмелгән атына ҡарап: — Ҡисер инде, тоғро атым! Мин һине бер ҡасан да онотмам!» — тип, артабан йәйәүләп үҙ юлына китә.

Ҡуҙыйкүрпәс, өс-дүрт көн буйы ял белмәй, көнө-төнө бара, бишенсе тәүлеккә сыҡҡанда, ярҙарына оҙон-оҙон камыш үҫкән, ҡаты ағышлы бер бәләкәй йылғаға килеп етә. Был Сарыбай батыр йәйләгән Ҡараһыу йылғаһы булырға тейеш, тип ҡыуана, сөнки ул Мәскәй әбей һөйләгән ергә оҡшаған була. Биш көнлөк юлда бик арыған батыр, ошо йылға буйында ял иткеһе килеп, һыу алып эсә лә ҡыуанысынан: «Мин инде Ҡараһыу йылғаһын тапҡанмын икән, Сарыбайҙы ла табырмын, ә һыуын эскәнмен икән — Маянһылыу ҙа минеке булыр», — ти[45]. Шуға шатлана-шатлана серле мәмерйәлә күргән Маянһылыуын күҙ алдына килтерә, шунан инде арыуын да онотоп, оҙаҡ йоҡонан уянғандай булып урынынан һикереп тора ла йылға ағышы буйлап йүгерә-атлай китә. Әммә оҙаҡламай аяҡтары талып туктай, артабан яй атлап бара. Йөрөшөн алыштырыуға уйҙары ла алышына. Ауыр көрһөнөп: «Аһ, дуҫым, яҡшы атым Йондоҙ юлаусы! — тип ҡысҡырып ебәрә. — Һин мине иң кәрәк саҡта яңғыҙ ҡалдырҙың, һине терелтер өсөн мин йылҡы өйөрҙәремдең, көтөүҙәремдең бөтәһен дә аямай бирер инем; икәүләп һис шикһеҙ Маянһылыуымды табыр инек; йәне һөйгән йәре менән тоғро аты башҡортҡа бөтә нәмәнән дә ҡәҙерлерәк бит. Йәйәүләп мин Сарыбайҙың йәйләүен тиҙ генә таба алырмынмы икән? — тип уйлай. — Ә тапҡан хәлдә, йыртыҡ сәкмән менән, ялан аяҡ, атһыҙ, ҡоралһыҙ көйө ҡарун һәм тәкәббер Сарыбайға нисек күренермен икән? Икенсе яҡтан, бәлки, хан улы Айҡара солтан батырҙар менән көрәштә, уҫал арыҫландар һәм юлбарыҫтар аулағанда йәки атта йөрөүҙә, мәргәнлектә ҡыҙға үҙен көслө лә, оҫта ла итеп күрһәткәндер. Маянһылыуҙың ошондай батырҙан мине өҫтөн һанауын мин ҡайҙан беләйем? Ә мин, Маянһылыу менән атаһына таныш булмаған бер һөйкөмһөҙ башҡорт, ихлас күңелдән яратам тип әйтеүҙән һәм алып ҡасыуҙан башҡа ҡыҙға бер ни ҙә вәғәҙә итә алмайым».

Сихырсылар ҡорған хәйләләрҙе дан менән йырып үткән, ә үҙҙәрен ҡыйрата барған һәм уҫал йыртҡыстар менән ҡаһармандарса алышҡан айбарлы батыр хәҙер янып торған күҙҙәренән һәм алһыу биттәренән башҡа ҡоралы ла, көсө лә булмаған кәрһеҙ бер ҡыҙҙан еңелә, уның алдында ҡойолоп төшә.

— Инде, дуҫҡайҙарым, — ти, хикәйәне һөйләүсе, тыңлаусыларға ҡарап, — егет был матурлыҡты ҡартлыҡ еткәс нисек булырын күҙ алдына килтерһә, ни күрер ине икән? Мин һеҙгә бүтәнсә бер һүҙ ҙә әйтмәйем, сөнки, аҡыллы уҙамандар, һеҙ бөтәһен дә үҙегеҙ беләһегеҙ, ә тик былай тип кенә уйлайым: бына әле егет матурлыҡты үҙ ғүмеренән дә өҫтөн ҡуйып, уға тиҙерәк яҡынайырға теләй, ә шул уҡ матурлыкты ул уйы менән ҡыҙҙың ҡартлығында күҙ алдына килтерһә, унан бына әлегеләй тиҙлек менән ҡасыр ине. Әммә башҡорттарға йәшлектә былай тип уйларға яҙмаған...

Үҙенең был уйы тыңлаусыларға ниндәй тәьҫир яһауын белергә теләп, хикәйәсе ошо урында тынып ҡала. Ғәҙәттәгесә, бөтәһе лә шарҡылдап көлөп ебәрәләр. Шул ваҡыт аранан береһе: «Минең би-

сәм тәүге көндәрҙә бик матур булып күренгәйне, әммә тора-бара бөтөнләй киреһенсә булып китте, ҡалын түләп икенсе бисә алырға мәжбүр булдым», — ти. Ә икенсеһе: «Минеке битенә кершән һөртөп, инлек яҡкан саҡта бик һылыу булып күренде, ә тәбиғи хәлендә күрһәм, үҙенә ҡарағым да килмәй башланы. Шуға уны айырҙым да, рөхсәт иткәне өсөн Мөхәммәткә рәхмәт әйтеп, икенсе бисә алдым», — ти. Өсөнсөһө иһә: «Йәш сағында мин бисәмде аттарыма ҡарағанда ла нығыраҡ яраттым, — ти, — ә ул ҡартайып, үҙемә аҡыл ултыра башлағас, ҡатындар хаҡында шулай уйлауыма үҙемдең дә иҫем китте».

Ошондай әңгәмә һабаға һалынған ҡымыҙ эсеп сыҡҡан ваҡыттан оҙағыраҡ бара. Тыңлаусылар тына төшкәс, хикәйәсе һүҙен дауам итә.

Шатлыҡлы уйҙарынан һағышлы уйҙарға күскән Ҡуҙыйкүрпәс, аҡрын ғына атлап, йылға ағышы буйлап үҙ юлы менән бара бирә. Оҙаҡламай ул ҡамышлыҡ аръяғынан ниндәйҙер шау-шыу ишетә, уға яҡынайған һайын, тауыш көсәйә бара. Юлсы егет шунда табан ашығып йүгереп барһа, ҡамышлыҡ аръяғындағы тигеҙ яланда бик ҙур арыҫлан бер ҡырғыҙ батырына ташланып, уны бөтөнләй хәлдән тайҙырғанын күрә. Ҡырғыҙ ҡулында ҡылысы булһа ла, хәлһеҙлектән киҙәнеп һелтәй алмай, ә йыртҡыс уның һайын көсөн арттыра ғына бара. Ул инде батырҙың атын ботарлап ташлаған, эйәһен дә шулай итмәксе була. Хәҙер бөтә ышаныс үҙҙәренең откорлоғо менән арыҫланды эйәһенә яҡын ебәрмәй ҡаршы торған ике тоғро эттә генә. Әммә йыртҡыс уларҙы ла икеһен бер юлы урталай өҙә һуға, шунан саҡ аяғына баҫып торған батырға ташлана. Уны ергә йығып, үткер тырнаҡтары менән тимер күлдәген йыртҡылай башлай. Быны күргән башҡорт батыры, таныш булмаған егеткә ярҙам күрһәтмәксе булып, йылдамыраҡ йүгереп килә, ҡылысын бар көс менән киҙәнеп арыҫландың үткер тешле, ҡалын иренле томшоғон өҙә саба. Йыртҡыс башын сайҡап, моронон ергә ышҡый, шунан яман ярһып батырға ташлана. Ҡуҙыйкүрпәс, икенсе тапҡыр киҙәнеп һелтәүе менән инде уның алғы аяҡтарын өҙә саба, ә өсөнсө тапҡыр һелтәгәндә, арыҫлан ергә һуҙылып йән бирә.

Ул инде януарҙы ҡалдырып, һуштан яҙып саҡ тын алып ятҡан ят батырға ярҙамға ашыға. Тәнен ҡарап сыҡҡас, уның яраланмауын, ә тотош иҙгеләнеүен күрә. Ул шунда уҡ йылғанан таҡыяһы менән һыу килтереп бөркә. Оҙаҡламай ҡырғыҙ күҙҙәрен аса ла йәнә йома. Ҡуҙыйкүрпәс тәүҙә Сарыбай йәйләүен күрһәтер кешене таптым, тип ҡыуанһа, хәҙер уның үлеп барыуын күреп, өмөтөн өҙә, бигерәк тә уға ярҙам күрһәтә алмауы өсөн борсола. Яраны уңалта торған шифалы үләндәрҙе белһә лә, был хәлдә уларҙың да файҙаһыҙ икәнен күрә. Оҙаҡ ҡына уйлап торғандан һуң, егетте йылғала ҡойондормаҡсы булып, иңбашына күтәреп, яр ситенә алып бара. Яҡшы ниәт менән уйлап табылған был хәтәр дауалау юлы имгәнеүсенең хәлен яҡшырта төшә, дауалаусыны ҡыуандыра, сөнки күңеле яҡшы кеше икенсе берәүҙең яҡшылығын күреп шатлана бит. Башҡорт батыры ҡырғыҙҙы яр башына һалып сисендерә башлаған саҡта, уның күҙҙәрен асып, ҡулдарын ҡыймылдатыуын күрә. Бынан

ул ауырыуҙың ике сәбәптән — һыу бөркөүҙән һәм күтәреп килтереүҙән иҫенә килеүен аңлап ала. Шунлыктан ул һыу һоҫоп алып уға ҡабат бөркә лә, шунан йәнә иңбаштарына күтәреп, үлтерелгән арыҫлан янына кире илтә. Шул ваҡытта инде ҡырғыҙ егетенең тороп ултырып, түбәндәге һүҙҙәрҙе әйтеүен ишеткәс, сикһеҙ ҡыуана:

— Изгелекле батыр! — ти ул. — Һин арыҫландың үткер тырнағынан тартып алып, мине үлемдән ҡотҡарҙың, инде мине үҙем ҡәҙер иткән ата-әсәмә, мине бүтән ағай-энеһенә ҡарағанда ныҙыраҡ яратҡан апайыма ҡайтарһаңсы. Әгәр ҙә шул апайым минең ҡарамағымда булһа, мин уны һиңә кәләш итеп бирер инем, өҫтәүенә яҡшы атымды ла ҡушыр инем. Әммә, һин ҡыҙырас истәк булғанлыҡтан, атайым, һинең ише батырҙарҙы бик ҡәҙер итһә лә, быға ризалыҡ бирер тип ышана алмайым.

— Атайың кем һуң һинең? Үҙең кем дә, апайың кем, ниндәй ырыуҙан булаһың? — тип һораша Ҡуҙыйкүрпәс.

— Минең атайым — Сарыбай батыр, — тип яуап бирә ҡырғыҙ, — үҙемдең исемем — Барлыбай, апайымдыҡы — Маянһылыу, ә ырыуыбыҙ иң яҡшы ҡыр-ҡаҙаҡ ырыуҙарының береһе ул.

Шул ваҡыт Ҡуҙыйкүрпәс:

— Һин Маянһылыу ҡустыһымы ни! — тип ҡысҡырып ебәрә лә, Маянһылыуҙың исемен әйтеп, серем асылды буғай, тип уйлап, телен тешләй. Ғашиҡ булған кеше эс серен бүтәндәрҙән түгел, хатта, мөмкин булһа, үҙенән дә йәшерер ине. Шунлыҡтан Ҡуҙыйкүрпәс, үҙе асыктан-асыҡ һөйләүсән кеше булһа ла, ят кешегә йөрәк серҙәрен асҡыһы килмәй. — Хәҙер һинең атайың Сарыбай ҡайҙа? — тип кенә һорай ул.

— Бынан ике көнлөк юлда, — тип яуап бирә ҡыр-ҡаҙаҡ егете. — Мин һинең кем икәненде, ҡайҙа барыуыңды белмәйем. Тик, хуш күңелле батыр, һинән шуны үтенеп һорайым: зинһар мине, хәлдән тайған бер кешене, бында ҡалдыра күрмә, бер йыртҡыстан ҡотҡарып, икенсеһенә бирмәсе, — тип үтенә.

Башҡорт батыры уны Сарыбай йәйләүенә илтергә ризалығын бирә. Быны ул үҙенең хуш күңеллелегенән бигерәк, Маянһылыуҙы өҙөлөп яратыуынан шулай эшләргә була. Шул ерҙә ул эйәрҙең айылын сисеп ала ла шуның менән Барлыбайҙы арҡаһына йөкмәп алып китә. Ҡуҙыйкүрпәс үҙ йөгөнән екһенмәй, киреһенсә, шатлана ғына, сөнки Барлыбайға ярҙам ҡулын һуҙып, атаһы менән апаһының уға рәхмәт әйтеүҙәренә, ошо уңай менән уларға яҡынайырға өмөт итә. Барлыбай иһә үҙ тарафынан уға бөтмәҫ рәхмәт әйтә, мал, кейем-һалым бирергә вәғәҙә итә һәм үҙе менән бергә йәшәргә атаһын ризалаштырырға һүҙ бирә. Үҙен Йылҡыбай тип таныштырған башҡорт батыры был вәғәҙәгә бик ҡәнәғәтләнеп, шәфҡәтле ҡыр-ҡаҙаҡты табыуына шатлана, артабан был егет үҙемә дуҫ, бәлки, эшемдә ярҙамсы ла булыр әле тип ҡыуана. Шулай ҙа ул әле һыналмаған дуҫының хыянат итеп ҡуйыуынан ҡурҡа, үҙенең бында ни өсөн килеүен дә, ҡайһы ырыуҙан икәнен дә, ысын исемен дә әйтмәй. Шулай итеп, Йылҡыбай (Ҡуҙыйкүрпәсте мин артабан шул исем менән йөрөтәм) ҡыр-ҡаҙаҡтың бөтә вәғәҙәләренә башҡортса:

«Ярар, Барлыбай! Бының бөтәһен дә алда күҙ күрер!» — тип кенә яуап ҡайтара һәм уны йөкмәгән килеш атлай бирә.

Өсөнсө көн тигәндә, улар Сарыбай йәйләүенә килеп етәләр, бында Сарыбайҙың үҙе менән ҡыҙынан башҡа бер кем дә булмай, сөнки бөтәһе лә бер генә көнгә һунарға китеп тә, биш тәүлек буйы ҡайтмаған Барлыбайҙы эҙләргә ебәрелгән икән. Атаһы иң яратҡан улын, апаһы һөйөклө ҡустыһын күреүгә ҡыуанып бөтә алмайҙар. Уны үлемдән ҡотҡарып, йөкмәп алып килгән Йылҡыбай икеһенең дә ихлас күңелдән әйткән рәхмәт һүҙҙәрен ишетә.

Маянһылыуҙың теге тылсымлы таҡтала кәүҙәләнгән шәүләһе генә лә Ҡуҙыйкүрпәсте хайран ҡалдырғайны, инде күҙ алдында ҡыҙҙың үҙен күргәс, егеттең ниндәй хәлдә булыуын үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ. Маянһылыу нескә билле, зифа буйлы, ап-аҡ түңәрәк йөҙлө булып, ике бите алһыуланып, күҙҙәре янып, күкрәге ҡалҡып тора, тауышы ла йөрәкте елкендергес булып яңғырай. Ҡустыһын үлемдән ҡотҡарғаны өсөн рәхмәт әйткән саҡта, батыр ошо тауыштан телһеҙ ҡала. Аһ! Был ваҡытта ниндәй көлкө булып күренденң һин, Ҡуҙыйкүрпәс бахыр! Һиңә, минең кәңәшемдә тыңлап, һоҡландырғыс йәшлек бөркәнсеген һирпеп, уны ҡарт итеп күҙ алдына килтерергә ине, әммә һин мине аңламаның йәки миңә ышанырға теләмәнең. Үҙең күргәндәргә ҡарағанда, күңелеңдең йөҙ тапҡыр мауыҡтырғысыраҡ матурлыҡты астың, шунлыҡтан ҡойолоп төштөң дә, ҡуҙғалыу түгел, бер һүҙ ҙә өндәшә алмай, ҡатып ҡалдың. Ошо хәлде күргән Сарыбай менән Маянһылыу һине ярты аҡыл тип уйланы.

Әммә инде Барлыбай башҡорт егетенең көсө һәм ҡаһарманлығы хаҡында һөйләп биргәс, улар был уйҙарынан дүнеп, уны ҡәҙер итәләр һәм икенсе тапҡыр уға рәхмәт әйтәләр. Ә шул арала, ярһыған йөрәген аҙ булһа ла тынысландырып, Маянһылыуға иҫе китмәйерәк ҡарарға тырышҡан Йылҡыбай уларҙың рәхмәт әйтеүенә: «Мин Барлыбайға осраҡлы ғына ярҙам күрһәттем, әгәр кәрәк булһа, бындай ярҙамды Сарыбай ғаиләһенә үҙем теләп күрһәтеүҙән дә баш тартмаҫ инем», — тип ихлас күңелдән ҡыҫҡа ғына яуап ҡайтара.

Ҡустыларын эҙләгән ерҙән инде ҡайтып төшкән улдарына Сарыбай Йылҡыбай менән Барлыбай хөрмәтенә йыйын яһарға ҡуша. Был йыйынға уның бик күп ағай-энеһе саҡырыла. Туйғансы ит ашап, ҡанғансы ҡымыҙ эскәндән һуң, улар үҙҙәренең егетлектәре, ҡыйыулыҡтары менән маҡтанырға тотоналар. Һәр кем һунар йәки барымта ваҡытында үҙ башынан кисергән хәлдәрҙе һөйләй. Был әңгәмәләрҙе оҙаҡ тыңлап ултырған Сарыбай батыр ахырҙа һөйләнгән хәлдәрҙең ваҡлығынан эре генә көлөп ҡуя ла ҡасандыр үлтерелгән юлбарыҫ тиреһен күрһәтеп, маҡтана башлай. Етмәһә, шапырынып, юлбарыҫтың йыртҡыслығы, көсө хаҡында, үҙенең сослоғо һәм ҡурҡыуҙы бар тип тә белмәүе, януарҙы нисек еңеүе тураһында оҙон хикәйә һөйләй, ә ысын еңеүсе Ҡарабайҙы иҫкә лә алмай. Маҡтана-маҡтана ла тауышын күтәрә төшөп:

— Барлыбай улым, беҙгә үҙең үлтергән арыҫлан тиреһен килтерсе, — тип өндәшә, — беҙ уны юлбарыҫ тиреһе менән үлсәп

ҡарайыҡ, уларҙың ҙурлығына ҡарап, ҡайһыбыҙ батырыраҡ, көслөрәк икәнен күрербеҙ, — ти.

Атаһының был һүҙҙәренән ҡыҙарынған Барлыбай:

— Арыҫланды мин түгел, Йылҡыбай үлтерҙе, хөрмәтте уға күрһәтергә кәрәк, — тип яуап ҡайтара.

— Һин туҙға яҙмаған көлкө һүҙ һөйләйһең, — тип екерә атаһы. — Арыҫланға иң элек ташланып, уның менән алыш башлаусы һин бит! Шулай булғас, еңеүсе лә һин, хөрмәт тә һиңә булырға тейеш. Йылҡыбай уны үлтерешеүҙә һиңә бер аҙ ярҙам ғына күрһәткән!

Атаһының ҡыҙыу холҡон белгән Барлыбай уның менән артабан һүҙ көрәштерергә баҙнат итмәй, арыҫлан тиреһен килтереп бирә. Тиреләрҙе сағыштырып ҡарағас, арыҫлан тиреһе юлбарыҫтыҡынан бер терһәк буйы оҙон булып сыға. Улы үлтергән йыртҡыстың тиреһе атаһының мин үлтерҙем тигән юлбарыҫтыҡынан ҙур булғас, Барлыбайҙы күберәк маҡтайҙар. Сарыбайҙың быға ғәрлеге килә. Йылҡыбай иһә Сарыбай уны арыҫлан үлтереүсе түгел, тип әйтеүенә артыҡ үпкәләмәй. Юлбарыҫты ла Сарыбай түгел, ә атаһы Ҡарабай үлтергәнлеге уға билдәле. Йылҡыбай, үҙе теләмәһә лә, Сарыбайҙың, мин үлтерҙем, тип шапырыныуы өсөн бик хурлана. Шулай ҙа ул, хужаһының йөҙөн йыртҡыһы килмәгәнлектән, был юлы ла өндәшмәй ҡала.

Иртәгеһенә Барлыбай, алдан вәғәҙә итеүе буйынса, үҙен үлемдән ҡотҡарыусыға мал-тыуар менән кейем-һалым бүләк итергә атаһынан рөхсәт һорай. Сарыбай быға ризалығын бирә, бындай ҡыйыу егет барымтаға барғанда йәки йәйләүҙе һаҡлағанда кәрәкле кеше булыр, тип уйлап, уға үҙендә торорға рөхсәт итә. Барлыбай, һүҙен тыңлағаны өсөн атаһына рәхмәт әйтеп, Йылҡыбайға биргән вәғәҙәһен үтәргә ашыға.

Әммә ул, Йылҡыбайҙың эйәрле ат менән сәкмәндән башҡа бер ни ҙә алырға теләмәүен белгәс, бик ғәжәпләнә. Ҡырғыҙҙар араһында һирәк осрай торған бындай малға ҡыҙыҡмаусанлыҡ холҡон күреп, Барлыбай дуҫын йәнә нығыраҡ ярата башлай.

— Әйтсе миңә, дуҫҡайым, — тип һорай ул, — үҙ тыуған ереңдән шул тиклем алыҫ яҡтарға ниндәй йомош менән килеп сыҡтың һуң һин?

Ошондай һорауҙың бирелеүен гел көтөп йөрөгән Йылҡыбай күптән уйлап ҡуйған әкиәтен һөйләп бирә:

— Атайым үҙенең кәрҙәш-ырыуҙары менән Яйыҡҡа ҡойған Һаҡмар йылғаһы буйында йәйләй ине. Көндәрҙән бер көндө беҙ, һунарҙан арып ҡайтып, бик ҡаты йоҡоға талдыҡ. Шул ваҡытта бер төркөм ҡыр-ҡаҙаҡтар ҡапыл килеп йәйләүҙе баҫалар ҙа йылҡы өйөрҙәребеҙ менән бүтән малдарыбыҙҙы әйҙәп китәләр. Беҙ барымтасылар артынан ташландыҡ, ҡыуып етеп, һуғыша башланыҡ, әммә улар беҙҙең һәр беребеҙгә ун кеше тура килгәнлектән, бөтәбеҙҙе лә ҡыра һуғып, яраланған атайым менән мине, күҙҙәребеҙҙе бәйләп, үҙҙәре менән алып киттеләр. Беҙҙе ни эшләтмәксе булғандарын мин белмәйем. Ун көнлөк юл үткәндән һуң, туй ҡороп ятҡан бер ауылға килеп туҡтанылар. Беҙҙе урлаусылар бында иҫергәнсе ҡымыҙ эс-

теләр ҙә ҡаты йоҡоға сумдылар. Шул ваҡытта мин, күҙемдең бәйен сисеп, иң яҡшы ат һайлап менеп, ҡылыс алдым да, ҡайҙа барғанымды ла белмәй, баш һуҡҡан яҡҡа сабып сығып киттем. Шулай итеп, ун биш тәүлек буйы юлда булдым. Ошонан алыҫ түгел ерҙә мин атымдан айырылдым. Ул төндә туғайҙа үлән утлап йөрөй ине. Ҡапыл ҡамышлыҡ араһынан юлбарыҫ килеп сыҡҡан да атымды йыртҡылап ҡамышлыҡҡа алып инеп киткән. Мин уның хатта эйәрен дә таба алманым. Шунан һуң йәйәүләп өс көнлөк юл үткәс, арыҫлан менән алышҡан һине осраттым һәм үҙеңә ярҙам ҡулымды һуҙыу бәхетенә ирештем.

Быны ишеткән Барлыбай, ғүмерлек дуҫ булырға вәғәҙә биреп, Йылҡыбайҙы ҡосаҡлап ала.

Уйламағанда Сарыбай ғаиләһе менән бергә йәшәү бәхетенә ирешкән Йылҡыбай Маянһылыуҙы көн дә күреп һөйләшә башлай. Ҡайһы саҡта уның йомошон да үтәй. Ҡыҙ еңгәләре менән бейә һауырға йөрөгән саҡта, егет уға бейәләрен тотоп бирергә ярҙамлаша, ә Маянһылыу һиҙҙермәй генә уға күҙ төшөргөләп ҡуя. Егеттең оҙон буйлы, киң күкрәкле батырҙарса һыны ҡыҙға бик оҡшай. Бөтәһе лә яҡшы бара, әммә йомшаҡ күңелле, оялсан Йылҡыбай, кире ҡағып ҡуймағайы тип, Маянһылыуға үҙ уйын әйтергә баҙнат итмәй. Ул әле кейәүе Айҡараны яратыу-яратмауын да белмәй. Быны ул дуҫы Барлыбайҙан һорашып белергә тырыша. Яратҡан ҡустыһы Барлыбай иһә, апаһының бөтә серҙәрен белгәнлектән, Маянһылыуҙың Айҡара солтанды яратмауын һөйләп бирә. Хан улы үҙе ҡарһаҡ, үҙе аҡһаҡ һәм көмөрө, етмәһә бик уҫал холоҡло бер әҙәм икән. Бай һәм хан улы булғанлығын өсөн генә абруйлы икән.

— Атайым шуға ҡыҙығып, хан менән туғанлашмаҡ була, Маянһылыуҙы улына көсләп бирә. Беҙ инде көн дә Айҡараның туй яһарға килеүен көтәбеҙ. Миңә апайым бик йәл...

Ошо һүҙҙәрен әйткәс, Барлыбай йылмайып ҡуя.

— Был ни тигән һүҙ? — тип һорай Йылҡыбай.

— Дуҫым! — ти Барлыбай, бер аҙ уйлап алғас. — Беҙҙең ғаиләлә атайым бер кемгә лә һөйләмәҫкә ҡушҡан бер сер бар. Бәлки, быны́ң һиңә һис кәрәге лә юҡтыр, шулай ҙа дуҫтар араһында йәшерен нәмә булырға тейеш түгел. Апайым Маянһылыу бала саҡтан уҡ атайымдың элекке дуҫы башҡорт батыры Ҡарабай улына әйттерелгән булған. Апайымдың йәше етеп, буйға үҫкән һайын һылыулығы ла арта барып, даны бөтә илебеҙгә таралды. Иң яҡшы ырыуҙарҙың күп кенә батырҙары уны яусылатып, бай ҡалын вәғәҙә иттеләр. Шунлыҡтан атайым, бик маһайып китеп, бөтәһенең дә, шул иҫәптән атаһынан йәшләй етем ҡалған Ҡарабай улының да һорауын кире ҡаҡты. Ә артабан, бүтән батырҙарҙың һәм Ҡарабай улының йөҙәтеүенән ҡотолор өсөн, апайымды Айҡараға биреп, уның атаһы менән ошонда, уның иленә, күсеп килергә һүҙ ҡуйышты. Шул көндән алып Маянһылыу Айҡараны яратмай башланы. Ҡарабай улын, бер ваҡытта ла беҙҙең йәйләүгә килмәгәнлектән, күргәне булмаһа ла уның егетлеге һәм сослоғо хаҡында бик күп мактау һүҙҙәре ишеткән апайымдың уға барғыһы килә. Мин бая шунлыҡтан —

апайымдың әле булһа ғәрипкә түгел, батыр егеткә кейәүгә барғыһы килеүен уйлап көлдөм дә инде.

Барлыбайҙың был һүҙҙәрен ишеткән Йылҡыбай Маянһылыуҙың Ҡарабай улын яратыуын белеп шатлана, ә үҙе был хаҡта уға ҡасан, ҡайҙа күреп әйтергә белмәй. Оҙаҡ баш ватҡандан һуң, бының әмәлен таба. Үҙе бергә йәшәгән дуҫы Барлыбайҙың тирмәһе Маянһылыу торған тирмәнән алыҫ булмай. Ҡатын-ҡыҙҙар бейә һауырға йәки ҡымыҙ әсетергә китеп бөткән саҡта, Маянһылыу үҙ тирмәһендә берәй нәмә сигеп ултырыусан. Һәр ваҡыт үҙ тирмәһендә яңғыҙ ҡалған Йылҡыбай тап ошо хәлдән файҙаланырға була. Ул, бер кемдең дә исемен телгә алмай, үҙенең ил ҡыҙырып йөрөүен, башынан уҙған хәлдәрҙе, уй-кисерештәрен белдергән кинәйәле йыр уйлап сығара. Маянһылыуҙың да үҙ тирмәһендә яңғыҙ ултырыуын белеп, ул үҙенең яғымлы тауышы менән һәр ваҡыт ошо йырын йырлай.

Тәүҙә һөйләгәнебеҙсә, иҫкәрмәҫтән генә башҡортҡа күҙ һалырға яратҡан Маянһылыу унын йырҙарын тыңлауҙан да баш тартмаған. Ҡыҙҙың яратыуы ғына кәрәк, унан үҙе үк, ҡарсыға һымаҡ, ҡулға килеп ҡуныр. Ҡыҙҙарҙың ҡыҙығыуы ары сапҡан һайын көсөн арттыра барған яҡшы аттың ғәҙәте менән бер ул. Шуның кеүек үк Маянһылыуға ла Йылҡыбай көндән-көн һөйкөмлөрәк булып күренә башлай, уның моңло тауышы менән уйға ҡалдырыусан йыры егетте ҡыҙ йөрәгенә яҡынайтҡандан-яҡынайта бара. Йырҙы тыңлаған һайын, уның һәр һүҙен ятлап, хәтерендә нык ҡалдыра барған Маянһылыуҙың был һүҙҙәрҙең кемгә төбәлеүен түҙемһеҙлек менән белгеһе килә башлай. Ул бында үҙе һәм тәү башлап әйттерелгән кейәүе Ҡуҙыйкүрпәс кисергән хәлдәргә күп оҡшашлыҡ таба, әммә уның Ҡарабай улы булыуын башына ла килтерә алмай. Шундай алыҫ ерҙән бында ул егет бер үҙе ҡайһылай итеп килһен, тип уйлай ул, ә йөрәгең ҡайҙа тартһа, шунда барырһың тигән хәҡиҡәтте белмәй.

Шулай итеп, Йылҡыбай үҙ йырын өс көн буйы бер рәттән йырлай, ә Маянһылыу уны иғтибар менән тыңлай, үҙе лә ҡабатлап йырлай башлай. Йылҡыбай быны яҡшы белә.

Ошонан һуң оҙаҡ та үтмәй, Сарыбай йәйләүенә хандан өс илсе килеп төшә. Илселәр: улы һәм ағай-энеләре менән хан юлға сыҡты, ярты юлда туҡтап, һине бөтә улдарың һәм ағай-энеләрең менән шунда әҙерләнгән йыйынға саҡыра, тип хәбәр итәләр. Быны көтөп йөрөгән Сарыбай әллә ҡасан әҙерләнеп торған була. Ул иртәгеһенә кәрҙәш-ырыуҙарын саҡырып ала, ә өсөнсө көндө инде, йәйләүендә тик ҡатын-ҡыҙҙарҙы, өс көтөүсеһен һәм ошо мәлдә сирлегә һалышҡан Йылҡыбайҙы ҡалдырып, хан йыйынына китеп тә бара.

Сарыбайҙар китҡән көндө үк, ҡатын-ҡыҙҙар бейә һауырға таралышҡас та, түҙемһеҙ Маянһылыу ҙур йомош тапҡан булып, Барлыбай тирмәһенә килеп инә, ә Барлыбай ҙа, уның ҡатыны ла бында булмай. Эштең асылын аңлап алған Йылҡыбай, ул килеп ингәс тә, һүҙ башлай:

— Һылыуҙарҙың һылыуы Маянһылыу! Минең хәлемде белешергә килеүең өсөн ҙур рәхмәт һиңә! Мин инде һауыҡҡас, һинән бейәләреңде тотттормай, гел генә үҙем тотоп еҙелеккә килтерермен.

— Һинең ауырып ятыуыңа борсолам мин, Йылҡыбай, инде һинең йырың да ишетелмәй башланы, — ти ҡыҙ.

— Ул йыр һиңә оҡшаймы һуң?

— Йырың һәйбәт тә, тик аҙағы юҡ. Һин, бер батырҙың тыуған-үҫкән илен ҡалдырып, алыҫҡа барып сығыуы һәм унда бер ҡыҙҙы ата-әсәһенән ҡасырып алып китергә күндереүе хаҡында йырлайһың, йырыңды ошо ерҙә бөтөрәһең.

— Ә ҡыҙ уның менән ҡасып китергә ризамы һуң?

— Мин уныһын белмәйем.

— Әгәр шул ҡыҙ урынында һин булһаң һәм шул батырҙы яратһаң, уның менән китергә риза булыр инеңме?

— Юҡ! Мин ул саҡта атайымды асыуландырған булыр инем, һәм ул мине бөтә ғүмере буйы яратмаҫ ине.

— Әгәр батыр үҙеңде яратмай башлаһа, ни эшләрһең?

— Быныһы унан да яманыраҡ; ул ваҡытта мин ни эшләргә лә белмәҫ инем.

— Ә мин һиңә нимә эшләргә кәрәклекте беләм.

— Нимә эшләргә һуң?

— Һис ҡурҡып тормай, минең менән ҡасып китергә, сөнки мин Ҡуҙыйкүрпәстең үҙе, Ҡарабай улы булам, бәләкәй сағыңда һин уға кәләш булырға вәғәҙә ителгәнһең; һин уны яратаһың, ул да һине ярата.

— Ысынмы һуң был?

— Бына атайым артынан миңә үҙ ҡулдарың менән сигеп ебәргән бүләктәрең.

Ошо һүҙҙәрҙән һуң батыр үҙ башынан кисергәндәрҙе һәм Мәскәй әбей мәмерйәһендә күргәндәрен бөтәһен дә һөйләп бирә. Был Маянһылыуға шул тиклем тәьҫир итә, ул шатлығынан илап ебәрә һәм батырҙы үбеп, уны мәңге яратырға ант итә. Әммә ҡыҙ иң элек батырҙың Сарыбай янына барып, уға үҙенең ысын исемен белдереүен һәм ҡасандыр атаһына биргән һүҙен үтәүҙе һорауын теләй; быны Барлыбай менән бергәләп эшләргә кәрәк булыр, ти. Атайым рәнйер тип, егеттең бергә ҡасайыҡ тигән теләгенә риза булғыһы килмәй. Ҡуҙыйкүрпәс уны оҙаҡ өгөтләп ҡарай, әммә ул быға күнмәгәс, ахырҙа:

— Ярар, Маянһылыу, — ти. — Мин һинең был теләгеңде үтәйем, тик һиңә шуны иҫкәртеп ҡуям: атайың Сарыбай, һүҙемде кире ҡағып, үҙемде йәйләүенән ҡыуасаҡ, ул ваҡытта һин мине ҡабат күрәлмәйәсәкһең.

— Аһ! Юҡ, һөйөклөм Ҡуҙыйкүрпәс! Зинһар улай тимә, һинән айырылып ҡалыу миңә бөтәһенән ауырыраҡ! — тип ҡысҡырып ебәрә лә Маянһылыу, батырҙы ҡосаҡлап ала. — Ошо бер һүҙеңдән генә йөрәгемдең нисек ярһып тибеүен күрһәңсе!

— Ҡасыуҙан башҡа сара юҡ, — ти һөйгән егете. — Мин китермен дә һин ҡалырһың, унан ғүмерҙә күрешмәбеҙ. Һин үҙе ҡарһаҡ, үҙе аҡһаҡ, көмөрө һәм тиҫкәре Айҡараның бисәһе булырһың, ә мин үҙемә бүтән кәләш эҙләрмен.

— Юҡ, юҡ! Был һүҙҙәреңде ҡабат әйтмә! — ти Маянһылыу. — Ҡурҡыуымдан тотош ҡалтыранып, саҡ тын алыуымды күрһәңсе.

Тыңла! Атайым, һүҙеңде кире ҡағып, үҙеңде йәйләүҙән ҡыуа икән, ул саҡ үҙең йыртҡыс арыҫланды үлтергән ергә туп-тура бар ҙа, шунда *ҡамышлыҡ араһына* йәшенеп, мине көт. Бәлки, һиңә беҙҙең халыҡтың ошо йолаһы билгелелер. Әйттерелгән ҡыҙ менән егеттең ағай-энеләре бер-береһенән ике-өс уҡ атым ер алыҫлыҡта бүленеп торалар ҙа, ҡыҙ менән егетте баштан-аяҡ ҡораллandырып, атта ярышырға ебәрәләр. Ҡейәү йән-фарман сабып кәләше артынан ҡыуып китә, ул шулай сабып барышлай ҡыҙын ҡосаҡлап алып, үҙенең егетлеген күрһәтергә тейеш. Ҡәләше иһә уны еткермәҫ өсөн ҡамсыһы менән һелтәнә-һелтәнә ары сабып китергә тырыша. Мин, ул ғәрип Айҡаранан анһат ҡотолоп, шулай баштан-аяҡ ҡоралланған көйө үҙ иркем менән атта сабып йөрөүемә ышанам. Ошо килеш, ҡәҙерле батырым, һинең янына сабып барырмын да мәңге һинеке булырмын. Ул ваҡытта инде беҙҙе бер кем дә айыра алмаҫ! Ә артыбыҙҙан ҡыуалар икән, һин мине бушҡа ғына бирмәҫһең, тип ышанам.

Ҡуҙыйкүрпәс Маянһылыуҙың был уйына бик ҡәнәғәт була, уны ҡосаҡлап алып күкрәгенә ҡыҫа. Шунан атына менеп:

— Хуш, ҡәҙерлем Маянһылыу! — ти. — Әммә мин *оҙаҡҡа хушлашмайым.*

— Хуш бул, — ти Маянһылыу, — тик мин һинең менән оҙаҡламай күрешермен, артабан ғүмерҙә айырылышмабыҙ.

Егет ҡуҙғалып киткәс, артына ҡарай-ҡарай бара. Маянһылыу, ул күҙҙән юғалғансы, урынынан ҡуҙғалмай ҡарап ҡала.

Шул арала хан йыйыны дауам итә. Унда ҡымыҙҙы ла, итте лә йәлләмәйҙәр. Ҡунаҡтар менән хужаларҙың бөтәһе лә, алдарына иттең иң тосо ҡуйылған хан менән Сарыбайҙан башҡа, ҙур табын яһап ултырғандар. Шул ваҡытта улар янына Йылҡыбай килеп төшә. Табындан беренсе булып күтәрелгән Барлыбай уның сәләмен ала, үҙен хан менән Сарыбай янына килтереп иҫәнлек-һаулыҡ һораштыра. Хан Сарыбайҙан егеттең хәл-әхүәлен, ҡайһы ырыуҙан икәнен һораша. Сарыбай иһә, был ҡаҙаҡ баҫҡынсыларының әсирлегенән ҡотолған бер ярлы истәк, һунарҙа улыма ярҙам күрһәткән өсөн уны үҙ йәйләүемдә ҡалдырҙым, тип яуап ҡайтара. Хан Сарыбайҙың киң күңеллеген, башҡорттоң изгелеклелеген маҡтай, үҙе ит ашап, ҡымыҙ эсеүендә була. Йылҡыбайҙы ла табынға ултыртып һыйларға ҡуша.

Табындағы табаҡ-табаҡ ит ашалып, һабаларҙағы ҡымыҙ эселеп бөткәс, хан *көрәш башларға* әмер бирә. Бында ике яҡтан батырҙар ҙа, атта оҫта йөрөүселәр ҙә күп була. Уларҙың күбеһе көрәштә үҙ көстәрен, таҫыллыҡтарын күрһәтәләр. Сират Йылҡыбайға килеп еткәс инде, уның егетлегенә бер кем дә тиңләшә алмай: үҙе менән кем генә алышмаһын, ул уны йығып ҡына ҡалмай, туп кеүек сөйөп ташлай. Сарыбай һәм башҡалар уның көсөнә, оҫталығына хайран ҡалып, алышҡан һайын маҡтап ултыралар. Шулай ҙа хандың быға эсе боша, сөнки, Йылҡыбай Сарыбай яғынан булғанға, көрәштә хандың ағай-энеһе хурлыҡҡа ҡала. Шул ваҡыт хан Сарыбайға үҙ ағай-энеһенән Йылҡыбайға ҡаршы өс көрәшсе сығарып, еңеүсегә бүләккә илле һарыҡҡа торорлоҡ кәрмәзин сәкмән, егерме һарыҡлыҡ

ҡама ҡырпыулы хәтфә таҡыя ҡуйырға ҡуша. Сарыбай быға кинәнеп риза була, сөнки уның үҙе менән көрәшергә бер кем дә баҙнат итмәгән бик көслө бер ҡустыһы була. Бына шул батыр башҡортто еңеп, үҙ ырыуын хан ырыуы алдында, һис шикһеҙ, өҫтөн итеп күрһәтер, тип ышана. Уға үҙенең ике улын — Бөркөтбай менән Барлыбайҙы ҡуша. Элек-электән көрәшкә һәүәҫ булғанлыҡтан, үҙе лә башҡорт менән көрәшергә баш тартмаҫ ине лә, ҡоҙалары алдында абруйын төшөрөүҙән генә ҡурҡа.

Көрәшселәр уртаға сығып, билдәренән алышалар. Киң яурынлы ҡырғыҙ, үҙ көсөнә таянып, Йылҡыбайҙы арҡанлаған уҫал үгеҙ шикелле итеп төрлө яҡҡа ҡайырғыларға тотона. Йылҡыбай уға тәүҙә ирек бирә, әммә ҡырғыҙ аҙ ғына албырғай төшкәс, бөтә таҫыллығы менән көсөн һалып, уны баш осона күтәрә, шул килеш алты тапҡыр өйөрөлдөрөп, ҡарап ултырыусыларға ҡанаттарын һалындырып, аяҡтарын һуҙып һауала йөҙгән бөркөт төҫлө итеп күрһәтә лә ергә ырғыта. Тамаша ҡылыусыларҙың бөтәһе лә быға таң ҡалып, шатлыҡтан һикерешеп аяғүрә торалар һәм еңеүсене маҡтап һөрән һалалар. Сарыбайҙыҡылар ҙа, үҙ ырыуҙаштары кеүек үк, уларҙың берҙәй хурлыҡҡа ҡалыуын күреп торған хан да ҡыуана-ҡыуана Йылҡыбайҙы хуплай. Шунан хан: был батыр Сарыбайҙың өлкән улы Бөркөтбай менән көрәшһен, ти. Йылҡыбай уны ла анһат ҡына еңә. Шунан һуң өсөнсө алышта Барлыбай ҙа үҙ дуҫының көсөн һынап ҡарамаҡсы була. Йылҡыбай иһә, уны ятҡанлыҡтан, дуҫынан өҫтөнлөк алғыһы килмәй, көстөң тиң булыуы арҡаһында көрәштең ҡырҡыулаша барыуын ул ҡарап тороусыларға ҙур оҫталыҡ менән күрһәтә. Бының менән ул бер уларҙы ғына түгел, Барлыбайҙың үҙен дә алдай. Ҡайһы саҡта үҙен янбашына алырға йәки юғары күтәрергә ирек бирә, ләкин тиҙҙән уның албырғауынан файҙаланған булып, йәнә аяғына баҫырға өлгөрә, шунан үҙе уны күтәреп ала башлай, бында ла юрамал таҫылһыҙлыҡ күрһәтә, шулай итеп дуҫына хәл йыйырға ваҡыт бирә. Ошолай алыша торғас, улар өс батыр һимеҙ һарыҡ ите ашап бөтөп, берәр турһыҡ ҡымыҙ эсерлек ваҡыт уҙғаралар. Инде батырҙарҙың көстәре тиң булыуын күргән хан да, йыйылған халыҡ та көрәште туҡтатырға ҡушалар. Бүләк итеп, башҡортҡа кәрмәзин сәкмәнде, Барлыбайға ҡама ҡырпыулы таҡыяны бирергә булалар.

Һунарҙа батыр, көрәштә тиңдәш, туйҙа дуҫ булған ике егет көрәште тамамлағас, ҡосаҡлашып үбешәләр. Бөтәһе лә уларҙы маҡтап күтәреп ала. Батырлыҡты ҡәҙер итеүсән хан Йылҡыбайҙың иңенә сәкмәнде үҙе үк һалып, арҡаһынан һөйә. Бары тик Сарыбай ғына урынынан тормай, бер һүҙ ҙә өндәшмәй, табышҡа өмөт итеп тә якшы көтөүсе тарафынан көтөүҙән ҡыуып ебәрелгән бүре һымаҡ, ҡырын күҙе менән ҡарап ултыра бирә. Ҡустыһы менән улын башҡорттоң көрәштә хурлыҡҡа ҡалдырыуына Сарыбайҙың асыуы ҡабара. Шулай булһа ла хандың һәм үҙ ағай-энеләренең уны ҡәҙер итеп ҡосаҡлауҙарын күргәс, үҙенең асыуын белдермәҫкә тырыша. Шул ваҡытта Сарыбай, улы Барлыбай янына килеп, уға бүләккә тейгән таҡыяны башына кейҙереп, ҡосаҡлай ҙа:

— Һин, улым, төптө үҙемә тартканһың, бынан ары һин үҙ ағай-энең өҫтөнән уҙаман булырһың, — ти.

Көрәш бөтөүгә, хандың әмере буйынса, бүтән уйындар башланып китә. Уҡ атып мәргәнлектә ярышыу өсөн сәп ҡуялар. Сәп ярты уҡ оҙонлоғондағы ағас көпшәнән тора, шуның ат күҙе ҙурлығындағы тишегенең теге яғына бушаҡ ҡына итеп ағас бөкө тығыла. Уҡсылар, сәпкә ҡаршы йөҙ аҙым ерҙә теҙелеп, берәм-берәм шул тишеккә тоҫҡап ата башлайҙар. Уғы көпшә тишеге аша үтеп бөкөнө ырғытһа, шул иң мәргән атыусы була. Тәүҙә бер тапҡыр атҡан уҡсыларҙың уҡтары яҙа үтеп китә. Улар артында өндәшмәй ҡарап торған Йылҡыбай, үҙ киҙеүе килеп еткәс, алға сығып, иңендәге баяғы хан сәкмәнен уң иңенән артҡа ташлай биреп, уғын йәйәһенә киҙәп, шундай көслө һәм мәргән атып ебәрә, уҡ көпшәне ҡуҙғатмайнитмәй тишегенән үтә сыға һәм бөкөнө үҙе менән йәнә йөҙ аҙымға ары алып китә. Ошондай оҫта һәм мәргән атыусыны күреп, бөтәһенең иҫе китә. Ярышта ҡатнашыусыларҙың барыһы ла Йылҡыбайҙы бығаса ҡырғыҙ ерендә булмаған иң мәргән уҡсы тип атайҙар.

Ошо ваҡыт эсендә Йылҡыбайҙы яратып өлгөргән хан уның йәнә бер егетлеген — ат саптырыуҙа сослоғон күргеһе килеп, дүрт иле ҡалынлығындағы таҡта ҡуйырға ҡуша. Атта йән-фарман сабып килешләй шул таҡтаны үтә атҡан уҡсыға бүләк итеп көмөш уҡа менән ҡайылған, хаҡы ун биш һарыҡлыҡ ҡалта бирелергә тейеш. Әммә был батырлыкты Йылҡыбайҙан бүтән кем эшләй алһын? Таҡтаға атыусылар күп була, әммә уға ҡайһы берәүҙәре генә тейгеҙә, атылған уҡтарҙың бер нисәһе генә таҡтаның яртыһына ҡәҙәр үтә ала.

Ә Йылҡыбай ҡамсылап,
Ярһытып менгән атын,
Йәйәһенә яйлап һалып,
Ебәрә уғын атып.
Атҡан уғы батырҙың
Үтә сыға таҡтанан,
Ир-егетлек күрһәтеп,
Бәйгегә ала ҡалтаны

Хикәйәне һөйләүсе бер аҙға тынып ҡала, сөнки тыңлаусылар көлөшә башлайҙар. Шунан: «Был ваҡытта ҡыр-ҡаҙаҡтар беҙҙең батыр хаҡында нимә уйланылар икән?» — тип һорайҙар.

— Һеҙ нимә уйлайһығыҙ, улар ҙа шуны уйлаған, — тип яуап бирә сәсән. — Көлөшәләр, үҙ күҙҙәренә үҙҙәре ышанмай торалар. Ҡуҙыйкүрпәстең каһарманлыҡтарын күргән-белгән аҡыллы ҡурайсылар үҙҙәренең дөрөҫтө көйләр ҡурайҙарында бына ошо хәкикәтте беҙҙең көндәргә килтереп еткергәндәр, беҙҙең батырҙы данлап йыр сығарғандар. «Йылҡыбай» тип аталған был йыр әле лә бөтә башҡорт, ҡаҙаҡ ерҙәрендә йырлана...

Был ирмәк шуның менән генә бөтмәй әле. Хан аттан тартышыу ярышында ла оҫталыкты күргеһе килеп, Йылҡыбайҙан шул егетлекте лә күрһәтеп, шуның менән уйынды бөтөрөүен һорай. Батыр

ханға хөрмәт йөҙөнән уның был теләгеН дә үтәргә әҙер, ләкин үҙен кеселекле күрһәтеп, ат өҫтөндә нык ултыра белмәүен, шунлыҡтан уның маҡтауына лайыҡ була алмаясағын әйтә. Шуға ҡарамаҫтан, бирелгән әмер буйынса, батырҙарҙың бөтәһе лә йәһәт кенә әҙерләнеп ала. Сарыбай үҙе һайлап өйрәткән иң яҡшы батырҙарҙан торған төркөмө менән башҡортто, ҡапыл эйәренән тартып төшөрөп, хур итергә һүҙ беркетә. Был уҫал уйҙы әле һиҙмәгән Йылҡыбай Барлыбай артынан сабып китә лә, уның ҡулынан йығылып, дуҫына хөрмәт күрһәтмәксе була, ләкин алдан һүҙ беркеткән һыбайлылар төркөмө, бер юлы ҡапыл ташланып, уның үҙен эйәренән тарта башлайҙар. Был хәйләне күреп бик асыуы ҡабарған Йылҡыбай теҙгенен ташлай ҙа ике ҡулы менән ике батырҙың яғаларынан тотоп эйәрҙәренән айырып ала һәм, ярһыу атын тибенгеләп, тырнаҡтары менән өйрәкте матҡыған ыласын шикелле, сабып китә. Ике ҡулы ла буш булмағанлыҡтан, ул йән-фарман сабып барған атын ҡапыл ғына туҡтата алмай. Ахырҙа, батырҙарҙың икеһен дә көс-хәлгә һул ҡулына күсереп, уң ҡулын бушата ла атын туҡтата, имгәнмәһә лә бик шөрләгән батырҙарҙы ергә баҫтыра.

Сабып барышлай аттан тартып төшөрөшөү уйыны шуның менән бөтә. Тартышта ярышыусылар, аттарын утлыҡсаға бәйләп, хан тирмәһе алдына йыйылалар. Шул ваҡыт хан фарсы билбауы сығарып, Йылҡыбайҙың биленә быуа һәм йыйындағы халыҡҡа ҡарап ошо һүҙҙәрен әйтә:

— Йылҡыбай батыр! Һинен бер көн эсендә күрһәткән егетлегенде бүтән берәүҙең үҙ ғүмере буйына ла күрһәтә алғанын күргәнем юҡ ине әле. Һиңә был бүләк кенә аҙ. Тағы нимә кәрәк булһа, шуның бөтәһен дә һора минән, кинәнеп бирәсәкмен. Инде кәләш алырға теләйһең икән, минең кейәүем бул әйҙә: биш ҡыҙымдың теләгән береһен һайлап ал.

Йылкыбай:

— Минең атайым әйттергән кәләшем бар, әммә бында хандың ярҙамы кәрәк буласаҡ, — тип яуап ҡайтара.

— Һинең атайың кем дә, әйттергән кәләшең кем була һуң? — тип һорай хан.

— Минең атайым Ҡарабай батыр, ә кәләшем — Маянһылыу, атайымдың элекке дуҫы Сарыбай үҙ ҡыҙын миңә бирергә вәғәҙә иткән, — ти егет.

Шул ваҡыт Сарыбай батыр, ҡоторған кеше кеүек, урынынан һикереп тора ла әллә ниндәй ҡырағай тауыш менән ҡысҡыра башлай:

— Ах, һин, ен һуҡҡан истәк, ҡасҡын! Нисек һин үҙенде Ҡарабай улымын тип атарға, етмәһә ҡыҙымды солтанға биргән саҡта, ханды алдарға баҙнат итәһең? Мин ҡыҙымды уға биреүҙән баш тартып, әллә һиңә бирер, тип уйлайһыңмы, ҡыҙрас?

— Һин быны эшләргә тейешһең, — ти Ҡарабай улы, тыныс ҡына итеп. — Ни өсөн тиһәң, атайыма дуҫтарса һүҙ биргәс, уны һис шикһеҙ үтәргә бурыслыһың. Ә минең, ысынлап та, Ҡарабай улы икәнемде атайыма ебәргән бүләктәрең танытып торалар. Бына улар, күр!

Ошо һүҙҙәрҙән һуң Ҡуҙыйкүрпәс бүләктәрен ҡуйынынан берәм-берәм сығарып күрһәтә башлай.

— Күрәм, һин, ысынлап та, ҡасандыр мин белгән Ҡарабай улы икәнһең, әммә унда минең ни эшем бар? — ти Сарыбай. — Мин ҡыҙҙың атаһы, шуға уны теләгән кешемә бирергә хаҡым бар. Атайың үҙ ваҡытында минән күп шәфҡәт күрҙе, шул да еткән.

— Хаҡ һөйләмәйһең, — тип ҡаршы төшә Ҡуҙыйкүрпәс, — бөтә байлығы үҙ ҡулында булған кешегә шәфҡәт кәрәкмәй. Атайым Ҡарабай бер ваҡытта ла һинән изгелек күргәне булманы, ә киреһенсә, ул үҙеңде ике тапҡыр үлемдән ҡотҡарып, һиңә күп яҡшылыҡ күрһәтте. Беренсе тапҡыр, һине өҙгөләп ташларға йыйынған уҫал юлбарыҫ тырнағынан тартып алды, ә икенсе юлы — ырыуҙаштарыңды баҫҡынсыларҙан ҡотҡарҙы. Баҫҡынсылар ҡатының менән ике улыңды үлтереп, мал-тыуарыңды әйҙәп киткәйнеләр, шул ваҡыт атайым һине аралап алып ҡалмаһа, үҙеңде лә иҫән ҡалдырмаҫтар ине. Атайым баҫҡынсыларҙы ҡыуып ебәреп, малыңды кире ҡайтарып, киҫкеләнеп, хәл эсендә ятҡан үҙеңде дауалап аяҡҡа баҫтырған. Бының өсөн ул һинән бүләк һорамау ғына түгел, ҡыҙың Маянһылыуҙы миңә бир тигән вәғәҙәңде үтәүҙән башҡа рәхмәт әйтеүеңде лә теләмәгән.

Шунан Сарыбай:

— Асыуымды ҡабартып торма күҙ алдымда! — тип екеренә. — Хәҙер үк минең йәйләүемдән генә түгел, ҡаҙаҡ еренән юғал, ҡабат күҙемә күренәһе булма! Үҙеңде тураҡлап ташлармын!

Шулай екеренгәс, атына менә лә, Ҡарабай улының Маянһылыуҙы алып ҡасыуынан ҡурҡып, улдары менән ағай-энеләрен эйәртеп, йәйләүенә ҡарап саба, ә хандан иртәгә үк туй уҙғарырға килеүен һорай. Барлыбайҙың үҙ дуҫы менән хушлашҡыһы килә, әммә уҫал атаһы быға ла юл ҡуймай, Барлыбай:

— Кисер инде, мине ҡотҡарыусы дуҫым! — тип әйтергә генә өлгөрә, үҙе илай-илай атаһы артынан сабып китә.

Сарыбай киткәндән һуң, хан Ҡарабай улына күп бүләктәр бирергә, ваҡыт үтеүгә уны Сарыбай менән татыулаштырырға вәғәҙә итә, уны үҙендә тороп ҡалырға бөтә көсө менән күндерергә тырыша. Әммә Ҡуҙыйкүрпәс, быының өсөн ханға рәхмәт әйтеп, миңә ҡыҙын биреүҙән баш тартҡас, Сарыбай менән дуҫлашыуҙың да, ыҙғышыуҙың да кәрәге юҡ, тип яуап ҡайтара. Ханда ла тороп ҡала алмауын белдерә, сөнки уға тыуған иле бөтә донъянан да ҡәҙерлерәк: унда уның әсәһе, мал-тыуары, дуҫтары ҡалған. Илемә ҡайтып, ҡартлыҡ көнөндә әсәйемде йыуатырға бурыслымын, мал-тыуарымды ҡарарға тейешлемен, ә дуҫтарымдан айырыла алмайым, ти.

Хан, егеттең шул тиклем ғәҙел әйткән һүҙҙәрен тыңлағандан һуң:

— Һинең менән йәшәгән әсәйең дә, дуҫтарың да бәхетле! Минең һиңә оҡшаған балаларым булманы инде, әммә шундай ейәндәремдең булыуын теләр инем. Хуш, минең яҡшы күңелле Ҡуҙыйкүрпәсем. Һине ихлас күңелдән яратам, мине онотма! — ти.

Хушлашҡан саҡта, хан уға бөтә эйәр-өпсөнө, ҡоралдары менән иң яҡшы атын бүләк итеп бирә. Ҡуҙыйкүрпәс, ханға рәхмәт әйтеп, уның бөтә туғандары менән хушлашып, ҡушаҡлы атта Маянһылыу менән һүҙ ҡуйышҡан урынға табан юл тота.

Юлда барғанда, ул хуш күңелле һәм дуҫтарса мөғәмәлә итеүсе хан менән тәкәббер һәм рәхимһеҙ Сарыбай тураһында баш ватып, шул саҡлы ҙур ҡапма-ҡаршылыҡ нилектән була икән, тип уйлай: аҡһөйәк хандан килбәтһеҙ һәм яман холоҡло Айҡара тыуған, һәм, киреһенсә, ябай холоҡло, саф күңелле гүзәл Маянһылыу шул тиклем ҡараһөйәк Сарыбайҙан тыуған. Шулай уйланып бара торғас: «Их, бәғерем Маянһылыу! — тип ҡысҡырып ебәрә ул. — Һин яҡшы күңелле хандың ҡыҙы булһаң ине, минең ҡатыным булыр инең дә, беҙ бик бәхетле йәшәр инек! Ә хәҙер... Мин белмәйем, бәлки, һине мин көткән урынға ебәрмәҫтәр, шунан һин Ҡуҙыйкүрпәсендән ирекһеҙҙән айырылып, һөйкөмһөҙ Айҡара менән китергә мәжбүр булырһың. Ә бәлки, мине алдан ымһындырып та, үҙең үк минең менән беҙҙең яҡтарға китергә теләмәҫһең. Юҡ! Был һүҙем өсөн мине кисер, Маянһылыуым! Быны мин йөрәгемдән түгел, ҡайғымдан ғына ысҡындырҙым. Телең берҙе һөйләп, йөрәгең икенсене тойоуын башыма ла килтерә алмайым мин. Ер йөҙөндәге бөтә ғилемде белеп бөтөргән сит ил халыҡтары ғына шулай итә ул. Быны миңә Мәскәй һөйләне. Әммә һиңә лә, миңә лә Мөхәммәттән улай яҙмаған. Ахырҙа, һинең менән күрешеү өсөн бөтә юлдарым киҫелә икән, Сарыбайҙың ауылын барып баҫырға ла батырсылыҡ итәсәкмен. Йә шунда үлермен, йә һин минеке булырһың».

Шулай уйлана-уйлана бара торғас, һүҙ ҡуйышҡан урынға килеп етә. Шул ерҙә аттарын кешәнләп, үлән утларға ебәрә лә үҙе, тамаҡ ялғап тормайынса, ҡамыш өҫтөнә ятып йоҡлай.

Шул арала Сарыбай йәйләүендә һис уйламағанда аяныс бер хәл килеп сыға. Унда инде ут өҫтөнә аҫылған ҡаҙандар ҡайнап сыҡҡан була; һимеҙ иттәр алынып, дәү-дәү табаҡтарға һалынған һәм келәмдәр өҫтөнә йәйелгән ашъяулыҡтарға ҡуйылған була. Аштан сыҡҡан боҫ ер өҫтөнә тарала һәм, юлда килә ятҡан ханға ҡаршы борҡолоп, танауҙы ҡытыҡлаған тәмле еҫе менән уны туй мәжлесенә саҡыра. Бына күтәренке күңелле ҡунаҡтар хужа йортона ашығалар. Тап шул ваҡыт Аҡтау артынан ярау аттарға атланған ике ҙур төркөм баҫҡынсылар килеп сыҡмаһынмы! Былар тәкәббер Сарыбайҙың ҡыҙымды һиңә бирмәйем тип кире ҡағыуы менән кәмһетелгән егеттәр икән, шул егеттәр, үҙ-ара һүҙ ҡуйышып йыйылғандар ҙа, ике ҙур төркөмгә бүленеп, хан менән Сарыбайға ябырылғандар, бөтәһен дә ҡырып бөтөрмәксе булғандар. Бындай һөжүмде көтмәгән хан, ҡаршы тора алмайынса, үҙенең бер ни тиклем ярандары менән Сарыбай йәйләүенә ҡарап сапҡан. Ә ҡалғандары, шул иҫәптән Айҡара солтан да, ҡырылып бөткән. Баҫҡынсыларҙың икенсе төркөмө иһә Сарыбай йәйләүенә ташланған. Сарыбай ағай-энеһе менән, ҡоралланып, сапҡынға ҡаршы торған булған. Баҫҡынсылар быларҙы ла тар-мар иткәндәр, үҙҙәренең дә байтаҡ һыбайлылары ҡырылған. Сарыбай, һайланма батырҙары менән ике тирмә

араһында тороп, батырҙарса һуғышҡан, әммә уларға ҡарағанда күберәк булған баҫҡынсылар уларҙы ҡыҫырыҡлай башлағандар.

Атаһының, ағай-энеләренең һәм бөтә ҡәрҙәштәренең ҡурҡыныс аҫтында ҡалыуын күргән Маянһылыу, Айҡара менән ярышҡа әҙерләнгән ярау атын бәйҙән сисеп алған да, атаһына ярҙам итһен өсөн, үҙ батырын эҙләп уҡ кеүек атылған. Ҡамыш өҫтөндә йоҡлап ятҡан Ҡуҙыйкүрпәс янына сабып килеп, ҡысҡырып уятҡан.

Һөйгәнен күреүгә бик ҡыуанған батыр урынынан һикереп тороп, уны ҡосаҡлап алмаҡсы була, әммә Маянһылыу, егетте үҙенә яҡын ебәрмәйенсә, ашығып:

— Сабыр итсе, тәүҙә һүҙемде тыңла! Мине яратаһың икән, хәҙер уҡ атыңа атлан да ҡурҡыныс аҫтында ҡалған атайым Сарыбайҙы ҡотҡарырға ашыҡ. Ул һиңә дошман булһа ла, миңә атай, — ти.

— Йән киҫәгем, Маянһылыу! Һин минеке булғанда, атайың миңә дошман түгел.

— Мин мәңгегә һинеке!

— Һин ни тиһәң, мин шуны эшләрмен!

Ошо һүҙе менән батыр атына һикереп менә лә ҡош кеүек осоп та китә. Маянһылыу уның артынса сапһа ла, оҙаҡламай егетте күҙҙән юғалта. Сарыбай йәйләүенә сабып килеп еткән Ҡуҙыйкүрпәс ике яҡтан да бик күп ҡырылған батырҙарҙы күрә. Ул Сарыбайҙы бер-ике дуҫы менән баяғы ике тирмә араһында яраланып бөткән, ҡылыстары менән баҫҡынсыларға саҡ ҡаршы торған хәлдә таба. Һуғышсылар араһында йәрәхәтләнеп хәлдән тайған яҡшы күңелле ханды күреүгә тағы ла нығыраҡ бошона:

— Эй, ҡоторған бәндәләр! — тип ҡысҡыра ул, асыуланып. — Ниңә һеҙ изгелекле ханды харап итәһегеҙ. Аҡһаҡалды хатта йыртҡыс януар ҙа аяй!

Ошо һүҙе менән ул, ханға уҡ атырға йыйынған һыбайлыға табан һөңгөһөн һуҙып, бер юлы өсәүһен эйәрҙәренән алып ырғытҡан. Батыр һөңгөһөнөң һабы һыныуын күрә, шунан ул ҡылысын ҡынынан һурып алып, дошмандарҙы уңлы-һуллы турарға тотона. Уның был батырлығын күреп торған Маянһылыу һуңынан былай тип һамаҡлаған:

Ул сапҡындар араһынан
Үҙенә ҡанлы юл ярҙы,
Баштарын өҙә сабып,
Ҡаҡ ергә төшәп һалды.
Менгән аты елгәндә
Ҡәүҙәләр тапап барҙы;
Булат ҡылысын һелтәгәндә,
Тимер күлдәк, төркәйҙәрҙән
Ут осҡондары яуҙы.

Ҡуҙыйкүрпәс ҡулының һәлмәклеген татыған баҫҡынсыларҙың тере ҡалғандары уға ҡаршы тора алмай, Аҡтау аръяғына тырым-тыраҡай ҡасып китә башлайҙар. Шул ваҡыт Маянһылыу, Ҡуҙыйкүрпәстең дошман яуы артынан бер табан да ҡалышмай ярһып

ҡыуып барыуын күргәс, уның кире әйләнеүен, үҙен үлем ҡурҡыныһы аҫтына ҡуймауын илай-илай үтенә, иллә-мәгәр күндерә алмай Беренсе тапҡыр матурлыҡ көсө батырлыҡ ярһыуына бирешә. Арыҫланға ҡарағанда ла ныҒыраҡ ажарланған Ҡуҙыйкүрпәс тау башына сабып менһә, утыҙлап һыбайлы баҫҡынсының Сарыбай малдарын көтөүе менән әйҙәп барыуҙарын күрә. Шул ваҡытта инде:

Батырҙың ҡаны ҡайнаған,
Ярһып йөрәге янған,
Маянһылыуға һөйөүе,
Дошмандарына көйөүе
Йөрәгендә ҡабынған.
Аҡкош тубына ташланған
Сая тау шоңҡарындай,
Алға сабып сыҡҡан да
Дошманын ҡаршы алған:
Сапҡындарҙы айырған да
Берәмләп ҡырып һалған.
Үткер ҡылысҡа сыҙамай,
Имән тубырсығылай,
Баштар төшкән ҡыйылып,
Дошмандарҙын күбеһе
Бөткән тамам ҡырылып;
Ә тере ҡалғандары
Табыштарын ташлаған да
Үҙ иленә ҡасҡандар;
Ҡайтҡас, туған-тыумаса
Дуҫтарының өйөндә
Йәшенер ер тапҡандар,
Барымтаға барыуҙан
Бөтөнләй баш тартҡандар.

Беҙҙең батырҙың ҡыйыулығын ҡурайсылар шулай йырлай, тип өҫтәй хикәйәне һөйләүсе сәсән.

Маянһылыу батыры артынан тау башына барып ҡарап тормаһа, был ҡаһарманлыҡ Ҡуҙыйкүрпәстең баҫалҡылығы арҡаһында билдәле лә булмаҫ ине. Маянһылыу шунда берсә ҡыуанып, берсә ҡото осоп, йә бер көлөп, йәки илай-илай үҙ ыласынына һоҡланып ҡарап торған, батыр егете баҫҡынсыларҙы ҡыуып бөтөргәс кенә тынысланып, яраланған атаһы менән ағай-энеләре янына ярҙамға барған һәм булған хәлде бәйнә-бәйнә һөйләп биргән.

Шул арала Ҡуҙыйкүрпәс, Сарыбайҙың бөтә мал-тыуарын дошман ҡулынан тартып алып, йәйләүгә кире ҡыуып килтерә. Иҫтән яҙып ярҙамһыҙ ятҡан ханды күргәс, йөрәгенә ҡан һауып, күҙҙәренә ҡайнар йәш эркелгән батыр, атынан төшә һалып, уның йөҙөнә һыу алып килеп бөркә. Оҙаҡламай хан иҫенә килә башлай, ә батыр уның яраһына ҡатҡан ҡанды йыуып, шифалы үлән яба, әммә яраны бәйләр нәмә тапмай, сөнки үҙе янында Маянһылыу йәшереп бүләк иткән ҡулъяулыҡтан башҡа бер ни ҙә булмай. Яратҡан кеше

өсөн ҡәҙерле нәмә лә йәл түгел. Батыр оҙаҡ уйлап тормай, Маянһылыуҙың ошо яулығы менән кешелекле хандың яраһын бәйләй, сөнки Маянһылыу ҙа, хан да, икеһе ике яҡтан, уның йөрәген ҡаратҡандар.

Бер ни тиклем ваҡыт үтеүгә бөтөнләй иҫенә килгән хан батырҙың ҡулын алып күкрәгенә ҡыҫа ла ошо һүҙҙәрен әйтә:

— Әжәлдән ҡотҡарыусы улым, ҡосаҡла мине! Һинең был батырлығың, яҡшы күңеллелегең өсөн минең рәхмәтем дә, һәр төрлө бүләгем дә аҙ булыр ине. Бер алла менән бөйөк пәйғәмбәребеҙ генә һиңә тейешен бирә алыр. Һинән шул ҡәҙәр оло ярҙам булырын йөрәгем алдан һиҙенгәйне, һәм күңелемдең һинең менән гел бергә булғыһы килгәйне. Мин һине тәү күргәс тә яраттым, батырлығыңды күреп хайран ҡалдым. Әсәйең менән дуҫтарыңды ихлас күңелдән ҡайғыртыуыңды ишеткәс, уларҙан көнләштем, ә һинең менән хушлашҡан саҡта, бик ҡайғырып ҡалдым. Минең һиңә әйтәһе рәхмәтемде ошо тойғоларымдан аңла, улым.

Аҡһаҡал хандың күҙҙәрен йәш алып, ихлас күңелдән әйткән был һүҙҙәрен ишетеүгә Ҡуҙыйкүрпәс тә, йәш йөрәге түҙмәй, илап ебәрә.

— Миңә рәхмәт белдерәм тип, артыҡ борсолма, оло кеше, — ти батыр, — был хеҙмәт булыуҙан бигерәк, минең бурысым ине. — Ошо һүҙҙәренән һуң батыр хандың тубығын ҡосаҡлай, ә хан уны маңлайынан үбә.

Шунан һуң хан, Сарыбайҙы күрмәксе булып, Ҡуҙыйкүрпәстән уның янына алып барыуҙы һорай. Был ваҡытта Маянһылыуҙың атаһы үлтерелгән йәки яраланған ағай-энеләре араһында үҙ яраһын йыуып ултыра икән. Ул, яҡынлап килгән батырҙы күргәс:

— Беҙҙе бәлә-ҡазанан ҡотҡарыусы ҡыйыу батыр! Мин һинең яҡшылығыңа тиң түгел, — ти.

— Мин быны беләм, — тип яуап бирә батыр, — әммә һин — Маянһылыуҙың атаһы.

— Һин үс алыу урынына мине, балаларымды, ағай-энемде үлемдән ҡотҡарҙың, ул ғына ла етмәгән, мөлкәтемде кире ҡайтарып бирҙең.

— Сарыбай! Ҡасандыр һин минең атайыма ла шулай тип әйткәнһең.

— Уның алдында мин яманатлы булып ҡалдым. Дуҫыма биргән һүҙемде үтәмәүҙә мин бик ғәйепле, әммә, беҙҙең йола буйынса, батырҙарыбыҙҙың истәк-башҡорттарҙы күрә алмауы мине аҡлай алыр тип ышандым, шунлыҡтан, һиңә ҡыҙымды бирһәм, ырыуҙаштарым мине битәрләр, тип уйланым.

— Әгәр ҙә һеҙҙең йолағыҙ, — ти Ҡуҙыйкүрпәс, — һине яҡшылыҡ ҡәҙерен белмәҫ алдаҡсы итһә һәм мине ек күрергә, нәфрәт менән ҡарарға мәжбүр итһә, беҙҙең йолабыҙ миңә һинең кенә тотоуыңды һәм ек күреүеңде оноторға ҡуша, башыңа бәлә-каза килә калһа, һине унан ҡотҡарырға өйрәтә.

— Ҡотҡарыусым минең! Хуш күңелле батыр! Һинең был яҡшылығың өсөн ниндәй генә бүләк бирәйем мин?

— Уҫал уйҙарыңдан арын да Маянһылыуҙы миңә бир, мәңге туған булышайыҡ!

Шул ерҙә ҡырғыҙ батыры:

— Маянһылыу һинеке! — тип ҡысҡырып ебәрә. — Бөтә малтыуарымды ла һиңә бирәм. Һин — минең кейәүем, мин — һинең ҡайның! Быға бөйөк пәйғәмбәребеҙ үҙе шаһит булһын!..

Ошо һүҙҙәрҙән һуң батырҙар ҡосаҡлашҡандар ҙа мәңге дуҫлашып киткәндәр.

Сарыбайҙың улдарынан Бөркөтбай менән Барлыбай иҫән ҡалған, әммә икеһе лә ҡаты яраланған. Аға-энеләре менән улдарының хәлдәре якшыра төшөп, аяҡтарына баҫкас, Сарыбай уларға үҙҙәрен үлемдән ҡотҡарған ҡыйыу батыр Ҡуҙыйкүрпәскә Маянһылыуҙы кәләш итеп бирергә теләүен әйткән. Бөтәһе лә быға риза булған, бик шәп итеп туй яһағандар.

Үҙенең дуҫы Ҡуҙыйкүрпәс менән апаһы Маянһылыуҙы бик яраткан Барлыбай һуңынан апаһына ҡарап көлә-көлә:

— Батырҙы ҡолағынан һөйрәп бында килтереүең өсөн һиңә рәхмәт, апай, юғиһә, беҙ гүрҙә ятып, һинең туйыңды ла күрә алмаған булыр инек! — тип әйтер булған.



## ҠУҘЫЙКҮРПӘС МЕНӘН МАЯНҺЫЛЫУ

*(Ғ. Сәләм версияһы)*

Борон-борон заманда Күсәр менән Күсмәҫ тигән ике хан йәшәгән, ти. Улар икеһе бик дуҫ булып, бер-береһенә ҡунаҡҡа барышыр, ҡош сөйөп, төлкө алдырып, бергә һунарға йөрөшөр булғандар, ти.

Шулай, ҡәҙимгесә, Күсәр хан менән Күсмәҫ хан һунарҙа йөрөйҙәр ине, ти. Бер көн йөрөнөләр, ике көн йөрөнөләр, ти, былар — бер генә ҡош та, йәнлек тә осратманылар, ти. Өсөнсө көн тигәндә, бер юл сатына барып сыҡтылар, ти. Юлдың береһе уңға, икенсеһе һулға китә икән, ти. Күсәр хан уң яҡҡа, Күсмәҫ хан һул яҡҡа китте, ти. Хәтһеҙ йөрөгәс, былар бер-береһенә яңынан тап булышҡандар, ти. Шул ерҙә Күсәр хан:

— Йә, Күсмәҫ, һин ниҙәр күрҙең? — тип һораны, ти.

Күсмәҫ хан:

— Мин бер болан осратҡайным, атмаҡсы булып, йәйәмде ҡулға алһам, болан абсая* баҫты ла торҙо, имсәктәренән һөтө эйеп китте. Йәлләнем дә, атманым... Ә һин нимә күрҙең, Күсәр хан? — тип әйтте, ти.

Күсәр хан:

— Мин дә бер болан күрҙем. Атмаҡсы булып, йәйәмде алғайным, ул да абсая баҫты ла торҙо, имсәктәренән һөтө эйеп китте. Йәлләнем дә, атманым, — тине, ти.

Шунан һуң Күсмәҫ хан Күсәр хандан:

— Был беҙҙең күргәндәр нимә булыр тип уйлайһың? — тип һораны, ти.

Күсәр хан:

— Минең бисәм йөклө булып ҡалғайны, шул бала тыуғандыр, тип уйлайым, — тип юраны, ти.

Күсмәҫ хан да:

— Минең бисәм дә йөклө булып ҡалғайны. Мин дә шулайҙыр тип уйлайым, — тине, ти.

Шунан: «Әгәр ҙә беҙҙең юрағандарыбыҙ дөң килеп* беребеҙҙең ҡыҙ, беребеҙҙең ул булһа, ҡоҙа булышырбыҙ», — тип һүҙ ҡуйыштылар, ти, былар.

Был ике хан өйҙәренә ҡайтып килһәләр, үҙҙәре юрағандың дөң килеүен күрәләр. Күсмәҫтең бисәһенән бер ир бала, ә Күсәрҙең

бисәһенән ҡыҙ бала донъяға килгән, ти. Икеһе лә балалары булыуға бик шатланып, уларға исем ҡушырға булдылар, ти. Ат еткән ергә ат, хат еткән ергә хат ебәреп, бик күп ҡунаҡ йыйҙылар ҙа ҙур исем туйы яһанылар, ти. Бөтә халыҡ алдында Күсмәҫ хан үҙ улына Ҡуҙыйкүрпәс тип, Күсәр хан ҡыҙына Маянһылыу тип исем бирҙеләр, үҙҙәренең ҡоҙа булышырға ҡуйған вәғәҙәләрен дә әйттеләр, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу береһе ай, береһе көн кеүек, матур булып үҫә башланылар, ти. Уларҙың матурлығына һоҡланмаған кеше юҡ ине, ти. Улар бәләкәй саҡтарында гел генә бергә йөрөйҙәр, бергә уйнайҙар ине, ти.

Берҙән-бер көндө Ҡуҙыйкүрпәстең атаһы ауырып китте, ти. Тирә-яҡтағы бөтә им-томсоларҙы, бағыусыларҙы килтереп, имләп, баҡтырып ҡараһалар ҙа, уларҙың береһе лә ярҙам итә алманы, ти. Күсмәҫ хандың ауырыуына дарман* табылманы, ул шулай итеп үлеп тә китте, ти. Ҡуҙыйкүрпәс әсәһе менән генә ҡалып, етем бала булып йөрөй башланы, ти. Күп ваҡытын урамда балалар менән уйнап үткәрә ине, ти. Ҡуҙыйкүрпәс йәшкә бәләкәй булһа ла көрәштә үҙенән оло балаларҙы үҙ алдына сығармай ине, ти. Уйында, асыуландыра ҡалһалар, балаларҙың ашыҡтарын, бураларын талап ҡайтып киткән саҡтары ла булғылай ине, ти. Ләкин был уйынсыҡтарҙы шунда уҡ кире килтереп бирер ине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәстең ана шулай яманаты таралып китте, ти. Был хәл Күсәр хандың да эсен бошора башланы, ти. Маянһылыуҙың кейәүе буласаҡ Ҡуҙыйкүрпәстең, берҙән, етем булып, икенсенән, уның шулай үҙ һүҙле, шуҡ малай булып үҫеүе Күсәр ханға оҡшамай ине, ти. Берҙән-бер көн хан үҙенең бисәһенә:

— Йә, бисәкәй, һин нисек уйлайһың? Берҙән-бер ҡыҙыбыҙ Маянһылыуҙы Ҡуҙыйкүрпәскә кейәүгә бирһәк, ҡыҙыбыҙға ла, үҙебеҙгә лә хурлыҡ бит! Был илде ташлап, ете тау, ете ялан, ете диңгеҙ аша сығып китәбеҙме әллә? — тине, ти.

Күсәр хандың бисәһе быға риза булды, ти. Күп тә үтмәй, былар өйөр-өйөр, көтөү-көтөү малдарын әйҙәп — йылҡыларын кешнәтеп, һыйырҙарын мөңрәтеп, ҡуй-һарыҡтарын баҡыртып, баш һуҡҡан яҡҡа күсеп тә киттеләр, ти.

Хәтһеҙ йылдар үтеп, Ҡуҙыйкүрпәс тә ун ете йәшкә етте, ти. Тирә-яҡта уның көсөнә тиң булырлыҡ кешеләр ҙә табылмай башланы, ти.

Бер көндө шулай малайҙар менән көрәшепме, һуғышыпмы уйнағанда, Ҡуҙыйкүрпәстең ҡулы яңылыш бер әбейҙең берҙән-бер балаһына тейеп китте лә, теге малай иҫенән яҙып, йығылды, ти. Шунан Ҡуҙыйкүрпәс уны әсәһенә күтәреп алып барҙы, ти. Әбей Ҡуҙыйкүрпәсте әрләй-әрләй:

— Бер йүнле егет булһаң, һинең кәләшең буласаҡ ҡыҙың да ташлап китмәҫ ине! — тип әйтте, ти.

Был һүҙҙе ишеткәс, Ҡуҙыйкүрпәс эҫеле-һыуыҡлы булып китте, ти. Ни өсөн тиһәң, ул быға тиклем Маянһылыуҙың үҙенең кәләше булғанлығы тураһында бер нәмә лә белмәй йөрөй ине, ти. Шунан Ҡуҙыйкүрпәс бик ҡыҙыҡһынып, әбейҙән:

— Мине ниндәй ҡыҙ ташлап китте һуң? Ниңә әйтмәйһең, әбей? — тип үтенде, ти.

— Ҡайт та әсәйеңдән һора, — тип әйтте, ти, был әбей.

— Ул быға тиклем әйтһә әйтер ине инде. Һорағас та әйтмәҫ булһа, ни эшләрмен һуң? — тине, ти, Ҡуҙыйкүрпәс.

— Һорап-һорап та әйтмәһә, мин һиңә бер аҡыл өйрәтәйем, — тип, был әбей Ҡуҙыйкүрпәскә ошондай бер хәйлә өйрәтте, ти. — Һин әсәйеңдән бик һәйбәтләп кенә ҡурмас ҡыҙҙырт. Әсәйең шул ҡыҙҙырылған ҡурмасты ҡалаҡ менән бирһә, алма — усына һалып бирһен. Шул саҡта һин әсәйеңдең эҫе ҡурмас һалған усын ҡуша баҫырһың да: «Миңә кәләш буласаҡ ҡыҙ кем ине? Ниңә ул мине ташлап китте?» — тип һорарһың. Шунан ул әйтмәй булдыра алмаҫ, — тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс, өйөнә ҡайта һалып, әсәһенән:

— Миңә кәләш буласаҡ ҡыҙ кем ине? Ниңә ул мине ташлап китте? — тип һораны, ти.

Әсәһе:

— Ҡайҙан алдың был һүҙҙе, улым? Бер ҡыҙҙың да һиңә кәләш итеп әйттерелгәне лә, ташлап киткәне лә юҡ, — тине, ти.

Шунан Ҡуҙыйкүрпәс:

— Әсәй, бигерәк ҡурмас ашағым килеп китте, миңә ҡурмас ҡыҙҙырып бирсе? — тип үтенде, ти.

Әсәһе ҡурмас ҡыҙҙырып, ҡалаҡ менән алып биргәйне, Ҡуҙыйкүрпәс быны алмайынса:

— Ҡалаҡ менән бирмә, услап алып бир, — тип әйтте, ти.

Шунан әсәһе эҫе ҡурмасты услап алып бирмәксе генә булғайны, Ҡуҙыйкүрпәс әсәһенең усын ҡуша баҫты ла: «Миңә кәләш буласаҡ ҡыҙ кем ине? Ниңә ул мине ташлап китте?» — тип һораны, ти. Шунан әсәһе ҡыҙыу ҡурмастың усты бешереп алып барыуына түҙмәй: «Һиңә кәләш булырға тейешле ҡыҙ — Күсәр хан ҡыҙы Маянһылыу ине. Һиңә бирмәҫ өсөн, атаһы күптән инде ете тау, ете ялан, ете диңгеҙ аръяғына алып китте», — тип әйтте, ти.

Шунан һуң Ҡуҙыйкүрпәс, нисек тә булһа Маянһылыуҙы барып табыу уйына төшөп, баяғы әбейгә барып кәңәш итте, ә ул әбей шундай аҡыл өйрәтте, ти:

— Өйөр-өйөр йылҡығыҙ араһында атайың һунарға йөрөгән Күк толпар булыр. Һин нисек тә шуны тоторға тырыш. Йылҡыларығыҙ төш ваҡытында йылғаға һыулауға төшөр, ә Күк толпар иң алдан йөрөй. Һин ҡороҡ менән шул толпарҙы тотоп ал да баш тартҡан яғыңа кит тә бар.

Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарҙы тоторға атаһынан ҡалған йылҡы өйөрҙәре йөрөгән йылға буйына китте, ти. Төш ваҡыты етерҙән алда, ҡулына ҡороҡ тотоп, малдар һыулауға төшә торған йомро юл буйына йәшенеп ятты, ти. Быны бер ваҡыт өйөр-өйөр йылҡы йомро юл буйлап һыулауға төшә башланы, ти. Беренсе өйөр, икенсе өйөр үтте, ти. Ә өсөнсө өйөрҙөң алдында Күк толпар килә ине, ти. Әммә ул, Ҡуҙыйкүрпәс ятҡан ергә етер-етмәҫтән, ялын, ҡойроғон текә сәнсеп, уйнаҡлап, ҡоршолдап кире китте лә барҙы, ти. Бер аҙҙан һуң боролоп килде, ти, был толпар. Был юлы ла, Ҡуҙыйкүрпәс

тәңгәленә етер-етмәҫтән ҡоршолдап кире китте, ти. Өсөнсө тапҡыр килеүендә сабып үтеп китмәксе булғайны, Ҡуҙыйкүрпәс ҡороҡ менән муйынынан эләктереп тә алды, ти. Күк толпар Ҡуҙыйкүрпәсте өс тапҡыр күккә, өс тапҡыр ергә алып һуҡты, әммә уны бер нәмә эшләтә алманы, ти.

Шунан Күк толпар телгә килеп: «Хәҙер инде мин һинеке, ни кушһаң, шуны үтәйем», — тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс үҙенең теләген әйтеп биргәс, Күк толпар: «Хәҙер һин минең арҡамды телгеләп, унда атайыңдың батып ҡалған алтын ҡашлы эйәрен, айбалтаһын, көмөш көҙгөһөн, һунарға йөрөгәндә кейә торған ҡырма бүркен, көмөш биҙәкле ҡәмәрен ал да үҙемде ошо йылғаның иң тәрән еренә индереп ҡуй. Шунда арҡамдың телгеләнгән ерҙәре уңалғас, алып сығырһың», — тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарҙың арҡаһын телгеләп, ул әйткән әйберҙәрҙе берәм-берәм алды ла, үҙен йылғаның иң тәрән еренә индереп ҡуйҙы, арҡаһы уңалғас, кире алып сыҡты, ти.

Күк толпар, йылғанан сыҡҡас, Ҡуҙыйкүрпәскә: «Әсәйең ете тау, ете ялан, ете диңгеҙ аша Маянһылыуҙы эҙләп китеүенә ҡаршы булыр. Ул һине ебәрмәҫкә теләп, бына ошолай һамаҡлап әйтер, — тине, ти.

Өйөр ҙә өйөр малың ҡалыр,
Уны нисек итерһең, балам?
Нисек итерһең, балам?
Осһоҙ ҙа башһыҙ урман булыр,
Уны нисек үтерһең, балам?
Нисек үтерһең, балам?
Икһеҙ ҙә сикһеҙ диңгеҙ булыр,
Уны нисек кисерһең, балам?
Нисек кисерһең, балам?
«Ете ҡабып, ете йотам» бүре килер,
Унан нисек ҡасырһың, балам?
Нисек ҡасырһың, балам?

— Ә һин әсәйеңә бына ошолай һамаҡлап яуап бирерһең, — тип әйтте, ти, Күк толпар:

Өйөр ҙә өйөр малым ҡалһа,
Бер йылҡынан биш булыр, әсәй,
Биш булыр, әсәй.
Осһоҙ ҙа башһыҙ урман булһа,
Атайымдың айбалтаһы иш булыр, әсәй.
Иш булыр, әсәй.
Икһеҙ ҙә сикһеҙ диңгеҙ булһа,
Атайымдың көмөш көҙгөһө иш булыр, әсәй,
Иш булыр, әсәй...
«Ете ҡабып, бер йотам» бүре килһә,
Атайымдың Күк толпары иш булыр, әсәй,
Иш булыр, әсәй...»

Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарҙы менеп алып, өйгә ҡайтып, Маянһылыуҙы эҙләп китергә йыйыныуын әйткәс, әсәһе уға ана шулай тип һамаҡланы, Ҡуҙыйкүрпәс тә уға, Күк толпар әйткәнсә, ана шулай һамаҡлап яуап бирҙе, ти. Шунан Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарын, теҙгенен ҡағып ебәреүе булды — Күк толпарҙың осороп алып китеүе булды, ти.

Эй китте, эй китте, ти, Ҡуҙыйкүрпәс, бара торғас, осһоҙ-ҡырыйһыҙ, дөм ҡараңғы урманға килеп етте, ти. Шул ваҡыт Күк толпар телгә килеп:

— Атайыңдың айбалтаһын ташла! — тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс атаһының айбалтаһын ташлап ебәргәйне, осһоҙ-ҡырыйһыҙ дөм ҡараңғы урмандың уртаһынан туп-тура юл һалынды, ти. Шунан Ҡуҙыйкүрпәс айбалтаһын алды ла шул юлдан елдереп Күк толпар менән үтеп тә китте, ти.

Эй китте, эй китте, ти, Ҡуҙыйкүрпәс, бер ваҡыт икһеҙ-сикһеҙ диңгеҙ янына барып етте, ти, был. Шул ерҙә Күк толпар телгә килеп:

— Атайыңдың көмөш көҙгөһөн ташла! — тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс атаһының көмөш көҙгөһөн ташлап ебәргәйне, икһеҙ-сикһеҙ булып йәйелеп ятҡан диңгеҙ аша бөгөлөп-һығылып торған быяла күпер һалынды, ти. Ҡуҙыйкүрпәс, көмөш көҙгөһөн алып, ана шул бөгөлөп-һығылып торған күперҙән Күк толпары менән елдереп сығып китте, ти.

Диңгеҙ арҡыры һалынған был күперҙе сыҡҡас, эй китте, эй китте, ти, Ҡуҙыйкүрпәс, бара торғас, бер тау итәгенә килеп етте, ти, был. Ҡараһа — ҡаршы яҡтан ауыҙҙарын асып, тештәрен ыржайтып, «ете ҡабып, бер йотам» ете бүре килеп сыҡты, ти. Шул саҡ Күк толпар телгә килеп:

— Ҡамсың менән минең уң яҡ ҡабырғама һуҡ — һул ҡабырғамдан ҡан атылып сығырлыҡ булһын, ә үҙең күҙеңде йом! — тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс ҡамсы менән Күк толпарҙың уң ҡабырғаһына һуҡҡайны, һул ҡабырғаһынан ҡан атылып сыҡты, ти. Үҙе күҙҙәрен йомдо, шул арала Күк толпар, ел кеүек осоп, бүреләрҙе үтеп тә китте, ти. Шунан Күк толпар:

— Инде күҙеңде ас та, артыңа әйләнеп ҡара, — тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс күҙен асып артына әйләнеп ҡараһа, әле тороп ҡалған тау башында, сәстәрен туҙҙырып, әсәһе баҫып тора, ти.

Шул тау башынан әсәһе:

— Улым, мин һиңә күпме ҡаршылыҡ күрһәттем — сәстәремде ҡара урман иттем, күҙ йәшемде — диңгеҙ, ете бөрсәне — ете бүре иттем — барыһын да үтеп сыҡтың, батыр егет икәнһең, барыр юлың да, ҡайтыр юлың да уң булһын инде! — тип ҡысҡырып ҡалды, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс тағы ла алға китте, ти. Бара торғас, юлаусылар ҡуныптап киткән бер урынға килеп туҡтаны, ти. Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарынан төшөп, ут яҡҡан урынды һәрмәштереп ҡараһа, көл эсенән ҡара күмер булып көйгән сөсикмәк табып алды, ти. Был — Ҡуҙыйкүрпәс мине эҙләп килә торған булһа, табып ашар, тип, Маян-

һылыу күмеп киткән сөсикмәк ине, ти. Ҡуҙыйкүрпәс сөсикмәкте татып ҡараған, барыр юлым бик оҙон икән шул әле, тип уйланы, ти. Бер аҙ барғас, ул икенсе бер урында ла шулай уҡ юлсылар туҡтаған урынды ҡараһа, көл эсенән тағы бер сөсикмәк тапты, ти. Быныһының яртыһы көйгән, яртыһы көймәгәйне, ти. Ҡуҙыйкүрпәс тағы ла алға китте, ти. Шундай уҡ өсөнсө урынға еткәс, юлсыларҙан тороп ҡалған көлдө ҡаҙып ҡараһа, һарғайып ҡына яңы бешкән сөсикмәк тапты, ти. Быны күргәс, Ҡуҙыйкүрпәс: «Инде бараһы юлым алыҫ ҡалмаған икән», — тип шатланды, ти.

Күп тә үтмәне, алыҫта бер йылҡы көтөүе күренә башланы, ти. Уға яҡынлаша төшкәс, Күк толпар телгә килеп: «Минең өс бөртөк ҡылымды алып ҡал да үҙемде ебәр, мин кәрәк булғанда, ана шул өс ҡылымды өтөрһөң, мин һинең янына килеп етермен», — тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарҙың өс бөртөк ҡылын алды ла үҙен бушатып ебәрҙе, ти. Шунан ул көтөү эргәһенә барып, көтөүсе ҡарттан иҫәнлек-һаулыҡ һорашты, ти.

Көтөүсе ҡарт Ҡуҙыйкүрпәстән:

— Ни эшләп йөрөйһөң, ҡайҙа бараһың, балам? — тип һораны, ти.

— Эшкә ялланырға ине, бабай, һинең байың кем була, мине алмаҫмы икән? — тине, ти, Ҡуҙыйкүрпәс.

Көтөүсе ҡарт:

— Беҙҙең Күсәр хандан кеше артмаҫ, әйҙә, бөгөн бында ҡунып кит, — беҙ килгән кешегә бер баш йылҡы һуйып, ҡунаҡ итмәйенсә ебәрмәй торғанбыҙ, — тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс ҡунып, бер йылҡы ашап, иртә менән тағы ла юлға әҙерләнде, ти. Китер алдынан йылҡы көтөүсеһе уға:

— Улым, алдыңда бер-береһенән тар ғына һуҡмаҡ менән бүленеп ятҡан ике күл булыр. Ул күлдәрҙең ғәҙәте шулай: уҙғынсы тап уртаһына еткәс, ҡушылалар ҙа уны йоталар[46]. Шуға күрә һин ул күлдәр янына еткәс, береһенең һыуын икенсеһенә алып һал. Шунан ғына һин сығып китә алырһың, — тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс көтөүсе ҡарттан айырылып киткәс тә, өс бөртөк ҡылды өтөүгә, Күк толпар килеп баҫты, ти. Егет толпарын менеп, көтөүсе ҡарт әйткән теге ҡуш күлгә еткәс, атынан төшөп бер күлдең һыуын икенсеһенә ҡойҙо, ти. Шунан күл телгә килеп: «Бик ҙур рәхмәт, егет. Ете йыл буйы бер-беребеҙгә ҡушыла алмай, зарығып ята инек, бик һәйбәт иттең әле. Үҙеңә лә шулай Маянһылыу менән ҡушылырға яҙһын», — тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарына менде лә тар һуҡмаҡ менән алға китте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс, бара-бара, бер һыйыр көтөүенә тап булды, ти. Күк толпарынан йәнә өс ҡыл алып, үҙен бушатып ебәрҙе лә үҙе көтөүсе эргәһенә барҙы, ти.

Көтөүсе ҡарт унан:

— Йә, улым, ниҙәр бөтөрөп йөрөйһөң, ҡайҙа бараһың? — тип һораны, ти.

— Бабай, берәй эшкә ялланырға тигәйнем, һеҙҙең ханығыҙҙа эш табылмаҫмы икән? — тип әйтте, ти, Ҡуҙыйкүрпәс.

Көтөүсе ҡарт:

— Һай, беҙҙең Күсәр хандан кеше артмаç. Әйҙә, бында ҡунып кит, беҙ килгән кешеләргә бер һыйыр һуя торғанбыҙ. Ҡунаҡ булырһың, иртән китерһең, — тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс һыйыр көтөүсеһендә лә ҡунып, икенсе көндө генә юлға сыҡты, ти. Китер алдынан көтөүсе уға:

— Алда тағы ҡуй көтөүсеһе булыр, унда ла туҡтап кит, улым, — тип ҡалды, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс өс бөртөк ҡылын өтөп, тағы Күк толпарына менеп китте лә, ҡискә табан ҡуй көтөүсеһенә барып етте, ти. Ҡуҙыйкүрпәс көтөүсенән:

— Был кем ҡуйҙары, бабай? — тип һораны, ти.

Көтөүсе ҡарт:

— Был Күсәр хан ҡуйҙары, ә һин үҙең ҡайҙа бараһың, ни эшләп йөрөйһөң, улым? — тип һораны, ти.

— Берәй эшкә ялланырға ине, бабай, һеҙҙең ханығыҙға кеше кәрәкмәйме? — тине, ти, Ҡуҙыйкүрпәс.

Ҡуй көтөүсеһе:

— Беҙҙең Күсәр хандан кеше артамы һуң! Әйҙә бөгөн бында ҡунып кит, беҙ килгән кешегә бер ҡуй һуя торғанбыҙ, ҡунаҡ булырһың. Бынан Күсәр ханға алыç түгел, иртәгә иртә менән китерһең, — тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс көтөүсенең һүҙенә риза булып, ҡунырға ҡалды,ти. Былар икәүләп һөйләшеп ултырған арала, бер ҡуй көтөүҙән айырылып сыҡты ла ҡайҙалыр сабып китте, ти. Ҡуҙыйкүрпәс менән көтөүсе уның ҡайҙа китеүен белмәй ҙә ҡалдылар, ти.

Был ҡуй Күсәр хандың сандауына барып, баҡса аша Маянһылыу торған йорттоң тәҙрә алдына үтеп, телгә килде лә:

Һөйөнсө лә, Маян, һөйөнсө, Маян,
Итәгең-еңең төйөнсө, Маян:
Ҡуҙый ҙа Күрпәс килә лә ятыр,
Ҡуҙый ҙа Күрпәс килә лә ятыр!..—

тип һамаҡлай башланы, ти. Маянһылыу: «Әй, ҡорогор, нимә юҡты һөйләп йөрөйһөң, кит бынан!» — тип, ҡуйҙы ҡыуып ебәрҙе, ти. Ҡуй тағы ла әйләнеп килеп, шул уҡ һамағын ҡабатланы, ти:

Һөйөнсө лә, Маян, һөйөнсө, Маян,
Итәгең-еңең төйөнсө, Маян:
Ҡуҙый ҙа Күрпәс килә лә ятыр,
Ҡуҙый ҙа Күрпәс килә лә ятыр!..

Маянһылыу тағы ла: «Юҡты һөйләп йөрөмә!» — тип, ҡуйҙы ҡыуып ебәрҙе, ти. Ҡуй өсөнсө тапҡыр килеп, тағы ла ҡыскырыбыраҡ һамаҡланы, ти:

Һөйөнсө лә, Маян, һөйөнсө, Маян,
Итәгең-еңең төйөнсө, Маян:

Ҡуҙый ҙа Күрпәс килә лә ятыр,
Ҡуҙый ҙа Күрпәс килә лә ятыр!..

Маянһылыу бик асыуланып, йүгереп сыҡты ла: «Нимә юҡты һамаҡлап, яраға тоҙ һалып йөрөйһөң, бысаҡ ҡаҙалғыры!» — тип, бысағы менән һелтәнгәйне, бысаҡ ҡуйҙың осаһына тейеп, ярып ебәрҙе, ти.

Бына шунан ҡуйҙарҙың осаһы ярыҡ булып ҡалған икән, ти...

Ҡуҙыйкүрпәс ҡуй көтөүсеһендә ҡуныи, үҙенең Күк толпарын менеп, иртә менән тағы юлға сығып китте, ти. Көтөүсе уның артынан:

— Инде оҙаҡ бармаҫһың. Алда Күсәр хандың саңдауы булыр; эшкә ялланғанда хан үҙе ҡарап ала торған, шуға күрә туранан-тура һин уның үҙенә бар, — тип ҡалды, ти.

Күсәр хан саңдауына килеп еткәндә, көн әле иртә ине, ти. Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарының өс бөртөк ҡылын алды ла үҙен бушатып ебәрҙе, ти.

Ҡуҙыйкүрпәсте Күсәр хандың Ҡарағол исемле Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ тип йөрөтөлгән бер ярамы ҡаршы алды, ти.

— Йә, егет, беҙҙең ханда ни йомошоң бар? — тип һораны, ти, ул.

— Хан эшкә алмаҫмы икән, тип килгәйнем, — тине, ти, Ҡуҙыйкүрпәс.

Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ Ҡуҙыйкүрпәскә бер ҡарап алды ла:

— Беҙҙең хандан кеше артыуын артмаҫ та, әҙерәк көтөп тор, ул хәҙер өйлә намаҙын уҡырға ингән, — тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс Күсәр ханды көтөп торған арала, Маянһылыуҙың ҡайҙа икәнен белергә теләп, тегеләй-былай ҡаранғылаһа ла, бер ҡайҙа бер нәмә лә белерлек түгел ине, ти.

Күсәр хан Ҡуҙыйкүрпәсте үҙ янына саҡыртып алып:

— Һин, егет, эшкә ялланмаҡсы икәнһең, ни һөнәрең бар? — тип һораны, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс:

— Ниндәй эш булһа ла ярай, ханым, барыһын да эшләй алам, — тине, ти.

Шунан Күсәр хан:

— Миңә бер йылҡы көтөүсеһе кәрәген кәрәк тә, тик минең бер шартым бар: йылҡы өйөрөндә өс йыл тыу йөрөгән бейәмде тотоп, ауыҙлыҡ һалып менә алған кешене генә көтөүсе итеп ялдайым мин, — тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс был шартҡа риза булды, ти. Шунан былар йылҡы көтөүенә бармаҡсы булдылар, ти. Күсәр хан Ҡуҙыйкүрпәсте бер арыҡ ҡына дүнәнгә мендерҙе, ә үҙе иң яҡшы тигән атына атланып алды, ти. Бара торғас, быларҙың юлы ике яҡҡа айырылды, ти. Шул ерҙә хан Ҡуҙыйкүрпәскә боролоп:

— Бына был юлдың уңға киткәне түтә, һулға киткәне урау, һин ҡайһыһы менән китәһең? — тип һораны, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс:

— Миңә икеһе лә барыбер. Әйҙә, урау булғаны менән китәйем, — тине, ти.

Күсәр хан түтә юлдан, Ҡуҙыйкүрпәс урау юлдан китте, ти. Бер аҙ барғас, Ҡуҙыйкүрпәс кеҫәһенән баяғы өс бөртөк ҡылды алып, өтөп ебәрҙе лә, Күк толпар уның алдына килеп баҫты, ти. Шунан Ҡуҙыйкүрпәс үҙе менән килгән дүнәнде Күк толпарға арҡыры һалып алды ла һә тигәнсе хандың йылҡы көтөүенә барып та сыҡты, ти; етмәһә, юлда барғанда төрлө ҡоштар атып алды, ти. Йылҡы көтөүенә килеп еткәс, Күк толпарын ебәреп, арыҡ дүнән менән Күсәр хандың килеүен көтә башланы, ти.

Күсәр хан бик күп ваҡыт үткәс кенә килде, ти. Өҫ-башының ҡарар ере лә юҡ — бысранып бөткәйне, ти. Ни өсөн тиһәң, ул, теге егет килгеләгәнсе ашап-эсеп, шунан йоҡо туйҙырып алайым тип, йән-фарман сабып, бысраҡта бата-сума килгән икән. Ҡуҙыйкүрпәс, уны ҡаршы алып:

— Әйҙә, ханым, бик оҙаҡланың. Һинең килеүеңә тип бешергән ҡош һурпаһы ла һыуына башланы, — тине, ти.

Күсәр хандың аптырауҙан күҙҙәре шарҙай булды, ти. Ут яҡкан ергә барып ҡараһа, ҡаҙан тулы ҡош ите бешеп ултыра ине, ти.

Күсәр хан бер ҙә иҫе китмәгән кеше булып, ҡош итен ашап алды ла Ҡуҙыйкүрпәскә:

— Инде һин ана теге өс йыл тыу йөрөгән бейәне тотоп алып, ауыҙлыҡлап бында килтереп бәйлә, — тип, өйөр араһында ялын текә сәнсеп, уйнаҡлап йөрөгән бер бейәне күрһәтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс: «Ярар, ханым», — тип, ҡороҡ алды ла, теге тыу бейәне ҡамалай башланы, ти. Күп тә үтмәне, ул ҡороғон бейәнең муйынына кейҙереп тә өлгөрҙө, ти. Тыу бейә үрәпсей, дулай башлағас, Ҡуҙыйкүрпәс асыуланыбыраҡ, ҡороғон тартҡайны, шул саҡ теге бейәнең муйыны өҙөлдө лә ҡуйҙы, ти.

— Ай, егет, харап иттең тыу бейәмде! — тип ҡысҡырҙы, ти, Күсәр хан. — Йә, ярай, хәйерле ҡаза булһын. Өйөрҙә алты йыл тыу йөрөгән бейәм бар, шуны тотоп килтер улайһа, — тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс ҡороҡ һалыуға алты йыл тыу йөрөгән бейә лә бөтөнләй ярһынып-шашынып дулай башланы, ти. Ҡуҙыйкүрпәс ҡороғон асыуланыбыраҡ тартып ебәрһә, бының да муйыны өҙөлөп сыҡты, ти.

Күсәр хан Ҡуҙыйкүрпәстең шул тиклем көслө булыуына ғәжәпләнеп:

— Егет, бына тигән ике тыу бейәмдең муйынын өҙөп әрәм иттең, хәйерле ҡаза булһын инде. Ана туғыҙ йыл тыу йөрөгән бейәм бар, ул да бер ҡасан да тотолмаған. Шуны тотоп мен, тик, зинһар, һаҡ бул, харап итә күрмә инде, — тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс туғыҙ йыл тыу йөрөгән бейәне һә тигәнсе тотоп алып, һыбайланып алды ла саба-саба манма тиргә төшөрҙө, ти. Унан Күсәр хандың алдына килтереп бәйләп ҡуйҙы, ти. Шунан һуң хан:

— Егет, мин һине көтөүсе итеп алырға ризамын, бына ошо яландағы йылҡыларымды көтөрһөң, — тип, ҙур яланды ҡаплап алған өйөр-өйөр йылҡыларҙы күрһәтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс яланда йылҡы көтөп ҡалды. Күсәр хан һаңдауына ҡайтып китте, ти.

Өйөнә ҡайтҡас, хан яңы алған хеҙмәтсеһенең шул тиклем көслө бер егет булыуын ғәжәпләнеп һөйләне, ти. Атаһының һүҙен тыңлап торған Маянһылыу ҙа, иҫе китеп: «Ҡуҙыйкүрпәстән дә көслөрәк егеттәр бар микән ни?» — тип уйлап ҡуйҙы, ти.

Маянһылыу яңғыҙы бер өйҙә тора икән. Уның тәҙрәһе төбөндә төрлө-төрлө емеш ағастары үҫеп, төрлө-төрлө ҡоштар һайрап тора ине, ти. Маянһылыу һәр ваҡыт ана шул тәҙрә төбөндә, емеш ағастарына ҡарап, һайрашҡан ҡоштарҙың тауышын тыңлап, Ҡуҙыйкүрпәсте уйлап ултырыр булған, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс, Күсәр ханда эшләй башлауына хәтһеҙ ваҡыт үтеп китһә лә, гел генә ҡырҙа, йылҡы араһында булғанлыҡтан, Маянһылыуҙы һаман күрә алмай ине әле, ти.

Бына көҙ ҙә етеп, ҡар ҡатыш ямғырҙар яуа башланы, ти. Күсәр хан бөтә малдарын саңдауға алып ҡайтырға ҡушты, ти. Ҡуҙыйкүрпәс тә үҙе көткән йылҡы көтөүен саңдауға алып ҡайтып, кәртәгә япты, ти. Күшектергес елле-ямғырлы көндәр башланып киткәнлектән, йәш ҡолондарға бауырлыҡ* бәйләргә булдылар, ти. Бындай көндәрҙә, малдарҙы ҡарарға көтөүселәр генә етешә алмағанлыҡтан, ярҙамға Маянһылыу ҙа сыға торғайны, ти. Шундай елле-ямғырлы бер көндө Маянһылыу, ашығып-ашығып, ҡолондарға бауырлыҡ бәйләп йөрөй, ә уның артынан бәйләгән бауырлыҡтарҙы кемдер ҡырҡып бара ине, ти. Маянһылыу был хәлдең тиккә булмауын һиҙенеп: «Кем шулай шаяра икән? — тип, абайлабыраҡ ҡараһа — уның алдында Ҡуҙыйкүрпәс баҫып тора ине, ти. Ҡапыл йылҡылар ҙа, ҡолондар ҙа онотолдо, ҡарлы-боҙло ямғыр ҙа туҡтағандай булып китте, ти. Егет менән ҡыҙ, бер-береһенә ҡарашып, баҫҡан урындарында ҡаттылар ҙа ҡалдылар, ти. Береһе: «Маянһылыу!..», икенсеһе: «Ҡуҙыйкүрпәс!..» тигән һүҙҙән башҡа бер һүҙ ҙә әйтешә алмай торҙолар, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу, ана шулай, әйтер һүҙҙәрен әйтә алмай, күпмелер ваҡыт бер-береһенә ҡарашып торғас, ышығыраҡ бер ергә һыйынып, бөтә донъяларын онотоп, пар күгәрсендәй гөрләшеп, бик оҙаҡ ултырҙылар, ти.

Бер-береһен йән күреп яратышҡан был икәүҙең нимә һөйләшкәнен Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ Ҡарағолдоң һайыҫҡандан һаҡ, төлкөнән хәйләкәр бисәһе тыңлап торҙо, ти. Шунан ул Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыуҙың ихлас күңелдән һөйләшкән һүҙҙәрен боҙоп, үҙенән ҡушып, иренә барып әйтте, ти, ә Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ ҡатыны һөйләгәнде тағы ла шаштырып, Күсәр ханға алып барып еткерҙе, ти.

— Ҡыҙың ҡыҙ түгел инде хәҙер! Өҫтәүенә үҙе теге көтөүсең менән ҡасып уҡ китергә йыйына, — тип әйтте, ти, ул ханға.

Күсәр хан, был хәбәргә ни тип әйтергә лә белмәй, елкәһен тырнап ултыра ине, Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ ханға ҡарап:

— Хуп күрһәң, мин бер хәйлә уйлап таптым, — тине, ти.

— Йә, ниндәй хәйлә ул? — тип һораны, ти, хан.

— Ханым, төптәнерәк уйлап ҡараһаң, Ҡуҙыйкүрпәсте үлтермәй тороп, унан ҡотолоп булмаҫына үҙең дә ышанырһың, — тип һүҙ башланы, ти, ул. — Әммә быны хәйләһеҙ-ниһеҙ генә булдырып булмай. Ни өсөн тиһәң, уны көс менән еңеү мөмкин түгел, ул

бөтәбеҙҙән дә көслө. Шул көсөнә таянып, ул Маянһылыуҙы ғына түгел, бөтә байлығыңды талап, барлыҡ аяҡлы малыңды ҡыуып алып китеүе бар. Ҡыҙыңды йәштән үк унан айырып алып, күсеп киткәнең өсөн һинән үс алмай ҡалмаҫ ул. Эйе, көт тә тор, шулай итәсәк ул...

— Шулай булғас, ни эшләргә кәрәк һуң? — тип, Күсәр хан Ҡутыр башлы ҡолтор таҙҙың һүҙен бүлдерҙе, ти.

— Быны өсөн ялған туй уҙҙырырға кәрәк, — тип әйтте, ти, Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ. — Маянһылыуҙы Ҡуҙыйкүрпәскә бирәм тип, ҙур табын ҡороп, туй яһаған булырға ла Ҡуҙыйкүрпәсте бал эсереп иҫертергә. Шунан уны бейергә төшөрәһең. Бейегәндә, иҫереүе еткәнлектән, башы әйләнеп, сайҡала башлар. Шунан инде уны, әҙерәк айныһын тигән булып, ситкәрәк алып китәһең дә башына һуғып үлтерәһең... Ҡуҙыйкүрпәстән ҡотолоу өсөн башҡа сара юҡ, ханым.

Күсәр хан был турала көҙ буйы уйланы, ҡыш буйы уйланы ла, ахыр килеп, яҙ көнө Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ әйткәнгә риза булды, ти. Бер заман ат еткән ергә ат, хат еткән ергә хат ебәреп, Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу туйына, тип, бик күп кеше саҡыртты, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу был туйҙың ысын туй булмаҫын һиҙенеп торҙолар, ти. Шуның өсөн улар туйҙың иң ҡыҙыу мәлендә генә, Күк толпарға атланып, ҡасып китергә һүҙ ҡуйыштылар, ти. Күк толпар беҙгә кәрәкле бер-бер хәйлә әйтмәҫме, тип, Ҡуҙыйкүрпәс кеҫәһендәге өс ҡылды өтөп, Күк толпарҙы килтерҙе, ти. Шунда Күк толпар телгә килеп: «Егетем, һине туйҙа иҫертеп аяҡтан йығырға ла тышҡа алып сығып үлтерергә итәләр. Һин иҫермәҫкә тейешһең. Быны өсөн минең үҙеңдәге өс ҡылымдың береһен балдаҡ кеүек итеп, бармағыңа урап ал да балды, эсер алдынан ғына, шул бармағың менән бер ҡат болғат. Мине саҡырғанда инде ул ҡылды тегеләр менән бергә ҡушырһың», — тип, әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс тап Күк толпар әйткәнсә эшләргә булды, ти.

Туй башланды, ти, бер заман. Аттар саптырылды, көрәшселәр көрәште, йүгеректәр йүгереште, ти. Табынға ултырып бал да эсә башланылар, ти. Ҡуҙыйкүрпәскә балды һалып биреп торалар, ул, ҡыл балдаҡлы бармағы менән бер генә болғап ала ла, эсеп бөтөрөп тора, ти. Иҫереп йығылыу Ҡуҙыйкүрпәстең иҫенә лә инеп сыҡмай, ти. Быны күреп, Күсәр хан менән Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ ҡайғыға ҡалдылар, ти.

Аптырағас-йөҙәгәс:

— Кейәүҙең бер бейеп алыуын һорайыҡ әле! — тип ҡысҡырҙы, ти, таҙ.

Ҡуҙыйкүрпәс бер ҙә ҡарышып тормай, бейергә төшөп китте, ти. Ул туҡтар-туҡтамаҫтан Маянһылыу бейей башланы, ти. Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарҙың ҡылдарын өтөп ебәргәйне, толпар майҙан уртаһына килеп тә баҫты, ти. Шунда уҡ ҡыҙ менән егет Күк толпарға менеп алдылар ҙа сабып китеп тә барҙылар, ти.

Ләкин Күк толпарҙың сабыуы, әллә нишләп, ғәҙәттәгенән күп ҡайтыш ине, һыртына ултырып барыуы ла ғәжәпкә ҡаршы, бик уңайһыҙ ине, ти. Шуға күрә арттан баҫтырып килгән Ҡутыр баш-

лы ҡолтор таҙ Күк толпарҙы шунда уҡ ҡыуып етеп, ҡылыс менән һелтәгәйне, ҡылыс Күк толпарҙың сандыр итен телеп ебәрҙе, Күк толпар абынып-һөрлөгөп китте лә, Маянһылыу осоп төшөп ҡалды, ти. Шунан Күк толпар, ҡапыл бер яҡҡа тайпылып, күҙҙән юғалды, ти.

Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ Ҡарағол, Маянһылыуҙы үҙенең атына алып, Күсәр хандың һаңдауына ҡайтып китте, ти. Был ваҡытта инде Күк топар ҡыуғынсыларҙан күҙ яҙҙырып, бер ҙур күл янына килеп сыҡҡайны, ти. Ҡуҙыйкүрпәс толпарынан төштө лә: «Был ни хәл?» — тип, атының күҙҙәренә ҡараны, ә Күк толпар телгә килеп: «Ниңә миңә ҡарайһың? Бармағыңа ҡара!» — тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс бармағына ҡараһа, ҡылт итеп иҫенә төштө, ти: ул, туй ваҡытында ҡабаланып, ҡылдың ике бөртөгөн генә өткән, ә өсөнсөһө бармағына ураған көйө онотолоп тороп ҡалған икән. Бына шуның арҡаһында Күк толпар ғәҙәттәгенән бер ҡат ҡайтыш сапҡан, һыртына ултырып барыу ҙа уңайһыҙ булған, быға са абыныу белмәгән Күк толпар һөрлөгөп китеп, Маянһылыу осоп төшөп ҡалған икән.

Ҡуҙыйкүрпәс был хәлгә бик-бик ҡайғырҙы, бармағын ҡырҡып ташларҙай булып үкенде, ти. Ләкин эш уҙғайны инде, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс шулай ҡайғыға батып ултырғанда, Күк толпар телгә килеп, уның ҡайғыһын тағы ла арттырып ебәрҙе, ти. «Минең ярам өс көнһөҙ уңалырлыҡ түгел. Мине өс көнгә ошо күл эсенә индереп ҡуй», — тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарын күл эсенә индереп ҡуйҙы ла үҙе күл буйындағы суҡ тирәк төбөнә килеп ултырҙы, ти. Бер саҡ тирәк башына бер ҡарға килеп ҡунды, ти. Ҡуҙыйкүрпәс шул ҡарғаға:

— Ҡарға, минең яныма төш әле, һиңә бер йомошом бар ине, — тип әйтте, ти.

Ҡарға:

— Ҡар-рк, ҡар-рк, һин ҡатһаң, берр ҡа-лаҡ ҡа-ның миңә! — тип осто ла китте, ти.

Ҡарға киткәс, уның урынына бер һайыҫҡан килеп ултырҙы, ти. Ҡуҙыйкүрпәс шул һайыҫҡанға:

— Һайыҫҡан, минең янға төш әле, һиңә бер йомошом бар ине, — тип әйтте, ти.

Һайыҫҡан:

— Шыҡыр-шыҡыр, һин шыҡырайһаң, бер ҡалаҡ ҡаның миңә! — тип осто ла китте, ти.

Шунан тирәк башына суҡ турғай килеп ҡунды, ти. Ҡуҙыйкүрпәс уға:

— Суҡ турғай, минең яныма төш әле, һиңә бер йомошом бар ине, — тип әйтте, ти.

Суҡ турғай шунда уҡ пырылдап осоп төштө лә:

— Йомошоңдо тыңлайым, — тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс, бер япраҡҡа яҙыу яҙып, суҡ турғайҙың аяғына бәйләне лә:

— Бына ошо япраҡты Маянһылыуға илтеп бирсе, — тине, ти. Суҡ турғай пырылдап осоп та китте, ти.

Маянһылыу, Ҡуҙыйкүрпәстең ҡайҙалығын белмәй, асыҡ тәҙрә алдында моңайып ултыра ине, ти. Шул ваҡыт баяғы суҡ турғай яҡындағы бер ағасҡа килеп ҡунды ла сут-сут итеп һайрай башланы, ти. Маянһылыу, ниңә был тиклем өҙөлөп-өҙөлөп сырҡылдай икән был турғай, тип, абайлабыраҡ ҡараһа, уның аяғына бәйләнгән хатты күрҙе, ти. Суҡ турғай, һайрап бөткәс, өйгә инеп, Маянһылыуҙың иңбашына уҡ килеп ҡунды, ти. Маянһылыу хатты алып уҡып, Ҡуҙыйкүрпәстең ҡайҙа, ни хәлдә ятҡанын белде, ти. Шунан ул үҙе лә хат яҙып, суҡ турғайҙың аяғына бәйләне лә, үҙәге өҙөлгәндә ҡабыр тип, биш-алты бөртөк булһа ла бауырһаҡ тағып ебәрҙе, ти.

Суҡ турғай ике арала йомошсо булып, көнөнә өс-дүрт тапҡыр килеп-китеп йөрөнө, ти.

Ҡуҙыйкүрпәстән айырылып тороп ҡалыуға өсөнсө көн тигәндә, иртә менән, Маянһылыуҙың янына Ҡутыр башлы ҡолтор таҙҙың бисәһе инеп, уның башын ҡараған булып ултыра ине, ти. Маянһылыу уның итәгендә йоҡлап китте, ти. Шул саҡ тәҙрәнән теге суҡ турғай килеп инеп, Маянһылыуҙың иңбашына ҡунды, ти. Таҙҙың һайыҫҡандан һаҡ, төлкөнән хәйләкәр бисәһе, был ҡош, моғайын, Ҡуҙыйкүрпәстәндер әле, тип уйланы ла суҡ турғайҙы тотоп алып: «Ҡуҙыйкүрпәс ҡайҙа? Әйт, йәнеңде алмаҫ борон!» — тип, турғайҙың йөнөн йолҡа башланы, ти. Эй йолҡа, эй йолҡа, ти, ҡәһәр һуҡҡыры бисә, ә турғай шымған да, тауыш-тын да сығармай, ти. Йолҡколай торғас, турғайҙың башында бары бер генә суҡ йөн тороп ҡалды, ти. Һайыҫҡандан һаҡ, төлкөнән хәйләкәр теге бисә шул суҡ йөндө йолҡоп алғайны, бахыр турғай: «Суҡ, суҡ...» — тип ике тапҡыр ғына ҡысҡырҙы ла йән бирҙе, ти, мәхлүгең.

Маянһылыу ҡоштоң суҡ-суҡ тигән тауышына уянып китте лә:

— Харап ҡына иттең ҡошто! — тип ҡысҡырып ебәрҙе, ти. Шул ерҙә Ҡутыр башлы ҡолтор таҙҙың һайыҫҡандан һаҡ, төлкөнән хәйләкәр бисәһе, тышҡа йүгереп сығып, бөтә саңдауға:

— Ҡуҙыйкүрпәс Суҡ буйында ята икән, шунда барығыҙ! — тип оран һалды, ти.

Күсәр хандың иң ышаныслы кешеләре, был хәбәрҙе ишеткәс тә, шунда уҡ ат менеп, Суҡ күле буйына киттеләр, ти.

Ҡуҙыйкүрпәстең янына, беренсе булып, Маянһылыуҙың ике ағаһы килеп етте, ти. Беренсе ағаһы ҡылысы менән Ҡуҙыйкүрпәскә сабайым, тип һелтәнгәйне, Ҡуҙыйкүрпәс айырата бер таһыллыҡ менән уның ҡылысын ҡулынан ҡайырып алды ла урталай һындырып ташланы, ти. Шунан уға, минән бүләк булһын тип, атаһынан ҡалған ҡырма бүркен бирҙе, ти. Маянһылыуҙың икенсе ағаһы, Ҡуҙыйкүрпәс менән алышыуҙың файҙаһыҙ булырын һиҙенеп, ҡылысын уға үҙе үк килтереп тотторҙо, ти. Ҡуҙыйкүрпәс Маянһылыуҙың был ағаһына, минән бүләк булһын тип, атаһынан ҡалған айбалтаһын бирҙе, ти. Маянһылыуға минән иҫтәлек итеп бир тип, көмөш көҙгөһөн тотторҙо, ти.

«Был бик ирмәк кеше икән дә баһа» — тип, Маянһылыуҙың ағалары аттарын менеп, ҡайтып киттеләр, ти.

Көн ауышыуға өс тәүлек тулып, күл эсендә һауыҡтырылырға

ҡуйылған Күк толпарҙың яраһы уңалырға тейеш ине, ти. Ҡуҙыйкүрпәс шуны күтәп, атаһынан ҡалған ҡама тунын кейҙе лә, билен көмөш ҡәмәре менән быуҙы ла, әҙерәк серем итеп алайым әле, тип, тирәк төбөнә ятты, ти. Ул шунда йоҡлап китте, ти. Ни өсөн тиһәң, төнөн Маянһылыу хаҡында уйланып үткәргәнлектән, ул таң һарғайғанға тиклем керпек тә ҡаҡмағайны, ти.

Маянһылыуҙың икенсе ағаһы уға Ҡуҙыйкүрпәс иҫтәлек итеп биргән баяғы көмөш көҙгөнө килтереп тапшырҙы, ти. Маянһылыу быға бик шатланып, ағаһына ҙур рәхмәттәр әйтеп, көҙгөнө ҡулына алып ҡарағайны: «Аһ, һәләк иткән Ҡуҙыйкүрпәскәйемде!» тип, бөтөнләй иҫһеҙ булып йығылды, ти. Ни өсөн тиһәң, көҙгөлә бөтәһе лә асыҡ күренеп тора ине, ти: Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ Ҡараҡол, боҫоп ҡына суҡ тирәк янына барған да, шунда моңайып ултырған Ҡуҙыйкүрпәсте бысаҡ менән сәнсеп үлтергән, ә хәҙер ул Ҡуҙыйкүрпәстең ҡәмәрен сисеп, ҡама тунын һалдырып тора ине, ти. Суҡ тирәк яны тып-тын, бер кем дә юҡ, тик тирәк башында бер ҡарға менән бер һайыҫҡан ғына Ҡутыр башлы ҡолтор таҙҙың тиҙерәк китеүен көтөп ултыра ине, ти...

Маянһылыу, иҫенә килеп, был фажиғәле хәлде атаһына йүгереп барып әйтте лә, уның яуабын да көтмәй, ат менеп, Ҡуҙыйкүрпәс үлеп ятҡан ергә сабып сығып китте, ти. Уның артынан уҡ, ике улын эйәртеп, Күсәр хан үҙе лә йүнәлде, ти.

Маянһылыу килеп еткәндә, Ҡуҙыйкүрпәс, тап көҙгөлә күренгәнсә, суҡ тирәк төбөндә үлеп ята ине, ти. Уның янында суҡ тирәкле күлдән яңы ғына һауығып сыҡҡан Күк толпары башын һалындырып, ике күҙенән мөлдөрәтеп йәш ҡойоп, шым ғына тора ине, ти. Ҡулына Ҡуҙыйкүрпәстең ҡама туны менән көмөш ҡәмәрен тотҡан Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ атына атланып китә алмай аҙаплана ине, ти — атҡа атланырға ғына тигәндә, Күк толпар уның аяғын тешләп, тартып төшөрөп тора икән, ти.

Маянһылыу, Ҡуҙыйкүрпәстең күкрәгенә ятып иланы ла иланы, ти; илай-илай күҙҙәре шешенеп бөттө, ти. Ә Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ эстән генә: «Үҙ теләгемә ирештем, хәҙер инде минән китеп, әллә ҡайҙа бара алмаҫһың, һайыҫҡандан һаҡ, төлкөнән хәйләкәр ҡарт ҡатыным өҫтөнән үҙеңде йәш бисә итеп алырға күп ҡалманы инде», — тип уйланы, ти.

Ҡыҙы артынан сабып килеп еткән Күсәр хан, Маянһылыуҙы йыуатырға тырышып:

— Үҙеңде үҙең бөтөрөп, ул тиклем ҡайғырма инде, ҡыҙым! Булған эш булған инде, Ҡуҙыйкүрпәстән дә артыҡ егеттәр табылыр...

> Илдән илгә йөрөйөм, балам,
> Ил ғәриптәре булайым, балам,
> Ҡуҙыйкүрпәс кеүек егетте табайым, балам,
> Табып алып ҡайтайым, балам, —

тине, ти.

Маянһылыу атаһына һамаҡлап, ошолай тип әйтте, ти:

> Илдән илгә йөрөһәң дә, атай,
> Ил ғәриптәре булһаң да, атай,

Ҡуҙыйкүрпәс кеүек аҫыл егетте
Таба алмаҫһың, атай. Табып ҡайтһаң да —
Ҡуҙыйкүрпәс була алмаҫ, атай.

Суҡ буйында үҫкән суҡ тирәктең
Япраҡтары, атай, киң булмаҫ.
Кемде генә эҙләп тапһаң да һин,
Ҡуҙыйкүрпәсемә, атай, тиң булмаҫ.

Шунан Маянһылыу Ҡутыр башлы ҡолтор таҙға ҡарап:

— Бигерәк тамағым кипте, күлдән әҙ генә һыу алып бирер инең, — тип әйтте, ти.

«Әһә, үҙе үк башлап өндәште, эш йәйланырға тора былай булғас», — тип уйланы, ти, Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ. Шунан уның, Маянһылыуға ярамһаҡланып, күл ситенә барып, һыу алырға әйелеүе булды — Маянһылыуҙың: «Ҡуҙыйкүрпәстең ҡоно бына шул булыр!» — тип, арҡаһына бысаҡ менән үлтерә сәнсеүе булды, ти.

Маянһылыу суҡ тирәк янына кире барып, түшенән Ҡуҙыйкүрпәскә тип әҙерләнгән сигеүле аҡ ҡулъяулығын алып, шуға Ҡуҙыйкүрпәс ҡаны менән Ҡуҙыйкүрпәс тип, үҙ ҡаны менән Маянһылыу тип яҙҙы ла яулыҡты Ҡуҙыйкүрпәстең ҡама туны кеҫәһенә тыҡты, ти. Шунан ҡама тун менән көмөш ҡәмәрҙе Күк толпарҙын эйәренә бәйләне, Ҡуҙыйкүрпәстең ҡылысын да шунда тағып ҡуйҙы, ти. Бөтәһе лә әҙер булғас, Маянһылыу Ҡуҙыйкүрпәс кеҫәһендәге өс ҡылды Күк толпарҙың ялына ҡушып, башынан һөйөп һыйпағайны, Күк толпар шунда уҡ күҙҙән юғалды — Урал тауы буйына, Ҡуҙыйкүрпәстең әсәһе йортона ҡайтып китте, ти.

Күсәр хан, уның ике улы, йыйылған халыҡ әле Күк толпарға, әле суҡ тирәк төбөндә ятҡан Ҡуҙыйкүрпәскә, әле күл ситендәге Ҡутыр башлы ҡолтор таҙға ҡарап, ни эшләргә белмәй, ҡатып торған арала, Маянһылыу суҡ тирәк төбөнә килде лә, үҙ йөрәгенә үҙе бысаҡ менән сәнсеп, Ҡуҙыйкүрпәс күкрәгенә йығылды, ти.

Берен-бере өҙөлөп һөйөп тә бергә йәшәргә насип булмаған Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыуҙың ғүмере ана шулай бөттө, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыуҙы шул ҙур күл буйындағы суҡ тирәк төбөнә, икеһен бер ҡәбергә, күмделәр, Ҡутыр башлы ҡолтор таҙҙы күлдең теге яҡ ситенә сығарып күмделәр, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу ҡәбере өҫтөнә ике алма ағасы, Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ ҡәбере өҫтөнә дегәнәк үҫеп сыҡты, ти. Был дегәнәк күл аша сығып, Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу ҡәбере өҫтөнә үҫкән алма ағасына килеп сырмалды, ти. Елле көндәрҙә, алма ағасы һелкенгәндә, дегәнәк алмаларҙы өйкәй-өйкәй, уларҙың ҡанлы һуттарын ағыҙып тора башланы, ти. Ана шул алмаларҙан тамған ҡанлы һуттан ике ҡош яралып, алма ағасы башына ике оя яһанылар, ти. Алма ағасын сырмаған дегәнәктән ике ҡарға сығып, теге ике ҡоштоң ояларын туҙҙыра башланылар, ти. Шул ваҡыт ике алма-ҡош, асыуҙары килеп, был ике дегәнәк-ҡарғаны суҡып үлтерҙеләр ҙә ҡаңғылдашып осоп киттеләр, ти.

Хәҙерге аҡҡоштар ана шул алма-ҡоштан ҡалған икән, ти.

## ҠУҘЫЙКҮРПӘС МЕНӘН МАЯНҺЫЛЫУ

*(Беренсе вариант)*

Был яҡтарҙа борон ике хан йәшәгән. Береһе Алаборһан исемле, икенсеһе Ҡараборһан исемле булған, ти. Былар бик дуҫ йәшәгәндәр, бергә һунарға сығып йөрөгәндәр, ти.

Икеһенең дә ҡатыны гоманлы булған икән. Шулай бер саҡ ике дуҫ бик алыҫ далаға һунарға киткәндәр. Йөрөгәндәр, йөрөгәндәр былар, тамаҡ ялғарға ултырғандар. Ашап-эсеп алғандар, шунан, һүҙ ара һүҙ сығып, ҡатындарын иҫкә алғандар ҙа һүҙ ҡуйышҡандар.

— Беребеҙҙең ир бала булып, беребеҙҙең ҡыҙ бала булһа, бер-береһен ҡауыштырып, ҡоҙа булышып донъя көтөрбөҙ, — тиешкәндәр.

Былар ҡайтыуға икеһенең дә өйөндә кендек әбей йөрөп ята, ти. Алаборһандың ҡаршыһына ир бала күтәреп сыҡҡан. Ҡараборһандың ҡаршыһына ҡыҙ бала күтәреп сыҡҡан, ти, әбей. Теләктәре ҡабул булғанға былар икеһе лә бик шатланған. Малайға Ҡуҙыйкүрпәс тип исем ҡушҡандар, ҡыҙға Маян тип исем биргәндәр. Был балалар ҙа икеһе бергә уйнап үҫә башлағандар.

Шулай яҡшы ғына ғүмер итеп ятҡанда, Алаборһан ауырып үлеп китә. Ҡуҙыйкүрпәс етем ҡала. Ул арала булмай, Ҡараборһандың йәйләүенә килгән-киткән күбәйеп китә. Маянды күҙәтеп, атаһын әүрәтеп йөрөйҙәр. Шул тирәлә тағы бер данлыҡлы бай йәйләүе була. Шуның улына Маянды алмаҡ булалар, Ҡараборһан ҡыйын хәлдә ҡала. Тота ла был йәйләүен ташлап китергә була. Инде атаһыҙ ҡалған Ҡуҙыйкүрпәскә ҡыҙын бирергә теләмәй был.

Берҙән-бер көндө Ҡараборһан йәйләүен ташлап, күтәрелеп алыҫҡа күсеп китә.

Байтаҡ ваҡыт үтә, Ҡуҙыйкүрпәс әсәһе ҡулында тәрбиәләнеп үҫеп буйға етә. Унда-бында һуғылып йөрөй бирә был. Бер саҡ бының еңгәһе:

— Нимә, һанъяуланып, унда-бында һуғылып йөрөйһөң? Бар әйттереүең янына кит, — ти.

— Минең әйттереүем бармы ни?

— Бар.

— Ҡайҙа һуң ул?

— Ҡайт та әсәйеңдән һора.

Ҡуҙыйкүрпәс ҡайтып әсәһенән һорай. Әсәһе ҡапыл үҙгәреп китә. Шулай ҙа әйтмәй, улы ташлап сығып китер тип ҡурҡа.

Шунан Ҡуҙыйкүрпәс еңгәһенә тағы килә.

— Ҡайҙа һуң ул минең әйттереүем?

— Әсәйеңдән һора, — ти еңгәһе.

— Әсәйем әйтмәне, — ти Ҡуҙыйкүрпәс.

— Һорай белмәгәнһеңдер, — ти еңгәһе. Шунан һамаҡлап алып, былай ти:

Күрпәс тә Күрпәс, Ҡуҙыйкүрпәс,
Еткәндә егет булғанһың, ти.
Ҡурмас та ҡурмас, ҡыҙыу ҡурмас
Ашар ҙа егет булғанһың, ти.

Күрпәс тә Күрпәс, Ҡуҙыйкүрпәс,
Әйттереүең күрмәй, йән тынмаҫ.
Ҡурмас та ҡурмас, ҡыҙыу ҡурмас
Ашаған да егет хур булмаҫ.

Күрпәс тә Күрпәс, Ҡуҙыйкүрпәс,
Әйттереүең алыҫ юл булмаҫ.
Ҡурмас та ҡурмас, ҡыҙыу ҡурмас
Ашамаһаң, юлың уң булмаҫ.

Күрпәс тә Күрпәс, Ҡуҙыйкүрпәс,
Әйттереүле ҡыҙың табырһың.
Ҡурмас та ҡурмас, ҡыҙыу ҡурмас
Инәйең ҡулынан алырһың.

Шунан Ҡуҙыйкүрпәс әсәһенә ҡайтып:

— Әсәй, миңә ҡурмас ҡурып бир, — тип әйтте, ти.

Әсәһе ҡурмас ҡурып Ҡуҙыйкүрпәстең алдына килтереп ҡуйғайны, улы: «Юҡ, әсәй, ҡурмасты миңә услап бир», — ти. Шунан әсәһе ҡыҙыу ҡурмасты услап алып биреп ятҡанда, Ҡуҙыйкүрпәс әсәһенең ике ҡулын ҡыҫып:

— Минең әйттереүем бармы? Әйт, — тип һораны, ти. Әсәһе, ҡулы бешеүенә түҙә алмай, һөйләп бирҙе, ти:

Әйттереүең бар ине, балам,
Исемдәре булғандыр Маян,
Алыҫ ерҙәргә киткәндер Маян.
Күңелдәреңде ярһытма, балам,
Йөрәккәйеңде юҡһытма, балам,
Әсәкәйеңде кәмһетмә, балам,
Һүҙкәйемде ят һуҡма, балам,
Алыҫ ерҙәргә киткәндер Маян.
Ҡараборһандың түрендә Маян,
Ҡара юрғаның биләндә Маян,

Ҡара йылғаның буйында Маян,
Ҡыҙҙар янында уйында Маян.

Шулай ҙа Ҡуҙыйкүрпәс әсәһенең һүҙенә ҡолаҡ һалмай, һаман да Маян тураһында хыялланып, китергә әҙерләнеп йөрөй. Әсәһе тағы улына:

— Өйөр ҙә өйөр йылҡың ҡала,
Уны кемгә ташлайһың, балам,
Кемгә ташлайһың, балам?
Көтөү ҙә көтөү малың ҡала,
Уны кемгә ташлайһың, балам,
Кемгә ташлайһың, балам?

Ҡуҙыйкүрпәс:

— Өйөр ҙә өйөр йылҡыларымды
Ялбай алһын, әсәй,
Ялбай алһын, әсәй.
Көтөү ҙә көтөү малдарымды
Малбай алһын, әсәй,
Малбай алһын, әсәй.
Мал кәрәкмәй миңә,
Маян кәрәк, әсәй,
Күңелкәйемде ярһыткан
Әйттереүем кәрәк, әсәй.

Әсәһе:

— Сәстәрем сәселһә, ҡара урман булыр,
Уны ҡалай үтерһең, балам,
Күҙ йәшем түкһәм, күк даръя булыр,
Уны ҡалай кисерһең, балам,
Ҡалай кисерһең, балам?

Ҡуҙыйкүрпәс:

— Сәселгән сәсең ҡара урман булһа,
Ҡырҡып үтермен, әсәй,
Ҡырҡып үтермен, әсәй.
Күҙ йәштәреңдән даръя тыуһа,
Йөҙөп кисермен, әсәй,
Йөҙөп кисермен, әсәй.

Әсәһе:

— Ҡара урман эсе ҡараңғы булыр,
Уны ҡалай үтерһең, балам,
Ҡалай үтерһең, балам?
Даръя өҫтө тулҡын булыр,
Уны ҡалай кисерһең, балам,
Ҡалай кисерһең, балам?

Ҡуҙыйкүрпәс:

— Ҡара урман эсе ҡараңғы булһа,
Ҡарамай үтермен, әсәй,
Ҡарамай үтермен, әсәй.
Даръя өҫтө тулкын булһа,
Сумып сығырмын, әсәй,
Сумып сығырмын, әсәй.

Әсәһе:

— Ете елпенеп бер тибәм бөркөт сығыр,
Унан ҡалай ҡотолорһоң, балам,
Ҡалай ҡотолорһоң, балам?
Ете ҡабып бер йотам бүре килеп,
Унан ҡалай ҡотолорһоң, балам,
Ҡалай ҡотолорһоң, балам?

Ҡуҙыйкүрпәс:

— Ете елпенеп бер тибәм бөркөт сыҡһа,
Уҡ менән атып төшөрәм, әсәй,
Атып төшөрәм, әсәй.
Ете ҡабып бер йотам бүре сыҡһа,
Ҡул мән һуғып үлтерәм, әсәй,
Һуғып үлтерәм, әсәй.

Әсәһе:

— Ике күҙем нурын ялҡын итермен,
Унан нисек үтерһең, балам,
Нисек үтерһең, балам?
Имсәк һөтөм аҡ даръя итермен,
Унан нисек кисерһең, балам,
Нисек кисерһең, балам?

Ҡуҙыйкүрпәс:

— Ике күҙ нурың ялҡын итһәң,
Яна-яна үтермен, әсәй,
Яна-яна үтермен, әсәй.
Имсәк һөтөң аҡ даръя итһәң,
Аяғым һалмай осоп үтермен, әсәй,
Осоп үтермен, әсәй.

Әсәһе бер ни ҙә эшләй алмай, Ҡуҙыйкүрпәс алған ниәтен ҡуймай. Маянды хәҙер һис күңеленән сығармай, китер өсөн ат һайламаҡ булып, йылҡы өйөрө янына килә.

Йылҡы көтөүсеһе быға:
— Йүгәненде шалтырат,
Ҡайһы боролоп ҡараһа, шуны тот, — ти.

Ҡуҙыйкүрпәс килә, йүгәнен шалтырата, бер ат боролоп ҡарай. Тотоп ала ла был, яйҙаҡ ҡына атлана, аттың биле һығылып китә. Ҡуҙыйкүрпәс атты ташлай ҙа көтөүсегә килеп кәңәш һорай.

Көтөүсе:

— Йүгәнеңде шалтырат,
Тамағыңды ғылтырат,
Ҡайһы боролоп ҡараһа, шуны тоторһоң, — ти.

Ҡуҙыйкүрпәс тағы килеп йүгәнен шалтырата ла тамағын ҡыра. Бер ат боролоп ҡарай, ҡаршы барып тотоп ала ла, әлегесә яйҙаҡ ҡына менә. Аттың биле түҙә, тартып ебәрһә, муйыны ҡайырылып китә. Быныһын да ташлай ҙа тағы көтөүсе янына килә:

— Был ат ярамай миңә, муйыны йомшаҡ, — ти.

Көтөүсе:

— Йүгәнеңде шалтырат,
Тамағыңды ғылтырат,
Табаныңды ялтырат,
Ҡайһы боролоп ҡараһа, шуныһын мен, — ти.

Ҡуҙыйкүрпәс өйөргә килә. Йүгәнен шалтырата, тамағын ғылтырата, бер ат боролоп ҡарай ҙа саптырып китә. Ҡуҙыйкүрпәс табанын ялтыратып уны ҡыуып етә лә һикереп менә, йәйләүҙе елеп әйләнеп сыға ла ат Ҡуҙыйкүрпәсте алып китә.

Эй, китәләр, былар, эй китәләр. Бер аҙ барғас, ҡалын ҡара урманға тап булалар. Әсәһе Ҡуҙыйкүрпәс алдына сәсен сәсеп ебәргән була.

Шул саҡ былың аты телгә килә лә:

Ҡамсың алып бер һелтә,
Уң яғыңа бер һелтә,
Һул яғыңа ике һелтә, —

ти.

Ҡуҙыйкүрпәс ҡамсыһын алып уңға бер һелтәне, ти, һулға ике һелтәне, ти, урман эсеп ярылып китте, юл һуҙылды. Ат алып китте, урман аша сыҡтылар.

Китеп баралар, китеп баралар. Бара торғас, былар киң күк даръяға килеп сығалар. Был Ҡуҙыйкүрпәстең әсәһе улы ҡайғыһынан күҙ йәшен түгеп яһаған даръя булып сыға. Шул саҡ Ҡуҙыйкүрпәстең аты тағы телгә килеп:

— Ошо даръяның һыуы менән үҙең дә йыуын, мине лә йыуындыр, — ти. Ҡуҙыйкүрпәс даръя һыуы менән йыуына, атын да йыуа. Шунан аты: «Ҡамсың менән юл яр», — ти. Ҡуҙыйкүрпәс ҡамсыһын буйлатып даръяға һала — юл була. Атын менә лә даръяны кисеп сығып китә.

Баралар былар, баралар, бара торғас, килеп сығалар бер далаға. Ҡараһа, Ҡуҙыйкүрпәстең башы тирәләй ана тибәм, бына тибәм тип, әлеге ете елпенеп бер тибәм бөркөт осоп йөрөй, ти. Шунда аты телгә килеп:

— Инде килеп тибәм тигән саҡта ғына түшенә ат, — ти.

Ҡуҙыйкүрпәс уғын тоҫҡап, бөркөт инде тибәм тигән саҡта ғына түшенә атып ебәрә. Бөркөт кәйелеп-кәйелеп килеп төшә.

Ҡиттеләр былар, һаман баралар. Бара торғас, ҡараһалар, арттарынан әлеге ете ҡабып бер йотам бүре килә. Аты тағы телгә килеп: «Инде йотам тигән саҡта ғына тамағына тоҫҡап ат», — ти.

Ҡуҙыйкүрпәс, ете ҡабып бер йотам бүре инде йотам тип ауыҙын асҡан сағында ғына, уғын тоҫҡап атып ебәрә. Бүре әйләнеп барып төшә.

Баралар былар, һаман баралар. Барһалар, ни күрһендәр, бөтә донъяны ут баҫҡан, ти. Әлеге аты телгә килеп:

— Минең уң яҡ ботома асырғанып һуҡ, икенсе яҡ ботомдан сәсрәп ҡан сыҡһын.

Ҡуҙыйкүрпәс, асырғанып, аттың уң яҡ ботона һуға, һул яҡ ботонан сәсрәп ҡан бәреп сыға. Ат алып китә. Былар уттан ҡотолалар.

Баралар былар, баралар. Шунан, бара торғас, бер ап-аҡ даръяға тап булалар. «Әсәйемдең имсәк һөтө», — тип уйлап ала Ҡуҙыйкүрпәс. «Ҡалай итеп бысратмай үтеп китергә инде?» Шул саҡ аты тағы телгә килә:

— Минең һул яҡ ботома асырғанып һуҡ, уң яғымдан сәсрәп ҡан сыҡһын! — ти.

Ҡуҙыйкүрпәс аттың һул яғына асырғанып һуға. Ат һикереп ебәрә. Даръя аша осоп сығалар. Инде сығып еткәндә генә артҡы аяғының береһе даръяға тейеп ҡала. Ни өсөн тиһәң, Ҡуҙыйкүрпәс атына еткереп һуҡмаған була. Шунан һуң инде аттың бәкәле аҡ булып ҡалған, ти.

Ҡитәләр былар, китәләр, бара торғас, бер көтөүсегә дәл* булалар.

— Был кем көтөүе? — тип һорай Ҡуҙыйкүрпәс.

— Ҡараборһан көтөүе, — ти көтөүсе.

Ҡитәләр былар, тағы китәләр, тағы бер көтөүгә осрайҙар.

— Ҡем көтөүе был? — тип һорай Ҡуҙыйкүрпәс.

— Ҡараборһан көтөүе, — ти көтөүсе.

Ҡитәләр былар, тағы китәләр. Шунан һуң өсөнсөһөнә, ҡуй көтөүенә тап булалар.

— Был кем көтөүе? — тип һорай Ҡуҙыйкүрпәс.

— Ҡараборһандың Маян исемле ҡыҙына исемләнгән көтөү, — ти көтөүсе.

Шунда Ҡуҙыйкүрпәс туҡтала. Бер аҙ ултырып, һөйләшеп, хәл-әхүәл һорашып ала. Шунан Ҡараборһан алдына килеп ошо көтөүгә яллана. Маян менән бер йәйләүҙә йәшәй башлай.

Маяндың хәленә килһәң, ул атаһы дәл иткән сыбар-ала тайына менеп, йәйләү ҡыҙҙары менән сыр-сыу килеп, ҡыуышып уйнап ғүмер итә икән. Үҙенең әйтеүле ҡыҙ икәнен дә белә икән. Ҡуҙыйкүр-

пәсте төштәрендә күреп һаташып көтә икән, бер көн килер әле тип өмөт итә икән.

Ҡуҙыйкүрпәс был йәйләүҙә бер аҙ ғүмер йәшәгәс, быға ышанып ҡарай башлайҙар. Шунан берҙән-бер көндө был көтөүенән бер ҡуйҙы ала ла, Маяндың тирмәһенә ебәрә. Ҡуй тирмә алдына килә лә баҡыра, килә лә баҡыра.

Маян бер ҙә ҡарамай. Икенсе көн Ҡуҙыйкүрпәс был ҡуйҙы тағы ебәрә. Ҡуй Маян тирмәһе эргәһенә килә лә баҡыра ла баҡыра, ти. Маян һаман быны иҫенә алмай. Өсөнсө көн Ҡуҙыйкүрпәс әлеге ҡуйҙы тағы ебәрә. Ҡуй Маян тирмәһенең ишеге төбөнә килеп, аяғы менән тырнанып, тағы баҡырырға тотона. Маян асыуланып килеп ҡуйҙың осаһына һуға. Шул саҡ уға бер тауыш килә:

Сыҡһаңсы, Маян,
Сыҡһаңсы, Маян,
Сығып тирмәңдән,
Баҡһаңсы, Маян!
Сыбар-ала тайың
Уралған, Маян,
Сыҡһаңсы, Маян,
Сыбар-ала тайыңды
Баҡһаңсы, Маян!

Маяндың күңеленә шик төшә. Был хәҙер һиҙеп ала, Ҡуҙыйкүрпәс килгәненә төшөнә. Тирмәһенән сыға, был ике йәш йөрәк осрашып танышалар ҙа Маяндың тирмәһенә инеп юҡ булалар.

Маяндың һайыҫҡандан һиҙгер еңгәһе бар икән. Иртән был эште һиҙеп ала ла, Маян тирмәһенә килеп әйтә:

Торһаңсы, Маян,
Торһаңсы, Маян,
Таң һарылары
Еткәнсе, Маян!

Маян өндәшмәй. Еңгәһе тағы ҡабатлай:

Торһаңсы, Маян,
Торһаңсы, Маян,
Таң һарылары
Еткәнсе, Маян,
Уяныр сағың
Үткәнсе, Маян!

Шунан Маян:

Тормайым, еңгәм, тормайым, еңгәм,
Таң һарылары етһә лә, еңгәм,
Тормайым, еңгәм, тормайым, еңгәм.
Таң һарылары бер ни ҙә түгел.
Күкрәгемдәге йәнем сыҡһа ла, еңгәм,

Таң һарылары етһә лә еңгәм,
Тормайым еңгәм, тормайым, еңгәм.

Еңгәһе быны ишеткәс, Маяндың атаһына барып әйтә.

Ҡараборһан тамам аптырап ҡала, яҡындарын йыйып кәңәш итә. Шунан былар хәйлә ҡоралар. Туй үткәргән булып, Ҡуҙыйкүрпәсте иҫертеп юҡ итергә булалар.

Ҡараборһан туғыҙ сапсаҡ бал ҡойҙора, туғыҙ ҡуй һуйҙыра, туй яһай. Туйға килгән Маян Ҡуҙыйкүрпәскә:

Туғыҙ сүгәтә бал бирерҙәр, эсмә, йәнем,
Туғыҙ һөйәк ит бирерҙәр, еймә, йәнем.

Туйға килгәс, Ҡуҙыйкүрпәс Маяндың был һүҙенә ҡолаҡ һалмай. Ҡойоп биргән балдың барыһын эсеп тик ултыра.

Шунан Ҡуҙыйкүрпәстең хәлен күреп, Маян, тороп битенә яулығын һирпеп, былай ти:

Туғыҙ сүгәтә бал бирҙеләр,
Ниңә эстең, егетем?
Туғыҙ һөйәк ит бирҙеләр,
Ниңә ейҙең, егетем,
Ниңә ейҙең, егетем?
Аңҡы-туңҡы баҫыр булғас,
Ниңә килдең, егетем,
Ниңә килдең, егетем?

Шул саҡ Ҡуҙыйкүрпәс аяғына тороп баҫа ла бәйҙәге аттар янына килә. Килһә, был үҙенең атын танымай тора. Шул саҡ аты аҡ бәкәлле арт аяғын күтәрә, Ҡуҙыйкүрпәс быны күреп танып ала ла һикереп атына менә. Менеүе була, Ҡараборһандың сапҡындары тегене уратып та алалар. Ҡуҙыйкүрпәс атының биленә тибеп ебәрә лә елеп сығып китә. Уның артынан ҡыуып китәләр. Егет быларға ҡаршы һуғыша. Шул саҡта бер сапҡындың уғы тейеп ҡолап төшә.

Ҡараборһандың сапҡындары ҡайтып Ҡуҙыйкүрпәстең ҡолап төшөүен хәбәр итәләр. Был саҡ Маян, үҙ тирмәһенә ҡайтып, илап ултырған була. Шунан әлеге ҡуй тағы тирмә ишеге алдына килеп тырнанып баҡыра башлай. Маянға бер тауыш ишетелә:

Маян, нишләп ятаһың,
Маян, нишләп ятаһың?
Ҡуҙыйкүрпәсең йән бирә,
Ҡуҙыйкүрпәсең йән бирә!
Сыбар-ала тайың менһәңсе,
Егетеңде барып күрһәңсе!

Шунан Маян тирмәнән сығып, сыбар-ала тайын тотоп менеп китергә йөрөгәндә, атаһы саҡырып ала. Ҡыҙға:

Сыбар-ала тайынды менмәсе, балам,
Ир-зат ҡашына йөрмәсе, балам, —

ти.

Ҡыҙ:

Сыбар-ала атымды менәйем, атай,
Әйтеүле егетемде күрәйем, атай, —

тип яуап бирә.

Атаһы:

Илдән илдәргә йөрөрөм, балам,
Ил ғәриптәре булырмын, балам;
Илдә лә күркәмде табырмын, балам,
Ҡуҙыйкүрпәс тип атарым, балам.

Ҡыҙ:

Илдән илгә лә йөрөмәсе, атай,
Ил ғәриптәре булмасы, атай?
Илдәрҙә күркәм табылһа ла, атай,
Ҡуҙый ҙа кеүек үк булмаҫтыр, атай!

Шулай тип әйтә лә Маян, атын һикертеп, Ҡуҙыйкүрпәс янына китеп тә бара. Килһә, Ҡуҙыйкүрпәс үлергә ята икән. Ҡыҙ атынан төшөп ҡосаҡлап ала, Ҡуҙыйҙы сымылдыҡ эсенә алып инә лә күкрәгенә ятып илай. Ҡуҙыйкүрпәс йән бирә. Шунан һуң Маян күп уйлап тормай, унан башҡа минә тормош юҡ, тип, Ҡуҙыйҙың күкрәгенә ята ла үҙен-үҙе сәнсеп үлтерә.

Шул саҡ был ерҙән каруансылар үтеп бара икән. Ҡараборһан уларҙан юл хәлдәрен һорашҡан. Каруансылар:

— Күрмәгәнде һөйләү яҙыҡ булыр, белмәгәнде һөйләү ярамаҫ, килгәндә, беҙ төш күрҙек, бер аҡ сымылдыҡ күрҙек, шул сымылдыҡ эсендә ике ағуна ҡош күрҙек, — тиҙәр.

Шунан Ҡараборһан эште аңлап алған да, атын менеп, шул яҡҡа киткән. Килһә, ҡыҙы Маян күптән үлгән була. Уны Ҡуҙыйкүрпәс менән йәнәшә күмгәндәр.

Ҡараборһан:

— Икеһен йылғаның ике яғына сығарып күмегеҙ, — ти.

Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянды икеһен ике яҡ ярға сығарып күмәләр.

Күп тә үтмәй уларҙың икеһенең дә ҡәберенән ике ағас үҫеп сыҡҡан. Был ике ағас үҫә килә йылға аша бер-береһенә һуҙыла икән. Шунан бер саҡ килеп тоташҡандар ҙа, бер-береһенә һарылып, уралып үҫеп киткәндәр.



# ЗӨҺРӘ МЕНӘН АЛДАР

## БЕРЕНСЕ КИС[48]

Бала-сағa атаны ата тип белер, йәш-елкенсәк ҡарттарҙы ҡәҙер итер ине. Аҡһаҡалдар йыйындарҙа һүҙ һөйләр, кәңәш бирер булһа, һис кенә лә бүлдермәй, ауыҙын асып йотлоғоп тыңлар, ата-бабалар һүҙен күңеленә һеңдереп кенә ултырыр ине. Ни өсөн тиһәң, күп йылдар буйы йыйыла килгән тәжрибә ғилем урынын алып торор ине борон.

Ил ағаһы булыр ирҙәрҙе илгә баш итеп һайлар булһалар, был бер ҙә ыҙғыш, янъял тикшереп йөрөр өсөн эшләнмәй ине. Һайлап ҡуйған баштар ҙа яманатын сығармаç, үҙен түрҙә ултырған түрәгә һанамаç, бары тик килгән афәттән илде ҡурсалар: яу килгәндә, яу ҡайтарышыр, мал-тыуарға ҡош-ҡорт баçышһа, януар менән алышыр, ен-пәрейҙәр йөҙәтһә, улары менән дә көс һынашыр батыр булырҙар ине.

Үҙебеҙҙең боронғо ете ырыу йолаларын, ата-бабаларҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен, барын-юғын артыҡ тәфсирләп, ялҡытып ташламайым һеҙҙе тағы. Булмаһа, үҙебеҙҙең ата-бабанан ишетеп ҡалған боронғоно ғына баян ҡылайым.

Ҡартайған көнөндә шулай бала-сағаһыҙ ҡалыу, нәçел-ырыуың ҡороу бик аяныс икәнен үҙегеҙ ҙә беләһегеҙ инде. Бына шулай, оло йәшкә етеп, япа-яңғыҙ тороп ҡалған үҙебеҙҙең ырыу башҡорто Аллабирҙе атлы арҙаҡлы бер батырҙың күргәндәрен һөйләйем әле һеҙгә.

Был шулай, ир уртаһы етеп, мал-тыуарынан биһисап түл йәйҙереп, бәçле генә улъя туплап донъя көтөп ятҡанда, уйламағандан-көтмәгәндән башына бының ҙур ҡайғы төшә: күңеле ятҡан бисәһенән дә, етеп килгән өс улынан да яҙып, берҙән-бер көн япа-яңғыҙ тороп ҡала был. Ҡайғы-хәсрәттәренән һарыға һабышып, донъяһына ла ҡул һелтәп ҡуя. Мал-тыуарына күҙ-колаҡ булмағас, улары төрлө ҡош-ҡортҡа юлығып, бар йыйған улъяһы туҙа, бар тапҡан байлығы, әрәм-шәрәм килеп, кәмей башлай бының.

Күрше-күлән, дуç-иштәре быны тиҙерәк башлы-күҙле итергә уйлашып, бисәлеккә ҡыҙ-ҡырҡын димләй башлайҙар. Күпме генә өгөтләп-димләп ҡараһалар ҙа, был ылғый ытырғанып, серәшеп килә. Бер ҙә ыҡҡа килмәгәс, ахырҙа, үҙе лә миктәп-бирешеп китә.

Әгәр ҙә мәгәр шул мәлде изге пәйғәмбәребеҙярҙамға килергә ашыҡмаһа, ул шулай ҡайғы эсендә донъя ҡуйған булыр ине.

Көндәрҙән бер көндө шулай, иртәнге намаҙын бик тә ихлас уҡып алғас, бының күңеле иләҫләнеп, баш һуҡкан яҡҡа ҡырға сығып китһе килә. Башына ҡылт итеп шул уй төшөү була, тота ла атын эйәрләй һалып, сыға ла китә был. Атын үҙ яйына ғына ҡуйып, ашыҡтырмай ғына бара бирә. Хайуаның, үҙ иркенә ҡуйғас, башын эйеп кенә, ара-тирә үлән ялмаштырып атлай-атлай, хужаһын йәйләүҙән әллә ни алыҫ та алып китмәй китеүен.

Көн төшлөккә етеп, был шулай уйҙарынан айный алмай килгәндә, ҡолағына, сала-сарпы ғына булһа ла, ниндәйҙер ят бер тауыш салынып ҡала. Баш ҡалҡытып ҡараһа, бының күҙ алдында баштан-аяҡ ҡоралланған һыбайлы бер батыр пәйҙә була. Өҫтөнә кейгән, тимер күлдәге, шау көмөштән ҡойолғандай, күҙҙең яуын алып тора; башындағы торҡаһы* ла саф ҡоростан ғына икән; биленә көмөш ҡынлы кәкре ҡылыс таҡҡан; яурынына киреүле әҙернәйәйә, уҡ тулы ҡалъянын артҡан; ә уң ҡулына оҙон һөңгө тотоп алған, имеш. Атланған арғымағы ла торғаны бер мал тарпаны, эйәр-өпсөнө лә йылҡылдап торған фирүзә ҡашлы шау көмөштән генә нағышланған икән. Ҡартҡа был батыр сәләм биреп:

— Ҡайҙа юл тоттоң былай, Аллабирҙе? — тигән икән, ҡарт был ете ят[49] кешенең үҙ исемен әйтеп һүҙ ҡушыуына аптырап киткән. Шулай ҙа, тегенең сәләмен алып:

— Минең исемемде ҡайҙан беләһең? — тип һорай ҡуйған.

— Белмәгән ҡайҙа, — тигән теге ҡораллы батыр. — Исем-атыңды ғына түгел, мин һинең ҡайғы-хәсрәтең ниҙән икәнен дә шәйләйем. Бына һин минең буй-киәфәтемә абайлап ҡына баҡ та, инемдәге бөтә ҡорал-ҡорамалдарымды иҫеңә алып ҡуй, ҡасан да булһа бер күрерһең әле уларҙы. Ә хәҙергә яҡындағы берәй йәйләүгә атыңды бор ҙа үҙеңде күҙ-ҡаш менән көтөп торған ырыуҙаштарыңды күр; улар һиңә бер кәңәш бирерҙәр, шул кәңәште һин берүк, аяҡ аҫтына һалмай, ҡабул ҡыл. Был әйткән һүҙ һиңә хаҡ мосолмандар атаһының ҡушҡаны булыр, — тигән дә, атын ҡайыра һалып, атҡан уҡтай күҙҙән дә юғалған был юлаусы[50].

Аллабирҙе, ят кешенең был һүҙҙәрен ишетеп, шаҡ ҡатып ҡалған. «Был берәй әрүәхме тиһәм, үҙ күҙҙәрем менән күреп, үҙ ҡолаҡтарым менән ишетеп, ҡара-ҡаршы һөйләшеп торҙом да баһа!» — тип аптыраған. Ахырҙа: «Мөхәммәт ғалиәссәләм үҙе еткергән хаҡ тәғәләнең яҙғаны шулдыр, күрәһең», — тип, теге батыр киәфәтендәге юлаусының серле һүҙҙәрен ысынға уҡ юрап ҡуйған. Шунда уҡ, атынан төшә һалып, доғаһын ҡылған да теге әҙәм әйткән йәйләүгә ыңғайлаған был. Йәйләүгә етер-етмәҫтән, ҡарға тубындай, күп халыҡ йыйылып торғанын күргәс, былар, моғайын, берәй туйға-фәләнгә йыйынғандыр, тип ҡуйған эсенән. Йыйылған халыҡ быны күҙгә элеп алыу булған, бөтәһе бер юлы һөрәнләп тә ебәргән:

— Бына баш үҙе лә килә!..

Тәүҙә үк шуны әйтергә онотҡанмын: Аллабирҙе бер нисә ауылға баш итеп һайлап ҡуйылған батыр була. Шуға ла ул килеп етеү менән, көллөһө лә уға дәррәү ҡаршы сығып, атының башынан

алып, үҙен күтәреп үк төшөрәләр ҙә, ололоҡлап ҡуш мендәр өҫтөнә илтеп ултырталар. Ул бер сама баш-күҙ алып, өндәшмәй торғас, ахырҙа:

— Был ниндәй оло байрам тағы? — тип һораған. — Ҡаҙан-ҡаҙан иттәрегеҙ ҙә бешкән, турһыҡ-турһыҡ ҡымыҙығыҙ ҙа етешкән. Йәш-елкенсәк тә көрәшкә сәмләнеп, бәйгегә елкенеп йөрөй түгелме? Күңелгеҙҙең дә йөҙө яҡты, һүҙе татлы, тигәндәй, был ҡандайын ҡыуанысҡа булыр, ағай-эне, төшөндөрөп бирегеҙсе! Донъялыҡта үҙ ҡыуанысым ҡалмаһа ла, ил ҡыуанысы иргә уртаҡ! — тигәс, йыйындың иң оло ҡарттары Аллабирҙене ҡорға алып, йөгөнөклөп ултырышҡан. Аллабирҙенең ҡаршыһында ултырған ҡарт былай тип һүҙ башлаған.

## ИКЕНСЕ КИС

— Хуш күңелле ырыу башыбыҙ! Һинең инде тол ҡалып, бала-сағаһыҙ көн итеүеңә лә байтаҡ ғүмер үтеп китте, күпме һыуҙар аҡты ла күпме елдәр иҫте. Шулай ҙа һинең ҡайғынан баш ҡалҡытҡаныңды күргән көнөбөҙ юҡ. Һин беҙҙең менән һөйләшеүҙән ҡасаһың, табындарыбыҙҙы күрмәйһең, һый-туйҙарыбыҙға ла саҡырып килтереп булмай. Йәнлеккә йөрөмәйһең, беҙҙең менән һунарға ла сыҡмайһың. Әҙернәңдең кереше лә тартылмай, ҡулдан уғың да һыҙғырып осмай. Ҡалъяныңда ҡыҫҡма башлы уғың да ҡылтырамағас, тутығып ятып, һөңгөң дә йылтырамағас, елдәй атың да дала иңләп елмәй, бер бурҙайың Муйнаҡ та эйәһен белмәй. Бейәләрең дә, мәлендә һауылмай, һыуалып бөттө; үҙең дә ҡайғыңдан арына алмайһың. Былай һин үҙ әжәлеңде үҙең генә ашыҡтыраһың, ә илһүлде ҡурсыуһыҙ ҡалдырыуың бар. Беҙ бөгөн күллөбөҙ, беҙҙе элеккесә үҙ күреүең хаҡына, бөтә ҡайғы-хәсрәттәреңде онотоп, ил менән бергәләп донъя көтөргә теләһә ҡайһыбыҙҙың ҡыҙын һайлап алыуыңды хуш күрәбеҙ. Уларҙың матурлығы ла, батырлығы ла үҙеңә мәғлүм: сапһа, ат атланып сабырҙай, атһа, кирелеп уҡ атырҙай ҡыҙҙарыбыҙ бар. Һыу һөлөгөндәй шул һылыуҙар араһынан, исмаһам, берәүһенә күңелең ятмаҫлыҡмы?

Аллабирҙе:

— Дуҫ-иштәрем, ҡәрҙәштәрем! Әйткән һүҙҙәрегеҙ, биргән кәңәштәрегеҙ өсөн рәхмәт. Был уйығыҙҙы бер бөгөн генә лә әйтмәйһегеҙ инде. Кәңәштәрегеҙҙең файҙалы икәнен беләм. Тик, ил һүҙен аяҡ аҫтына йыға тип уйламағыҙ, мин инде олоғайғанмын, сырхауланғанмын. Тулған ай кеүек йәш ҡыҙҙар көҫәр сағым үткән инде, — тип ҡырт киҫкән.

— Улай булғас, — тигән уның эргәһендә ултырған бер аҡһаҡал, — мин һиңә ҡулай булырҙай берәүҙе беләм. Бала-сағағыҙ булмаған тәҡдирҙә лә, ул йәше менән дә, эше менән дә һиңә иш булырҙай бик тә намыҫлы, бик тә күркәм холоҡло, уттай уңған тол ҡатын. Үҙе беҙҙең ауылдарҙан ҡырҙа — Ирәндек* буйҙарында — көн итә. Зөһрәнең — уның исеме шулай — мал-тыуары ишле; үҙе япа-яңғыҙ булһа ла, көтөүҙәрен бер януар ҙа баҫалмай.

Аҡһаҡал уның исемен ҡабатлауы була, бөтә йыйын бер булып, күктән һөрәнләгәндәй, геү итеп ҡала.

— Раҫ һүҙ һөйләйһең, аҡһаҡал, раҫ!

— Уны беҙҙең дә күбебеҙ белә, күрмәгәндәребеҙ ишетеп белә. Ул беҙҙең Аллабирҙе башҡа иш булырлыҡ бисә! — тип геү килешәләр.

Ҡарттар Аллабирҙене йәнә ҡыҫмаҡлабыраҡ алып, Зөһрәне үҙенә иш итеүен йәнә ныҡышыбыраҡ һорай башлағас, ул, бахыр, ҡолаҡтарын баҫып, ни тип әйтергә лә белмәй, аптырап тора-тора ла, ахыр килеп, теге далала осраткан ят батырҙың әйткәнен иҫләп, быны раҫка сығыуын уйлап ҡуя. Шунан, бик серәшеп булһа ла, Зөһрәне бисәлеккә алырға ризалығын бирә.

Аҡһаҡалдар, булған халайыҡ, Аллабирҙенең ризалығына һөйөнөп, ялан халҡына хас уйын-көлкө, бәйге-көрәш башлап ебәрергә булалар.

Ҡарттар менән урта йәштәге ир-ат ҙур түңәрәк яһап ултырышҡас, йәш-елкенсәк көрәш башлап ебәрә. Батырға сыҡҡандарға бүләктәр өләшәләр. Артабан уҡтан мәрәйгә атышып, мәргәнлек һынашалар, ахырҙа, туйҙы аттан тартыш уйыны менән ослап ҡуялар. Бына, көрәшеүселәрҙең дә, мәргән уксыларҙың да, атта яҫкышыусыларҙың да ҡомары баҫылып, ҡарап ултырғандарҙың да танһыҡтары ҡанып, майҙан һил булып ҡалғас, хәл йыйып, тамаҡ ялғап алыр мәл дә етә. Табаҡ-туҫтаҡтарға аш-һыу өләшенеп, йәштәр ҡарттарға алдыр-алдыр ҡымыҙ яһап тарата башлайҙар. Аллабирҙегә, ин ҡәҙерле ҡунаҡ күреп, тәкә башы килтереп тотторалар, түш итенән ҡурҙаҡ та ҡуялар. Уның артынса табынға бишбармаҡ та өлгөртөп, бер-берееһенә ит һоғондорошоп, ҡоротлап һурпа эсеп һыйланғандан һуң, эңер төшкәс кенә, тирмәләргә таралышалар.

Зөһрәне маҡтап телгә алған әлеге арҙаҡлы ҡарт Йылҡыбай Аллабирҙене үҙ тирмәһенә алып ҡайта. Ҡарттың бала-сағаһы ла ишле, мал-тыуары ла күп икән. Уландары Аллабирҙене бик ҡәҙер итеп, аҫыл балаҫтар түшәп, яҫтыҡ-мендәрҙәр өйөп, йомшаҡ урын йәйәләр. Доға ҡылып, йоҡларға яткас та, Йылҡыбай һаман Зөһрәне маҡтап һайрай-һайрай, ахыр сиктә үҙен барып күрергә тип, быны иртәгә үк бергәләп юлға сығырға күндерә.

## ӨСӨНСӨ КИС

Иртәгеһен ҡунаҡты ла, хужаның үҙен дә айғыр-бейәләр кешнәп уята. Тәүҙә хужа үҙе тороп, тәһәрәт алырға һыу йылытып ҡуйырға ҡуша, унан ҡунаҡ та тора. Иртәнге намаҙҙы уҡып алғас та, Йылҡыбай былай тип һүҙ башлай:

— Беҙ юлланыр ер яҡын түгел, аттарҙың күндәме кәрәк булыр. Һин атланып килгән айғыр малы сыҙамаҫ, мин һиңә үҙемдең иң яҡшы атымды бирермен, айғырыңды өйөрөнә ҡайтарып ебәрһәң дә ярар[51], — ти ҙә уландарына өйөрҙән иң яҡшы ике ат тотоп әйәрләргә ҡуша. Былар шулай уҡ-һаҙаҡтарын аҫып, ҡылыстарын тағып, бер аҙ тамаҡ ялғарлыҡ аҙыҡ-маҙар артмаҡлап, аллаға тапшыралар ҙа юлға сығалар.

Йылҡыбай юлдашына ҡарап-ҡарап ала ла, уның һаман уйға батып, бик бойоҡ килгәнен күрә, күңелен асырға, албырғатырға ниәтләп, әле уның күрмәгән-белмәгән кәләше хаҡында һөйләмәксе була.

— Мин һиңә, Аллабирҙе дуҫҡай, буласаҡ кәләшендең яҡшы яҡтарын, хужалығын, мал-тыуарын һөйләгәйнем инде, хәҙер уның әкәмәт ҡыҙыҡ ғүмер итеүен дә һөйләп бирәйем үҙеңә. Ул бит үҙе күгәреп ятҡан бейек Ирәндек тауҙары араһында япа-яңғыҙ, бер кемдең дә ҡул ярҙамын күрмәй ғүмер итә. Малдарын да бер кем көтмәй, бейәләрен һауырға ла бер кем елегә* әйҙәп йөрөмәй, һауымы еткәс, тирмә эргәһенә үҙҙәре ҡайтып, үҙҙәре таралышып китә. Ирәндек буйы тулы ҡош-ҡорт та теймәй, ти, үҙҙәренә. Ул ғүмер иткән ергә беҙҙең батырҙар һирәк кенә барып етә. Мин уның йәйләүенә бер нисә йыл элек уйламаған ерҙән генә барып сыҡҡайным. Ул саҡ уның тол ҡалыуына ла бер йыл самаһы ғына булғандыр. Мин унда ике көн буйы ҡунаҡ булып, шул ике көнөндә лә биш ваҡыт намаҙын ҡалдырмауын үҙ күҙҙәрем менән күреп киттем. Аҙ ғына һөйләр ҙә, күберәк һине тыңлар, һүҙен башлар ҙа, шунда уҡ ослап та ҡуйыр ине. Аҙ һөйләһә лә, һүҙе күпте аңғартыр ине. Мин уға, былай яңғыҙ ғүмер итеүеңә иҫем-аҡылым китә, бәләҡазаға юлығып ҡуймаһаң ярар ине, тип, үҙенә берәй ауыл тирәһендәрәк төйәкләнергә кәңәш тә биреп ҡарағайным. Юҡ, мин бер низән дә, бер кемдән дә ҡурҡмайым, берәйһе баҫыша ҡалһа, үҙүҙемде, мал-тыуарымды ғына ҡурсырлыҡмын әле, берәүҙең дә ярҙамына мохтаж түгелмен, тине. Шунан башҡа бер ауыҙ һүҙ ҙә өндәшмәгәс, мин артығын төпсөнөп торорға ла ҡыйманым...

Йылҡыбай шулай бәйнә-бәйнә һүҙ тоҡсайын бүҫкәртә бирә, ә Аллабирҙе баш уны тыңлай-тыңлай, үҙенең буласаҡ ҡатынына аптырап, бөтә уйҙарының осона ла сыға алмай килә. Ул инде Зөһрәне яҙмыш яҙғандан ғына түгел, эстән генә эҫенә башлағандан да, торған һайын үҙ итә бара. Ара-тирә һорау биргеләп, һәр алған яуабына иҫе-аҡылы китеп, башын ғына сайҡап ҡуя. Күңеле, ни күрәһеләрем бар икән тағы, был ни менән барып бөтөр икән, тип болоҡһой...

Көн кискә һарҡып, дөм ҡара урман үткәүеленән үтеп барғанда, былар ҡапыл дәү бер болан елеп килгәнен шәйләп ҡалалар. Аллабирҙе, уҡ атыуҙа үҙенең элекке мәргәнлеген иҫләп, һаҙағынан күҙ асып йомғансы бер уғын һурып ала ла, әҙернәһенә һалып, атып та ебәрә; уҡ бөлдөргөһөнә тиклем* януарҙың ҡабырғаһы менән ҡалаҡ һөйәк араһына барып ҡаҙала. Болан, уҡ тейеүҙән үрә ҡарғып, ал бәкәлдәренә барып һөрлөгә. Шул арала Йылҡыбайҙың уғы ла уның муйынына барып ҡуна. Былар, аттарынан төшә һалып, доға ҡылалар ҙа боланды салып та ебәрәләр, унан тиреһен дә тунай башлайҙар. Шул мәл ҡолаҡтарына ниндәйҙер бер ят ҡош саңҡыған тауыш салынып ҡала. Ҡараһалар, баш остарында ғына яман дәү бер ҡош шыҡыйып йөрөй икән. Ҡанат-ҡауырыйҙары аҡ, ә үҙе сапсан бөркөт ҡиәфәтле, ти. Йылҡыбай ҡошҡа күҙ һирпеп ала ла:

— Ҡара әле, баш, был бит дәүләтле ҡош[52] булырға оҡшай ҙаһа. Ул, моғайын, беҙҙән ризыҡ һорайҙыр. Был боланды уға бирәйек. Бер кискә түҙербеҙ әле, — ти.

Аллабирҙе лә быға риза була, боланды урынында ҡалдырып, аттарына атланалар ҙа, бер талай ситкә китеп, был нишләр икән тип, ҡошто күҙәтеп торалар. Йылҡыбай яңылышмаған икән: улар саҡ ҡына китеү менән, ҡош болан түшкәһенә ҡуныл, уны ҡарһалаһып өҙгөләй ҙә башлай.

Аллабирҙе, башын сайҡап, аптырап тора ла:

— Бөтә әйткәндәрең раҫҡа сыҡты, дуҫҡай, инде алда ни булаһыларын ҡарап ҡарайыҡ, — тип ҡуя.

— Алда әле әллә ниҙәр күрәһеләребеҙ барҙыр. Алла ярҙам бирһә, уларынан да имен-аман ҡотолорбоҙ. Тик юлыбыҙҙың ахыры, һинең Зөһрәне йәрәшеп, ҡыуаныслы туйығыҙ менән бөтөргә генә яҙһын, — тип яҡшыға юрап ҡуйған Йылҡыбай.

Бара торғас, ҙур бер күл буйына килеп сығалар. Шунда ҡуналҡа яһап китмәксе булып, бер-ике өйрәк атып алалар ҙа, киске тамаҡҡа шуны бешереп, ашап, таң атҡансы ҡаты йоҡоға талалар.

## ДҮРТЕНСЕ КИС

Был ике дуҫты йоҡонан һыу ҡоштарының субырҙашыуы ғына уята. Торалар ҙа, яҡында ғына утлап йөрөгән аттарын эйәрләй һалып, ары юлланалар. Көн төшлөккә еткәнсе, шулай бер нигә лә юлыҡмай ғына баралар. Көн бик ҡыҙҙыра башлағас, берәй ағас күләгәһенә ятып, хәл йыйып алырға булалар. Юлдан ситкә ҡайырмаҡсы ғына итһәләр, былар өҫтөнә оло йәштәрҙәге бер әҙәм килеп сыға. Уң ҡулына оҙон таяҡ тотҡан, сырайы бик йонсоған күренә, үҙе ап-аҡ һаҡаллы, буй-һыны ҡаҡса, өҫтөнә оҙон йәшел елән кейгән, башына ап-аҡ сәллә ураған, биленә ниндәйҙер серле яҙыу нағышланған ҡәмәр ҙә быуып алған. Беҙҙең юламандар, уны күргәс тә, туҡтап ҡала, теге ҡарт, яҡынырак килеп, быларға сәләм бирә. Былар сәләмгә сәләм менән яуап ҡайтарғас, тағы ни әйтер икән, тип өндәшмәй генә тора бирәләр.

— Хаҡ мосолмандар икәнһегеҙ, ҡайҙа былай юл тотаһығыҙ? Был тарафтарға ниндәй елдәр ташланы һеҙҙе? — тип һораша башлаған ҡарт. — Был ерҙәрҙән иң көслө батырҙар ҙа мең бәлә менән генә үтеп сыға ала: ошо төпкөлгә уҫал януарҙарҙан башҡа яуыз енпәрейҙәр ҙә оялап алған. Бынан имен-аман ҡотолоп сығайыҡ тиһәгеҙ, алла ярҙам бирһен үҙегеҙгә, изге пәйғәмбәребеҙ юлдаш булһын. Һеҙҙе осратып кәңәш бирә алыуыма шатмын. Әйҙәгеҙ, минең арттан эйәрегеҙ, аласығым бынан әллә ни алыҫ түгел. Бынауындай селлә эҫеһендә үҙегеҙ ҙә, аттарығыҙ ҙа бер аҙ хәл алып китер.

Ҡарт шул һүҙҙәрен әйтә лә, үҙе алдан китә. Ул шулай яй ғына атлап барһа ла, һыбайлылар аттарын юрттырып та етешә алмайҙар быға. Ниндәйҙер ҡөҙрәт көсө быларҙы арҡан менән тарттырғандай; бер-береһенә бер ауыҙ һүҙ ҙә ҡуша алмай, ҡартҡа эйәреп китәләр. Урман эсләп байтаҡ ҡына ер барғас, ҡарт быларҙы тар

ғына һуҡмаҡҡа төшөрөп, ахырҙа, бер таш-тау егенә килтереп сығара. Яҡыныраҡ килһәләр, өңөрәйеп торған тау ҡыуышын күрәләр. Тау ҡыуышына етер-етмәҫтән, теге ҡарт быларҙы туҡтата ла, уң яҡта ҡуйы ҡыуаҡтар араһынан саҡ ҡына күренеп ятҡан бүтәгәләй күк үлән, шау сәскә менән ҡапланған ҡыҫыҡ ҡына аҡланға ымлап:

— Аттарығыҙҙың эйәрҙәрен һалдырып, ошо асыҡҡа ебәрегеҙ, ҡоралдарығыҙҙы ла шунда ҡалдырып, мәғәрә* ауыҙында мин сыҡҡанды көтөп тороғоҙ, — тип бойора.

Юламандар, ҡарттың һүҙен тыңлап, аттарын аҡланға алып сыкһалар, үҙ күҙҙәренә үҙҙәре ышанмай торалар: бындай ҙа иҫерткес бал еҫе бөркөп торған сәскәләрҙе, хуш еҫ аңҡытҡан үләндәрҙе уларҙың ғүмерҙә лә күргәне юҡ икән! Аллабирҙе атының эйәрен тәүбашлап үҙе һалдырып, утлауға ебәрә лә:

— Был ниндәй ғәләмәт хәлдәргә юлыктыҡ беҙ! — тип хайран ҡалып тора. — Ысынлап та, Аллаһы тәғәлә беҙҙе үҙе ярлыҡап йөрөй, ахыры! — тигәс, Йылкыбай ҙа атының эйәрен һалдырып:

— Эйе, беҙҙе пәйғәмбәребеҙ үҙе һаҡлап йөрөтә, бындай изге әҙәм беҙгә тиктәҫтән генә осрамаҫ ине, — тип ҡуя. — Әйҙә йәһәтерәк булайыҡ. Моғайын, ул беҙҙе көтөп тә торалыр!..

Ысынлап та, былар килеүгә ул мәғәрәһе ауыҙында көтөп тора икән. Алдарында, ни күҙ менән күрһендәр, күҙҙең яуын алып, бик затлы балаҫ йәйелеп ята, ә мәғәрә ауыҙы бик ҙур таш менән ҡаплап ҡуйылған. Таштың уң яғында ике сажиндай* ғына ерҙә тау яғалап аҡҡан шишмә сылтырап ята, ә һул яҡлап иҫ киткес ҙур бер тирәк үҫеп ултыра, ҡуйы япраҡлы йәшел сатыры менән бөтә мәғәрә ауыҙын ҡояштан ҡаплап тора икән.

Ҡарт уларҙы күргәс тә:

— Итек-сарыҡтарығыҙҙы сисегеҙ ҙә, аяҡтарығыҙҙы бынау шишмә һыуы менән йыуып, балаҫҡа баҫығыҙ, — тип бойора. Ул ни ҡушһа, шуны эшләп, балаҫҡа баҫһалар, ҡарттың, ниндәйҙер ят һүҙҙәр әйтеп, дәғүәт* уҡып ултырғанын күрәләр. Ул һуңғы һүҙҙәрен әйтеү була, таш үҙенән үҙе ситкә тәгәрәп китә, хужа ҡунаҡтарҙы эскә инергә ымлай. Мәғәрә эсенә һаран ғына яҡтылыҡ төшөп тора. Һулға боролһалар, ишек асылып, көндәй яҡты ергә килеп инәләр. Тауға өңөлгән был мәғәрә эсендә дүрт тарафҡа ҡуйылған дүрт таш яҡтыртып тора икән. Таш иҙәнгә балаҫтар түшәлгән, ә бер яҡтағы ҡалҡыуыраҡ урынға яҫтыҡ-мендәрҙәр өйөп ҡуйылған.

— Рәхим итеп, ултырышығыҙ, ҡәҙерле ҡунаҡтарым булығыҙ, — тип, ҡарт тәүҙә урын күрһәтә быларға. — Мин һеҙгә тамаҡ ялғар ниғмәт килтергәнсе, ял итеп алығыҙ, — тип, үҙе икенсе яҡҡа китеп юғала. Ҡарттың бәләкәй генә туҫтаҡҡа һалып индергән туралған ит осмотон күреп, был беҙҙең кесе телебеҙгә лә йоҡмаҫ, тигәндәй, ике дуҫ бер-береһенә ҡарашып ҡуялар. Хужа, быларҙың уйын алдан белгәндәй:

— Был туҫтаҡ бәләкәй тип ҡайғырмағыҙ, мосолмандарым, һеҙ был ниғмәтте көнө буйы ашаһағыҙ ҙа бөтөрә алмаҫһығыҙ, — тип кеткелдәп көлөп ҡуя.

Бакһаң, был, ысынлап та, шулай булып сыға: күпме генә танһыҡ күреп ашамаһындар, туҫтаҡта ит һис тә кәмемәй, имеш. Ҡунаҡтарҙың быға иҫтәре китеп, башта үҙҙәренең ышанмауҙарына хужанан ғәфү үтенгәндәр. Һуңынан хужа аҡ эсемлек ҡойолған икенсе туҫтаҡ килтереп ултырта. Ҡунаҡтар быны ҡымыҙ тип уйлайҙар, тик ул ҡымыҙ түгел икән. Хужа ахырҙа былай тип төшөндөрөп бирә: был ят эсемлек тик ул үҙе генә белгән шишмәнең һыуы, имеш; бының менән ул тик дөрөҫлөк юлынан йөрөгән хаҡ мосолмандарҙы ғына һыйлай икән. Шунан ул, һыуһындарығыҙ ҡандымы инде, тип һорағас, ҡунаҡтар:

— Ҡанмаған ҡайҙа ул, буйтым ҡанды, хатта йәшәреп киткәндәй булдыҡ, — тигәндәр. Шунан һуң ҡарт быларға үҙенең кәңәш бирер мәле еткәнен белдергән дә:

— Мин һеҙҙең кем икәнегеҙҙе лә, ниндәй йомош менән ҡайҙа китеп барғанығыҙҙы ла белеп торам, — тигән. — Хөр күңелле Аллабирҙе баш, һин Зөһрәне кәләш итеп йәрәшергә, ә һин, Йылҡыбай, уның менән ҡоҙа булып барырға сәфәр сыҡҡанһығыҙ. Һеҙҙең был ниәтегеҙҙе изге пәйғәмбәребеҙ ҙә бик хуп күрә. Ул миңә үҙе күренеп, һеҙҙе ҡаршы алырға ебәрҙе, өҫтәүенә, ошо һый менән һыйлап, ошо кәңәште бирергә лә ҡушты.

## БИШЕНСЕ КИС

Әүлиә ҡарт һүҙен былай тип башлаған:

— Юлығыҙ бик алыҫ булмаһа ла, бик хәтәр юл булыр: көн һайын һеҙҙе йырткыс ҡоштар баҫып йөҙәтер, үткер тырнаҡтары менән үҙегеҙҙе яҫҡып алырға тырышырҙар; йәнә айыу, бүре, юлбарыҫ ҡиәфәтендәге януарҙар ҙа ташланыр һеҙгә, үҙегеҙҙе лә, аттарығыҙҙы ла ҡырҡҡа өҙгөләп ташларға итерҙәр. Бөтә был һеҙ күрер бәлә-ҡазалар бер туған ике пәрейҙең сихыры булыр. Уларҙың береһе Зөһрә йәйләүенең бирьяғында, икенсеһе Ирәндек аръяғында төйәкләнгән. Икеһе лә Зөһрәне үҙ ҡулына төшөрөргә йөрөй, тик ул быларға алданмайынса, бөтә хәйлә-мәкерҙәрен көн һайын иренмәй ҡылған биш ваҡыт намаҙы менән кире ҡыуып тора. Һеҙ ҙә, батырлыҡҡа ғына таянмай, хаҡ мосолмандар үтәгән изге йолаларҙы һаҡларға тырышығыҙ, һеҙгә был көс-кеүәт бирер, шуның менән бөтә ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сығырһығыҙ, — ти. Шунан әүлиә ҡарт быларға: «Ҡайҙа миңә уҡ-ҡылыстарығыҙҙы килтерегеҙ әле, — тигән дә, былар ҡорал-ҡорамалдарын килтереп һалғас, яҡты мәғәрәнән сығып торорға ҡушҡан. — Мин саҡырмайынса бында инмәгеҙ», — тип киҫәтеп ҡуйған. Унан, ишеген бикләп, мәғәрәлә үҙе генә ҡалған. Былар күп тә көтмәгән, әүлиә ҡарт үҙенә саҡырып алған да, ҡоралҡорамалдарын күрһәтеп: «Уҡ-ҡылыстарығыҙҙың хәҙер нисек үҙгәргәнен күрәһегеҙме?» — тип һораған.

— Күрәбеҙ, — тигәндәр юламандар. — Уҡ башаҡтарыбыҙ алтын һымаҡ ялтырай, ҡылыстарыбыҙ ҙа сәс бәкеһе төҫлө үткерләнеп киткән.

— Ҡоралдарығыҙҙың тылсым көсө бер ялтырап тороуҙа ғына түгел, уларҙың асылында: тоҫҡап атҡан уғығыҙ, сәпкә теймәй, яҙа китмәҫ, тейгән бере януарҙы ғына түгел, ен-пәрейҙең үҙен дә юҡ итер, — ти. Шунан әҙерәк уйланып торғас: «Үҙегеҙҙе лә яра-йәрәхәттән һаҡлар тылсымым бар: мин һеҙгә берәр күлдәк менән бүрек бирәм, тәнегеҙгә тейгән һәр харам көс шунан юҡҡа сығып торор, — тигән дә мендәр аҫтынан ике кәрмәзин күлдәк менән ике ҡара төлкө бүрек сығарып биргән. — Бына шуларҙы кейеп алығыҙ ҙа, аттарығыҙҙы эйәрләп, уҡ-ҡылыстарығыҙҙы тағып алып, мәғәрә ауыҙы алдында мине көтөп тороғоҙ», — тигән.

Ике юламан, ҡарт ҡушҡанса, күлдәк, бүректәрен кейә һалып, ҡорал-ҡорамалдарын тағып, аттарына атланалар ҙа, йәнә тау ҡыуышы алдына килеп, көтә ҡалалар. Килеп туҡтауҙары була, ике ҡулына аҡ ҡойолған ике туҫтаҡ тотоп сыҡҡан теге ҡартты күрәләр. Ҡарт, икеһенә ике туҫтағын һоноп, эсә алған тиклем эсергә ҡуша. Батырҙар күпме генә көсәнеп ҡарамаһын, туҫтаҡтарҙы, эсеп бөтөрә алмай, кире ҡайтаралар. Әүлиә ҡарт:

— Ниңә эсеп бөтөрмәнегеҙ? — ти.

— Башҡаса булдырып булмай, — тип яуаплай былар.

— Улай булғас, ризыҡты тәләф итмәй, аттарығыҙға эсереп бөтөгөҙ, уларға ла көс-keүәт кәрәгер, — ти ҡарт.

Аттар бик яратып эсеп, туҫтаҡтарҙы бушатҡан, ти.

— Хәҙер инде юл башлаһағыҙ ҙа ярай, — тип, ҡарт хәйерле юл теләп ҡалған.

Батырҙар, әүлиәгә рәхмәттәр уҡып, тылсымлы кейемдәренә, ҡорал-ҡорамалдарына ҡыуанышып, хушлашалар ҙа йәнә юлға сығып китәләр.

Бер нисә көн рәттән бер нигә тарымай бара. Тик ашарҙарына ҡош атып алалар ҙа, тамаҡ ялғап алғас, йәнә ары китәләр. Күҙҙәренә инде алыҫтан күгәреп ятҡан Ирәндек итәктәре лә күренә башлай. Тик әүлиә ҡарт юраған ҡыйынлыҡтарға юлыҡмағас, ул әйткән һүҙҙәргә шөбһәләнеп тә ҡуя былар. Ҡапыл шул саҡ аяҙ күктә ҡара болот ҡабарып сыға. Текләберәк баҡһалар, был ҡара болот та түгел, ә донъя ҡаплап килгән ҡоштар тубы икән. Ябырылып килгән ҡош күсенең шомло тауыштарын шәйләп алғас ҡына, былар әүлиә ҡарттың һүҙҙәре раҫҡа сығыуына ышаналар. Ҡалъяндарынан* әҙернәләрен, һаҙаҡтарынан уҡтарын ҡармап алып, был ҡош яуын ҡайтарырға әҙерләнеп тә бөтмәйҙәр, төлкө-ҡуян яҫҡыған бөркөт ише, быларға ҡош яуы ябырыла ла башлай. Ни булырын алдан иҫкәртелгән батырҙар, ҡаушап ҡалмай, уҡтарын сойорғотоп та ебәрәләр. Атылған бер уҡ яҙа китмәй, сәпкә тейеп, ҡошо менән бергә ҡолап төшә. Ҡош күсе, быларға ҡуныл-ҡунып алһа ла, тылсымлы кейемдәргә ҡағылыу менән үк, тырнаҡтары тупарылып, батырҙарҙың аттарына ғына баҫыша башлай. Ә аттарға, тылсым көҙрәте ҡағылмағас, тәндәре әрнеүҙән үрәпсеп китеп, тыпырсынып дуларға тотоналар. Батырҙар, ҡындарынан ҡылыстарын һурып алып, һыбай килеш аттарының баш-ҡойроғон һаҡларға тырышалар. Был ҡаты алыш шулай төш ауғансы бара. Әгәр ҙә мәгәр ярҙамға әлеге тәғәм-ризыҡ биргән аҡ ҡош килеп етмәһә, алыштың ни менән барып

бөтөрөн күреү ҙә бик икеле булыр ине. Теге аҡ ҡоштоң баш осонда күренеүе була, был ҡара ҡош яуын пыран-заран килтереп, һәр ҡош төрлөһө төрлө яҡҡа осоп китеп бөтә. Теге аҡ ҡош, ике юлсының еңеп сығыуына ҡыуанғандай, һаман быларҙың баш осонда шыҡыйып йөрөй икән. Былар, аттарынан төшөп, атҡан уҡтарын йыйып алырға итһәләр, ни күҙҙәре менән күрһендәр: бөтә атылған уҡтар, һаҙаҡтарынан кире инеп ятҡан икән!.. Батырҙарҙың уны-быны күреп торорға форсаттары ла булмаған.

Йылҡыбай менән Аллабирҙе, был хәлде алла ярлыҡауына юрап, аттарынан төшөп, доға ҡылалар ҙа, саҡ ҡына хәл йыйып алғас, ары юлланалар. Ә ҡош һаман, быларҙың арттарынан ҡалмай, баш осонан осоп килә икән. Былар, ҡошто һыйламаҡсы булып, берәй йәнлек-фәлән юҡмы икән, тип, тирә-яҡҡа ҡаранғылап килә торғас, елеп барған бер мышы күреп ҡалалар ҙа, артынан төшөп, ҡыуа китәләр. Йылҡыбай, алғараҡ сығып, уғын атып ебәрһә, уҡ мышының нәҡ боғаҙына барып тейә. Януар тәкмәсләп барып төшкәс, тиҙ генә уны сала һалып, тиреһен яртылаш ҡына тунайҙар ҙа, ҡошто саҡырып алып, ризығын биргәс, ары китәләр. Ҡош, быларҙың һүҙен аңлағандай, мышыға килеп ҡуна ла йолҡҡолай ҙа башлай. Батырҙар, шул урында аттарынан төшөп, шишмә буйында ғына ҡуналҡаға туҡтайҙар.

## АЛТЫНСЫ ҠИС

Юлдарының икенсе көнөндә Йылҡыбай менән Аллабирҙе иҫәпһанына сыҡҡыһыҙ бүреләр өйөрөнә тап була. Тик быңдай һунарға бер өйрәнеп алғас, байтағын ҡырып һалыу, ҡалғанын ҡыуып ебәреү әллә ни ауырға ла төшмәй. Бер аҙ ер киткәс, быларға ҡот осҡос итеп айыуҙар үкергәне ишетелә. Яҡынырак барһалар, үҙҙәренә таба аҡ-ҡара күрмәй ябырылып килгән айыу көтөүен күрәләр. Батырҙар ҡурҡып тормай, уларға уҡ яуҙыра ла башлайҙар: атҡан бер уҡ айыуҙы үлтерә йыға, тик бының һайын улар арта ғына бара. Айыуҙар быларҙы ҡамап алдым ғына тигәндә, ярҙамға теге аҡ ҡош килеп етә. Ул һәр януарға йәшен ташындай барып ҡуна ла, ҡанаттарын һыҙғыртып, суҡышы менән өҙгөләп, айыуҙарҙың ҡотон ала: тегеләр, алдын-артын да ҡарап тормай, урманға һыҙалар. Былларынан да ҡотолдоҡ тигәндә генә, ике юлбарыҫ сабып килгәне күренә. Былары икәү генә булһа ла, айыу-бүре ише генә түгел икән шул: ажарланып, күҙҙәренән осҡон сәсрәтеп килә яталар. Әгәр ҙә был икәүҙе ғәләмәт йыртҡыстан күктән ярлыҡаусы булмаһа, юлаусыларҙың көндәре шунда бөткән дә булыр ине. Аллабирҙе уғын беренсе булып атып ебәрә: уҡ үҙенә ташланған януарҙың арт һанына барып ҡаҙала. Юлбарыҫ, яраһын да тоймай, атының муйынынан матҡып алыуы була, Аллабирҙе, ҡылысы менән уның арҡаһына арҡыры сабып, яртылаш билен өҙә яҙа. Йылҡыбай шул мәл хәтәр хәлдә тороп ҡала: ташланған юлбарыҫы уҡ атырға ла ирек бирмәй, уның биленән эләктереп алып, атынан һөйрәп төшөрә лә аяҡтары менән ергә ҡуша иҙә лә башлай. Теше-тырнағы менән ҡырҡҡа өҙгөләп

ташлар ине, тылсымлы кейеме генә уны ҡотҡарып ҡала. Шул ике арала Аллабирҙе үҙ януарының эшен бөтөрөп, дуҫына ярҙамға ташлана. Ике һелтәнеүҙә януарҙы үлтерә саба. Юлбарыҫ аҫтында ҡалған Йылҡыбай саҡ-саҡ аяғына баҫа, ә дуҫы уны үлемдән алып ҡалыуына ҡыуанып бөтә алмай.

— Хәл йыйып ал, — тигән ул Йылҡыбайға, — ә мин шул арала быларҙың тиреһен һыҙырып алайым, беҙгә ат ябыуына ярап ҡалыр, итен ҡошобоҙға бирербеҙ.

— Юҡ инде, — тигән быға Йылҡыбай, — ике тире лә һинеке, ике януарҙы ла һин үлтерҙең бит, мине лә үлемдән юлып ҡалдың.

— Ниңә юҡҡа һүҙ көрәштерергә? Һинең урынында мин булһам, һин дә үҙеңде аяп тормаҫ инең бит, — тигән Аллабирҙе.

Шунан ул януарҙың тиреһен тунарға керешеп, береһен тунап та бөтмәй, теге ҡош иткә ҡунып, ҡарһаланып ашап та бөтөрә. Аллабирҙе тиреләрҙе киптерергә ергә йәйеп һала ла, аттарҙы, эйәрҙәрен һалдырып, үлән утларға ебәрә. Унан үҙе лә хәл алып ятҡан дуҫы янына, баш аҫтына эйәрен һалып, һуҙылып төшә.

Йылҡыбай бер аҙ тын алғас, былай тип һүҙ башлай:

— Әүлиә ҡарт күрәҙәлек иткәнсе, беҙҙе әле, дуҫҡай, алда йәнә бер ҡыйынлыҡ көтә. Быныһы иң ауыры буласаҡ. Пәрей төйәге инде алыҫ та түгел буғай. Иртәрәк юлланһаҡ, төшкә барып та етербеҙ. Алла ярҙам бирһен инде: пәрей менән алышыр алдынан иман тоторға онотоп ҡуймайыҡ тағы.

— Шулай шул, — тигән Аллабирҙе лә, унын һүҙен ҡеүәтләп. — Эште бер башлағас, ахырынаса ныҡ торорға кәрәк инде. Тик мин шуныһына шикләнеп ҡуям: Зөһрә йәйләүенә, тим, дөрөҫ юл менән барабыҙ микән?

— Бында икеләнеп тә тораһы юҡ, — тигән уға ҡаршы Йылҡыбай. — Ҡошобоҙ бит, беҙгә юл күрһәтеп, алдыбыҙҙан бара лаһа. Күрәһең, әүлиә ҡарт үҙе уны беҙгә юлдаш итеп ебәргән.

Былар шулай һөйләшә торғас, бик ҡаты йоҡлап китәләр, ә иртәгеһен хәл йыйып, еңеләйеп килеп торалар ҙа ҡош артынса юлға ҡуҙғалалар. Көндөң яртыһы башта һил генә булһа ла, төш етеүгә ҡаты дауыл сығып, күк күкрәп, ҡойма ямғыр яуа башлай. Еүешләнеп-нитеп китмәһен, тип, былар уҡ-һаҙаҡтарын тиреләре менән бөркәберәк ҡуялар. Өҙләкһеҙ күк күкрәп, йәшен таштары, ялт-йолт килеп, аттарҙың алдына уҡ сатырҙап барып төшә. Аттар, ары барыуҙан өркөшөп, ҡолаҡтарын шымайтып, серәшә-серәшә генә киләләр. Йылҡыбай шул саҡ:

— Көндөң былай кинәт алышыныуы тиктәҫкә генә түгелдер: был, моғайын, теге яуыз ен-пәрейҙәр ғәрәсәтелер, — тип әйтеүе була, ҡапыл күк ҡабағы асылып китә лә, быларҙың күҙ алдында апаҡ ҙур бер тирмә пәйҙә була. Яҡын тирәлә мал-тыуар заты күренмәһә лә, тирмә типһене тапалып, үләне ҡыуарып бөткән. Былар шаҡ ҡатыуҙан иҫтәренә лә килеп өлгөрмәй, тирмә эсенән ибәтәйһеҙ оҙон алпамыша һынлы бер әҙәм килеп сыға ла йән өшөткөс тауышы менән:

— Һеҙ кем булаһығыҙ? Ни йомош менән ҡайҙа китеп бараһығыҙ? — тип һорай.

— Беҙ — илгиҙәрҙәр, Зөһрә йәйләүенә юл тотабыҙ, — тигән яуапты ишетеү менән теге ғифрит ҡысҡырып уҡ ебәрә.

— Әһ-һә-һә... Минең яратыуымды ек күреп, миңә бисәлеккә килергә ҡаршылашҡан Зөһрә һылыуға икән. Ярай! Тик минең һеҙгә бер шартым бар: һеҙ башта бына минең менән көс һынашып ҡарағыҙ! — тигән, ти, был ғифрит.

— Һинең менән көс һынашырҙай хәлебеҙ юҡ шул беҙҙең: һин йәшһең, ә беҙ инде ҡартайғанбыҙ. Әгәр ҙә шартыбыҙға күнһәң, уҡ атышып ҡарарға ризабыҙ, — ти Аллабирҙе быға.

Быңдай һүҙҙе ишетеп, пәрей яман ҡаты үкереп ебәргән икән, уның тауышына эйәрләнгән аты ла сабып килеп еткән. Эйәрендә ҡоралы ла бар икән. Пәрей, аяғын өҙәңгеһенә лә тейҙермәй, атына һикереп менгән дә, уҡ-һаҙағын ҡармап алып, батырҙарға былай тип ҡысҡырған:

— Эй, мәхлүҡ мосолмандар! Икегеҙ ике яҡҡа китеп, атып ҡарағыҙ миңә, шунда ул орсоҡтарығыҙҙың ни икәнен үҙегеҙ күрерһегеҙ. Һеҙҙең ул Зөһрәгә бүләккә илткән уҡ-һаҙаҡ тигән нәмәгеҙ ҡоралмы ни, орсоҡ бит ул! Йылҡыбай уның мыҫҡыллап көләүенә ҡаршы:

— Алышырға үҙең саҡырғас, тәүләп һин үҙең ат, — тигән икән, пәрей, быларҙың тартыныуын күреп, сажин буйлы уғын ҡолас етмәҫ әҙернәһенә һала ла, арҡандай керешен тартып, эстән иман шартын уҡып торған Йылҡыбайға атып та ебәрә. Тау ярырҙай тауыш сығарып килгән уҡ тылсымлы кейемгә барып тейеү менән ҡаҡлығып китә. Йылҡыбай бер ни ҙә булмағандай, эйәрендә сайҡалып ҡына ҡуя. Быға асыуы ҡабарған пәрей, күҙ асып күҙ йомғансы, икенсе уғын һура һалып, ҡымшанмай ҙа торған Аллабирҙегә атып ебәрә. Уғы тағы ла ҡаҡлығып киткәс, пәрей йән асыуынан хатта тештәрен шығырҙатып ҡуя. Шул саҡ Йылҡыбай ҙа, уғын һурып алып:

— Хәҙер инде беҙҙең орсоҡтарҙың да тәмен татып ҡара, — тип ҡысҡыра. Сихырлы уҡ шундай ғәйрәт менән пәрейҙең ҡабырғаһына барып ҡаҙалғас, теге сайҡалып китә, ә Аллабирҙе атҡан уҡтан ул, тауҙан таш аҡтарылғандай, ергә гөрҫ итеп барып төшә, хатта күк күкрәп, ер тетрәп ҡуйғандай була. Батырҙар уның ҡолап ятҡан мәлен ысҡындырмаҫҡа тырышып, ҡылыстарын һура һалып, сабып килеп етһәләр, бының аты сапсынып, яҡын да ебәрмәй, типкеләп, хужаһын ҡурсалап тора. Шул мәл, бөтә алышты күҙәтеп, баш осонда шыҡыйып йөрөгән теге аҡ ҡош, бөркөт сапсанлығы менән пәрей атының башына килеп ҡуна ла бының күҙҙәрен суҡырға керешә. Ат, өркөп, сабып сығып китә, аҡ ҡош һаман бының күҙҙәрен соҡоп бара. Шул арала пәрей, ҡылысын һурып алып, бер һелтәүҙә бер юлы ике батырҙың да баштарын сабып осорорҙай булып, быларға туҡтала. Ул аяғына баҫып торған хәлдә лә, һыбайлы батырҙарҙан байтаҡҡа бейек икән. Шулай ҙа, хоҙай ҡөҙрәте менән, батырҙар уның һелтәнеүенән янтайып ҡалғас, үҙ ҡылыстары менән бының башын яра сабалар ҙа, пәрей үкереп ергә ауа. Аллабирҙе, атынан төшә һалып, бының башын сабып өҙә. Сихырсы, ен-пәрейҙәрҙең кәүҙәһен утта яндырырға кәрәк икәнен иҫләп, ҡоро сытыр-сатыр

йыйып килтерәләр ҙә, ут ҡабыҙып, пәрейҙең кәүҙәһе менән башын шунда килтереп ауҙаралар. Пәрейҙең көлө күккә осһон, тип, утҡа утын өҫтәп торалар. Һуңынан, тәһәрәт алып, салауат әйтеп, доға ҡылалар. Тирмәһендә берәй нәмәһе тороп ҡалмағанмы икән тип, аҫтын-өҫкә килтереп ҡараһалар ҙа, бер ни ҙә табылмай. Пәрейҙең уҡ-һаҙағы менән ҡылысын яндырмайынса, Зөһрәгә бүләк итеп алып бармаҡсы булалар. Тик аҡ ҡош ҡыуып алып киткән атын ғына ҡулға төшөрә алмауҙарына үкенеп торғанда, уныһы ла ҡош әйҙәүе аҫтында сабып килеп, батырҙар алдына туҡтай ҙа теҙгененән алырға башын бирә. Былар уның эйәрҙәр ҡашына пәрейҙең уҡ-һаҙағын, ҡылысын бәйләйҙәр ҙә бынан бер-ике көнлөк кенә ҡалған Зөһрә йәйләүенә табан юл тоталар.

## ЕТЕНСЕ КИС

Батырҙарҙың юлға сығыуына икенсе көн китһә лә, бер ни ҙә осрамай быларға, ә иртәгәһенә ярты көнлөк самаһы ғына юл ҡала. Шулай итеп, ҡоҙа менән кейәү, Зөһрә алдында күркәмерәк күренергә тырышып, иртәнге намаҙҙан һуң кейемдәрендә ҡалған ҡан таптарын таҙартып, аттарының эйәр-өпсөндәрен дә рәткә килтереп, эйәрҙәрен юлбарыҫ тиреләре менән ябалар. Зөһрәгә бүләккә тигән пәрей атын, үрҙә әйтелгәнсә, эйәренә уҡ-һаҙағын, ҡылысын элеп, юлдарын дауам итәләр. Уларға юл күрһәтеп, кәрәк саҡта ҡурсалашып та килгән юлдаш аҡ ҡош, инде хәүеф-хәтәр ҡалмағанын белдереп, былярҙан айырылып китә. Ахыр сиктә былар көмөштәй күле ялтырап ятҡан киң туғайлыҡҡа барып сығалар, ә күлдең арьяғында ҡарағай, ҡарағастар менән ҡапланған Ирәндек тауҙары күгәреп күренә. Тау ҡаяларындағы ҙур-ҙур йәшмә таштар, көнгә сағылып, күл өҫтөн күҙ ҡамашырҙай нурҙар менән семәрләп ята икән. Ошо күлдең буйында ғына Зөһрәнең кейеҙ тирмәһе ағарып ултыра, ә туғайындағы иркен сәхрәлә көтөү-көтөү малдары эркелешеп йөрөй. Батырҙарҙы алыҫтан уҡ күреп ҡалған өйөр айғырҙары, өйөрҙән айырылып, быларға ҡаршы сабышып килгәндәр ҙә, сәләм биргәндәй кешнәшеп, үрә ҡарғып торғас, кире өйөрҙәренә сабышып ҡайтҡандар. Батырҙар аттарын атлатып ҡына тирмә янына килеп еткәс, аттан төшөргә рөхсәт һорауҙары була, тирмәнән Зөһрә үҙе лә килеп сыға. Өҫтөнә йәшел буҫтауҙан елән кейгән, башындағы ҡашмауы мәрйен, алтын-көмөш көмбәҙҙәр менән биҙәлгән икән. Зөһрә, ҡунаҡтарҙы асыҡ йөҙ менән ҡаршылап:

— Хуш килдегеҙ, мосолмандарым! Әйҙәгеҙ, аттарығыҙҙан төшөп, тирмәмдең түренә уҙығыҙ, — тигән икән, ҡаршы сыҡҡан Зөһрәнең һылыулығына иҫе китеп, йөрәге урынынан ҡупҡан Аллабирҙе торған ерендә шаҡ ҡатып ҡалған. Оло йәштәрҙәге тол бисәнең шулай әле һаман төҫ ташламауы быны хайран иткән. Зөһрә үҙе хаҡында һөйләнгән һүҙҙәргә ҡарағанда, байтаҡ йәшерәк тә, күркәмерәк тә булып күренгән уға. Йылҡыбай инде бында элек бер аҙ ҡунаҡ булып та киткәс, үҙен иркенерәк тотоп, Зөһрәгә исеме менән өндәшеп, иҫәнлек-һаулыҡ һорашып, бисә кеше булһа ла, ололоҡлап сәләм биргән. Зөһрә, үҙенең иҫән-һау булыуын әйтеп, икенсе мәртә-

бә ҡунаҡтарҙың тирмәгә үтеүҙәрен үтенгән. Йылҡыбай ҡоҙа кейәү кешенең һаман аттан төшмәй ултырыуын күреп, уның ҡыйыуыраҡ булыуын күргеһе килеп, хужабикәгә былай тип һайрай башлаған:

— Ҡәҙерле ҡәрендәшебеҙ, һин беҙҙең былай янғыҙ бисә янына килеп сығырға тәүәккәллек итеүебеҙгә аптырама, — тигән ул. — Һинең яҡшы күңелле булыуың менән инсафлы ғүмер итеүең хаҡындағы данлы хәбәр бөтә ырыу халыҡтарының теленән төшмәй, ул беҙ йәйләгән бейек Урал тауҙарына ла барып олғашты. Иҫендәлер, бынан бер нисә йылдар элек мин һиндә ҡунаҡ булып киткәйнем. Ул саҡ һинең тол ҡалыуыңа йыл да тулмағайны әле. Үҙебеҙҙең йәйләүгә әйләнеп ҡайтҡас, мин һинең инсафлы ғүмер итеүең, япаянғыҙ йәшәп тә, һинең бер ниҙән дә ҡурҡмай мал-тыуарыңды уҫал януарҙарҙан да үҙең ҡурсалап тороуыңды, ә үҙеңдең ер йөҙөндәге бер ҡойоп ҡуйған хур ҡыҙындай булыуыңды — бөтәһен дә түкмәйсәсмәй, бәйнә-бәйнә һөйләп биргәйнем. Минең байтаҡ ағай-энеләрем һинең ошолай ғүмер итеүеңә таң ҡалып, үҙеңде бер барып күрергә, һинең төҫлө инсафлы донъя көтә белергә, тип, һинән һабаҡ алырға бик дәртләнеп ҡуйһалар ҙа, йыртҡыс януарҙарҙың, бигерәк тә ен-пәрейҙәрҙең хәүеф-хәтәренән ҡурҡып, тыйылып килделәр. Беҙҙең тик берҙән-бер башыбыҙ, бына, атта ултырған Аллабирҙе генә, йөрәге етеп, бер ниҙән дә ҡурҡмай, минең менән бында килеп етте. Ул һиңә бүләккә тип үҙе үлтергән ике юлбарыҫ тиреһе менән һине йөҙәткән дейеү пәрейенең дә аты менән ҡоралын алып килде. Дейеү менән хәтәр алышта ул, өҫтөн сығып, уның башын сабып өҙҙө. Мин ул мәлғүн пәрейҙең кәүҙәһен үҙем яндырыштым, көлө күккә осҡанын үҙ күҙҙәрем менән күреп торҙом. Хәҙер инде һиңә бер ниндәй ҙә хәүеф-хәтәр ҡалмағандыр...

Әгәр ҙә Зөһрә шул саҡ үҙен ҡотҡарыусы батырҙың аттан төшөүен үтенеп, уны тирмәгә саҡырып, Йылҡыбайҙың һүҙен бүлдермәһә, ул тағы әллә күпме татылдар ине, моғайын. Шул саҡ Аллабирҙе лә, аттан төшөп, пәрей атын ҡоралдары менән бергә хужабикә янына етәкләп килтергән дә:

— Үҙеңде интектергән пәрейҙең атын да, ҡоралдарын да һиңә бирәм, ҡәҙерле ҡәрендәш, ҡабул итеп ала күр, — тигән.

— Абау! Был атты беләм бит мин! Ҡоралдары ла тап үҙенеке. Ошо атҡа атланып, ул сихырсы минең көтөүҙәремә килеп, бик йыш ҡурҡытып китә торғайны. Тик мин алла ярҙамы менән генә ҡотола килдем, мал-тыуарым да бәлә-ҡазаға юлыҡмай ҡалды, — тип хужабикә пәрей атының теҙгененән алып, ҡунаҡ аттарын да үҙе етәкләп, тирмә ҡаршыһындағы ҡарағайға бәйләп ҡуя ла батырҙарҙы тирмәһенә алып инә. Уларға затлы балаҫтар түшәлгән, мендәряҫтыҡ өйөп ҡуйылған урындыҡтан урын күрһәтә. Йылҡыбай тирмә эсендәге ыҡсымлыҡҡа, йыһаздарға иҫе китеп ултыра. Тирмәнең бөтә тағарактарына ла затлы ҡоралдар эленгән. Бөтә уҡ-йәйәләр, ҡылыс-хәнйәрҙәр алтын да көмөш ҡалъян-һаҙаҡтарҙа, ҡындарында ғына ҡәҙерләп тотола. Ҡемдең күҙе нигә төшә бит, Аллабирҙенең күңеле бөтөнләй икенселә: ул тирмә эсендәге хужабикәнән башҡа бер ниҙе лә күрмәй, бары уны ғына күҙәтеп ултыра, уны бөтә башҡорт халҡының күрке итеп күрә.

Батырҙар шулай һәр береһе үҙенең күҙ төшкәнен күҙәтеп ултырғансы, хужабикә быларға берәр туҫтаҡ ҡымыҙын да ҡойоп килтерә. Тәүге туҫтағын Аллабирҙе башҡа, икенсеһен уның юлдашына һона. Аллабирҙе ҡымыҙҙы ҡабул ҡылып, йола буйынса, башта үҙең ауыҙ ит[53], тип, хужабикәгә кире биргәс, уныһы ла, йола ҡушҡанса, ауыҙ итеп биргән була. Икеһенең дә ҡымыҙ тәмен татымағандарына байтаҡ көндәр үтеп киткәнлектән, ауыҙ һыуҙары ҡороп, һемереп эсергә тамшанып ултырһалар ҙа, әҙәп һаҡлап, ҡымыҙҙы яйлап ҡына һемереп эскән булалар. Шул арала хужабикә турһыҡ тултырып ҡымыҙ ҡоя ла алдарына ҡуйып:

— Ғәйеп итмәгеҙ инде, ҡәҙерле ҡунаҡтарым, төшкөлөккә мин һеҙгә көтөүҙән иң һимеҙ һарыкты тотоп килтерәйем, — тип сығып китә. Ул сығып китеп, ҡунаҡтар туҫтаҡтарын бушаткас, Аллабирҙе иптәшенә ҡарап һүҙ башлай:

— Йылҡыбай дуҫ, һин миңә хужабикәнең яҡшылыҡтарын, һәйбәт сифаттарын күп һөйләһәң дә уның һылыулығы хаҡында бер һүҙ ҙә әйтмәнең. Һинең һөйләүеңә ҡарап, мин уны ҡарттыр тип уйлағайным. Баҡһаң, уның әле шәп сағы икән дәһә. Төҫ-башына ҡарағанда, бер ҙә утыҙҙан артыҡ биреп булмай, — тигәс, Йылҡыбай уны бүлдереп:

— Мин тәү күргәндә булһа, булғандыр уға утыҙ йәш, унан бирле хәҙер ун биш йыллап ғүмер үтте инде, — тине, — ысынын әйткәндә, ул һис кенә лә үҙгәрмәгән. Бына нисек итә бит ул тотанаҡлы, тәртипле тормош! Мин әле, теге әүлиә ҡарт беҙҙең кейемдәрҙе сихырлағандай, был һылыу ҙа һинең күңеленде арбап ҡуйманы микән, тип ултырам, — тип көлә.

— Йәшерен-батырыны юҡ, дуҫҡай, — тигән шунда Аллабирҙе, — мин уны үлеп ярата башланым, хатта беҙ ниәтләгән эштәр барып сығыр микән тип, икеләнеп тә ҡуям әле мин. Ул шулай үтә тәҡүә булғас, икенсе ҡабат никахҡа керер микән һуң?

— Шулай, шулай, — тип көлөп ҡуйған тағы Йылҡыбай, — дуҫҡай, бер ни күрмәй-белмәй тороп, былай өмөтһөҙлөккә бирелеү яраған эш түгел. Теге әүлиә тиклем әүлиә һинең Зөһрәгә өйләнерендә алдан юрамағандыр бит?

Шул мәл тышта һарыҡ баҡырған тауыш ишетелгән. Уның артынса хужабикә лә килеп ингән. Ул, Йылҡыбайға ҡарап:

— Боронғо дуҫтым, бынау һарыкты салып ҡына бирер инең[54], ә мин ут яғып, ҡаҙан аҫа торор инем, — тигән. Үҙе Йылҡыбайға ҡуҙғалырға ла ирек ҡуймай, быларға йәнә берәр туҫтаҡ ҡымыҙ ҡойоп тотторған да үҙе һарыкты күрһәтер өсөн сығып та киткән. Аллабирҙе баш та, Йылҡыбай сыҡҡас, бер үҙе турһыҡ янында ҡалғыһы килмәй, дуҫына булышырға, шул ыңғайҙан Зөһрәнең ут яҡҡанын да күрергә сыҡҡан. Сыҡһа, Йылҡыбай һарыкты салып та өлгөргән, инде тиреһен тунап ята икән. Ә хужабикә ҡул сайырға һыу килтереп, ит алып ҡунаҡтарына аш әҙерләргә китә. Үҙе, уларҙың тирмәгә инеп, ҡымыҙ эсә тороуҙарын һорай. Улар, ике ҡабат әйткәнде көтөп тормай, турһыкты бушатырға инеп тә китәләр. Хужабикә алдарын-

да булмағас, ҡымыҙҙы тартынмай-нитмәй генә эсә бирәләр, ә ауыҙ асып һөйләшкән һүҙҙәре гел Зөһрә тураһында ғына бара. Һәр туҫтаҡты бушатҡан һайын сал төшкән һаҡалдарын һыпыра-һыпыра, былар шулай хәбәрләшә-хәбәрләшә ҡымыҙҙы төпләп тә ҡуялар. Шул ике арала хужабикә былар алдына йәйелгән бөхтә ашъяулыҡҡа ҙур табаҡ менән туралған ит килтереп ултырта ла:

— Ашағыҙ, ҡәҙерле ҡунаҡтар, ашағыҙ, туғанҡайҙарым. Оҙон юл йөрөп, асығып та бөткәнһегеҙҙер инде, — ти.

Ҡунаҡтар, рәхмәт әйтеп, уның үҙенең дә бергә ултырыуын һорайҙар, тик хужабикә, минең әле эштәрем күп, шул саҡлым алыҫ ерҙән килеп, иң яуыз дошманымдан ҡотҡарғас, һеҙҙе ҡәҙер итәһем бар, тигән булып, табындаш ултырыуҙан баш тарта, шул һүҙҙәрен әйткәндә, үҙенең бит алмалары ҡыҙарып киткән була. Ә бер ниҙе лә күрмәй ҡалдырмаҫ үткер күҙ Йылҡыбай уның «ҡотҡарғас» тигән һүҙҙе әйткәндә, Аллабирҙегә бик мөләйем күҙ һирпеп ҡуйыуын эләктереп ала ла эсенән генә, былай булғас, эштәр уң булып сығырға оҡшай, тип ҡуя. Табаҡ ҙур ғына булһа ла, былар уны тиҙ бушаталар. Шунан Йылҡыбай Аллабирҙенән:

— Әүлиә һыйы менән был һый араһындағы айырманы күрҙеңме инде? — тип һорай. Баш, бер аҙ өндәшмәй ултырғандан һуң:

— Ул һый бит аллаһы тәғәлә ризығы ине, уны кем әҙерләгәне лә билдәһеҙ, ә бында беҙ үҙебеҙҙең ҡәҙерле туғаныбыҙҙа һыйланабыҙ, һыйы ла беҙгә хас, таныш, — тигән.

Зөһрә, әүлиә тураһында ишеткәс тә, йөҙҙәре яҡтырып китеп:

— Һеҙ әллә ул изгелекле ҡартта ла булып киттегеҙме? — ти.

— Булыу ғына түгел, — ти Аллабирҙе, — юлда осраған хәүефхәтәрҙән ҡайһылай һаҡланырға уның өгөт-нәсихәтен, кәңәшен алдыҡ. Ул беҙгә ғәләмәт ҡыҙыҡ мөғжизәләр күрһәтеп, үҙенең изге доғаларын ҡылып, фатихаһын биреп ҡалды.

— Уның тураһында минең дә һеҙгә һөйләйәсәк хикәйәтемдә һүҙ булыр әле, — тип ҡуя Зөһрә. — Тик башта һеҙ, ҡәҙерле ҡунаҡтарым, ниндәй йомош менән юлланыуығыҙҙы дөрөҫ кенә әйтеп бирегеҙ. Ә хәҙер ҡулдарығыҙҙы йыуып алығыҙ, — тип уларға йылы һыу менән таҫтамал килтереп бирә. Аллабирҙенең был һүҙҙәрҙән һуң йөрәге күкрәгенән сығырҙай булып тибә башлай, ә Йылҡыбай, башҡорттоң бөтә сәсәнлеген егеп, үҙҙәренең ни өсөн килеүҙәрен һөйләп бирергә әҙерләнә.

## ТУҒЫҘЫНСЫ КИС

— Ҡәҙерле ҡәрендәшкәйебеҙ, — тип һүҙ башлай Йылҡыбай, — һин былай яңғыҙ ғына ғүмер иткәс, бынан бер нисә йылдар элек беҙҙең йәйләүҙәргә таралған яңы йоланы белеп тә етмәйһеңдер әле.

Боронораҡ бала-сағаһына атай булған кеше үҙ ғаиләһендә үҙе баш та үҙе түш булыр ине. Бына хәҙер, беҙҙең иҫәп буйынса, ике мөсәл ғүмер үтеп китте, шул ике мөсәл ғүмер эсендә беҙҙең Ете ырыу башҡорттары бер нисә ауылға бер баш һайлап ҡуя торған булып киттеләр. Ул баш тигәнебеҙ, илдәге бүтән аҡһаҡалдар менән

бергәләп, үҙ-ара килеп сыҡҡан төрлө ил низағтарын тикшереп, хәл итеп килә, ә ҙурыраҡтарын аллаһы тәғәләбеҙ үҙе хәл ҡыла. Бик тә көслө, тура һүҙле, кәрәк саҡта аҡыллы кәңәш бирерҙәй ил ағаһы булған тәүге башыбыҙ Шәүәли үлеп киткәс, уның урынына беҙ бына үҙең күреп торған Аллабирҙене баш итеп ҡуйҙыҡ. Уны беҙ юлбарыç йылында һайлағайныҡ. Быға инде хәҙер теүәл егерме йыл үтеп китте. Шул ғүмер эсендә ул беҙҙең мал-тыуарҙы януар баçыуҙан да ҡурсалап килде. Үҙең күреп тораһың, оло йәштә булыуына ҡарамаçтан, ул беҙҙең йәш батырҙарҙан һәр саҡ үҙенең ҡыйыулығы менән айырылып торҙо. Уның уғынан ҡырылған ҡош-ҡорттоң иçәп-хисабына ла сығырлыҡ түгел, уларҙың тире-ярыларын да ул үҙенә алмай, йә ағай-энеләренә, йә аҡһаҡалдарға бүләк итер ине. Уның ындай эскерһеҙлеге барыбыҙҙың да күңелен үҙенә тартты. Кәңәш-төңәш биреүҙә, соғолло, низағ-бәхәстәребеҙҙе сисеүҙә үтә ғәҙел булыр ине. Ырыç, ҡыуаныс менән ғүмер итеп, шулай һигеҙ йыл буйы рәхәттә йылан йылына саҡлы йәшәнек. Шул гонаһ шомлоғо йылан йылында уның Һылыубикә атлы бисәһе көтмәгәндә-нитмәгәндә генә донъя ҡуйҙы. Уның вафатынан һуң ҡайғы-хәсрәте ҙур булһа ла, йыуаныска өс улы тороп ҡалды. Дөрөçөн әйтергә кәрәк: уландары дан егеттәр, типһә, тимер өҙөр батыр егеттәр ине. Уҡ атышыуҙа ла мәргән булырҙар ине, мал тарпаны ҡырағай аттарҙы ла тотоп менерҙәр ине. Көрәштәрҙә бил бирмәç, бәйгеләрҙә ал бирмәç, батырлыҡ күрһәтергә генә тыуған егеттәр ине бына. Тик бәлә-ҡаза ағас башынан түгел, әҙәм башынан йөрөй шул, әжәл тигәнең ҡартын да, йәшен дә айырып тормай, батырын да, матурын да аямай: әсәләре үлгәндең икенсе йылында уҡ улдарын да алып китте...

Һүҙе шул урынға еткәндә, Йылҡыбай ике ҡулы менән башын баçып, күҙ йәштәрен тотоп тыялмай ултырған дуçына ҡарап ала ла, һөйләүҙән туҡтап:

— Ғәйеп миндә, дуç. Ҡайғыңды яңыртып, яман иттем бит әле, ни хәл ҡылмаҡ кәрәк, яҙмыштан уҙмыш юҡтыр инде, күрәһең. Уның ҡарауы олуғ пәйғәмбәребеҙ, әле булмаһа, алдағы ғүмереңдә бер мәрхәмәтен күрһәтер әле: өлөштән буш ҡалдырмаç, — тип дуçын йыуатып ҡуя; уныһының күңеле бер аҙ урынына ултырғас, башлаған һүҙен дауам итә. — Шулай итеп, беҙ көллөбөҙ ҙә уның ҡайғыға тарып, бик бирешеп китеүен үҙ күҙебеҙ менән күреп торҙоҡ. Ул беҙҙең әңгәмәләребеҙҙең уртаһынан да ситтә була башланы; йыйынға ла йөрөмәç булып китте; һунарын да ташланы; мал-тыуарҙы ҡурсалашыуға ла ҡул һелтәп ҡуйҙы; үҙ ҡайғыһы менән ҡаңғырып, аҡылдан яҙған кешеләй тик йөрөнө. Шул хәлдә йөрөүгә ике йыл тулды тигәндә генә, көтмәгәндә беҙҙең йәйләүгә килеп сыҡты, дөрөçөрәге — аты алып килде...

— Улай бик арттырып та ебәрмә инде, — тип ҡуя Аллабирҙе шунда. — Уйламаған-көтөлмәгән бер хәлдән һуң мин үҙем килеп сыҡтым бит һеҙгә, — тип, әле Йылҡыбай ҙа ишетеп белмәгән теге ят батыр менән осрашҡан хәлде һөйләп бирә. Быны тәүләп ишеткән Йылҡыбай, иçе китеп:

— Бына ҡалайыраҡ бит һин! — тип ҡысҡырып уҡ ебәрә. — Ауыҙынан һүҙеңде тартып алып та булмай бит һинең! Йыйында шуны һөйләп бирһәң, ни була? Ауыҙ асып, бер һүҙ әйтһәңсе, исмаһам, шунда.

— Мин бит был хәлдән һуң, йыйындағылар ни әйтер икән, тип, һеҙҙең кәңәшегеҙҙе тыңларға булдым, — тип ҡуйған Аллабирҙе.

— Бына үҙең күреп тораһың, Зөһрәкәйебеҙ, бөтәһе лә тәҡдир ҡушҡанса эшләнгән, — тип, Йылҡыбай йәнә һүҙгә керешә. Был шулай беҙҙең йәйләүгә килеү менән, ҡайғы-хәсрәттәрен онотоп, иҡенсе кәләш алыуын һораныҡ, күңелеңә ятҡан теләһә ниндәй ҡыҙыбыҙҙы һайлап ал, тинек. Ә ул, йәше оло булыуға һылтанып, бөтәһенән дә баш тартҡас, мин шунда ҡылт итеп һине иҫкә төшөрҙөм, Зөһрәкәй. Шунда бөтә йыйынға һинең яңғыҙ ғүмер итеүеңде, һинең бөтә яҡшы яҡтарыңды һөйләп бирҙем. Әгәр ҙә ул беҙҙең Аллабирҙе башҡа иргә сығырға риза булһа, шунан да данлыраҡ кәләште эҙләп йөрөйһө лә юҡ, тинем. Шунда бөтәһе лә минең һүҙемде, раҫ һөйләйһең дә раҫ һөйләйһең тип, күтәреп алдылар, Аллабирҙенән һине барып күреүен һоранылар. Үҙе бер ни ҙә өндәшмәгәс, беҙ уны риза булғанға иҫәпләнек, шунан мин уны үҙ тирмәмә алып ҡайттым да шул көндөң иртәгеһенә үк юлға сығып киттек. Беҙ юлда күргән әкәмәттәрҙең байтағын инде һин үҙең дә беләһең хәҙер. Тик әүлиә ҡартта булып киткәнебеҙҙе генә һөйләйһем ҡалған икән! Ул беҙҙе ҡаршы алғас, үҙенең мәмерйәһенә алып ҡайтты, уның беҙгә исемдәребеҙҙе әйтеп өндәшеүенә иҫтәребеҙ китте, беҙҙең ҡайҙа юл тотоуыбыҙҙы ла һорашып тормай, бөтәһен дә үҙе әйтеп бирҙе, аллаһы тәғәлә һеҙҙең был ниәтегеҙҙе бик хуп күрә, юлығыҙҙан буш ҡул менән әйләнеп ҡайтмаҫһығыҙ, Зөһрә иргә сығырға риза булыр, тип, икебеҙгә лә бер ниндәй ҙә ҡорал ала алмаҫ тылсымлы күлдәк менән бүрек бүләк итте. Уҡ-ҡылыстарыбыҙҙы ла теләһә кемгә ҡаршы торорлоҡ, хатта дейеү пәрейҙәренең дә башына етерлек итеп сихырлап бирҙе. Быныһын инде беҙ үҙ күҙебеҙ менән күреп белдек. Тик хәҙер шуны ғына беләһебеҙ ҡалды: һине иргә сығырға риза булыр, тип, ул әүлиә дөрөҫ әйткәнме, әллә юҡмы?

Шул урында таҫма тел Йылҡыбай, үҙенең һүҙен ослап, юлдашына ла, Зөһрәгә лә күҙе менән үтә тишерҙәй итеп ҡарап ҡуя. Ә Аллабирҙе иһә һылыу бисәнең йә «юҡ», йә «эйе» тигән ике һүҙенең берен көтөп, унан күҙен дә алмай ҡарап ултырған була, ә уныһы бер ергә күҙен текләп, көрһөнөп ҡуйған була ла, бер аҙ тын ҡалып ултырғас, бер-ике бөртөк күҙ йәшен дә һығып:

— Быларҙың бөтәһе лә тәҡдир таҡтаһына утлы ҡәләм менән яҙылғанынса булыр инде, — тип ҡуя[55]. — Яҙмыштан уҙмыш юҡ-юғын, шулай ҙа ризалығымды бирерҙән алда мин дә һеҙгә үҙем күргән-белгәнде һөйләп бирермен. Һөйләр һүҙем һеҙ йомошлап килгән йомошҡа барып тоташҡас, уны бөгөн генә һөйләп бөтөп булмай. Көн дә кискә һарҡып бара, һеҙ ҙә алыҫ юлдан арып-йонсоп килгәнһегеҙ. Шулай булғас, һүҙҙе иртәнгә ҡалдырып торайыҡ та, хәҙер һеҙ тамаҡ ялғап, серем итеп алырһығыҙ, — тип, үҙе быларға киске тамаҡ әҙерләргә сығып китә. Ә Йылҡыбай, эштең көйләнә барыуын күреп, Аллабирҙегә:

— Йә, йөрәгең урынына ултырҙымы, дуҫҡай? — ти.

— Эш былай ыңғайға китте буғай, — ти Аллабирҙе. — Тик уның үҙе хаҡында һөйләүен тиҙерәк ишетке килә бит әле, төн оҙон булыр һымаҡ.

— Бына һиңә тағы бер бәлә! — тип көлөп ҡуя Йылҡыбай. — Сабыр ит. Әйҙә, берәй туҫтаҡ ҡымыҙ эсәйек тә, бынау күл буйын ҡыҙырып киләйек.

Аллабирҙе быға риза була. Ҡымыҙ эсәләр ҙә тирмәнән сығалар. Күл буйлап йөрөгәндә, улар яр ситендәге ҡыуаҡлыҡ араһында башта күҙгә салынмаған бәләкәй генә бер тирмә күреп ҡалалар ҙа, моғайын, был аҙыҡ-түлек һаҡлауға ғына ҡуйылғандыр, тигән уйға киләләр. Улар яңылышмаған икән: хужабикәнең унан киске аш әҙерләп сығып килгәнен күрәләр. Йылҡыбайҙың, был урын-ерҙе бик оҡшатып, яр буйлап оҙағыраҡ йөрөгәһө килһә лә, Зөһрәне күреп ҡалған Аллабирҙе баш:

— Әйҙә, хужабикә, ана, һыйын да өлгөрткән, — тип, уны тирмәгә инергә ҡыҫтай башлай.

— Башыңда һинең бишбармаҡ ҡайғыһы түгел инде, — тип көлөп ҡуйған Йылҡыбай. — Зөһрәне күреп туялмайһың һин! Күрерһең әле, дуҫҡай, әле ваҡыт етерлек. Иң элек ул беҙгә иртәгә хикәйәтен һөйләһен әле!

Йәш кейәү булһа, был һүҙҙәрҙән йөҙө ҡыҙарыр ине лә, оло йәштәге Аллабирҙенең быға бер аҙ хәтере ҡалып:

— Һин, дуҫҡай, шаярмаҫ ерҙә шаяраһың, — тип ҡуя.

— Ниңә шаярмаҫҡа ти? Эштәр, майлап ҡуйғандай, беҙ тигәнсә киткәс, ҡыуанмай ҙа булмай бит, — ти тегенеһе.

Шунан былар тирмәгә инәләр. Киске аш та төшкөләге һымаҡ икән. Далала көн күргән халыҡ әллә ни аш төрләп тормай бит ул. Ашап туйғас, хужабикә ҡунаҡтарға урын йәйеп бирә лә, тәмле йоҡо теләп, үҙе икенсе тирмәгә сығып китә.

## УНЫНСЫ КИС

Ике дуҫ та, бик ҡаты йоҡлап, һауын бейәләр сырҡырашып ҡайтып килгәс кенә уяна. Тиҙ генә тора һалып кейенәләр ҙә тышҡа сығалар. Сыҡһалар, хужабикә инде бейәләрен дә һауып йөрөй икән. Ул, быларҙы күргәс:

— Яҡшы йоҡланығыҙмы? — тип һорай. Былар:

— Бик шәп йоҡланыҡ, — тип, хужабикә эш-көшөн бөтөргәнсе, тәһәрәт яңыртып, иртәнге намаҙ уҡырға күл буйына төшәләр. Һуңынан Зөһрәнең йылҡы өйөрҙәрен ҡарап йөрөйҙәр. Йылҡылары торғаны бер мал ҡото шау толпар[56] ғына икән. Бынан сығып, Зөһрәнең мәрхүм ире ҡашҡа батыр* булған икән тигән уйға киләләр. Байтаҡ ҡарап йөрөгәс, тирмәгә ҡайтһалар, хужабикәнең урынһарынды йыйыштырып, һаумал менән һыйларға өлтөрәп йөрөгәнен күрәләр. Уның:

— Ултырышығыҙ, ҡәҙерле ҡунаҡтар, берәй туҫтаҡ ҡымыҙ эсегеҙ, — ти.

Аҙыраҡ ҡыйыулана төшкән баш Зөһрәгә:

— Һин мине улай ҡунаҡ тип әйтмәһәң дә ярар ине, — тип һала. Ә йор һүҙле Йылҡыбай:

— Ай-һай, ашыҡмай тор, башта хикәйәтен һөйләһен әле, һөйләп бөткәс, бәлки, ҡунаҡ та тимәҫ, — тип төрттөрөп ҡуя. Ҡоҙаның мәрәкәләүенә ҡаршы хужабикә лә аптырап ҡалмай:

— Эйе шул, хикәйәтемде һөйләп, һеҙ мин ҡушыр бер йомошто үтәгәс, Аллабирҙене ҡунаҡ тип тә атамам, — тип көләмһерәп ҡуя. Йомош тигән һүҙгә ҡолаҡтары ҡарпая төшөп, кейәү менән ҡоҙа, уйға ҡалғандай, баштарын эйеп ултырғанда, хужабикә быларға берәр туҫтаҡ ҡымыҙ килтереп тоттора ла, ҡаршыларына ултыра һалып, хикәйәтен былай тип башлап ебәрә.

— Һеҙгә, ир-арыҫландар, әүәл шул мәғлүм булһын: минең атайым Ҡыҙрас атлы булып, уның йәйләү ерҙәре бынан, яҡшы атта барғанда, бер утыҙ көнлөк юл ашаһында ята. Беҙҙең ырыуҙың йәйләүлектәре үтә күп ерҙе биләп, Ағиҙелгә ҡойған Өфө йылғаһы* тамағынан алып, түбәндә Сулманиҙелгә* ҡойған Ағиҙел тамағынаса йәйелеп киткән. Йәйләү ерҙәребеҙ Ағиҙел буйлап ҡына түгел, ике яҡ ярҙан ҡара-ҡаршы биш көнлөк юл киткәндә лә осона барып сыҡҡыһыҙ. Ҡышҡылығын беҙ дөм ҡара урманда ҡышлайбыҙ ҙа, яҙын ҡар асылыу менән, әле әйткән Ағиҙел менән Сулманиҙел буйҙарындағы иркен далаларға йәйләүгә сығабыҙ. Ә был йылғаларҙың киңлеген күрһәгеҙ, иҫегеҙ китер ине: бер яҡ ярынан икенсе яҡ ярына иң көслө батыр атҡан уҡ та саҡ барып төшә, ә ташҡын мәлдә улар диңгеҙҙәй йәйрәп яталар. Һеҙҙең ағын һыулы Яйығығыҙ* менән Һаҡмарығыҙ улар янында шишмә төҫлө генә. Атайым минең Ҡармасан* менән Сәрмәсән* буйҙарында йәйләй торғайны. Йәйләүгә сығып, йәй уртаһында ғына Ҡандра* күленә барып етер ине. Ул күлде һыбай урап сығыуға ла үҙенә бер көн кәрәк. Үҙе шундай тәрән, биш оҙон арҡан ялғап буйлатһаң да төбөнә саҡ етә, ә һыуы шундай тоноҡ, саф: өҙөп ырғытҡан ҡашмау тәңкәһе лә төбөндә ялтырап ятыр ине. Тирә-яҡ ярҙарын һырғый ағастар уратып алғанлыҡтан, ел-дауыл был күл өҫтөндә бик һирәк кенә тулҡын ҡуптарыр ине. Төрлө-төрлө һыу ҡоштарының күплегенә хайран ҡалырлыҡ: ҡош тауыштарынан ҡолаҡ тоноп бөтә, ә балығын ҡул менән генә лә тоторлоҡ.

Атайымдың беҙ ике ҡыҙы булып, апайым Һылыубикә исемле ине. Мин һеҙгә инде бала саҡтарҙы һөйләп тә тормайым. Үҫеп, буйға етә башлағас, беҙ ҡулға йәйә алып, уҡ атырға ла өйрәндек. Уҡ атышыуҙа оҫтарағы мин булһам, апайым ҡул эштәренә һәүәҫерәк ине. Ә һыбай йөрөүҙе инде беҙ һанға ла һуҡмай торғайныҡ, шулай ҙа мин башҡаларға ҡарағанда ат өҫтөндә сосораҡ булдым. Ҡыҙ-ҡырҡын бәйгеләрендә мин үҙ тиңдәрем араһында ҡыйыурaҡ та, таҫыллыраҡ та булыр, берәүгә лә ал бирмәҫ инем[57]. Апайыма ун һигеҙ, миңә ун ете йәш тулғас, күрше-тирә ауылдарҙан беҙҙе кәләш итеп йәрәшергә кейәүҙәр ҙә ҡоҙалай башланы. Апайым шулай итеп күҙле-башлы ла булып ҡуйҙы, ә мин, нилектәндер, кейәүгә сығыу тигәндәренә ытырғанып ҡарай инем. Үҙемде көслө лә, сос та күргәс, үҙемә тиң булырҙай кейәү табырыма ышанмай, атайыма: уҡ атыш-

та, көрәштә, аттан тартышта мине еңгән егет кенә ирем булыр, тип ҡырт киҫтем. Ҡыйыу егеттәрҙең байтағы, минең менән көс һынашып, уҡ атышып ҡараһа ла, килгән бере хур булып китте. Мин шулай, ир-егеттәр ҡыланғанды ғына ҡыланып, ҡыҙ-ҡырҡын эшенә ҡул һелтәп кенә ҡуйыр булдым. Әсәйемә бейә һауышып, эркет әсетеп, ҡорот[58] һарҡытып йөрөмәнем, ә энә менән орсоҡ тигәндәрен ҡулға ла алып ҡараманым. Таң һарыһынан тора һалып, билемә ҡылыс, иңемә уҡ-һаҙаҡ аҫып, яҡшы атҡа атланыр ҙа далаға сабыр, атайымдың көтөүҙәрен урап сығып, уларҙы төрлө ҡош-ҡорттан ҡурсалар йә һунарға ғына йөрөр инем. Әсәйем йыш ҡына мине ир-ат эшенә тығылаһың, тип орошһа ла, атайыма был, киреһенсә, оҡшай торғайны. Ул, ир балалары булмағас, мине үҙенең батыры һанап, һәр саҡ минең ыңғайға ғына торор ине. Өйөрҙән иң шәп ат һайлап менергә ҡушыр, иң яҡшы ҡоралдарын миңә ышанып бирер ине. Бына әле лә уларҙы мин атайым төҫө итеп һаҡлайым, ҡарағыҙ әле, — тип, Зөһрә шул мәл ултырған еренән тора һалып, көмөш менән семәрләнгән ҡалъянын, һабы фирүзә таштар менән биҙәлгән ҡылысын килтереп күрһәтә. Әҙернә йәйәһе керешһеҙ торғас, уға көсәнмәй генә кереш тартып, йәйәне башта Йылҡыбайға тоттора ла:

— Һынап ҡарасы, кереше яҡшы тартылғанмы? — тип һорай. Йылҡыбай, йәйәне ҡулына алып, һынап ҡарамаҡсы була, керештең сиреген дә йәйәһенән ҡайыра алмағас, оятынан нишләргә лә белмәй:

— Юҡ, минең ҡулдан ғына килерлек түгел был, — тип йәйәне кире бирә. Быны күреп торған Аллабирҙе баш Зөһрәнән уғын һорап ала ла йәйәнең ҡатылығын һынап ҡарамаҡсы була. Бөтә көсөн һалып, уҡты яртыһына саҡлы ғына тартып ҡарай ҙа, оялып, кире бирә. Зөһрә, уларҙың хурланғанын күреп, үҙенсә йыуатырға тырышып:

— Бер ҙә хурланырға урын юҡ, ҡотҡарыусыларым, — тигән була. — Был йәйәнең керешенә сиктән тыш көс кәрәк, мин уны йәш сағымда башағынаса тарта торғайным да, хәҙер юҡтыр инде. Шулай ҙа һынап ҡарайым әле тип, башҡа һаҙаҡтан оҙон бер уҡты һайлап алып, йәйәһенә һала ла, һис көсәнмәй-нитмәй, уҡты башағына саҡлы ғына тартып ҡалмай, йәйәнең икенсе яғына уҡ сығарып ҡуя. Батырҙар, был хәлгә хайран ҡалып:

— Һай, Мәрҙәҫ!* — тип ҡысҡырып уҡ ебәрәләр. Хужабикә шунда, йәйәне ҡалъянына кире һалып ҡуя ла йәнә һөйләүен дауам итә.

## УН БЕРЕНСЕ КИС

— Минең бындай батырлыҡтарым атайыма бик үк оҡшағанлығын һеҙгә әйткәйнем инде. Ә үҙем шат инем, хатта ҡыҙ-ҡырҡын кейемен дә киймәй башланым. Оҙон сәс толомомдо башыма урап, ирҙәр бүрке менән ирҙәр кейеме генә кейеп йөрөр инем. Йыйындарҙа ла ҡыҙ-ҡырҡынға ҡатышмай, уларҙың көсһөҙлөгөн, кеше ярҙамына мохтажлығын күрә алмай, һәр саҡ ир-егеттәр менән батырҙар араһында ғына ҡатышып йөрөр булдым. Улар минең көс

менән таҫыллығымды күреп, минән аҙырак курка ла, ололоклай ҙа торғайнылар. Һунарға сыкһак, иң башта мин йөрөр, кайҙа куркыныс януар бар, иң алдан шунда мин сабыр инем. Беҙҙең дөм кара урмандарҙа ибәтәйһеҙ ҙур айыуҙар күп була торғайны, улар менән мин иптәштәрем күҙ алдында алышыр инем, алышта һәр сак еңеп сығыр инем. Ә һеҙгә һөйләйәсәк бер хәлдән һуң минең дан оторо таралып китте.

Берҙән-бер кисте шулай атайымдар менән тирмә алдында ултыра инек, беҙҙең ике көтөүсе, йән-фарман сабып килеп, бик күп айыу көтөүҙе баҫып, малдарҙы кыуып алып киткәнен, араларында бығаса күҙ күрмәгән, колак ишетмәгән ҙур бер ак айыу булғанын хәбәр иттеләр. Мин шунда һикереп торҙом да, коралдарымды ала һалып, атка һикереп менәйем генә тигәйнем, атайым каршы төштө.

— Һөйөклө кыҙым минең! Һинең батырлығыңа ышанһам да, бынауындай караңғы төшөп килгәндә, әллә ниндәй бәләгә тарыуың бар, иртәнгәсә сабыр ит, — тигәс, мин үҙемде тыйып калдым. Шулай ҙа атымдың эйәрен дә һалдырып тормай, сабырға еңел булһын тип, ашатмай, төнө буйы бәйҙә тоттом. Атайым менән һөйләшеп торған арала беҙҙең тирмә эргәһенә бергә һунарға йөрөгән иптәш егеттәр ҙә йыйылып килгәйнеләр. Улар ҙа, һинһеҙ эш уңмаҫ, тип иртән бергә сығыуымды һорағас, мин бергә барасағымды әйтеп, аттарын әҙерләп куйырға куштым.

Кояш сығып килгәндә, бөтәбеҙ ҙә эйәр өҫтөндә инек инде. Мин башкаларҙан кейгән кейемем, менгән атым менән дә, эйәр-өпсөнөм, коралым менән дә айырылып тора инем. Әле һеҙгә күрһәткән уҡһаҙағымды аҫып, уң кулыма һөңгө тотоп алғайным. Атайыма малтыуарҙы айыуҙар әйҙәп алып киткәнен әйткән теге көтөүселәр беҙгә юл күрһәтеп барҙылар. Беҙ көн буйы тиерлек барһак та, бер айыуҙы ла осратманык, тик Бөрө* буйындағы кара урманға етәрәк кенә, капыл урман эсенән сыркырашып килеп сыккан бейәләр өйөрөн күреп калдык, ә өйөр айғырҙары койроктарын сәнсеп, ялдарын сайкап, колактарын шымайтып, арттарына карана-карана, үҙ өйөрҙәрен курсалап, арттан төшөп алғайнылар. Беҙ шунда уҡ эштең ниҙә икәнен һиҙеп калдык та уларға каршы саптык. Беҙҙең ярҙамға килгәнде күргәс, улар ҙа һөйөнөстәренән кешнәй-кешнәй, беҙҙең ыңғайға кайырылып киттеләр. Шунда беҙ йүгерешеп килгән айыу көтөүен дә күреп алдык. Мин иптәштәремә (улар бер егермеләп егет ине) уктарығыҙҙы атмай тороғоҙ, януарҙарҙы башта һөңгөгә алығыҙ, тип кыскырғас, бөтәһе лә һөңгөләренә йәбеште. Иң тәүге булып Байегет бер айыуҙы, бик йәтеш һөңгөгә алып, үлтерә сәнсте. Башкалар ҙа, шулай айкаша-айкаша, айыуҙарҙы кырып һалдылар, шулай ҙа януарҙар кәмемәне. Күбебеҙҙең һөңгөләре һынғанын күреп, мин инде уктарығыҙға тотоноғоҙ, тип кыскырҙым да әҙернәмде алдым. Минең дә, өсөнсө айыуҙы әйләндереп һалғанда, һөңгөм һынып киткәйне. Уҡ-һаҙактарыбыҙ яртылаш бушап калғанда, айыуҙар инде куркыштарынан урман эсенә һыҙа ғына башлағайны, капыл урман эсенән ажарын сәсеп килеп сыккан ак айыу күренде. Уның артынса каралары ла яу булып килеп сыкты. Былары ла дәү булыуға карамаҫтан, ак айыуҙың корһак

аҫтынан ғына инеләр. Аҡ айыу эйәрткән был ҡара яуҙан дуҫиштәремдең ҡото осто, мин дә шөрләй төштөм. Тик айыуҙарҙың алпан-толпан яйлап килеүенән генә йән кергәндәй булды. Шул саҡ мин бер иптәшемдең ҡулынан берҙән-бер һынмай ҡалған һөңгөнө тартып алдым да:

— Дуҫтарым! Һеҙ мине үҙегеҙ етәксе итеп ҡуйғас, тыңлағыҙ: алышты тәүҙә мин башлайым, мин берәй нәмә эшләмәй тороп, берегеҙ ҙә ашыҡмай тороғоҙ, — тип ҡысҡырҙым. Үҙем шунда аҡ айыуға сабып барып еттем дә үрә ҡалҡып тороп миңә ташланырға әҙерләнгән януарҙың нәҡ күкрәгенә һөңгөмдө ҡаҙап өлгөрҙөм. Һөңгөм һабы төбөнән үк шартлап һынды. Айыу, һөңгө ҡаҙалғанын да һиҙмәй, ажарланып туп-тура үҙемә ташланды ла, атымдың муйынынан эләктереп, башын да өҙөп ырғытты. Мин, атымдан саҡ һикереп ҡалып, уғымды атып ебәрҙем. Уҡ януарҙың ҡабырғаһына бөлдөргөһөнәсә инеп китте. Айыу, яраһына түҙмәй, бөлдөргөнө теше менән эләктереп, уҡты һурып алмаҡ булды. Шул арала мин, тәүгеһенән дә нығыраҡ асырғанып, икенсе уҡты ла атып ебәрҙем. Януар, сығырынан сығып, үҙемде иҙеп ташлайым тигәндә генә, һурып өлгөргән ҡылысым менән йән асыуыма бының моронона төндорҙом. Шулай ҙа ул бер аяғы менән янбашымдан ҡармап алып, ергә йығам ғына тигәндә, билдән хәнйәремде һурып, һабынаса бының йөрәгенә килтереп сәнстем. Януар, яман үкереп, сайҡалды ла, өҫтөмә ауа башлағанда ғына, ярай әле, нисектер янтайып өлгөрҙөм. Унан ерҙә ятҡан ҡылысымды эләктереп алып, йәнә ике ҡабат башын яра сапҡас ҡына, ҡот осҡос үкереп, йән бирҙе. Ҡалған айыуҙар, башлыҡтарынан яҙғас, яман үкерешеп, урманға ҡастылар. Иптәштәрем минең иҫән-һау ҡотолоуымды күргәс, ҡыуанышып йүгереп килделәр ҙә мине ҡотларға тотондолар; бөтәһе лә мине: «Батыр ҡыҙ!» — тип күтәреп үк алдылар. Аҙаҡ мине иргә сыҡҡансы шулай батыр ҡыҙ тип йөрөтөр булдылар. Мин иптәштәремә ошо айыу йыҡҡан ерҙә ҡуналҡаға туҡтарға ҡуштым да, өйҙәгеләр көйөнмәһендәр тип, беҙҙе килтергән ике көтөүсене атайымдарға ҡайтарып ебәрҙем, алмашҡа ат алып килергә лә ҡуштым. Шул арала берәүҙәр көҙгө төндә өшөмәҫкә ут яғып ебәрҙеләр, ә икенселәре айыуҙарҙың тиреләрен һыҙырырға керешге. Аҡ айыуҙың тиреһен мин үҙем тунарға иткәйнем, улар, ай-вайыма ҡуймай, тирене үҙҙәре һыҙырып алып килделәр ҙә: «Айыу менән алышырға ҡыймаһаҡ та, тиреһен үҙебеҙ һалдырҙыҡ, исмаһам!» — тип көлөштөләр. Ысынын ғына әйткәндә, кәҙерле туғанҡайҙарым, мин әллә шундай уңыштан, әллә унан бигерәк йәшлек аҡылым менән, был еңеүҙән үҙем дә маһайып ҡуйҙым. Януарҙарҙың тиреһен тунап бөткәс, аттарҙы кешәнләп ебәрҙек тә, усаҡ янына хәл алырға ятып, таң атҡансы үлек йоҡоһо менән йоҡланыҡ.

## УН ИКЕНСЕ КИС

Ҡуйы Бөрө урмандары аръяғынан ҡояш ҡалҡып, төшлөккә етә яҙғанда, атайыма ҡайтарып ебәргән теге көтөүселәр миңә ат та килтереп еткерҙеләр. Юл сығырға әҙерләнеп бөткән иптәштәрем

менән минең атты эйәрләй һалдыҡ та, айыу тиреләрен артмаҡлап, аттарҙы йәлләп тормай, йәйләүгә ашыҡтыҡ. Аҡ айыу тиреһен, айвайыма ҡуймай, минең атҡа япҡайнылар. Беҙ ҡайтып етеүгә, атайым менән бөтә йәйләү халҡы беҙҙе ҡаршы алырға сыҡҡайны. Атымдан һикереп төшөп, мин туп-тура атайыма ташландым, ә ул мине ҡосағына алып, батыр ҡыҙым, тип иркәләп арҡамдан һөйҙө. Һәр беребеҙ әсәйҙәрҙе лә һөйөндөрәйек тип үҙ тирмәләребеҙгә ашыҡтыҡ. Мин дә атайым менән бергә ҡайтып ингәндә, әсәйем, ҡосағына алып, шатлығынан нишләргә лә белмәне. Мин уларҙың икеһенә лә нисек итеп януарҙар менән алышҡанды, нисек итеп аҡ айыуҙы еңеп сыҡҡанды һөйләп бирмәксе булдым. Айыу тиреһен алып инделәр, табанлап үлсәп сыҡтылар ҙа, ун алты табанлыҡ, тинеләр. Иртәгәһенә ауылда йыйын үткәрергә булдылар.

Атайым, бөтәһенән дә байыраҡ булғас, туй-һыйға алты бейәһен тотоп килтерергә ҡушты, ә атайымдың ҡорҙаштары икешәр бейә килтерҙе. Байрам булаһын миңә ат килтергән теге көтөүселәр аша яҡын-тирә ауылдарға ла еткереп ҡуйғанға, халыҡ эркелешеп килде. Бейәләрҙе һуйырға йыйынып йөрөгәндә, мин атайымдың йылҡы өйөрөнән иң яҡшы аҡбуҙ бейәһен тотоп алып, аҡһаҡалдар алдына килтереп баҫтырҙым да аҡ айыуҙы еңеү хаҡына уларҙы иң яҡшы бейә менән һыйлаясағымды әйттем.

— Һай, батыр ҡыҙ, батыр ҡыҙ! Һин бит ҡыйыулығың менән дә, көс-ҡеүәтең менән дә бөтә егеттәребеҙҙән дә өҫтөнһөң! — тип геү килделәр аҡһаҡалдар...

Мин һеҙгә, ҡәҙерле ҡунаҡтарым, өс көн буйы барған был йыйында ниҙәр генә булғанын тәфсилләп һөйләп тормайым инде. Өс көн,өс төн буйы ҡаҙан аҫтарынан ут һүнмәне, һабаларҙан[59] ҡымыҙ өҙөлмәне. Ул бәйге тиһеңме, ул көрәш тиһеңме, уҡ атыш тиһеңме, — бөтәһе лә үҙебеҙҙең йола буйынса барҙы. Бөтә шул байрам үткәнсе мине маҡтауҙарынан ҡолағым тоноп бөттө. Йыйын үтеп киткәс тә әле мине үҙ күҙҙәре менән күрергә, минең был батырлыҡ хаҡындағы хәбәрҙе үҙ ҡолаҡтары менән ишетергә тип, әллә ҡайҙарҙағы ауылдарҙан килеп бөттөләр.

Шулай итеп, көн артынан көндәр, ай артынан айҙар үтә торҙо, мин һаман да үҙ ҡылығымды ҡуймай, элек нисек йөрөһәм, шулай йөрөй бирҙем. Ахырҙа, минең менән көс һынашыуҙан ҡурҡып, егеттәр ҙә яусыламаҫ булдылар. Һеҙҙән инде йәшерәһе юҡ, тора-бара былай көн итеү ялҡыта башланы, бының ахыры ни менән барып бөтөр тигән уй ҙа күңелде шомландырып ҡуйғылай торғайны. Әле йәш саҡта кейек аулау менән булайым, ә ҡартайғас, әбейҙәр араһында булырмын тип уйлай инем. Ҡартлыҡ тигәндә, ҡотом оса торғайны. Ҡайһы саҡта атайымдың кейәүгә тотоп биреүен теләһәм дә, үҙемә тиң булмаҫтайға сығыуға намыҫым ҡушмай ине. Шулай уйлап йөрөй торғас, егермегә лә аяҡ баҫтым. Үҙемә үҙем йәм тапмай башланым. Һунарға ла һирәк-һаяҡ ҡына, онотҡанда бер сығып әйләнәм. Мине йәндәй күргән атайым да һиҙенгәндер инде: нисәмә рәт төпсөп-төпсөп ҡараһа ла, йүнле бер һүҙ ҙә ишетә алмағас, ахыр сиктә ул да ҡул һелтәп ҡуйҙы. Бына шул мәл ҡапыл, ниндәйҙер бер

сихыр эйәһе хаҡындағы имеш-мимеш хәбәр таралғас, миңә яңынан дәрт тыуҙы, был дәрт мине оло бер хәтәр эш эшләргә мәжбүр итте.

Көндәрҙән бер көн шулай, атайыма йыйылып килгән аҡһаҡалдар менән һөйләшеп ултырғанда, ошо хаҡта һүҙ сығып китте. Һәр кем теге сихырсымы, күрәҙәсеме хаҡында үҙенең ишеткән-белгәнен һөйләп бирҙе. Берәүҙәре уны әүлиә, икенселәре пәрей икән, имеш, тине. Бәғзе берәүҙәре уны мәскәй, бәғзеләре күрәҙәсе[60], имеш, тип һөйләне. Тик берәү ҙә уның ҡайҙа көн иткәнен өҙөп кенә әйтә алманы. Берәүҙәре уны Урал һыртында, Ирәмәл* типһәнендә, ҡайһылары Ағиҙел тамағында көн итә, имеш, тип һөйләне. Шулай ҙа өҙөп кенә берәү ҙә раҫ һүҙ әйтә алманы. Бының һайын минең ҡыҙыҡһыныуым арта төштө. Үҙебеҙҙең йылҡы өйөрҙәрен барлап ҡайтырға сыҡҡан һайын, мин ошо әүлиәне күрмәмме, тип, үҙебеҙҙең үрештән әллә ни саҡлы ер ары китеп урар булдым. Бер көн шулай тауға артылғас, үҙемә ҡаршы ыңғайлаған бер һыбайлыны күреп ҡалдым. Был ят әҙәмдең кем икәнен, ҡайҙан килә ятыуын белергә тип, атымды ҡыҙыулата төштөм. Ә ул минең сабып килеүемде күргәс, туҡтап ҡалды. Мин килеп етер-етмәҫтән иҫәнләшкәс, ул да яуапһыҙ ҡалманы. Өҫтөндәге кейем-килбәтенә ҡарағанда, беҙҙең ырыу-ара затына тартмаһа ла, уның хаҡ мосолман икәнен белгәс, мин уның кем булыуын, ҡайҙа юл тотоуын һорашып алып киттем.

— Мин олуғ Болғар батшалығынан булам, бына төрлө халыҡтарҙы күрәйем тип, уларҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен беләйем тип, бөтә илдәр буйлап сәфәр ҡылып йөрөйөм, ә ҡайтҡас, бөтә күргән-белгәндәремде Болғар батшаһына бәйән ҡылырға тейешмен; мин үҙем уның яҡындарының береһе булам, — тине был яуабында[61]. Мин унан йәнә:

— Күптән сығып киттеңме унан, ниндәй юлдар менән килдең? — тип һорағас, ул:

— Мин, — тине, — Сулманиҙел буйынан Ағиҙел тамағынаса килеп, ҙур-ҙур урмандар, тауҙар аша үтеп сыҡтым.

— Улай булғас, байтаҡ ҡыйынлыҡтарға, хәүеф-хәтәр нәмәләргә осрап бөткәнһеңдер инде? — тинем.

— Юҡ, — ти был, — ундай хәүеф-хәтәргә юлығыуын юлыҡманым, шулай ҙа бына ят януарҙар үкерешеүе, Ағиҙел тамағындағы тау араларынан үткәндә, ағастар шартлауы менән тағы ниндәйҙер тауыш ишетелеүе генә ҡотомдо алды, — ти.

— Ни булды икән ул? Үҙең нигә юрайһың быны? — тип һораным бынан.

— Был хаҡта мин тик шул яҡ кешеләренең әйткәнен генә әйтә алам, — ти был. — Ошо урындан ике көнлөк юлда ғына йәшәй икән улар. Күптән түгел унда бер әүлиә килеп сыҡҡан икән. Үҙе хаҡында ни ҙә булһа белергә теләгән бер кешегә уның бөтә үткәнен, бөгөнгөһөн, киләсәген әйтеп бирә икән ул.

— Ә һиңә уны барып күрергә, күрәҙәлек иткәнен тыңлап ҡарарға булмай инеме һуң? — тигәс, ул көлөп кенә ҡуйҙы.

— Юҡ, ҡайҙа инде ул миңә әүлиә тиклем әүлиә менән ҡул биреп танышырға баҙнатсылыҡ итергә, — ти.

— Ә уны күргән берәйһен белмәйһеңме? — тигәс, бер йәш егетте күргәнен, уның әүлиә торған тау ҡыуышында булғанын да, әүлиәнең уға ни юрағанын да һөйләп бирҙе.

— Ул тау ҡыуышы бынан алыҫмы? — тип һораным мин.

— Мин уның янында булманым булыуын, шулай ҙа ул тауыш ишетелгән ерҙән инде бына, үҙең күреп тораһың, яҡшы атта ун биш көн киләм, — ти был.

— Унда юл тотҡанда, ҡайһылайыраҡ барырға һуң?

— Ағиҙел тамағының ҡаялы ярына хәтле барһаң, ул тауышты ишетергә була, — тигәс, мин дә:

— Ярай, юл кешеһенең юлда булғаны яҡшы, юлыңды бүлмәйем инде, иҫән бул, — тигән булдым. Шунан болғар ҙа, миңә хәйерле юл теләп, ары китте.

Мин, бер аҙ барғас, аптырап, туҡтап ҡалдым. Әүлиәне хәҙер үк эҙләп сығып китергәме, әллә, атайыма ҡайтып, кәңәш һорарғамы, тик оҙаҡ икеләнеп торҙом. Кире ҡайтһам, мине күҙ өҫтөндәге ҡаш кеүек күргән атайым да, әсәйем дә был сәфәргә ризалыҡтарын бирмәҫтәр, минең был ниәтемде иҫәүәнлеккә генә һанарҙар тигән уйға килдем. Шулай ҙа, уйлай-уйлай торғас, ҡайтып, иң шәп, иң сыҙам ат һайлап менергә лә, иң яҡшы уҡ-һаҙаҡ менән берәй аҙналыҡ аҙыҡ-маҙар алып, атайыма һиҙҙермәй генә юлға сығырға булдым. Минең ҡыуанып ҡайтып инеүемә атайымдың да күңеле асылып китте. Мин уны тағы ла нығыраҡ ҡыуандырайым, тип, юлаусыларҙың бынан бер көнлөк юлда әле был яҡтарҙа күренмәгән апаҡ болан көтөүенә тап булғандарын һөйләнем, мине бер ике-өс көнгә шунда ебәреүен һораным. «Ярай, аллаһы тәғәлә ярҙамынан мәхрүм итмәһен, — тине атайым. — Тик ышаныслыраҡ ат һайлап мен, күберәк ҡорот алып сыҡ», — тине. Ниәтемде атайымдың белмәгәнлегенә шатланып, тиҙерәк китергә ашыҡтым.

## УН ӨСӨНСӨ КИС

Икенсе көнөнә бөтә кәрәк-яраҡ әҙер ине инде. Атайым-әсәйем менән хушлаштым да Ағиҙелгә ҡарай юлға сыҡтым. Юлда ниҙәр күрәһеләрем мине ҡурҡытмай, тик ҡайтаһы көнгә ҡайтып етмәһәм, атайымдың бик тә ҡайғырырын уйлап ҡына борсола инем. Шулай ҙа әүлиәне күреп һөйләшеү теләге был сабыйлыҡ яратыуын бер аҙға баҫып ҡалды. Икенсе көн тигәндә инде мин Ағиҙел буйына барып та еттем. Аша сығырға һайыраҡ тәңгәлен эҙләп китһәм, бәхетемә күрә, кисеүе лә шунда ғына булып сыҡты. Ике яҡ яры ла ҡомло һөҙәк ерендә генә төшһәм, йәйге селләлә беҙҙең йылғалар былай ҙа һайығып ҡалған мәл булғанға, миңә атымды бер йөҙ илле сажиндай ғына араны йөҙҙөрөп сығаһы бар ине. Уҡ-һаҙаҡтарымды арҡама артмаҡлап алдым да йөҙөп өйрәнгән атым менән еңел генә аръяҡ ярға барып та сыҡтым. Өҫ-башымды киптереп алғас, ҡаршылағы таулыҡҡа күтәрелергә юл эҙләй башланым. Ахырҙа, тар булһа ла, һуҡмағы ла табылды, һуҡмаҡ текә яр һымаҡ ҡалҡыулыҡҡа алып менде, шунан тау үҙәгенә илтеп сығарҙы. Ҡыскә саҡлы үҙәк буйлап

тау башына менгәс, һуҡмаҡ та киңәйә төшкәндәй булды. Үҙем дә белмәйем, нилектәндер, был нәҡ теге болғар үткән һуҡмаҡтыр, тип ҡуйҙым эсемдән. Барған һайын үҙемдең дөрөҫ юл менән киткәнемә ышана барҙым, ни өсөн тигәндә, бейек тауҙарға күтәрелгән һайын һул ҡулдан Ағиҙелде күрә килдем. Шулай, бер ниндәй бәлә-ҡазаға ла тарымай ғына килә торғас, унынсы көн тигәндә, юл аҙығым бөттө. Шулай ҙа ҡош-маҙар атып алып, тамағымды туйҙырҙым, ә көтөүҙә йөрөп өйрәнгән атымдың аҙығы аяҡ аҫтында ине. Болғар мосафирының әйткәненсә, тағы биш көнлөк кенә юл үтәһем ҡалғас, шулай тыныс ҡына килә ятҡанда, ҡапыл көтмәгән-нитмәгән ерҙән ылдырап бөткән күлдәк кейгән бер әҙәм күрҙем. Буйға ул ҡәҙимге кешенән саҡ ҡына оҙонораҡ, үҙе ҡуңыр йөҙлө. Башына керләнеп бөткән сәллә уралып, ялан аяҡтары ҡайыш менән сырмалып бөткән, һул ҡулына оҙон таяҡ, уңына осо армыт ҡамсы тотоп алған. Үҙе миңә:

— Һаумы, батыр мөслимә*, — тип һүҙ ҡушты. Былдай көтөлмәгән осрашыуҙан аптырап, бигерәк тә уның ҡыҙ-ҡырҡын затынан икәнлегемде белеүен ғәжәп итеп, иҫәнләшә лә алмай торҙом, ахырҙа:

— Минең ир-ат булмауымды ҡайҙан белдең? — тип һораным.

— Ә мин һине бик яҡшы беләм, батыр ҡыҙ, ниндәй йомош менән ҡайҙа китеп барыуың да мәғлүм миңә. Шулай ҙа һиңә бына ошо ҡамсыны бирмәһәм, барыр ереңә барып етмәүең дә, хатта һәләк булып ҡуйыуың да бар, — тине был.

— Нимәгә ул ҡамсы миңә? Уның менән мин ни эшләйем? — тип һорауыма:

— Юлыңда осраған ҡот осҡос йән эйәләрен еңеп сығырға кәрәк булыр был, — тип яуап ҡайтарҙы.

— Быға минең үҙ ҡоралым да бар, күрә торғанһыңдыр бит, — тигәс:

— Һай, һинең был ҡоралың ташҡа ҡаршы ҡамыш ҡына шул. Һинең, ҡыҙым, башың йәш шул әле, был ҡамсының хикмәтен белеп тә еткермәйһең, бына хәҙер үк мин уның серен асып күрһәтәйем үҙеңә, — тине арыраҡ китә биреп. — Бына хәҙер миңә таба сабып килеп һөңгөң менән күкрәгемә йәлләп-нитеп тормай сәнс, — тине. Мин, уның әйткәндәренә аптырап, был берәй иҫәүәндер, тип уйланым. — Йә, ниңә шаҡ ҡаттың? — тип ҡыҫҡырҙы ул миңә. — Әллә мине үҙең анһат ҡына еңеп сыҡҡан аҡ айыуға һанайһыңмы? Тиҙерәк бул, юҡһа, ҡамсыһыҙ ҡалып, сихыр эйәһенә барып та етә алмаҫһың.

Был һүҙҙән һуң атыма һикереп мендем дә, һөңгөмдө туп-тура бының күкрәгенә тоҫҡап, сабып килеп етеүем булды, ул ҡамсыһын күтәрҙе. Үҙ көсөмә ышанып, ҡартты үтәнән-үтә сәнсермен тип уйлағайным, тик, ҡамсының тейгәнен дә һиҙмәй, атым менән бергә ҡапыл ергә ауҙым. Быны күреп торған ҡарт:

— Йә, батыр ҡыҙ: һөңгөң менән батырлығын, атыңдың көсө ҡайҙа булды? — тип көлдө.

Бер ниндәй ауыртыныу, имгәнеү тоймай, атым менән бергә һикереп торҙом да, хурлығымдан ни эшләргә лә белмәй, тауыштынһыҙ ҡалдым.

— Ниңә бер һүҙ ҙә өндәшмәйһең? — тигәс был:

— Ни тип әйтәйем инде, берәй ҡөҙрәт йыҡҡандыр мине, — тинем.

— Баштан уҡ минең һүҙҙәремә ышанған булһаң, былай булмаç ине. Мин ҡамсымды биреп, үҙ ниәтеңә ирешеү серен дә асыр инем, — тигәс, мин үҙемдең намыçһыныуымды ситкә ҡуйып, уның миңә ярҙам итеүен үтендем.

— Ярай, улай булғас, тыңла, мөслимә, мин һиңә үҙемдең ҡайҙан, кем булыуымды әйтеп тормайым, тиҡ был ҡамсының нисек итеп ҡайһы ваҡытта игелеген күрергә ярағанын ғына бел. Был ҡамсы менән бөтә сихыр көсөн ҡайтарырға була, бер ниндәй мәкерле сихыр ҙа, хатта ен-пәрейҙәр ҡорған хәйләләр ҙә уға ҡаршы тора алмай. Һәр төрлө ен-шайтан яуына ул утлы ҡылыс булып күренер, уның менән бер һелтәүҙә бөтә мәхшәр юҡҡа сығыр, — тип һөйләне лә, ҡамсыһын миңә бирҙе. — Был ҡамсыны һин сихырсы мәғәрәһенә барған юлында осраған бер ғифриткә ҡаршы һелтәрһең. Тик, ҡыҙым, үҙеңдең ҡәҙимге фани ҡоралың менән эш итеүҙән генә һаҡ бул, күҙгә күренмәç ул ғифриттәр һинең ҡоралыңды бар тип тә белмәçтәр, үҙеңдең һәләк булыуың бар. Мин биргән ҡамсыны һелтәһәң генә улар юҡҡа сығыр. Тау ҡыуышына барып еткәс тә, уны ҡуйыныңа йәшереп ҡуй, күрәҙәсе уның осон ғына күреп ҡалһа ла юҡ булыр ҙа, һин үҙ теләгеңә ирешә алмай ҡалырһың. Уның менән һөйләшкәндә ҡыйыу бул, үҙең ни теләһәң, шуны һораш, ул һиңә бөтәһен дә әйтеп бирер. Ә ҡайтҡан сағыңда ошо һуҡмаҡ буйлап ҡына ҡайт, мине ошо урында осратып, был ҡамсыны кире биреп китерһең, — тине.

Шунан мин был арҙаҡлы ирҙән күрәҙәсенең тау ҡыуышы бынан алыçмы, тип һорағас, ул:

— Был урындан киткәс, өсөнсө көнөнә барып етерһең, — тине.

## УН ДҮРТЕНСЕ КИС

Һуңғы һүҙҙәрен әйтеүе булды, үҙе күҙ асып йомғансы урман шырлығына инеп тә юғалды, ә мин, килгән юлымдан ситтәрәк ятҡан икенсе юлға төшөп, ары киттем. Юлда барған ыңғайға ҡамсыны алып ҡараһам, уның бер ҙә иç китер ерен күрмәнем. Бер ниндәй тирәс менән биҙәлмәгән дә, бер быуынының осонан тармаҡланып киткән ун ике армытынан башҡа әллә нәмәһе лә юҡ. Әгәр ҙә уның ҡөҙрәтен үҙ күҙҙәрем менән күрмәгән булһам, бала-сағаны һыптырып алырға ғына үрелгәндер был, тип ҡуйыр инем. Уны шулай ҡуйыныма ҡыçтырып ҡуйҙым да ул көндө лә, икенсе көндө лә төшкә тиклем бер нигә лә осрамай барҙым. Барған һайын урмандар ҡуйыра төштө, һуҡмағым үткән тау араларындағы ҡаялар ҙа текәрәк була башланы, шунда ҡолағыма алыçтан ишетелгән ят тауыш салынды. Башта быны миңә генә шулай ишетеләлер тип уйлағайным. Ни

өсөн тиһәң, бөтә уйлаған уйым гел шул алда күрәсәк мөғжизәләр тирәһендә генә урала ине. Ҡапыл шул саҡ тар ғына һуҡмаҡ алдымда яткан киң юлға әйләнеп китте лә, юл буйлап мин үҙем белгән бер көтөү януарҙарҙың олоп-үкереп килгәне күренде. Алдан бүреләр олоп, улар артынса айыуҙар үкереп килә. Мин теге ярымяланғас ҡарттың өгөт-нәсихәтен саҡ онотоп ҡуймай, уҡ-янымды алырға ғына тип торғанда, ҡапыл теге ҡамсы барлығын иҫләп, уны ҡуйынымдан һурып алып, уңлы-һуллы һелтәп ебәргәйнем, үҙ күҙемә үҙем дә ышанмай торҙом: януарҙар шунда уҡ юҡ булды, киң юл тигәнем элеккесә тар һуҡмаҡҡа әйләнде.

— Эй, изге ҡарт! Һин раҫты һөйләгәнһең, ә мин тәүҙә һиңә ышанмауым менән ғәйепле булғанмын икән! — тип ҡысҡырып ебәргәнемде үҙем дә һиҙмәй ҡалдым.

Януарҙар юҡ булып, ҡамсының тылсымлы көсөн күреп, иркен һулап ҡуйһам да, олоған тауыш тағы ла асығыраҡ ишетелде. Ҡараһам, ни күҙем менән күрәйем: һуҡмағым мине киң бер туғайға алып сыҡты. Мин унда бығаса күҙ күрмәгән, тик эҫе яҡта йәшәгәнлектәрен ишетеп кенә белгән ят януарҙарҙың килә ятҡанын шәйләп ҡалдым. Уларҙың ҡайһы бере ала-ҡола, бәғзеләре буй-буй һыҙатлы, бәғзе беренең ал һаны яллы булһа ла, арт һандары яп-яланғас януарҙар ине.

Бығаса күҙ күрмәгән ят януарҙы осратыу ҡурҡытмай булмайҙыр ул, ҡәҙерле ҡунаҡтар. Дөрөҫөн әйткәндә, башта ҡаушаным, тик әлеге ҡамсы иҫкә төшкәс кенә, уның менән ике ҡабат һелтәп ебәргәйнем, барса януар юҡ булды, киң туғай йәнә һуҡмаҡҡа әйләнде. Был көн хикмәтле мәғәрәгә барып етер һуңғы көн булғанғамылыр, уның мине ҡурҡытыр сихыр ғәләмәте аҙым һайын тиерлек осрап торҙо. Өҙлөкһөҙ сыйнап торған тауыштан башҡа, януарҙар үкерешеүен ишеттем. Урман аша үткәндә минең өҫкә бына-бына ауам тип торған эре-эре ҡарағайҙар араһынан тылсымлы ҡамсым менән һелтәнә-һелтәнә, юл ярып барам. Сихыр эйәһенең миңә ҡаршы ерҙәге яуыз йән эйәһен аяҡландырыуы ғына етмәгән, күктәге ғәрәсәттәре менән дә ҡотомдо алырға иткән, ахырыһы. Күк йөҙөн ҡапыл ҡара болот ҡаплап алды, көн күҙгә төртһәң дә күрмәҫтәй төнгә әйләнде, хатта мин юлды ла шәйләй алмай башланым. Ни эшләргә лә белмәй, алйып аптырап ҡалдым. Сихырсының ерҙәге ише күктә лә бындай ғәрәсәт ҡуптарырын мин башыма ла килтермәгәйнем. Ер тетрәтеп ҡаты күк күкрәй, бөтә күк йөҙөн яҡтыртып йәшен ялтлай, йәшен таштары ҡот осҡос ҡеүәт менән сатыр-сотор килеп минең эргәмә генә төшөп ярылалар ҙа, бөтә урманды ялҡын ялмап ала, мин үҙем дә тотош ут-ялҡын эсендә тороп ҡалғандай булам.

Шул саҡ:

— Кире борол, кире, хәсрәт мөслимә, юҡһа һәләк булаһың! — тип йән асыуы менән ҡысҡырған бер тауыш ишетеп ҡалдым. Ҡотом осоп, ҡамсыны һелтәргә лә, һелтәмәҫкә лә ҡыймай, шаҡ ҡатып торам. Дөрләп янған ағастар миңә ауа, осҡондары өҫтөмә яуа башланы. Уларҙан янтайып ҡына ҡотолам. Шул саҡ һуңғы ҡабат ҡамсымды һынап ҡарамаҡ булып, күҙемде йомоп алдым да тирә-яғыма

һелтәнә башланым, теге изге ҡарттың әйткәненән дә күберәк һелтәнеп ташлағанмындыр, күрәһең: күк күкрәүе баҫылып, шаушыу һил булып ҡалғас, күҙем асып ҡараһам, йәнә теге һуҡмаҡҡа барып төшкәнмен икән; урман да оторо йәшәреп киткәндәй төҫлө ине, тик сыйнап торған тауыш ҡына тынмағайны. Бараһы юл инде күп ҡалмағас, күңелем урынына ултырып, ары киттем. Һуҡмағым мине тәрән бер ярлауға килтереп сығарҙы, уның төшөр яры үтә текә ине. Мин шулай, тирә-яҡҡа ҡаранғылап, һөҙәгерәк урын һайлап торған арала, ҡапыл ярлау аҫтынан бер имәнес ҡанатлы ғифрит атылып сыҡмаһынмы! Уның баш яғы януарҙыҡына оҡшап, үҙе ике алғы тәпәйҙәренә баҫып тора, ә артҡы һаны йылан һымаҡ һуҙылып төшкәйне, бөтә тәне тәңкә менән ҡапланған. Ул, һауаға ҡалҡынып, йән асыуы менән миңә ташланырға иткән мәлдә генә мин тылсымлы ҡамсымды һелтәп ебәргәйнем, баш осомда ғына ҡыуыҡ һымаҡ шартлап, юҡ та булды. Бәхеткә күрә, был минең өҫкә сихырсы ебәргән һуңғы ҡурҡыныс булғандыр, күрәһең, шунда уҡ алдымдағы ярлау ҙа юҡҡа сыҡты, уның урынына үлән ҡаплаған туғай, туғай уртаһынан сылтырап аҡҡан шишмә генә ялтырап ята ине. Был хайран иткес хозур урын, әйтерһең, миңә ял итергә генә әҙерләнеп ҡуйылған. Мин, инде ҡамсымдың тылсым көсөнә тамам ышанғас, атымдан төшөп, ашарға ебәрҙем дә үҙем тыныс ҡына йоҡларға яттым.

### УН БИШЕНСЕ КИС

Иртән иртүк торһам, атым эргәмдә генә утлап йөрөй ине. Шишмә һыуы менән йыуынып алғас, иртәнге намаҙҙан һуң, сихыр эйәһе торған тау ҡыуышына йүнәлдем. Тауыштың торған һайын сағыуыраҡ ишетелә барыуына ҡарағанда, тау ҡыуышы яҡында булырға тейеш ине. Мин инде урман араһынан сығып, текә тау егенә барып төкәлгән, сәскә менән сыбарланған туғай буйлап киттем. Тау типһененә яҡынайған һайын, ҡая аҫтынан ҡуйы төтөн күтәрелгәнен, ара-тирә ялҡыны ла бөркөлгәнен күрә барҙым. Ҡаяға табан илткән башҡа юлды күрмәгәс, был ут-төтөндө сихыр әмәленә һанап, ул-был була ҡалһа, тип, ҡамсымды һелтәргә әҙер генә киләм. Яҡынлашҡан һайын, ялҡын да ҙурая барып, бөтә ҡаяны ялмап алғандай ине. Ялҡын тейməҫтәй аралыҡта туҡтап, килгән һуҡмағымдың ҡайҙа табан киткәнен байҡаһам, уның туп-тура ялҡын эсенә инеп киткәнен күрҙем; шулай итеп, шунда минең юлым да бөттө.

— Эй! — тип ҡысҡырып ебәрҙем мин бар көсөмә. — Күрәһең, һин мине һуңғы сихырың менән һыйламаҡсыһыңдыр? — тип ҡамсымды һелтәп тә ебәрҙем. Ялҡын шундуҡ юҡ булды. Мин үҙем менән ҡая араһында ат һикереп сығырҙай ғына тәрән соҡор ҡалғанлығын күрҙем. Әгәр ҙә мәгәр аръяҡ ярҙа тигеҙ урын булһа, был ғына араны атым һикереп тә сыға алыр ине, тик соҡор ҡаяның нәҡ аҫтынан булып, иңенә-буйына әллә ни саҡлы ергә һуҙылып киткәс, һис кенә лә үтеп сығырҙай түгел ине. Ҡая менән соҡор тотош бер таштан торған һымаҡ, тимгел-тимгел ҡан төҫлө юлаҡтар йүгергән

ҡара төҫтә булып, бер ниндәй ҙә тишек-еге күренмәй ине. Мин ҡайҙан нисек итеп сығырға тип аптырап торғанда, ҡылт итеп башҡа быныһы ла минең юлымды кәртәләргә тырышҡан сихырсы хәйләһе түгелме икән тигән уй килеп төштө. Шул мәлдә ҡолағыма:

— Туҡта! — тигән тауыш салынып ҡалды. — Һиңә минән ни кәрәк? — тип ҡабатланы был тауыш.

— Хикмәт эйәһен күреп, һөйләшергә иткәйнем, — тинем мин.

— Ә һин тылсымлы ҡамсың менән уға ҡаршы һелтәнмәҫһеңме һуң? — тип төпсөндө.

— Юҡ, — тинем мин уға.

— Ант ит, — тигәс, мин ант итәм, тиеүем булды, шунда уҡ таш диуар һелкенеп ҡуйҙы ла, күҙ алдымда ҙур бер ер тишеге пәйҙә булды. Унан тәүҙә ҡуйы төтөн, аҙаҡ ялҡын бөркөлөп сыҡты, тик был әллә ни оҙаҡҡа барманы. Бының артынса уҡ үтә ныҡ ҡартайған бер әҙәмдең башы менән иңбаштары күренде. Уның йөҙ-сырайы ҡаҡ һөйәккә ҡалып, эйәк осонда бер-ике бөртөк ап-аҡ һаҡалы ғына тырпайып тора ине. Башына ул осло кәпәс кейеп, кәпәсен сәллә урынына ыҫылдашып торған йыландар уратып алған. Уның был ҡот осҡос ҡиәфәтенән минең бөтә тәнем эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Ул мине күргәс тә:

— Минән һиңә ни кәрәк, сая мөслимә? Бер ниндәй хәүеф-хәтәрҙән дә ҡурҡмайынса, минең төйәгемә нисек килеп еттең былай? — тип һорай һалды.

— Изге ниәт менән йөрөгәндәр ҡурҡыуҙы белмәй ул, — тип яуап бирҙем мин.

— Ниндәй ниәт менән йөрөгәнең миңә мәғлүм, уныһына иҫем китмәй, тик бына юлыңда осраған минең эҙәрләүсем һиңә бик хәтәр ҡамсы биргән икән, — тине ул.

— Ул ҡамсыны мин бушҡа һелтәмәйем, ҡасан ҡулланырға beләм, — тинем уға ҡаршы. — Әгәр ҙә мәгәр һин минең һорауҙарыма яуап бирмәһәң, минән игелек көтмә!

— Ә яуап бирһәм, ни ҡылырһың? Әйҙә, һорап ҡара, — тигәс, мин атымдан төштөм дә, уны иркенә ебәреп, соҡор ситенә килеп бер аҙ ултырғас та тегенән:

— Кем һин? Ҡайҙан булаһың? Был яҡтарға нишләп килеп сыҡтың? — тип һораша башланым. Ә ул миңә:

— Мин ҡасандыр үҙ ғилемдәре менән бөтә донъяны ҡаплап алған хикмәт эйәләренең береһе булам, — тип һөйләп алып китте. — Тик мин был сихырсылыҡ оҫталығым менән бөтәһенән дә өҫтөн булып сыҡтым. Шуға күрә лә үҙ ғүмеремде ошо көнгәсә һуҙып киләм. Мин был ғүмер эсендә ҡояш сығып, байыуын ике мең мәртәбә күрҙем. Был һүҙҙәргә төшөнәһеңме, мөслимә? Һеҙҙең бәхетле урман халҡы[62], үҙенә әле һәләкәтле ғилем яҡтылығы килеп етмәгәнлектән, боҙоҡлоҡҡа бирелмәй, ябайлыҡта, ғәйеп-гонаһһыҙ көн күрә. Ғәфү ит, әйтһәм әйтәйем инде үҙеңә: мин, һеҙҙеңсә иҫәпләгәндә, йөҙ ҙә алтмыш ете мөсәл[63] ғүмер йәшәнем. Бөтә был ваҡыт эсендә мин сихырсылыҡ серҙәренә өйрәнеп, ер менән дә, күк менән дә, ундағы бөтә йән эйәһе менән дә ни теләһәм, шуны эшләй алырлыҡ хәлгә еттем, быны һин үҙ күҙҙәрең менән күрҙең. Әммә ахыры

һәләкәт менән барып бөтөр был теләк, донъяға һеҙҙе яратҡан хоҙай ҡөҙрәтенә тиң булғанлыҡтан, мине бөтә ғүмерем буйы ыҙалай, бөтә ғүмерем ахырына саҡлы иге-сиге күренмәҫ ғазап әҙерләй. Үҙемдең тылсым ҡөҙрәтем менән мин халыҡтарҙы йә күтәрҙем, йә төшөрөп сығарҙым; әллә күпме ҡалалар төҙөп, уларҙың кешеләрен, байлығын арттырып, һуңынан фәҡирлеккә дусар иттем. Әммә мин дә ҡаршы тора алмаҫтай, минән дә өҫтөн сығыр бер көс бар донъяла.

Был һалҡын илдәргә мин саҫкау-һалҡындарҙың ни икәнен дә белмәгән иң эҫе яҡ ерҙәрҙән, Һиндостандан килеп сыҡтым. Үҙем мин бик ҙур бер ҡалала йәшәнем. Минең ғилемемде белергә тип бик күп шәкерттәр йыйылды, әммә мин уларҙың береһенә лә үҙем белгән ғилемдең бөтә серҙәрен асып бирергә теләмәгәнлектән, улар минән йә ярты ғилем эйәһе, йә дөрөҫөрәге — томана булып киттеләр. Ахырҙа мин торған төйәгемде алмаштырып ҡарамаҡсы булдым. Үҙемә буйһонған рухтар ярҙамында күккә күтәрелеп, үҙемде төньяҡҡа ҡарай илтергә ҡуштым. Бейектән ер йөҙөн күҙәтеп, был яҡтарҙа мин ҙур-ҙур йылғаларҙы күрҙем, шуларҙың өсөһөнән иң уңайлыһы тип Иҙел буйын һайланым[64]. Уның буйында үтеп сыҡҡыһыҙ урмандар, иңләп бөткөһөҙ далалар йәйелеп ята ине. Шуның өҫтөнә халҡы ла аҙ булып, уныһы ла ҡырағай хәлдә тип әйтерлек булғас, мин үҙемә ошо Иҙел ярынан урын һайланым. Үҙемдең тылсым ҡөҙрәтем менән алыҫ ерҙәрҙән халыҡтарҙы йыйып килтергәс, олуғ бер ҡала һалдырып, уны үҙ исемем менән Брахим* тип атаным. Халыҡ өҫтөнән унда бер хаким ҡуйып, һеҙҙеңсә батыр тип йөрөтөлгән яугир ирҙәрҙе һайлап алдым. Һеҙҙең батырҙар мал-тыуарығыҙға баҫышҡан йыртҡыстарға ғына ҡаршы сыға, ә минең яугирҙарым үҙем төҙөткән ҡаланы емерергә теләгән яугирҙарҙы юҡ итергә өйрәнгәйнеләр. Берәүҙәрен сауҙагәр булырға ҡушып, ҡоро ер юлдары менән дә, һыу юлдары менән дә сит ерҙәргә барып, үҙ ерҙәренә уларҙан төрлө-төрлө затлы туҡымалар, ҡорал-ҡорамалдар алып ҡайтырға мәжбүр иттем. Бындай яман кәсепте һеҙҙең хуш күңелле урман халҡы белмәй ҙә әле. Өҫтөгөҙгә кейгән ябай кейемегеҙ ҙә үҙегеҙгә яраған, беҙҙен затлы кейемдәрҙе күрмәгәс, бөтә донъя һеҙгә бер төрлө кейенгән шикелле. Әммә ләкин килер бер заман, һеҙҙең дә нәфсегеҙ аҙып, шул уҡ аҙғынлыҡҡа бирелерһегеҙ. Быны мин көндәй асыҡ күреп торам, әгәр быны нилектән шулай булырын белгең килһә, һуңынан аңлатып бирермен. Ә хәҙергә мин һинең бында ни өсөн килдең тигән һорауыңа ғына яуап биреп китәйем. Ҡыҙыҡ күрһәң, тыңла хикәйәтемде.

Минең ҡалам шулай бөтә нәмәгә лә бик бай ине. Уның тирәһендә йәшәгән халыҡтар уға яһаҡ түләр булып киттеләр. Ә яһаҡ түләргә теләмәгәндәренә минең тарафтан ҡуйылған хаким, һеҙҙеңсә инде ул Баш тип атала, күп кешеләре менән барып, ҡаршылашҡандарын туҡмап-язалап булһа ла түләтер, ҡалғандарын үҙенә буйһондорор ине[65]. Шулай итеп уға ҡаршы торор кеше лә булманы, сөнки минең сихыр көсөм һәр саҡ уға таяныс булды. Шулай байтаҡ замандар минең ҡалам аман ғына йәшәй бирҙе, әммә, бәхетһеҙлеккә ҡаршы, бер көн килеп, уның ҡолатылырын мин алдан уҡ белеп тора инем. Үҙ ғилемем менән ни ҡыла алам, шуның бөтәһен дә

файҙаланып, ҡулдан килгән тиклем үҙ сихырым менән мин был аяныс хәлгә ҡаршы төшөп килдем. Алыҫ төньяҡ илдәренән килеп сыҡҡан аҡ бей[66] ҡулы аҫтындағы аҡ яугирҙар болото, төрлө сихыр көстәрен еңеп сығыр бер һүрәт төшөрөлгән тыу күтәреп, минең ҡалама ла, илемә лә баҫып инергә әҙер тора ине инде. Шул мәл мин быларға ҡаршы үҙемдең тылсым көсөм менән һаҡланған ғәскәрҙәремде ебәреп, ерҙә лә, күктә лә, һыуҙа ла ғәрәсәт ҡуптарып, бөтә ғифриттәрҙе йәһәннәмдәренән ҡуҙғытып сығарҙым да дошмандарыма ҡаршы яуға ташлағайным, тыуға төшөрөлгән теге һүрәтте күреү менән былар, пыран-заран килеп, юҡҡа сыҡты. Ай, ҡыҙым, был һүрәт хаҡында һорашаһы булып ауыҙыңды ла аса күрмә, юҡһа икебеҙ ҙә харап булырбыҙ.

Мин, был һүҙҙәрҙән шомланып, уның ары һөйләүен үтендем.

— Беҙҙең ғәскәрҙәр шулай кире ҡасып килеп етһәләр ҙә, әле әйтеп киткәнемсә, минең инде тылсым көсөм бөткәйне. Халыҡ эйәртеп, хаким үҙе килеп минән ярҙам һорағас, мин уға, ярҙам итеремә ышандырып, ҡалала нығынырға ҡуштым. Яугирҙарға көнөн дә, төнөн дә һаҡта торорға кәңәш итеп, дошманды еңеп сығасаҡһығыҙ, тип ышандырҙым. Ә үҙем, көсһөҙлөгөмдө халыҡ белеп ҡала күрмәһен, тип, ҡаланан һиҙҙермәй генә сығып китеү яйын ҡараным. Икенсе төндө үк шулай иттем дә әрүәхтәремә үҙемде берәй алыҫыраҡ бейек ергә илтеп ҡуйырға ҡуштым. Үҙемдең яратҡан ҡаламдың бәхетһеҙ ахырғы мәлен күреп торайым, ҡулымдан килгән тиклем, тылсым көсөм менән ярҙам итәйем тигән уй менән эшләнем быны.

## УН АЛТЫНСЫ КИС

Был хәсрәтле көндөң таңында уҡ мин яҡынлашып килгән аҡ ғәскәр яуын, уның ҡала эргәһенә теҙелешеп килеп торғанын да, ҡала эсендә ҡурҡыуҙан ығы-зығы килеп йүгерешеп йөрөгәндәрен дә күреп торҙом. Шулай ҙа үҙем һайлап ҡуйған хаким Орҡан[67] (уның исемен әле генә телгә алам), бер ниндәй ҡурҡыу белмәй, ҡала диуарҙары буйында торған һаҡсыларын икеләтә арттырып, иң яҡшы йәйәүле яугирҙарын да, атлыларын да һайлап алды ла, ҡапҡаларҙы асырға ҡушып, дошмандарының яуын кире ҡайтарырға үҙе ҡаршы сыҡты. Мин уның һәләк булырын белһәм дә, үлһә лә үс алып үлер тип, уға көс-ғәйрәт биреп торҙом. Ул шулай йәйәүле ғәскәрҙәрен сығарып, оҙон һөңгөләр, киң ҡалҡандар менән ҡоралланған көйө, уларҙы уртаға теҙҙе, ә һыбайлыларын ике яҡ ҡанатҡа ҡуйҙы. Үҙе атылыр һөңгө лә ҡылыс менән ҡоралланған һайланмыш һыбайлыларын алғасҡыға алып сыҡты. Аҡ яугирҙар уларҙы кире ҡағырға әҙер тора ине инде. Ҡояш төҫлө ялтыраған ҡалҡандарын күреп кенә лә минең ҡотом осто. Ҡылыстарын ҡалҡандарына һуҡҡанда, күк күкрәгән төҫлө тауыш сыға ине, ә ғәскәр уртаһында күренгән тыуҙары, минең Орҡанға ярҙамға тип ебәргән бөтә сихырымды кире ҡағып, унда тик үҙ батырлығы менән үҙ көсөн генә торғоҙоп ҡалдырҙы. Ике яҡ та уҡ атышыр араға килеп еткәс, ике

яҡтан да уҡтар ямғыр кеүек яуырға кереште, шулай ҙа сая Орҡан, алыҫтан алышырға теләмәй, үҙ тирәһендәге яугирҙары менән аҡ яугирҙарҙың алғаҫкы рәтенә бәреп инде. Тәүге осраған яугирҙы һеңдерә һуҡты ла ярһыу менән ғәскәр уртаһына уҡ инеп китте. Үҙенә ҡаршы килгәндең бөтәһен дә ҡырып бара. Унын батырлығынан ғәйрәт алып, ҡалған һуғышсылары ла аҡ яугирҙарға арыҫлан һымаҡ ташланды, былар хатта тегеләрҙе ҡыйратып ташлар һымаҡ ине лә, тегеләр ҙә таш диуарҙай ҡаршы торҙолар, ҡалҡандарына ышыҡланып, ҡылыстары менән торарға тотондолар. Орҡан йән асыуы менән алғаҫкы ғәскәрҙәрҙе ҡыҫмаҡлап, һаман эскә инә бара, уларҙы турап һала, яугирҙары ла батырлыҡта ҡалышмай һуғыша ине. Аҡ яугирҙарҙың һул ҡанаты был ҡыҫымға түҙә алмай, сигенеү генә түгел, Орҡандың алдынан янтайып ҡаса ла башлағайны, тик көмөш кейем менән алтын торҡа кейгән яугир етәкселегендәге уң ҡанат беҙҙең һул ҡанатҡа шундай ҡаты итеп килтереп һуҡты, тәүге һелтәүҙә үк ҡыра һалып, сафтарҙы боҙҙо ла беҙҙекеләрҙе, ҡуйһарыҡтай эйҙәп, ҡалаға ҡыҫмаҡлап алып китте. Көмөш кейем кейгән һыбайлының ҡылысынан беҙҙең яугирҙарҙың сәсрәп осҡан баштарын күреп, минең сәстәрем үрә торҙо, ҡайһыларын ул уртаға сабып өҙә, ҡайһыларын аты-ние менән ҡолата һуға ине. Бер һүҙ менән генә әйткәндә, ҡаланан сыҡҡан ярты ғәскәрҙе ул бер үҙе ҡырып кире илтеп тыҡты.

Күҙенә аҡ-ҡара күренмәгән Орҡан ярты ғәскәренең юҡлығын да күрмәй, ҡасып барғандар артынан ҡыуа китеп, ҡала ҡурҡыныс хәлдә икәнлеген сапҡын килеп әйткәс кенә иҫенә төшөрҙө лә, тештәрен шыҡырҙатып ҡыҫып, күҙенә салынған үҙ яугирҙарын да, дошмандарын да аямай аты менән тапатып, кире сапты. Ҡалаға яҡынайғас, диуарҙарға үрмәләгән аҡ яугирҙарҙы күреп, үҙенекеләрҙең юҡлығына асырғанып, бер үҙе бер яуға ҡаршы ташланды. Шул саҡ был, теге мин һиңә әйткән аҡ кенәздең сабып килгәнен күреп ҡалды. Былар бер-береһенә һөңгөләре менән килеп бәрелгәндә, шундай ҡаты сәкәшеүҙән икеһенең дә һөңгөләре һынып төштө, шулай ҙа ике һыбай ҙа аттарында, төп һымаҡ, ҡымшанмай ҙа ултыра ине. Шул саҡ уларҙың ҡулдарында сың да сың килеп ҡылыстары ғына ялтырай башланы. Орҡан, ҡоторған юлбарыҫ һымаҡ, үҙ-үҙен аямай, ярһыуҙан тегеһенең үлтерә сабыр ерен генә эҙләй, ә аҡ кенәз һуғыуҙан бигерәк, һаҡланырға тырышып, дошманын хәлдән тайҙырырға мәкер ҡора ине булһа кәрәк. Быны һиҙеп алған Орҡан ҡалҡанын алып бырағтырҙы ла, ҡылысын ике ҡулы менән уҫлап, бар көсөнә аҡ бейҙең торҡаһына тондорҙо. Тик тегенеһе ҡалҡаны менән ҡапланып өлгөрҙө; ҡалҡан Орҡандың шул тиклем ғәйрәтләнеп сабыуынан селпәрәмә килеп ергә ҡойолдо, торҡаһына һуғылған ҡылыстың һәлмәклегенән аҡ бей сайҡалып китте. Ул үҙенең ҡалҡанынан яҙып ҡалғас, ярһыуынан, Орҡанды аяп-нитеп тормай, асыҡтан-асыҡ һөжүмгә күсте. Шул мәл, ике аралағы алышҡа иҫтәре китеп, еңеүселәр ҙә, еңелеүселәр ҙә, һуғышыуҙарын онотоп, ҡарап шаҡ ҡатҡайнылар. Аҡ кенәздең көмөш кейеме ныҡ булһа, Орҡандың кейеме лә унығынан ҡалышмай, саф ҡоростан ғына ҡойолған, ә башындағы торҡаһы ҡанатлы йылан рәүешендә

ине. Был кейемде, тылсым көслө ҡушып, мин үҙем эшләгәйнем, шулай ҙа аҡ кенәздең ҡылысы уны күп урындан телгеләп бөткәйне инде. Орҡандың ҡылысы ла дошманының көмөш кейемен аҙ телгеләмәгән, көмөш кейем өҫтөнә ҡан һарҡып сыҡҡаны ла күренеп тора ине. Ҡанын күреп, аҡ батыр сығырынан сығып, шундай ғәйрәт менән Орҡандың торҡаһына килтереп сапты. Тылсымлы торҡа ҡап уртаға ярылып, Орҡан иҫен юғалтып, атынан ҡолағас, аҡ ғәскәр яғында шатланып ҡысҡырған тауыштар яңғыраны, ә ҡала яғындағыларҙың, ҡобаралары осоп, йөҙҙәре ағарып китте. Аҡ яугирҙар шунда уҡ ерҙә ятҡан Орҡанды һырып алғайнылар, аҡ кенәз атынан төшә һалды ла, ҡылысы менән уларҙан батырҙы аралап алып, эргәһенә килде, сағыу тауышы менән:

— Һин еңелдең, Орҡан батыр, һинең ҡалаң инде минең хөкөмөмдә, шулай ҙа мин һинең батырлығыңды ололап, дуҫ булыуыңды, минең яҡлы булыуыңды теләйем, минең динемде ҡабул ит! — тигәс, һуңғы һүҙҙәрҙе ишетеп, Орҡан ҡотороноп килеп торҙо ла, ҡулында ҡылысы юҡлыҡтан, биленән хәнйәрен һурып алып, йән асыуы менән:

— Мә, һин ҡабул ит минекен! — тип, тегенең кейем ярыҡтары араһына килтереп тә ҡаҙаны. Ниндәйҙер күҙгә күренмәгән көс кенә был һәләкәтле ҡаҙауҙы йомшарта төштө. Шулай ҙа кенәз, йәрәхәтен тойоп, бер аҙ артка тайшанып, бер һелтәүҙә Орҡандың яланғас башын өҙә сапты. Орҡан ергә ауыу менән минең дә бөтә өмөтөм селпәрәмә килде. Аҡ ғәскәрҙең башлыҡтары, үҙ кенәздәрен һырып алып, күп урындан йәрәхәтләнгәнен күргәс, уға ярҙам итергә итһәләр ҙә, кенәз ҡылысы менән ҡалаға күрһәтеп:

— Иң элек ҡаланы алығыҙ, ә минең яраларым хәүефле түгел, — тип әмер бирҙе, һуңынан аҡһаҡалдарынан береһен саҡырып алып, уға: — Ҡаршылашҡандарын юҡ итегеҙ, ә бисәләре менән бала-сағаларына теймәгеҙ, — тине. Шунан һуң ғәскәрҙәр ҡабаланып ҡалаға ҡарай йүнәлделәр. Ҡаланың ҡапҡалары ҡурҡыштарынан ҡасып килгән яугирҙарға асып ҡуйылғанлыҡтан, еңеүселәр ҙә еңелгәндәр менән бергә килеп инделәр. Шунда мин һуңғы үсемде алмаҡ булып, ҡала халҡына асыу өрөп, ирҙәргә генә түгел, ҡыҙ-ҡырҡынға ла нык ҡаршы торорға ҡуштым. Улар шулай иттеләр ҙә. Ҡала халҡын аяп маташҡан күп еңеүселәр үҙҙәре үк һәләк булдылар. Ҡала тышынан был хәлде күреп торған кенәз яугирҙарына ҡаланы талау, ҡырыу менән генә тороп ҡалмай, уны бөтөнләй яндырырға ирек ҡуйҙы.

## УН ЕТЕНСЕ КИС

Ҡапыл шул саҡ ҡаланың төрлө урындарында төтөн күтәрелде, үҙ ағай-энеләренең ҡойолған ҡанына үс итеп, асыуҙары килгән яугирҙар олоһон да, кесеһен дә, бисә-сәсәне лә аяп тормай, бөтәһен дә ҡылыс менән турап, утҡа тоттолар. Үкһеп илаған, үкергән тауыштарҙы ишетеп, мин асыуымдан тештәремде шығырҙата ҡыҫып, бөтә йәһәннәмдәре менән аҡ кенәздәрҙән, уларҙың бөтә халҡынан үс

алырға ант иттем. Бынан һуң, ҡаланы ҡалдырып китеп, бына ошо яҡтарға килеп сыҡтым. Бында мин үҙ ҡулым аҫтындағы рухтар менән кәңәш-төңәш итеп, ул аҡ халыҡҡа һәләкәт әҙерләйем. Уларҙы бөтә илдәргә ебәреп, төрлө ырыу халыҡтарын Иҙел буйына күсеп ултырырға саҡырып, бында ҡала-кәлғәләр* төҙөп алғас, үҙем дошман күргән был илдәрҙең ҡотон алып торорға йыйынам.

Иҙелгә яҡын ғына ерҙә, унын һул яҡ ярында бер бейек тау бар, ана шул урында тиҙҙән алыҫ илдәрҙән килгән халыҡтар бер ҙур ныҡлы ҡала[68] һалырҙар; шунан өс йылғанын буйында йәшәгән үҙҙәренә күрше уар*, муҡшы*, сирмеш* халыҡтарын баш эйҙерерҙәр, уларҙы үҙҙәренә яһаҡ түләүсе итерҙәр. Был ғына ла түгел, үҙҙәре менән уртаҡ Мөхәммәт динендә булған һеҙҙең урман халҡы ла уларҙың хакимлығы аҫтында ҡаласаҡ. Былар шулай көсәйеп алғас, аҡ халыҡҡа ҙур ҡаза һалып, бер нисә йылдар буйы яһаҡ түләтеп торасаҡ. Ә мин, быларҙың хакимлығы шулай байтаҡ ерҙәргә таралғанын күргәс, ҡалаға әүлиә ҡарт һүрәтендә килеп сығасаҡмын да, былар мине хөрмәт менән ҡабул иткәс, мин уларға аҡ кенәздәрҙе ҡырып бөтөрөргә, беҙгә дошман диндәрен дә юҡҡа сығарырға кәңәш-төңәш биреп торасаҡмын. Шулай ҙа миңә инде күп йәшәйһе ҡалмаған, ул ҡайғылы ахыр көнөм килеп етер бер заман. Минең ғүмерем бөтөү менән сихыр көсөмдөң дә көнө бөтәсәк.

Бына шул саҡ аҡ кенәздәр тоҡомонан көслө, батыр бер ир тыуып уны үҙҙәренә баш ҡылып, батша тип атар. Ул әле йәш сағында уҡ үҙенең икһеҙ-сикһеҙ иле менән хакимлыҡ итә башлап, бөтә аҡ кенәздәрҙе бергә туплаясаҡ, үҙҙәре өҫтөнән мосолмандар ҡыҫымын алып ташлап, беҙҙең көстәрҙе күп мәртәбәләр еңеп сығасаҡ. Ике мәртәбә ул беҙҙең ҡаланы баҫып алыр булһа ла, уны туҙҙырмайынса, яһаҡ ҡына һаласаҡ. Мин был аҡ халыҡҡа, уларҙың көслө батшаһына, бигерәк тә уларҙың диненә һәр саҡ үс тотҡанлыҡтан, был аҡ хакимдың золомон ҡолатырға һәр саҡ ҡалала бола күтәреп торасаҡмын. Халыҡ, минең һүҙемде тыңлап, аҡ батша ҡуйған ханды ҡыуып, унын урынына икенсеһен ултыртып ҡуйыр ҙа аҡ батшалыҡҡа дошманлығын иғлан итер. Әле әйтеп киткәнемсә, аҡ батша, ике ҡабат еңеп, ике ҡабат боласыларҙы ярлыҡап ҡалһа ла, өсөнсө килеүендә инде, бер кемде лә аяп тормай, ҙур көс менән беҙҙең бөтә ҡаршылыҡты еңеп, ҡала диуарҙарын емереп инер. Бына шул саҡ мин дә, диуар ярығынан бар сихырҙарымды ебәреп торған көйө, өҫтөмә ауған харабалар аҫтында ҡалып, һәләк булырмын.

Тылсым эйәһе, ошо һүҙҙәрен әйткәс, башын аҫҡа эйеп, оҙаҡ ҡына ваҡыт уйға сумып ултырҙы. Тик минең үҙ яҙмышым хаҡында беләһем килеп, тағы бер нисә һорау бирергә тип, һүҙ башлағас ҡына, ул башын күтәрҙе.

— Һинең былай тип юрауҙарың мине таң ҡалдыра, — тинем мин. — Ә һинең ул Брахим тигән ҡалаңдың бөлгөнлөккә төшөүе хаҡында үҙебеҙҙең ҡарттарыбыҙҙан ишетеп белһәм дә, һин һөйләгән тиклемен белмәй инем әле. Хәҙер минең яҙмышым хаҡында ла һөйләп бирһәң ине, минең алда ни күрәһеләрем бар икән? — тип һорағас, ул тәрән йоҡонан уянған һымаҡ, тоноҡ күҙҙәре менән ҡарап алды ла былай тип һөйләп китте:

— Эй, батыр ҡыҙ! Исемең һинең есемеңә тап килгәнгә шулай ҡушылғандыр ҙа: һеҙҙең урман халҡы араһында әле быға са көсө, ҡыйыулығы, уңғанлығы менән һиңә тиңләшерлек бер генә ир-атты ла осратҡаным юҡ. Осратыу ғына түгел, инде бер ҡасан да бындайҙар булмаҫ. Әлегә һинең ырыуҙаштарың ҡылыҡ-холҡо менән дә күркәм, бар белгәндәре мал көтөү ҙә ҡорт үрсетеү, һунарға йөрөү булып, үҙ-ара дошманлашмай, хилүәт кенә ғүмер һөрөп яталар. Әгәр ҙә мәгәр һин бер егерме мөсәл ғүмер йәшәй алған булһаң, үҙ ырыуҙаштарыңды, донъя көтөүҙәренән генә түгел, кейгән кейемдәренән дә таный алмай торор инең. Ул саҡта инде уларҙың ер ҡаплап йөрөгән мал-тыуарҙары кәмеп бөтөр, һунарсылыҡтарына ла күптән ҡул һелтәп ҡуйған булырҙар ине. Зыңлап торған һөйәк янлы әҙернәләре урынына, әбей-һәбей һыу ташый торған көйәнтә ише, нәҙек ағастан бөккән йәйәләре генә тороп ҡалыр; йылҡы тарамышынан тартылған ныҡ кереш тартыу урынына ошо көйәнтәләрен йүкәнән өйөргән бау менән тарттырып ҡуйырҙар, ә һыҙғырып осор ҡырҡма башлы уҡтарын орсоҡ һымаҡ таяҡтар алмаштырыр. Ә бынан да яманырағы шунда: уларҙың күңеле аҙып ҡалыр, холҡо боҙолор...

Уның тәүге һүҙҙәренән үк ниндәйҙер әфәт һиҙенеп, күңелем шомлана башлағанлыҡтан, йәнем һыҡрауынан:

— Был ниҙән шулай булыр? — тип ҡысҡырып ебәргәнемде үҙем дә һиҙмәй ҡалдым.

— Былмы? Был шунлыҡтан булыр, ҡыҙым, — тип һөйләп алып китте күрәҙәсе. — Башта уҡ мин һиңә уар, муҡшы, сирмеш халыҡтары тураһында әйтеп киткәйнем бит әле, бына шул халыҡтар аҡ кенәз хөкөмөнән ҡасып, ҙур-ҙур төркөм булып һеҙгә килеп һыйынырҙар. Һеҙҙең күңелегеҙ киң булғас, уларҙың был меҫкен хәлен йәл күреп, бергә йәшәргә ҡабул итерһегеҙ. Ә улар, һеҙҙең ише, күсмә тирмәләрҙә йәшәп өйрәнмәгәс, үҙҙәренә торорға ағастан торлаҡ ҡора башларҙар, һеҙҙең донъя яратылғандан бирле ҡул да теймәгән ерҙәрегеҙҙең ҡыртышын һыҙырып, орлоҡ сәскән булып, шуның менән көн итә башларҙар, үҙегеҙҙе лә яңынан шул кәсепкә өйрәтерҙәр. Һеҙ үҙегеҙҙең ғүмер баҡый өйрәнгән кәсебегеҙҙе ташлап, был яңы ҡазаға күнегә алмай, хәйерселеккә тарып ҡалырһығыҙ. Ә улар, һеҙҙең ғәйрәтегеҙ ҡайтып, ҡайҙа барып тотонорға ла белмәй, миктәп ҡалыуығыҙҙы күрерҙәр ҙә арағыҙҙа ыҙғыш ҡына тыуҙырырға тырышырҙар, шул арҡала һеҙҙең бер ырыуығыҙ икенсеһенә ҡаршы күтәрелеп, бер-берегеҙҙе ҡаҡшатып ҡына бөтөрөрһөгөҙ. Ахыр сиктә эш шуға барып етер: һеҙгә тамаҡ ялғап торорлоҡ ҡына ер ҡалдырып, бөтә ерҙәрегеҙҙе тартып алып, йыйын килмешәккә бүлеп бирерҙәр. Үҙ өҫтөгөҙҙән ҡуйылған шул хакимдарға һеҙ, батырлыҡ менән дә, яу менән дә күтәрелә алмай, үҙ ерҙәрегеҙҙе үҙегеҙ үтенес-ялуарыуҙар менән генә һорап йөрөр хәлгә төшөрһөгөҙ.

Әммә һинең ғүмерҙә, хатта атайың, шулай уҡ бөгөн йәшәп ятҡан бүтәндәр ғүмер һөргәндә лә был хәл булмай әле.

Инде хәҙер үҙеңде ғүмер юлында ни көткәнлеген әйтеп ҡыуандырайым. Һинең ирең Урал тауҙарының аръяғында ятҡан үҙегеҙҙең ялан яҡ халҡығыҙҙан сыҡҡан бер батыр булыр. Йәшкә ул һинең менән бер самала, ә батырлығы, көс-ҡеүәте, таҫыллығы менән

һиңә типә-тиң булыр. Һин, уны күңеленә оҡшатып, атаң йортонан күсеп китерһең[69]...

— ...Мин ундайҙарҙан булмам: мин бит һине тәү башлап ҡына күреп торам, һин мине йәберһетмәнең дә. Шуға күрә, сәләменде ҡабул ҡылып, үҙеңә лә шундай уҡ сәләм бирәм, — тинем.

Ул минең үҙемде лә, атымды ла бик ентекләп ҡарап торҙо ла:

— Батыр егет! Атың был тиклем өҙлөккәс, һин бик алыҫ юл үткәнһеңдер, ахыры? — тип һорай ҡуйҙы.

Мин, алдап-хәйләләп өйрәнмәгәс, уны-быны уйлап тормай, өйҙән сығып киткәнемә инде айға яҡын ваҡыт үткәнен әйтеп һалдым.

— Айға яҡын! — тип ҡуйҙы ул, күҙҙәремә туп-тура ҡарап. — Һин үҙең Ҡыҙрас ауылынан түгелме?

Уның ауыҙынан атайымдың исемен ишеткәс тә, үҙемдең ҡолаҡ остарыма тиклем ҡыҙарғанымды тойоп, уның рөхсәтенән башҡа сығып китеүемә күңелем әрнеп, башымды аҫҡа эйә һалдым. Былай итеп өндәшмәй тороуымдан да оялып, саҡ-саҡ ҡына сыҡҡан тауышым менән уның Ҡыҙрасты ҡайҙан белгәнен һораным.

— Уны ҡайҙан белгәнемде мин һиңә һөйләрмен, — тине ул, — хәҙергә, әйҙә, аттарыбыҙҙан төшәйек тә, мин һине Ҡыҙрастың бисәһе юлға ҡойоп ебәргән ҡымыҙ менән һыйлайым башта...

Һеҙҙән йәшерен-батырыны юҡ, кәҙерле ҡунаҡтарым, батырҙың был һүҙҙәренән мин ҡойолоп төштөм, ҡоторған айыуҙар менән алышҡанда ла былай ҡаушап ҡалғаным юҡ ине. Атымдан төшөп, кешәнләп ебәрҙем дә, был тағы ни ҡушыр икән тип, баҫҡан еремдә шаҡ ҡатып ҡалдым. Ул да атынан төшөп, ҡанъяғаһынан турһығын сисеп, туҫтағын алды ла:

— Әйҙә, ултырышайыҡ, батыр! Һинең күптән үк ҡымыҙ татып ҡарағаның юҡтыр, ә Ҡыҙрас бисәһе бешкән ҡымыҙҙы ауыҙ иткәнең дә булмағандыр. Һай, шундай яҡшы әсә, күҙ йәшен түгә-түгә турһыҡҡа ҡымыҙ ҡойоп бирҙе ул.

Был һүҙҙәр минең йөрәгемә уҡ һымаҡ килеп ҡаҙалды. Ул миңә туҫтаҡ менән ҡымыҙ һонғас, саҡ ҡына ауыҙ иттем дә, туҫтаҡты кире биреп, күҙ йәштәремде күрһәтмәҫкә була, ситкә боролоп, һөрткөләй башланым. Тик уның оҫҡор күҙҙәренән быны йәшерә алманым. Ул туҫтаҡты бушатып, йәнә миңә ҡоя башлағайны, шул арала мин үҙ-үҙемде ҡулға алып:

— Ҡыҙрас бисәһе нилектән шулай йәш ҡойҙо һуң? — тип һораным.

— Башта туҫтағыңды эс, унан мин һиңә һөйләп бирермен, — тине ул.

## УН ТУҒЫҘЫНСЫ КИС

— Минең һеҙҙең халыҡтан түгел икәнлегемде кейемемдән дә айыраһыңдыр бит?

— Айырам, — тип йөпләп ҡуйған булдым мин, — өҫтөңдәге барыҫ тун да, аяҡ кейемең дә һинең ялан халҡынан икәнеңде әйтеп тора.

— Тап өҫтөнә баҫтың, батыр, һинең менән мин бер халыҡтан булһаҡ та, кейем-һалымыбыҙ ҙа, кәсеп-һөнәребеҙ ҙә бер иш түгел шул, тора-бара быны һин үҙең дә күреп белерһең әле. Ә хәҙергә мин үҙем менән таныштырайым: исемем минең Алдар булыр. Үҙебеҙҙең ете ырыу араһында мине батыр тип тә, атсабыр тип тә йөрөтәләр. Был ҡушаматты миңә, көсөм, таҫыллығыма ҡарап, йәштән үк тағып ҡуйғайнылар инде. Быны юлбарыҫ ише уҫал януарҙарға ҡаршы һунарға сыҡҡанда ғына күрһәтеп ҡалманым, яуыз ен пәрейҙәр ҙә минән ҡоттары осоп тора. Мин уларҙың башына күп еттем, улар ҡыуып алып киткән мал-тыуарҙы күп ҡайырып алып ҡалдым. Беҙҙең аҡһаҡалдарҙың һәр береһе мине ҡан-ҡәрҙәш итергә теләп, һылыу ҡыҙҙарын күпме генә димләп ҡараһалар ҙа, мин һаман баш тарта килдем. Ә көслөк менән башлы-күҙле итергә минең бер кемем дә юҡ ине: ата-әсәнән бик бәләкәйҙән үк үкһеҙ тороп ҡалғанмын. Шулай һаман буйҙаҡ йөрөп, ғүмеремде тик батырлыҡтар эшләп үткәрә бирҙем. Быҙың һайын мин ете ырыу араһында дан ҡаҙанып, уларҙың теленән төшмәҫ булдым. Алыҫ ырыуҙарҙан килеп, мине үҙҙәрен ҡурсаларға, йә мал-тыуарға баҫышҡан уҫал януарҙарҙан, йә яуыз ен-пәрейҙәрҙән йолоп ҡалыуымды һорар булдылар. Бынан бер йыл элек, көндәрҙән бер көн шулай беҙҙең арҙаҡлы аҡһаҡалдарыбыҙҙың береһе булған Айсуl атлы ҡарттың йыйынына саҡырылғанда, хужаның эргәһендә ултырған һеҙҙең яҡтан килгән бер ҡунаҡты күрҙем. Айсул ҡарт, миңә сәләм биреп:

— Ҡил әле, улым, бына ҡунаҡ менән иҫәнләш, — тип үҙ эргәһенә саҡырып алды, мин үҙебеҙҙең ғәҙәт буйынса, ҡарттарға ололоҡлап барып күрешкәс, ул минең ҡулымды ла ысҡындырмайынса, эргәһендә ултырған ҡунағына: — Был беҙҙең бөтә ырыуыбыҙҙа тиңдәше булмаған Алдар тигән йәш батыр булыр, — тип, миңә оло хөрмәт күрһәтеп, үҙ янына ултырырға ҡушты. Һәр йыйында була торған ҡәҙимге һый-хөрмәттән һуң, һеҙҙә лә шулайҙыр инде был, көрәш башланып китте. Һеҙҙең яҡтан килгән ҡунағыбыҙ, беҙҙең батырҙарҙың ғәйрәт-саялығына иҫе китеп, быҙың ишеләрҙе үҙҙәренең урман халҡында әле күргәне юҡ икәнен һөйләп ултырҙы ла былай тип ҡуйҙы:

— Унargың ҡарауы беҙҙең арҙаҡлы ҡартыбыҙ Ҡыҙрастың шундай бер батыр ҡыҙы бар, уның көс-ғәйрәтенә, таҫыллығына үҙебеҙ ҙә таң ҡалабыҙ. Урта йәштәге батырҙар ҙа, йәшерәктәре лә, ул көрәштә тиһеңме, ул аттан тартышта тиһеңме, ул уҡ атышта тиһеңме, уға ҡаршы сығырға береһенең дә йөрәге еткәне юҡ әле. Уның иң яратҡан һөнәре урманға китеп уҫал айыуҙар менән алышып йөрөү генә. Ул бер имәнес ҙур аҡ айыуҙы бер үҙе үлтерҙе. Айыу быҙың атын өҙгөләп ташлағас, ул атынан һикереп төшөп, айыуҙы хәнйәр менән сәнсеп ташланы. Был шулай януарҙар менән һәр алышта еңеп сыға торғас, маһайып китеп, ҡоҙалап йөрөгән бөтә кейәүҙәрҙән дә баш тартыр булды. Атаһының һүҙен дә, мин тик үҙемә тиң булған, йә мине еңеп сыҡҡан батырҙы ғына кейәүгә һанармын, тип ҡырт киҫте.

Был хәбәрҙе ишеткәс, Айсул ҡарт, миңә ҡарап:

— Алдар улым, бына һиңә кәләш, исмаһам! Еңһәң, уны тик һин генә еңә алырһың, быға беҙҙең беребеҙ ҙә икеләнмәй, — тип ҡуйҙы. Унан, ҡунаҡҡа боролоп: — Әйт әле, хәҙрәт, төҫкә-башҡа ла арыумы һуң ул? — тип һорағас, тегеһе:

— Унын матурлығы батырлығына тиң, беҙҙең бөтә яҡ ырыуҙарында ла уны батыр ҡыҙ тип кенә йөрөтәләр, — тине.

Мин килгән ҡунаҡтың бөтә һөйләгәндәрен йотлоғоп тыңлаһам да, Айсул ҡартҡа үҙемдең әле йәш булыуымды, кәләш йәрәшергә уйлағаным да юҡлығын белдереп ҡуйҙым.

Бөтә йыйын алдында батырлығы менән дан алған бер ят көрәшсе лә, үҙенә ҡаршы сығыр батырҙы көтөп, ҡорҙа ултыра ине. Был исеме менән дә, көсө менән дә Бәлүән тип аталған бер әҙәм ине. Үҙе буйға ла ибәтәйһеҙ оҙон, ә яурындары бына бындай беҙҙең саған уҡтар ҙа инләмәҫ, күҙ ҡарашы ужар сәсеп торған, ҡап-ҡара ҡырма һаҡаллы, бөтә тәнен йөн баҫҡан, әҙәм затынан бигерәк, йәнлеккә оҡшағайны. Көтмәгәндә-нитмәгәндә генә ул беҙҙең яҡтарға Аҡ диңгеҙгә ҡойған Яйыҡ тамағынан килеп сыҡҡан. Бына бөтә йыйын, бер батырҙың да бының менән алышырға баҙнат итмәгәнен күреп, көллөһө көллө яҡтан «Алдар!» ҙа «Алдар!» тип һөрәнләргә тотондо.

— Алдар! Шулай уҡ һин дә беҙҙең күңелде күрмәй, был диңгеҙ буйы батырын өҫтөн сығармаҡсы булаһыңмы? — тип намыҫландырғас, мин урынымдан тороп, майҙан уртаһына сыҡтым. Миңә ҡушаҡ килтереп тотторғас, ҡулыма уратып алып, тәкәббер Бәлүән ҡаршыһына барып баҫһам, уның минең баштан аша ҡарап тороуын күреп, быны еңеп сығырыма ла өмөт өҙөп ҡуйҙым. Шулай ҙа, ни булһа ла булыр, ырыуҙаштарымдың һүҙен йыҡмайым, тип тәүәккәлләргә булдым. Бер-беребеҙгә бил бирмәй, көстәрҙе һынашып, көрмәкләшә торғас, был мине күтәреп алмаһынмы! Мин дә бының бөйөрөнән һыта ҡыҫып алғас, сыҙамай, кире ергә төшөрә һалыуы булды, — мин шул арала, быны ботома һалып, быраҡтырып та ебәрҙем. Бөтә йыйын геү итеп ҡалды. Бәлүән шунда, иҫенә килеп, ятҡан еренән торҙо ла, бөтә йыйынға ҡарап:

— Егерме йыл буйы көрәшеп, мине былай ташлаған кешене күргәнем юҡ ине әле. Алдар батыр маҡтанырға ла хаҡлы: Яйыҡ башынан алып, Яйыҡ тамағынаса уға ҡаршы сығырҙай көрәшсе юҡ, — тине.

## ЕГЕРМЕНСЕ КИС

Бәлүәндең был һүҙҙәре минең күңелде күтәреп, ирәйтеп ебәрҙе. Ни тиһәң дә, шундай алыҫ илдән килгән көслө батырҙы еңеп сығыуыма мин бик ҡәнәғәт инем, ә үҙебеҙҙең ете ырыу батырҙары араһында былай ҙа миңә тиңләшерҙәйҙәре юҡ ине. Бер һүҙ менән әйткәндә, мин дә теге айыу үлтергән урман яҡ батыр ҡыҙ ише, үҙемә тиң батыр юҡ, тип уйлай башланым[70]...

Мин шунда, үҙ исемемде ишеткәс, уның һүҙен бүлдереп:

— Мин һинең көсөңә лә, үҙегеҙҙең ырыуҙарығыҙҙа һиңә тиң батырҙар юҡлығына ла ышанам, тик һин миңә Ҡыҙрас бисәһенең ни-

лектән шулай йәш ҡойоуын һөйләмәнең бит әле, — тигәс, был миңә ҡаршы:

— Һай, егет, һин бик түҙемһеҙ икәнһең дә. Башта үҙеңдән олоноң һүҙен тыңлап бөтөр. Әле мин һүҙемдең яртыһына ла етмәнем, ә һин уның ахырын да һорай башланың. Өндәшмәй генә, һөйләп бөткәнде көт.

Был һүҙҙәрҙән мин оялып киттем, телемде тешләп, уның һөйләгәнен тыңларға керештем.

— Бәлүән батыр миңә шундай маҡтаулы һүҙ әйтеп, сәләм биргәс, ҡулымды ҡыҫып: «Минең дуҫым бул», — тине. Шунан Айсүл ҡарт, мине уның менән йәнәш ултыртып, беҙҙе ғәҙәттәгесә ҡымыҙ менән һыйлағансы, йыйын да таралды. Икенсе көндө мин ҡайтып киттем. Ҡайтыуыма бөтә мал-тыуарым иҫән-һау, бөтә ауыл халҡы ла аман торған. Тик минең үҙ күңелемә генә тынғы ҡалмағайны. Теге батыр ҡыҙ хаҡында ишеткән хәбәр, ятһам-торһам да, баштан сыҡманы. Ҡыҙ-ҡыҙҙарҙың шундай уғата шәп батыр булыуына ышана алмай йөҙәнем. Беҙҙең ҡыҙ-ҡырҡын араһында ла бик ҡыйыуҙары бар барын, шулай ҙа ундайҙарҙы еңерлек ир-егет табыла торғайны. Шулай уйға батып йөрөй торғас, бер-ике ай ҙа үтеп китте, ахыр сиктә түҙмәнем, быны үҙ күҙҙәрем менән барып күрәйем әле, тип, был яҡтарға юлға сығырға булдым. Шул ниәт башыма килгәс, бер көн үҙемә ҡәрҙәш-ырыу тейеш бер аҡһаҡалға барып индем дә, быға үҙ ниәтемде һөйләп бирҙем, ни булһа ла булыр, мин әйтәм, мотлаҡ шуны барып күрәйем әле, әгәр ҙә эш барып сыҡһа, үҙен кәләш итеп тә алып ҡайтырмын, тип, аҡһаҡалдың мал-тыуарыма күҙ-ҡолаҡ булып тороуын һораным.

— Юлың уң булһын, улым, — тине был. — Әйҙә, ил аралап ҡайт.

Шунан, күп уйлап тормай, аҡһаҡал менән хушлаштым да бына ошо кейгән кейемемдә юлға сығып та киттем. Бер көн буйы бер кемде лә осратмай барҙым, ә кискә табан, ҡуналҡаға урын һайлап торғанда ғына, минең күҙгә ят кейем кейгән, яҡшы атҡа атланған бер әҙәм килеп сыҡты. «Юлың уң булһын!» — тип быға сәләм бирһәм, яуабынан уның да мосолман икәнен белдем. Икебеҙ ҙә бик кискә ҡалған булғас, бер-ике ауыҙ һүҙҙән үк бергә ҡунып китергә ризалаштыҡ. Мин уны нимәм булһа, шуның менән һыйланым, ә ул эйәренән атып алған ҡошон сисеп алды ла, тиҙ-тиҙ генә йолҡоптаҙартып, утта ҡурып, ошо ҡош ите менән һыйланы. Шул арала мин уның ил ҡыҙырып йөрөгән мосафир икәнлеген дә, тыумышы менән Болғар иленән булыуын да, был яҡтарҙағы ҡыҙыҡ нәмәләрҙе күҙәтеп, ҡайтҡас, үҙҙәренең ханына шуларҙын бөтәһен һөйләп бирәсәген дә белеп өлгөрҙөм.

— Йә, юлыңда ниндәй ҡыҙыҡ нәмәләр күрҙең һуң? — тип һорағас, был миңә бөтә киләсәкте алдан әйтеп бирә торған ниндәйҙер бер күрәҙәсе тураһында һөйләп алды.

— Ә һин уның үҙен үҙ күҙең менән күрҙеңме һуң? — тип һорағас, был:

— Күреүен күрмәнем дә, ишетеп белдем, — тине.

— Бәй, былай булғас, кайтып, ханыңа ниндәй генә хәбәр һөйләр икәнһең? Исмаһам, уны барып күргән берәйһен белмәйһеңме һуң? — тип нықыша торғас, был миңә былай тине:

— Урман яҡ халҡының бер батырын күргәйнем күреүен. Ерән толпарға атланып, өҫтөнә кармазин елән менән башына ҡара төлкө тиреһенән бүрек кейеп, бына тигән һөңгө-ҡылыс, уҡ-һаҙаҡ тағып та алғайны ул. Уны ла мин шулай, һинең һымаҡ, юлда осратып, һинең ише ул да был күрәҙәсе тураһында бик белергә теләгәс, уға ла мин һиңә һөйләгән хәбәрҙе һөйләп бирҙем, күрәҙәсе йәшәгән тау ҡыуышына илтер юлды ғына өйрәтеп ебәрҙем. Ул быларҙың бөтәһен дә тыңлап бөткәс: «Ярай, хәҙергә һау булып тор!» — тине лә китеп тә барҙы. Моғайын, ул ҡыйыу егет шунда елдергәндер.

Алдар шуларҙы һөйләгәндән һуң, бер аҙ һүҙһеҙ ҡалып, туп-тура минең күҙҙәремә текләп торҙо. Мин эсемдән генә, был болғар ҡарты һөйләгән һүҙ баштан-аяҡ минең хаҡта булған бит, тип ҡуйҙым. Мин уның һүҙен бүлдерергә иткәйнем дә, ул шунда уҡ:

— Туҡта, һөйләп бөткәнде көт, — тип туҡтата һалды мине, күрәһең, ул бер ҡасан да былай күп һөйләмәгәнлектән, бер аҙ хәл алырға ғына тынып ҡалғандыр. — Беҙҙең яҡта минең йәштәгеләр, һөйләгәнгә ҡарағанда, күберәк тыңлайҙар. Ә һин минән йәшерәк булғас, һүҙемде тыңлап бөтөр.

## ЕГЕРМЕ БЕРЕНСЕ КИС

Иртәгеһен иртүк тороп, болғар мосафиры менән хушлаштым да Урал һыртына ҡарай юл тоттом. Урал һыртын артылғанда ла бер ни осраманы. Ҡыҫҡаһы, һеҙҙең Ағиҙелегеҙгә барып етеп, уны ат йөҙҙөрөп сыҡкас ҡына, һеҙҙең йәйләүҙәрегеҙ күренгеләй башланы, йәйләү һайын Ҡыҙрас ауылын һораша-һораша барҙым, уны Ҡандыракүл буйынан алыҫ түгел тинеләр.

— Унда ни йомош менән бараһың, ҡыр батыры? — тип һораны һеҙҙең аҡһаҡалдарығыҙҙың береһе. — Әллә беҙҙең Ҡыҙрастың батыр ҡыҙының көсөн һынамаҡсыһыңмы?

Мин үҙемдең тап шул ниәт менән китеп барғанымды әйткәс:

— Һин уны өйөндә осрата алмаҫһың шул, — тип ҡуйҙы ҡарт.

— Ә ҡайҙа киткән һуң ул? — тип һорауыма ул:

— Һунарға тип сығып киткәйне лә, әле булһа ҡайтҡаны юҡ, — тип яуапланы.

— Күптәнме? — тигәс, ул:

— Ай самаһы булыр инде, берәй бәлә-ҡазаға тарып ҡуймаһа ярар ине. Ул һунарға сыҡҡанда һәр саҡ беҙҙең йәш батырҙарҙың башында йөрөр ине, — тип көрһөнөп ҡуйҙы.

Был һүҙҙәрҙән йөрәгем сығырҙай булып тибә башланы, батыр ҡыҙ миңә бик йәл булып китте. Шунда ғына мин уны яратҡанлығымды тойҙом. Атыма атлана һалдым да ары киттем. Бараһы юлым да әллә ни алыҫ түгел ине инде. Күп тә үтмәй, алыҫтан бер күл менән Ҡыҙрастың йәйләүе лә күренде. Аҡ кейеҙ менән ябылған ҙур бер тирмә ҡаштаҡ битләүендә генә ултыра ине, тирмә эргә-

һендәге елеләэллә күпме ҡолондар бәйләп ҡуйылған. Тәү осраған кешенән Ҡыҙрасты һораштым, ул миңә ошо ҙур аҡ тирмәне күрһәтте. Тирмә эргәһенә килеп етһәм, ишек алдында өҫтөнә буй-буй елән кейгән оло йәштәрҙәге бер ҡарттың, ҡулындағы таяғына башын терәп, ергә теклән ултырғанын күреп алдым. Уға яҡын уҡ килеп, үҙе бер ни ҙә ишетмәгәс, бер аҙ тороп сәләм бирҙем. Ә ул, тәрән йоҡонан уянғандай, һиҫкәнеп китеп, башын ҡалҡытты ла йәшкәҙәп торған күҙҙәре менән миңә ҡарап алып:

— Рәхим ит, атыңдан төш тә, әйҙүк, тирмәгә уҙ, — тине, үҙе алдан инеп тә китте.

Атымды бәйләп, тирмәгә инһәм, унда ла оло йәштәрҙәге бер ҡатындың илап ултырғанын күрҙем. Мин унан да һаулыҡ һорашҡас, күҙ йәштәрен һөртөп:

— Әлегә һау ғына, — тигән булды.

Ҡарт, мине урынға ултыртып, бер аҙ өндәшмәй торғас:

— Һин, батыр, алыҫтан киләһең, ахырыһы, ялан халҡынан булаһыңмы? — тип һорап ҡуйҙы.

— Эйе, — тинем мин. — Яйыҡ буйынан булам. Бына үҙебеҙҙең ҡан-ҡәрҙәш урман халҡын күрәйем тип килеп сыҡтым әле.

— Һай, улым, урман халҡы ҡайғыға тарыбыраҡ тора бит әле, минең ҡайғы-хәсрәтем бигерәк тә ҙур. Йәш батырҙарыбыҙ һунарға сыҡҡанда юл башлап йөрөр батырҙарынан, ә бына ҡарсығым менән мин йәндәй күргән ҡыҙыбыҙҙан яҙып ҡалдыҡ, — тигәс, улар икеһе лә үкһеп илап ебәрҙеләр. Мин уларҙың тымғанын көтөп ултырҙым да:

— Ул тиклем өҙгөләнмә, олатай! Ҡыҙығыҙ, кем белә, иҫән-һау йөрөйҙөр, яҙған булһа, ҡайтып та килер әле. Һеҙгә дөрөҫөн әйтәйем инде, был бер һеҙҙең ҡайғығыҙ ғына түгел, быға минең дә йөрәгем һыҡтай. Алыҫ ерҙе яҡын итеп, бейек Урал тауҙарын артылып, сикһеҙ далаларҙы үтеп, киң йылғаларығыҙҙы йөҙөп сығып, мин бит бары ул тип кенә килеп сыҡҡайным һеҙгә. Батыр даны үҙенән алда йөрөй, тигәндәй, ҡыҙығыҙҙың даны беҙҙең дала яҡтарына ла килеп еткәйне,— тип йыуаттым былярҙы. Һуңынан уның тураһында йыйында ишеткәндәремде һөйләп бирҙем, уны эҙләргә сығып китәсәгемде, барыбер тапмайынса ҡайтмаясағымды әйттем.

## ЕГЕРМЕ ИКЕНСЕ КИС

Ҡарт, минең был һүҙҙәремдән өмөтләнеп, изге ниәттә йөрөүемә рәхмәттәр әйтте, ә ҡыҙҙың әсәһе шул арала туҫтаҡҡа ҡымыҙ ҡойоп бирә һалды. Алыҫ юл үтеп, күптән инде ҡымыҙ эсмәгәс, бер-ике туҫтаҡты йәнә бушатып ҡуйҙым.

— Юлдан бик асығып та килгәнһеңдер, батыр егет, — тип, ҡарт ҡарсығына тамаҡҡа әҙерләргә ҡушты.

Тирмәлә ҡарт менән икебеҙ генә тороп ҡалғас, мин үҙебеҙҙең дала яҡтарында нисек донъя көткәндәрен дә, үҙемдең хәл-әхүәлемде лә һөйләп бирҙем. Беҙ шулай һүҙгә мауығып ултырған арала хужабикә ҡарсыҡ табағы менән һыйын да килтереп еткерҙе. Ҡарт мине

кыҫтап-ҡыҫтап һыйлаһа ла, үҙе бер ҡабым иткә лә ҡағылманы. «Һөйөклө батыр ҡыҙым ҡайтмай тороп, бер туҫтаҡ ҡымыҙҙан башҡа, ҡайнар аш тамағыма ла бармаҫ», — тип ҡуйҙы...

Алдар бөтә был хәлдәрҙе тәфсирләп һөйләгән ваҡытта мин, ҡулдарым менән күҙҙәремде ҡаплап, бер өҙлөкһөҙ илап ултырҙым. О ул, быны әллә күреп, әллә күрмәй, һөйләүен генә белде.

— Был киң күңелле ҡарсыҡтың үҙ ҡулдары менән әҙерләгән ашын туйғансы ашап, бер турһыҡ тиерлек ҡымыҙҙы бер үҙем эсеп, күңелем бик күтәрелеп киткәс, шунда уҡ батыр ҡыҙҙы эҙләп сығырға булғайным, Ҡыҙрас ҡарт, мине туҡтатып: «Бөгөнгә ҡунып кит, иртән иртүк, аллаға тапшырып, юлға сығырһың, ҡәҙерле ҡунаҡ; тапһаң, минең батыр ҡыҙымды өйгә алып ҡайтырһың», — тип һөйләнгәнсе, ҡарсығы миңә урын да йәйеп өлгөргәйне. Мин сисенеп тә тормай тәгәрәнем дә ҡояш сыҡҡансы йоҡланым. Уянһам, ҡарт менән ҡарсыҡтың иртәнге намаҙҙарын уҡып ултырғанын күрҙем дә, тышҡа сығып, кистән хужаның ҡушыуы буйынса эйәрен һалдырып, утлауға ебәрелгән атымды килтереп эйәрләнем. Ҡоралдарымды таҡтым да, Ҡыҙрас ҡартҡа һый-хөрмәттәре өсөн рәхмәт әйтеп, миңә ышанып ҡалыуҙарын һораным. Ҡарсығы: «Туҡта әле, мин һиңә юлға берәй турһыҡ ҡымыҙ ҡойоп ебәрәйем», — тип турһығын килтереп тә тотторҙо. Үҙе илай-илай: «Һай, изге ҡыр батыр, әйткән һүҙеңдә тороп, ҡыҙымды табып ҡайта күр инде», — тип тороп ҡалды.

Алдар шул саҡ, яурынымдан ҡағып:

— Бына хәҙер Ҡыҙрас ҡарсығының нилектән шулай илағанына төшөндөңмө инде? — тип ҡуйҙы, һүҙен ослап.

— Төшөндөм, — тинем мин, — хәҙер үк Ҡыҙрас йәйләүенә елдереп барып, батыр ҡыҙының һөйөнсөһөн алам!

Алдар шул саҡ миңә, уҫал ҡарап:

— Туҡтап тор әле! — тине. — Мин һине былай ғына ебәрмәйем. Йә һин минең менән бергә барып алырһың ул һөйөнсөнө, йә мин алдан барып, бер йәш батыр һиңә яҡшы хәбәр менән килә, тип әйтеп ҡуйырмын, ә һин шул ваҡыт тирмәгә яҡын ерҙә көтөп торорһоң.

Мин быға ҡаршылашмаҡсы булғайным да, Алдар шул саҡ атымдың теҙгененән алып, ҡылысын һурып сығарҙы ла бер һелтәүҙә атымдың башын сабып өҙәсәген, ул саҡта минең йәйәү килеш барыбер үҙенән алда барып етмәйәсәгемде әйткәс, мин ризалашмай булдыра алманым. Ахырҙа ул:

— Һин атыңды атлатып ҡына бар ҙа, йәйләүгә еткәс, ҡаштаҡ аҫтындағы ағастар араһына боҫоп тор, мин һиңә килергә тип маяҡ күтәргәс кенә тирмә эргәһенә ыңғайларһың. Юғиһә мин һинең менән һуғышасаҡмын, — тип киҫәтеп тә ҡуйҙы.

Шунда ул атына ҡамсыһы менән бер генә һелтәне лә, атҡан уҡтай, күҙҙән дә юғалды. Мин, батыр алдында үҙемдең юғалып ҡалыуыма үртәнә-үртәнә, атымды үҙ яйына ғына ҡуйып, йәйләүгә табан ыңғайланым.

Атайым менән әсәйем мине юғалтып ҡан-йәш ҡойған йәйләүгә килеп етеүем булды, йөрәгем сығырҙай булып тибә башлағас, са-

бып барып етергә иткәйнем дә, биргән һүҙемде хәтерләп, билдәләнгән ерҙә туктап калдым. Алдарҙың миңә маяк болғағанын күргәс үк, тирмәгә табан йүнәлдем. Алдарҙың шулай бик тиҙ әйләнеп кайтыуына атайым менән әсәйемдең аптырап калыуҙарын ул аҙак миңә үҙе һөйләп биргәйне. Алдар уларға минән һөйөнөслө хәбәр килтергән батырҙы телгә алыуы була, карт менән карсык ул батырҙың ниндәй елән, ниндәй бүрек кейгәнен дә, аты менән коралы ниндәй булыуын да энәһенән-ебенә тиклем һорашып, бының тәкәтен коротоп бөтәләр. Быға ул бер һүҙ менән генә яуап биреп: «Хәҙер бына һеҙ уның үҙен күрерһегеҙ», — тигән дә, сығып, миңә маяк болғаған. Мин йәйләүгә килеп инеү менән, мине күреп калған бөтә халык: «Батыр кыҙ кайткан!» да «Батыр кыҙ кайткан!» тип кыскырышып, ығы-зығы килде.

Алдарҙан бер ниндәй ҙә асык кына яуап ишетә алмаған атайым менән әсәйем тирмәнән сығып караһалар, уның маяк болғағанын, халыктың: «Батыр кыҙ! Батыр кыҙ!» тип зык купканын күрәләр. Бөтәһе лә, миңә каршы йүгерешеп килеп, кыуанышып, һәр береһе мине кайтып килеүем менән котлай ине. Күптәре минең нилектән былай оҙак йөрөүемде белгеләре килә. Шул арала Алдар ҙа килеп етеп, минең эргәнән атайымдың тирмәһенә табан бергәләп бара ине. Ә атайым менән әсәйем миңә каршы килә яталар. Биргән һүҙемде онотоп, мин уларға каршы сабып барҙым да, аттан һикереп төшөп, уларҙың аяктарына йығылдым. Карттар шул сак:

— Һай, кыҙыбыҙ, кыҙыбыҙ беҙҙең! — тип илап та ебәрҙеләр, үҙҙәре минең муйыныма һарылып, күҙ йәштәренә мансып бөтөрҙөләр. Мин алмаш-тилмәш бер атайымды, бер әсәйемде кыҫып косаклайым. Был хәл шулай оҙағыраҡка ла һуҙылыр ине лә, әле һаман атынан төшмәгән Алдар:

— Йә, Кыҙрас олатай, был батыр кыҙ һинекеме ни? — тип кыскырып ебәргәс кенә, атайым кыуанысынан нишләргә лә белмәй:

— Эйе, минең кыҙым, — тигән булды. — Һин уны алып кайтырға һүҙ биргәйнең, һүҙеңдә торҙоң!

— Мин бит һиңә кыҙ түгел, батыр алып кайттым. Әгәр ысынлап та һинең кыҙың икән, торғаны бер хәйләкәр ул!

Был һүҙҙәрҙән һуң атайым да көлмәй булдыра алманы.

— Әйҙә, батыр, атыңдан төш тә кыуанысыбыҙҙы уртаклаш! — тине ул Алдарға.

Шул арала бөтә ауыл халкы йыйылып килеп, атайым менән беҙҙе һырып алдылар, геү килешеп котлай-мактай, колактарыбыҙҙы тондороп бөтөрҙөләр.

— Хәҙер инде, Кыҙрас, шатлыктан бер оло йыйын үткәрмәй булмаҫ! — тип һөрәнләүҙәренә атайым:

— Үткәрербеҙ, үткәрербеҙ, дуҫкайҙарым! Үҙебеҙҙең бөтә күршетирә ауылдарҙы ғына түгел, иң алыҫ ауылдарҙы ла сакырырбыҙ! — тине. Шунан бер өс-дүрт йәш-елкенсәкте үҙенә сакырып алды ла: — Егеттәр! Өйөрҙән иң якшы аттарҙы һайлап менегеҙ ҙә якын ауылдарҙы ғына түгел, бер-ике көнлөк юлдағы ауылдарҙы ла урап сығып, бөтәһен дә минең туйыма сакырығыҙ. Батыр кыҙ кайтканын бөтә ергә еткерегеҙ. Өҫтәп шуны ла әйтергә онотмағыҙ: көсө-таҫыл-

лығы менән бөтә ете ырыуҙа даны сыҡҡан ҡыр батыры Алдар миңә ҡунаҡҡа килгәнен дә әйтегеҙ. Уны мин бөтә ырыуға, бөтә дуҫиштәремә күрһәтергә теләйем, — тине.

## ЕГЕРМЕ ӨСӨНСӨ КИС

Егеттәрҙе шулай тирә-яҡ ауылдарға сығарып ебәргәс тә, атайым йыйынға әҙерләнеү хәстәрен күрә башланы: ҡаҙан аҫып, һый әҙерләргә ҡушты. Шатлығынан үҙенең дә был һыйҙан ауыҙ итәһе килгәнен әйтеп ҡуйҙы. Һеҙгә уның мин ғәйеп булғаны бирле ҡайнар ашты ауыҙына ла алмағанын һөйләгәйнем инде. Шул арала беҙҙең тирмәгә йыйылып киткән яҡын туғандар менән ауыл аҡһаҡалдарына ҡымыҙ ҙа килтереп еткерҙеләр. Һәр кем, үҙенә биргән туҫтаҡты алып, ауыҙ итеп ҡуйғас, шып-шым ҡалып, минең ни һөйләремде көтөп ултыра ине. Тик мин шатлығымдан зиһенемде лә йыя алмай, быңдай саҡта һүҙ һөйләй башларғамы ла, әллә, атайым һымаҡ уҡ, минән күҙен дә алмай торған әсәйемде ҡосаҡлап иркәләргәме, тигәндәй, нишләргә лә белмәй аптырап ҡалдым. Был хәлдән, ярай әле, Алдар ҡотҡарҙы: туҫтағынан ҡымыҙын һемереп алды ла былай тип һүҙ башланы:

— Ҡыҙрас олатай, Буранбикә инәй, һин дә тыңла. Минең былай тиҙ әйләнеп килеүемә аптырап ҡалыуығыҙ ҙа ғәжәп түгел. Юлға сығып, батыр ҡыҙығыҙ менән осрашҡанда, ҡояш әле төшлөккә лә етмәгәйне. Уны туҡтатып һөйләшә башлағас уҡ, үҙенә лә, атына ла баштан-аяҡ күҙ йүгертеп сығыу менән, мин уның нәҡ һеҙҙең ҡыҙығыҙ икәнен белдем. Уның төҫө-ҡиәфәтен миңә юлда осраған бер болғар мосафиры тәфсирләп биргәйне. Шунан мин уның аттан төшөүен һорап, юлға үҙегеҙ биреп сығарған ҡымыҙ менән һыйлап, был яҡтарға ниндәй ниәт менән килеп сыҡҡанымды тыңларға ҡуштым. Һүҙемдең осо шулай һеҙҙең икегеҙ тәңгәленә еткәс, уның күҙ йәштәрен күреп, был батыр ҡыҙҙың тап үҙе тигән уйымды тағы бер ҡат нығытып ҡуйҙым. Ул мин һөйләгәндәрҙең бөтәһен дә тыңлап бөткәс, тиҙерәк ҡыҙығыҙҙың һөйөнсөһөн алырға тигән булып, алданыраҡ сапмаҡсы булғайны ла, быны туҡтатып, мин әйткәнде тыңламаһаң, атыңдың муйынын сабып өҙәсәкмен, тигәс кенә, шартыма күнергә риза булды. Аръяғын — беҙҙең ҡайһылай итеп ҡайтып еткәнде — үҙегеҙ ҙә күреп торҙоғоҙ. Шулай булғас, ҡыҙыбыҙҙы алып ҡайтты, тип миңә рәхмәт әйтеп тораһы ла юҡ бында. Минһеҙ ҙә ул шул көндө үк ҡайтып етер ине. Ә минең уны, ауылығыҙҙан сығып киткәс, әллә ни күп тә бармай осратыуым, күрәһең, бәхетемә яҙғандыр инде.

Атайым, Алдарҙың был саҡлы баҫалҡылығын күреп, уның шундай изге ниәттә булыуы бөтәһенән дә ҡиммәтерәк, тип, үҙенә уның иң ҡәҙерле ҡунаҡ булыуын, был хаҡта йыйынға килгән бөтә ҡунаҡтарға ла һөйләп бирәсәген әйтеп, башҡаса уға ауыҙ асырға ла ирек бирмәне.

Шулай һөйләшеп ултырғанда, ит бешеп, инде табаҡтарға өләшеп һалынғанын кереп әйттеләр. Беҙ тирмәнән сығыуға, балаҫтар

түшәлеп, ашъяулыҡтар өҫтөнә һый тултырып ҡуйылғайны. Атайым мине һул яғынан, Алдарҙы уң яғынан ултыртып ҡуйҙы. Беҙҙең ғөрөф-ғәҙәт буйынса ҡыҙ кешегә ир-ат араһында ултырыу ярамаһа ла, мин ирҙәр кейеме кейеп, батыр исемен күтәреп йөрөгәнгә, ир-атҡа ҡатышып йөрөүҙән тартынып тормай инем. Табында үҙебеҙҙең яҡын ағай-эне менән ауылдың иң хөрмәтле аҡһаҡалдары ғына булғас, ятыр ҡорһаҡҡа күп ашап тормай, әллә ни оҙаҡ та ултырышманыҡ, бөтәһе лә тиҙ таралышты. Атайым Алдар менән үҙ тирмәһенә китте, ә мин әсәйем менән икенсе тирмәгә инеп яттыҡ. Һәр кемдең күңеле урынына ултырып, бөтәбеҙ ҙә тынысланып ҡалғас, төнөн бик ҡаты йоҡланыҡ.

Ҡояш инде ағас башынан да юғары күтәрелеп, ауылдың тәҡүә ҡарттары күптән үк иртәнге намаҙҙарын уҡып бөткәндә, беҙҙең тирмәләгеләр, күҙҙәрен ыуғылап, йоҡонан саҡ уянғайнылар. Иртәнге һауымға ҡыуып килтергән бейәләрҙең тояҡ тауыштары ғына уятмаһа, беҙ һаман иҙерәп ятыр инек әле. Атайым тирмәһенән сыҡҡас уҡ иң һимеҙ байталын тотоп һуйырға ҡушты, шунан ауылдың ярлы-ябағаларын йыйып һыйларға кереште, эсергә өс һаба ҡымыҙын да килтереп ҡуйҙы.

Ул-был итеүгә, минең һөйләүемде тыңларға тип, туған-тыумаса, ауыл ҡарттары йыйылып килеп тә еткәйнеләр инде.

Мин башта атайым менән әсәйемдән, ниндәй ниәт менән сығып китеүемдең ысын сәбәбен әйтмәй, уларҙың башына шундай ҡайғы-хәсрәт һалыуымды ғәфү итеүҙәрен һорап, бөтәһенә лә юлда ниҙәр күргәнемде түкмәй-сәсмәй һөйләргә керештем. Шулай ҡыҫҡа хәтле һөйләһәм дә, ул көндө генә һөйләп һүҙ бөтмәне, атайым менән әсәйем дә, бүтән тыңлаусылар ҙа һүҙемде бүлдереп, иртәгә ҡалдырып торорға булдылар. Иртәгеһен мин йәнә үҙ сәфәремде һөйләп бөтөп килгәндә генә, ҡапыл ат тояҡтары тауышын ишетеп, ауылда ығы-зығы ҡупҡанын күрҙек. Бөтәһе лә шул саҡ урындарынан тороп, ни булғанын белергә теләп, тирмәнән сыға һалдылар. Алдар менән мин иң элек йүгереп сыҡһаҡ, беҙҙең ике көтөүсенең сабып килгәнен күреп ҡалдыҡ. Быларҙың аттары ҡара тиргә батып, ауыҙҙарынан күбектәрен сәсеп, саҡ килеп еттеләр. Мин уларға ҡаршы йүгереп барып, ни булғанын һораша һалдым. Көтөүселәр, аһ та ваһ килешеп, әле генә беҙҙең өйөрҙө ике ҙур айыу килеп баҫҡанын, икеһенең дә иң һимеҙ ике бейәне ботарлап ташлағанын ҡыҫҡа генә әйтеп бирә алдылар. Уларҙың был хәбәрен ишетеү менән мин атыма йүгереп барҙым да, тиҙ генә эйәрләй һалып, ҡоралдарымды тағып, көтөүселәрҙән айыуҙарҙың бейәләрҙе ҡайһы тәңгәлдә ботарлап ҡалыуын һорарға тип килһәм, Алдарҙың инде һыбайлы-ҡораллы килеш улар янында тороуын күреп, аптырап киттем. Шул арала көтөүселәр янына атайым да килеп етте. Мин уға табан боролоп:

— Атай, һин минең ҡыр батыры Алдар алдында януарҙар менән алышыуыма ҡаршы килмәҫһең бит? — тип һораным да Алдарға ҡарап: — Ә һин миңә иптәш булырһың, — тинем.

— Юҡһа мин ниңә атҡа менгән тиһең? — тип өҙөп ҡуйҙы Алдар. Атайымдың икебеҙгә лә ҡарап:

— Ярай, алла һеҙгә ярҙам бирһен, балаҡайҙарым, — тигән һүҙен ишеткәс, Алдар:

— Был һүҙ хаҡына мин йөҙ айыуға ла ҡаршы бара алам! — тип ҡуйҙы. Беҙ аттарыбыҙҙың тибенгеләренә тибеп, сабышып сығып та киттек. Был урындар миңә таныш булғас, тиҙҙән беҙ теге көтөүселәр ҡалдырып киткән айыуҙар төбәгенә барып та еттек. Айыуҙар икеһе ике урында булып сыҡты, бер-береһенән уларҙы ҙур булмаған ҡыуаҡлыҡ айырып тора ине. Шулай булғас, береһенә ташланғанды икенсеһе күрмәйәсәк тә, ишетмәйәсәк тә. Шунда мин Алдарға, туҡтап, шундай һүҙ ҡуйышайыҡ, тинем:

— Башта айыуға һин бар, теләһә ниндәй ҡорал менән үлтерһәң дә үлтер, мин һиңә ҡамасауламам, тик һин дә минең шартыма күн: мин икенсеһе менән алышҡанда, һин дә миңә ҡатышмай, ситтән генә ҡарап тор, — мин әйтәм.

Алдар, минең тәүәккәллегемде күреп, ҡуйған шартыма риза булғас, беҙ тауыш-тынһыҙ аҫтыртын ғына тәүге айыу янына килдек. Уҡтан ярты атым ер ҡалғас, Алдар, мине туҡтатып:

— Шунда ғына ҡарап тор, — тине лә, һөңгөһөн ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, айыуға табан сабып китте. Януар, аяҡ тауышын ишетеп, табышын ташлай һалып, ҡалҡып торҙо ла батырҙы көтә башланы. Ә Алдар һөңгөһөн йән асыуына уның ал яҡ ҡултыҡ аҫтына ҡаҙаны, һөңгөһө аша барып сыҡҡас, януар ларҫ итеп ергә ауҙы. Батыр егет атынан һикереп төштө лә хәнйәре менән уның эсен дә ярып ебәрҙе.

— Һинең алышың бик ҡыҫҡа булды! — тинем мин уға, — ә бына мин, һиңә мәрәкә булһын өсөн, айыу менән алышып, үҙеңде бер көлдөрөп алайым әле.

— Ни менән алышмаҡсы булаһың, һөңгөң дә юҡ бит, — тип Алдар миңә ҡаршы төштө лә үҙенең һөңгөһөн алырға ҡыҫтаны.

— Кәрәкмәй миңә һөңгө, — тинем мин. — Тик һинең бынау ҡалҡыуға менеп, мин януарҙы үлтермәйенсә, шунан төшмәй тороуыңды һорайым. Мә, өҫ кейемем менән атымды ал да ситкә китеп тор.

— Һуң нишләмәксе булаһың һин? — тип аптыраны Алдар быға.

— Һуңынан күрерһең уныһын, — тинем дә, өҫтөмдәге кәрмәзин еләнемде һыпырып ташлап, эске бишмәттән генә ҡалып, итектәремде лә сисеп ырғытып, киң балаҡлы шанхай салбарымдың[71] киң балаҡтарын ойоҡ ҡуңыстарыма ҡыҫтырып алдым. Унан һаҙағымдан дүрт уҡ һурып алып билбауыма ҡыҫтырҙым да, һаҙағымды эйәр ҡашына элеп, ҡылысымды ғына тағып алдым. Быны күреп аптырап торған Алдар:

— Ниндәй әкәмәт күрһәтмәксе булаһың? Әллә һин аҡылдан яҙҙыңмы, ҡыҙыҡай? — тигәс, мин дә:

— Яҙғанын-яҙмағанын хәҙер күрерһең, бар, урыныңда бул, — тинем.

Алдар бер көрһөнөп алды ла үҙ урынына китте. Мин, еңеләйеп алып, үҙемде бик иркен тойғас, таҫыллығыма ныҡ ышанып, яй ғына айыу эргәһенә киттем. Уҡ яҙлыҡмаҫ арала, ағас артына боҫоп, айыуҙың миңә арт һаны менән тороуын көтә башланым. Миңә әллә ни оҙаҡ та көтөргә тура килмәне: айыу, үҙ табышын өҙгөләп,

һоғалана-һоғалана, төрлө яҡҡа борғолана торғас, миңә арты менән әйләнеп торҙо. Шунда мин керешемде тартып, уғымды бының осаһына ғына атып ебәрҙем. Уҡ, тап сәпкә тейеп, яртыһына тиклем инеп китте. Януар шул саҡ, табышынан һикереп тороп, осаһынан уҡты тешләп ырғытырға тип, өйөрөлөп йөрөй башлағас ҡына, мин боҫҡан еремдән йүгереп сыҡтым да туп-тура бының ҡаршыһына барып, бүркем менән үртәргә тотондом. Айыу ҡотороноп миңә ташланғайны, мин бүрегемде уның аяҡ аҫтына ырғыттым. Күҙенә аҡ-ҡара күренмәгән айыу йән асыуы менән, мин тип уйлап, бүрегемде өҙгөләргә тотондо. Шул арала мин икенсе уғымды бының ал яҡ ҡалаҡ һөйәгенә атып ебәрҙем. Айыу был атыуҙан, бүрегемде ситкә бырғытып, үҙемә ташланды. Мин, еңел генә кейенеп алғас, быны һаман ярһытып, алға йүгереп барҙым да бер тарбаҡай ботаҡлы ағастың башына тейен һымаҡ менеп киттем. Айыу артымдан үрмәләһен тип, һаман уны үртәй-үртәй, үргәрәк күтәрелдем. Айыу, ысынлап та, минең арттан ҡотороноп үрмәләргә тотондо. Бының һайын мин, быны ярһытып, ағастың иң осона үрмәләнем. Айыу миңә яҡын ғына ҡалғас, мин нығыраҡ ботаҡ һайлап, ағас башынан шунда һикерҙем. Ботаҡ айыуға нәҙегерәк булғас, мин ботаҡ осонда ултырған көйө быны, ҡылысым менән һелтәп, үсектерә башланым, ә ул, яҡын килә алмағас, ярһып үкерергә кереште. Шул арала мин, ботаҡ осон һығылдырып, ергә һикереп төштөм дә, ағас төбөндә ҡалдырған әҙернәмде ала һалып, өсөнсө уғымды бының һул яҡ ҡалаҡ һөйәге аҫтына атып ебәрҙем. Был атыуҙан айыу ботаҡтан-ботаҡҡа тәкмәсләй башлағас, инде уның бер ни ҙә эшләй алмаҫын күреп, ҡылысымды һурып алып, уның ергә ҡолап төшкәнен һағалап торҙом. Януар, һуңғы ҡабат үкереп, ҡолап та төштө, ә мин шунда уҡ уның моронон өҙә саптым. Шуның менән алыш та бөттө. Мин артыма боролоп, Алдарҙы саҡырып ҡысҡырайым, тигәйнем, ул үҙе лә сабып килеп етте.

— Һай, батыр ҡыҙ, — тип ҡысҡырҙы ул, — һин был уйының менән миңә ысынлап та мәрәкә күрһәттең. Тик артыңдан айыу баҫтырып килгәндә, минең йөрәктең нишләгәнен белһәң икән һин! Биргән һүҙемдә лә тормай, саҡ ҡына ярҙамға сабып килмәй ҡалдым.

— Яман эшләгән булыр инең, Алдар. Һиңә хатта хәтерем ҡалған булыр ине, — тиеүем булды, беҙҙең арттан ҡыуа сыҡҡан йәш батырҙар ҙа сабып килеп еттеләр, тик, үҙҙәренең эш үткәс кенә килеп етеүҙәрен күреп, беҙҙе һунарыбыҙ менән генә ҡотланылар. Мин ике айыуҙың да тиреһен тунарға ҡушҡас, улар быны һә тигәнсе һыҙырып та ҡуйҙылар. Шул арала аяғыма, өҫтөмә кейенеп алдым да ҡайтырға ла сыҡтыҡ. Юл ярайһы уҡ алыҫ булһа ла, беҙ аҡшамдан* да алдараҡ ҡайтып өлгөрҙөк. Атайымдың тирмәһенә килеп етеү менән Алдар атынан һикереп төштө лә, мин үлтергән айыуҙың тиреһен уның аяҡ аҫтына ырғытып:

— Бына һинең ҡурҡыу белмәҫ батыр ҡыҙың үлтергән януарҙың тиреһе, малдарыңа шул баҫышҡан икән, — тине; минең нисек итеп айыу менән алышҡанымды һоҡланып һөйләгәс: — Бындай ҡыҙҙың

беҙҙең бөтә ете ырыуҙа ла булғаны юҡ, — тип ҡуйҙы. Шунда мин дә, ул үлтергән айыуҙың тиреһен алып:

— Алдар минең айыу менән алышҡанымды хайран итеп һөйләһә, мин дә уның шундай уҫал айыуҙы бер һуғыуҙа үлтергән көсғәйрәтен күреп, бер ҙә үҙенән кәм хайран булманым, — тинем.

Тиреләрҙе сағыштырып ҡараһаҡ, ике тире лә бер тигеҙ булып сыҡты. Атайым да, йыйылып килгән аҡһаҡалдар ҙа буласаҡ ҙур йыйында икебеҙҙе лә үҙебеҙ үлтергән айыу тиреләре өҫтөнә ултыртып ҡуясаҡтарын әйттеләр.

## ЕГЕРМЕ ДҮРТЕНСЕ КИС

Шулай итеп, йыйын көнө лә килеп етте. Бер-бер артлы атайым ебәргән сапҡындар ҙа әйләнеп ҡайтып уның саҡырыуын һәр ерҙә шатланып ҡабул иткәнлектәрен, яҡын ауылдарҙың өйлә намаҙына, алыҫыраҡтарының икенде намаҙҙан да ҡалмай килеп етәсәктәрен әйттеләр. Атайым уларға йылҡы өйөрҙәрен дә, һыйыр көтөүҙәрен дә яҡыныраҡ ҡыуып килтерергә лә килгән ҡунаҡтарҙы һыйларға иң көр бейәләрҙе һайлап ҡуйырға ҡушты. Был эш тә эшләнгәс, атайыма ҡунаҡтарҙың килеп тә ятҡанын белдерҙеләр. Ул Алдар менән бергә тирмәнән сығып, яҡынлап килгән ҡунаҡтарҙы күргәс тә:

— Былар Ҡармасан буйында йәйләгән миңә яҡын ауылдарҙан булырға кәрәк, — тип ҡуйҙы. — Уларҙың йәйләүлектәре бик иркен, мал-тыуарҙары ла бик ишле. Һарыҡтарының йөнө оҙон, ҡарҙай апаҡ була. Шуға ла улар, ана, үҙең күреп тораһың, аҡтан ғына кейенгәндәр. Аттары тоҡор булһа ла, бик сыҙам, ныҡ була уларҙың.

Уларҙан һуң, төнлөк яғынан оло бер төркөм килеп сыҡкас, атайым ҡулын ҡаш өҫтөнә ҡуйып ҡарап торҙо-торҙо ла:

— Былары, күҙем алдамаһа, Бөрө буйыныҡылар. Бик ағын, ташлы йылға ул. Башын Урал тауҙарынан алып, Ағиҙелгә килеп ҡоя. Яр буйҙары үтеп сыҡкыһыҙ урман булып, гел урман араһынан аҡҡанға күрә, сатлама һыуыҡтарҙа ла һыуы туңмай уның, урман ышыҡлап торғас, аҡҡоштары ла, башҡа ҡоштары ла бер ҡайҙа ла китмәй, ҡыш буйы һыу өҫтөн ҡаплап, рәхәтләнеп йөҙөп тик йөрөйҙәр. Был илдең халҡы бик тә ҡорт аҫырарға һәүәҫ, һәр береһенең йөҙ, йөҙҙән дә ашыу баш солоғо бар. Йылдың йылы улары арта бара, береһен бер күс һырымай ҡалмай, шунда уҡ эйәләшеп китә лә һәләк тигәнсе күп бал бирә. Тик шуныһы бар: йыш ҡына уларҙы урман тулы айыуҙар йөҙәтә. Ул, ҡәһәрең, балды бик ярата бит. Шуға күрә быңдағы халыҡтары ла йоҡлап ятмай, был януарҙарҙың үҙҙәрен дә йыш ҡыралар, һунарға йөрөүгә бик һәүәҫтәр. Ана, күрәһең бит: һәр береһенең башында йәш айыу тиреһенән генә тегелгән бүрек булыр. Анау, иң алдан килгән атта ултырғаны бик арҙаҡлы аҡһаҡал һаналған Балтас ҡарт үҙе инде. Йәш сағында яман көслө батыр булыр ине, солоғон туҙҙырған бик күп айыуҙың башына етте ул. Уның ана, уң яғынан төшкәне, буҙ атҡа атланғаны, Теләүсен тигән оло улы. Атаһына оҡшап, көсө-таҫыллығы яғынан үҙ ауылдары тирәһендә беренсе көрәшселәрҙән һанала. Ә атаһының

һул яғынан килгәне, йылғыр ала-колаға атланғаны, Ҡинйә тигән кесе улы булыр. Әле балиғ булып етмәһә лә, уктан мәрәйгә атыуҙа, әллә нисә рәт үҙ һөнәрен күрһәтеп, мәргәндәрҙең мәргәне булып сыҡты.

Атайым, Ҡыҙрас ҡарт, шулай уларҙың һәр береһе хаҡында әллә күпме һөйләгән булыр ине лә, ҡунаҡтар инде килеп тә еткәйнеләр; атайым уларға ҡаршы атланы. Беҙҙең ауыл егеттәре ҡунаҡ аттарының башынан алып, башҡаларҙы ҡаршылаһа, мин атайым ҡушҡанса, Балтас аҡһаҡалға ҡаршы барып, атынан төшөргә булыштым. Ул, минең ярҙамлашҡанды күреп, алсаҡ тауыш менән:

— Һай, батыр ҡыҙ, иҫән-һау ғына әйләнеп ҡайттыңмы? — тигән булды. Унан миңә ҡулын биреп, аҙаҡ атайым менән күрешеп: — Йә, иҫке дуҫ, батыр ҡыҙыңдың имен-аман ҡайтып етеүе менән ҡотлайым үҙеңде. Юҡһа, уның ғәйеп булғанын ишетеп, мин дә, беҙҙең бөтәбеҙ ҙә бик ҡайғырышҡайнык. Уның ҡулынан беҙҙең урмандарҙа аҙ айыу дөмөкмәне бит.

Атайым, ҡунаҡтары менән мәшғүл булып, миңә:

— Мин килгән ҡунаҡтарҙы ҡарайым, ә һин Алдар менән анау түбәләскә күтәрел дә килә ятҡан ҡунаҡтар менән таныштырып тор: ер-һыуҙарын, ҡайһы ырыуҙан икәнлеген, донъя көтөүҙәрен әйтеп бир, — тине...

Һеҙҙән йәшереп тормайым, кәҙерле ҡунаҡтарым, атайымдың был бойороғона ҡарышып тораммы һуң инде, Алдарҙың да бынан шатлығы йөҙөнә сыҡҡайны. Беҙ күтәрелгән түбәләс тирмәбеҙҙән алыҫ түгел, уның башынан ҡарағанда, әллә ни саҡлы ерҙәр ус төбөндәге һымаҡ күренеп ята, һәр килгән кешене айырым-асыҡ төҫмөрләп була ине. Түбәләскә күтәрелеп тә етмәнек, ҡыҙыл елән кейгән һыбайлыларҙың килә ятҡанын күреп тә өлгөрҙөк. Шунда мин Алдарға былай тип төшөндөрҙөм:

— Был халыҡ, — мин әйтәм, — беҙҙең яҡтағы иң бай халыҡтарҙың береһе. Улар тәрән һыулы Дим буйындағы бик уңдырышлы туғайлыҡтарҙа йәйләп йөрөйҙәр. Ул йылға һеҙҙең ялан яҡ йоҫоғонан ағып килә лә беҙҙең Ағиҙелгә ҡоя. Һыуы уның ҡап-ҡара, ҡойған тамағында Ағиҙелдең аҡлығынан бөтөнләй айырылып тора. Уның буйында гел имән дә элмәлек кенә. Һыуы балыҡҡа бай булғандай, халҡы мал-тыуарға бай. Аттары оҙон тороҡло, холҡо менән дә иң яҡшы йылҡы малынан һанала. Шул аттары менән улар далала төлкөһөн дә, бүреһен дә баҫтырып алалар. Шуға ла, ана, һәр һыбайлының башында ҡара көрән төлкө бүрек. Был халыҡ, үҙең дә һиҙеп тораһыңдыр тип уйлайым, беҙгә ҡарағанда, һеҙҙең яҡҡа нығырак тартҡан: урмандан бигерәк далала йәйләргә ярата. Көсө-таҫыллығы яғынан мин уларҙың күбеһен беләм, хәҙер ҙә һиңә ҡайһы берен тоҫмаллап әйтеп бирә алам. Ана, теге ерән атта килгәне, башҡаларҙан буйы-һыны менән айырылып торғаны, бик тә ғәйрәтле Итбай тигән баштары булыр. Ғәйрәтле булыуы өҫтөнә ул бик таҫыллы ла, уны эйәренән һөйрәп төшөрөрҙәй башҡа шундай һыбайлыны күргәнем юҡ әле. Мин уның йән-фарманға сабып килеп, ерҙә ятҡан ҡамсы-маҙарҙы ғына түгел, хатта ҡашмау тәңкәһен дә эләктереп алғанын үҙ күҙҙәрем менән күргәнем бар. Ана уның

теге яғынан ҡара ат атланып килгәне, эйәр-өпсөнөн шау көмөш менән нағышлағаны, — кесе ҡустыһы Сурабай булыр. Буйға ағаһынан ҡайтышыраҡ булһа ла, көсө-таҫыллығы менән ағаһына ла ал бирмәҫ. Ана, бөтәһе эргәһенән уйнаҡлап-сабып килгән ҡола ат менгән теге зәңгәр еләнле егетте күрәһеңме, ул бик тә тәүәккәл егет Илсебай булыр. Бер мәл шулай ул беҙҙең йыйында, бик күптәрҙе еңеп сыҡҡас, минең менән дә көс һынашып ҡарарға булғайны ла, бахырың, көрмәкләшергә лә өлгөрмәй, ерҙә ятҡанын һиҙмәй ҙә ҡалды, оятынан халыҡ араһына боҫто ла шунда уҡ ҡайтып та китте.

Алдар минең был һүҙҙәрҙе ишеткәс:

— Әгәр мин һине көрәшкә саҡырырға баҙнат итһәм, мине лә һин шул Илсебай көнөнә ҡалдырырһыңмы икән? — тип көлөп ҡуйҙы. Мин ҡолаҡ остарыма хәтле ҡыҙарып китһәм дә:

— Эш көрәшкә барып етһә, һин дә минән аяу көтмә! — тинем.

Һуңынан беҙ Өфө йылғаһы буйында йәйләгән халыҡтарҙың да килә ятҡанын күреп ҡалдыҡ.

— Былары беҙҙең ырыуҙаштар, — тинем мин. — Башҡаларға ҡарағанда әллә ни батырлыҡтары менән даны сыҡмаған. Һунарҙары ла һуҫар аулау менән тейен атыуҙан ары китмәй. Ул һуҫарҙы инде улар ҡырып ҡына һалалар, шуға күрә һуҫар тунын һәр береһе йәйен дә кейә тиерлек. Иң шәп һуҫарҙы уларҙың ғәйнә* ырыуында тоталар. Башҡаларға ҡарағанда, мал-тыуарҙары ла күп түгел.

Бынан һуң Алдарға мин әле Ашҡаҙар тамағынан алып Ағиҙел үрендә йәйләүселәрҙең күренмәүен әйтеүем булды, алыҫта болот төҫлө саң күтәрелеп килгәнен шәйләп ҡалдым. Саң борҡоп килеүе яҡынайған һайын, быларҙың Ағиҙел үренән килеүселәр икәнен төҫмөрләп алдым. Саң болото быларҙың шул тиклем шәп килеүенән күтәрелә ине. Беҙҙең йәйләүгә етәрәк, аттарын тыя төшкәс кенә, уларҙың һәр береһен айырым-асыҡ төҫмөрләй башланым.

— Бына буҙ ат менгәне ҡуҡыр Муйнаҡ булыр, — тинем Алдарға. — Күреп тораһың, буй-һынға ул әзмәүерҙәй, көс-ғәйрәте лә сикһеҙ уның иң ҙур үгеҙҙең башын да бер сабыуҙа өҙөп төшөрөрлөк. Теләһә ниндәй аҫауыңды ла ул ҡороҡ менән тотоп тормай, артынан ҡыуып етеп, ялынан эләктереп ала ла шып туҡтата. Миңә әле ун ике йәштә генә саҡта ул, атайымдың бер йыйынына килгәндә, апайымдан уҙып, мине ҡоҙалап ҡарағайны, атайым: «Әлегә бик йәштәр бит әле», — тип ҡырын һуҡҡас, был ҡуҡыр Муйнаҡ: «Һа, мин көтә лә беләм!» — тип ҡайтып киткәйне. Һай, ул хәҙер ҙә яҡшыға йөрөмәйҙер, бер-бер хөсөтлөк уйлап киләлер әле, — тип көрһөнөп ҡуйғайным, Алдар, мине йыуатырға тырышып:

— Юҡҡа күңелең шомланмаһын, минең аҫыл батыр ҡыҙым! Һинең эргәңдә Алдар дуҫың барҙа, Муйнаҡ бөтә көтөүе менән булғанда ла, беҙгә ҡаршы бер ни ҙә ҡыла алмаҫ, — тип ҡуйҙы. Аңғармаҫтан тел осонан ысҡынып киткән шул һүҙҙәр аша ғына беҙ бер-беребеҙҙе яратышҡанлығыбыҙҙы белдерештек. Һуңынан Алдар йәнә көлөмһөрәп: — Быныһынан башҡа ҡотоң осҡан тағы берәй Муйнағың юҡмы шунда? — тигәс, мин уға:

— Юҡ, — тигән булдым. — Буйға етеп, көс ултырғас, мине ҡоҙалап йөрөгән бөтә кейәүҙәр ҙә, минең менән көс һынашып ҡарарға

баҙнат итһәләр, балта сапҡан тапсыҡтай, ҡулымдан осоп ҡына торҙолар.

— Ярай, был юлы Муйнаҡты ҡалайыраҡ осорғаныңды ҡарап ҡарайыҡ әле, — тип ҡуйҙы Алдар.

— Ә мин уның менән алышып та тормаясаҡмын, һинең юлып алыуыңды ғына һорармын, — тип ҡарап алғас, Алдарҙың йөҙө яҡтырып китте лә:

— Ышанысың өсөн рәхмәт, батыр ҡыҙ, ысынын ҡабатлап әйтәм һиңә: бер түгел, мең Муйнаҡ та беҙгә бер ни түгел! — тип һүҙен бөтөрҙө.

Ошо эскерһеҙ уйынлы-ысынлы аңлашыуҙан һуң, беҙ түбәләс башынан төшөргә тип торғанда ғына, ҡапыл күл буйынан ишетелгән тауышты шаңлап ҡалдыҡ та уның артынса уҡ күл бауырлап осоп киткән өйрәк-ҡаҙҙарҙы күреп алдыҡ.

— Аһ, был, моғайын, Ҡошбай ҡарттыр, — тип ҡуйҙым мин. — Ул үҙенең бәләкәй генә ауылы менән Сәрмәсән буйында йәйләп йөрөй. Уның бөтә йәйләүе бер өй эсенән генә сыҡҡан уландары менән килендәренән тора. Үҙе ул бик тыныс холоҡло, сабыр, тәҡүә ҡарт. Уны беҙҙең бөтә ырыуҙар ҙа намыҫлы, гәҙел булғаны өсөн ҡәҙер итәләр, ололап йөрөтәләр. Ул үҙе ҡош-ҡорт ауларға бик һәүәҫ. Бына хәҙер ҙә һин уны ҡоштары менән күрерһең әле, уның ҡулында, моғайын, тойғоно булыр.

## ЕГЕРМЕ БИШЕНСЕ КИС

Түбәләс башынан килеп төшкәс тә, мин, үҙебеҙҙең тирмә алдында туҡтап, атайым эргәһенә башта Алдарҙы индереп ебәрҙем. Ҡорҙан урын алған ҡунаҡтар араһында атайымдың уң яғынан Балтас ҡарт, һул яғынан Итбай ҡарт ултырып алған. Ә уның эргәһенән оҙон буйлы Муйнаҡ ултыра ине. Ҡорға Алдар килеп инеү менән, атайым урынынан тора һалып, уның ҡулынан алды ла йыйылған ҡунаҡтарға:

— Бына был ҡыр батыры минең ҡыуанысымды күтәрешергә ялан яҡ халҡынан килгән ҡунағым була инде, — тип таныштырғас, Алдар бөтәһе менән дә ҡуш ҡуллап күрешеп сыҡты. Мин шунда Муйнаҡтың уға бүре һымаҡ ҡарап ултырғанын күреп ҡалдым. Алдар бөтәһе менән дә иҫәнләшеп сыҡҡас, атайым етмәһә уны үҙ урынына ултыртып, үҙе Балтас ҡарттың уң яғына сығып ултырҙы. Бөтәһенән дә һуңлап килгән Ҡошбай ҡарт атайым эргәһенән урын алып, ҡалған ҡунаҡтар уларҙың ике яғынан теҙелешеп ултырыштылар...

Мин һеҙгә инде, ҡәҙерле ҡунаҡтарым, ул кистәге һый-хөрмәттең ни рәүешле үткәнен һөйләп тормайым, һый-хөрмәт беҙҙә ҡайҙа ла берҙер инде ул: ит ашанылар, ҡымыҙ эстеләр. Ашап-эсеп туйғас, атайым аҡһаҡалдарға:

— Был йыйын нindәй уңай менән уҙғарыласағын барығыҙ ҙа сапҡындар аша ишетеп беләһегеҙҙер инде, — тине.

— Беләбеҙ, беләбеҙ, — тиештеләр ҡарттар. — Батыр ҡыҙындың исән-һау ҡайтып килеүе шатлығынан был, беҙ ҙә бығаа буйтым ҡыуанышып ултырабыҙ.

— Тик туйҙы ниҙән башлап ебәрәбеҙ һуң? — тип ҡуйҙы шунда Итбай ҡарт.

— Әгәр ҙә мәгәр йыйын хуп күрә икән, шунан башлайыҡ, — тине атайым. — Башта бәйге булһын, унан — көрәш, ахырын аттан тартыш менән ослап ҡуяйыҡ.

— Ә бәйгегә ни саҡлы ара булыр? — тип һораны уҫал сырайлы Муйнаҡ.

— Ҡошбай йәйләүенән алып булыр инде, — тине атайым.

— Ярай, бик яҡшы, — тип йөплəп ҡуйҙы Ҡошбай ҡарт та, — яй йөрөгәндә ярты көнлөк юл була инде, улай булғас.

Шунан атайым Алдарҙың уйын белергә теләп:

— Батыр! Һин алыҫ юлдан йонсоп килгән атыңды беҙҙең аттар ыңғайына ебәрерһеңме икән? — тине.

— Әгәр ебәрмәһәм, минең үҙемә лә, атыма ла ғәрлек буласаҡ! — тип яуап бирҙе бығаа ҡаршы Алдар.

Мин арттан ғына бөтә һөйләгәндәрҙе тыңлап торҙом да атайымды көтөп торорға тирмәбеҙгә инеп киттем. Ә батырҙар бәйгегә әҙерләгән аттарын эйәрләп ҡуйырға, ҡарттар аҡшам намаҙын уҡырға таралыштылар. Атайымды көтөп алып, миңә лә бәйгегә ҡатнашырға ризалыҡ биреүен һорап, атымды инде әҙерләп тә ҡуйғанлығымды әйттем. Шуның өҫтәүенә алам-һалам ғына кейем кейенеп, үҙемдең кемлегемде белгертмәй генә ҡатнашырға ниәтләнгәнемде лә әйтеп ҡуйҙым. Ылдырап бөткән генә елән кейеп, сәс толомомдо урап һалып, осон ғына маңлайыма төшөрөп, түбәтәй менән баҫтырып ҡуйҙым да уның өҫтөнән яулыҡ бәйләп алдым. Атайым:

— Был әкәмәттең тағы ни кәрәге булды? — тип аптырағас, мин:

— Муйнаҡ танымаҫҡа, — тинем. — Бөтә кеше мине таныпторғас, бөтәһе лә минең исемемде һөрәнләп торһа, Муйнаҡҡа ла мин билдәле буласаҡмын. Ә был ҡара эсле әҙәмдән ниндәй генә әшәкелекте лә көтөп була. Уның әле мин бәләкәй саҡта ҡоҙалап, теге йыйында әйткән һүҙҙәрен ғүмерҙә онотаһым юҡ.

— Һин аҡыллы уй йөрөтәһең, ҡыҙым, мин дә һиңә Алдар эргәһендәрәк булырға кәңәш итәм, — тине атайым. — Үҙем дә белмәйем, нилектәндер, ул батыр күңелемә ятты минең. Ахыры хәйерлегә булһын.

Атайымдың ризалығын алғас, мин икенсе тирмәгә килдем. Унда инде миңә кейем-һалым да әҙерләп ҡуйғайнылар. Ылдырап бөткән был бишмәтте шундай уҡ салбар эсенә салғыйҙарын тығып кейҙем дә, билемә ҡәмәр урынына ҡайыш ҡына быуып, уға хәнйәремде тағып, башыма әле әйткәнсә түбәтәй кейеп алдым. Атымдың эйәрөпсөнө лә шул кейемдән ары китмәгәйне. Атайымды шул кейемдә көлдөрөп сығайым әле, тип, тирмәгә барып инһәм, ул мине үҙе лә танымай:

— Был ниндәй тыйнаҡһыҙ малай! Ни кәрәк һиңә? — тип ҡысҡырғас, мин яулығымды күтәреп, уға ҡараным да көлөп ебәрҙем. Ул да, мине танып, рәхәтләнеп көлөп алғас:

— Батыр ҡыҙҙан һин әллә ниндәй бер байғошҡа әйләнгәнһең бит, — тип ҡуйҙы. Унының менән шулай көлөшөп алғас, атымды менә һалып, Ҡошбай йәйләүенә юл тотҡан төркөм араһына ҡатышып киттем...

Зөһрәнең хикәйәте шул урынға килеп еткәс, Йылҡыбай, уның һүҙен бүлдереп:

— Ә бәйгелә күпмеләп ат бар ине? — тип һорап ҡуя.

— Йәйләүҙән сыҡҡанда, мин йүнләп һанай ҙа алманым, ә иртән бәйгегә теҙелешеп торғанда, йөҙҙән ашыуыраҡ ине, — тип яуаплай Зөһрә.

— Ә бәйгеләре ниндәй бүләк ине, күпмеләп бар ине? — тип Аллабирҙе лә шунда һорау ҡыҫтыра.

— Тәүге бәйгегә бер өйөр бейә менән бер юрға айғыр булды. Айғыры ла, бейәләре лә шау ҡола ине. Икенсе килгәнгә — эйәрөпсөнө менән бер тилбер ат булып, эйәре көмөш тә мәрйен менән нағышланғайны. Өсөнсө килгәнгә — шау ҡорос ҡалайҙан яу кейеме — һарайта*, дүртенсеһенә — ҡалъяны менән әҙернә-йәйә, уҡтары менән һаҙағы, бишенсеһенә — ҡынлы ҡылыс, алтынсыға — кәрмәзин елән, етенсеһенә — ҡара төлкө тиреһенән йәйге кәпәс, һигеҙенсеһенә — көмөш көмбәҙле ҡалта*, туғыҙынсыға — һөңгө ине буғай, — тип хәтерләй Зөһрә.

— Һин тағы бер иң кәрәклеһен төшөрөп ҡалдырманыңмы? — тип ныҡыша йор һүҙле Йылҡыбай.

— Нимәһе төшөп ҡалды икән? — ти Зөһрә, аптырап.

— Батыр ҡыҙҙың үҙен. Бөтә йыйындың күҙе-күңеле төшкән матур ҡыҙҙы, — тип күҙен ҡыҫып ҡуя Йылҡыбай.

— Хәҙер шаяртырға һуң инде, был хәбәрҙе һеҙгә бит бер ҡарсыҡ һөйләп ултыра, — тип көрһөнөп ҡуя Зөһрә.

— Шулай ҙа әҙернәң керешен әле һин йәштәр һымаҡ тартып ҡуйҙың бит, — тине Йылҡыбай.

Зөһрә, был хикмәтле-төртмәкле һүҙҙәрҙе икенсегә бормаҡ булып, урынынан тора һалып, быларға тағы берәр туҫтаҡ ҡымыҙ ҡойоп биреп, үҙе лә оҙон һүҙҙән кибеп киткән тамағын сылатып ала ла йәнә һүҙен дауам итә.

## ЕГЕРМЕ АЛТЫНСЫ КИС

— Мин шулай һеҙгә бәйгегә барыусылар араһына ҡатышып киткәнемде әйткәйнем бит әле. Киске шәфәҡ батып та өлгөрмәй, туп-тулы ай ҙа ҡалҡҡас, ҡупшы кейемдәрен кейеп алған иптәштәрем араһында үҙемдең алам-һалам кейемем менән мин, күрәһең, ҡара ҡарға араһында ала ҡарға төҫлө күренгәнмендер инде. Миңә күҙ ташлап алған һәр кем:

— Бынау байғоштоң аты бер ҙә эйәһенә күрә түгел, — тип ҡуя ине. Атым, ысынлап та, аҡбуҙ толпар булып, бер ҙә минең һыным-киәфәтемә иш булырҙай түгел ине шул. Мин юрый теҙгенемде йә бушатып, йә киҫә тартып, ат башын да тота белмәгәнгә һалышып, үҙемдән башҡаларҙы көлдөрөп кенә барҙым. Шулай йүнһеҙ ҡыла-

нып, эйәремдә борғолана-һырғылана, сабышыусылар араһында килгән Алдарҙы табырға тырыштым. Тик Алдарҙы күрмәгәс, алғарак сығып караһам, иң алда, бер-береһенән бер тотам да калышмай, йәнәшә килгән ике һыбайлыны күреп, юрттырып барып еттем дә, уларҙың Алдар менән Итбай икәнен белдем. Улар менән тигеҙләшкәс, былар ҙа миңә карап, көлөп ебәрҙеләр.

— Кайҙа юл тотаһың, байғош? — тип мыҫкыллап һорағас, мин дә быларға сер бирмәгән булып, һакаулап:

— Һеҙ кайҙа балаһығыҙ, мин дә шунда балам, — тигән булдым.

— Һай, был һакау тик тормаҫ, тигәндәре шулдыр, күрәһең. Шундай якшы атта йүнләп йөрөй ҙә белмәгәс, өйҙә генә ултырһаң ни була, исмаһам! — тине миңә Алдар.

— Белһәм-белмәһәм дә, беленсе бәйге — минеке, күлегеҙ ҙә толоғоҙ! — тигәйнем, былар тағы һындары катып көлөштөләр. Мин, атымды ситкә кайырып, улар артынан ыңғайлаһам да, ни һөйләшкәндәрҙер — уныһын ишетә алманым.

Йәй уртаһы төнө бик кыҫка булһа ла, кояш сыкkансы беҙ инде билдәләнгән урынға барып та еттек. Һәр кем бер аҙ вакыт атынан төшөп торҙо, бәйгегә әҙерлеген барланы. Тауҙар артынан сығып килгән кояштың тәүге нурҙары күренеү менән, беҙ аттарыбыҙҙы тигеҙләй ҙә башланык. Акһакалдар бәйге башы итеп һайлаған Итбай менән Теләүсен, алғарак сығып, бөтәһенә лә кыскыра-һөрәнләй, бәйге тәртибен өйрәтеп, бер рәткә теҙелергә куштылар, кул һелтәгәс кенә бөтәһенә бер юлы сабып китергә кәрәклеген әйттеләр. Бына шунда уртала торған Алдарҙы күреп калдым, кыҫылып-боҫолоп, уның эргәһенән урын алдым. Алдар шунда, мине күреп:

— Бәй, һакау, һин дә бында икән дәһә! Әллә минең үҙем менән ярышып карамаксыһыңмы? — тип куйҙы. Мин дә сер бирмәҫкә тырышып:

— Уҙып та кителмен әле, — тигән булдым.

— Ярай, ярай, һакау, бергәләп сабышырбыҙ, — тине был ахырҙа йомшара төшөп.

Беҙ бөтәбеҙ ҙә әҙер булғас, Итбай менән Балтас карттың улы Теләүсен, икеһе ике якка айырылып китеп, сабышты башларға кул һелтәүҙәре булды, бөтәһе бер юлы кыйкыулашып, сабып та сығып китте. Башта бөтәһе лә тиерлек бер тигеҙ сапһалар ҙа, оҙон буйлы Муйнак буҙ аты менән бер ук атым ер алға сығып та өлгөрҙө. Итбай, Теләүсендәр менән бергә минең менән һәр сак һунарға йөрөгән иптәшем Байегет тә аттарын ярһыта-ярһыта Муйнакты кыуып еттеләр ҙә уның менән катар саба башланылар. Муйнак, як-яғына асыулы карап, һөмһөрө койолоп килә ине. Мин Алдар менән артта-рак калып сабып киләм. Шунда уның үҙ атына буйлап алып китергә ирек бирмәй килеүен һиҙеп калдым. Ә ул миңә күҙ һирпеп алды ла:

— Ниңә һин, һакау, атыңды тыйып киләһең, шөрләйһеңме әллә, елдер, әйҙә! — тип, үҙенең теҙгенен сак кына бушаткайны, беҙҙең аттар, үҙ ояларына кайтырға алғаҫыған ике ыласындай, тояктары ергә теймәй елдерә башланылар. Беҙ шулай, алдағы дүрт батырҙы кыуып етеп, улар эргәһенән атылған уктай үтеп киттек. Аттарыбыҙ

ҡолаҡҡа ҡолаҡ терәп тиерлек, бер-береһенә ат башындай ҙа ал бирмәй сабалар. Алдар минең атҡа таң ҡалһа, мин уның атының шәплегенә иҫем китте. Атайымдың йәйләүе күҙгә күренгәс кенә, мин үҙемдең кемлегемде асып бирергә тип, яулығымды күтәрә төштөм дә:

— Күрҙеңме инде һаҡауыңды! — тип ҡысҡырҙым. Ул мине шунда уҡ танып алды ла:

— Һай, батыр ҡыҙ, был әкәмәт кейемең нәмәгә кәрәк булды инде? — тип үртәнеп ҡуйҙы.

— Быны тик атайым менән һин генә беләһең. Мине тыңла, Алдар: беҙҙең аттар, күрәһең, бер-береһенә ал бирмәҫтәр, тәүге бәйгегә беҙ бер тигеҙ барып етербеҙ. Шуға күрә бәйгегә еткәс тә атыңды туҡтатып, башҡаларҙың үҙ бәйгеләренә еткәнен көтөп тор, ә мин һинең артыңса сабып сығырмын да китермен, мине бер кем дә таный алмаҫ, — тинем. Шул арала беҙ бәйгегә килеп тә еттек. Алдарҙы танып торған беҙҙең йәйләү халҡы:

— Ҡыр батыр алдан килә, ә икенсеһен белмәйбеҙ! — тип һөрәнләп ебәрҙеләр.

## ЕГЕРМЕ ЕТЕНСЕ КИС

Мин шулай бөтә ауыл буйлап сабып үттем дә ҡунаҡтар араһына инеп йәшерендем. Унда мине үҙ кейемем менән яҡын еңгәм көтөп тора ине. Атымды уға бирә һалып, үҙ кейememде кейеп алдым да әсәйемдең тирмәһенә ашыҡтым. Унан сығып, халыҡ араһына буталып киттем, бәйгегә сабып килеүселәрҙе күҙәтеп тора башланым. Шунда ике һыбайлының сабып килгәне күренде: былар Итбай менән Теләүсен ине. Уларҙың аттары бер-береһенә ал бирмәгән кеүек булһа ла, Итбайҙың аты икенсе бәйгегә саҡ ҡына алдараҡ килеп өлгөрҙө, Теләүсендеке өсөнсөгә ҡалды. Һуңынан алыҫта дүрт һыбайлы күренде, Муйнаҡ бөтәһенән дә буйға оҙонораҡ булғас, уны әллә ҡайҙан уҡ танып алдыҡ. Бәйгегә яҡынайғас, уларҙың икеһе алғараҡ һурылып сыҡты. Береһе минең һунар иптәшем Байегет менән икенсеһе Балтас ҡарттың төпсөк улы Ҡинйә ине. Байегет арткараҡ ҡалып килһә лә, бәйгегә етер алдан ғына Балтас улынан алға сығып, әҙернәһе менән ҡалъян, уҡтары менән һаҙаҡ эләктерҙе. Ә Ҡинйәгә ҡылыс тейҙе. Улар артынса бәйгегә ҡара яныл Муйнаҡ килеп етте, уның аты иҫ киткес көслө булһа ла, хужаһының ауырлығына сыҙай алмай, аҡ күбеккә батып килде; етмәһә, Муйнаҡ бәйгеһен эләктереп алайым ғына тигәндә, аты абынып китеп, хужаһын ергә алып орҙо. Бөтә халыҡ, был мәрәкәгә түҙә алмай, ҡысҡырып көлөп ебәргәс, Муйнаҡ, хурлығынан нишләргә лә белмәй, аяғына саҡ баҫып торған атының ҡолаҡ араһына йән асыуы менән килтереп тондорғайны, аты тәгәрәп китеп йән дә бирҙе.

Етенсе бәйгене Ҡошбай ҡарттың улы Шоңҡар алды. Һигеҙенсе бәйге Өфө йылғаһы башынан килгән Бикбирҙегә тейҙе, ә һуңғы, туғыҙынсы бәйгене Ҡармасан буйынан килгән Итҡол исемле бәрәүгә бирҙеләр. Бәйге алған туғыҙ батырҙы ла атайым үҙ тирмә-

һенә саҡырҙы. Бөтәһенең дә йөҙө яҡты, шатлығы эсенә һыймай ине. Тик Муйнаҡтың ғына һөмһөрө ҡойолоп, бөтәһенә лә күҙенең ағы менән ҡарап, ер тырнарҙай булып йөрөй ине. Атайыма ла:

— Һинең йыйыныңда бер мин бәхетһеҙ. Атым да, үҙем дә ҡолап хур булдым. Беренсе бәйгене өмөт итеп тә, һуңғы бәйгеләрҙең береһен саҡ алдым, — тип һарыуын түкте был. Атайым, унын ярһыуын баҫырға тырышып:

— Теләйһең икән, ана, өйөрөмдән үҙеңдең күңелеңә яткан теләһә ниндәй атымды һайлап ал, — тигәйне, быға ҡаршы Муйнаҡ бик эре ҡыланып:

— Һинең бөтә йылҡы өйөрөңдә мине йөрөтөрҙәй атың юҡ, — тип атайымдың намыҫына тейһә лә, ҡунаҡ хәтерен ҡалдырмайым инде, тигәндер, күрәһең атайым ауыҙ асып һүҙ ҙә өндәшмәне.

Шул саҡ мин Итбайҙың күҙе менән кемделер эҙләгәнен күреп алдым. Алдарҙы табып алғас, унан:

— Әйт әле, батыр: анау аты һинекен ҡыуып еткән теге һаҡау ҡайҙа китеп олаҡты икән? — тип һорай һалды.

— Ҡыуып етеү генә түгел, бәйгегә хәтле ул минең менән бер ҡатар килеп, аттарыбыҙ ҡолаҡҡа-ҡолаҡ терәп сапты. Бәйгегә еткәс, мин атымды туҡтатһам, ул күҙҙән дә юғалғайны, әле мин бәйгенең кемгә тейгәнен дә асыҡ ҡына белмәйем, — тип яуапланы Алдар.

— Эйе, эйе, — тип шаулашты бөтә аҡһаҡалдар, — беҙ бөтә халыҡ менән күреп торҙоҡ: ул һинең менән типә-тиң килә ине, нишләптер бәйге эргәһендә туҡтап та торманы, туҡтаһа, бәйгене уртаҡ бүлергә лә була ине.

Атайым ҡунаҡтарҙың ултырышыуын үтенгәс, бүләк алған батырҙар аҡһаҡалдар менән бер ҡорҙан урын алдылар, ә башҡа ҡунаҡтар ырыу-ырыуы менән ултырышып бөткәс, беҙҙең ауылдың йәштәре бөтәһен дә һыйлай башланылар. Аш-һыу бик мул әҙерләнгәйне. Атайым һыйына мал-тыуарын үҙе лә йәлләмәне, өҫтәүенә беҙҙең туған-тыумасалар ҙа ҡатышҡас, турһыҡ-һабаларҙан ҡымыҙ йылға булып аҡты.

Төштән һуң көрәш башланырға тейеш булғас, атайым ауыл уртаһындағы тигеҙ урынға ҙур түңәрәк яһап, кейеҙ-балаҫтар түшәргә ҡушып ҡуйҙы. Улар өҫтөндә иң ололар ултырырға, ә урта йәштәгеләр менән йәш-елкенсәк улар артында, ғәҙәт буйынса, баҫып ҡына торорға тейештәр ине. Балаҫтар араһында Алдар менән үлтергән айыу тиреләрен йәйеп ҡуйырға ла онотмағайнылар. Көрәш майҙаны әҙер булғансы, ҡунаҡтар ашап-эсеп туйғас, һыйхөрмәте өсөн хужаға рәхмәттәр әйтеп, мәҙәк һүҙҙәр һөйләшеп, бик күтәренке күңел менән ултырҙылар. Бары Муйнаҡ ҡына, бер һүҙгә лә ҡушылмай, һөмһөрө ҡасып ултырҙы. Урынынан торғас та, бер кем менән дә ҡатышмай, бер кемгә лә бер ауыҙ һүҙ ҡушмай, берәй яман уй ҡора ине булһа кәрәк.

Алдар, урынынан торғас, Итбай эргәһенә килеп, ни хаҡындалыр һөйләшеп торҙо, башҡа ҡарттар ҙа, көрәш башланыуын көтөп, үҙ-ара кәңәш-төңәш итешеп алдылар. Балтас аҡһаҡал, көрәш майҙаны әҙер булғанын күргәс, атайым менән башҡа аҡһаҡалдар янына килеп, былай тип һүҙ башланы:

— Хужаның быңдай мул һый-хөрмәтенән һуң хәҙер батырҙарҙың көрәшен ҡарарға ла була. Ҡарт булһам да, ошо йәшемәсә һаман был тамашанан күңел туйғаны юҡ. Йәш сағымда минең менән алышырҙай батырҙар һирәк була торғайны. Шул ваҡыттарҙың кире ҡайтмауы бик йәл. Шул замандар кире ҡайтһа, мин һинең батыр ҡыҙың менән алышып ҡарар инем!

Ҡарттарҙың батыр ҡыҙ хаҡында ишетеүҙәре булды, бөтәһе бер юлы:

— Бәй, ул ҡайҙа һуң, Ҡыҙрас ҡорҙаш? Һин беҙгә уны күрһәтергә тейешһең дә инде!

— Әлбиттә, шулай! — тип геү килештеләр.

— Күрерһегеҙ, дуҫтарым, күрерһегеҙ. Өҫтәүенә һеҙҙең килеүегеҙгә шул үҙе үлтергән айыу тиреһендә ултырған булыр. Шулай уҡ Алдар батыр ҙа шундай тире өҫтөндә ултырыр, улар икеһе ике айыу менән алыштылар бит әле, — тип, атайым уларға был хәлдең нисек булғанын да һөйләп бирҙе. Атайымдың был хәбәре ауыҙҙан-ауыҙға таралып, бөтә халыҡ шул хаҡта ғына һөйләшәһөйләшә, көрәш буласаҡ урынға ыңғайланы. Атайым, мине халыҡ араһында осратып:

— Әҙер бул, мин һине ҡунаҡтарға күрһәтергә һүҙ бирҙем, — тигәс, яңы елән менән яңы кәпәсемде кейә һалып, шул уҡ ир-ат кейемендә атайымды эҙләп килһәм, уның Алдар менән торғанын күрҙем.

— Ҡил әле, батыр ҡыҙым, — тине атайым, хәҙер мин һеҙҙе бөтә ҡунаҡтарға ла күрһәтәсәкмен. Икегеҙ ҙә үҙегеҙ үлтергән айыу тиреләренә ултырышырһығыҙ, — тигәс, икебеҙҙе лә ике яҡтан етәкләп, ҡор уртаһына алып сыҡты. Бөтә йыйын атайымдың мине Алдар менән етәкләп сығарыуына ғәжәпһенеп ҡараны. Ә мине белгәндәр:

— Ана, айыу үлтергән батыр ҡыҙ ошо була инде! — тип ҡыҫҡырып ебәрҙеләр.

Атайым, Алдарҙы уң яғынан, мине һул яғынан алып, беҙҙең уртаға инеп ултырғас, мин тирә-яғыма әйләнеп ҡараһам да, ҡорҙағылар араһында оҙон буйлы Муйнаҡты күрмәйенсә аптырап ҡуйҙым. Атайым менән Ҡошбай араһында ултырғанлыҡтан, уларҙан һорашырға ҡыйманым.

## ЕГЕРМЕ ҺИГЕҘЕНСЕ КИС

— Ҡәҙерле ҡунаҡтарым минең! — тип атайым һүҙ башланы. — Алтмыш йыл ғүмер йәшәп, бөгөнгө көндәге кеүек шул саҡлы хөрмәтле аҡһаҡалдар, шул саҡлы көслө батырҙар менән, шул саҡлы йәш-елкенсәк йыйылып килгәнен бығаса минең күргәнем юҡ ине әле. Ҡарт көнөмдә мине бигерәк тә һеҙҙең шулай шатлығымды уртаҡлашырға килеүегеҙ ҡыуандыра. Ә шатлығым минең ысынлап та ҙур. Мин ҡыҙымдың әйләнеп ҡайтыуына бөтөнләй өмөт өҙөп бөткәйнем инде. Йә берәй нәмәгә тарығандыр, йә януарҙар өҙгөләп бөтөргәндер, тигәйнем. Бына, аллаға шөкөр, ул иҫән-һау ҡайтып

керҙе. Шуға ла мин һеҙҙең бөтәгеҙҙе лә дуҫ-иштәрем, ҡәрҙәш-ырыуҙарым күреп, был оло туйға саҡырҙым. Һеҙ мине ололоҡлаңығыҙ, алыҫ ерҙе яҡын итеп килдегеҙ, егетлек күрһәтеүҙәрегеҙҙе бәйге менән башлап ебәрҙегеҙ, хәҙер инде бына көрәшкә күсеп ҡарайыҡ. — Шул саҡ атайым, ҡарттарға өндәшеп: — Хәҙер инде, арһаҡлы аҡһаҡалдар, үҙегеҙҙең ырыу батырҙарын һайлап, майҙанға сығарыу һеҙҙең ҡарамаҡта, — тигәс, йыйын бер аҙға ғына тынып ҡалғандай булды. Тик шул саҡта эскерһеҙ Ҡошбай аҡһаҡал урынынан торҙо ла:

— Һин, яғымлы, киң күңелле хужабыҙ, беҙҙе үҙеңдең шатлыҡ туйыңа саҡырып килтерҙең, һый-хөрмәт күрһәттең, шулай булғас, тәүге батырҙы ла һин үҙең ҡуйырға тейешһең. Ә һинең батыр ҡыҙыңдан да яҡшыраҡ ниндәй көрәшсе булһын? Беҙ, күршеләрең, уның көсөн дә, таҫыллығын да, батырлығын да яҡшы беләбеҙ, уның бер ҡайҙа ла һынатҡаны юҡ. Хәҙер бына һиңә алыҫ ерҙәрҙән йыйылып килгән батырҙар, йәш егеттәр әйҙә көс һынашып ҡараһындар уның менән, үҙ ырыуҙарына әйҙә уның данын алып ҡайтһындар, — тип кире урынына барып ултырҙы.

Был һүҙҙәр генә атайымды мөрхәтһендермәне буғай, ул ниҙер әйтергә булып, ауыҙ ғына асҡайны, ҡорҙағыларҙың бөтәһе лә:

— Көрәште батыр ҡыҙ башлап ебәрһен! — тип ҡысҡырышҡас, атайым миңә боролоп, уртаға сығырға ҡушты.

Дөрөҫөн генә әйткәндә, минең башлап сыҡҡым килмәгәйне, шулай ҙа халыҡ һүҙен тыңламай булдыра алманым. Мин уртаға сығып ултырырға ла өлгөрмәй ҡалдым, ҡаршыма ҡара һаҡаллы, көмөрәйеберәк йөрөгән Бикбирҙене килтереп тә баҫтырҙылар. Ул шунда уҡ үҙенең һуҫар туның сисеп ырғытты ла, күк бишмәте менән генә ҡалып, минең менән көрмәкләшә лә башланы. Мин көрәштең бөтә тәртибен белеп бөткәнгә күрә, шунда уҡ быны алып ырғытаһымды тойоп, оҙаҡ йөрөп көстө әрәм итмәҫкә булдым, тиҙ генә күтәреп алдым да, ике генә өйөрөп, быны ергә атып та бәрҙем. Бөтә халыҡ, мине маҡтап, геү итеп ҡалды. Ерҙә ятҡан батыр, тороп, башын сайҡай-сайҡай, үҙенекеләр янына китеп барҙы. Мин ултырып алып, икенсе батыр сыҡҡанын көтә башланым, шунда башҡалар араһына килеп ултырған Муйнаҡты күреп ҡалдым. Ул, минең бөтә буй-һынымды тишеп сығырҙай булып, алан-йолан күҙ йөрөтә башлағайны, мин башымды аҫҡа эйеп, шулай һаман ултыра биргән дә булыр инем, шул арала ҡаршыма йәш Ҡинйәне килтереп еткерҙеләр. Ул минең менән йәштәш, буйы-һыны килешле, үҙе бик таҫыллы булһа ла, көс яғынан миңә тиңләшерлек түгел ине. Көрмәкләшеп алғас уҡ, мине күтәрергә маташып ҡараны ла көсө етмәне. Ә мин уны еңел генә күтәреп алдым да, ергә атып бәрергә йәлләп, яйлап ҡына арҡаһына һалдым. Шунда уның атаһы Балтас ҡарт:

— Рәхмәт, батыр ҡыҙ, һәләк итмәнең минең Ҡинйәмде! — тип ҡысҡырып ебәрҙе. — Ул әле йәш, көс тә ултырып етмәгән үҙенә. Әйҙә, олоһо менән алыш. Бар, Теләүсен, хәлеңдән килһә, ҡустың урынына батыр ҡыҙҙы еңеп, ырыу данибыҙ булып ҡал!

Теләүсен миңә тиң көрәшсе ине. Буйға ла минән оҙонораҡ, яурыны ла киң, көслө лә, көрәш хәйләһен дә яҡшы белә. Унын менән көрмәкләшеп алғас, бер-беребеҙҙе күтәрешеп тә, ҡыҫышып та оҙаҡ һынап ҡараныҡ. Ҡапыл ул мине, күтәреп алып, өйөрөлтә генә башлағайны, мин уға бар көсөмдө һалып, ҡабырғаларын ҡыҫып алдым да үҙен тынһыҙ ҡалдырҙым. Ул, ике ҡабат өйөрөү менән үк, мине ергә төшөрҙө. Шулай көрмәкләшеп йөрөй торғас, мин дә уны, үҙемдең бөтә таҫыллығымды ҡулланып, күтәреп алдым да, өс ҡабат өйөрөп алып, ергә ташланым. Тик шул саҡта минең еләнем асылып китте лә теге сисеп тә өлгөрмәгән һәләмәм менән салбарымды күреп ҡалған Итҡол үҙ эргәһендә ултырған Алдарға:

— Ай, бай, бай, теге һаҡау булып ҡыланған ул үҙе түгелме?! — тип ҡысҡырып ебәрҙе. Тирә-яҡта халыҡ геү килеп тормаһа, был һүҙҙәрҙе күптәр ишеткән булыр ине лә, бәхеткә күрә, уны тик яҡын ултырған аҡһаҡалдар ғына ишетеп ҡалды.

Мин үҙемә тейешле батырҙарҙы еңеп сыҡҡандан һуң, ҡорҙан сығып торорға иткәйнем, әйләнһәм, ни күҙем менән күрәйем: атайым эргәһенә Муйнаҡ килә ята. Мин урыныма кире ултырғас, был шундай тәкәббер төҫ менән атайыма былай тип һүҙ башланы:

— Ҡыҙрас! Хәтерендәлер, бынан һигеҙ йыл элек килгәндә, мин һинең кесе ҡыҙыңды ҡоҙалағайным. Ул саҡта һин унын йәшлегенә һылтанып ҡалғайның. Ә бына хәҙер инде ул еткән ҡыҙ, өҫтәүенә бынау иргәйелдәр араһында батыр ҙа булып һанала. Етмәһә, кейәүлеккә үҙен еңә алғанды ғына һайлай, имеш, тип тә ишеткәйнем. Унын был януарҙары бары тик бынау кәрлә буйлы иргәйелдәрҙе генә ҡурҡыта. Әммә миңә бынауындай көсөм барҙа ҡыҙ кеше менән алышыуы оят. Мин унын менән көрәштәш булырға йыйынмайым, ул минең бисәм булырға тейеш. Шуға күрә ҡыҙыңды миңә биреүеңде һорайым. Әгәр ҙә быға риза булмайһың икән, мин уны һеҙҙең бөтәгеҙҙән көслөк менән дә тартып алып китерлекмен.

## ЕГЕРМЕ ТУҒЫҘЫНСЫ КИС

Муйнаҡтың был оятһыҙлығы беҙҙең татыу ырыуҙар араһында ғүмерҙә ишетелмәгән янауҙары бөтәһенә лә аяҙ көндә йәшен атҡан һымаҡ булды. Атайым да, башҡа аҡһаҡалдар ҙа был һүҙҙәрҙән шаҡ ҡатып ҡалдылар. Ә йәш-елкенсәктең бигерәк тә Алдар менән Итбайҙың, асыуҙары сығырынан сығып, һәр ҡайһыһы ҡоралға тотонмаҡсы булды. Ә мин инде, уларҙан да яман ярһып, бөтәһенән элек тирмәгә йүгереп индем дә, елән аҫтынан һарайта кейә һалып, ҡылысым менән уҡ-һаҙағымды тағып алдым, ҡулыма һөңгөмдө тотоп, аҡбуҙым өҫтөндә майҙан уртаһына сабып та килеп еттем. Шунда мин Муйнаҡтың, көслө януар һымаҡ, үҙебеҙҙең батырҙар ҡамауында тороп ҡалғанын күрҙем. Бөтәһе лә уны шундай мәкерлеге, оятһыҙлығы өсөн битәрләйҙәр, ә ул уларға күҙенең ағы менән ҡарап, ужар сәсеп, яуап биреп тә өлгөрә алмай ине. Беҙҙең арҙаҡлы аҡһаҡалдарыбыҙ бөтәһе бергә йыйылышып, ҡулдарын күккә

һонған килеш, ни ҡылырға ла белмәй торған мәлдә, мин уртаға йырып килеп индем дә, бар көсөмә ҡысҡырып:

— Туҡтағыҙ, батырҙар! Нинә был әҙәм аҡтығына һүҙ әрәм итеп торорға? Мине тыңлағыҙ, бөтә аҡһаҡалдарға, һеҙгә әйтер һүҙем бар, — тип әйтеүем булды, бөтә батырҙар халыҡ менән бергә артҡа сигенкерәп, Муйнаҡтың үҙен генә уртала ҡалдырҙылар, бөтәһе лә тауыш-тынһыҙ ҡалып, бик нык аптырашҡан көйө, минең әйтер һүҙемде көттөләр. Шунда мин, тағы ла ныҒыраҡ ҡысҡырып, яҡыныраҡ килеп торған аҡһаҡалдарға былай тип һүҙ башланым: — Арҙаҡлы ил ҡарттары! Һеҙҙең шулай нисәмә йыл ғүмер итеп, ошо көнгәсә ата-бабаларҙан ишетеп тә, үҙ күҙҙәрегеҙ менән күреп тә быңдай аҡылға һыймаҫ хәлде белгәнегеҙ бар инеме һуң? Борон замандарҙа ла, хәҙерге көндәрҙә лә беҙҙең ҡәрҙәш-ырыу халыҡтары араһында шундай күркәм йыйын туйҙарыбыҙҙың йәмен боҙған быны иш берәй битһеҙ әҙәм табылғаны булдымы? Бер ниндәй хөсөт уй, бер ниндәй ыҙғыш-талаш, бер ниндәй көс ҡулланыуҙың заты ла булғаны юҡ ине бит! Ә нинә бөгөн килеп был әҙәм аҡтығы, саҡырылған ҡунаҡ була тороп та, атайымдан шундай тәкәбберлек менән кәләш таптыра? Етмәһә, көслөк менән ҡурҡытып ҡыҙ алмаҡ була? Был ғынамы һуң әле, айбарлы батырҙарыбыҙ менән башта көс тә һынашып ҡарамай, бушбоғаҙҙан уларға мыҫҡыл ташламаҡсы була! Улай икән, былай булһын, атай: мин һинән дә, арҙаҡлы аҡһаҡалдар, һеҙҙән дә, бөтә батырҙар, һеҙҙең исемдән дә бынау имәнес ҙур ғифритты үтәнән-үтә сәнсеп, бысраҡ ҡаны менән беҙҙең ырыуҙарға төшөргән тапты йыуырға рөхсәт итегеҙ! — тип һөңгөмдө ҡулыма алдым.

Шул арала Алдар менән Итбай уртаға атылып сыҡтылар ҙа, ярһыуынан тештәрен шығырҙатып, ужар сәскән Муйнаҡ менән мине аралап ҡала һалдылар.

— Туҡта, батыр ҡыҙ, ҡунаҡҡа ҡылыс күтәрмә! — тип ялбарҙы Итбай. — Асыуың хаҡ булһа ла, ярһыуыңды тыйып тор. Ҡулында ҡоралы булмаған был әҙәм ҡалдығын үлтереүҙән беҙгә изге булған ҡунаҡ йолаһы боҙоласаҡ, ундай хәлдең әлегә беҙҙең йәйләүҙәрҙә булғаны ла юҡ. Алдағы көндәрҙә лә беҙҙе ҡан ҡойоштан хоҙай үҙе һаҡлаһын! — тине. Шунан халыҡ менән аҡһаҡалдарға боролоп, һүҙен былай тип дауам итте: — Әгәр йыйын кәрәк тип тапһа, мин шундай кәңәш бирер инем: алаптай кәүҙәһенә бик маһая икән, Муйнаҡ, әйҙә, беҙҙең беребеҙгә ҡаршы көрәшкә сыҡһын, йә минең менән, йә Алдар батыр менән алышып ҡараһын. Ҡайһыбыҙҙан еңелһә лә, йыйындан үксәһен ялтыратһын! Батыр ҡыҙҙы алырға алғаҫыған ниәтенән дә ваз кисеп, бүтән ваҡыт беҙҙең йыйындарға аяҡ та баҫмаҫлыҡ булһын! Әгәр ҙә мәгәр икебеҙҙең беребеҙҙе ул еңеп сығыр булһа, ҡалған яғын батыр ҡыҙ үҙе хәл итер: беҙҙең ырыуҙарға ырғытҡан хурлығын, әйҙә, уның ҡара ҡаны менән йыуыр!..

Бөтә йыйын батырҙарҙың бындай ҡәһетлеккә килеүенән дерт итеп ҡалды. Бигерәк тә Итбай яғынан килгәндәр шомланып ҡуйҙы. Итбайҙың көсө-таҫыллығына ышанһалар ҙа, Муйнаҡ тиклем Муйнаҡҡа ҡаршы тороуы бик шикле ине. Ә Алдар өсөн атайым менән

мин генә хафаландым. Әгәр ҙә мәгәр Муйнаҡ Алдарҙы алып ташлай ҡалһа, мин шунда уҡ уны һөңгөгә алырға әҙер генә тора инем.

Йыйын ике батырҙың һүҙен хуп күрһә лә, уларҙың үҙ араһында бәхәс ҡупты: Алдар ҙа, Итбай ҙа Муйнаҡҡа ҡаршы беренсе булып сығырға ҡәһәтләнгәйне. Ә Муйнаҡ уларҙың үҙ-ара тартышҡанын күргәс, мыҫҡыллы көлөп:

— Эй, һеҙ, мәхлүк ер ҡорттары! Нимәгә унда сәкәләшеп торған булаһығыҙ, икегеҙҙе лә ҡушарлап һалмаһам, башҡа батырҙарығыҙҙы ла саҡырығыҙ, барығыҙҙың да һөйәген ергә төшәрмен! — тигән һүҙҙәре ике батырҙы ла ярһытып ебәрҙе.

Атайым менән башҡа аҡһаҡалдар шунда улар янына килә һалып:

— Айбарлы батырҙарыбыҙ, яҡлаусыларыбыҙ беҙҙең! Был бәһлеүән менән алышырға ниәт итеүегеҙ генә лә беҙҙең күңелде һөйөндөрә, рәхмәт һеҙгә. Бәхәсегеҙҙе ҡуйығыҙ ҙа йәрәбә генә ташлағыҙ: йәрәбә ҡайһығыҙға ғына төшһә лә, хаҡ тәғәләбеҙ һеҙҙе ярлыҡар, — тигәс кенә, батырҙар риза булышып, бүрек эсенә йәрәбә ташланылар. Тәҡүә Ҡошбай ҡарт эсенән иманын уҡына-уҡына, Алдарға төшкән йәрәбәне алып, бөтә халыҡҡа күрһәткәс, көрәшкә Алдар сығаһын әйтеп бирҙе. Мин шунда үҙем дә һиҙмәҫтән терт итеп ҡалдым, ә хуш күңелле Алдарымдың шатлығы йөҙөнә сыҡҡайны. Итбай ҙа, һөмһөрө ҡойолоп, ситкә китеп олаҡты.

Айбарланып алған Ҡыр батыр, урман ҡырҡыусы үҙе йыуан, үҙе бейек бер төп янына килгән һымаҡ, Муйнаҡ эргәһенә ҡыйыу атлап килде. Муйнаҡ унан буй ярымға оҙонораҡ булып, башы аша ҡарап тора ине. Уң ҡулын юғары күтәргән килеш, һулы менән генә Алдарҙың биленән алып, мыҫҡыллап:

— Һине ҡорҙан аша алып быргытырға бер ҡулым да еткән, — тигән булды. Шунда минең батырым:

— Ике ҡулың менән тотон! — тип, уның биленән тарамыш һымаҡ ҡулдары менән һығып алды ла иҫ киткес ғәйрәт менән бәһлеүәнде ергә сүктереп, үҙе менән тигеҙләгәс, бөтә йыйын аһ итеп ҡалды. Халыҡтың Алдарҙы хуплап, дәрт биреп тороуын ишеткән Муйнаҡ ғәрлегенән:

— Аһ, һин йүнһеҙ иргәйел, үҙеңдең көсөң дә булған була икән! — тип, Алдарҙы ике ҡулы менән эләктереп, мүкәйләп йөрөй торғас, күтәреп үк алды. Бөтәһе лә шул мәл быны яурын аша ташлай инде, тип торғанда, алғырлығы алымынан уҡ күренеп торған Алдар бының кәүҙәһен, аҫау айғырҙың ҡабырғаһын ҡыҫҡан көслө һыбайлы һымаҡ, ҡыҫып алғайны, теге, үкереп ебәреп, Алдарҙы ысҡындыра һалды. Мин, көрәштең бөтә алымдарын белеп торғас, Алдарҙың шундай ауыр ит бүкәнен күтәрә алмаясағын күреп тора инем. Күтәрһә лә, аҫтында ҡалып, күкрәгән генә иҙҙерәсәк, был, моғайын, быны ботона һалып ырғытыр, тип уйланым. Ә үҙ көсөнә нык ышанған Муйнаҡ, күрәһең, быны башына ла килтермәгәндер. Алдар бының күкрәк аҫтына инеп, күтәреп алырға иткән һымаҡ йөрөгәндә, Муйнаҡ уны кәүҙәһе менән иҙергә итеп, билен яҙа ғына төшкәйне, Алдар уның аҫтынан ялт итеп янтайҙы ла, Муйнаҡты ботона һалып, шундай ғәйрәт менән быргатып та ебәрҙе. Унан ерҙә

яткан Муйнактың күкрәгенә тубыкланып алды ла, кулдарын күкрәгенә шакарып, быны иҙә-иҙә:

— Йә, әйт хәҙер: кем кемде еңде? Батыр кыҙҙы даулауҙан ваз кисәм, бүтәнсә Кыҙрас ауылына аяк та баçмам, тип әйт! — тип Муйнактың йәнен алырҙай булып һелкеткәндә, бөтә халык, иркен тын алып, таң калып торҙо. Бөтәһе лә, Алдарҙы мактап:

— Беҙҙең йәйләүҙәрҙә быңдай батырҙың булғаны юк! — тип кыскырыша, Алдарҙы котлай ине.

Мин шунда атымдан төшә һалып, Алдарҙың аяк аçтында яткан Муйнак янына килһәм, уның йөҙөн күреп, ытырғанып киттем. Уның күҙҙәре атылып сығырҙай булып акайған, ауыҙынан кан катыш күбеге борколоп, үҙе алкымынан бурҙай алған которған бүре һымак, тештәрен шығырҙатып ята ине. Минән һуң йүгереп килгән Итбай артынса башкалар ҙа килеп еткәс:

— Ебәр үҙен әйҙә, дуçкай! — тине ул Алдарға. — Муйнактың еңелгәнен бөтә халык күреп торҙо, инде ул батыр кыҙҙы дауларға баҙнат итә алмаç.

Шунан һуң ғына Алдар, Муйнактан айырылып, аяғына баçты. Ә Муйнак һаман кымшанмай, иçен юғалткандай ята бирҙе. Шунда уның менән бергә килгән иптәштәре, уға эйелешеп, тауыш биреп карағас, ул тик ыңғырашып кына яуап кайтарҙы. Алаптай кәүҙәле Муйнакты дүрт кеше көскә күтәреп ултыртты. Ул тонок карашы менән иптәштәренә күҙ йөрөтөп сыкты ла:

— Һәләк булдым, егеттәр, бынау уң кулдың һыныуы бигерәк яман, — тип куйҙы. Унан һул кулына таянып торҙо ла үҙенекеләр янына тәнтерәкләп китеп барҙы.

Ә акһакалдар, Алдарҙы уратып алып:

— Карт көнөбөҙҙә һин беҙҙең күңелебеҙҙе күреп, кыҙҙарыбыҙҙы көслөк менән алыуҙан курсалап калдың, батыр. Юкһа, Муйнак был көслөк менән алыуҙы башлап ебәрһә, бүтәндәр ҙә уға эйәрер ине, — тип Алдарға рәхмәттәрен яуҙырырға тотондолар. Ә атайымдың ни тип рәхмәт әйтер һүҙҙәре лә етмәне. Алдарҙы ул косаклап алып, күкрәгенә кыçып:

— Кәҙерле улым һин минең, — тип аркаһынан һөйөүҙән бушамай ине.

## УТЫҘЫНСЫ КИС

Якындары менән Муйнак беҙҙең корҙан киткәс, акһакалдар йәштәргә көрәште яңынан башлап ебәрергә куштылар. Мин һеҙгә башта ук әйтеп киткән Байегет күптәрҙе алып ташланы. Шулай ҙа Балтас улы Теләүсен унан өçтөн булып сыкты. Итбай уға каршы үҙенең кустыһы Сурабайҙы сығарҙы. Көс яғынан бер тиң булған был ике көрәшсе оҙак айкашты. Бөтә оçталыктарын, бөтә таçыллыктарын һалып караһалар ҙа, бер-береһен алып ташлай алмағас, ахыр сиктә уларға айырылышырға куштылар. Майҙан шулай бер тын бушап калған арала һөмһөҙ Илсебай уртаға сыға һалып ултырғайны ла, Кошбай карт уға каршы үҙенең улы Шоңкарҙы

сығарып өлгөрҙө. Шоңҡар уны биленән алыу менән үк, башы аша күтәреп, ике ҡабат өйөрҙө лә ергә бырaҡтырып ебәрҙе. Бынан Итбай үҙе лә, бөтә иптәштәре лә көлөп ебәрмәй булдыра алманылар.

— Беҙҙең Илсебай көрәшкә саҡырырға бик ҡыйыу ҙа ул, тик шуныһы бар: күберәк һырты менән ер үлсәргә ярата шул, — тип көлөштөләр. Шоңҡар һаман, уртала ҡалып, үҙенә ҡаршы батыр көтә ине. Ат сабышында туғыҙынсы бәйгене алған Этҡол уға ҡаршы сыҡһа ла, еңә алманы. Шоңҡар уны ботона һалып ҡына ырғытҡас, был ныҡ ҡына ауыртынып, башҡалар уға ҡаршы сығырға ҡыймай, ул майҙандан һуңғыһы булып сыҡты.

Көн инде кискә һарҡып, атайым ҡунаҡтарҙы киске табынға саҡырырға ғына торғанда, түңәрәк уртаһына Муйнаҡтар яғынан ерән һаҡаллы Аслай сығып ултырҙы. Буйға ул артыҡ оҙон булмаһа ла, бик киң яурынлы, көсө менән даны сыҡҡан ир ине. Белмәйем, ни эшләптер, уға ҡаршы бер кем дә сыҡмағас, ул урынынан торҙо ла:

— Минең менән көрәшерлек бер кемегеҙ ҙә ҡалманымы инде? — тип ҡуйҙы. Уның был һүҙҙәре минең намыҫыма тейгәндәй булды ла, мин атайымдан да һорап тормай, урынымдан тора һалып, уның ҡаршыһына барҙым да:

— Бында батырҙар етерлек булһа ла, ҡыҙ башым менән һиңә ҡаршы мин дә сыға алам, — тинем. Ул минең һүҙҙәремдән көлөмһөрәп ҡуйҙы ла көрмәкләшергә лә кереште. Мин уның, көслө булһа ла, таҫыллығы әллә ни түгел икәнен һиҙеп алдым да быны, Алдар Муйнаҡты ташлағандай, ботҡа алып ырғытырға булдым. Уның барыбер ташлай алмаҫына ышанып, уға үҙемде күтәреп алып өйөрөргә лә ирек ҡуйҙым. Тик, мәлен килтереп, ҡабырғам менән аҫтына кереп алғас, ялт итеп һелтәп ебәрҙем. Уның мәрйен теҙсп ҡайылған түбәтәйе үҙенән дә ары тәгәрәп китте.

Бөтә ҡор шунда, мине маҡтап, геү итеп ҡалды, ә Итбай шунда атайым менән минең эргәмә килеп:

— Күрәһең, Муйнаҡтарҙың бөтәһенә лә боттан ташланырға яҙғандыр инде, — тип ҡуйҙы.

Алдар шунда, бөтәһенең дә ҡорҙан тороп атайым артынан ҡуҙғалғанын күргәс, уның янына килеп:

— Мин батыр ҡыҙ менән алышып ҡарарға иткәйнем дә, һеҙ инде таралыша ла башланығыҙ, — тип үкенеп ҡуйҙы. Ә Итбай уның был һүҙҙәренә ҡаршы:

— Юҡ, ҡыр батыры дуҫҡайым! Мин һиңә батыр ҡыҙ менән алышырға кәңәш бирмәйем. Беҙ барыбыҙ ҙа икегеҙҙең дә көс-ҡеүәтен күреп торҙоҡ. Әгәр Ҡыҙрас менән аҡһаҡалдар хуп күрһә, мин уларға иң дөрөҫөн әйтеп бирер инем, — тигәс, атайым менән башҡа аҡһаҡалдар ҙа туҡтап ҡалып, Итбайҙы уратып алып торҙолар ҙа уға һүҙен һөйләргә ҡуштылар. Итбай былай тип һөйләй башланы: — Арҙаҡлы аҡһаҡалдар, һеҙ бөтәгеҙ ҙә йыйында булған хәлде баштан-аяҡ үҙ күҙҙәрегеҙ менән күреп торҙоғоҙ. Беҙҙең киң күңелле Ҡыҙрас ҡорҙаш, бөтәбеҙҙе лә тиң күреп, эскерһеҙ һый-хөрмәт күрһәтте. Ҡара йөрәк Муйнаҡ, беҙҙең шулай уйын-көлкө менән үтеп барған йыйындың ҡотон ебәрмәксе булып, ата-бабаларыбыҙ-

ҙан ишетеп белмәгән яманлыҡты ҡылды. Бөтә батырҙарыбыҙ ҙа иҫтән сығараһы булмаһын: Муйнаҡты ауыҙлыҡларға уларҙың көсө генә етмәҫ ине. Аллам һаҡлаһын, эш ҡоралға барып етеп, быныҡ ахыры ҡан ҡойош менән бөтөр ине бит! Ярай әле, Алдар, булып, быныҡ ажарына сик ҡуйҙы! Был имгәкте бырап ҡтырып ташлап, яман ниәтенән тыйып ҡалды. Ялан яҡ халҡының ҡашҡа батыры икән үҙе лә. Муйнаҡтың ул Ҡыҙрасҡа әйткән тупһыҙ һүҙҙәрен ишеткәс тә, үҙен ергә тигеҙләмәк булып, һикереп тора һалды. Ҡартайған көнөндә, Ҡыҙрас дуҫ, намыҫың ҡурсып ҡалырҙай үҙ батырҙарыбыҙ табылмауынан оялып, мин Алдарҙы тыйып ҡалдым. Ахырҙа, уның менән бергә сығып, ҡара йөҙ Муйнаҡты көрәшкә саҡырҙыҡ. Йәрәбә үҙ эйәһенә тап килде! Мин уның урынына алғаҫыһам да, Алдарҙы алмаштыра алмаҫ инем. Был еңеү өсөн беҙ бөтәбеҙ ҙә Алдарға бурыслы. Беҙҙең бөтә ырыуҙарыбыҙ алдында ул үҙен иң айбарлы, иң көслө батыр итеп танытты. Беҙ ҙә уны үҙебеҙҙең яҡлаусыбыҙ итеп таныуҙан оялмабыҙ. Тик бына уның яҡшылығының әжерен ниндәй яҡшылыҡ менән түләрбеҙ икән? Мал тиһәк, малға уның мохтажы ла юҡ; бейек Урал тауҙарын артылып, икһеҙ-сикһеҙ далаларҙы үтеп, даръялай йылға-һыуҙарыбыҙҙы кисеп сығып, япа-яңғыҙы быңдай ниәт менән дә килмәгән ул беҙгә. Батыр ҡыҙыбыҙҙың айбарлығы менән көс-ғәйрәте хаҡындағы данлы хәбәрҙе ишетеп, уның үҙен күреп-белергә генә сәмләнеп юлға сыҡҡан ул. Бына ул килде, күрҙе, бөтәһен дә белде. Ҡыҙыбыҙ менән үҙе алышып ҡарамаһа ла, иң көслө батырҙарыбыҙ менән алышҡанын күреп, батыр ҡыҙҙың даны юҡҡа ғына түгел икәненә үҙе ышанды. Шулай булғас, хөрмәтле аҡһаҡалдар, һеҙ ҙә, Ҡыҙрас ҡорҙаш, һин дә Алдарҙың батыр ҡыҙ менән алышыуын кәрәк тип табырһығыҙмы икән? Иң яҡшыһы шул булыр, Ҡыҙрас, һин батырҙарҙың батырына ҡыҙыңды бирергә риза бул, ә аҡһаҡалдар һинең ризалығыңды хуп күрһендәр.

Бөтә аҡһаҡалдар ҙа Итбайҙың кәңәшен бер һүҙҙән күтәреп алғас, атайымдың өндәшмәй тороуын күреп, араларында иң олоһо булған Балтас ҡарт уның ҡулынан алып:

— Риза бул да ҡуй, Ҡыҙрас дуҫ, Алдарға һинең ҡыҙыңдан да яҡшыраҡ кәләш табып булмаҫ, ә һинең батыр ҡыҙыңа унан да дан кейәү булмаҫ, — тигәс, атайымдың да күңеле йомшарып китеп:

— Һеҙ хаҡлы, дуҫтарым, Итбайҙың һүҙе менән килешмәй булмай, быға мин иртәгә үҙ яуабымды бирермен, — тине.

## УТЫҘ БЕРЕНСЕ КИС

Мин был хаҡта әсәйемә әйтергә тип йүгерҙем. Ә ул йыйында булғандың бөтәһен дә үҙе ишетеп-күргәс:

— Беҙҙән алыҫ китерһең инде, балаҡайым, — тип ҡуйҙы. — Ә Алдар һымаҡ кейәүҙе үҙ ырыуҙарыбыҙҙан эҙләп тә тапмаҫһың.

Әсәйемдең был һүҙҙәрен ишеткәс, ул миңә сикһеҙ йәл булып китте, мин шунда уҡ уны ҡосаҡлап алдым. Ә һуңынан инде яҙмышымдың хәл ителәһе хәл ителеп бөткәнгә һанап, тирмәнән дә сыҡманым, киске һый-хөрмәттең нисек бөткәнен дә белмәй ҡалдым.

Атайым һуңлап ҡына ҡайтып керҙе лә, мине үҙ янына саҡырып алғас, былай тип һүҙ башланы:

— Һөйөклө батыр ҡыҙым минең! Бөгөнгө күргәнде беҙҙең бер ҡасан да күргәнебеҙ юҡ ине. Бына, ҡара йөрәк Муйнаҡты иҫкә алһам, әле булһа тәнем эҫеле-һыуыҡлы булып китә. Ул мине бөтә халыҡ алдында хур итеп, һине үҙенә көслөк менән тартып алмаҡсы ине.

— Юҡ, был барыбер барып сыҡмаҫ ине! — тип һикереп торҙом мин шунда. — Былай була ҡалһа, һөңгөм уны үтәнән-үтә тишеп сығыр ине, атай!

— Ә бынан ни килеп сығырын һин уйламайһың да, ҡыҙым, — тип башын сайҡап ҡуйҙы атайым. — Үҙебеҙгә ҡарҙаш ырыуҙың ҡаны ҡойолғанын күреп, һәр кем беҙҙең хаҡта: «Яуыз булһа ла ҡоралһыҙ батырҙы үлтерҙе Ҡыҙрас ҡыҙы!» — тип яманатыбыҙҙы һатыр ине. Юҡ, һөйөклө ҡыҙым, Алдар бик дөрөҫ эшләне. Ул уны үлтермәй, был ҡуҡыр ғифриттың үҙенә тейгән ҡоһорон ғына ҡайтарып, һинең менән минең генә түгел, ә бөтә ырыуыбыҙҙың намыҫын ҡурсалап ҡалды. Һин әле ишеттеңме, халыҡ, ана, уның был егетлегенең әжеренә ни көҫәй?

— Ишеттем, атаҡайым, — тинем мин.

— Йә, үҙең был хаҡта ни уйлайһың? — тип, атайым һүҙен уртаға сығарып һалғас, мин дә үҙ уйымды йәшереп торманым:

— Ул бит әле минең менән көс һынашып ҡараманы, — тип кенә ҡуйҙым.

— Был сабыйлыҡ булыр ине, ҡыҙым. Һин инде хәҙер аҡылға ултырғанһың, йәшең дә уҙып бара, үҙ кәрәгеңде үҙең ҡайғыртырға, тейешһең, уға беҙ бик тә бурыслы икәнде лә уйла аҙыраҡ. Мин һине халыҡ һүҙенә лә, атайыңдың теләгенә лә ҡаршы килмәҫһең тип уйлайым, — тигәс, атайыма мин дә сер бирмәҫкә тырышып:

— Ә бит, атай, һәр кем минең хаҡта, үҙ һүҙендә торманы, тип әйтәсәк, — тинем.

— Ә мин һиңә тағы бер ҡат әйтәм, ҡыҙым, был ниәтең элек яҡшы булһа, ә хәҙер ул үҙ бәхетеңә үҙең ҡаршы төшөү генә. Мин Алдарҙың һине яратҡанын күреп торам, ул бит һин тип кенә килгән дә баһа. Ул һинең көс-ҡеүәтеңде лә, таҫыллығыңды ла күрҙе, һин дә уның кем икәнен үҙ күҙең менән күрҙең, бөтә халыҡ быға шаһит булды. Шулай булғас, кире һуҡма улай, ҡыҙым. Иртәгә мин бөтә аҡһаҡалдарға ла, халыҡҡа ла үҙемдең ризалығымды әйтәсәкмен. Ә хәҙергә, ҡыҙым, бар, әсәйең янына ин дә, йоҡлап ал, мин Алдарҙы көтәм, — тиеүе менән атайымдың һүҙе лә бөttө.

Был төндө мин серем дә итмәнем тиерлек, бары Алдарҙы яратыуымды, тик уға ғына кәләш булаһым килгәнен уйлап таң аттырҙым. Тик минең уның менән көс һынашмайынса, ата-әсәмдең теләге буйынса ғына сығыуым намыҫыма тейә ине. Төнө буйы йоҡлай алмайынса, ғәҙәттәгенән байтаҡ иртә торҙом да, тирмәнән бер сығып, бер инеп йөрөй торғас, әсәйемде лә йоҡоһонан уятҡанмын икән. Ул да минең болоҡһоуымды күреп:

— Туй алдынан улай ғына булыр инде, ҡыҙым, өҙгөләнмә бик, — тип көлөп кенә ҡуйҙы. Унан, бейәләрҙе елегә ҡыуып килтергәндәрен ишетеп: — Әйҙә, улай ҡайҙа баҫырға белмәй йөрөгәнсе, исмаһам, миңә ҡолондарҙы тотоп бәйләш, — тине.

Беҙ әсәйем менән ҡолондарҙы тотоп бәйләгәнсе, ҡунаҡтарыбыҙ йәйләү уртаһына йыйылып килә лә башланылар. Атайым да, Алдарҙың ҡулынан алып, аҡһаҡалдар ҡорона килтереп еткергән, унын кейәүем икәнлеген хәбәр итеп тора. Бөтә халыҡ был хәбәрҙе ҡыуаныс менән тыңлап, атайымды батыр кейәүе менән ҡотланылар.

— Ә һине, Алдар, батыр кәләшең менән ҡотлайбыҙ. Һеҙҙән быҒаса беҙҙең ике халыҡта ла булмаҒан батыр тыуасаҡ! — тип шау-гөр килештеләр...

Хикәйәтенең шул еренә еткәс, Зөһрә бик тәрән көрһөнөп:

— Халыҡ юрауын дөрөҫ юраны ла бит, тик бына ул батыр үҙе генә юҡ шул, — тип ҡуя. — Һеҙгә, ҡәҙерле ҡунаҡтарым, шуныһын да әйтеп китәйем, ирем вафат булырҙан бер йыл элек кенә беҙҙең Ғәжәйеп ир балабыҙ донъяҒа килде. Ҡүкрәгендә ҡылыс, ә арҡаһына яңы тыуҒан ай һүрәте төшкәйне. Ғүмерлек ҡайҒы өсөн шулай булҒандыр инде: тыуып, бер айлыҡ булҒас та, ул бала Ғәйеп булды. Ирем дә шуның ҡайҒыһынан, күп тә тормай, донъя ҡуйҙы. Ул баланың ҡайһылай юҒалҒанын, һүҙем шул тәңгәлгә еткәс, һөйләрмен әле. Хәҙергә һеҙгә туй булаһы көндөң иртәгәһен һөйләп бөтөрәйем инде.

Халыҡ алдына, үҙемдең шулай кәләш булҒан көйө, һәр саҡ кейеп йөрөгән ир-ат кейемендә барырҒа ҡыймай торҒан саҒымда, атайым менән аҡһаҡалдар миңә:

— Туҡта, батыр ҡыҙ! — тип ҡысҡырып ебәрҙеләр. Халыҡ гөж килеп торҒанлыҡтан, мин уларҙың ҡысҡырҒанын да саҡ-саҡ ҡына ишетеп ҡалдым; туҡтап уларҙың ни әйткәнен тыңларҒа булдым.

— Ағай-эне, аҡһаҡалдар һинең көрәштә батырлыҡ күрһәтеүеңдән бик ҡәнәҒәт ҡалдылар, — тине атайым. Хәҙер улар кейәүең Алдар менән һинең аттан яҫҡышыуыңды күрергә теләйҙәр. Халыҡ һүҙен дә, минең һүҙемде лә йыҡма инде, ҡыҙым, тыңла бер, — тигәс, бөтә батырҙар менән дә көс һынашып ҡарарҒа ебәрмәүҙәренә бик Ғәрлегем килһә лә, тыңламайса булдыра алманым.

Атына атланҒан килеш Алдарҙың:

— Әйҙә, һөйөклө батыр ҡыҙ, мине лә бер эйәрҙән алып ташла әле, — тиеүенә Ғәрлегемдән бер һүҙ ҙә өндәшмәнем. Ә ул, ҡалҒан батырҙары эргәһенә барып, уларҒа алҒараҡ сабып китеп, эйәрҙән үҙенең нисек алып ташланасаҒын ҡарап торорҒа ҡушты. Был һүҙҙәрҙе мине маҡтап әйтәме, көлөп әйтәме икәнен дә белмәй, үҙемде эйәрҙән яҫҡытмаҫ өсөн бөтә көсөм менән таҫыллыҒымды һалырҒа булдым.

Аттарҙы саптыра башлаҒас та, беҙ бер-беребеҙҙең биленән эләктереп алдыҡ. Мин уны эйәренән айырырҒа итеп ҡараҒайным, ә ул эйәре менән ҡуша ҡойоп ҡуйҒандай ултыра. Шулай уҡ ул да мине эйәремдән ҡуҙҒата алманы. Аҡһаҡалдар янына сабып килеп еттек тигәндә генә, Алдар мине шундай Ғәйрәт менән тартып алды, эйәремдең айылдары шарт итеп өҙөлөп китте, атым сабып килгән ыңҒайҒа ары елдерҙе, ә мин, бөркөт яҫҡыҒан бер ҡошсоҡ кеүек, билбауымдан унын ҡулында күтәрелгән килеш тороп ҡалдым. Алдар, мине шул хәлдә күтәреп, атынан тейен һымаҡ ҡына һикереп төштө лә, атайымдың алдына уҡ килтереп, ергә баҫтырҙы.

Һеҙгә дөрөҫөн генә әйтәйем, ҡәҙерле ҡунаҡтарым, әгәр Алдар мине һаман да билбауымдан тотоп тормаһа, мин оятымдан да, иҫем китеүҙән дә ергә ауған булыр инем. Әлегәсә күрелмәгән былдай батырлыҡҡа хайран ҡалып, меңләгән кешенең ҡыйҡыулап һөрәнләүенән генә мин аңыма килдем. Атайым ултырған еренән тора һалып, бер мине, бер кейәүен ҡосаҡлап һөйҙө, шул арала бөтәһе лә беҙҙе ҡотларға кереште. Ә йор һүҙле Итбай Алдар янына килеп:

— Һин, дуҫҡайым, тағы бер Муйнаҡты еңеп сыҡтың бит! Тик быныһы күркәм холҡо менән, һылыулығы менән айырылып тора! — тип көлдө.

— Йә, хәҙер һин минекеме инде, һөйөклө батыр ҡыҙ? — тип һораны минән кейәүем.

— Һинеке булмай, башҡаса кемдеке булайым инде, — тинем. Эстән генә: «Айылдар өҙөлөп китмәгән булһа...» — тип уйлайым. Үҙем Алдарға башымды күтәреп ҡарай ҙа алмай, йыйындан туп-тура әсәйем янына йүгерҙем: уға бөтә хәлде һөйләп бирергә ашыҡтым. Күп тә үтмәй, атайым да килеп инеп, иртәгәһенә туй булаһын белдерҙе, ә Алдарға, беҙҙең бөтә ырыуҙарҙың батыры булып танылыуының билдәһе итеп, әҙернә-йәйә менән ҡылыс таҡҡанлыҡтарын әйтте. Был әҙернә-йәйәне, шундай ҡаты булғанлыҡтан, бары тик Алдар ғына тарта ала ине. Мин инде һеҙгә беҙҙең әллә нисә көндәр буйы барған был туйҙа Алдарға үҙ яғынан да тейгән, беҙҙән дә алып ҡайтҡан башҡа бүләктәр хаҡында һөйләп тә тормайым. Уларҙың күбеһен ул башҡаларға бүләк итеп бөтөрҙө.

### УТЫҘ ИКЕНСЕ КИС[78]

...Сибай һүҙен бөтөрҙө. Атайым Сибайҙы ла, Буранбайҙы ла етәкләп алып, беҙҙең аҡһаҡалдар, батырҙар менән таныштырып сыҡты ла, шатлығынан нишләргә лә белмәй, былай тип һүҙ башланы:

— Ҡәҙерле ҡунаҡтарым? Һеҙ былай, алыҫ ерҙе яҡын итеп килеп еткәс, минең Алдар хаҡында электән үк уйлаған уйҙарымды тағы ла нығытыбыраҡ ҡуйҙығыҙ. Уның иҫ киткес батырлығы, көс-ҡеүәте, беҙҙең бөтә халыҡҡа, ә минең үҙемә айырыуса ныҡ күрһәткән яҡшылыҡтың әжере лә яҡшылыҡ булһын, тип, мин уға үҙемдең батыр ҡыҙымды бирергә булдым. Был ниәтемде инде мин йыйынға килгән бөтә аҡһаҡалдарға, батырҙарға, бөтә халыҡҡа белдерҙем, — тине. Унан Алдарға өндәшеп: — Бар, улым, миңә ҡунаҡҡа килгән бөтә ырыуҙаштарыңды ла саҡыр, — тигәс, Алдар атайымдан үҙҙәренең тирмәләрен беҙ уның менән ҡунаҡтар ҡаршылап торған теге түбәләс битендәге ағастар араһына ҡарарға ризалыҡ һораны. Атайым ризалыҡ биргәс, Алдар артынан эйәргән уның бер төркөм ырыуҙаштары араһына мин дә ҡатышып киттем. Уларҙың бөтәһенең дә тип әйтерлек яңы ғына мыйыҡ сығып килгән бер тиҫтер булыуҙары менән бер иштән генә кейенеүҙәрен күреп, минең иҫем китте. Бөтәһе лә өҫтәренә кәрмәзин елән менән баштарына ҡара көрән төлкө тиреһенән ҡойроҡло кәпәс кейеп алғайнылар. Һәр бе-

реһенең ҡорал ҡыны шау көмөш менән генә биҙәлгәйне. Үҙҙәре батыр һыбайлы булған һымаҡ, аттары ла беҙҙекеләрҙән ныҡ айырылып торған шау арғымаҡ тоҡомонан ғына булғандыр, ахырыһы. Шундай батыр халыҡ ырыуына килен булып төшәһемә эстән генә һөйөнөп ҡуйҙым.

Алдар уларҙың ҡайһыларына, аттарынан төшөп, үҙе менән барырға, ҡайһыларына, аттары менән дөйәләрен етәкләп, тирмәләр ҡуйылаһы ергә күтәрелергә ҡушты ла, тирмәләргә урын күрһәтеп, атайым эргәһенә китте. Ә мин, ҡалғандар янына йүгереп килеп:

— Әйҙәгеҙ, мин һеҙҙе Алдар күрһәткән ергә алып барайым да тирмәләрегеҙҙе ҡуйышайым, — тигәс, улар минең арттан ынғайланылар. Мин түбәләс битендәге ағастар араһына менеп: — Алдарҙың тирмәһен бына ошонда ҡуйығыҙ, был урынды бик ярата ул, — тинем.

Былар шунда уҡ дөйәләренең әртмаҡтарын бушатып, тирмәләрен ҡорорға керештеләр. Уларҙың тирмәләре лә беҙҙекенән айырылып тора ине. Шунлыҡтан мин уларға булышып тормай, атайымдар эргәһенә төшөп киттем, бөтә халыҡ икегә айырылып, миңә юл биреп тора ине. Атайым мин төшөүгә инде ҡор уртаһына ултырып та алғайны. Уның уң яғынан үҙ ырыуҙаштары менән Алдар урын алған, ә һул яғынан Итбай менән башҡа аҡһаҡалдар теҙелешеп ултырған.

— Йә, атай, батыр ҡыҙыңа инде ни йомош ҡушаһың? — тигәс, атайым миңә:

— Атыңдан төш тә бында кил, ҡыҙым, — тине. Мин, атымдан һикереп төшөп, теҙгенемде эйәр ҡашына элдем дә атайым эргәһенә килдем. Ә ул мине ҡулымдан алып:

— Мин һине бөтә аҡһаҡалдар менән халыҡтың һүҙен әйтергә, үҙемдең дә фатихамды бирергә саҡырҙым. Һине, ҡыҙым, үҙенең дала яҡ халҡында ла, беҙҙең урман яҡ халҡында ла дан ҡаҙанған Алдар батырға кәләш итеп бирәм, — тигәс, Алдарҙың да ҡулынан алып: — Һиңә мин үҙ ҡыҙымдың яҙмышын тапшырам. Ул һинең һөйөклө кәләшең дә, бөтә батырлыҡтарыңа ышаныслы ярҙамсың да булһын әйҙә. Хоҙай һеҙгә ризалығын биреп, олуғ пәйғәмбәребеҙ ярлыҡап торһон үҙегеҙҙе! — тине лә, ҡулдарыбыҙҙы бергә ҡаушырып, мине лә, Алдарҙы ла ҡосаҡлап алды. Шунда инде мин батыр ҡыҙҙан бисәгә әйләнеп, йөҙөмдө ҡулдарым менән ҡаплаған килеш тубыҡтарыма сүгеп ултырҙым да үкһеп илап ebәрҙем.

— Ҡуй, илама, ҡыҙым, — тип атайым арҡамдан һөйгән булды. — Тор ҙа, ана, Алдарҙың иптәштәре үҙең менән көс һынашып ҡарарға тиҙәр, үҙеңдең Алдар батырға торорлоҡ кәләш икәнлегеңде күрһәт, батыр ҡыҙ исемен юҡҡа ғына йөрөтмәй икән, тиһендәр, — тип ҡуйҙы.

## УТЫҘ ӨСӨНСӨ, УТЫҘ ДҮРТЕНСЕ КИС

Атайымдың һүҙен йыҡмай, ҡоралымды сисеп ырғыттым да майҙанға сығып ултырҙым: атымды ситкә алып киттеләр. Минең менән көрәшергә сыҡҡандарҙың тәүгеһе еңмәксе булып маташып

ҡараҒайны ла, унын үҙен шунда уҡ ғәйрәт менән күтәреп алдым да ергә тәгәрәттем. Икенсеһен боттан алып бырғыттым, өсөнсөһөн баштан аша ташланым. Дүртенсеһе менән дә алышайым тип торғанда, Алдар урынынан һикереп торҙо ла, эргәмә килә һалып:

— Шуныһы ла еткән, батыр ҡыҙ, башҡаса һиңә ҡаршы ҡуйырҙай батырҙарым, ҡалманы, ә икебеҙ көрәшергә Итбай дуҫыбыҙ ҡушмай, — тине.

— Улай булғас, ул үҙе сыҡһын, — тип үртәнеп ҡуйҙым мин.

— Ә уға мин ҡушмайым, — тип ҡырт киҫте Алдар.

Беҙҙең шулай әрепләшкәнде тыңлап торған атайым миңә:

— Алдар раҫ һөйләй, ҡыҙым, шул еткән, — тип унын һүҙен ҡеүәтләп ҡуйҙы. — Бик теләһәң, ана, мәргәнлектә һынашырһың.

— Юҡ инде, эш уҡ атышыуға ҡалһа, минекеләрҙең береһе лә унын менән ярыша алмаҫ, — тип Алдар был бәхәскә сик ҡуйҙы.

## УТЫҘ БИШЕНСЕ КИС

Мин һеҙгә инде, ҡәҙерле ҡунаҡтарым, туйҙың нисек үткәнен тәфсирләп һөйләп тормайым, былай ҙа һүҙем оҙаҡҡа китте. Туй ул ҡайҙа ла шул бер туйҙыр инде, уны һөйләп, һеҙгә әллә ни яңылыҡ әйтмәм. Иртәгәһенә, көн төшлөккә еткәс, атайым Алдар менән мине йыйылған халыҡ алдына алып сыҡты ла, саҡырып килтергән муллаһы никах уҡып, шунын менән сәсебеҙ сәскә лә бәйләнде. Шунан һуң ирем минең бөтә туған-тыумасаларыма, беҙҙең ырыу аҡһаҡалдарына бүләктәр биреп сыҡты. Хәтерем алдамаһа, Балтас ҡартҡа һеләүһен тун, улдарына эйәр-өпсөнө менән берәр ат бирҙе буғай, тик уҡ-һаҙағы ғына юҡ ине. Ә беҙҙе ҡушырға ике арала өлтөрәп йөрөгән Итбай дуҫына, димсе диңгеҙ кисерер тип, ҡәмәр билбаулы, терһәкле-еңсәле бик ныҡ йәүшән, башына көмөш көмбәҙле ҡорос төркәй, шунын өҫтәүенә ҡалъяны менән әҙернә-йәйә, уғы тулы һаҙаҡ бүләк итте. Тәкүә Ҡошбайға алтын үлән үрнәге төшөрөп ҡайылған ике аҡ елән, сәлләһенә фарсы ебәгенән һарауыс, ә улына эйәрле-йүгәнле бер ат тейҙе. Ҡыҫҡаһы, бер кемде лә бүләкһеҙ ҡалдырманы. Атайым менән әсәйемде инде бәрхәт тә ебәк менән күмде. Уларҙы, әйткәнемсә, нуғайҙарҙан йәнлек тиреһенә алмаштырып алалар икән. Быларҙан тыш, атайыма ҡайнатай тип ҡыҙыл кәрмәзин елән менән фарсы ҡәмәре, ә Буранбикә әсәйемә көмөш ҡашмау ҙа сығарып бирҙе. Ә миңә инде мәрйен дә фирүзә менән биҙәлгән көмөш эйәр-өпсөнлө, эйәр ҡашына әлеге мин айыу атып үлтергән әҙернә менән уҡ һаҙағы эленгән алдан нәҙер әйтеп ҡуйған толпарын килтереп тотторҙо ла:

— Батыр кәләшкәйем, һинең ҡыйыулығың менән айбарлығың хаҡына мин һиңә ҡыҙ-ҡырҡын әйберҙәрен бүләк итергә лә ҡыйманым. Улары ла етерлек һиңә, тик уларын, һин миңә бер ул тапмай тороп, кеймәүеңде теләр инем, — тине. Унын был һүҙҙәре мине ҡолаҡ остарына тиклем ҡыҙартһа ла, атайым менән башҡа ҡунаҡтарға бик оҡшап төштө. Көндөң икенсе яртыһын ҡунаҡтар ҡәҙимге уйын-көлкө, төрлө ярыштар менән үткәрҙеләр. Көрәш, аттан тар-

тыш, уҡ атыш ҡояш байып күҙ бәйләнгәнсе барҙы. Ә атайым менән Алдар ярышта еңеп сыҡкандарға бүләкте бик йомарт өләштеләр. Аҡһаҡалдар ҡорондағы данлы ҡурайсылар Алдар менән мине маҡтап йырҙар сығарҙылар, атайымдың йомартлығын күккә күтәреп маҡтанылар, ә һуңынан бөтә йыйын хәл алырға таралышты.

Зөһрәнең был һүҙҙәренән һуң Йылҡыбай, мыйыҡ аҫтынан ғына көлөмһөрәп:

— Шулай булмай ни, йән һөйгәнең Алдар менән һиңә лә ял кәрәк булғандыр инде, — тип ҡуйғас, Зөһрә бер аҙ хәтере ҡалғандай:

— Ҡарт дуҫым була тороп, төрттөрмәй генә ултырһаң да булыр ине. Был бәхетле көндәр үтте лә китте инде, һағынып һөйләргә генә ҡалды, хәҙер һөйөклө Алдарымдан ҡалғанға ун биш йыл йәш ҡоям бит инде, — тип көрһөнөп ҡуя. Йылҡыбай ҙа һүҙгә ялындырып тормай, Зөһрәне:

— Бер михнәттең бер рәхәте лә булыр әле, — тип йыуатып ҡуйған була. — Әҙәм балаһы ул йәшенә ҡарап тормай бит: бер йәшлектә, бер ҡартлыҡта тигәндәй, олоғайғас та рәхәтен таба белә. Алдар менән йәш саҡта ҡыуанышһағыҙ, ә бына Аллабирҙе дуҫ менән ғүмер итеп, ҡартайған көнөгөҙҙә лә хилүәт-хилүәт көндәрегеҙ булыр әле. Бала-сағағыҙ булмаған тәҡдирҙә лә, күңел йыуатырға, кем белә, ғәйеп булған улыңдың табылып ҡуйыуы бар.

— Һай, ундай бәхет яҙмағандыр инде, юҡҡа өмөтләндермә лә. Иҫән булған булһа, ун алты йыл буйына берәй хәбәр-хәтере булыр ине бит, — тип һыҡранғас, Йылҡыбай йәнә:

— Һуң үҙең бер ҡайҙа ла сығып йөрөмәгәс, һиңә лә килгән-киткән булмағас, уны ҡайҙан белмәк кәрәк? — тип һүҙ башлауы була, Зөһрә уның һүҙен өҙөп:

— Ярай инде, был хаҡта һүҙ ҡуйыртмайыҡ. Бик ялҡытып ташламаған булһам, хикәйәтемде һөйләп бөтөрәйем, — ти. Бығаса һүҙгә ҡатышмай тып-тын ултырған Аллабирҙе шул саҡ:

— Юҡ, юҡ, хөрмәтле хужабикә! — тип ҡысҡырып уҡ ебәрә. — Мин мөкиббән китеп тыңлап ултырам әле бына. Ашамай-эсмәй көнө-төнө тыңларға ла әҙермен.

— Улай булғас, тыңлап бөтөгөҙ әйҙә, — тип, Зөһрә һөйләүен дауам итә.

## УТЫҘ АЛТЫНСЫ КИС

Туй шулай атайымдың ауылында ғына ла өс көн буйы барҙы. Һуңынан, ҡунаҡтар таралыша башлағас, һәр ырыуҙың оло кешеһе беҙҙе үҙенә саҡырып ҡайтып китте. Ирем үҙ иленә ҡайтырға ашыҡһа ла, Балтас менән Ҡошбай ише яҡындарыбыҙҙың һүҙен йыға алманы, ә Итбайға бер-ике көнгә булһа ла, үҙе үк барып ҡайтырға теләк белдерҙе. Уларға барып, бик ныҡ ҡунаҡ булып, әллә ни саҡлы бүләктәр артмаҡлап, атайымдың йәйләүенә әйләнеп ҡайтҡас, юлға әҙерләнә башланыҡ. Һеҙҙән йәшереп тораһы юҡ, һөйөклө ҡунаҡтар, егерме йыл ғүмер иткән атай йортон ташлап китергә

әҙерләнгән был көндәр миңә уғата ауыр тойолдо. Шул тиклем яраткан ата-әсәм менән айырылышыуыбыҙҙы мин хатта күҙ алдына ла килтерә алмай инем. Шулай ҙа бер ай буйы өгөтләй-һөйләй торғас, Алдар мине ҡайһылай ҙа күндереп, беҙ инде ҡуҙғалып китер көндө лә билдәләп ҡуйҙыҡ.

Мин һеҙгә атайым менән әсәйемдең минән ҡайһылай ауыр айырылышҡанын һөйләп тә килештерә алмайым: улар мине алмаштилмәш косаҡлап, һуңғы юлға оҙатҡандай йәш ҡойҙолар, бәхилләшеп бөтә алманылар. Дөрөҫтән дә был һуңғы юл булған икән шул: Алдарға иргә сығып, бергә йәшәп ҡалған ваҡыт эсендә улар ҙа беҙгә килә алманы, беҙ ҙә уларға барып өлгөрмәнек, бары тик апайым менән еҙнәм генә килеп ҡайттылар.

Атайым йортонан сығып киткән көндө әсәйем ҡулынан мин көскә генә ысҡына алдым, Алдар менән атҡа ултырып күҙҙән юғалғас ҡына, иҫемә килгәндәй булдым. Алдарҙың иптәштәре менән беҙҙең ауылдың бер нисә егете артыбыҙҙан бирнәгә бирелгән аттарҙы ҡыуып килделәр. Улар араһында Алдар менән миңә бәйгегә тейгән кола бейәләр өйөрө менән өйөр айғыры ла бар ине. Мал-тыуар шулай бик күп булғас, Алдар килгән юлынан ҡайтмай, икенсе юл менән ҡайтырға булды. Ағиҙелдең туғай яҡ ярынан төшөп, үрләтеп барырға һөйләштек. Урман буйлатып барғансы, асыҡ даланан барыуҙы артығыраҡ күрҙек. Юлда Муйнаҡ йәйләүенә осрап ҡуйыу хәүефе булһа ла, Алдар менән бергә булғас, мин инде ҡурҡып торманым. Шулай итеп диңгеҙҙәй йәйрәп ятҡан, ҡамыш менән уратып алынған Асылы* күлен уңда ҡалдырып, юлға сыҡтыҡ. Дим йылғаһын тамағына яҡын тәңгәленән генә аша сығып киттек. Ҡара һыулы Өршәк* буйына еткәс, Өршәккә ҡойған татырлы Үҙән тамағы эргәһенән генә аша сыҡтыҡ. Юл буйынса йәнлек аулай-аулай килдек: Болан менән ҡоралай беҙгә көтөүе-көтөүе менән осрап, шуларҙы атып ашаныҡ. Шулай килә торғас, Ашҡаҙар буйына ла яҡынлаштыҡ. Алдар менән мин алдан төшөп алғайныҡ, ә уның иптәштәре, беҙҙән бер аҙ арткараҡ ҡалып, мал ҡыуып киләләр ине. Йылға буйына килеп еткәс, уң яҡ яр буйында ҙур бер йәйләү, йәйләү тирәһендә йылҡы өйөрҙәре менән һыйыр малдары йөрөгәнен күреп ҡалдыҡ. Көтөүселәре беҙҙе күреп ҡалғас, кем булыуыбыҙҙы белергә теләп, сабып килеп тә еттеләр. Ирем үҙ исемен атап, ҡайтып килгәнлегебеҙҙе әйткәс, көтөүселәрҙең береһе:

— Ә ҡайҙа булдың һуң? — тип һорай ҡуйҙы.

— Урман яҡ халҡында ҡунаҡта булдым, — тип яуапланы уға Алдар.

— Һин әллә теге, беҙҙең Муйнаҡ батырҙы еңгән Алдарҙың үҙеме? — тигән һорауға ирем:

— Эйе, нәҡ үҙе, — тип, Муйнаҡтың һынған ҡулы уңалыу-уңалмауын да һорап ҡуйҙы.

— Һи, уның ҡулы уңалды. Ул һинең менән тағы бер алышып ҡарарға ярһып йөрөй әле. Әгәр ҙә бынан үткәнеңде белеп ҡалһа, хәҙер үк ҡаршы сығасаҡ, — тине көтөүсе.

— Әйҙә, рәхим итһен, — тине быға ҡаршы ирем, — тик алышһаҡ, уның йәйләүендә түгел, ҡола яланда ғына алышырбыҙ.

Алдар һуңғы һүҙен әйтеп тә бөтмәне, көтөүселәр, аттарын ҡайыра һалып, йәйләүҙәренә таба сабып сығып та киттеләр. Дөрөҫөн генә әйткәндә, һөйөклө ҡунаҡтарым, шул саҡ йөрәгем шыу итеп ҡалды. Был Алдарҙың көсөнә, ирлегенә ышанмағандан түгел, ҡара йөрәк Муйнаҡтың бер-бер мәкерле уй уйлап ҡуйыуынан хафаланыу ине. Шуға ла мин иремде йылғаны был тәңгәлдән кисмәй, йылға тамағынараҡ төшөп сығырға ҡыҫтай башланым. Алдар шул саҡ миңә ҡарап алды ла, көлөмһөрәй биреп:

— Эй, һөйөклө Зөһрәкәйем! Батыр иргә сығыу менән әллә һинең айбарлығың да, көсөң дә бөттөмө? — тип ҡуйҙы.

— Юҡ, — тинем мин. — Эргәмдә һин булғанда, ғәйрәтем минең икеләтә артыҡ, шулай ҙа бер-бер мәкерлек ҡылыуы бар уның тип шомланам.

— Юҡҡа хафаланма, уның хәйләһенә ҡаршы беҙ ҙә берәй әмәлен табырбыҙ, — тип кенә ҡуйҙы Алдар. Шул арала уның иптәштәре лә, минең арттан барған арсыйҙар ҙа килеп етте. Алдар яғынан егерме биш, минең яҡтан ун биш егет булып, бөтәһе ҡораллы инеләр. Алдар уларға көтөүселәр менән һөйләшкәнен, Муйнаҡтың үҙе менән тағы ла алышыр ниәт тотҡанын әйтте. Шунан:

— Һеҙҙең менән, батыр дуҫ-иштәрем, мин Муйнаҡтың үҙенән генә түгел, уның йөҙ мәртәбә артыҡ муйнаҡтарынан да ҡурҡмайым, тик аң булығыҙ: бында бер-бер мәкерле уй булыуы бар. Шуға күрә лә Зөһрә менән мин, үҙемдең дала бөркөттәрен алып, йылғаны аша сығып, торайыҡ, ә һеҙ, батыр арсыйҙар, йылғаның түбән яғынан малдарҙы алып сығып яҡында ғына көтөп торорһоғоҙ, — тине.

Алдар шул һүҙҙәрен әйткәс, беҙ йылғаны аша сыҡтыҡ та йәйләүҙән ике уҡ атымы ерҙәге тигеҙ туғайҙа туҡтап ҡалдыҡ. Шунда беҙ Муйнаҡ йәйләүендә йылҡы өйөрҙәрен ҡыуып килтереп, аттарын тотоп эйәрләгәндәрен күрҙек тә былар ҙың беҙҙе баҫышырға йыйынғанын белдек. Һәр беребеҙ, ул-был була ҡалһа, тип, әҙернәйәйәләребеҙҙе әҙерләп, уҡ һаҙаҡтарыбыҙҙы асып ҡуйҙыҡ. Үҙебеҙҙең башлап баҫышырға уйламағанлыҡты белгертер өсөн, аттарыбыҙҙан төшөп, ергә ултырыша һалдыҡ. Шул арала аръяҡта ҡалған арсыйҙар ҙа малдарҙы йылға аша сығарып, уларҙы бер ергә туплап, ни булырын көтөп тора башланылар. Алдар, уларға ҡарап:

— Батырҙар! — тип һөрәнләп ебәрҙе. — Муйнаҡтың ниәтен әле белмәйем, тик уның минең бер үҙем менән генә алышырға иткәнен ишетәм. Шулай булһа, һеҙ ҡуҙғалмай тороғоҙ, ярҙамға ташлана күрмәгеҙ. Әгәр улар ҡорал менән баҫышырға булһалар, мин һеҙгә үҙем ҡысҡырырмын! — тине.

## УТЫҘ ЕТЕНСЕ КИС

Алдар шулай арсыйҙар менән һөйләшеп бөтөүгә, Муйнаҡ йәйләүенән сығып, беҙҙең йоҫоҡҡа табан ыңғайлаған бик күп һыбайлылар төркөмөн күрҙек. Иң алдан бөтәһенән дә аша ҡарап торған Муйнаҡ үҙе төшөп алған, ә уның эргәһенән саҡ ҡына ҡайтышыраҡ икенсе бер һыбайлы килә. Быларҙы күреү менән беҙ атта-

рыбыҙға һикерешеп мендек, беҙҙең янға дүрт егете менән һунарҙаш дуҫым Байегет тә сабып килеп етте. Етте лә, һөңгөһөн һелтәй-һелтәй:

— Эй, батыр ҡатын, уҫал айыуҙар менән алышҡанда ла һынатмаған дуҫыңды һин бынау Муйнаҡтар менән генә алышмаҫлыҡ тип беләһеңме ни? — тип үпкә һүҙен әйтте.

— Һис тә улай түгел, батыр Байегет, — тине уға ирем, — малдар янында ла кеше кәрәк булғанға ғына ҡалдырҙыҡ һеҙҙе унда. Әгәр бик сәмләнәһең икән, әйҙә, беҙҙең янда ҡал. Тик миңә үҙебеҙҙең ҡәрҙәш-ырыу ҡанын бушҡа ҡойоу ғына йәл. Шулай ҙа ҡоралға мин үҙем башлап тотонмаясаҡмын, кем башлай, алла алдында шул яуап бирер.

Шул арала Муйнаҡтар аттарын атлатып ҡына беҙҙең янға етеп тә киләләр ине. Тик бер ниндәй ҙә ҡорал-фәләндәрен күрмәгәс, беҙ аптыраштa тороп ҡалдыҡ; үҙебеҙсә был хәлде яҡшылыҡҡа юрап ҡуйҙыҡ. Улар, ярты уҡ атымы ерҙән дә яҡыныраҡ килгәс, туҡтап ҡалдылар. Бөтәһенән дә айырылып торған Муйнаҡ менән тағы өс кеше шунда, аттарынан төшөп, беҙгә табан атлап килә башлағас, Алдар ҙа атынан төшә һалып, миңә лә, Буранбай менән Байегеткә лә төшөргә ҡушты ла беҙ ҙә дүртәүләп Муйнаҡтарға ҡаршы атлап киттек. Бер нисә аҙым ҡалғас, Алдар Муйнаҡтың да, иптәштәренең дә ҡоралһыҙ булыуын күреп, уҡ-һаҙағын сисеп ырғытты, уның артынса беҙ ҙә шулай иттек. Муйнаҡ үҙе башлап сәләм биргәс, беҙ ҙә уға сәләм менән яуап бирҙек. Алдар уға ҡул биреп, эре генә:

— Дошманымды күрәмме, әллә ҡан-ҡәрҙәшемдеме? — тип һорап ҡуйҙы. Муйнаҡ та шундай уҡ тәкәбберлек менән:

— Әгәр дошманың булһам, мин һине ҡулда ҡоралым менән ҡаршылар инем, һине юҡ итеү өсөн бер ниндәй әмәлдән дә тартынып тормаҫ инем, — тип яуап бирҙе. — Тик минең һиндәй ҡашҡа батырға дуҫ ҡына булаһым килә. Мин һиңә теге ваҡыттағы янъялды баҫып ҡалыуың, минең мәһайыуға сик ҡуйыуың өсөн рәхмәт кенә уҡыйым. Арҙаҡлы Ҡыҙрасҡа ҡаршы шундай тупһыҙлыҡ күрһәтеүемә мин әле лә үкенеп бөтә алмайым. Ә хәҙер мин һине батыр ҡыҙ кәләшең менән ҡотлайым, риза булһаң, күрешер ҙә инем.

Муйнаҡ шунда, миңә ҡул биреп, иҫәнлек-һаулыҡ һорашты ла:

— Алдарға иргә сығыуың менән мин һине ырыҫлыға һанайым, — тип ҡуйҙы.

Мин шунда уның башҡа иптәштәре менән дә күрешеп сыҡтым. Йәшерен-батырын түгел, ҡәҙерле туғанҡайҙарым, Муйнаҡтың былай алыштырып ҡуйғандай күрешеүенә мин эстән генә һөйөнөп бөтә алмай инем. Ә ул, үҙенә бер ниндәй ҙә шик-шөбһә ҡалмаһын өсөн, иремә:

— Беҙ дуҫлашҡан ошо ерҙә мин һиңә, Алдар, һый-хөрмәт күрһәтергә теләйем, — тине. Унан, үҙенекеләргә боролоп, тотоп ҡуйылған алты бейәһен тотоп килтерергә, ҡаҙан-ҡула әҙерләргә, утын йыйырға ҡушты ла, Алдарға ҡарап: — Үҙеңдең ҡыр батырҙарыңа аттарынан төшөргә ҡуш, күрешәйек, һөйләшәйек. Ат кешнәшеп, әҙәм һөйләшеп таныша, ти бит, — тип ҡуйҙы.

Был һүҙҙәрҙе ишетеп торған Сибай аҡһаҡал атынан төшкәс, башҡалар ҙа аттарынан төшөп, Сибайҙы кәҙер-хөрмәт менән ҡаршылаған Муйнаҡ эргәһенә килеп, сәләм бирҙеләр. Шунан һуң һәр кем үҙ ҡорона ултырышып, Муйнаҡ менән уның тиң-тоштары Алдар, Сибай, Буранбай, Байегет менән мине бер ҡорға алһалар, ҡалған беҙҙең яҡ менән Муйнаҡ яғыныҡылар үҙ-ара ҡатышып киттеләр. Һәр ҡайҙа ла турһыҡтарҙан ҡымыҙ ҡоя башланылар. Муйнаҡ Алдарға туҫтаҡ тултырып ҡымыҙ биргәс, Алдар йола буйынса уны хужаның үҙенә кире бирҙе. Муйнаҡ, ҡымыҙҙы ауыҙ иткәс, йәнә Алдарға һондо. Алдар туҫтағын эскәс, башҡалар ҙа һемереп, ике-өс турһыҡ бушап та ҡалды. Алдар шунда, Муйнаҡҡа ҡарап, һүҙ башланы.

## УТЫҘ ҺИГЕҘЕНСЕ КИС

— Арҙаҡлы Муйнаҡ дуҫ, — тине Алдар. — Һинең йәйләүеңә килеп еткәс, мин һине былай дуҫтарса, бик яғымлы ҡаршылар тип башыма ла килтермәгәйнем. Бер көтөүсең һинең беҙҙе үткәрмәҫеңде әйтеп, минән һинең алыш даулауыңды белдереп киткәйне. Шуға күрә лә һин мине яу ҡайтарырға әҙер торған килеш күрҙең. Ә хәҙер мин ни тип әйтергә лә аптырап ҡалдым: әллә һин үҙ ниәтеңдән кире ҡайттың, әллә көтөүсе буш һүҙ генә әйтеп киттеме икән?

— Алдар батыр! — тине быға ҡаршы Муйнаҡ. — Минең көтөүсемдең һүҙендә лә дөрөҫлөк юҡ түгел. Мин һине ысынлап та үткәреп ебәрмәҫкә тигән ниәтемдән ҡайтҡаным юҡ, тик һин миндә дуҫтарса һый-хөрмәт күреп китергә тейешһең. Шулай уҡ һинең менән тағы бер алышып ҡарарға тигән ниәтемдән дә ҡайтҡаным юҡ, тик мин ҡулға ҡорал тотоп түгел, ә үҙебеҙҙең дала уйындары менән алышырға ғына теләйем. Бер ҡабат ташланғас, мин инде башҡаса һинең менән көрәшеп тормайым. Уҡтан атышыу ҙа көслөк билдәһе түгел, таҫыллыҡ ҡына. Ә мин бына шуның икеһенең дә булыуын теләйем: көс тә, таҫыллыҡ та бергә булһын. Быйың өсөн беҙ аттан тартышып ҡарайыҡ, булмаһа. Был ярышта икебеҙ генә булмаҫ өсөн, үҙебеҙҙең яҡтан беҙ дүртәүләп сығырбыҙ, һин дә үҙ яғыңдан шунынса иш һайлап ал.

Алдар был шартҡа бик риза булып күнде, ярышҡа ҡатнашырға минең менән Буранбайҙы, Байегетте һайлап алды. Ә Муйнаҡ үҙ яғынан ике туған ҡустыһы Көслөбайҙы һайланы. Был теге уның эргәһенән төшкән, буйға саҡ ҡына ҡыҫҡараҡ, яңы ғына мыйығы һыҙылып килгән егерме йәштәрҙәге егет ине. Өсөнсөһө атайымдың йыйынында мин һуңғы ҡабат алып бырғытҡан ерән һаҡаллы, киң яурынлы Аслай булып сыҡты. Дүртенсеһенең исеме Ҡотлогилде булып, бик таҫыллы, сая батыр булырға оҡшап тора ине.

Бөтәбеҙҙең дә көс-таҫыллығы яҡшыраҡ күренһен өсөн, һигеҙебеҙ ҙә бер юлы сыҡмай, икешәр-икешәр генә сығырға булдыҡ. Алдар менән Муйнаҡтан башҡа, ҡалған алтыбыҙ ҙа кемдең кем менән уҙаҡташ булырына йәрәбә ташлаштыҡ. Иң тәүҙә Байегет менән Ҡотлогилде, икенсе булып Аслай менән Буранбай, ә өсөнсөгә

Көслөбай менән мин сығырға тейеш инек. Муйнаҡтың ҡустыһы менән алышырыма мин эстән генә һөйөнөп тә ҡуйҙым. Муйнаҡ уйынды һыйҙан һуң башларға иткәйне лә, Алдар менән Сибай иң элек ярышты үткәрергә кәңәш иткәс, Муйнаҡ та быға риза булды. Ярышыусыларға иркен булһын өсөн, ике яҡтың да кешеләре — беҙҙекеләр ҙә, Муйнаҡ яғыныҡылар ҙа, байтаҡ ҡына ара ҡалдырып, ике яҡҡа айырылышып торҙолар. Шунан Байегет, биленән ҡылысын ырғытып, атына атланғас, Ҡотлогилде лә унынса эшләне. Шунан икеһе лә билдәләнгән ергә барып еткәс, ҡул һелтәү менән үк, беҙгә ҡарай елдерҙеләр. Беҙ уларҙың бер-береһен аттан алып ырғытырға тырышҡанын күреп, икеһенең дә көстәре бер самалы икән тип торһаҡ, Алдар менән Муйнаҡ торған ергә сабып килеп еткәс тә, Байегет Ҡотлогилдене шундай көс-таҫыллыҡ менән эйәренән йолҡоп алды ла ергә ырғытып ебәрҙе. Беҙҙең урман яғынығылар ҡыуаныстарынан геү итеп ҡалғас, үҙ ырыуында иң таҫыллыһы һаналған Ҡотлогилде оятынан үҙ яғынығылар араһына инеп йәшенде. Уларҙан һуң Алдарҙың ике туған ағаһы менән теге ерән һаҡал Аслай сыҡты. Уларҙың да көстәре бер тигеҙ һымаҡ ине. Бер-береһен эйәрҙән алырға күпме генә тырышып ҡараһалар ҙа, икеһе лә, бирешмәйенсә, әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа сайҡалышып килделәр ҙә, килеп еткәс кенә Буранбайҙың аты абынып китте. Беҙ инде был еңелде икән тип торһаҡ, ул үҙе менән бергә Аслайҙы ла эйәренән шыпырып килтереп төшөрҙө. Баҡһаң, ул унын билбауынан ысҡындырмаҫлыҡ итеп тотоп алған икән! Был алышты күҙәтеп торған бөтә халыҡ уларҙың икеһен дә маҡтап һөрәнләгәс, икеһен дә бер тигеҙ тип таптылар. Сират Көслөбай менән миңә килеп етте. Ул бик күркәм бер ерән-бурыл атҡа менеп алғайны. Мин уның үҙе менән атына баштан-аяҡ күҙ йөрөтөп сыҡтым да эйәренең айылдары бушаҡ тартылғанын күргәс, бөтәһенә лә ишетелерлек итеп:

— Батыр! Айылдарынды тарттыра төш, юҡһа яҫҡышмай ҙа ҡолап ҡуйыуың бар, — тинем. Ул быға көлөмһөрәп кенә:

— Айылдан ғына айырылмам! — тип ҡуйғас, мин сәмләнеп киттем дә уның үҙен аяп тормаҫҡа булдым. Бер-беребеҙҙе яман ҡаты яҫҡышып, сабып киткәс үк, мин уның ҡаршы торалмаҫтай булыуын тойоп алдым да, Алдар менән Муйнаҡ ултырған ергә еткәс кенә, шундай ғәйрәт менән тартып ебәргәйнем, бынын эйәре әйләнеп килеп сыҡты ла, мин, атымды ҡапыл һулға ҡайырып, үҙен ергә алып бәрҙем. Быны күреп торған Муйнаҡ:

— Һай, батыр Зөһрә, һин минекеләрҙе бында ла аттан ырғытаһың! — тип ҡысҡырып ебәрҙе.

— Айылын тарттырып бәйләгән булһа, ҡустыңды, бәлки, ташлай ҙа алмаҫ инем. Әйткәнде тыңламаны бит, — тигән булдым мин.

— Юҡ, юҡ, ырыҫыбыҙ бөткән, күрәһең, — тип ҡуйҙы Муйнаҡ. Шунда бөтәһе лә, минең көсөм менән таҫыллығымды маҡтап, геү килештеләр.

Эш хәҙер Алдар менән Муйнаҡтың үҙендә генә тороп ҡалды. Икеһе лә аттарына менеп алдылар былар. Менһәләр, Муйнаҡтың аты ла, үҙе лә Алдарҙан аша ҡарап торалар ине. Бында мин ҙур тигеҙһеҙлек күреп, йөрәгем шыу итеп ҡалды. Үҙегеҙ ҙә белеп то-

раһығыҙ, — тип ҡуя Зөһрә шул саҡ ҡунаҡтарына, — атында бейегерәк ултырғанға үҙенән тәпәшерәк һыбайлыны алып ташлау әллә ни ҡыйын да түгел. Шуға ла мин Алдарҙың еңеп сығырына өмөт тә итмәй, ҡотом осоп, уларҙан күҙемде лә алмай ҡарап торҙом. Муйнаҡ иремдең билбауынан, ә ул Муйнаҡтың яғаһынан эләктереп алғайны. Былар шулай, бер-береһен яҫҡышып, сабып килгәндә, эйәрҙәрендә ҡымшанмай ҙа ултырған һымаҡ инеләр. Тик Алдар үҙ көсө менән атының көсөн самалап алды ла, ҡапыл Муйнаҡты артҡа тартып, атын шып туктатҡайны, теге атының һыртына барып төштө лә, аты уның ауырлығынан ергә сүгеп, хужаһы ҡолап киткәс, Алдар тиҙ генә һикерә һалып, уны тотоп та алды. Алдарҙан аша ҡарап торған әзмәүергә нисек кенә оят булмаһын, Муйнаҡ, башын сайҡап:

— Быңдай уҡ көс-таҫыллыҡты һинән көтмәгәйнем, — тип танмай булдыра алманы, унан, Алдарҙы ҡосаҡлап алып, беренселекте уға биргәнен әйтте.

## УТЫҘ ТУҒЫҘЫНСЫ КИС

Шул арала Муйнаҡҡа ит тә бешеп өлгөргәнен, инде табаҡтарға өләшеп тә һалынғанын килеп әйттеләр. Ул Алдар менән Байегеттең иптәштәрен бөтәһен дә табынға саҡырып, беҙҙең малдарҙы үҙ ауылының көтөүселәренә бағып торорға ҡушты. Беҙ шулай бөтәбеҙ ҙә табын әҙерләнгән урынға барырға ҡуҙғалғас, Алдар бер иптәшенең ҡолағына ниҙер әйтеп ҡуйҙы, уның ни әйткәнен мин аңғармай ҙа ҡалдым. Табын урынына балаҫтар йәйелеп, алты мендәр ҙә һалып ҡуйылғайны. Муйнаҡ үҙе кейеҙ сергегә ултырып алғас, Алдарға уң яғынан, Сибайға һул яғынан урын күрһәтте лә, минә таба боролоп:

— Ә һинең урының, Зөһрә, бисә-сәсә араһында булырға кәрәк ине лә, батыр исемен генә йөрөтмәй, батырҙарҙың батыры булғас, әйҙә, беҙҙең менән табындаш бул, ултыр ана Сибай эргәһенән, — тип ҡуйҙы. Минең эргәмдән Буранбай, унан Байегет, унан беҙҙең башҡа егеттәр урын алдылар. Ә Муйнаҡтыҡылар, ултырып та тормай, беҙҙе һыйлау менән генә мәшғүл булдылар. Көн дә инде кискә һарҡып, беҙ арыу уҡ асығып та алғас, һый бик үтемле булды, ит ашап туйғас, ҡымыҙ турһыҡтарын да бушатып ҡына торҙоҡ. Шул саҡта ҡолағына Алдар ниҙер әйткән теге егет өҫтөнә аҫыл балаҫ ябылған ат та етәкләп килтерҙе. Алдар, уны күргәс, балаҫты асырға ҡушты. Аттың эйәр-өпсөнө шау көмөштән генә булып, эйәр ҡашында әҙернәһе менән ҡалъян, уҡтары менән һаҙаҡ эленеп тора, ҡалъяны ла, һаҙағы ла көмөш көмбәҙҙәр менән биҙәлгәйне, ә эйәрҙең һул яғына оҙон киң ҡылыс тағылған, уң яғына өс ботлоҡ ҡорос суҡмар бәйләп ҡуйылған. Шунан Алдар, урынынан тороп:

— Арҙаҡлы Муйнаҡ батыр! Һый-хөрмәтең өсөн рәхмәт әйтеп, мин беҙҙең дуҫлыҡ төҫө итеп һиңә ошо атты бүләк итер инем, — тине. — Был уҡ-һаҙаҡты ла, ҡылысты ла мин бер бик көслө нуғай батырынан йәне менән бергә алғайным. Ул, беҙгә барымтаға килеп, әжәлен минең ҡулдан тапты. Ә был суҡмар Уралтау ҡаялары араһына оялаған яуыз пәрейҙең ҡоралы булыр. Мин уны, пәрей менән

алышып, йәнен йәһәннәмгә ебәргәс, мәмерйәһенән байтаҡ ҡына мосолманды ҡоллоҡтан ҡотҡарып алғайным. Бынан кире был ҡоралды һин үҙ ҡулыңда дошмандарыбыҙға үлем суҡмары итеп тот.

Муйнаҡ, Алдарҙың был һүҙҙәренән телһеҙ ҡалып, бер атҡа, бер уның эйәр-ҡоралына ҡарап, иҫе китеп ултырҙы. Ә Алдар миңә лә, Буранбай менән Байегеткә лә:

— Уҙаҡташтарығыҙға һеҙ ҙә үҙ бүләктәрегеҙҙе килтерегеҙ, — тигәс, мин Байегеттең ҡолағына минең исемдән ниндәй бүләк килтерергә кәрәклеген әйттем. Ул Буранбай менән бергәләп беҙҙең шул арала ҡороп та өлгөргән тирмәләргә табан китеп тә барҙы. Шул саҡ Муйнаҡ, иҫенә килеп:

— Алдар! — тип иремә өндәште. — Һин айбарлы, ғәйрәтле батыр булыуың өҫтөнә бик йомарт та икәнһең. Һинең бындай ҙур бүләгеңде мин беҙҙең дуҫлыҡ хаҡына ғына ҡабул итәм. Был дуҫлыҡ беҙҙән генә тороп ҡалмай, беҙҙең балаларҙың ғүмеренә лә етерлек булһын, — тине лә, бүләк әҙернәне ҡулына алып, үҙенең бер иптәшенә мәрәйгә түбәтәй ҡуйырға ҡушып, уғын башағынаса тартып атып та ебәрҙе. «Ҡайҙа, дуҫымдың бүләге ҡайһылайыраҡ икән», — тип, барып ҡараһа, уҡ түбәтәйҙең ҡап уртаһынан тишеп сыҡҡайны. — Көслө булған икән нуғай батыры, шулай ҙа үҙен юҡ иткән батырға етмәгән, — тип Муйнаҡ башын сайҡап ҡуйҙы, суҡмарҙы сисеп, бер-ике ҡабат һелтәп ҡарағас:

— Был ҡорал да миңә ярайһы ғына икән, — тип, яҡында ғына ултырған йыуан бер имән төбөнә килтереп һуҡҡайны, төптән тик тапсыҡтары ғына тороп ҡалды. Шунан һуң ул Алдарға: — Күрҙеңме инде, Алдар дуҫҡай, миндә лә көс етерлек, шулай ҙа һинең менән алышырға етеңкерәмәй ҡалды шул, — тигәс, Алдар менән ҡосаҡлашып алдылар ҙа йәнә ҡымыҙ эсергә ултырҙылар.

Шул арала Буранбай менән Байегет тә килеп етте. Буранбай Аслайға кәрмәзин сапан, ебәк елән менән буҙ ала ат килтереп тоттторҙо, ә Байегет Ҡотлогилдегә көмөш йүгертелгән ҡылыс менән ҡара күрән төлкө бүрек бүләк итте. Ә мин атайым йыйынында бәйгелә сабышҡан теге аҡбуҙ толпарымды эйәр-өпсөнө менән Көслөбайға бүләк иттем. Шуның өҫтәүенә фарсы ебәгенән бер төргәк тотторғас, Алдар минән:

— Быныһы ни тағы? — тип һорағайны, мин:

— Быныһы көмөш ҡашмау, — тинем, — уны мин арҙаҡлы Муйнаҡ дуҫыбыҙҙың кәләшенә бүләк итергә булдым. Муйнаҡ шул саҡ башын сайҡап:

— Ай-уай-уай! — тип ҡысҡырып уҡ ебәрҙе. — Һин, һуйып ҡаплағандай, ирең Алдарға оҡшағанһың икән дәһә. Ярай әле, миңә сыҡмай, уға сығырға яҙған үҙеңә!

Шунда мин Алдарға Муйнаҡтың кәләшен күрергә теләгәнемде әйткәс, беҙ яҡында ғына ятҡан Муйнаҡ йәйләүенә барып килергә булдыҡ. Бүләк аттарҙы етәкләп, бөтәһе лә беҙҙең арттан ыңғайланы.

Муйнаҡтың тирмәһе бөтәһенән дә ҙурыраҡ булып, тирмә эсе таҙа, йыйнаҡ ҡына ине. Бисәһе йәп-йәш булыуы өҫтөнә төҫкә-башҡа ла арыу ғына булып сыҡты. Мине лә, башҡа ҡунаҡтарҙы ла улты-

рырға ҡыҫтап, беҙҙең күңелде күрергә өлтөрәп торған булды. Беҙ бер аҙ ултырып, бер-ике туҫтаҡ ҡымыҙ эсеп, иртәгәһенә Муйнаҡты бисәһе менән бергә үҙ тирмәбеҙгә саҡырғас, Алдар Муйнаҡ менән хушлашҡан арала, мин дә уның кәләшенән беҙгә башҡа бисәләрҙе лә алып килеүен һораным.

## ҠЫРҠЫНСЫ КИС

Үҙебеҙҙең тирмәләр янына әйләнеп ҡайтҡас, Алдар, ҡунаҡ ашы — ҡара-ҡаршы, тип, иртәгеһе йыйынға таңдан уҡ һигеҙ бейәне тотоп һуйырға ҡушты. Бисә-сәсәне ҡунаҡ итергә мин ҡыҙ-ҡырҡын кейемендә буласағымды әйткәс, Алдар ҙа быға риза булды.

Иртәгәһен таң һарыһынан тороп, дөйәләрҙең артмаҡтарынан балаҫтарҙы сисеп алдыҡ та тирмәләр алдына йәйеп сыҡтыҡ. Шул арала юлдаштарыбыҙ ит әҙерләй торҙолар. Үҙебеҙ менән ҡымыҙ алмағас, һаба-һаба ҡымыҙын беҙгә Муйнаҡ ебәрҙе. Шуның өҫтәүенә ул ирема, Алдар риза булһа, бәйгегә аттар алып килеп, бәйгеләрен үҙе ҡуясағын да әйттереп ебәргәйне. Алдар быға риза булып, үҙенең дә бер нисә атын сабыштырасағын әйтте. Күп тә үтмәй, бейеп торған атҡа атланған ун биш кешеһе менән Көслөбай ҙа килеп етте. Ул үҙе мин бүләк иткән аҡбуҙ атҡа атланып алғайны. Беҙҙең яҡтан бәйгегә Байегет менән Алдарҙың дүрт ҡыр батыры ҡатнашырға булды. Муйнаҡтың ҡустыһы Көслөбай уларҙы, төш етеүгә сабып килеп өлгөрөрбөҙ, тип алдан билдәләп ҡуйған бәйге башланаһы урман ыҙанына табан алып китте. Бәйгеселәрҙе оҙатҡас, күп тә тормай, үҙ ауылының аҡһаҡалдары, йәш-елкенсәктәре менән бергә Муйнаҡ та килеп етте. Ирем уларҙы ҡаршы алып, йәйеп ҡуйған балаҫтарға ултыртҡан арала мин дә, Муйнаҡ кәләше менән килгән бисәләрҙе ҡаршылап, уларҙы тирмә эсенә алып индем.

Муйнаҡ, мине ҡыҙ-ҡырҡын кейемендә күреп, иремә:

— Ҡыр батыр Алдар! Кәләшең һинең батырҙар араһында иң батыры, ҡатындар араһында иң матуры икән, — тип әйтмәйсә сыҙай алманы.

Ит-фәлән бешеп өлгөргәнсе, һыйҙы турһыҡтарҙан ҡымыҙ ҡойоп башлай торорға булдыҡ. Муйнаҡ шул арала кешеләренә атта сабышыусыларға бәйге ҡуя торорға ҡушты. Бөтәһе туғыҙ бәйге билдәләнгәйне, шуларҙың тәүге икеһе генә иҫемдә ҡалған: беренсе килгәнгә — әйәр-өпсөнө менән ат булһа, икенсеһенә — тимер кейемдән һарайта ине. Ат сабыштырыусылар бәйгегә килеп еткәнсе, беҙҙең ҡыр батырҙарыбыҙ Муйнаҡтыҡылар менән көрәш тә башлап ебәрҙеләр. Мин, бисә-сәсәне ҡунаҡ итеп, тирмә эсендә ултырһам да, тыштан ишетелгән һөрән тауыштарынан көрәш барғанын белеп тора инем. Һеҙгә дөрөҫөн генә әйтәйем инде: бисә-сәсә менән сөркөлдәшеп ултырыуҙан бер ҙә толҡа тапмай, үҙем көрәшмәгән тәҡдирҙә лә, көрәшселәрҙе һынап ултырғым килә ине. Ә бисә-сәсә менән һөйләшергә һүҙ ҙә тапмай йөҙәп бөттөм. Ат сабыштырыусыларҙың күҙгә күренеүе тураһында ҡыҫҡырышҡан тауыштарҙы ишетеү менән мин, шатлығымдан ҡунаҡтарыма ла ҡарап тормай, һикереп

торҙом да тирмәнән сығып, кемдең алда килгәнен күҙәтә башланым. Башҡа һыбайлыларҙы әллә ҡайҙа ҡалдырып, иң алда минең аҡбуҙ атым елеп килә ине. Унан һуң ҡола ат менгән һыбайлы күренде, тик байтаҡ ара булғанлыҡтан, уның кем икәнен дә тоҫмаллай алманым. Уның артынса уҡ өсөнсөһө килеп сыҡты. Шул арала Көслөбай инде бәйгеһенә килеп тә етеп, бәйгеһен алып, атынан һикереп тә төштө. Ә өсөнсө һыбайлы икенсеһен ҡыуып етеп, аттары ҡолаҡҡа ҡолаҡ терәп саба башлағас, уларҙың береһе Байегет, икенсеһе Ҡотлогилде икәнен танып алдым. Ярты уҡ атымы ер ҡалғас, Байегет алға атылып сыҡты, уҙағын артҡа ҡалдырып, икенсе бәйгене эләктереп тә алды. Ә Ҡотлогилде, өсөнсө бәйгене алып, Байегеткә:

— Кисә һин мине аттан тартып хур итһәң, бөгөн алдан сығып хур иттең, — тип үпкәләп тә ҡуйҙы. Ҡалған алты бәйгенең икеһен — беҙҙең ҡыр батырҙар, һуңғыларын Муйнаҡтыҡылар алды буғай.

Һуңынан ирем миңә Муйнаҡтың да, башҡаларҙың да аҡбуҙ толпарҙың алғырлығына иҫтәре китеп торғанын үҙе һөйләп бирҙе. Муйнаҡ хатта, үҙ күҙҙәренә үҙе ышанмай, минең аҡбуҙҙы ҡулдары менән һылап-һыйпап ҡарағас, Алдарға:

— Был атты минең ҡайҙалыр күргәнем бар бит. Хәтерем алдамаһа, был ат теге Ҡыҙрас йыйынында һинең атың менән бергә килде буғай, тик ат өҫтөндә килгән егетен генә белмәй ҡалдым, — тигән.

Ирем уға ул «егеттең» кем булғанын әйтеп, серҙе асып биргәс, Муйнаҡ, оторо иҫе китеп:

— Шундай атын да бүләк итергә йәлләмәгәс, күрәһең, Зөһрә батырҙың быңдай йүгerektәре аҙ түгелдер, — тип ҡуйған.

Бәйге бөтөүгә ит тә әҙер ине инде. Минең ҡыҙ-ҡырҡындан ярҙам итешер кешем булмағас, ҡунаҡтарымды һыйлашырға Байегетте саҡырҙым. Ул тирмәгә ҙур бер табаҡ туралған ит алып инде лә бисә-сәсә янынан тиҙерәк тайыу яғын ҡараны. Мин үҙ ҡунаҡтарымды һыйлаған арала, Алдар ҙа үҙ ҡунаҡтарын ҡыҫтай-ҡыҫтай, бөтәһе лә ғарҡ булғансы ит ашап, ҡымыҙ эсеп, бик күңелле геүләшеп ултырҙылар. Һуңынан ир-ат, урындарынан тороп, яҡында ғына йөрөгән беҙҙең йылҡы өйөрө менән һыйыр көтөүен ҡарап килгәнсе, мин тирмә тирәһендә ураландым. Улар әйләнеп килгәс, Алдар мине тирмәнән саҡырып сығарҙы ла:

— Бына уҙағыңдың бүләгең ҡабул итеп ал, — тине.

Ҡараһам, Көслөбай тирмә алдында ялы бәкәленә, ҡойроғо ергә тейеп торған оҙон торокло ала-ҡола айғырының теҙгененән тотоп тора. Айғыры эргәһендә шундай уҡ ала-ҡола төҫтәге ҡолондары менән алты бейәһе лә бар ине.

Ә Муйнаҡ иремә буҙ айғыры менән шундай уҡ төҫтәге ун ике бейәһен бүләк итеп:

— Ҡыҙрас йәйләүендәге теге бәйгелә мине хур иткән толпарҙың тоҡомонан был малҡайҙар, — тине.

Ирем Муйнаҡҡа рәхмәт белдерҙе. Мин дә Көслөбайға рәхмәт әйтеп:

— Бер ат өсөн ете ат бик күп булмаҫмы? — тигәйнем. Көсләбай ауыҙ асырға ла ирек ҡуймай:

— Күп булыу түгел, аҙыраҡ әле, — тине. — Һин бүләк иткән бындай толпар беҙҙә генә түгел, бөтә тирә-яҡта булғаны юҡ, Зөһрә батыр. Етмәһә, атына күрә эйәре лә ни тора! Йыйындарҙа был эйәрҙән күҙ ҙә ала алмай тороҙар, ә инде атындың алғырлығына һүҙ ҙә әйтеп тораһы юҡ, елдән дә етеҙерәк.

Буранбай менән Байегет тә үҙ уҙаҡтарынан шундай уҡ бүләктәр алғас, бүләк аттарҙы ирем үҙ өйөрҙәребеҙгә илтеп ҡушырға бойорҙо.

Көн кискә һарҡып, ҡунаҡтар ҡайтырға йыйына башлағас, Муйнаҡ бисә-сәсәләр менән үҙ ауылдаштарына ҡайта торорға ҡушты ла үҙенең бер аҙға беҙҙә ҡаласағын әйтте. Ҡунаҡтар, хушлашып, ҡайтыу яғына ыңғайлағас, Муйнаҡ, Алдарҙың ҡулынан алып, беҙҙең тирмәгә инде, шунан былай тип һүҙ башланы.

## ҠЫРҠ БЕРЕНСЕ КИС

— Алдар дуҫ! — тине ул. — Һинең менән хушлашырҙан алда ҡайтасаҡ юлың хаҡында мин бер-ике ауыҙ һүҙ әйтергә булдым. Һиңә тик ике генә юл бар: береһе — турараҡ, икенсеһе — урауыраҡ. Тәүгеһе, турараҡ булһа ла, бик хәтәр юл: гел генә тау-таш яғалап, ҡыҫыҡ та тарлауыҡтар аша үтә. Әгәр бер-бер хәлгә юлыҡмай ғына барғанда, мал-тыуарың менән бер ун көн тигәндә ҡайтып етерлек. Ағиҙелде Ашҡаҙар тамағы тәңгәленән сығырға ла күҙгә әллә ҡайҙан уҡ күренеп торған анау тауҙарҙы ғына артылаһы бар. Шулай ҙа был бик хәтәр юл. Берҙән, үҙеңдең көс-ҡеүәтеңә, ир-егеттәреңдең айбарлығына ҡайһылай ғына ышанма, мал-тыуарыңа йырткыс януарҙар баҫышыуы бар. Урман да тау булғас, уларҙы ҡурсалап ҡалыуығыҙ ҙа бик икеле. Ярай, уларынан да ҡотолдоғоҙ, ти. Әммә яманырағы бар шул. Унда, һин кисеп сығасаҡ Ағиҙел башында, мәмерйә һымағыраҡ тәрән бер тау ярығы бар. Ана шунда яман бер дейеү пәрейе йәшәй. Үҙенә ҡаршы сыҡҡан батырҙарҙы үлтереп бөтөрөп, йыуашыраҡтарҙы әсирлеккә алып, үҙенең мал-тыуарын көтөргә ҡуша, ә бәғзе берен, астан үлмәҫлек кенә аҙыҡ биреп, башҡа мәмерйәләрҙә бикләп тота икән. Белмәйем, минең бик көслө бер туғаным Ҡарабай батыр шуларҙың ҡайныһында зарығып яталыр инде, — тип Муйнаҡ шул саҡ көрһөнөп ҡуйҙы. — Ул да шулай, үҙенең көсөнә, айбарлығына ышанып, ошо юл менән сығып киткәйне, әле булһа кире әйләнеп ҡайтканы юҡ. Бына өсөнсө йылға китте инде, бер хәбәр-хәтере булғаны юҡ, исмаһам. Улы Көслөбай уны эҙләп сығырға итһә лә, мин, ебәрмәйенсә, серәшеп киләм. Иң яманы шунда: ул дейеү пәрейе беҙҙең диндәгеләрҙең бөтәһен дә ҡырып бөтөрөргә кәһет иткән, ти. Шулай булғас, Алдар дуҫкайым, мин һиңә был юл менән барырға кәңәш бирмәҫ инем. Үҙең генә түгел, бисәң менән дуҫ-иштәрең дә әллә ниндәй бәлә-ҡазаға тарығып ҡуйыуы бар. Урау булһа ла юл яҡшы, тигәндәй, икенсе юл менән ҡайтыу хәйерлерәк булыр. Ул юл Ағиҙел буйлап, үрҙәнерәк

ята. Асыҡ ялан ере булғас, мал-тыуарығыҙҙы көтөп барырға ла уңайлыраҡ булыр. Өс көн тигәндә, Түңгәктау тураһына ла барып етерһегеҙ, ә унан инде үҙегеҙҙең ете ырыу ерҙәре башланып китә.

Алдар, Муйнаҡтың шулай һөйләп бөткәнен көтөп:

— Яҡшы кәңәштәрең өсөн рәхмәт, дуҫҡайым, тик бөтә ете ырыуға батыр тигән даным сығып, ниндәй генә бәлә-ҡазаға тарыһам да, мин үҙемә тура юлды һайларға тейешмен. Бигерәк тә пәрей золомонан интеккән үҙ мосолмандарымды ҡотҡарып ҡуйыу форсаты ла булғас, икенсе юлды һайлап тормам. Иптәшкә янымда батыр Зөһрә барҙа мин ул пәрей менән алышыуҙан ҡурҡмайым, — тигәс, мин дә, ауыҙ асып, һүҙ ҡатып торманым. Ә Муйнаҡ һаман Алдарҙы был юл менән китмәҫкә күндерергә тырышһа ла, уның ялбарыуҙары бушҡа ғына ине.

— Әйткән һүҙ — атҡан уҡ, — тип, Алдар шундай тура юлдың барлығына бик ҡәнәғәт булып, Муйнаҡҡа рәхмәтен әйтте лә, уның менән дуҫтарса ҡосаҡлашып хушлашҡас, беҙ таңдан уҡ юлға сығырға булдыҡ.

## ҠЫРҠ ИКЕНСЕ КИС

Алдар беҙҙе йоҡонан уятҡанда, ҡояш та сыҡмағайны әле. Ул Сибай менән Буранбай ағаһын саҡырып алды ла уларға малдар менән урау юлдан ҡайтырға кәңәш бирҙе. Ул юл дала буйлап барғас, малдарға ла үреш мул булыр, тине.

— Ә мин Зөһрә менән үҙем килгән юлдан ҡайтырмын, — тип белдерҙе. Буранбай ағаһы менән Сибай аҡһаҡал, бынан әллә ни хәүеф-хәтәр күрмәй, ҡаршы төшөп торманылар. Тик ҡыйыу Байегет кенә мотлаҡ беҙҙең менән юлдаш булырға теләк белдергәс, Алдар риза булды.

Тирмәләрҙе һүтеп алып, дөйәләргә артмаҡлап бөткәс, беҙ иң күндәм аттарҙы һайлап алдыҡ та, бөтәһе менән хушлашып, юлға ла сыҡтыҡ. Өс көн буйы беҙ, бер нигә лә тарымай, имен генә барҙыҡ. Алдар Байегет менән лабырҙашып, һүҙ уңайы сыҡҡан арала унан:

— Ә һин беҙҙең юлда хәтәр хәлдәргә тарығып ҡуйырыбыҙҙы беләһеңме? — тип һорағас, Байегет:

— Юҡ, белмәйем, — тип яуапланы. — Тик мин, Алдар менән Зөһрә юлдаш булғанда, бер ниҙән дә ҡурҡмайым.

— Беҙгә уҫал януарҙар тап булыуы бар, — тигәс, Байегет бер ҙә иҫе китмәй генә:

— Ә уларҙы мин батыр ҡыҙ менән бергәләп ҡырғаным бар, — тип ҡуйҙы. Алдар шунда:

— Ә яуыз ен-пәрейҙәр барын ишеткәнең бармы? — тип һорағас, Байегет:

— Һис юҡ, — тине.

— Улай булһа, шуны белеп ҡуй, батыр Байегет, улар менән алышырға һинең бөтә ҡыйыулығың, бөтә айбарлығың кәрәк буласаҡ, — тине уға Алдар. — Был яуыз ен-пәрейҙәр көслө батырҙар

ҡулынан үлә торған заттан булһалар ҙа, уларҙы еңеп сығыу өсөн хоҙай ярҙамы ла кәрәк.

— Изге пәйғәмбәребеҙ ҡайһылай ҙа үҙ динен тотҡан мосолмандарын ярлыҡамай ҡалмаҫ әле, — тип ҡуйҙы Байегет.

— Ярай, ҡарап ҡарарбыҙ уныһын, — тине Алдар.

Ә мин, ҡәҙерле ҡунаҡтарым, һеҙгә дөрөҫөн генә әйтәйем инде, өс көн буйы бер һүҙ ҙә өндәшмәй, әгәр Алдарға бер-бер хәл булып ҡуйһа, унан башҡа йәшәй ҙә алмаҫымды уйлап, бик тә эсем бошоп килдем.

Дүртенсе көн килә торғас, көн төшләккә еткәндә, киң бер туғайҙы сығып, бер тау егенә яҡынлашып ҡына бара инек, ҡапыл шунда бер ҙур юлбарыҫ килеп сыҡҡанын күреп ҡалдыҡ. Ул оҙон ҡойроғо менән ергә һуғып, тештәрен ыржайтҡан килеш, әкрен генә атлап, беҙгә ҡаршы ырылдап килә ята ине. Алдар шунда көлөмһөрәп Байегеттән:

— Бындай йәнлекте күргәнең бар инеме? — тип һораны, ул:

— Юғын юҡ та, шулай ҙа мин уны үҙемдең уғым менән таныштырып ҡарайым әле, — тип, әҙернәһен ала һалып, уғын шундай ғәйрәт менән атып ебәргәйне, уғы януарҙың һул яҡ ҡалаҡ һөйәге аҫтына бөлдөргөһөнә саҡлы барып ҡаҙалды. Уҫал януар, башын ҡайырып, уҡты тештәре менән һурып сығарырға маташҡан арала, ҡурҡыу белмәҫ Байегет һөңгөһө менән уны үтә сыҡҡансы ҡаҙап та өлгөрҙө.

— Һай, мәрҙәс батыр! — тип ҡысҡырып уҡ ебәрҙе Алдар. — Хәтәр мәлдә һиңә таянырға була икән. Атыңдан төшөп, януарҙың тиреһен һыҙырып ал, әйҙә, атыңдың ябыуына ярап ҡалыр, ә үҙеңә дан билдәһе булыр.

Алдар, үҙе лә аттан төшөп, Байегеткә булыша башланы. Ҡояш эҫеһенән тире шунда уҡ кибеп тә өлгөрҙө. Байегет уны эйәренә һалып ултырғас, беҙ йәнә ары киттек. Бер ҡыҫыҡ буйлап күп тә бармай, киң бер туғайға килеп сыҡһаҡ, алдыбыҙҙа төбө үтә күренмәле бер шишмә сылтырап ағып ята ине. Яр буйындағы тарбаҡай өйәңкеләрҙе күргәс, Алдар шуларҙың күләгәһе аҫтында бер аҙ тамаҡ ялғап, аттарыбыҙҙы ла хәл йыйҙырып китмәксе булды. Аттарыбыҙҙан төшөп, эйәр-өпсөндәрен бушатып ҡына тора инек, ҡапыл шунда ап-аҡ кейем кейгән бер ҡарттың беҙгә табан килә ятҡанын күреп ҡалдыҡ. Бер ҡулына оҙон таяҡ, икенсе ҡулына эре мәрйендән теҙелгән тиҫбе тотоп алған. Үҙе көйгәнәктәй ап-аҡ оҙон һаҡаллы булып, башына бер осо биленә саҡлы төшөп торған йоҡа ғына сәллә урап алған. Уны күргәс тә беҙ, был моғайын, күктән төшкән берәй изге заттыр тип, шаҡ ҡатып ҡалдыҡ. Уға күҙ һирпеп ҡарарға ла ҡыймай, баштарыбыҙҙы эйгән килеш, ҡулдарыбыҙҙы күкрәктәребеҙгә ҡуйып торғанда, ул беҙгә килеп етеп, үҙе үк сәләм бирҙе лә, яуап сәләмебеҙҙе ишеткәс:

— Һеҙҙе бында кем килтереп сығарҙы, хаҡ мосолмандар? — тип һорай ҡуйҙы. Алдар, бер аҙ ҡыйыулана төшөп:

— Үҙ йәйләүемә тиҙерәк ҡайтмаммы, тип был тура юлды мин һайлағайным, — тине.

— Ә һин, айбарлы ҡыр батыр, былай итеп үҙеңде лә, хәләл ефетең менән иптәшеңде лә ниндәй хәтәр хәлгә ҡуйырыңды белмәй инеңме ни? — тип һораны шунда теге ҡарт.

Мин, ирҙәр кейеме менән һарайта кейеп алыуыма ҡарамаҫтан, ул минең ҡыҙ-ҡырҡын затынан булыуымды ла белеп торғас, унын һүҙҙәренән һиҫкәнеп үк киттем.

— Юлда беҙгә яуыз пәрей осрарын мин ишеткәйнем, — тине уға ҡаршы ирем. — Шулай ҙа мин беҙҙе хоҙай үҙе ҡурсалар, изге пәйғәмбәребеҙ беҙҙе был бәләнән юлып алып ҡалыр тип инанам.

— Улай булһа, әйткәнегеҙ тура килһен, — тине шул саҡ теге аҡһаҡал. — Быны өсөн тәүҙә тимер кейемдәрегеҙ менән ҡоралдарығыҙҙы сисеп ташлағыҙ ҙа, төрлөгөҙ төрлө яҡтан барып, ошо шишмәнең һыуы менән тәһәрәт алығыҙ. Унан, аҡшам намаҙын уҡығас, минең эргәмә килерһегеҙ.

Беҙ унын һүҙҙәрен тыңлап, бөтәһен дә ул ҡушҡанса эшләгәс, яңынан килһәк, намаҙлығын йәйеп, ниҙер уҡынып ултырғанын күрҙек. Уҡынып бөткәс, ул урынынан торҙо ла, беҙҙе үҙ янына саҡырып алып, тиҫбеһен өс өлөшкә бүлеп, беҙгә өс муйынса, ә аттарыбыҙға өс бетеү[73] эшләп бирҙе. Унан муйынсаларҙы муйындарыбыҙға тағырға, ә бетеүҙәрҙе аттарҙың ялына үреп ҡуйырға ҡушты:

— Был тылсым һеҙҙең үҙегеҙҙе лә, аттарығыҙҙы ла дейеү пәрейенең һуғыуынан һаҡлар. Һеҙгә, балаҡайҙарым, төрлө һүрәткә кереп йөрөй торған ул ғифрит менән һуғышып, унын үҙен үлтереп, һаҫыҡ мәмерйәләрендә интегеп ятҡан ҡолдарҙы ҡотҡарыу тәҡдирегеҙгә яҙылған. Уға ҡаршы тәүәккәл тороғоҙ, аллаһы тәғәләгә, унын олуғ пәйғәмбәренә инанып һуғышығыҙ, — тип тау егенә табан китеп барҙы. Ҡулындағы таяғы тейеүгә тау еге ике яҡҡа асылып китте лә, ул шунда инеп юғалғас, тау ҡыуышы кире ябылды.

## ҠЫРҠ ӨСӨНСӨ КИС

Был изге ҡартты күреү минең менән Алдарҙан бигерәк Байегетте таң ҡалдырҙы. Минең инде былдай хәлдә күргәнем булғас, Алдар ҙа элек, ен-пәрейҙәр менән алышҡанда, бындай кәңәштәрҙе ишеткәне булғанға, беҙҙең әллә ни иҫебеҙ китмәне китеүен, ә Байегет бығa шаҡ ҡатып, беҙ инде ҡорос кейемдәребеҙҙе кейеп, ҡоралдарыбыҙҙы тағып бөткәнсе, һаман да теге ҡарт инеп юғалған тау егенән күҙен алалмай торҙо. Алдар, уға боролоп:

— Һин тағы ни көтөп тораһың? — тип һорағас, Байегет:

— Теге изге ҡарт тағы килеп сыҡмаҫмы икән тип торам, — тигән булды.

— Ә нимәгә ул һиңә тағы? — тигәс:

— Мин унан пәрейҙең ниндәй һүрәткә кереп йөрөүен, унын менән ҡайһылайыраҡ алышырға кәрәк икәнен һорамаҡсы инем, — тине Байегет.

Ирем унын шундай бер ҡатлы булыуына бер аҙ көлөмһөрәп ҡуйҙы ла:

— Эй, Байегет! — тине. Беҙҙең менән һөйләшкән ул изге карт-ты мотлак олуғ пәйғәмбәребеҙ үҙе ебәргән. Үҙең күреп торҙоң бит, үҙе күп һөйләп тормаһа ла, өгөт-нәсихәте көндәй асык, юрауҙары, һис шикһеҙ, алдыбыҙға киләсәк. Уның беҙгә биргән тылсымы ла еткән, ә ниндәй ғифриттәр менән нисек итеп һуғышырға — уныһын инде үҙебеҙ белербеҙ.

Был һүҙҙәрҙе тыңлап бөткәс, Байегет тиҙ-тиҙ генә үҙенең һарайтаһын кейә һалып, коралдарын тағып алды ла, атына атланып:

— Ул пәрейҙең йә үҙе, йә шунда берәй йырткысы менән тиҙерәк алышырға ине, тәүге осрағанын ук һуғып йығыр инем, — тигәс, мин уға:

— Юк, һин ашыкмай тор әле. Һин үҙ сиратыңда юлбарыҫ менән алыштың инде, ә хәҙер минең сиратым, — тип куйҙым.

— Юкка бәхәсләшмәй тороғоҙ әле, — тине Алдар быға каршы. — Беҙҙең өсөбөҙгә лә эш етерлек булыр.

Шулай һөйләшеп килә торғас, беҙ кискә тиклем бер нигә лә юлыкмай барып, Алдар менән мин Муйнактың был урындағы йырткыс януарҙар тураһында һөйләгән һүҙҙәренең дөрөҫлөгөнә икеләнә биреп тә куйҙык. Беҙ инде Ағиҙел башынан байтак ары китеп, көн дә кискә һарккас, якындағы йылға буйында куныП китергә булдык. Төндө шулай тыныс кына үткәреп, иртән кояш менән бергә тороп, йыуынып алғас, иртәнге намаҙҙы укынык та ары юлландык. Куйы урман араһынан барып, көнө буйы унан сыға алмаҫбыҙ һымак тойола башлағайны, капыл күҙ алдыбыҙҙа киң бер туғайлык асылып китте, унда өйөр-өйөр йылкы менән һыйыр малдарының көтөүен күреп калдык. Уларҙы күргәс:

— Был ни ғәләмәт тағы? — тип куйҙы ирем, аптырап. — Беҙҙең ете ырыу малдары былай ерҙә көтөлмәй торғайны. Әйҙә, якынырак барайык әле, көтөүселәрен күреп булмаҫмы икән?

Беҙ шулай тирә-якка карағылап бара торғас, бер өйөр йылкы эргәһендә беҙҙе бар тип тә белмәгән бер һыбайлыны күреп калдык. Шуға тиҙерәк сабып барып етһәк, ул беҙҙе күреп алғас, туктап калды. Беҙ ҙә аттарыбыҙҙы туктатып, уны куркытып куймаҫ өсөн, кул ғына болғанык. Алдар уға, бер кемдән дә куркмайынса, бире табан килергә сакырып, тауыш бирҙе. Ул беҙгә карай ыңғайлағас, беҙ ҙә уға каршы киттек. Шунда уның йыртык-борток кейем кейгән бер кеше икәнен күрҙек. Мин уға текләп карай торғас, кайҙалыр бер күргән кешемде төҫмөрләгәндәй булдым. Алдар шул сак:

— Ай-вай-вай, мин Болғар батшаһының илсеһен күрәм түгелме һуң?! — тип кыскырып ук ебәрҙе. — Кемгә һин былай көтөүселеккә килеп эләктең? Был менгән арык атың кем сабаны булыр? Минең менән көрәшкәндәге теге толпарың кайҙа булды?

Көтөүсе иремдең был һорауҙарына яуап та бирәлмәй, уға текләп карап торҙо ла:

— Аһ, батыр, был көнгә төшөүемдән көлмә улай, — тип көрһөнөп алды. — Һеҙгә был көндө күрергә яҙмаһын. Һуң үҙегеҙҙе бында ниндәй ел ташланы?

— Беҙ тура юл менән илебеҙгә кайтып барабыҙ, — тине уға каршы ирем.

— Мин дә бына шул юл менән һеҙҙең ете ырыуҙан ҡайтып килә инем дә ошонда яуыз пәрейгә әсирлеккә килеп ҡаптым, — тине көтөүсе.

— Бына ниндәй бәләгә тарығанһың! — тине ирем, көлә биреп. — Былай булғас, үҙеңдең Болғар батшаһына ниндәй хәбәр алып ҡайтаһың инде? Ул һине көтә-көтә күҙе тоноп, һинең хәбәрҙәреңде ишетә алмай, һарыға һабышҡандыр хәҙер.

— Көлмә, батыр, минең хәсрәтемдән. Һеҙ үҙегеҙ ҙә шул хәлгә төштөгөҙ, пәрей золомона эләктегеҙ инде хәҙер. Был яланға килеп ҡапҡан әҙәмдең бынан сығып китә алғаны юҡ. Кем килеп ҡапһа ла, пәрей әсиренә әйләнеп, бына минең һымаҡ, уның малын көтөргә дусар була. Уның менән алышырға йөрәге еткән берәй сая батыр табылһа, ул уны йә үлтерә, йә, үлмәҫлек кенә ризыҡ ташлап, ҡая ташҡа бығаулап ҡуя ла, асҡа интектереп, һыуға сарсатып йәберләй.

— Күрәһең, һин уның менән көс һынашып ҡарарға ла уйламағанһың, шуға күрә бына көтөү көтәһең, — тип ҡуйҙы Байегет.

— Был көләүҙән һуң иларға тура килмәһен, — тип үртәнде көтөүсе.

— Уныһын күҙ күрер, — тине уға ҡаршы Алдар. — Тик һин, болғар дуҫ, беҙгә шуны әйтеп бир: ул пәрейең ҡайҙа йәшәй ҙә уны ҡайһылайтып күреп була?

— Уны күреүҙән дә анһатыраҡы юҡ, бының өсөн тик алға ғына ынғайларға кәрәк, ахырында ул үҙе ҡаршы сығыр, — тине көтөүсе.

— Улай булғас, һин беҙҙе уға оҙатып та ҡуйырһың инде? — тип һорағас, Алдарға ул:

— Теләмәһәм дә, ни хәл итәйем, бик һораһаң, оҙатып та ҡуйырмын, тик әле әйткәнемсә, бынан ҡотолоп сығыу юлы юҡ, — тине.

— Ә беҙ бынан сығырға ла уйламайбыҙ, — тип киҫәтеп ҡуйҙы уны Алдар. Ә мин үҙ нәүбәтемдә был болғар илсеһенән:

— Һиңә уның батырҙар менән алышҡанын күрергә тура килмәнеме? Ниндәй ҡиәфәттә алыша һуң ул? — тип һорағайным, ул миңә:

— Юҡ, әлегәсә үҙ күҙҙәрем менән күргәнем булманы. Мин пәрей тоҡонлоғонда әле бер ай ғына йәшәйем. Шул ваҡыт эсендә бер батырҙың да килгәне юҡ. Мин тик уның бынан бер йылмы, ике йылмы элегерәк бер көслө батыр менән алышҡанын ишетеп кенә беләм. Был батырҙы ул ут төҫлө ҡанатлы йылан ҡиәфәтендә ҡаршы алған, тиҙәр. Батыр уны суҡмары менән дөмбәҫләп иҫәңгерәткән икән, йылан ҡайҙалыр китеп юғалғас, бының күҙҙәре бөләңгертләнеп китеп, аптырап дошманын күрә алмай торғанда, тегеһе баш осона ибәтәйһеҙ ҙур бер бөркөт ҡиәфәтендә килеп сыҡҡан да дауыл ҡуптарып быға ташланған. Тик был таҫыллы батыр уға, үҙен тырнаҡтары менән яҫҡып алырға ирек ҡуймай, йәнә суҡмары менән килтереп тондорғас, теге бөркөт бер-ике сажиндай ситкә шыҡыйып, йәнә күҙҙән юғалған. Батыр инде, алышты бөткәнгә һанап, туп-тура бының мәмерйәһенә сабып барһа, ҡапыл быны ҙур бер күҫәк тотҡан әзмәүер ҡиәфәтендә күргән. Батыр буйға үҙе лә ҡыҫҡа булмай булыуын, шулай ҙа пәрей ат өҫтөндәге был батырҙың башы

аша ҡарап торған икән, тиҙәр. Айбарлы батыр, ҡурҡыуҙың ни икәнен дә белмәй, быға ҡаршы сабып килеп, шундай ғәйрәт менән суҡмарын һелтәп ебәрһә, суҡмары пәрейҙең күсәгенә генә тейә, шунда уҡ селпәрәмә килә. Пәрей батырҙың ҡоралһыҙ ҡалғанын күргәс, тәүҙә атын бәреп йыға, унан үҙен эләктереп ала. Батыр ҡойолоп төшмәй, пәрей менән айҡашырға керешә, бөтә ғәйрәте менән таҫыллығын һалып һуғыша. Шулай ҙа ахыр сиктә пәрей өҫтөн сыға. Батырҙы иҫәңгерәткәнсе, ергә атып ора. Был иҫенә килгәнсе, пәрей, билбауын сисә һалып, уның аяҡ-ҡулдарын шаҡарып бәйләй ҙә, елкәһенә һалып, мәмерйәһенә алып кереп тә китә.

Алдар, болғар илсеһенең һөйләгәнен тыңлап бөтөргәс:

— Ай-һай, телгә бөткәнһең икән дә үҙең, үҙ күҙең менән күреп торғандай һөйләйһең, — тип башын сайҡап ҡуйҙы. — Болғар батшаһы мөғжизәләр күреп йөрөргә алъюҫыҡҡа ғына ебәрмәгән икән үҙенде, кемде ебәрергә белгән!

— Мин һиңә, батыр, был алышты үҙ күҙем менән күрмәгәнемде әйткәйнем инде, — тине болғар илсеһе. — Шулай ҙа ул бығаулы батырҙы мин үҙ күҙҙәрем менән күрҙем, ул бахырҡайға ризыҡ илтергә пәрей үҙе ебәргәйне мине. Бөтә был хәбәрҙе мин уның үҙ ауыҙынан үҙ ҡолағым менән ишеттем.

— Хәтерең былай бик шәп булғас, болғар батшаһына беҙҙең алышты ла һөйләп бирерһең инде, — тип көлөп ҡуйҙы Алдар унан.

Шул арала беҙ юха дейеү пәрейҙең мәмерйәһенә лә килеп еткәйнек инде. Ҡапыл шул саҡ ер аҫтынан ниндәйҙер дөбөр-шатыр килгән тауыш ишетелеп ҡалды. Аттарыбыҙ бынан өркөшөп алға табан барырға сығынсылай башлағас, уларҙы ҡамсылап ҡына аттарға күндерҙек. Шунда алдыбыҙҙа ер уйылып китте лә, шул урындан ялҡын ҡатыш төтөн борҡоп сыға башланы, аттарыбыҙ бынан үрә ҡарғып, алсайып торҙолар. Ут-төтөн артынса дәү үгеҙ ҙурлығындай ҡанатлы бер ғәләмәт януар атылып сыҡты. Ул кәкре суҡышлы, оҙон муйынлы, имәнес ҡош ҡиәфәтендә булып, алғы аяҡтарында ла, артҡы аяҡтарында ла оҙон кәкре тырнаҡтар тырпайып тора ине. Ҡойроғо дәү бер кеҫәртке ҡойроғондай, ҡанаттары ярғанаттыҡы һымаҡ булып, бөтә ҡорһағын иңләп алған. Был кеҫәртке ҡош шулай ер өҫтөнә атылып сығыуға, ер тишеге яңынан ябылды ла, дөбөр-шатыр тауыш та тынып ҡалды. Беҙ өсөбөҙ ҙә, быны күреп, иҫтәребеҙ китеп торҙоҡ. Ә теге ҡурҡаҡ болғар аҫтына шыр ебәреп:

— Йә, батырҙар, ҡарап ҡарайыҡ һеҙҙең ҡыйыулыҡты! — тип ҡысҡырып, ситкә тайшанды. Мин, уның был һүҙҙәренән намыҫым килеп, был имәнес йыртҡысҡа һөңгөм менән ташланғайным, һөңгөм уның муйынын үтә тишеп сыҡты ла шартлап һынды. Имәнес ҡош, ҡанаттарын елпеп, миңә ташланғас, ҡылысым менән уңлы-һуллы һелтәп, быны ҡырҡҡа тураһам да, ырғаҡ һымаҡ тырнаҡтары менән атымды ла, үҙемде лә өҙгөләргә тотондо, күлдәгем менән һарайтамдың да ҡарар ерен ҡалдырманы. Шулай ҙа атым менән үҙем һаман, бер ни булмағандай, иҫән-һау ҡалып, икеләтә ғәйрәт менән быныц сапмаған ерен ҡалдырмай, ахыр сиктә алғы бер аяғын өҙөп тә төшөрҙөм. Йыртҡыс ҡош үкереп ебәрҙе, ҡуйы төтөн борҡотоп, күҙҙән

дә юҡ булды. Мин төтөн эсенә инеп ҡарамаһам да, бер ни ҙә күренмәне. Төтөн эсенән сығып ҡараһам Байегеткә ташланған ҡот осҡос бер арыҫланды күреп ҡалдым. Ул уны һә тигәнсе ҡабып йотор һымаҡ ажғырып килһә лә, Байегет, тейен һымаҡ янтайып, бының боғаҙ төбөнә уғын атып өлгөрҙө. Арыҫлан бынан тәкмәсләп барып төшөүгә Байегет уға һөңгөһөн дә ҡаҙап, бының ҡорһағын үтәләй тишеп сығарҙы. Батыр Байегет атынан төшөп, бының инде тиреһен һыҙырып алырға ғына иткәйне, арыҫлан күҙҙән юғалды ла ҡуйҙы. Алдар, беҙҙең был алышты ситтән генә күҙәтеп торғас:

— Йә, дуҫкайҙарым, инде сират минә етте. Һеҙ ҙә миңә ҡатышмай ситтән генә ҡарап тороғоҙ, — тип һүҙен дә әйтеп бөтмәне, беҙ шунда уҡ йылкылдап торған ҡара айғырға атланған бер батырҙың сабып килгәнен күреп ҡалдыҡ. Аты ла, батыр үҙе лә ғәләмәт бер әзмәүер ҡиәфәтендә булып, аты юлбарыҫ тиреһе менән ҡапланған, ә батырҙың бөтә кейеме эре диңгеҙ балығы тәңкәләренән яһалған, башына әллә ниндәй ҡанатлы йылан һүрәтендәге төркәй кейгән, ә йыланының ауыҙынан ялҡын бөркөлөп тора.

— Эй, сая ҡыр батыры, — тип һөрәнләне ул Алдарға. — Ике иптәшеңдең ике януарҙы юҡ итеүе менән алыш бөттө тип иҫәпләйһеңме? Юҡ, батыр, һин үҙ алдыңда пәрейҙәрҙең иң көслөһө баҫып торғанын белеп ҡуй. Миңә һеҙҙең ялған пәйғәмбәрегеҙ менән мәхлүк мосолмандарығыҙ ғына түгел, бер ниндәй ҡөҙрәт көсөнөң дә ҡаршы тора алғаны юҡ. Һеҙ йә минең ҡулдан он-талҡан булаһығыҙ, йә алышып та тормай әсирлеккә биреләһегеҙ. Мин һеҙҙең икегеҙҙе көтөү көтөргә ҡушып, бисәнде үҙемә алырмын.

Алдар, уның был һүҙҙәренән һарыуы ҡайнап:

— Эй, һин иблес дошман! Һинең әсирҙәрең булғансы иң элек мин һинең, үтеңде һытып, ҡара йәнеңде йәһәннәмгә ебәреп, һаҫыҡ емтегеңде яндырып, көлөңдө күккә осорормон! — тине лә ҡаршы елеп килгән был ҡот осҡос януарға һөңгөһө менән ҡаршы сабып китте. Улар бер-береһенә һөңгөләре менән шундай ғәйрәтләнеп киҙәнештеләр, һөңгөләре, селпәрәмә килеп, ергә сәсрәгәс, икеһе лә һыбай ҡалған килеш аттары менән алсайып баҫтылар. Алдарҙың һөңгө башағы дейеүҙең һарайтаһын тишеп ингән көйө ҡаҙаулы торһа, тылсымлы муйынса арҡаһында үҙе һап-һау ҡалғас, дейеү үҙенең тау-таш ярырлыҡ һөңгөһө менән дә, ҡулы менән дә батырҙы бер нисек тә яралай алмауына аптырап, йән асыуы менән оҙон, киң ҡылысын һурып алды ла, бөтә ғәйрәтен туплап, Алдарға ташланды. Алдар ҙа уны үҙ ҡылысы менән йәшен йәшнәтеп ҡаршы алды. Шунда инде китте алыш, китте сабыш, быңдай һуғышты беҙҙең килер быуындар ҙа күрмәҫ. Ҡылысҡа ҡылыс тейеп сатырҙауҙан бөтә Ағиҙел буйы ҡаяларында шаңдау яңғырап торҙо. Пәрей, ҡылысын һәр һелтәгән һайын, Алдарҙы аты менән бергә ҡуша сабып өҙөрҙәй асырғанып сапһа ла, Алдарҙың йәүшәненән дүнгәләктәре ҡойолоп төшһә лә, ҡылысы бер нисек тә ала алмауын күреп, ул йәне сығырҙай булып ҡылана ине. Алдарҙың ҡылысы тейгәндә, пәрейҙең ҡалын һарайтаһы ҡыйылып, һуҡҡан һайын тәне яралана барҙы. Берәүһен өмөт менән айбарлыҡ нығытһа, икенсеһен сихыр көсө һаҡлай ине. Бөтә көсө-таҫыллыҡтарын һалып, икәүләп байтаҡ ҡына

айҡаша торғас, Алдар, пәрейҙе хәлдән тайҙырып, уның ҡанатлы йылан төркәйенә шундай ғәйрәт менән килтереп сапты, төркәй ҡап уртаға ярылып, уның сихыр көсө лә бөтә башланы. Дейеү пәрейе көсөнөң бөтә сере тап ошо төркәйендә булған икән. Төркәйе ярылмағанда пәрейгә яңынан-яңы көс-ғәйрәт өҫтәлеп торһа, төркәйе ярылып, ергә сәсрәгәс, ул бөтөнләй ҡулһыҙ ҡалғандай булды. Алдар, бының серен һиҙеп алғас, үҙенең ауыр ҡылысын ҡуш ҡуллап бының түбәһенә килтереп сапҡайны, дейеүҙең башы ҡап уртаға ярылып китте. Ғәләмәт ҙур кәүҙәһе гөрҫ итеп ергә барып төшкәс, аты быны ташлап, мәмерйәгә табан елдереп сығып китте. Шунда ғына мин Байегет менән бергә Алдар янына сабып килеп, уны еңеп сығыуы менән ҡотларға тотондоҡ. Ә ул, атынан төшөп, пәрейҙең ҡорал-һарайтаһын сисеп алып, беҙгә, уның емтеген яндырып, көлөн күккә осорор өсөн ҡоро утын йыйып килтерергә ҡушты. Урман шунда ғына булғас, беҙ ҡылыс менән сабып та, ҡулыбыҙ менән һындырып та, арҡан менән бәйләп әллә күпме ҡоро-һары утын килтереп ауҙарҙыҡ. Шул саҡ беҙгә ҡарай сабып килгән теге болғарҙы, уның артынса килгән әллә ни саҡлы әсирҙәр төркөмөн күрҙек. Улар, Алдарҙың аяҡтарына баштарын һалып, ҡоллоҡтан ҡотҡарғаны өсөн рәхмәттәр яуҙырырға керештеләр.

— Рәхмәттәрегеҙҙе ҡалдырып тороғоҙ, — тине ирем уларға. — Тиҙерәк бына утын йыйып килтерешегеҙ ҙә был имәнес яуызығыҙҙың көлөн күккә осорайыҡ.

Ул шулай тип һүҙен дә әйтеп бөтөрмәне, төрлөһө төрлө яҡҡа йүгерешеп, тауҙай утын йыйып килтерә һалдылар ҙа, ҙур бер усаҡ тоҡандырып, дейеү пәрейҙең емтеген шунда ауҙарып яндыра башланылар. Ул янған арала Байегет, болғар илсеһенә боролоп:

— Йә, болғар батшаһының мосафиры. Алдарҙың үҙ һүҙендә торғанын күрҙеңме инде? Ана пәрейең янып ята, шул хаҡта һин илеңә ҡайтҡас һөйләрһең. Был алышта үҙеңдең ярҙам итҡәнеңде әйтергә лә онотма, — тине.

— Эй, айбарлы батырҙар, хәҙер һеҙ минән ҡайһылай көлһәгеҙ ҙә мин бөтәһен дә күтәрергә риза. Минең ҡурҡаҡлыҡтан йәнегеҙ теләгәнсә көлөгөҙ. Һеҙ минең дә, башҡа мосолмандарҙың да ҡотҡарыусылары булдығыҙ, — тине болғар илсеһе. Алдарҙың:

— Ә һин был бисараларҙың ҡайһы мәмерйәләрҙә ятҡанын яҡшы беләһеңме? — тип һорауына ҡаршы ул:

— Бик яҡшы беләм, — тип яуапланы. Ирем:

— Белһәң, бынау дейеү үләкһәһенең көлөн күккә осорғас та, беҙҙе шунда алып барырһың, — тине.

## ҠЫРҠ ДҮРТЕНСЕ КИС

Ут өҫтөнә әллә күпме ағас ташып өйгәс, ялҡын күккә үрләп, ҡуйы төтөнө бөтә урманды ҡаплап алды. Пәрейҙең янған емтегенән яман еҫ сыға башлағас, беҙ бер уҡ атымы бер ситкә китеп ултырыштыҡ. Шул саҡ ҡапыл ниндәйҙер үҙәккә үткес бер әсе тауыш ишетелде. Был тауыштың ҡайҙан килгәнен ишетергә итеп, тирә-

яҡҡа күҙ йүгертеп сыҡтыҡ, дөрләп янған ут өҫтөндә бик дәү ике ҡарағош саңҡып йөрөгәнен күреп ҡалдыҡ.

Алдар, пәрей заттарының ырым-сихырын ишетеп тә, үҙе күреп тә белгәнлектән, һис тә икеләнмәй, был ҡоштарҙың да ошо сихырсы затынан булып, икенсе ҡиәфәткә инеп, пәрейҙең үлеменә ҡайғырышырға, хәлдәренән килһә, уны ҡотҡарышырға тип килеүҙәрен әйтте.

— Ҡарап ҡарайыҡ әле, беҙҙең уҡтар уларҙы алалмаҫ микән? — тип, ул уғын алды ла, иман уҡып, атып та ебәрҙе. Уҡ, яҙлыҡмайнитмәй, ҡоштоң нәҡ күкрәгенә барып ҡаҙалғас, ҡош уғы-ние менән бергә ут эргәһенә үк килеп төштө. Алдар, йүгереп барып, йәне лә сығып өлгөрмәгән ҡоштоң муйынын бороп өҙҙө лә, уғын һурып алып:

— Кем өсөн ҡайғырһаң, шуның менән утта ян! — тип ҡошто утҡа ырғытты.

Мин дә уғымды икенсе ҡошҡа атмаҡ булғайным, уныһы үҙ иптәшенең ҡолап төшкәнен күрҙе лә, ситкә шыҡыйып, бик бейеккә һауалап киткәс, бер ниндәй ҙә уҡ алырҙай түгел ине инде. Тик бейектән унын: «Ағайымдың ҡонон үҙең менән нәҫел-нәсәбеңдән алырмын!» — тип ҡысҡырғаны ишетелеп ҡалды. Мин, уның был ҡарғышын яманға юрап, бик шомланып ҡуйҙым. Әле булһа мин был яуыз ҡошҡа Алдар менән бер ҡатар атмай ҡалыуыма үкенеп бөтә алмайым. Ирем, минең шомланыуымды һиҙеп, былдай буш ҡарғышҡа ышанмаҫҡа кәрәк, һәр сихырҙың ҡоһоронан бигерәк ҡурҡытыуы яман, тип, төрлөсә албырғатырға тырышты. «Мөхәммәт пәйғәмбәребеҙ төрлө ен-пәрей әмәленән беҙҙе үҙе һаҡлар, юҡҡа шомланма, батыр Зөһрәм, әйҙә тиҙерәк мәмерйәләрҙә зарығып ятҡан әсирҙәрҙе ҡотҡарайыҡ», — тине, шунан теге болғарға боролоп:

— Йә, олуғ болғар батшаһының илсеһе! Әйҙә, беҙҙе мәмерйәләрҙә зар-интизар булып ятҡан бисаралар янына алып бар хәҙер, — тине. Алдарҙың болғарға «илсе» тип өндәшеүенән ул үҙе лә көлөп ҡуйғас:

— Мин һеҙҙе илсе генә булып түгел, ә тик зиндан ҡарауылсыһы булып ҡына ла бөтә мәмерйәләрҙе лә күрһәтеп сығырға шатланып ризамын, — тине. — Улар дейеү пәрейенең үҙ мәмерйәһенән әллә ни алыҫ та түгел. Тик иң элек һеҙ уларҙың ҡайһыһына барырға теләйһегеҙ? Еңгән батырҙарҙан талап алған зиннәтле кейем-ҡоралдарын күрергә пәрейҙең үҙ төйәгенәме, әллә әсирҙәр бикләнгән мәмерйәләргәме?

— Юҡ, — тине быға ҡаршы ирем. — Тотҡондарҙы ҡотҡарырға ашығайыҡ тәүҙә, ә кейем-ҡоралдар ҡасмаҫ.

— Тик мәмерйә ауыҙын ҡаплап торған ташты ҡуҙғатырға һеҙҙең көсөгөҙ етерме икән, уға пәрейҙең үҙенең генә көсө етә торғайны, — тине болғар илсеһе. Уның был һүҙҙәренән Байегет көлөп ҡуйҙы ла:

— Болғар батшаһының илсеһе булғас, бөтә болғарҙарҙан да аҡыллыраҡ булырға тейеш инең дә бит, һинән дә мәрәкә кеше юҡтыр, — тине. — Үҙең уйлап ҡара: пәрейенден көсө еткәнде, уның үҙен үлтергән батыр нисек инде мәмерйәгә юл асып инә алмаһын, ти?

— Шулай шул, хаҡ һүҙгә ни әйтерең бар, — тип болғар үҙе лә килешеп ҡуйҙы ахырҙа. — Әллә шатлығымдан, әллә ҡурҡыуымдан, үҙ күҙҙәремә үҙем дә ышанып етмәйем.

Шунан һуң беҙ аттарыбыҙға атландыҡ та мәмерйәләргә табан киттек. Юл әллә ни оҙон да булмағас, шунда уҡ дөм ҡара урман менән ҡапланған ҡаялы тау егенә барып та сыҡтыҡ. Беҙгә артабан, аттарыбыҙҙан төшөп, тар ғына һуҡмаҡ буйлап атларға кәрәк ине. Иң алдан болғар төшөп алды. Алдар уның артынан эйәрҙе. Күп тә үтмәй, һуҡмаҡ беҙҙе теге таш эргәһенә килтереп еткерҙе. Ул дәү бер дүрткел таш булып, иңе ике сажин, ҡалынлығы бер сажин самаһындай бар ине. Ирем уны тирә-яғынан ҡарап сыҡҡас:

— Байегеттең һүҙен йыҡҡансы, был таштың үҙен йығып ҡарайыҡ әле. Тик һеҙ ситкә китеп тороғоҙ, яңылыштан баҫып ҡуймаһын, — тип, уның бер ҡырыйынан тотоп алды ла яурыны менән бөтә көсөнә төртөп ебәргәйне, таш мәмерйә ауыҙынан ситкә тәгәрәп китте. Эстән шул саҡ һаҫыҡ еҫ килеп бәрелгәс, беҙ мәмерйә бер аҙ елләнгәнсе көтөп торорға булдыҡ. Алдар, шунда аптырауынан ҡулын йәйеп торған болғарға боролоп:

— Йә, ниңә шаҡ ҡаттың, әйҙә алып ин беҙҙе, — тигәс, болғар:

— Аһ! — тип ҡысҡырып уҡ ебәрҙе. — Мин бит ут менән сайырлы сыраҡ алырға ла онотҡанмын!

— Ә быға са ни уйлап торҙоң? — тигәс, ул, ғәйепле кеше һымаҡ:

— Һай, батыр! Мин һинең көс-ҡеүәтеңә һоҡланып, был ташты урынынан ҡуҙғатырыңа ла ышанмай торҙом, — тигән булды. Алдар уға:

— Ярай, ҡалғанын аҙаҡ һоҡланырһың, хәҙергә саҡмаңдан ут ҡына тоҡандыр, — тине лә, беҙгә ҡарап: — Һеҙ уға ут тоҡандырышығыҙ ҙа тиҙерәк ҡоро-һары йыйып килтерегеҙ. Юҡһа, был батша яраны һоҡланыуҙан башҡаны белмәй, — тип көлөп ҡуйҙы.

Беҙ шунда уҡ ҡоро-һары килтерҙек тә, усмалап бәйләп алғас, Алдарҙан башҡа һәр беребеҙ ут тоҡандырып, болғар илсеһе артынан мәмерйә эсенә инеп киттек. Мәмерйәнең ауыҙы башта тар ғына булһа ла, төпкәрәк ингән һайын ул киңәйә барҙы. Шунда беҙ илашҡан-ыңғырашҡан тауыштарҙы ишетеп ҡалдыҡ. Бының нилектән шулай булғанын бары һуңынан ғына белә алдыҡ: пәрей йыш ҡына шулай тотҡондарҙы ғазапларға килә торған булғас, улар беҙҙе лә пәрей килә икән тип уйлағандар. Ә пәрей уларҙың эсир төшмәйенсә, үҙе менән алышырға баҙнат иткәндәре өсөн үс алып китә торған булған.

Мин ер аҫтында ябып тотолған тотҡондарҙы ғүмеремдә тәү башлап күргәнлектән, уларға ҡарап, ҡотом осто. Бөләңгерт кенә ут яҡтыһында улар миңә, ярым-яланғас килеш, саҡ ҡына тын алып ятҡанлыҡтан, тере мәйет һымаҡ булып күренделәр. Алдар уларға башта сәләм биреп, һуңынан бар көсөнә ҡысҡырып:

— Пәрей үлтерелде, мәмерйәләге бөтә тотҡондар ҙа хәҙер ирекле! — тип һөрәнләгәйне, уның тауышы мәмерйә эсендә ҡат-ҡат яңғырап торҙо. Аяҡтарына баҫырлыҡ хәле ҡалғандары ауа-түнә килеп, Алдарҙың аяғына йығылдылар. Ул тотҡондарҙы күтәреп алып, Байегеткә уларҙы мәмерйәнән сығарырға ҡушты. Ә көтөүселәрҙең

береһенә малдарҙы ҡыуып килтереп, тиҙерәк ашарға ит бешереп ҡуйырға, пәрейҙең ҡымыҙы булһа, иң элек уларға ҡымыҙ эсерергә бойорҙо. Тотҡондарҙың йөрөй алғандары бер-береһен тапап, мәмерйәнән тиҙерәк сығырға ашыҡтылар. Ә хәлһеҙҙәрен күтәреп алып сыға башланыҡ.

Шул арала Алдар, болғар илсеһенә эйәреп, ҡул-аяҡтарынан бығаулап ҡуйылған тотҡондарҙы ҡотҡарырға ашыҡты. Улар шулай, ҡулдарына утлы сыра усмалары тотҡан килеш, эскәрәк кергән һайын, мәмерйә шомлораҡ була барҙы. Баш осонда аҫылып торған таштар бына-быма аҡтарылып төшөр ҙә улар ошо емеректәр аҫтында баҫылып ҡалыр төҫлө ине. Көн яҡтыһы һөймәҫ ярғанат, ябалаҡише төн ҡоштары, был мәмерйәлә үҙҙәренә ышанысы төйәк тапҡанлыҡтан, ут яҡтыһын күреү менән үк, пырылдашып, туп-тура утҡа ҡунып килә башлағас, Алдар бының һайын тотҡондар эргәһенә тиҙерәк барып етергә ашыҡты. Ул бигерәк тә болғар илсеһе һөйләгән теге ҡуш йөрәкле батырҙы иң элек ҡотҡарғыһы килде. Ахырҙа, улар батырҙың быгаулап ҡуйылған еренә барып еткәс, Алдар уға сәләм биргән икән, теге батыр хәлһеҙләнеп бөткән ҡулдары менән ауыр сылбырҙарын күтәреп, ҡарлыҡҡан тауыш менән:

— Минең менән бергә ғазап сигергә тағы ниндәй хаҡ мосолманды килтерҙеләр? — тип һорағас, Алдар уға:

— Ғазап сигергә түгел, ә ҡотҡарырға килдем мин һине, — тип яуап биргән дә бының сылбырҙарын өҙөп тә сығарған. Унан, батырҙың ҡулынан етәкләп, был йәһәннәм төбөнән һөйрәп килтергәндә, хәлдән тайған тотҡон, бөләңгерт кенә көн яҡтыһына ла түҙә алмай, иҫтән яҙып йығылды. Мин шунда, уларға ҡаршы ярҙамға ашығып, батырҙың өҫтөнә һыу бөркөп ебәрҙем. Бер аҙҙан ул иҫенә килеп, тәрән йоҡонан уянғандай, күҙҙәрен асты ла:

— Һеҙ кем булаһығыҙ? Мине нисек ҡотҡара алдығыҙ былай? — тип һораны.

— Аллаһы тәғәлә менән уның изге пәйғәмбәре ярҙамында ғына ҡотҡара алдыҡ беҙ һине, — тип яуап бирҙе ирем. — Тик беҙҙең кем икәнде белерҙән алда һин бер аҙ хәл йыйып ал, унан тамаҡ ялғап, шишмә һыуы менән йыуынып алғас, элекке үҙ кейемеңде кейерһең. Мин ул кейемеңде хәҙер үк табып ебәрермен. Аптырама, пәрейҙең бөтә мал-мөлкәте хәҙер минең хөкөмдә. Мин уның үҙен үлтереп, емтеген утта яндырып, көлөн күккә осорҙом, һин тыныс бул!

Алдар, уға шул һүҙҙәрен әйткәс, башҡа тотҡондарҙың да быгауын һалдырып алырға болғар илсеһе менән яңынан мәмерйә эсенә инеп китте.

Күп тә үтмәй, Алдар башҡа тотҡондарҙы ла табып, быгауҙарын һалдырып алып сығарғас, уларҙы Байегет ҡулына ҡалдырҙы ла минең менән бергә дейеү пәрейенең мәмерйәһенә китеп барҙы. Ул мәмерйәлә пәрейҙең ҡатындары ла булырға тейеш ине. Мәмерйәнең ауыҙы шаҡтай иркен булып, ул тоташ бер таштан ырып эшләнгән төҫлө ине. Ҡапыл шунда беҙгә ҡаршы оҙон ҡылыс тотҡан оҙон буйлы бер ҡарт килеп сыҡты.

— Һин әллә беҙҙе үткәрмәҫкә итмәксе булаһыңмы? — тине ирем, асыуланып. — Пәрей үҙе минең ҡулдан әжәлен тапҡанды, һин ни эш ҡылмаҡсы булаһың тағы?

— Әгәр ҙә мәгәр һин ҡыр батыр Алдарҙың үҙе булһаң, минең һиңә ҡылыс күтәрәһем юҡ, — тип яуапланы уға ҡарт. — Ә инде башҡа берәү булһаң, бында аяғың да баҫалмаҫ.

— Эйе, һин әйткән батырҙың тап үҙе булам мин, — тине Алдар.

— Туҡтап тор әле, — тип ныҡышты һаман ҡарт. — Әгәр һин Алдар батырҙың тап үҙе икән, ул саҡта һин миңә изге әүлиә биргән муйынсағыңды күрһәт тәүҙә.

Беҙ, ҡарттың был һүҙҙәренән иҫебеҙ китеп, бер аҙ өндәшмәй торғас, Алдар иҙеүен сисеп:

— Бына ул муйынса! — тип күрһәтте лә ахырҙа: — Ә һин мине ҡайҙан беләһең? — тип һораны. Ҡарт, һорауға яуап бирәһе урынға, ҡылысын атып бәрҙе лә, Алдарҙың аяғына йығылып, бер аҙ һүҙһеҙ ҡалып яткас, тубығына теҙләнеп, былай тип һүҙ башланы.

— Һай, батыр егет! — тип көрһөнөп ҡуйҙы ул тәүҙә. — Һин йондоҙло заттан булып, дейеү пәрей золомонан беҙҙе ҡотҡараһыларың тик һинең тәҡдиреңә яҙып ҡуйылған. Мин үҙем дә һеҙҙең иҫе хаҡ мосолман була тороп, бына ҡырҡ йыл буйы инде ошо мәмерйә ауыҙында, дейеү пәрейҙең йәнен ҡурсып, һаҡта торам. Әле йәш сағымда үҙ көсөмә маһайып, әллә күпме гонаһ эштәр ҡылып, был яҡтарға килеп, пәрей менән алышып ҡарағайным, ул мине әллә көсө өҫтөн булып, әллә сихыр-ырымы менән еңеп сыҡты. Ул мине, оҙаҡ ҡына ваҡыт бығаулап тотҡас, ошо ҡылысты биреп, мәмерйәһен һаҡларға ҡуйҙы. Изге пәйғәмбәребеҙҙең ярлыҡауынан башҡа, был ҡылыска бер әҙәм затының да әле ҡаршы тора алғаны юҡ. Хәҙер инде мин һиңә, айбарлы батыр, бер-ике һүҙ менән генә муйының таҡкан мәрйендәреңдең серен һөйләп бирәйем.

Бынан өс көн элек мин бер төш күрҙем. Төшөмдә, ҡып-ҡыҙыл бер тауҙың текә ҡаяһы аҫтында баҫып торам, имеш. Шунда ҡая ярығынан ҡулына шау мәрйендән генә теҙелгән оҙон тиҫбе тотҡан ап-аҡ һаҡаллы бер диндар ҡарт килеп сыҡты ла, минең эргәмә үк баҫып, ҡырҡыу тауыш менән, үҙ исемемде әйтеп, былай тине:

— Мерәс! Һинең йәш ваҡытыңда ҡылған гонаһтарың үҙең күргән ғазаптарың хаҡына, яуыз руҡка хеҙмәт итеүҙең хурлыҡтарын күтәреүең хаҡына гонаһкәрҙәр китабынан юйылып бөттө. Изге пәйғәмбәребеҙ һиңә яҡты йөҙөн бороп, үҙеңә шуны әйтергә ҡушты. Тиҙҙән һеҙҙең һәләкәт йортоғоҙға үҙенең хәләл ефете менән, тағы ла бер урман батырын эйәртеп, Алдар тигән данлыҡлы ҡыр батыры килер ҙә, залимығыҙҙы үлтереп, һеҙҙе һәләкәттән юлып алыр, тине был. Уны һин бына ошо тиҫбенән мин эшләп биргән муйынсаһынан танып белерһең. Әгәр ҙә мәгәр һин уға ҡул күтәрә торған булһаң, уның кейеменә тейеү менән, ҡылысың селпәрәмә килеп, әжәлеңде ошо батыр ҡулынан табырһың, тине лә китеп барҙы, имеш, был. Бына бөгөн килеп, төшөм өңгә әйләнде, туғанҡайҙарым. Һеҙҙең дейеү пәрейе менән алышҡаныгыҙҙы миңә килеп киткән көтөүселәрҙән ишетеп белдем. Пәрейҙең үҙен дөмөктөргәнеңде лә, уның бөркөт ҡиәфәтендәге бер туғанын атып төшөргәнеңде лә, береһен

ҡатыныңдың атып үлгөрмәй ҡалыуын да, теге икеһен яндырып, күлдәрен күккә осорғас, ер аҫтында ғазап сиккән мосолмандарҙы ҡотҡарыуығыҙҙы ла, — бөтәһен дә энәһенән ебенәсә һорашып белгәс, мин һеҙҙең бында килерегеҙҙе дүрт күҙ менән көтөп торҙом. Бигерәк тә изге әүлиә биргән муйынсаны үҙ күҙҙәрем менән күргем килде. Бына инде хәҙер күреп торам: юрағаным буш булманы. Аллаһы тәғәләнең, уның изге пәйғәмбәренең беҙҙе ҡурсалауына мең шөкөр, беҙгә хәҙер һин ни ҡылһаң да үҙ иркең, — тип Мерәс ҡарт һүҙен осланы.

## ҠЫРҠ БИШЕНСЕ КИС

Алдар, Мерәс ҡарттың һөйләгәнен тыңлап бөткәс:

— Был мәмерйәлә һинән башҡа тағы кемдәр бар? Башҡа тотҡондар юҡмы? Ә пәрейҙең үҙе менән алышҡан батырҙарҙан һалдырып алған яу кейемдәре менән ҡоралдары ҡайҙа һаҡлана? — тип һорағас, Мерәс ҡарт:

— Был мәмерйәлә, — тине ул, — пәрейҙең ҡатыны менән үҙе урлап алып ҡайтҡан бер нисә хан ҡыҙы йәшәй. Ә төркәй-һарайталар, йәүшән-кейемдәр менән һөңгө-ҡоралдары икенсе бер урында ята. Кәрәк икән, хәҙер үк бөтәһен дә күрһәтермен.

— Иң элек ҡыҙ-ҡырҡын янына барайыҡ, — тинем мин иремә.

— Ярай улайһа, — тине Алдар. — Әйҙә, Мерәс, алып бар беҙҙе шуларға.

Беҙ, күп тә үтмәй, бер дәү таш менән томалап ҡуйылған мәмерйә армыты алдында туҡтап ҡалдыҡ.

— Бына улар ошонда була инде, — тине Мерәс ҡарт, мәмерйә ауыҙын күрһәтеп. — Пәрей уны, берәй батыр менән алышыр булһа, ғәҙәттә ошо таш менән томалап сыға торғайны. Был юлы ла шулай иткән мәлғүнең! Быны ҡуҙғатырға бик ҙур көс кәрәк инде.

— Унығын һинән һорап тормабыҙ ҙа ул, — тип Алдар бер тибеп ебәргәйне, таш әллә ҡайҙа барып төштө.

Мәмерйә эсе һәр мөйөштән сыҡҡан бөләңгерт кенә нур менән яҡтыртылған. Шунлыҡтан бисә-сәсәләрҙең йөҙө лә үлек сырайы һымаҡ ине. Улар беҙҙе күргәс тә, сыр-сыу килеп, үҙәк өҙгөс тауыш менән үкһеп ебәрҙеләр. Ирем уларҙан, саҡ ҡына тыйылып тороуҙарын үтенеп:

— Арағыҙҙа хаҡ мөслимәләр бармы? — тип һорағайны, улар бөтәһе бер юлы:

— Беҙ барыбыҙ ҙа хаҡ мөслимәләр, тик пәрей тотҡонлоғона дусар булдыҡ, — тип яуап бирҙеләр.

Ирем уларҙан хәлдәрен һорашҡан арала мин, мөйөштәрҙән ниндәй яҡтылыҡ төшкәнен белгем килеп, ҡулым менән һәрмәп ҡарағайным, уларҙың ағас сөрөгө* икәнен күреп, аптырап ҡуйҙым. Шунан һуң, бисә-сәсәләр янына килеп, уларҙы ирекке сығыуҙары менән ҡотлап, ҡайһыһының пәрей ҡатыны булыуын һораным. Шунда араларынан береһе:

— Пәрей бисәһе тигән исем тағылған әсирә мин булам, — тигәс, мин уның йөҙөн төҫмөрләп ҡарарға тырыштым. Ул бер егерме биш йәштәр тирәһендәге ҡатын булып, төҫкә-башҡа һылыу ғына күренһә лә, йөҙө бик бойоҡ, ҡайғы-хәсрәт баҫҡан һымаҡ тойолдо. Ирем шул саҡ миңә:

— Һин уларҙы мәмерйәнән алып сығып һөйләшһәңсе, ә мин был ҡарт менән батырҙарға кейемдәре менән ҡоралдарын алып киләйем, — тигәс, мин пәрей бисәһен етәкләп алдым да тышҡа әйҙәй башланым. Ә ҡалған әсирҙәр, бер-береһенә тотоношоп, беҙҙең арттан эйәрҙе. Мәмерйәнән килеп сыҡһаҡ, Байегет тотҡондан ҡотолған бисара батырҙар араһында уларға болғар илсеһе менән көтөүселәр килтереп еткергән һабанан, туҫтаҡтарға ҡойоп, ҡымыҙ ҙа өләшеп ята ине. Мин уларҙан бисә-сәсәләрҙе бер ситкәрәк алып китеп, үҙемдең дә улар затынан булыуымды әйтеп, уларҙы пәрей ҡоллоғонан ҡотҡарған Алдар батырҙың кәләше булыуымды белдерҙем, шунан үҙен дейеү бисәһе тип таныҡҡан ҡатынға:

— Һинең иреңде Алдар үлтерҙе, — тигәс, ул:

— Ах, ул залимды ирең тип атамаҫ инең, исмаһам! — тип үкһеп үк ебәрҙе. — Уға мин һис көтмәгән еремдән килеп ҡаптым. Минең хан улы булған үҙемдең йәш, батыр ҙа, матур ҙа кейәүем бар ине. Уның атаһы Үзбәк хан[74] әле лә, моғайын, Иртыш үрендә йәйләп йөрөйҙөр. Мин уның улы Аҡкөбәккә йәрәшелгәйнем. Инде ҡауышабыҙ тип торған туй булаһы көндө генә әхирәттәрем менән, үҙебеҙҙең йола буйынса, атта сабышып килергә тип далаға сығып киттем. Менгән атым толпар булып, уның эйәр-өпсөнө лә, мин кейгән кейем дә тиң-тоштарымдыҡынан айырылып тора ине. Беҙ шулай дала-ла, уйнап-көлөп, аттан тартышып йөрөй торғас, төш тә етеп, инде ҡайтырға тип кенә торғанда, ҡапыл бер бүре килеп сыҡты ла, бөтәбеҙ ҙә, ҡыйҡыулашып, шул бүрене ҡыуып алып киттек. Минең толпарым бөтәһенән дә алғырыраҡ булғас, башҡаларҙан алғараҡ сығып, бүрене ҡыуып ҡына еткәйнем, ул ҡапыл күҙҙән яҙҙы ла ҡуйҙы. Мин башта уны берәй өңөнә-ниенә кереп боҫҡандыр тип, шул тирәлә сабып йөрөп, өңдө эҙләй генә башлағайным, күҙ алдымда ер ярылып китеп, унан ҡуйы төтөн борҡолоп китте. Төтөн артынса ҡанатлы йыланға менеп ултырған пәрей ҙә атылып сыҡты. Мин, ҡотом осоп, ҡулдарым менән күҙҙәремде ҡаплай һалғайным, атымдан һөйрәп тә төшөрҙөләр. Күҙҙәремде асып ҡараһам, үҙемде инде һауала ендәр осороп алып барғанын күреп, саҡ йөрәгем ярылманы. Ҡиске эңер төшөүгә инде пәрей мине бына ошо мәмерйәһенә килтереп еткерҙе. Ул, мине иртәнгәсә мәмерйә ауыҙын һаҡлап торған ҡарт ҡулына тапшырып, икенсе көндө килеүгә, минең илап ултырғанымды күрҙе. Уны күреү менән, мин оторо ҡысҡырып, сәстәремде йолҡоп, йөҙөмдө тырнап илай башланым. Ул башта мине иркәләп, ахырҙа ҡурҡытып, үҙенә кәләш булырға күндермәксе итте. Мин уға яҡын да килмәгәс, миңә яҡшылап уйлап ҡарарға бер нисә көн ваҡыт бирҙе, шул көн үткәс, йәнә килеп, үҙенең бисәһе булырға әҙер торорға ҡушып китте. Уның был һүҙҙәренән ҡотом осҡас, ул мине Мерәс ҡартҡа ҡалдырып, мине өгөтләп ҡуйырға ҡушты. Был изге күңелле ҡарт, пәрейҙең һаҡсыһы булһа ла, ул әйткәндең ки-

реһен һөйләне: аллаһы тәғәлә менән уның изге пәйғәмбәренә инанып, иман* уҡырға, бигерәк тә пәрей, килгән саҡта шуны онотмаҫҡа ҡушып, көн һайын биш ваҡыт намаҙҙы ҡалдырмаҫҡа өгөтләп ҡуйҙы. Үҙе миңә тәһәрәт яңыртып торорға һәр саҡ һыу килтереп бирҙе. Билдәләнгән көнгә пәрей йәнә килеп:

— Йә, аҡылыңа килдеңме инде, минең кәләшем булырға ризаһыңмы? — тигәс, мин, өҙә ҡырҡып:

— Юҡ, һиңә кәләш булғансы, һинең ҡулыңдан үлеүем артыҡ. Изге пәйғәмбәребеҙҙең был нахаҡлыҡҡа юл ҡуймаҫына минең иманым камил, — тинем.

Ул минең был һүҙҙәремдән ҡаһҡаһләп көлдө лә:

— Мин һинең пәйғәмбәреңдән нишләргә икәнен һорап тормам: яҡшылыҡ менән бирелмәһәң, көслөк менән алам! — тип ҡосаҡлай ғына башлағайны, ҡапыл яраланған айыу һымаҡ үкереп ебәрҙе лә минән ситкә үк һикереп китте. Үҙе шунда илереп-баҡырып: — Аһ, һин, мәхлүк мөслимә, ҡайҙан шулай сағырға өйрәндең? Тәнең уттан яралғанмы әллә һинең?— тип үрле-ҡырлы һикерәндәргә кереште. Мин быға, үҙем дә аптырап, ни тип әйтергә лә белмәнем. Бер аҙҙан һуң ул миңә йәнә ҡағылғайны, тағы шулай үкереп ебәреп, һикереп китте. Ҡағылған һайын шулай ҡаҡсып торғас, йән асыуынан аллаһы тәғәлә менән изге пәйғәмбәребеҙгә ҡәһәр әйтеп, сығып тайҙы. Яңғыҙ ҡалғас, уның миңә көслөк менән ҡул һалыуынан ниндәй ҡөҙрәт тыйып ҡалғанын күпме генә уйлап ҡараһам да, быны серенә төшөнә алмай, йөҙәнем. Изге күнелле Мерәс ҡартым хәлемде белешергә килгәс, минең тыныс ҡына ултырыуымды күреп, яуыз пәрейҙең нилектән шулай үкереп ебәреүен һораны, мин бөтәһен дә бәйнә-бәйнә һөйләп бирҙем. Ә ул, башын сайҡап:

— Бәхетең бар икән, Гөлбикә ҡыҙым, — тип ҡуйҙы. — Күрәһең, изге пәйғәмбәребеҙ үҙе ҡурсалай һине. Шуны әйт әле миңә: һин берәй дәғүәт-фәлән тағып йөрөмәйһеңме? — тигәс, мин уға, уйлап та тормай:

— Йөрөтәм, — тинем. Ул:

— Ана шул һине һаҡлап ҡала ла инде, — тине.

— Улай булғас, ниңә пәрей урлаған саҡта уҡ мине һаҡлап ҡалмаған? — тип һорағайным, ҡартым былай тип төшөндөрөп бирҙе:

— Ул саҡта пәрей һине әсирлеккә генә төшөргән. Аллаһы тәғәлә, язаһын ебәрһә лә, әҙәм балаһын һәләк итмәй. Ә бына пәрейгә бирелергә риза булһаң, шунда уҡ һәләк тә булыр инең. Был һәләкәттән һине дәғүәтең генә ҡотҡарып ҡалған. Алла хаҡына уны ташлай күрмә, ҡыҙым, — тигәс, уның был һүҙҙәренән эсемә йылы кереп киткәндәй булды. Шунда әсәйемдең был дәғүәтте миңә биргән саҡта әйткән һүҙҙәрен иҫкә төшөрҙөм. «Уны миңә бер изге әүлиә биргәйне, кем дә кем был доғалыҡты ташламай йөрөтә, уға бер ниндәй ҙә ҡара йөрәктең ҡулы ҡағыла алмаҫ тип әйтте», — тигәйне әсәйем.

Ысынлап та, был шулай булып сыҡты: бер йыл буйы мин пәрей тотҡонлоғонда ғазап сикһәм дә, ул көслөк һалып, миңә бер ни ҙә ҡыла алманы. Ә үҙ иркем менән буй биреүҙе мин башыма ла һыйҙыра алмаҫ инем. Ул мине күпме генә өгөтләп тә, ҡурҡытып та

ҡарамаһын, бөтә тырышлығы бушҡа ғына булды. Ахыр сиктә ул миңә мәмерйәнән сығып йөрөргә ирек ҡуйҙы, үҙенең йылҡы өйөрҙәрен ҡарап йөрөргә иң яҡшы аттарын да йәлләмәй ине. Унын шулай мине үҙ иркемә ҡуйыуын күреп, бөтә әсирҙәр ҙә мине унын бисәһе, тип йөрөтә башланылар. Бер ҡабат мин ҡасып китергә лә тырышып ҡарағайным, тик унын еренән сығып китә алмайынса, һәр саҡ ошо мәмерйә ауыҙына килеп юлыҡтым. Мин үҙемдең аптырауымды Мерәс ҡартҡа һөйләп биргәс, ул быны миңә былай тип аңлатты: пәрей биләгән бөтә ер сихырланған булып, уға кереп булһа ла, сығып китеп булмай икән. Әгәр ҙә мәгәр изге пәйғәмбәребеҙ һеҙҙе беҙгә ярҙамға ебәрмәгән булһа, башҡа тотҡондар һымаҡ, мин дә шунда әжәлемде тапҡан булыр инем, — тип Гөлбикә һүҙен бөтөрҙө.

## ҠЫРҠ АЛТЫНСЫ КИС

Гөлбикә шулай бында үҙенең нисек килеп эләккәнен һөйләп биргәс, мин унын пәрей бисәһе булмауына һөйөнөп ҡуйҙым.

— Ә пәрейҙең үҙ бисәләре юҡ инеме һуң? — тип һораным.

— Бар ине, бөрәү түгел, икәү булһа ла, бала тапмағас, пәрей уларҙың икеһен дә үлтерҙе, — тине Гөлбикә. Мин унан тағы:

— Ә был әхирәттәреңдең бөтәһен дә пәрей үҙе урлап килтерҙеме? — тип һорағас, ул:

— Шулай булмай ни, кем инде уға үҙе теләп тотҡон булһын, — тип ҡуйҙы. — Ҡайһы берен кейәүҙәренән, ҡайһыларын аталары йортонан урлап алып килтергән. Бәғзе берәүҙәрен әле яңы ғына тотоп килтерҙе.

Мин шунда, әсирәләр араһында һылыулығы менән айырылып торған ике ҡыҙҙы күреп, уларҙың ҡайҙан булыуын, аталарының кем икәнлеген һорағас, береһе:

— Мин үҙем Алтын Урҙа иленән, Иҙел тамағының үрендә йәйләгән нуғай бейенең ҡыҙы булам[75]. Исемем Гөлбоҫтан ине, — тигән булды. — Мине дейеү пәрейе әсәйем менән туғандарыбыҙға ҡунаҡҡа китеп барған ерҙән алып китте. Ул беҙгә ҡоралды батыр ҡиәфәтендә күренеп, ярты юлда килеп туҡтатты ла көслөк менән мине үҙенә биреүҙәрен даулаша башланы. Беҙҙе яҡшы ҡоралланған ышанысты һигеҙ мырҙабыҙ* оҙата килгәнлектән, әсәйем быға тәүҙә көлөп кенә ҡуйҙы. Күрәһең, мырҙаларыбыҙ бынын ауыҙын тиҙ яптырырҙар тип уйлағандыр инде. Уларҙың Ҡөсөк исемлеһе, бынын шундай тупһыҙ ҡыланыуына асыуы килеп, битенә ҡамсыһы менән һыҙырып ебәрҙе. Шул бер һыҙырыу унын үҙен дә һәләк итте. Пәрей, ҡотороноп килеп, унын яғаһынан бороп алды ла бөтә көсөнә ергә күтәреп бәргәйне, ул шунда уҡ йән дә бирҙе. Ҡалған етеһе уға уҡтарын атып, атҡан бер уҡтары яҙлыҡмай тейеп торһа ла, унын һарайтаһынан, ташҡа тейгәндәй, ҡаҡлығып ҡына торҙо. Ҡыйыу мырҙалар ҡылыстарын һурып алһалар ҙа, ҡылыстары ла унын йәүшән кейеменә тейеүҙән селпәрәмә килде. Ә пәрей шунда суйын суҡмарын алып, бер-ике һелтәнеү менән уларҙың алтыһын үлтерә һуҡты ла етенсеһенә:

— Бар, үҙеңдең Алтын Урҙаңа ҡайтып, был ҡыҙҙы иң көслө пәрей үҙенә алып китте, тип әйт, — тине. Шунан ул мине ҡосағына алған әсәйемде төртөп ебәрҙе лә, ҡошсоғон яҫҡыған ҡарсыға һымаҡ, мине әсәм ҡулынан тартып алып, сабып та сығып китте. Мин, иҫемде юғалтҡанлыҡтан, уның ерҙәнме, күктәнме илткәнлеген дә әйтә алмайым. Мин иҫемә килгәндә, үҙемде бына ошо ҡыҙ-ҡырҡын араһында күрҙем. Ҡурҡышымдан да, ҡайғымдан да ауырыуға һабышып киткәс, изге күңелле Гөлбикә лә, башҡа әхирәттәрем дә минең тере ҡалырыма өмөт өҙөп бөткәйнеләр инде. Ярай әле, аллаға шөкөр, изге пәйғәмбәребеҙ миңә ошо сирен тағып, яуыз пәрейҙән намыҫымды һаҡлап ҡалды. Ә һеҙҙең килеп ҡотҡарыуығыҙ өсөн, аллаһы тәғәлә менән Мөхәммәт пәйғәмбәребеҙгә мең шөкөр инде, — тип ҡуйҙы Гөлбоҫтан.

Уның һөйләгәнен дә тыңлап бөткәс, мин Гөлбоҫтан артында торған өсөнсө ҡыҙҙың да ҡайҙан булыуын һораным. Был ҡыҙ, тал сыбыҡтай, буй-һынға бик һомғол булып, теҙенә төшөп торған ҡара толомо һымаҡ, ҡаштары ла, ҡарлуғас ҡанаты төҫлө, ҡап-ҡара, оҙон керпектәре аша һеҙәләп мөлдөрәп торған ҙур күҙҙәре лә шулай уҡ сөм-ҡара ине. Бит алмаларында саҡ ҡына ҡыҙыллыҡ та тороп ҡалған. Ул миңә яуап бирергә тип ауыҙын ғына асҡайны, атылып сыҡҡан күҙ йәштәренә быуылып, һүҙен дә һөйләй алмай торҙо. Унан, күҙ йәштәрен бармаҡтары менән һыпырып:

— Донъялағы иң бәхетһеҙ ҡыҙ миндер инде ул, — тип ҡуйҙы ла үҙенең башынан үткәндәрен былай тип һөйләй башланы. — Мин бер бик бай төркмән мырҙаһының ҡыҙы булғанмын. Тик атайымдан да, әсәйемдән дә сабый саҡта уҡ үкһеҙ ҡалып, мине бер апайым бағып үҫтергән. Балалыҡ йылдарымды мин, бер ни ҙә белмәй, бер ни ҙә теләмәй, нисек етте шулай үткәрҙем. Күрәһең, үтә талымһыҙ булғанмындыр инде. Тик үҫеп, буйға етә башлағас ҡына, мине бик һылыу итеп күрә башланылар. Ата-әсәмдән миңә бай мираҫ ҡалғанлығын да белгәс, мине төрлө яҡтан бик күп кейәүҙәр ҡоҙалап йөҙәтә башлағайны, апайым быға риза булмай, һәр береһен кире ҡағып торҙо. Ул бөтә мал-мөлкәтте үҙенә ҡалдырырға теләп, тик минең үҙемде генә алырға риза булған кейәү эҙләй ине. Ә бындай кейәү табылмағас, үҙебеҙҙең батыр егеттәр араһында ла мине буш ҡул менән кәләш итерлек күңелем ятырҙай егет осраманы. Шунан һуң мин, бер кемгә лә ылыҡмай, бөтәһенә лә ҡул ғына һелтәп ҡуйҙым. Шулай бер ярты йыл самаһы үткәс, көндәрҙән бер көндө беҙҙең йәйләүгә бай бер ҡарағалпаҡ килеп төштө. Уның иле беҙҙең йәйләүҙәрҙән бер ун көнлөк юлдағы Арал диңгеҙенә яҡын ерҙә икән. Был ҡунаҡтың беҙҙең йәйләүгә ниңә килгәнен белмәһәм дә, беҙҙең бер алыҫ туғаныбыҙға барып йөрөгәнен мин йыш ҡына күрә торғайным. Һуңынан ул апайыма ла килгеләй башланы. Шулай бер нисә көн үткәс, мин бер ни һиҙмәһәм дә, апайым:

— Был ҡарағалпаҡтың затлы байы һиңә оҡшаймы? — тип һорай ҡуйҙы. Мин уны-быны уйлап тормай:

— Шайтан нисек оҡшаһа, ул да миңә шулай оҡшай! — тип көлөп ҡуйҙым.

— Нисек инде шайтан төҫлө булһын ул? — тип апайым асыуланып уҡ әйткәйне, мин һаман үҙемдекендә торҙом.

— Шайтан булмай, кем булһын ул? — тинем. — Унан да ҡарараҡ, унан да имәнесерәк кем бар тағы? Етмәһә, үҙе ҡарт, үҙе тынҡыш!

— Ә һин беләһеңме, Таңһылыу, ул бит һине ҡоҙалап йөрөй, — тине апайым. — Мин бит һине уға бирергә һөйләштем. Үҙ бәхетеңә үҙең ҡаршы төшмә: ырыуының иң бай, иң арҙаҡлы кешеһе ул, — тигәс, апайымдың был һүҙҙәренән яман нык хәтерем ҡалып, уға ғүмерҙә әйтмәгән әсе һүҙҙәр әйтеп:

— Һин минең игәт-мөлкәтемде үҙеңә ҡалдырырға тырышып, күңелем ятырҙай кейәүҙәрҙе һанға һуҡмай, мине бәхетһеҙ иттең, игәтемдән игелек күрмә, — тинем. Минең был тура әйткән һүҙҙәремдән ул, сығырынан сығып, оҙон сәс толомдарымдан эләктереп алды ла хәле бөткәнсе мине бик ҡаты туҡманы. Шулай ҙа мин әйткән һүҙемдән ҡайтманым. — Бындай ғәрип иргә сыҡҡансы, үлгәнем артыҡ, — тинем. Нисек кенә ҡарышһам да, апайымдың һүҙе һүҙ булды: мине уға бирергә һүҙ беркетеп ҡуйҙылар.

Бер-ике көн үткәс, мин шулай бер кисте тирмәлә япа-яңғыҙым ҡул эше менән ултырғанда, апайым ошо Морат исемле ҡарағалпаҡты, мулла менән тағы ике ҡартты эйәртеп ҡайтып керҙе лә, уларҙы урынға ултыртып, мине Моратҡа биргәнлеген әйтеп, муллаға никах уҡырға ла ҡушты. Был һүҙҙәр минең йөрәккә уҡ һымаҡ килеп ҡаҙалды. Шунда, янъял сығарып, тирмәнән йүгереп сығып китергә иткәндә генә, апайым менән теге ике ҡарт мине тотоп алдылар ҙа, күршеләр тауышымды ишетмәһен өсөн, ауыҙымды бәйләп, тирмәнән сығарҙылар. Унан мине дөйә үркәсенә бәйләп һалдылар ҙа, Морат үҙе лә менеп ултырғас, дөйә елдереп сығып та китте. Дөйә йәйләүҙе сыҡҡансы шундай шәп барҙы, күҙ асып йомғансы беҙ йәйләү осонда Моратты көтөп торған иптәштәре янына килеп тә еттек. Улар бер унлап кеше ине. Уларҙың ҡайһыһы атҡа атланған, ҡайһыһы йөк артмаҡлаған дөйәләргә ултырып алғайны. Шунда минең бәйҙәремде сисеп, Морат, ҡаршылашып, тауыш сығара ҡалһам, яңынан бәйләп ҡуясағын әйткәс, мин уның ҡулында буйһонмай ҙа булдыра алманым. Ә ул мине, иркәләп, үҙ илендә минең иң бай, иң күренекле хужабикә буласағымды әйтте. Унан, никах уҡылып бөтмәгәнлектән, туйҙы ҡайтҡас ҡына үткәрергә булғанын һөйләгәс, эсемә ниндәйҙер йылы кергәндәй булды. Былай булғас, Морат ҡулынан ҡасып ҡотолорға ла берәй әмәл сығып ҡуйыуы бар, тигән өмөт уянды. Шунан, мин тынысланып ҡалғандай булғас, ул мине ултырған дөйәмдә яңғыҙ ҡалдырып, үҙе икенсеһенә ултырҙы ла, ярты төнгәсә барып, аҙаҡ ҡуналҡаға туҡтарға булдыҡ.

## ҠЫРҠ ЕТЕНСЕ КИС

Икенсе көндө, ҡомло ерҙәрҙе аша сығырға булғас, яй ғына барҙыҡ. Ҡарағалпаҡ, минең тыныс килеүемде күреп, бик шатланып китте: миңә төрлө яғымлы һүҙҙәр һөйләне, уларҙың ҡайһы берҙә-

ренә мин, башымды эйгән килеш, бер-ике һүҙ менән генә яуап биргеләп барҙым. Юлда шулай бер нигә лә осрамай килә торғас, алыҫтан инде ялтырап Һырдаръя ла күҙгә салынғайны, ҡапыл шул саҡ һауала бер утлы шар күренде. Ул төньяҡтан туп-тура беҙгә табан осоп килде лә, баш особоҙға еткәс кенә, йәшен атҡандағылай тауыш сығарып, шартлап ярылды. Морат менән уның юлдаштары ҡайһыһы атынан, ҡайһыһы дөйәһенән ергә ауҙылар. Тик мин генә, нисектер, аумайынса ултырып ҡалдым. Күҙ алдыма ҡапыл ҡанатлы ҡара толпарға атланған баштан-аяҡ ҡоралды бер батыр килеп баҫты.

— Ҡыҙыҡай, — тине ул, миңә өндәшеп, — мин һине был ҡарағалпаҡ ҡулынан ҡотҡарырға булдым, һиңә иш түгел ул.

Мин был һүҙҙәрҙе ишеткәс, дөйәмдән ҡолап төшмәһәм дә, ҡурҡышымдан ни тип әйтергә лә белмәй, шаҡ ҡатып ҡалдым. Шул арала был ҡанатлы толпар менгән батыр мине ҡурсаҡ һымаҡ ҡына итеп күтәреп алды ла, үҙ артына менгәштереп ултыртҡас, Морат менән уның юлдаштарына:

— Эй, һеҙ үҙегеҙгә башҡа ҡыҙ эҙләгеҙ, ә быныһы миңә кәрәк! — тип ҡысҡырып сабып сығып та китте. Мин, ҡолап төшмәҫ өсөн, уның билбауына сат йәбешеп алдым, ҡулым ойоғанын да тоймай, күккә күтәрелеү менән үк, иҫтән яҙҙым. Беҙ шулай күпме осҡанбыҙҙыр, уныһын әйтә алмайым, тик бынан өс көн элек мин һеҙ килеп тапҡан ошо мәмерйәлә инем инде. Был күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән юлдан бөтөнләй хәлдән тайғайным, тик бынау апайҙар ғына мине иҫемә килтерҙе. Улар менән әле танышып та өлгөрә алмағас, мине ҡарағандары өсөн рәхмәт әйтергәме, ләғнәт уҡырғамы икәнен дә белмәнем: бер бәләнән икенсе бәләгә эләккәнеңә ни әйтәһең инде! Хәҙер бына уларға ла, һеҙгә лә, ҡотҡарыусыларым, изге пәйғәмбәребеҙ иҫәнлек-һаулыҡ биреп, әжерен ҡайтарһын инде. Башҡаса былдай хәлгә ҡалыуҙан хоҙай үҙе һаҡлаһын, — тип Таңһылыу һүҙен бөтөрҙө.

Таңһылыуҙың күргәндәрен тыңлағас, минең башҡаларҙың да зат-ырыуын белгем килеп, һәр береһенән хәл-әхүәлен һораша башлағайным, араларынан бер иң олорағы күҙ йәштәре менән:

— Беҙҙең ни күргәндәрҙе һорашып та торма, батыр. Беҙ бөтәбеҙ ҙә бәхетһеҙ әсирәләр, — тип ҡуйҙы. — Изге пәйғәмбәребеҙҙең ҡотҡарырына ышанып, беҙ әллә ни ныҡлыҡ та күрһәтә алманыҡ. Ҡайһы беребеҙ уның ҡыҙыҡтырыуына алданып, бәғзеләребеҙ янауҙарынан ҡурҡып бирелдек уға. Беҙҙе һөйләтеп, оятыбыҙҙы астырма инде. Ярай әле шуныһына шөкөр: унан балаға ҡалманыҡ, беҙҙән бала булмағас, үҙенең ерәнгес тоҡомон һаҡлар өсөн, ул яңынан-яңы ҡыҙҙарҙы урлап килтерә торҙо...

Мин уның һөйләгәнен тыңлап, хәлемдән килгән тиклем, уларҙы был тиклем хафаланыуҙан тыйырға тырыштым. Тотҡон хәлдәрендә бындай яуыз йәнгә ҡаршы тора алмау зина ҡылыуға һаналмаҫ, ирекһеҙҙән килгән был гонаһтарын хоҙай үҙе ярлыҡар, тинем. Улар менән шулай һөйләшеп торған арала, ирем менән Мерәс ҡарт та килеп еткәс, мин унан тотҡондарға ашарға-эсергә килтереүен һораным. Алдар шул саҡ миңә, бер аҙ тамаҡ ялғап, үҙ кейемдәрен ке-

йеп, пәрей йәшергән ҡоралдарын тағып алған батырҙарҙы күрһәтмәксе булғас, мин уның менән батырҙар ултырышҡан ҡорға барһам, уларҙың асыҡ сырайҙарын күреп, үҙемдең дә йөҙөм яҡтырып китте. Алдар мине ҡара һаҡаллы бер батыр янына килтереп баҫтырғас, уның йөҙө минә таныш һымағыраҡ күренде. Буйға ла ул башҡаларҙан ҙурыраҡ булып, төҫ-башына ҡарағанда, уға бер ҡырҡ йәштән дә артығын бирерлек түгел ине.

— Бына кемде ҡотҡарырға яҙған беҙгә, һөйөклө Зөһрәкәйем, — тине Алдар минә. — Был бит беҙҙе һыйлап ебәргән Муйнаҡ дуҫыбыҙҙың бер туғаны, дейеүҙе үлтерә яҙған теге көслө батырҙың үҙе, Ҡарабай була! Ул дейеүҙең ике сихырын да юҡҡа сығарып, дейеү өсөнсө ҡиәфәткә кереп алыша башлағас, Ҡарабайҙың ҡоралы һынып китеп кенә дошманы еңеп сыҡҡан уны.

Мин шунда, Ҡарабайға ҡулымды биреп, уны ирекә сығыуы менән ҡотлағайным, ул да, урынынан тора һалып, ҡулымды нығытып ҡыҫты ла:

— Беҙҙе килеп ҡотҡарғанығыҙҙың сауабын* күрегеҙ инде, аллаһы тәғәлә быны буш ҡалдырмаҫ, — тип башҡаларға күҙ йөрөтөп сыҡты. — Бына, күрәһегеҙме, улар ҙа ҡайһылай һеҙгә рәхмәт уҡып бөтә алмай, алланан уның һеҙҙе бөтә яуызлыҡтан һаҡлап ҡалыуын теләйҙәр.

Мин уға, ултырып хәл йыйырға кәрәк, тинем дә, үҙем ситкәрәк китеп, башҡаларҙың йөҙөнә күҙ йөрөтөп сыҡтым, шунда күҙем кәрмәзин елән кейгән бер батырға төштө. Уның һул яғында һарайтаһы, уң яғында уҡ-һаҙағы, ә алдында ҡылысы ята ине. Ул бик айбарлы күренһә лә, бөтә ҡайғы-хәсрәте йөҙөнә сығып, әле һаман үҙенең ирекә сыҡҡанына ышанып етмәй, үҙенең ҡорал-ҡорамалына екһенеп ҡарағандай булып тойолдо.

Шул саҡ мин иремдән:

— Был батырҙың исеме кем була, ул ҡайһылай килеп ҡапҡан бында? — тип һорағайным, Алдар минә:

— Мин унан һорашып ҡарағайным, — ул ғәжәп бер кеше! Ирекә сыҡҡанына ла, ҡоралдарын ҡайтарып биргәнгә лә ҡыуанмай, үҙ кәләшенең исемен телгә алып: «Һөйөклө Гөлбикәмде тапмағас, нимәгә минә был ирек тә был ҡорал!» — тип кенә ҡуйҙы.

— Аһ, — тип ҡуйҙым мин шунда. — Уға бит мин һөйөнөслө хәбәр әйтә алам! Исеме нисек әле уның?

Ирем минә шунда уның исемен бөтәһенә лә ишетелерлек итеп:

— Аҡкөбәк, — тип әйткәс, батыр, үҙ исемен ишетеп, башын бороп ҡараны, мин унан:

— Һин аҙыраҡ хәл йыя алдыңмы? Әгәр һиңә берәй һөйөнөслө хәбәр әйтһәм, ҡүтәрә алырһыңмы? — тип һораным. Ул, минә күҙ тултырып ҡарап алғас:

— Мин һинең, батыр, кем икәнеңде лә белмәйем бит, кем булаһың һуң? — тип ҡуйҙы. Ә мин Алдарҙың иптәше булыуымды әйткәс, ул: — Һеҙ ғазап сиккән мосолмандарҙы әсирлектән ҡотҡарып, яҡшы хәбәр килтергәнегеҙҙе әйттегеҙ бит инде, — тине.

— Ә минең һиңә айырыуса хәбәрем бар, — тигәс, ул:

— Мин инде башҡаса һөйөнөслө хәбәр ишетә алмам. Һөйөклө Гөлбикәм һәләк булғас, минең башҡа бер һөйөнөсөм дә ҡалманы, — тип көрһөнөп ҡуйҙы.

— Әгәр мин уның тере икәнлеген әйтһәм, ни ҡылыр инең? — тигәс, ул һикереп торҙо ла, ҡылысын һурып алып, ярһыуын да тыя алмай:

— Әйт дөрөҫөн: ҡайҙа ул? Тиҙерәк ҡотҡарайыҡ уны! — тип ҡысҡырып ебәрҙе. Мин, уны ҡулынан алып:

—Тыныслан, батыр, Гөлбикәң инде иректә, тик һинең бында икәнлегеңде генә белмәй әле, — тигәс, ул, башын аҫҡа эйеп:

— Ул пәрей ҡулында булған улайһа, — тип ултырған еренә кире сүкте.

— Ишетһен ҡолағың, Аҡкөбәк: кәләшең һинең пәрей ҡулында булһа ла, ул, хур ҡыҙҙары һымаҡ уҡ, ғиффәтле*! Изге пәйғәмбәребеҙ уны пәрей көсләүенән һаҡлап алып ҡалған, ул үҙ дошманына буй бирмәгән. Иҫеңә кил, батыр, көс-хәлеңде йый ҙа, әйҙә, мин һиңә уның үҙен күрһәтәйем, — тинем.

Был һүҙҙәрҙе ишетеп торған Алдар ҙа, хайран ҡалып:

— Һин ысынлап та уға иң һөйөнөслө хәбәр әйттең, Зөһрәкәйем! Әйҙә, донъялағы иң һөйөклөһө янына алып бар, уны үҙ күҙҙәре менән күрһен, — тине. Шунан ул үҙе үк аяғына саҡ баҫып торған Аҡкөбәкте ҡултыҡлап алды. Ә мин, улар алдынан барып, тотҡон ҡатын-ҡыҙҙар янына етер-етмәҫтән, уларҙы туҡтаттым да Гөлбикәне килтергәнсе көтөп торорға ҡуштым. Шунан, Гөлбикә эргәһенә килеп:

— Ғиффәтлегеңә тап төшөрмәгән өсөн хоҙай үҙеңде лә ярлыҡап, кейәүеңде лә һиңә кире ҡайтара. Әйҙә, ана ул Алдар менән бергә һине көтөп тора, — тип әйтеп тә бөтмәнем, ул, уйлап та тормай, йүгереп сығып та китте. Мин уны йүнләп күреп тә өлгөрмәнем, ул инде Аҡкөбәк ҡосағында ине. Улар, бер-береһенә һыйынып бөтә алмай, шатлыҡтарынан илауҙан башҡа бер ни ҙә белмәйҙәр ине. Ә беҙ, ирем менән икәүләп, уларҙың бәхетенә ҡыуанып бөтә алманыҡ.

## ҠЫРҠ ҺИГЕҘЕНСЕ ҠИС

Аҡкөбәк менән Гөлбикә, беҙҙең уларға ҡыуанып ҡарап торғанды күргәс, Аҡкөбәк иремде, Гөлбикә мине ҡосаҡлап, беҙ байтаҡ ваҡыт шулай уларҙың ҡулынан ысҡына алмай торҙоҡ. Шул саҡ беҙҙең янға Байегет менән Ҡарабай килеп етеп, икеһе лә:

— Был ни хәл? — тип аптырап ҡалғас, Алдар уларға көтөлмәгән осрашыу шатлығын аңлатып бирҙе.

— Аҡкөбәк, — тине ул, — бында үҙенең биш йыл буйы үлгән тип йөрөгән кәләшен килеп тапты!

Муйнаҡ туғаны менән урман батыры, Аҡкөбәктең нисек итеп улай кәләшен юғалтҡанын белергә теләп, унан был хаҡта һөйләп биреүен һорағайнылар, ирем уларға, ит бешеп сыҡҡансы, сабыр итеп торорға кәңәш бирҙе. Үҙебеҙ ҙә ярайһы уҡ асыҡҡайныҡ инде.

һәр нәмәне төпсөнөп белергә яратҡан Ҡарабай менән Байегет үҙҙәре лә бик хуп күрҙеләр. Байегет тиҙерәк ашарға әҙерләшергә лә тотондо. Ә Мерәс ҡарт менән болғар илсеһенә, башҡа көтөүселәргә дейеү төйәгенән алынған затлы балаҫтарҙы йәйеп сығырға ла шуларға тиҙерәк ит килтереп ултыртырға ҡушылды...

Хикәйәтенең ошо еренә килеп еткәс, Зөһрә үҙе лә уны йотлоғоп тыңлап ултырған ике ҡунағына:

— Һеҙгә лә ашап алырға ваҡыт инде! — тине. Мин һөйләүем менән албырғатып, һеҙҙе һыйларға ла онотоп киткәнмен дә баһа.

— Дөрөҫ, хикәйәтең ғәжәп һәйбәт, тыңлап туйғыһыҙ булһа ла, ашап алыу ҙа яҙыҡ булмаҫ ине, — тип мәрәкәләп ҡуя йор һүҙле Йылҡыбай. — Юҡһа көн төшлөктән дә әллә ҡасан ауып киткән.

— Ә минең хатта ашағым да килмәй, — тигән була Аллабирҙе. — Мин Зөһрәнең һөйләгәнен өс көн, өс төн буйы ашамай-эсмәй тыңларға ла әҙермен.

— Кейәү кеше шулай булырға тейеш тә инде. Ә минең, ысынлап та, ашағым килә. Һүҙгә әүрәп, берәй туҫтаҡ ҡымыҙ эсергә лә онотҡанмын, — тип Йылҡыбай алдындағы алдырын эсеп ҡуя.

Былар шулай үҙ-ара һүҙ ҡушҡансы, Зөһрә ашарға ла килтереп ултырта. Ғәҙәтенсә, быларға ҡул йыуырға һыу ҡойоп, оҙон таҫтамалын тоттора, шунан ашап алырға саҡыра.

Йылҡыбай ике ус бишбармаҡты һоғоноп ала ла:

— Ай-һай, Зөһрә, һин һөйләгән теге батырҙар һыйы был тиклем үк телеңде йоторлоҡ булмағандыр, — тип ҡуя.

— Унан татлыраҡ һыйҙың булғанын иҫләмәйем әле мин, — тип көрһөнөп ала Зөһрә. — Аш бит эйәһе менән татлы. Ә ул саҡта мин донъямдың күрке булған батыр Алдарым эргәһендә ултыра инем.

— Ай-һай, был һүҙең кейәү күңелен ҡырмаҫмы икән, — ти шаян Йылҡыбай, Зөһрәнең һүҙен элеп алып.

— Һүҙем оҡшаймы, оҡшамаймы, ялғанлағым килмәй, күҙенә ҡарап әйтәм, — ти быға ҡаршы Зөһрә. — Ирем булырға яҙған икән, мин уға итәғәтле булырмын. Иллә-мәгәр Алдарҙы яратҡан кеүек ярата алмам. Ул үҙе лә быны талап итмәҫтер.

— Эйе, Зөһрә, әйткән һүҙең бик раҫ. Яҙмыштан уҙмыш юҡ: беҙ бит үҙебеҙ теләгәндән түгел, тәҡдиребеҙгә шулай яҙғандан ҡушылабыҙ. Үҙең белгәнеңсә, мин бер кемгә лә өйләнергә иҫәп тотмай инем, был хаҡта уйлағаным да булманы. Көмөш һарайта кейгән батыр миңә ырыуҙаштарымдың кәңәшен тоторға ҡушҡас, изге әүлиә лә был кәңәште нығытып ҡуйғас, мин һиңә килмәй булдыра алманым. Һин үҙең дә, Зөһрә, уның хаҡында әйтеп ҡуйҙың бит, — ти Аллабирҙе.

— Эйе, — тип раҫлай Зөһрә. — Алдарҙан ҡалып үткәргән ҡайғылы көндәремдә ул мине гел йыуатып килде, һин икенсе тапҡыр никахланырһың, һине алдағы көнөңдә ғәжәп бер кәрәмәтле хәл* көтә, тип һөйләр булды, тик быының ҡасан булырын әйтмәй ҡалдырҙы.

— Бәй, беҙ тағы бер пәрейҙе дөмөктөрһәк, шул үҙе бер кәрәмәт булмаҫмы? — тип ҡуя шунда Йылҡыбай. — Шунһыҙ Зөһрә Аллабирҙегә ҡул да бирмәҫ!

— Эйе, был ҙур эш булыр ине, — ти Зөһрә. — Ул саҡта һеҙҙең бөтә ете ырыуға ла данығыҙ таралыр. Шулай ҙа әүлиә миңә быны юраманы, мин күпме генә төпсөнөп ҡараһам да, ул ниҙелер сер итеп ҡалдырҙы, был хаҡта һорашырға ла ҡушманы. Әгәр ҙә мәгәр һеҙ минең тағы бер дошманымды дөмөктөрһәгеҙ, мин, һис шикһеҙ, Аллабирҙегә сығасаҡмын.

Зөһрәнең был һүҙҙәренән һуң ике дуҫ та, беҙ шуға тип килдек тә инде, йә һинең дошманыңды үлтерергә, йә үҙебеҙ үлергә тейешбеҙ, тип ант итәләр. Шулай һүҙ ҡуйыша-ҡуйыша ҡымыҙ эсәләр. Бер нисә алдырҙы бушаткас, хужабикә уларҙан ял итеп алыу кәрәкмәҫме икән тип һорай, үҙенә лә бер аҙыраҡ ял кәрәклеген белдерә. Ҡунаҡтар быға риза булғас, үҙҙәрен генә ҡалдырып, Зөһрә кесе тирмәһенә китә.

Аллабирҙе менән Йылҡыбай, бейә-ҡолондар кешнәшеп уятмаһа, тағы әллә күпме йоҡлаған булырҙар ине. Зөһрә ҡолондарҙы бәйҙән сисеп, инәләренә ебәргәндә, Аллабирҙе лә тороп тирмәнән сыға. Үҙен ярҙам итешергә саҡырмаған өсөн бер аҙ үпкә белдергән була. Зөһрә, йөҙө ҡыҙарына төшөп:

— Ярҙам итешер көн булыр әле алда, — тигәс, был һүҙ беҙҙең олоғайып барған кейәүгә майҙан йомшаҡ булып килешеп төшә. Шунан тирмәнән Йылҡыбай ҙа килеп сыға. Хужабикә бейәләрен һауып бөткәнсе, улар шулай йылҡы араһында йөрөштөрөп торалар. Зөһрә, күп тә үтмәй, эшен дә бөтөрөп, һауған һөтөн һабаға бушатып, турһыҡ менән быларға яңы өлгөргән ҡымыҙын да килтереп тоттора. Шунан Йылҡыбай:

— Һый-хөрмәтендән беҙ буйтым ҡәнәғәт, тамағыбыҙ туҡ, тик күңелгә хикәйәтеңде аҙағынаса һөйләүең генә етмәй тора. Беҙ шуны һөйләүеңде үтенәбеҙ, — тине.

— Ярай, һөйләйем, тыңлағыҙ, ҡәҙерле ҡунаҡтарым, — тип дауам итте Зөһрә. — Иҫегеҙҙәлер, мин һеҙгә Байегеткә тиҙерәк ашарға әҙерләй һалырға ҡушылған урында туҡтағайным. Шунан үҙегеҙҙе лә тамаҡ ялғап алырға саҡырҙым.

Шулай итеп, затлы балаҫтар түшәлде. Ҙур-ҙур табаҡтарға өйөп ит ҡуйылды. Беҙ ҡотҡарған тотҡондар ашап туйһалар ҙа, ирем, бер аҙ гәпләшеп ултырайыҡ тип, уларҙы урындарынан да торғоҙманы. Ә ҡыҙ-ҡырҡын Байегет йәйгән балаҫтар өҫтөндә айырым ҡорҙа ултырып, Байегет ике арала кәләп һалып йөрөр булды. Мин Гөлбикә менән ир-ат ҡоронда булып, минең эргәмдән Алдар, ә Гөлбикә эргәһенән Аҡкөбәк ултырып алғайны. Ҡарабай Алдар янында ултыра ине. Мин һеҙгә был һыйҙың нилектән үҙ ғүмеремдәге иң татлы һый булғанын әйткәйнем инде. Был ит ашап туйғыһыҙ булды!

Ирем, теге болғар илсеһен күргәс:

— Әйҙә, илсе, минең яндан урын ал, — тип саҡырып алды ла, уны ҡаршыһына ултыртып, үҙебеҙҙең ғәҙәт буйынса, уға үҙ ҡулынан ҡаҙылыҡ һоғондороп: — Болғар батшаһының илсеһе булғас, уға ҡайтып, ҡыр батырҙың үҙенде нисек итеп һыйлағанын һөйләргә онотма, тик, ишетһен ҡолағың, шаштырып та ебәрмә, — тип көлөп ҡуйғас, теге бахырың:

— Мин үҙ күҙҙәрем менән күргәнемде генә һөйләп бирһәм дә, быға хатта ышанмай ҙа торорҙар, — тине. Быға ҡаршы ирем:

— Ышанмаған, ниңә илсе итеп ебәрергә кәрәк? — тип көлдө. — Ә һуң һин үҙ атың менән кейем-ҡоралыңды таптыңмы әле?

— Атым башҡа аттар менән көтөүҙә йөрөй. Ә кейемем менән ҡоралымды Мерәс минә табып бирергә булды, — тине болғар.

— Улай булғас, бар, иң элек кейенеп кил. Илсе икәнһең, мин һине ысынлап та илсе итеп күрәйем, — тине ирем.

Ит ашалып бөтөп, табаҡтар йыйыштырып алынғас, улар урынына ҡымыҙ тулы тәпәндәр килеп ултырҙы. Муйнаҡтың туғаны Ҡарабай шунда, Аҡкөбәккә туҫтаҡ һоноп:

— Йә, хәҙер инде Иртыш егетенең хәбәрен тыңлайыҡ. Үҙеңдең ни күргәндәреңде, ниндәй батырлыҡтар ҡылғаныңды һөйләп бир беҙгә. Нисек итеп кәләшеңдән яҙҙың да, минең һымаҡ, был яҙмышҡа нисек килеп тарының? — тип һорағас, Аҡкөбәк былай тип һүҙ башланы.

## ҠЫРҠ ТУҒЫҘЫНСЫ КИС

— Атайым һыулаған йылғаның исемен үҙегеҙ ҙә әйтеп торғас, мин быға өҫтәп, үҙебеҙҙең йәйләү ерҙәренең иң йәмле йәй көндәрендә нисек булғанын да һөйләп бирәйем инде, — тине Аҡкөбәк. — Беҙҙең йәйләүҙең төнлөк яғында һырттары дөм ҡара урмандар менән ҡапланған бейек тауҙар ҡалҡып тора. Урманы-һыуы төрлө-төрлө йәнлек менән тулы. Шул тауҙар үңеренең береһенән Өлбә йылғаһы ағып сыға ла Иртышҡа килеп ҡоя. Шунын буйында икһеҙ-сикһеҙ туғайлыҡ йәйелеп китә, унан ҡыр ҡаҙаҡтарынын[76] еренә барып тоташҡан киң дала йәйрәп ята. Ул халыҡ, мал-тыуарға бай булһа ла, беҙҙең менән дошманлашып йәшәй. Йыш ҡына улар беҙҙең йәйләүҙәргә сапҡын яһап тора. Әйткәнемсә, мал-тыуарға бай булһалар ҙа, барымтаға һәүәҫлектән, беҙҙең йылҡы өйөрҙәрен әйҙәп алып китәләр. Дөрөҫ, беҙҙекеләр ҙә йоҡлап ятмай, был хәлгә һирәк юл ҡуялар, барымталары бик ҡимməткә төшә, донъя менән бәхилләшергә лә тура килә үҙҙәренә ҡайһы саҡта.

Атайым, Үзбәк хан, үҙен ҡартлыҡ баҫҡас, мал-тыуарын ҡарауҙы беҙгә — үҙенең ун ике улына тапшырҙы. Ун икебеҙҙән беребеҙ көн һайын шулай көтөүҙәрҙе әйләнеп сығып, Саҡмаһыу* буйын ҡыр ҡаҙаҡтары сыҡмағанмы икәнен күҙәтеп торор инек. Бер-бер хәл булғанын күрә ҡалһаҡ, атайымдың йәйләүенә алыҫтан уҡ хәбәр биреп, ҡалған ун беребеҙ йәш егеттәрҙе эйәртеп, атҡа атланыр ҙа ҡаҙаҡтар артынан ҡыуа төшөр инек. Улар һирәк-мирәк кенә ҡотолоп ҡала торғайнылар.

Шул саҡ Ҡарабай, Аҡкөбәктең һүҙен бүлдереп:

— Ә ҡыр ҡаҙаҡтарҙың батырҙары бармы һуң? — тип һораны.

— Бар, — тине Аҡкөбәк. — Хатта бик көслө, бик мәргән батырҙары бар, бигерәк тә һөңгө менән һуғышыуҙа таҫыллы улар. Уларҙың күбеһен мин исемдәре менән үк беләм. Иң көслөһө Ҡаратау батыр, унан ҡала Буранбай менән Йәноҙаҡ. Былары көслө бу-

лыуҙан бигерәк хәйләкәрлектәре менән айырылып тора. Уларҙың шуныһы ҡыҙыҡ: барымтаға бер ҡасан да күмәкләп йөрөмәй, берәмләп кенә йөрөйҙәр. Быны мин Ҡаратау тигән батырҙары менән үҙем көс һынашып ҡарағанлыҡтан беләм. Был осрашыу минең Гөлбикә менән һүҙ ҡуйышыуҙан бер-ике ай ғына элегерәк булды. Уның менән нисек итеп һуғышҡанды ла, был алыштың ахыры ни менән барып бөткәнен дә һеҙгә тәфсирләп һөйләп тормайым инде. Юҡһа бик оҙаҡҡа китер. Мин тик һеҙгә шуныһын ғына әйтәм: был алышта ул еңелеп ҡалды. Мин уны яралап, әсир итеп алып ҡайтһам да, уның айбарлығын, көслөлөгөн күреп һоҡланғанға күрә, атайымдан һорап, түләүһеҙ-ниһеҙ кире ебәрҙем. Ә ҡыр ҡаҙаҡтары, үҙ батырҙарының ҡайтып килеүен күреп, башҡаса беҙгә баҫышмаҫҡа һүҙ бирҙеләр.

Был хәлдең Гөлбикә менән вәғәҙәләшерҙән бер-ике ай элек булғанын әйткәйнем инде һеҙгә, хәҙер уның менән нисек итеп күрешкәнемде, нисек яратышып киткәнде һөйләйем әле. Беҙ Ҡотлобай исемле арҙаҡлы аҡһаҡалыбыҙҙың саҡырыуы буйынса уның йәйләүенә йыйынға барғайныҡ. Саҡырылған ҡунаҡтар бик күп ине. Ғәҙәттәгесә, һый-хөрмәттән һуң шулай бәйге-көрәш башлап ебәрҙек. Ат сабыштырҙыҡ, аттан яҫҡыштыҡ. Ҡотлобайҙың улы Дәүләтбай тигән бик таҫыллы йәш батыр, минең атымдың бик алғыр булыуын күреп, мин инде бер килке егетте эйәрҙәренән тартып төшөргәс, минең эргәмә килде лә:

— Атың да бик алғыр, үҙең дә бик батыр күренәһең. Мин һинең көс-таҫыллығыңа иҫем китеп, үҙемдең һеңлем Гөлбикәне күрһәтергә булдым. Ул да, һин егеттәрҙе еңгән кеүек, ҡыҙҙарҙың береһенә лә ал бирмәй, — тине. — Теләһәң, әйҙә мин һиңә уның үҙен күрһәтәйем. Ҡыҙҙар бынан алыҫ түгел, хәҙер ярыш та башлағандарҙыр, моғайын, — тигәс, мин бик теләп риза булдым. Аттарыбыҙҙың тибенгеһенә бер тибеп, яҡындағы тауға ҡарай сабып та киттек. Тау итәгенә барып еткәс, үҙәк тулы ҡыҙҙарҙы күрҙек. Уларҙың төрлө төҫтәге кейеменән бөтә туғай ел тирбәткән төрлө сәскәләр менән сыбарланған кеүек ине. Ҡайһы береһе күк тә ҡыҙыл, ҡайһылары зәңгәр ҙә йәшел еләнде кейеп алған, ә баштарындағы ҡашмауҙары, көнгә сағылып, күҙҙең яуын алып тора. Шунда улар ике төркөмгә бүленеп алалар ҙа, бер-береһенә сабып барып, эйәрҙәренән тартыша башлайҙар, йәнә бергә йыйылып алғас, аттарын йән-фарманға ҡыуып, бер-береһенән уҙып китергә тырышып, әллә ни саҡлы ер урап, сабышып киләләр. Шунда мин улар араһында аҡбуҙ атҡа атланған ҡыҙыл еләнле ҡыҙҙың бөтәһенән дә таҫыллыраҡ, ә атының бөтә аттарҙан да алғырыраҡ булыуын күргәс:

— Һеңлең шул түгелме? — тип һораным Дәүләтбайҙан.

— Тап үҙе, батыр, — тине.

— Һин дөрөҫөн әйткәнһең икән: күп ҡыҙҙы ул эйәрҙәренән алып ҡына ырғытты. Әллә яҡыныраҡ барып, көс һынашып ҡарайбыҙмы? — тип һорағас, Дәүләтбай ҙа ҡаршы килмәй:

— Ниңә бармаҫҡа, әйҙә барайыҡ, — тине. Беҙ ҡыҙҙар яғына сабып киттек. Шунда уҡ бер нисә ҡыҙ беҙгә ҡаршы сабышып килеп еттеләр ҙә:

— Әллә сабышып ҡарайбыҙмы, йә булмаһа көс һынашабыҙмы? — тип ҡысҡырҙылар. Дәүләтбай, бик риза булғанын, шуға күрә лә ҡунағын алып килгәнен әйткәс, беҙҙе башҡа ҡыҙҙар ҙа һырып алды.

— Сабышайыҡ, сабышайыҡ! — тип ҡыйҡыулашты ҡыҙҙар. Мин шунда бөтәһенә лә тигеҙләшеп торорға кәңәш итеп, ҡайҙа хәтле сабып барыр урын билдәләүҙәрен һораным.

— Анау яңғыҙ ултырған ағасты күрәһеңме, батыр? — тине араларынан бер ҡыйыуырағы. — Беҙ шунда хәтле сабып барып, кире бороларға тибеҙ.

— Ярай, мин шартығыҙға күнәм, — тинем. Теҙелешеп алғас, сабып сығып та киттек. Тәүҙә бер өйкөм генә булып бара торғас, ахырҙа берәүҙәре алға сығып, икенселәре артта тороп ҡала башланы. Аҡбуҙ атҡа атланған ҡыҙ күптәрҙе ташлап китеп, иң алға сығып саба башлағайны, мин, арғымағымдың теҙгенен бушата төштөм. Атым, бәйгегә сабып өйрәнгәс, башҡаларҙы бик тиҙ артта ҡалдырып, Гөлбикәне ҡыуып еттем дә уның менән йәнәш саба башланым. Ул, минең үҙе менән тигеҙләшкәнен күреп, атының тибенгеһенә бер тибеп, һайтлап ебәргәйне, аты алға һонолоп та сыҡты. Минең арғымағым да ҡалышманы. Беҙ икәү, башҡаларҙы әллә ҡайҙа ҡалдырып, яңғыҙ саҡсауыл янына бергә барып еткәйнек, Гөлбикә миңә:

— Шунда туҡтап көтәйек, арттағылар беҙҙең килеп еткәнде күреп торһондар, — тип ҡысҡырҙы.

## ИЛЛЕНСЕ КИС

Арттағылар сабып килеп еткәнсе, бер һүҙ ҙә ҡушмайынса, мин Гөлбикәгә ҡарап торҙом. Ул да миңә ҡараштырып алғас, башын аҫҡа эйеп кенә:

— Арғымағың алғыр икән, минең аҡбуҙ атым да һин күргән аттар араһында ал биргәне юҡ, — тип һүҙ ҡушҡан булды. Мин дә уға, яуапһыҙ ҡалмаҫҡа тырышып:

— Мин үҙ атыма ышанмаһам, һинең атыңа тигеҙләшәм тип сабып та тормаҫ инем, — тигән булдым.

Шулай итеп беҙ, башҡаса һүҙ әйтергә ҡыймай, аттарыбыҙ хаҡында ғына һөйләшеп торһаҡ та, эстән генә икебеҙ ҙә икенсе төрлө уй уйлағанбыҙ. Ул оялсан, ә мин баҙнатһыҙ булғанлыҡтан, башҡаса һөйләшер һүҙ ҙә тапмай, арттағылар килеп еткәнсе шулай өндәшмәй ҙә торған булыр инек, ярай әле, тегеләр ҙә килеп етте. Улар араһында сабып килгән Дәүләтбай минән:

— Һеҙ бында күптән ҡатып тораһығыҙмы? — тип һорағас, Гөлбикә минең урынға:

— Күптән инде, — тигән булды. Уныһы быға:

— Нимә, һеңлем, үзбәк улының саптары һинең буҙ арғымағыңдан бер ҙә ҡалышмай түгелме? — тип ҡуйҙы.

— Әлегә асығын ғына әйтеп булмай, икебеҙ ҙә бергә килеп еттек. Ахырын кире сапҡанда күҙ күрер инде, — тине һеңлеһе. Үҙе

шунда уҡ кире сабып сығып та китте. Беҙҙең аттар башҡаларҙан байтаҡ араға алға сығып, йәнә сәмләшеп саба башланылар. Мин уның үҙ атын ҡыуалай башлағанын һиҙеп алғас, үҙемдекенә буйлап китергә ирек ҡуймай, теҙгенен тарта төшкәйнем, Гөлбикә лә быны күрмәй ҡалманы. Бәйге бөтөр ер алыҫ та ҡалмағас, минең саптар уҙып китергә ынтылып ҡарағайны ла, мин, быға ирек ҡуймай, Гөлбикә менән бергә генә барып етергә булдым. Беҙ бер ҡатар сабып барып еттек тә, аттарыбыҙҙан төшә һалып, икеһен дә етәкләп йөрөттөк. Күп тә үтмәй, башҡалар ҙа сабып килеп еткәс, аттарыбыҙҙың бер-береһенә ал бирмәүен ишетеп, уларҙың алғырлыҡта бер тигеҙ булыуына иҫтәре китте. Мин ҡыҙҙар араһында оҙаҡ булмаҫҡа теләп, Дәүләтбайға тиҙерәк, йыйынға ла яҡынан һуғылып тормай, туп-тура үҙебеҙҙең йәйләүгә ҡайтып китергә булғанымды әйткәс, ул минең ашығыуыма аптырап, ҡалырға ҡыҫтаһа ла, мин үҙ һүҙемдә торҙом. Атыма атланып, сабып сығып та киттем.

Йәйләүгә ете төн уртаһында ғына ҡайтып, йүнләп йоҡлай ҙа алманым. Аҡбуҙ арғымаҡҡа атланған ҡыҙ күҙ алдымдан да китмәй ине. Таң һарыһынан тора һалып, атайымды уяттым да йыйында саҡта Ҡотлобай аҡһаҡалдың ҡыҙы Гөлбикәне күреүемде, уның бик күңелемә ятҡанлығын һөйләп биргәс, уны үҙемә һоратып ҡоҙа ебәреүен үтендем. Атайым быға үҙе лә бик һөйөнөп риза булды. Ул миңә кәләш йәрәшергә кәрәклеген күптән әйтеп килһә лә, мин үҙем һәр саҡ кире ҡаҡҡанға, был юлы тимерҙе ҡыҙыуында һуғып ҡалырға булып, арҙаҡлы аҡһаҡалдарын саҡырып алды ла шул уҡ көндө Ҡотлобайҙың ҡыҙын һоратырға сығарып та ебәрҙе.

Киткән ҡоҙалар, икенсе көнөнә үк кире әйләнеп, Ҡотлобайҙың миңә ҡыҙын бирергә риза булыуы тураһында шатлыҡлы хәбәр алып ҡайттылар. Гөлбикә үҙе лә быға бик теләп риза булған. Атайым, иҙге эште ашыҡтырған хәйерле, тип, иртәгеһенә, байтаҡ аттар, байтаҡ бүләктәр билдәләп, күп кешеләре менән мине Ҡотлобай йәйләүенә сығарып та ебәрҙе.

Ҡотлобай ҙа беҙҙе асыҡ йөҙ менән көтөп ҡаршы алды, буйтым тигәнсе һыйланы, ҡунаҡ итте. Мине ул айырыуса ҡәҙер итеп, хан менән туғанлашып, батыр кейәүе булыуына бик шат икәнлеген әйтте. Икенсе көндө никах уҡытырға мулла ла саҡырҙылар. Мулла менән бөтә аҡһаҡалдар алдында Гөлбикә лә үҙенең ризалығын белдерҙе. Никах доғаһы уҡылып, ике яҡтан да алдым-бирҙем әйтелеп, шуның менән эш тә бөттө. Тик мин, быға шатланып бөтә алмаһам да, нилектәндер күңелем шомланып, үҙ-үҙемде ҡайҙа ҡуйырға ла белмәй, болоҡһоп тик йөрөнөм.

Гөлбикә, урынынан тороп, атаһынан, балалығы менән хушлашып, әхирәттәре менән сеңләп алырға, унан һуң, йолалары буйынса, далаға сығып, атта сабышып килергә рөхсәт һораны. Атаһы, ризалығын биргәс, миңә күҙен тултырып бер ҡарап алды ла сығып та китте.

Ул киткәс, минең күҙ алдарым ҡараңғыланып, кемдер уны йөрәк-бауырымдан һурып алғандай булды. Мин, быуындан яҙып, йығылып киттем. Иптәштәрем мине күтәреп алып, тирмәнән тышҡа

алып сыҡҡас ҡына иҫемә килеп, тирә-яғыма ҡаранып алдым да ни әйткәнемде үҙем дә һиҙмәй ҡалып:

— Ул китте! — тип ҡысҡырып ебәрҙем. Аҡһаҡалдарыбыҙҙың береһе шунда:

— Ҡайғырма, батыр, төндә ҡуйынында булыр! — тип кеткелдәп көлөп ҡуйҙы. Шул көлөүҙән һуң ғына мин, зиһенемде йыйып, үҙ-үҙемде ҡулға алдым, ирекһеҙҙән булһа ла элеккесә шат булырға тырыштым. Шулай ҙа, ниндәйҙер ҡайғы булырын һиҙенгәндәй, йәшелкенсәк башлап ебәргән уйын-көлкөгә лә ҡатышмайынса, кәләшем киткән юҫыҡтан күҙҙәремде лә алмай, аңҡы-тиңке килеп йөрөнөм.

Көн дә инде кискә һарҡып, күҙ бәйләнер ваҡыт етеп килһә лә, Гөлбикәм бергә сығып киткән әхирәттәре менән һаман юҡ та юҡ ине. Туй башлап йөрөүселәрҙең ҡайһы бере, быларҙың бик оҙаҡлап китеүенә борсола ла башлағас, үҙем ат атланып ҡаршы алырға сыҡҡан тау башынан сарый-сорой ҡысҡырышып көлләһө көллө яҡтан сабып килеп сыҡҡан ҡыҙҙар күренде. Туйҙағылар, бер-бер хәл булғанын һиҙенеп, уларға ҡаршы йүгерешә башлағас, мин дә тотоп йүгерҙем. Иң тәүҙә сабып килеп еткән ҡыҙҙар, ҡобаралары осоп, аһылдашып:

— Юғалды! Юғалды! — тип сыр-сыу килделәр. Улар артынса сабып килгән ҡыҙҙар ҙа шул уҡ һүҙҙе әйтеп ҡысҡырышҡас, бөтә халыҡ, геү килеп:

— Кем юғалды? — тип һөрәнләп ебәрҙе.

— Кәләш юғалды, Гөлбикә үҙе! — тип илашты ҡыҙҙар. Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, мин, аяҙ көндө йәшен атҡандай, ҡатып ҡалдым, шунан һуң ғына иҫемә килеп, ярһып-туҙып киттем. Йөрәгем атылып сығырҙай булып тибә, бөтә быуындарым ҡалтырай башланы. Шунда уҡ сабып килгән бер ҡыҙға ҡаршы йүгереп барҙым да, атынын башынан алып:

— Ҡайҙа иттегеҙ минең Гөлбикәмде? Йә, әйтегеҙ: ни булды уға? — тип дер һелкеттем.

— Аһ, батырҡайым, бахырҡайым! — тип үкһеп ебәрҙе ҡыҙыҡай. — Беҙ, ат сабыштырып, уйнап ҡына йөрөй инек, аяҡ аҫтынан бер бүре килеп сыҡты ла беҙ шуны ҡыуып алып киттек. Гөлбикәнең аҡбуҙы алғырыраҡ булғас, иң алдан сабып, бүрене ҡыуып етеп, ҡамсыһы менән һыҙырып алайым ғына тигәйне, бүреһе күҙҙән яҙҙы ла ҡуйҙы. Ҡапыл шунда ҡуйы төтөн борҡолоп сыҡты ла Гөлбикә шунын эсендә тороп ҡалды. Беҙ, ҡурҡышып, төтөн эсенә инергәме, юҡмы, тип нишләргә лә белмәй торҙоҡ. Ҡапыл шул саҡ төтөн эсенән ҡанатлы бер ғифрит атылып сыҡты, унын өҫтөндә Гөлбикәне тотоп алған бер батыр ултырғанын күреп ҡалдыҡ. Ул уны төнләк йоҫоғона ҡарай осортоп алып китте...

## ИЛЛЕ БЕРЕНСЕ КИС

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, мин, йәшен һуҡҡандай, ҡатып ҡалдым. Үҙем менән бергә килгән тиң-тоштарым, бөтә аҡһаҡалдар, мине уратып алып, йыуатырға тырышып ҡараһалар ҙа, мин бер ни

күрмәнем дә, ишетмәнем дә. Шулай байтаҡ ҡына ваҡыт телдән яҙып торғас, ахыр сиктә, иҫемә килеп:

— Әйҙәгеҙ Ҡотлобайға барайыҡ, — тинем. Беҙ әйләнеп килеүгә, ул үҙе лә, Гөлбикәнең әсәһе лә, күҙ йәштәрен ҡойоп, илашып бөткәйнеләр. Мин, Гөлбикәнең атаһының күкрәгенә башымды һалып:

— Атаҡайым! Мин Гөлбикәне эҙләргә сығып китәм, уны тапмай тороп, әйләнеп тә ҡайтмам, — тинем. Шунан, тирмәнән сығып, ҡоралым менән атымды килтереүҙәрен һораным. Тиң-тоштарым, минең был ниәткә килеүемдән ҡоттары осоп, мине был уйымдан кире дүндерергә тырышып ҡаранылар, һис юғында атайыма ҡайтып, быңдай хәтәр юлға сығыу өсөн унан ризалыҡ фатихаһын алырға өгөтләнеләр. Тик был өгөт-нәсихәттәр бушҡа ғына ине. Мин уларҙың береһенә лә ҡолаҡ һалманым, хатта таң атҡанын да көтөп тормаҫҡа булып, ҡоралым менән атымды үҙем эҙләп килтерҙем дә, уҡ-һаҙағым менән ҡылысымды тағып, атҡа атланып алғас, үҙебеҙҙең аҡһаҡалдарҙан атайымды йыуатыуҙарын үтендем. — Әгәр мин әйләнеп ҡайта алмаһам, үтә көйөнмәһен, уның әле ун бер улы тороп ҡала, — тип атыма бер һыҙырҙым да баш һуҡҡан яҡҡа сабып сығып та киттем. Ай туп-тулы булғанлыҡтан, төн яп-яҡты ине. Мин теге ғифриттең төн юҫығына табан осоп китҡәнен иҫкә төшөрҙөм дә, айға арҡамды ҡуйып, күләгәмә ҡарап ҡына, алға ыңғайланым.

Төнө буйы барып, көн тыуғанын бөтөнләй ете-ят ерҙә ҡаршыланым. Тик был хәл мине ҡурҡытманы, бары төн юҫығына ҡарап барыуымды ғына белдем. Был көндө мин тотошлайы менән юлда үткәрҙем, атымды ла хәл йыйҙырып торманым. Тик кискә табан ғына бик ныҡ асыҡҡанымды тойоп, атым да башын эйеп, үлән ялмаштыра башлағас ҡына, атымдан төшөп, шул урында бер аҙ хәл йыйып, төн үткәреп китергә булдым. Төшөп, эйәремдең ҡанъяғаһында ҡымыҙ тулы турһыҡ аҫылынып торғанын күргәс, үҙ күҙҙәремә үҙем дә ышанмай торҙом. Ашығып сығып киткән сағымда уны кем бәйләп өлгөргәнен дә иҫләй алманым. Эсемдән генә: «Миңә ошо турһыҡ та бик еткән!» — тип ҡуйҙым үҙ-үҙемә, көнөнә бер туҫтаҡтан ары эсмәм, тигән һүҙ бирҙем.

Иртәгәһен, таң һарыһынан тороп, ары юлландым. Тик, юлда бер кемде лә осратмауыма аптырап, ҡайһы яҡтарға килеп сығыуымды һорашыр әмәл дә булмағас, әсенеп ҡуйҙым. Ә бигерәк тә, исмаһам, берәй йәнлек кенә булһа ла тап килмәүе бик хикмәтле күренде. Шулай итеп бара торғас, байтаҡ көндәр үтеп китте. Әллә ниндәй тауҙар артылып, урмандар аша үтеп, далалар иңләп, байтаҡ юл үткәс, турһыҡтағы ҡымыҙ ҙа бөҫкәрҙе, аслыҡтан хәлем дә бөтә башланы. Шунан мин төрлө ҡош-ҡорт атып алып, шуның менән генә тамаҡ ялғай башланым. Юлда, шулай итеп, бер ай ҙа үтеп китте. Быны мин яңынан кәмеп тулған айға ҡарап ҡына белдем, юҡһа көндәрҙең иҫәбен дә онотоп бөткәйнем инде.

Көндәрҙән бер көн шулай ҡуйы урман үткәүеленән үтеп барғанда, ниндәйҙер бер ҡот осҡос януар үкергәнен шаңлап ҡалдым. Тирәяғыма күҙ йөрөтөп ҡараһам да, урман шырлығы аша бер ни ҙә күреп булмай ине. Ә януар үкергән тауыш һаман яҡынайып

килгәндәй булды, әллә мин үҙем уға яҡынайып килдемме икән, белмәйем. Урман үткәүеленән үтеп, бер аҡланға барып сыҡһам, быға са күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән тамашаға килеп юлыҡтым.

Аҡлан уртаһында бер арыҫландың ҡанатлы йылан менән алышып ятҡанын күреп, иҫем китте. Йыландың тиреһе ут төҫлө булып, ҡанаттары ярғанаттыҡы һымаҡ ҡап-ҡара ине. Аяҡтары йырткыс януарҙарҙыҡы һымаҡ үткер тырнаҡлы, оҙонса башлы, суҡышы бөркөттөкөләй кәкре, тик ҡалынырак булыр, ә ҡойроғо тәңкәле-тәңкәле, ибәтәйһеҙ оҙон. Был ике януар йән асыуҙарына һуғыша, арыҫланда көс тә, таҫыллыҡ та күберәк күренгәндәй булды. Ул, ҡанатлы йыландың баш яғына ла, ҡойроғона ла ташланып, бик еңел килеп йәбешә, ҡанаттарын, ҡарар ерен дә ҡалдырмай, тырнаҡтары менән өҙгөләп бөтөргән. Тегеһе ҡанатын елпеп ҡараһа ла, һауаға күтәрелә алмай, артҡы аяҡтарына ғына баҫып, алғы аяҡтары менән арыҫланды эләктереп ала ла унын тиреһен һыҙырғылай, бигерәк тә үткер тәңкәле ҡойроғо менән дөмбәҫләй. Арыҫлан быны тырнаҡтары менән сыйғылаһа ла, йыландың тиреһе тәңкәләр менән ҡапланғанлыҡтан, аҡтарып уҡ ала алмай йөҙәне. Мин был алышты ситтән генә күҙәтеп, януарҙар батшаһы булған арыҫланды ҡыҙғанып та ҡуйҙым. Унан ҡапыл, Гөлбикәмде алып киткән батырҙың шундай уҡ ҡанатлы йыланға атланған булыуын хәтерләп һаҙағымдан уғымды һурып алдым да, быларға яҡынырак йүгереп барып, йыландың мөнтәлеп бөткән ҡанатына атып ебәрҙем. Ҡанат аҫтында бының тәңкәләре юҡтыр, бәлки, тип уйланым. Уҡ унын тәненә, бөлдөргөһөнә саҡлы барып ҡаҙалғас, имәнес йылан һикереп үк ебәрҙе. Шул арала мин унын икенсе яҡ ҡанатына ла атып өлгөрҙөм. Шөкәтһеҙ ғифрит мине күреп ҡалып, өҫтөмә ташланырға ғына иткәндә, арыҫлан бының ҡойроғонан тешләп ергә сүктергәйне, мин, атымдан төшә һалып, ҡылысымды һелтәй-һелтәй, йыландың үҙенә ҡаршы ташландым. Үҙем дә белмәйем, нилектәндер:

— Ҡит, арыҫлан, кит! Мин уны үҙем үлтерәм! — тип ҡысҡырып ебәргәс, арыҫлан, әҙәм һүҙен аңлағандай, ситкә янтайҙы, мин, йүгереп барып, йыландың башына сабып ебәрҙем, башы ҡап уртаға ярылып китте. Шулай ҙа йылан миңә ҡойроғо менән һуғып өлгөрҙө, тик ҡойроғоноң аяҡтан йығырлыҡ көсө ҡалмағайны инде. Икенсе һелтәүҙә мин унын муйыны менән алғы аяҡтарын ҡуша сабып өҙҙөм. Арыҫлан, үҙенең дошманын үлтергәнде күреп, минең эргәмә килде, иркәләнеп, аяҡ аҫтыма ятып, аяҡтарымды ялай башланы. Мин был януарҙар батшаһына яҡшылыҡ эшләгәнем өсөн, эстән генә һөйөнөп тә ҡуйғандай булдым. Унын ялдарынан һыйпап, яраларынан ҡанын һөртөп алдым, турһығымда һыу барлығын иҫләп, яраларына һыу бөрктөм. Арыҫлан быға шул тиклем ҡәҙер-хөрмәт белдергәндәй, аяҡ аҫтымда ураланып, бөтә йәне-тәне менән рәхмәт әйтергә иткән төҫлө ине. Турһыҡтағы һыуҙы арыҫландың яраларына һирпеп бөтөргәс, мин, йыландың емтеген утта үртәмәксе булып, атымды үлән утларға ҡушып ҡуйҙым да, урмандан ҡылысым менән ваҡ ағастарҙы ҡырҡып килтергәс, арыҫлан да минән күрмәксе, урман ситендәге ҡоро ағастарҙы көслө аяҡтары менән тумырырға тотондо. Унан мин үрләтеп ебәргән усаҡҡа әллә күпме ҡоро утын

килтереп ауҙарҙы. Мин был тамашаны ғәжәп итеп ҡарап торҙом. Аҙаҡ, ут ялҡынланып яна башлағас, йыландың ҡырҡҡа ботарланған үләкһәләрен утҡа быраҡтырып бөтөрҙөм. Үҙ дошманының ҡалдыҡтарын утҡа бырактырғанды күргәс, арыҫланым ут тирәләй һикерәндәп йөрөй башланы, миңә йүгереп килеп иркәләнергә керешге. Йыландың ҡойроғо, башы менән аяҡтары янып бөткәс, түшкәһен дә утҡа ауҙарырға, ҡайһы еренән күтәреп алайым икән, тип кенә торғанда, арыҫлан, минең ниәтемде аңлағандай, йүгереп килеп етте лә уның оҙон шөкәтһеҙ муйын һөйәгенән эләктереп алып, утҡа һөйрәтеп алып килтерҙе, ә мин уны уттың уртаһына уҡ ауҙарып ташланым. Арыҫлан шатлығын белдерергә теләгәндәй, йәнә ут тирәләй һикерәндәп бейергә тотондо. Шунда ғына мин, бик йонсоғанымды тойоп, ут янынан ситкәрәк киттем дә, эйәремдең мендәрен баш аҫтыма һалып, хәл йыйырға яттым. Арыҫлан, минең эргәмә йүгереп килеп, аяҡтарымды ялап, тағы бер-ике ҡабат һикергеләп алғас, мине таң ҡалдырып, урманға табан сабып китте. Бер аҙ ятҡандан һуң, юлға сыҡҡаны бирле тәүге ҡабат шулай үлек йоҡоһо менән йоҡлап киткәнмен. Уянып, күҙемде асып ҡараһам, арыҫланым мин тороуға урмандан йәш кенә бер ҡоралай тотоп килтереп ҡуйғайны. Ҡоралай әле тере ине. Арыҫлан уны минең алдыма уҡ һалып ҡуйған да, аяғы менән ебәрмәй, һаҡлап ултырғас, мин шунда уҡ уны миңә аҙыҡ итеп килтергәнен аңлап алдым. Мин, бисмилла әйтеп, ҡоралайҙы салып ебәрҙем, тиреһен тунап, артҡы ботон киҫеп алғас, үҙемә ҡурҙаҡ итеп ҡура башланым, ә ҡалғанын һунарсымдың үҙенә бирҙем. Шулай ҙа ул, мин итемде ҡурып, ашай башламайынса, үҙ өлөшөнә ҡағылманы ла. Был яңы танышым менән шулай бер табында тамаҡ ялғап алғас, мин ары юлланырға атымды эйәрләй генә башлағайным, ул минең китеремде һиҙеп, йәнә иркәләнергә тотондо. Унан, күҙҙәрен мөлдөрәтеп, еңелсә генә елән салғыйымдың осонан тотоп алды ла мине ҡайҙалыр алып барырға итте. Мин, был януарҙан бер ниндәй ҙә хәүеф-хәтәр көтмәгәнлектән, уға эйәрергә булдым.

Арыҫлан, эре-эре һикереп, алдымдан миңә юл күрһәтеп барҙы. Ул мине сылтырап ағып ятҡан көмөштәй бер шишмә эргәһенә килтергәс, мин, туҡтап, атымды һуғарҙым, үҙем дә, ятып, һыуһыным ҡанғансы һалҡын шишмә һыуын эсеп алдым. Мин атыма атланғас, арыҫлан, йәнә иркәләнеп, миңә әйләнеп ҡарай-ҡарай, үҙ артынан эйәртеп алып китте. Ул мине шулай шишмә буйлап түбәнгәрәк алып килгәс, шишмәгә башҡа урғылйындары ҡушылып, шишмә мул ғына һыулы бер йылғаға әүерелде. Шунан һуң, оҙатыусым мине таҡыр ғына бер һуҡмаҡҡа килтереп төшөргәс, кеше аяғының эҙҙәрен күреп, мин аптырап та, ҡыуанып та ҡуйҙым.

Икенсе ай инде әҙәм затын күрмәгәс, ҡыуанырлыҡ та ине шул. Бер аҙ һуҡмаҡ буйлап бара биргәс, ағастар араһынан ҙур бер аҡлан күренеп ҡалды. Аҡланға килеп сыкһам, ни күҙем менән күрәйем, бер уҡ атымы ерҙә генә ер башында ап-аҡ тирмә торғаны күҙгә ташланды. Шул саҡ арыҫланым эргәмдә тағы бер мәртәбә һикергеләп алды ла, тирмә эргәһенә йүгереп барып, тырнаҡтары менән тирмә ябыуын тырнарға тотондо. Мин, туҡтап, атымдан ғына

төшкәйнем, тирмә эсенән: «Туктасы, арыҫлан, көтөп тор!» — тигән катын-кыҙ тауышы ишетелде.

## ИЛЛЕ ИКЕНСЕ КИС

Шул арала, тирмә ауыҙы ла асылып, унан өҫтөнә кытай еләне кейгән оло ғына йәштәрҙәге бер бисә килеп сыкты. Уның башы-муйынына ап-ак таҫтар урап бәйләнгәйне. Мин, уны күргәс тә, иҫәнлек-һаулык һораштым, ул да иҫәнләште, атымдан төшөп, тирмәгә инеүемде һораны.

Тирмәгә инһәм, эсе бик таҙа, бөхтә итеп йыйыштырып куйылғайны. Шунда ук хужабикә, миңә урын күрһәтеп, туҫтак менән кымыҙын да килтереп тотторҙо. Шунан минең кем булыуымды, кайҙа юл тотоуымды, бында нисек итеп килеп һуғылғанымды һорашып алып китте. Мин уға һеҙгә һөйләгәндең бөтәһен дә түкмәй-сәсмәй һөйләп биргәс, уның үҙенән мине алып килгән арыҫландың нисек итеп эйәләшеүен, шуның серен аңлатып биреүен үтендем.

— Был арыҫлан, — тип һөйләп алып китте ул, — ошо урмандарҙа йәшәгән бөтә йәнлектәрҙең эйәһе[77] булыр. Ул минең үҙемде лә, мине туйҙырып торған ике бейәмде лә һаклай. Уның һиңә шулай иркәләнеп, үҙенде минең төйәгемә алып килеүенә бер ҙә аптырама. Һин уның осоп килеп балаларын ашап киткән тамук һөрһөндөһө булған йыланды үлтереп, уға ҙур изгелек эшләгәнһең. Әгәр ҙә мәгәр һин килеп сыкмаһаң, һинең ярҙамыңдан башка ул һәләк тә булыр ине, — тип куйҙы карсык.

Шул сак тирмә артында кәзә бәрәсе мәәлдәгән тауыш ишетелде. Карсык:

— Арыҫлан һиңә, моғайын, ризык табып килтергәндер, бар шуны салып индер ҙә мин бешереп ашатайым, — тине.

Уның һүҙен тыңлап, тирмәнән сыкһам, арыҫлан, ысынлап та, тағы бер коралайҙың бәрәсен тотоп килтергән икән. Эргәһендә үҙенең дүрт балаһы ла һикергеләп йөрөй ине. Мин бәрәсте тотоп, бисмилла әйттем дә салып та ебәрҙем, шунан тиреһен дә һыҙыра башланым.

Арыҫлан бер балаларын иркәләп, бер минең аяктарымды ялағанда, балалары уның эргәһендә һикерәндәп йөрөнө. Әҙер итте мин карсыкка ботарлап бирҙем дә үҙем атымды үлән утларға ебәреп куйырға булдым. Арыҫлан мине күреп калғас та, атым тирәләй ҙур бер түңәрәк яһап йөрөп сыкты ла, балаларын түңәрәктең дүрт яғына калдырып, миңә «улар атыңды һаклап торор» тигәнде әшкәртеп куйҙы булһа кәрәк. Шунда мин бәләкәй сағымда карттарҙан ишетеп кенә белгән нәмәмә үҙ күҙҙәрем менән күреп ышандым. Карттар беҙгә элек, әгәр ҙә арыҫлан берәй урмандымы, яландымы уратып сыға икән, унан бер ниндәй йән эйәһе лә касып китә алмай, тип һөйләй торғайнылар. Шуның раҫ икәнлегенә хәҙер мин үҙем күреп ышандым.

Атым арыҫлан уратып уҙған сиккә барып етеү менән гел кире боролоп килде. Арыҫлан менән уның балаларына һокланып торған

арала, хужабикә миңә итен дә бешереп өлгөргән икән. Мине тирмәһенә саҡырып индерҙе лә алдыма табаҡ менән ит килтереп ултыртты, ә үҙе ситтәнерәк урын алды. Мин унан ниңә улай минең менән бергә ашамағанын һорағас, үҙенең күптән үк инде бер ниндәй ҙә итте ауыҙына алмай, тик ҡымыҙ менән генә туҡланып йәшәгәнен әйтте. Шунда үҙе миңә лә, ҙур бер туҫтаҡҡа мөлдөрәмә тултырып, ҡымыҙ ҡойоп бирҙе.

Мин шулай ашап-эсеп алған арала, ул ҙур туҫтаҡҡа һыу ҡойоп, алдына ултыртты ла, һыуға бағып, үҙенең дәғүәт доғаһын уҡырға кереште. Оҙаҡ ҡына уҡынғандан һуң, яңынан һыуға бағып, миңә күҙ һирпеп алды ла, ашап бөткәнемде күреп:

— Туйҙыңмы һуң, балам? — тип һораны. Мин, ныҡ туйғанымды белдереп, һый-хөрмәте өсөн рәхмәттәр әйтеп, атымды ҡарап килергә тип сыҡмаҡсы ғына булғайным, ул мине: — Сабыр итеп тор, батыр! — тип туҡтатты ла: — Ултыр ҙа башта мин әйткән һүҙҙәрҙе шаңлап ҡал, — тине. — Йыланды үлтереп, арыҫланымды ҡотҡарып ҡалыуың менән һин миңә лә ҙур изгелек күрһәттең, улым. Ул мәлғүн тере ҡалған булһа, арыҫланымды ботарлап ташлап, миңә лә көн күрһәтмәҫ ине. Игелек ерҙә ятып ҡалмай, ул игелегеңдең әжерен үҙең дә күр. Шуға ла мин серле китабымды асып, һыуға бағып, һине алда ниҙәр көткәнен әйтеп бирергә булдым. Был сәфәреңдең ахыры ни менән барып бөтөр, кәләшеңде табып алып ҡайтырһыңмы икән, тип ҡарағайным; шуларҙы ғына белә алдым, балам: юлыңда һин ҙур михнәттәргә тарып, изге пәйғәмбәребеҙҙең ярҙамы менән генә был бәләнән ҡотолоп сығырһың. Ахыр сиктә үҙеңдең кәләшеңде табып, һау-сәләмәт илеңә әйләнеп ҡайтырһың. Хәҙер инде, аллаға тапшырып, сәфәреңде ары ҡылһаң да ярай. Арыҫланым һине Урал тауы һырттарына саҡлы оҙатып барыр, шунан да ары бармаҫ, — тип юрағас, мин ҡарсыҡҡа, өмөтлө һүҙ әйтеп кинәндергәне өсөн, рәхмәт уҡыным да, тирмәнән сығып, атымды ауыҙлыҡлап, атланып та алдым. Ә ҡарсыҡ, минең китергә торғанымды күреп: — Хуш, батыр, хызыр-ильяс сәфәреңдә юлдаш булһын! — тип теләк теләп ҡалды.

Арыҫлан, миңә юл күрһәтеп, алдан сабып китте. Мин шулай уның артынса көнө буйы барҙым, көн кискә һарҡып, күҙ бәйләнә башлағас ҡына, ҡуналҡаға туҡтап китергә булдым. Ә арыҫлан йәнә, атым менән мине уратып, үҙенсә кәртәләп сыҡҡас, эйәремдең мендәрен һалдырып, йоҡларға ятҡанымды күрҙе лә, минән ситкәрәк китеп, үҙе лә серем итеп алырға булды. Был төндө мин үткән төндәгегә ҡарағанда ла тынысыраҡ үткәрҙем, күрәҙәсе әбей әйткәндәргә өмөтләнеп, сабый һымаҡ иҙерәп йоҡланым.

Иртәгеһен, йәнә һары таңдан тороп, арыҫлан юлдашым менән бергә юлға ҡуҙғалдыҡ. Тик уның менән айырылышыуымды башыма ла килтермәй, үҙ уйҙарыма сумып, бара бирҙем. Көн төшлөккә еткәндә, беҙ бер бейек тау итәгенә барып төкәлдек, юлдашым, алпан-толпан килеп, аҙымын һалмағайта төштө. Бығаса ул бик шат килеп, минең эргәмдә оҙон ҡойроғон болғап, һикерәндәп тә алһа, тауға үрләй башлағас та, башын эйеп кенә атланы, ҡойроғон да һелтәмәҫ булды, үҙе, илаған һымаҡ тауыш сығарып, миңә бик йыш ҡына башын борғолап ҡарай ҙа ыңғырашып ҡуя ине.

Мин уның ниңә шулай, бөтөнләй үҙгәреп, бойоғоп китеүен тауҙың һыртына тамам күтәрелеп еткәс кенә төшөндөм. Арыҫлан мине аҫтынан сурғылып шишмә сығып ятҡан дәү бер ташҡа хәтле алып килде, шунан үҙе миңә оҙаҡ-оҙаҡ ҡарап торҙо. Башта мин, ни уйларға ла белмәй, уға алға табан ҡулым менән ымлап күрһәтһәм дә, ул мине һүҙһеҙ ҙә аңлағандай, аҡрын ғына башын сайҡап ҡуйҙы.

Шул саҡ мин Күрәҙәсе әбей әйткән һүҙҙәрҙе иҫләп, үҙемдең инде Урал һыртына килеп еткәнемде белеп, башҡаса инде арыҫландың мине оҙата бармаясағын төшөнөп алдым. Шунда атымдан төштөм дә, үҙемдең хушлашҡанымды аңлатырға тырышып, уны ҡосаҡлап алдым. Ул да, мине аңлап торғандай, аяҡ аҫтыма йығылды ла, ыңғырашҡан һымаҡ, бик тәрән итеп һулап ҡуйҙы.

Шулай ҙа мине иң нык таң ҡалдырғаны — уның күҙ йәштәре булды: керпектәренән эре-эре йәш бөрсөктәре тәгәрәй ине. Оҙатып килеүсемдең был тиклем хафаланыуынан үҙемдең дә күңелем тулышып китте, уның менән бергә минең дә күҙ йәштәрем атылып сыҡты. Тағы ла бер ҡат ҡосаҡлап үҙе менән хушлаштым да атыма һикереп мендем, унан теләр-теләмәҫ кенә айырылып киттем. Артыма боролоп ҡараһам, арыҫланым таш өҫтөнә һикереп менгән дә, күҙҙәрен дә алмай, миңә ҡарап ултыра ине. Үҙе, тамам күҙҙән яҙғансы, артыма боролоп ҡараған һайын, үҙәк өҙгөс тауыш менән үкереп ҡуя ине.

Һеҙ быға ышанмаҫһығыҙ ҙа, батыр дуҫҡайҙарым. Миңә бигерәк күңелһеҙ ҙә, яманһыу ҙа булып китте. Күрәҙәсе әбейҙең алда әле әллә ниндәй михнәттәр күрәсәгемде әйтеүе лә, был изгелекле арыҫлан дуҫым менән айырылышыу һағышы ла мине әллә ниндәй уйҙарға сумдырҙы, атымдың теҙгенен дә тота алмай, уны үҙ яйына ебәрҙем. Шул килеш килә торғас, инде көн дә байып, ҡараңғы төшкәнен дә һиҙмәгәнмен.

Төнөмдө көндөҙгөнән дә шомлораҡ уйҙар менән уҙғарҙым. Атымды ла, үҙемдән алыҫ китмәһен тип, сылбырҙа ғына тотоп ашаттым. Икенсе көндө, унан иртәгеһе көндө лә бер аҙ тыныслана төштөм. Ҡоштар атып, тамаҡ та ялғап алғас, шишмә һыуы менән һыуһынымды ҡандырғас, эскә йән кергәндәй булды. Арыҫлан юлдашым менән айырылышҡанға дүртенсе көн тигәндә, үҙемде михнәт-ғазаптар һағалап торған ошо ерҙәргә килеп еттем.

Башҡа батырҙар һымаҡ уҡ, мин дә яуыз ен-пәрейҙәр менән алыштым, ахырҙа, бүтәндәр кеүек, ошо таш зинданға быҒаулап ташландым.

Ярай әле һинең батырлығың арҡаһында, ҡаһарман Алдар, был мәмерйә гүренән ҡотолоп сыҡтыҡ. Бына, ахыр килеп, Гөлбикәмде күреп ҡауышырға ла яҙған икән! Күрәҙәсе әбейҙең юрағаны раҫ булды. Хәҙер инде миңә һөйөклө кәләшемде үҙебеҙҙең тыуып-үҫкән илгә алып ҡайтаһы ғына ҡалды.

Аҡкөбәк шулай тип һүҙен әйтеп бөтөрөр-бөтмәҫтән, йән-фарманға йүгереп килгән Байегетте күреп ҡалдыҡ. Ул үҙе йүгерә, үҙе бар көсөнә:

— Ул килә! Ул үҙе килә! — тип ҡысҡыра ине.

Байегеттең был һүҙҙәрен ишетеү менән, бөтәһе лә урындарынан һикерешеп торҙо. Бары ирем генә урынынан ҡуҙғалманы:

— Кем килә һуң унда? Ниңә Байегеттең ҡото осҡан шулай? — тигәс:

— Был теге беҙгә уңыш юраған әүлиә ҡарт, — тине Байегет, аһ та уһ килеп. Иремдең быға бер ҙә иҫе китмәй:

— Әүлиә булһа, ни булған? Әйҙә, рәхим итһен! — тигәс, беҙ бөтәбеҙ ҙә уға ҡаршы сыҡтыҡ. Ул инде беҙгә яп-яҡын ғына ине. Алдар менән бөтәбеҙ ҙә, ҡулдарыбыҙҙы күкрәктәребеҙгә ҡаушырып, баштарыбыҙҙы эйеп торҙоҡ. Ул, беҙҙе ошо кеселекле хәлдә күреп, сәләм бирҙе лә:

— Иҫән-һау ғынамыһығыҙ, мосолмандар? — тип һораны. Унан, иремә яҡыныраҡ килеп: — Һине, Алдар, еңеп сығыуың менән ҡотлайым! Олуғ пәйғәмбәребеҙгә шөкөр инде, һеҙгә ул хәйер-фатиханһын ҡыҙғанманы, — тип ҡуйҙы ла, башҡаларға боролоп: — Ә һеҙҙе иң яуыз дошман золомонан ҡотолоуығыҙ менән ҡотлайым, — тине. — Һеҙҙең һәр берегеҙ, был яуыз пәрей мәмерйәһенән ҡотолоп, элекке хәленә ҡайтасаҡ. Мин һеҙгә, ошоларҙы әйтеп йыуатыр өсөн, изге пәйғәмбәребеҙ ҡушыуы буйынса килдем. — Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, бөтәһе лә, ҡыуанышып, әүлиә ҡарттың аяғына баш ороп, ул әйткән һүҙҙәрҙең хаҡлығына мөкиббән ышаныу белдерҙеләр. — Миңә баш ороп тороуығыҙ кәрәкмәй. Аллаһы тәғәләнең рәсүле Мөхәммәт пәйғәмбәргә генә шөкөр итегеҙ, мин тик уның ихтыярын ғына үтәйем. Ә хәҙер бөтәгеҙ ҙә икенде намаҙын уҡырға әҙерләнегеҙ, — тине, үҙенең дә бергә намаҙ уҡыясағын белдерҙе. Бөтәһе лә шунда, уның һүҙен тыңлап, тәһәрәт алырға барып килгәс, намаҙ уҡырға әҙерләнеп, әүлиә ҡарттың ни әйтерен көтөп ҡалдылар.

Мин ҡатын-ҡыҙҙарҙы алып килеүгә, ирем менән Байегеттең ни хаҡындалыр һөйләшеп тороуын күрҙем; уларҙың минән йәшерен серҙәре булмағас, үҙемдең дә кәңәштәренең уртаһында булғым килде.

Мин улар янына килеп еткәс тә, ирем:

— Беләһеңме, беҙҙең урман батыры ни эш ҡуптармаҡсы була? — тип көлөп ҡуйҙы. Мин, быға аптырабыраҡ:

— Юҡ, белмәйемсе! — тигәйнем, Алдар:

— Ул бит кәләш йәрәшмәксе була! — тине. Миңә уның был ниәте бик мәрәкә күренде.

— Ә кемде һуң! — тип һораным.

— Нуғай ҡыҙын, — тине Алдар.

— Башта уның үҙ теләген белергә кәрәк: ризамы, юҡмы әле ул, — тинем мин.

— Бына шул хаҡта һөйләшәбеҙ ҙә инде, — тип яуапланы Алдар. — Ә ҡоҙалау эшен һиңә ҡушмаҡсы булдыҡ. Һин уның ҡылын тартып ҡарамаҫһыңмы? Байегет үҙе, уларҙы һыйлап йөрөгәндә, бер-ике һүҙ әйтеп, ҡармаҡ та ташлап ҡуйған инде. Шулай булғас, Зөһрәм, һин мине тыңла: беҙ намаҙ уҡырға барғанда, үҙ эшегеҙҙе

бөтөргәс тә, Гөлбоҫтанды ситкәрәк алып китеп, үҙе менән һөйләшеп ҡара әле.

Ирем шулай тип һүҙен ҙә әйтеп бөтмәне, әүлиә ҡарт намаҙға саҡырҙы. Алдар менән Байегет ир-ат янына китте, ә мин, ирҙәр кейемендә булһам да, әүлиә ҡарт йә белеп ҡуйыр тип, үҙебеҙҙең зат эргәһенә ашыҡтым. Шулай итеп, бөтә ҡатын-ҡыҙ, ир-ат ҡоронан айырым йыйылып, уларҙың намаҙ уҡый башлағанын көтөп торҙоҡ. Шунда беҙ әүлиә ҡарттың бәләкәй генә ҡалҡыулыҡҡа сығып баҫҡанын, ә батырҙарҙың көтөүселәр, башҡа тотҡондар менән бергә уның алдында теҙелешеп торғанын күрҙек. Уларҙың намаҙы байтаҡҡа һуҙылды, етмәһә, әүлиә ҡарт намаҙҙан һуң вәғәз дә уҡыны. Мин, намаҙҙары бөткәс, улар эргәһенә барып, әүлиә ҡарттың һөйләгәнен тыңлап торорға булдым. Ул, батырҙар менән башҡаларҙың уртаһында баҫып торған килеш, былай тип һүҙ башланы:

— Минең хәҙер һеҙгә үҙенең хаҡ мосолмандары хаҡында ата һымаҡ хәстәрлек күргән олуғ пәйғәмбәребеҙҙең һуңғы ихтыярын ғына еткерәһем ҡалды.

Бында тотҡонда интеккәндәрҙең, Гөлбоҫтан менән Таңһылыуҙан башҡа, бөтәһе лә үҙ илдәрен ҡайтып күрәсәктәр. Ә үҙ илдәренән айырылған был ике бисара, күргән ғазаптары хаҡына бәхеттәрен бында табып, ике батырға кәләш булып ҡаласаҡ. Һин мине ишетәһеңме, батыр Зөһрә, уларҙың береһе һинең ярҙамсың булған урман батыры Байегеткә сығасаҡ, ә икенсеһе Муйнаҡ туғаны Ҡарабай батырҙың хәләл ефете буласаҡ. Уларҙың шулай ситтә ҡалыры тыуған саҡта уҡ тәҡдирҙәренә яҙып ҡуйылған, тине. Шул саҡ әүлиә Мерәс ҡартты күреп ҡалып, уны үҙ янына саҡырҙы. Мерәс ҡарт уның аяғына килеп йығылғас, әүлиә уға: — Яуыз пәрейҙең мәғәрә һаҡсыһы булһаң да, һин аяғыңа баҫ, — тип торорға ҡушты. — Һин хәҙер изге пәйғәмбәребеҙҙең шәфҡәтенә ирештең. Ҡылған гонаһтарыңды ғәфү ителгәнгә һана́. Иртәгә уҡ һин үҙеңдең тыуып-үҫкән ерҙәреңде ҡайтып күрерһең. Тик шуны онотма: ҡылған хаталарыңды хәтерләп, хоҙайҙың шәфҡәтен һорап ғибәҙәт ҡыл, сөнки әжәлең вә нәфәкәң* әле һине бер мөсәл буйы һағалап йөрөр. — Шунан һуң әүлиә ҡарт Аҡкөбәккә күҙ һирпеп алды ла: — Ә һин, Иртыш башының айбарлы егете, иртәгә ҡояш сығып килгәндә, кәләшең менән икәүләп ҡайның Ҡотлобай йәйләүен күрерһең. Унан һуң ата-әсәңде лә, ун бер туғаныңды ла табырһың. Улар бөтәһе лә иҫәнһау, — тине.

Шунан әүлиә, минең Алдар артында торғанымды күреп:

— Бар, Зөһрә батыр, нуғай ҡыҙы менән төркмән ҡыҙына барып әйт: уларға мин әйткән батырҙарҙың хәләл ефете булырға яҙған, шуны үҙҙәре белеп торһондар, — тине.

Мин уның был һүҙҙәрен ҡыуанып ҡабул иттем. Ҡатын-ҡыҙҙар төркөмөнә барһам, Гөлбоҫтан менән Таңһылыу башҡа әхирәттәренән айырылып, бер ситтәрәк ултыралар ине. (Мин һеҙгә, ҡәҙерле ҡунаҡтарым, шуны әйтергә лә онотканмын: Гөлбоҫтандың Байегеткә сығырға ризамы-юҡмы икәнен һорашырға өлгөрмәгәйнем.) Яндарына килгәс:

— Ни хаҡында серләшәһегеҙ былай? — тигән булдым. Шунда улар икеһе бер юлы:

— Аһ, Зөһрә батыр! Бөгәсә беҙ икебеҙ ҙә бер үк төш күрҙек. Икебеҙгә лә илгә әйләнеп ҡайтырға яҙмағандыр, күрәһең, — тинеләр.

— Ниндәй төш күрҙегеҙ һуң? — тип аптыраным мин. — Һөйләп бирегеҙ улайһа.

Шунан Гөлбоҫтан төшөп һөйләп бирҙе.

— Мин былай тип күрҙем, — тине ул. — Бынау әүлиә ҡарт, мине ҡулымдан етәкләп алды, имеш, тим, беҙҙе һыйлап йөрөгән анау Байегет исемле егет алдына килтереп: — «Бына был ҡыҙ һинең кәләшең булыр», — тине.

Мин шунда Гөлбоҫтандан көлөбөрәк:

— Ә һуң батыр үҙе шат инеме быға? — тип һораған булдым.

— Бик шатланған һымаҡ ине, ҡыуанысынан хатта әүлиәнең аяғына йығылды, — тине Гөлбоҫтан, ҡыҙара биреп.

— Ә һин кейәүеңдән ҡәнәғәт инеңме һуң? — тип һорағас, ул:

— Әлләсе!.. — тип ҡулдары менән йөҙөн ҡапланы. Мин шунда быны яҡшыға булыуын уйлап, дуҫым Байегеткә: «Ул да һине оҡшатҡан», — тип әйтергә ҡарар итеп ҡуйҙым.

Шунан Таңһылыу ҙа ниндәй төш күргәнен һөйләне.

— Мин яңғыҙым ошо әүлиә ҡарт эргәһендәрәк баҫып торам, имеш, тим, ә ул әллә ни саҡлы ирҙәр араһынан оҙон буйлы, ҡапҡара һаҡаллы бер батырҙы саҡырып сығарҙы ла, миңә күрһәтеп: «Бына һиңә, Ҡарабай батыр, ошо төркмән ҡыҙы кәләш булыр. Үҙ илендә ул бәхетһеҙ булһа ла, һинең менән бәхетле йәшәр», — тине.

Мин был ике ҡыҙҙың да күргән төштәрен тыңлап, аптырашымдан шаҡ ҡатып торҙом. Шулай бер аҙ өндәшмәй торғас:

— Ысынлап та, юрағанығыҙ һеҙҙең тап килгән. Әле генә мине ул изге ҡарт һеҙ һөйләгән батырҙарға кәләш булырға тәҡдирегеҙгә яҙылғанлығын әйтергә ебәрҙе. Әйҙәгеҙ, уның үҙе эргәһенә яҡыныраҡ барығыҙ, ни әйткәнен үҙ ҡолаҡтарығыҙ менән ишетеп торорһоғоҙ, — тип быларҙы ир-ат төркөмөнә яҡыныраҡ алып килдем. Уларҙың төшөн Алдарға һөйләп бирергә тип, уның янына ғына атлағайным, шул мәлдә әүлиә ҡарт Ҡарабай менән Байегеткә:

— Батырҙар! Үҙегеҙҙең кәләштәрегеҙ янына барығыҙ, ана тора улар! — тимәһенме!

Ҡарабай ҡыуанғандырмы-юҡмы, уныһын белмәйем, ә бына Байегеттең ауыҙы ҡолағына еткәйне, шунда уҡ кәләше янына йүгереп барып торҙо.

Әүлиә, бер аҙ өндәшмәй торғандан һуң, минең иремә ҡарап:

— Алдар батыр! — тине. — Иртәнгәсә, ҡояш сыҡҡанға саҡлы, һин Зөһрәң менән бында ҡалырһың. Байегет, Ҡарабай батырҙар ҙа кәләштәре менән бында ҡалырҙар. Ун көтөүсе менән пәрейҙең бөтә мал-тыуары һинең үҙ ҡарамағыңда булыр. Аллаһы тәғәләнең ҡушыуы буйынса, уларҙың барыһын да үҙ йәйләүеңә алып ҡайт та Ҡарабай менән урман батырына ҙур туй үткәр. Шунан һуң ғына улар үҙ йәйләүҙәренә ҡайтып китерҙәр.

Әүлиә шул һүҙҙәрен әйтеп бөтөрөүе булды, теге болғар илсеһе, уның алдына йүгереп сығып, теҙләнеп ултырҙы ла, ике ҡулын уға һоноп:

— Ә минә үҙ батшама нисек ҡайтып етергә ҡушаһың? — тип ялбарҙы.

— Башҡалар нисек ҡайтһа, һин дә шулай ҡайтып етерһең, — тине әүлиә.

— Минең әле илдәр гиҙеп, тағы байтаҡ нәмәләр күреп йөрөгөм килгәйне. Батшаға һөйләп бирергә буш ҡул менән генә ҡайтмаһам ине, — тине уға болғар.

Әүлиә ҡарт шунда:

— Һай, был әҙәм балаһының маҙаһыҙлығы! — тип үртәнеп ҡуйҙы. — Донъя ҡыҙырып, мажаралы хәлдәр күҙәтеп йөрөүҙән туймаҫ икән! Һинең күп йөрөүеңдән ни мәғәнә? Ҡайтып, күргәнеңә күрмәгәнеңде ҡушып, арттырып һөйләрһең дә, ысынлап күргәнеңә лә ышанмаҫтар.

Шунан әүлиә ҡарт, бөтәбеҙгә лә ҡарап: — Һеҙ, үҙ илендә күсенеп йәшәр халыҡтар, уның кеүек сыпрандаҡ була күрмәгеҙ. Йорт-ерегеҙҙе, йәйләүҙәрегеҙҙе ихтыяжһыҙ ташлап китәһе булмағыҙ. Ә был илгиҙәр болғарҙың ырыҫһыҙ булыуы бик мөмкин: уның бөтә күргән-белгәне, ҡайтып һөйләгәс, үҙ батшаһына төптө ялған булып күренеүе бар, — тине лә күҙҙән юғалды.

## ИЛЛЕ ДҮРТЕНСЕ КИС

Беҙ, әүлиә ҡарттың шулай кинәт кенә юҡ булыуына иҫ-аҡылыбыҙ китеп, ҡайҙа булды һуң ул тигәндәй, бер-беребеҙгә ҡарашып алдыҡ. Шунан бындай мөғжизәләрҙе күп күргән Алдар, бөтәбеҙгә лә ҡарап:

— Был хәлгә бер ҙә иҫегеҙ китмәһен, батырҙар. Беҙгә ебәргән кәрәмәте өсөн ҡөҙрәтле аллаһы тәғәлә менән уның изге пәйғәмбәренә шөкөр итегеҙ ҙә был әүлиә әйткән бөтә һүҙҙәрҙең раҫҡа сығыуына шикләнмәгеҙ, — тине.

Шунан ул Мерәс ҡарт менән болғарға, көтөүселәргә дейеү пәрейе талап йыйған бөтә хазиналарҙы мәмерйәнән сығарып бөтөрөргә ҡушты. Унан уларҙы бөтәһенә лә тигеҙ итеп өләшеп бирҙе. Үҙенә ул тик пәрейҙән һалдырып алған яу кейемдәре менән уның толпарын ғына ҡалдырҙы. Ә Мерәс ҡарт мәмерйә ауыҙында тотоп һаҡта торған ҡылысты Ҡарабайға бүләк итте. Әүлиә ҡушҡанынса, икенсе көндө ҡайтып китәсәк кешеләргә ул, үҙ аттарына өҫтәп, өсәр-дүртәр атты пәрейҙең йылҡы өйөрҙәренән тотоп бирергә ҡушты. Был аттарҙы уларға Алдар арҡан остарынан билбауҙарына бәйләп ятырға кәңәш бирҙе. Ә уның үҙенә инселәнгән башҡа малдарҙы ун көтөүсе төнө буйы һаҡлап сығырға булды. Шулай итеп, бөтә юл кәрәк-ярағын хәстәрләп бөткәс, көндөң ҡалған тиклемен һый-хөрмәт, уйын-көлкө менән, ҡымыҙ эсеп, дуҫтарса серләшеп-һөйләшеп үткәрҙек. Һәр кем үҙенең ҡайтып төшөүенән ниндәй ҡыуаныс буласағын күҙ алдына килтерҙе, нисек итеп ҡаршы алыуҙа-

рын тоçмалланы. Ҡояш байып, эңер төшкәс кенә, беҙ бер-беребеҙ менән хушлаша башланыҡ. Аҡкөбәк, һаман Алдарға рәхмәт әйтеп бөтә алмайынса, уның менән ҡосаҡлашып, күҙ йәштәре менән ант итеп, аралар алыç булһа ла, барыбер беҙгә килеп сығасағын әйтте.

Тик һеҙгә дөрөçөн әйтәйем, ҡәҙерле ҡунаҡтарым, вәғәҙә биреүҙәре еңел булһа ла, уны үтәүе ҡыйыныраҡ икән шул: Аҡкөбәкте күпме генә көтһәк тә, уның, исмаһам, бер генә ҡабат та ҡунаҡҡа килгәнен күрмәнек.

— Хикәйәтең, һөйөклө Зөһрә, осланып килә булһа кәрәк? — тип ҡуя шул саҡ Йылҡыбай. Зөһрә:

— Эйе шул, бәләкәй бер өлөшө генә ҡалды. Әллә һеҙҙе бик ялҡытып ташланыммы? — тигәс, Аллабирҙе шунда:

— Ай, юҡ, юҡ! — тип ҡысҡырып уҡ ебәрә. — Зинһар, алла хаҡы өсөн, дауам итә күр! Минең ҡорҙаштың ул, берәй һүҙ ҡыçтырып ҡуймаһа, теле ҡысыта башлай. Саҡ ҡына өндәшмәй торһа ла, күңеле күмһеп китә. Мин һеҙҙең нисек итеп ҡайтып еткәнегеҙҙе лә, көслө Ҡарабай менән сая Байегеттең туйҙарын нисек үткәргәнегеҙҙе лә, унан һуң ни булғанын да тыңлап бөтөргөм килә.

— Ярай улайһа, — тине Зөһрә, — тик иң элек берәй туçтаҡ ҡымыҙ эсеп алығыҙ.

Былар шулай ҡымыҙ эсеп алғас, Зөһрә һөйләүен дауам итте.

— Һеҙгә һөйләгәнемсә, беҙ шулай бер-беребеҙ менән хушлаштыҡ та йоҡлап алырға булдыҡ. Мин ике киленде лә үҙем менән бергә алып, айырым яттыҡ. Көндөҙгө мәшәкәттәрҙән бик арыған булғанлыҡтан, беҙ бик ҡаты йоҡланыҡ. Күҙгә ҡояш нуры төшә башлағас ҡына уяндыҡ. Торһаҡ, әүлиә ҡарт юрағандарҙың бөтәһе лә дөрөçкә сығыуын күреп, иçебеҙ китте: ул ҡайтып китергә ҡушҡандарҙың береһе лә тороп ҡалмаған, малдары ла юҡ ине. Үҙ күҙҙәребеҙгә үҙебеҙ ышанмай торһаҡ та, ул әйткән һүҙҙәргә ышанмай ҙа булдыра алманыҡ. Тик кешегә ышанып етмәç бер болғар ғына аһылдап йүгереп килде лә:

— Береһе лә ҡалмай, юҡ булдылар ҙа ҡуйҙылар! Ҡайҙа булдылар икән? — тине. Уға ҡаршы ирем тыныс ҡына:

— Улар хәҙер ҡайтып та еткәндәрҙер инде. Әгәр теләгән булһаң, һин дә ҡайтып еткән булыр инең, — тип яуапланы.

— Аһ, батыр, дөрөçөн генә әйткәндә, мин ул ҡартҡа ышанманым. Беҙҙең болғар батшаһы һарайында уның ише тәкүә ҡарттарҙы мин күп күрҙем. Көн һайын биш ваҡыт намаҙҙарын ҡалдырмаһалар ҙа, торғаны менән алдаҡсы була торғайнылар, — тигәс, ирем, болғарҙың һүҙҙәрен ҡырт киçеп:

— Һин; үҙегеҙҙекеләрҙе генә алдаҡсыға һана! — тине. — Ә беҙгә килеп пәйҙа булғаны ундайҙарҙан түгел. Үҙ күҙҙәрең менән күрә тороп, уға тағы тел тейҙерәһе булһаң, уның ҡәҙерен белмәүең, бәдбәхетлегең өсөн, үҙеңде яңынан мәмерйәгә ябып, таш менән ҡаплап ҡуйырмын!

Был һүҙҙәрҙе ирем бик ҡаты итеп әйткәс, болғар бөтөнләй ҡойолоп төштө, Алдарҙың аяғына йығылды.

— Эй, һин әшәке йән, һарай әһеле, — тип мыçҡыллап әйтте ирем. — Тор ҙа ана атыңды эйәрлә!

Шунан һуң беҙ ҙә, аттарыбыҙҙы эйәрләп, юлға сығырға йыйына башланыҡ. Шул арала унған Байегет ашарға ла әҙерләп өлгөргән. Тамаҡ ялғап алғас, пәрейҙән ҡалған мөлкәтте аттарға артмаҡлап, уйын-көлкөлө һүҙҙәр һөйләшеп, юлға ла сыҡтыҡ. Бер-беребеҙ менән үҙебеҙ күргән хәлдәр хаҡында һөйләшеп Алдар менән мин, кәләштәре менән кейәүҙәр гел генә алдан барҙыҡ, ә беҙҙең арттан, малдарҙы әйҙәп, көтөүселәр килде.

Бер көн буйы дөм ҡара урман эсенән барҙыҡ. Теге болғар юл буйынса болғар батшалығы, бай батшаның үҙе, таш һарайҙары, уларҙың алтын-көмөш йыһаздары хаҡында һөйләп, беҙҙе албырғатып килде. Ул тағы ярандарының батшаны нисек ололоҡлауҙарын, унын бихисап сиреүен, батырҙарын, улар араһында үҙенең ниндәй батыр булғанын, болғар батшаһының бер мәл уны хатта ғәскәр башлығы итеп ҡуйғанын, күрше халыҡтарға яу асып, уларҙы тар-мар иткәнен, дошман ғәскәренең башлығын үҙ ҡулы менән үлтергәнен һөйләне. Ул быларҙы, үҙен иң батыр яугирҙарҙың береһе итеп күккә күтәреп, мөкиббән китеп тәфсирләп бирҙе. Тап шул ваҡыт, арттан көтөүселәрҙең ҡысҡырған тауышын ишетеп, туҡтап ҡалдыҡ. Ә ирем, болғарҙың үҙ батшаһы хаҡында һөйләгәне кеүек итеп:

— Мин һиңә артта ниндәй шау-шыу ҡупҡанын белеп килергә ҡушам, — тигәс, болғар, үҙенең маҡтаныуҙарынан айнып та етмәй, тауыш сыҡҡан яҡҡа сабып та сығып китте. Шул ике арала беҙ малдарҙың нимәнәндер өркөп, беҙгә табан эркелешеп килеп сыҡҡанын күреп ҡалдыҡ. Шуның артынса сабып килгән болғар ҙа күренде, уны ҡот осҡос бер айыу баҫтырып килә ине. Айыу уны ҡыуып етте лә, атының арт һанынан эләктереп алып, ергә ауҙарҙы. Ә болғарыбыҙ, атынан төшә һалып, атын ботарларға керешкән айыуға атаһы урынға, ҡобараһы осоп, йән-фарманға беҙгә табан йүгереп килә, үҙе, ярҙам һорап, ҡысҡыра ине. Шунда ул, абынып китеп, тәкмәсләп барып төштө: айыу талағандай, ҡолаған ерендә һаман ҡото осоп үкеренә бирҙе. Был күренеш беҙҙә көлкө тыуҙырҙы. Әммә Муйнаҡ туғаны Ҡарабай шул саҡ атынан һикереп төштө лә, ҡылысын һурып алып, туп-тура айыуға ҡаршы йүгерҙе. Ә айыу, уның йүгереп килгәнен күреп, артҡы аяҡтарына алсайып торҙо. Ҙурлыҡҡа теге мин үлтергән аҡ айыуҙан бер ҙә ҡайтыш түгел ине. Шулай ҙа көслө Ҡарабай, былдай януарҙар менән алышып өйрәнгәс, айыуҙы үҙенә яҡын да килтермәй бер һелтәүҙә үк уның бер аяғын сабып өҙҙө, икенсе киҙәнеүҙә башын яра сапты. Беҙ уның эргәһенә килгәс, ул, иремә табан әйләнеп:

— Мин һинең бүләгеңде һынап та ҡараным, Алдар батыр. Был ҡылыс миңә төҫ бирерлек, — тип ҡуйҙы.

Беҙ бер-бер артлы уның батырлығын, таҫыллығын маҡтаныҡ, кәләшенә лә был ҡаһарманлыҡтың бик оҡшап төшкәнен күрҙек. Ә Байегет, тирә-яғына ҡаранып:

— Болғар батшаһының батыр ғәскәр башлығы ҡайҙа булды һуң әле? — тип һораны.

— Ана ята бит, тик белмәйем, ҡурҡыуынан йәне сыҡмағанмы икән? — тинем мин. Шунан айыуҙың ҡырҡылған аяғын алып, айыу

үкергән тауыш сығарған булып, уның эргәһенә барҙым, айыу табаны менән быны типкеләй башлағайным, болғар йәнә илереп ҡысҡырынырға кереште. Ә беҙгә көлкө. Шунан мин уны, һул ҡулым менән билбауынан күтәреп алып, аяғына баҫтырҙым, айыу табанын үҙенә күрһәтеп:

— Бына һин сабып өҙгән теге ғәскәр башлығының ҡулы! — тинем. Бөтәбеҙ ҙә һыныбыҙ ҡатып көлөштөк. Ул, үпкә белдереп:

— Һеҙгә көлкө лә бит, айыу минең һәрмәмәгән еремде ҡалдырманы, — тине.

— Ай-һай, — тине шунда Байегет, — болғар батшаһының бөтә батырҙары ла һинең ише булһа, ул батшалыҡ оҙаҡ торормо икән? Ҡешеләр булмаһа, уны айыуҙар барып аҫтын-өҫкә килтереүе бар.

Шул арала көтөүселәр, өркөшкән малдарҙы бер ергә йыйып алып, беҙҙең янға әйҙәп килтерҙеләр. Был уҫал айыуҙың тап көтөү уртаһына ташланып, бөтә малдарҙы тырым-тыраҡай таратып ебәргәнен, уларҙы көскә йыйып алыуҙарын һөйләнеләр.

Ҡарабай, үлтергән айыуҙың тиреһен тунап алғас, кәләшенең атына япты. Беҙ йәнә юлға ҡуҙғалдыҡ, кискә саҡлы барғас, урман эсенән сығып, бер йылға буйына туҡтаныҡ, шунда ҡунып китергә булдыҡ.

## ИЛЛЕ БИШЕНСЕ КИС

Иртәгеһенә, таң һарыһынан тороп, тирмәләребеҙҙе һүтеп алдыҡ та, бер нигә лә юлыҡмай ғына төшкә тиклем барғас, Урал һырттарына килеп еттек. Бынан инде үҙебеҙҙең йәйләү ерҙәре лә күренеп ята ине. Мал-тыуар менән яйлап ҡына барғанда ла ике көнлөктәй генә юл ҡалғайны. Урал тауҙарынан иң бейеге булған Ирәмәлде беҙ һул ҡулда ҡалдырып киттек. Ирем беҙгә бөтә тау-йылғаларҙың исемен әйтеп, ете ырыу йәйләүлектәренең сиктәрен күрһәтеп килде.

— Беҙҙең йәйләү Яйыҡтың түбән юҫығында, яҡшы атта барғанда бынан ике көнлөк юл өҫтөндә ята, йәйләүлектәребеҙ ҡола ялан булғанлыҡтан, мал көтөүгә бик уңайлы. Беҙ унда иртәгә һуңға төшкә барып та етербеҙ инде, — тине.

Шулай бара торғас, өсөнсө көндө алыҫта икһеҙ-сикһеҙ дала йәйрәп ятҡанын, ә дала буйлап көтөү-көтөү малдар юшап йөрөгәнен күрҙек. Был ил бары Алдарҙың үҙенә генә билдәле булғанлыҡтан, ул беҙгә Яйыҡ буйындағы төрлө ауылдарҙы күрһәтеп, һәр береһен аҡһаҡалдарының исеме менән атап әйтә барҙы. Бер аҙ бара биргәс, көтөүселәр ҙә күренде[78]...

...Алдарҙы юғалтыу миңә шундай ауыр ҡайғы-хәсрәт һалды, әле булһа унан арына алмайым. Элек уның менән бергә ғүмер иткән саҡтар, ни тиклем йәнгә рәхәт булһа, хәҙер шул тиклем күңелһеҙ, яманһыу. Хәйер, уны иҫкә төшөрөп, ҡайғымды яңыртып тормайым инде. Ярай, ары тыңлағыҙ...

...Шулай итеп, беҙҙең эргәнән сабышып барған йәш-елкенсәк егеттәр араһында беҙ юлды дауам иттек. Улар, уйнап-көлөп, бер-

береһен аттарынан тартышып килделәр. Ирем, улар араһында бик саялары барлығын күреп:

— Батырҙар! Һеҙ минең кәләшем булған элекке ҡыҙ батыр менән көс һынашып ҡарайһығыҙмы әллә? — тип һорап ҡуйҙы.

— Әгәр һин рөхсәт итһәң, бик риза булыр инек, — тип яуапланы улар.

— Бар, Зөһрәкәйем, — тине миңә ирем. — Үҙҙәренә ниндәй еңгә булғанлығыңды бер күрһәт әле.

Шунда мин уҡ-һаҙағымды сисеп алдым да улар менән бергә сабып киттем. Минең менән көс һынашып ҡарарға булған тәүге егетте мин эйәренән бик еңел алып ырғыттым, унан икенсеһе менән өсөнсөһөн дә шулай ырғытҡан арала миңә ҡаршы килеүселәр һаман ишәйә барҙы. Улар бөтәһе лә, туҡтап, минең таҫыллығымды күҙәтеп торалар ине. Ҡапыл шул саҡ урталарынан урта йәштәрҙәге киң яурынлы, оҙон буйлы бер ҡараһаҡал батыр атылып сыҡты ла минең эргәмә сабып килде. Мин уның менән яҫҡышып алдым да:

— Әйҙә, Алдар янына сабып барайыҡ та мине шунда барып еткәс кенә алып ырғытырһың, — тинем. Мин уны яғаһынан, ә ул мине билбауымдан эләктереп алғайны. Мин әйткәнгә риза булып, мине алып ырғытырға маташып ҡараһа ла, ҡулынан килмәне. Беҙ инде Алдар янына килеп еткәс, бөтә көс-таҫыллығымды һалып, уны атынан ҡайырып алдым да Алдарҙың алдына ғына ырғытып ебәрҙем. Ирем, атын туҡтатып, миңә һоҡланып ҡарап торҙо ла:

— Бәй, минең көслө Ырыҫбай дуҫым! Һин мине аттың өҫтөндә ҡаршыламай, аҫтында ҡаршыларға булдыңмы? — тип көлөп, атынан һикереп төштө лә уны ҡосаҡлап алды. Атта иң оҫта йөрөүсе һаналған Ырыҫбай батыр, үҙенең ҡолауынан оялып, Алдарға сәләм дә биреп тормай, тумҫыҡ сырай менән:

— Мине аттан ырғытырлыҡ ниндәй батыр алып килдең? — тине. Алдар уға:

— Был минең кәләшем, элекке ҡыҙ батыр булыр, — тип яуап бирҙе.

— Ҡайһылай инде ул һинең кәләшең була? — тип ҡыр батыры шат тауыш менән ҡысҡырып уҡ ебәрҙе. — Улай булғас, ғәрләнеп тораһы ла юҡ: ул минән көсһөҙөрәк булһа, һиңә кәләшлеккә лә ярамаҫ ине!

Унан Ырыҫбай иремде үҙе ҡосаҡлап алып, уны ҡотлағас, минең менән дә, Ҡарабай, Байегет менән дә күрешеп сыҡты ла, атына атланып, беҙҙең менән бергәләшеп китте.

Шулай итеп, беҙ Алдарҙың йәйләүенә лә яҡынлаштыҡ: ул инде тиҙ ағышлы Яйыҡ ярында ус төбөндәге һымаҡ күренеп ята ине. Йәйләүҙән беҙгә ҡаршы тағы әллә күпме һыбайлылар эркелешеп сыҡты. Уң яғыбыҙҙан беҙгә ҡаршы илленән ашыу һыбайлы кеше килеп сыҡҡанын күргәс, Байегет тоҫмаллап ҡарап торҙо-торҙо ла:

— Былар бит Буранбай менән Сибай ҡайтып килә түгелме? Ана арттарынан мал-тыуар ҙа эйәргән! — тип ҡысҡырып ебәрҙе. Шунан үҙе етәкләп алған пәрей толпарын Ҡарабайға тоттора һалып, улар ҡаршыһына елдереп китте. Тегеләр ҙә, беҙҙе күреп, сабып килеп еттеләр. Беҙ, шатланышып, Буранбай, Сибайҙар менән ҡосаҡлашып

күрештек. Бөтә был хәлдә ауылдан күреп торған Ҡинйәбулат ҡарт та, аҡһаҡалдарын эйәртеп, беҙгә ҡаршы ыңғайлаған. Ирем уның менән тигеҙләнгәс, атынан һикереп төштө лә, уның артынса мин дә төшөп, аҡһаҡалдар менән күрештек. Улар, иремде ҡосаҡлап алып, иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуына ҡыуанышып, уның үҙе теләгән кәләше менән ҡайтыуын хуплап, ҡотланылар. Ә Ырыҫбай, Ҡинйәбулат ҡарт янына килеп:

— Ә мине Алдар кәләше аттан алып ырғытыу менән ҡотлағыҙ! — тине.

— Ай-вай! — тип башын сайҡаны Сибай ҡарт. — Һин, Зөһрә батыр, беҙҙең итте лә, ҡымыҙҙы ла ауыҙ итмәй тороп, иң көслө батырҙы эйәренән ырғытҡанһың икән!

Был һүҙҙәрҙе ишетеп хайран ҡалған Ҡинйәбулат ҡарт Алдарҙы икенсе ҡабат батыр ҡатыны менән ҡотланы ла:

— Ашарға ла әҙер инде, әйҙәгеҙ, — тип үҙенең тирмәһенә саҡырҙы.

## ИЛЛЕ АЛТЫНСЫ КИС

Тирмәләр яҡында ғына булһалар ҙа, беҙ аттарыбыҙға атланып киттек. Беҙҙе ҡаршы алырға бөтә ауыл күтәрелеп сыҡты. Ауыл, әйткәнемсә, Яйыҡ яры буйынса һуҙылып, осо-ҡырыйы ла күренмәҫлек ҙур ине. Элек мин беҙҙең йәйләүгә Алдарҙың яҡташтары килтергән тирмәләрҙе күреп аптыраған булһам, хәҙер инде уларҙы йөҙәрләп күргәс, бигерәк тә хайран ҡалдым. Тирмәләрҙең тирә-яғы мыжғып йөрөгән мал-тыуар менән тулған. Ҡинйәбулат ҡарт, үҙ тирмәһенә килеп етеп, атынан төшкәс, беҙ ҙә төштөк.

Ҡинйәбулаттың ҡарсығы беҙҙе ҡаршы алғанда, ҡарты уға, мине күрһәтеп:

— Беҙҙең Алдарҙың кәләше бына ошо булыр, киленебеҙ була инде. Әйҙә, әхирәттәре менән бергә тирмәңә саҡыр. Ә мин Алдар менән уның дуҫтарын үҙемдекенә алып инәйем, — тине.

Тирмәгә ингәс, мин бөтә ерҙә лә бөхтәлек, таҙалыҡ күрҙем, урындыҡтарға төрлө төҫтәге балаҫтар йәйеп ҡуйылған, ә тағараларға төрлө ҡатын-ҡыҙ кейемдәре, ҡашмауҙар эленгән. Беҙ ултырышып та өлгөрмәнек, тирмәгә әллә күпме ҡыҙ-ҡырҡын килеп тулды. Уларҙың һәр береһе, минең менән иҫәнләшеп, килен булып төшөүем менән ҡотларға керешт‍е. Ҡайһылары, беҙҙең нисек ҡайтып етеүебеҙҙе белергә теләп:

— Иҫән-һау ғына ҡайтып еттегеҙме? Юлда ул-был нәмәгә осраманығыҙмы? — тип һорашырға тотондолар. Мин уларға һөйләй генә башлағайным, шунда ит ҡуйылғанын да килеп әйттеләр. Хужабикә, урынынан тора һалып, мине етәкләп тә алды, ә әхирәттәремде бүтәндәре етәкләне. Тирмәнән тышҡа сыҡҡас, мин ике ергә балаҫтар йәйелеп, улар өҫтөнә төрлө тәмле-татлы ашамлыҡтар ултыртып ҡуйылғанын күрҙем. Урындың береһе ир-атҡа, икенсеһе ҡыҙ-ҡырҡын өсөн ине. Мин шунда уҡ күҙем менән генә иремде

эҙләргә керешкәйнем, унын аҡһаҡалдарҙы эйәртеп, Ҡарабай, Байегет менән бергә килә ятҡанын күреп ҡалдым.

Шунан һуң ир-ат менән ҡыҙ-ҡыркын бер-береһен күреп-танып торорлоҡ ҡына арала ултырышып алдылар. Мин һеҙгә, ҡәҙерле ҡунаҡтарым, үҙемдең бисә-сәсә араһына ҡатышырға яратмағанымды әйткәйнем инде, тик, яҙмыштан уҙмышың юҡ икән, ни хәл итәһең инде, бисә-сәсә араһына ҡатышырға тура килде. Уларҙың береһе йылы һыу менән таҫтамал тотоп килде лә, мин ҡулдарымды сайҡап алғас, Таңһылыу менән Гөлбоҫтан да, башҡалар ҙа шулай иттеләр. Тәүҙә беҙҙе бик һимеҙ һарыҡ ите менән һыйлағас, унан түңәрәкләп киҫелгән ҡаҙы килтереп ултырттылар. Бының артынса, ғәҙәттәгесә, ҡымыҙ эсеү башланды. Шулай ашап-эсеп ултырғансы, байтаҡ ваҡыт үтеп китте, беҙ урындарыбыҙҙан торошҡанда, ҡояш инде ҡискә һарҡый башлағайны. Мин, ҡулымды сайҡап, хужабикәгә һый-хөрмәте өсөн рәхмәт әйтеп торғанда, ирем менән хужанын үҙе лә беҙгә килеп етте. Ҡинйәбулат ҡарт:

— Ашап туйҙыңмы инде, ҡәҙерле киленкәйем? — тигәс, мин уға рәхмәт әйттем. Шунан ул, ҡатынына боролоп:

— Ҡара әле, Балдыбикә, Алдар батыр йәш кәләше менән үҙ тирмәһенә китер, ә һин килендең ике әхирәтен дә үҙ янына ал, туйға саҡлы улар һинең менән йәшәп торһондар, — тигәйне, йәш килендәр, оялышып, йөҙҙәрен еңдәре менән ҡаплай һалған булдылар. Унан улар хужабикә менән китеп барҙылар, ә мин Алдарым менән тороп ҡалдым. Ул мине гел ир-ат араһында ғына күреп өйрәнгәнлектән, мине улар эргәһенә алып китте. Ә улар, Алдарҙың минең менән килгәнен күргәс, бөтәһе лә беҙҙең янға килеп, һәр береһе минең йөҙөмә ҡарап алырға тырыша ине. Һүҙ тынып торған арала, улар иремдән юлда ниндәй хәлгә тарыуыбыҙҙы һорашҡас, ирем уларға:

— Дуҫҡайҙарым! Һеҙ минең күп һөйләргә яратмағанымды үҙегеҙ ҙә белеп тораһығыҙ. Әле бигерәк тә һеҙҙең иҫән-һау булыуығыҙҙы күреп, шатланып бөтә алмаған саҡта, мин һеҙгә ни хаҡында һөйләргә лә белмәйем, — тип кенә ҡуйҙы. — Шулай булғас, мин хәҙер һеҙгә шундай бер тел биҫтәһен табып бирермен, ул һеҙгә аҙна буйы һөйләһә лә, һөйләр һүҙе бөтмәҫ унын. Өҫтәүенә, ул күргәненә күрмәгәнен дә ялғап ебәрер. Ул шундай ҡыҙыҡ әкәмәт нәмәләрҙе күреп һөйләп бирер өсөн генә донъя ҡыҙырып йөрөй.

Шул саҡ Алдарҙың артында ғына:

— Мин әҙер ул. Теләһәң, хәҙер үк һөйләргә ҡуш! — тигән тауыш ишетелде, ирем артына боролоп ҡарағайны, теге болғарҙы күрҙе лә:

— Хәҙергә сабыр итеп тор, болғар батшаһының олуғ илсеһе, һин уларға иртәгә лә, унан һуң да һөйләп өлгөрөрһөң, ә бөгөнгә бер аҙ ял итеп алырға кәрәк, — тип ҡуйҙы. Шул саҡ беҙҙең эргәгә килеп еткән Ҡарабай менән Байегетте күреп, уларға: — Дуҫҡайҙарым, әйҙәгеҙ, минең менән киттек, һеҙгә минең тирмәм эргәһенән айырым тирмә әҙерләп ҡуйҙылар, башта, беҙгә инеп, тағы ҡымыҙ эсеп алайыҡ, — тигәс, беҙ үҙебеҙҙең тирмәгә табан ыңғайландыҡ.

Тирмә эсенә ингәс, мин унын бик иркен, бай йыһазлы булыуын күрҙем. Кинйәбулат тирмәһенә сағыштырғанда, бындағы балаҫтар ҙа аҫылырак, тағараларына эленгән корал-корамалдар ҙа төрлө-төрлө ине. Ул калъян-һаҙактар тиһеңме, кылыс-сукмарҙар тиһеңме, төрлө-төрлө тимер кейемдәр, һарайта-йәүшәндәр, төркәй-туркалар тиһеңме — бөтәһе лә тирмә эсен биҙәп, үҙенә бер төрлө йәм биреп тора ине.

Шул сак ике егет инеп, алдыбыҙға семәрләп биҙәкләнгән тәпән менән кымыҙ килтереп ултыртты. Шундай ук семәрле туҫтакты Алдарға килтереп тотторғас, ул сак кына ауыҙ итте лә, миңә һоноп:

— Һөйөклө Зөһрәкәйем, һин бөгөн минең кунағым булһаң, иртәгә хужабикәм булырһың, әйҙә, шуның өсөн бер туҫтактан ауыҙ итәйек, — тине.

Шунан һуң Байегет менән Карабайға ла кымыҙ койоп бирҙеләр. Эсеп алғас, улар:

— Бындай кымыҙҙы күптән ауыҙ иткән юк ине, — тинеләр. Ирем, уларға кушылып, бер туҫтакты бушаткас:

— Минең иптәштәрем, айбарлы батырҙар! — тине Карабай менән Байегеткә. — Мин һеҙҙе оҙак көттөрөп тилмертмәм: иртәгә һуңға ук туйыбыҙҙы туйларбыҙ. Ә иртәгеһе көн кунактар каршылау менән үтер. Уларҙы сакырып, сапкындар ҙа ебәрҙем инде. Мин үҙ ырыуҙаштарымды Муйнак дуҫымдың көслө туғаны Карабайға ла, тоғро яугирым Байегеткә лә күрһәтеп сығырға, улар менән таныштырырға булдым. Беҙҙе оҙата килгән арсыйҙарыбыҙ урман батырҙары ла улар менән дуҫ булышып кайтһындар әйҙә.

— Ә улар кайҙа һуң? — тип һораным мин. — Һеҙҙең менән бергә ашап ултырғандарын күрһәм дә, аҙак күҙҙән юғалттым. Улар кайҙа йоклар һуң?

— Кайғырма[79]!..



## МАҠТЫМҺЫЛЫУ

Әүәлге ваҡытта Һарыбай исемле бер хан йәшәгән. Уның бер улы, йәнә Маҡтымһылыу исемле бер ҡыҙы булған. Маҡтымһылыуҙың йөҙө шундай нурлы икән — уның яҡтылығы өс саҡрымдан күренеп торған. Ул ана шул үҙенең нуры менән нағыш теккән. Үҙе айға-көнгә күренмәгән.

Һарыбай йыл да үҙенең улы менән ҡыҙын, туғыҙ тирмә биреп, туғыҙ өйөр мал эйәртеп, бер күлдең утрауына йәйләүгә оҙата икән.

Был турала Таймаҫ тигән хан ишетеп ҡала. Ул күптән үк Маҡтымһылыуҙы үҙенә алмаҡ булып йөрөй икән. Тик яй-әмәлен тапмаған. Инде килеп тегеләрҙең йәйләүен яу менән баҫмаҡ була, Маҡтымһылыуҙы көс менән алмаҡ була.

Ошо мәлдә Маҡтымһылыу төш күрә. Ул төшөн ағаһына һамаҡлай:

Бөгөн төндә бер төш күрҙем, ағай,
Уң сәсемде мин иштем, ағай,
Һул сәсемде ишә алманым, ағай
Һөҙөлөп яуға мин төштөм, ағай,
Мин төштөм, — ти.

Быны ишеткәс, ағаһы уҡ юна ла йөнләй[80], уҡ юна ла йөнләй.

Күпмелер ваҡыт үткәс, Таймаҫ хан яу менән килеп төшә. Был мәлде Маҡтымһылыу сәс ишеп ултырған була. Ул һул сәсен ишеп өлгөрмәй ҡала. Таймаҫ хан уны тирмәнең аҡ кейеҙенә урап алып китә.

Шул саҡ ағаһы ҡола айғырына атланып быларҙы ҡыуа сыға. Ҡыуып етеп, баҫҡынсыларҙың бер талайын уғы менән, бер талайын ҡылысы менән айҡап, Маҡтымһылыуҙы баҫып ала ла ҡултыҡлап кирегә саба. Баҫҡынсыларҙың ҡалғаны былар артынан төшә.

Шулай сабып килгәндә, Маҡтымһылыуҙың үрелмәй ҡалған һул яҡ сәсе ҡарағайға урала. Ярһыған ҡола айғырҙы туҡтатып булмауын белеп, ағаһы Маҡтымһылыуҙы ҡулынан ысҡындыра. Ҡыҙ йәнә баҫҡынсылар ҡулына төшә. Ағаһы ла бирешмәй, ҡайтанан былар

өҫтөнә ташлана. Яу бик ҡаты була. Маҡтымһылыу өс мәртәбә ҡулдан ҡулға күсә. Ниндәй генә ғәйрәтле булмаһын, Маҡтымһылыуҙың ағаһы ла хәлдән тая. Таймаҫ хан ҡыҙҙы үҙе менән алып китә.

Ошонан һуң байтаҡ йылдар үтә. Маҡтымһылыуҙың Таймаҫ хан ҡулында булыуы тураһында хәбәр быныҡ атаһына ла килеп етә.

Һарыбай хан нисек ҡыҙын ҡотҡарырға тип, уйға ҡала. Туғыҙ батман бал ҡойоп, туғыҙ тыу бейә һуйып, мәжлес үткәрергә була. Ат еткән ергә ат ебәреп, хат еткән ергә хат ебәреп, халыҡты йыя. Мәжлескә хан балаларын да, бей балаларын да, бай балаларын да, ярлы балаларын да саҡырта.

— Ҡыҙымды яу менән алып ҡайтыусы булырмы, хәйлә менән алып ҡайтыусы булырмы? — тип, туғыҙ тыу бейә башын, ике тәгәс бал алып, хан балаларына килә. Тегеләре вәғәҙә бирмәй. Һарыбай артабан бей балаларына бара. Былары ла, баштарын баҫып, өнһөҙ ҡала. Бай балалары менән дә шул уҡ хәл ҡабатлана.

Инде нишләһен, бер ҙә генә өмөтө булмаһа ла, ул ярлы балаларына һуғыла. Баяғы һорауын бирә. Ситтә генә ултырған таҙ егет тороп баҫа.

— Мин ҡыҙыңды алып киләм. Яу менән түгел, хәйлә менән, — ти. Бай биргән туғыҙ тыу бейәнеҡ башын ашап[81], ике тәгәс бал эсә лә:

— Ханым, ҡулыңдағы атама балдағыңды* бир, кәрәк булыуы бар, — ти. Балдаҡты ала ла хушлашып сығып китә.

Бара, бара был, ике көн үтә, өсөнсө көн етә. Бара торғас, Таймаҫ хан иленә килеп сыға. Бер ҡамышлы күл буйына килеп, ял итергә ултыра. Аңғанса булмай, төш ваҡыттары етеүгә, бер ҡыҙ баланың ике ҡомған тотоп, йүгереп китеп барыуын күреп ҡала. Егет уны туҡтата, ҡайҙа барыуын һорай. Ҡыҙ:

— Мына һыу апҡайтам еңгәйемде йыуындырырға. Ул айға-көнгә күренмәй, — ти.

Шунан таҙ егет теге алтын балдаҡты ҡомғанға төшөрә лә:

— Һин уны йыуындырғанда һыуҙы йәһәт-йәһәт һал. Атыу еңгәйең: йәлләр һыуыңды ниңә килтерҙең, тип әйтер. Һин йәһәт ҡойғанда балдаҡ уның усына төшөр. Балдаҡты күреп, уның күҙенән йәше атылып сығыр. Ҡемдеке икәнен таныр. Шул ваҡытта әйт: күл буйында бер әҙәм йөрөп ятыр, һине фәлән ваҡытта көтә, тиң.

Ҡыҙ бала егеттең әйткәнен еңгәһенә еткерә. Маҡтымһылыу тун бөркәнеп, һөйләшелгән мәлгә килеп етә.

Һөйләшеп танышҡас, егет:

— Мин һине хәйлә менән алып ҡайтырға килдем, — ти.

— Ҡалай алдатырбыҙ һуң? — тип һорай Маҡтымһылыу.

— Таймаҫ хан ҡолан да болан атырға сығамы һуң? — тип һорай таҙ.

— Сыға, — тип яуаплай Маҡтымһылыу.

— Ул ҡайтҡанда һин ҡаршы сығаһыңмы?

— Сығам.

— Эйәренән төшөрөшәһеңме?

— Төшөрөшәм.

— Һин был юлы уға ҡаршы сыҡма, эйәренән төшөрөшмә. Йоҡлағанда ла, арҡаң менән боролоп ят. Шул ваҡыт ул һинән: «Һиңә ниндәй хәсрәт төштө, ниндәй ҡайғыға тарының?» — тип һорар. Ә һин уға әйт: «Атайымдың мәжлестәре иҫемә төшөп китте. Ул туғыҙ тыу бейә һуя торғайны, туғыҙ батман бал ҡоя ине. Ат еткән ергә ат, хат еткән ергә хат ебәреп, хан балаларын, бей балаларын, бай балаларын, ярлы балаларын йыя торғайны. Туғыҙ көнлөк юлға сығып, туғыҙ мәжлес ҡорор ине», — тиген. Шунан һуң Таймаҫ хан: «Ә-ә, ул минең дә хәлдән килә», тип әйтер ҙә иртәген туғыҙ тыу бейә һуйыр, туғыҙ батман бал ҡойор ҙа туғыҙ көнлөк юлға сығыр мәжлес ҡорорға. Шул мәлде беҙ ҙә тайырбыҙ, — тигән егет.

Егеттең әйткәне дөрөҫкә сыға. Таймаҫ хан туғыҙ тыу бейә һуя, туғыҙ батман бал ҡойҙортоп ала ла туғыҙ көнлөк юлға юллана.

Ул киткәс, Маҡтымһылыу ике балаһы Аҡай менән Күкәйҙе билбауҙан ергә күмеп ултырта, алдарына ярыҡ ҡалаҡ, ярыҡ табаҡ ҡуйып, ҡалдыҡ-боҫтоҡ аш һала. Унан һуң, йылҡы өйөрөнә барып, айғырҙы сәнсеп йыға, дөйә көтөүенә бара — атанын сәнсеп йыға, ҡуй көтөүенә бара — ҡусҡарҙы сәнсеп йыға, һыйыр көтөүенә бара — үгеҙҙе сәнсеп йыға ла таҙ егет менән ҡасып китә[82].

Инде Таймаҫ ханға киләйек. Ике-өс көн үткәс, Таймаҫ хан, йорт хәлдәрен белеп кил, малдарҙы теүәлләп кил, тип бер хеҙмәтсеһен ҡайтарып ебәрә. Тегеһе килһә, күрә:

Йылҡыға килһә, айғыр юҡ,
Дөйәгә килһә, атан юҡ,
Ҡуйға барһа, ҡусҡар юҡ,
Һыйырға барһа, үгеҙ юҡ, ти.

Таймаҫ хан янына әйләнеп килә лә һамаҡлап әйтә:

Йылҡыға барҙым — айғыр юҡ, Таймаҫ, айғыр юҡ,
Таймаҫ.
Дөйәгә барҙым — атан юҡ, Таймаҫ, атан юҡ,
Таймаҫ.
Ҡуйға барҙым — ҡусҡар юҡ, Таймаҫ, ҡусҡар юҡ, Таймаҫ.
Һыйырға барҙым — үгеҙ юҡ, Таймаҫ, үгеҙ юҡ, Таймаҫ.
Аҡай менән Күкәй билбауҙан
Күмекте, Таймаҫ, күмекте, Таймаҫ.
Маҡтым бер һылыу, ҡасыпты, Таймаҫ,
Ҡасыпты, Таймаҫ!

Шулай тип әйткәйне, хан уның үңәсен дә өҙә сапты, ти.
Таймаҫ хан тағы бер ялсыһын ҡайтарып ебәрҙе, ти. Ул да:

Йылҡыға килһә, айғыр юҡ,
Дөйәгә килһә, атан юҡ.
Ҡуйға барһа, ҡусҡар юҡ,
Һыйырға барһа, үгеҙ юҡ,

Аҡай менән Күкәй билдән күмекте,
Маҡтым бер һылыу ҡасыпты, —

ти.

Хан янына килеп шуны һамаҡлағайны, тегеһе сабам тип ҡылысын күтәрҙе, ти. Әммә мәжлестәге халыҡ: «Барған бер кешене шулайтаһыңмы ни?» — тип уның ҡулын тотоп алдылар, ти.

Атын менеп, Таймаҫ хан йортона табан инде үҙе саба. Иленә ҡайтһа, бары ла тегеләр һөйләгәнсә, ти:

Атына барһа, айғыр юҡ,
Дөйәгә барһа, атан юҡ,
Ҡуйға барһа, ҡускар юҡ,
Һыйырға барһа, үгеҙ юҡ,
Өйгә ҡайтһа, Аҡай менән Күкәй күмекте,
Маҡтым бер һылыу ҡасыпты.

Таймаҫ хан Маҡтымһылыуҙың эҙенә төшә лә ҡыуып китә. Алып йөрөп ҡыуа, алып йөрөп ҡыуа, бер көн үтә, ике көн үтә. Тағы бер аҙ барғас, бер яҡтылык күрә. Уны күргәс, тағы ла шәберәк ҡыуа. Бара торғас Тәкәлек тигән йылғаға етә. Ҡараһа, Маҡтымһылыу йылғаның теге ярында йыуынып ултыра. Таймаҫ хан сабып барып йылғаға төшә, тик уны аша сығалмай кире әйләнә. Маҡтымһылыуға шул ерҙә былай тип һамаҡлай:

Ласын да ҡоштоң балаһы,
Имәндә була ояһы,
Ел өргән һайын
Боролор ҙа булыр уның инәһе.

Маҡтымһылыу һамаҡлай:

Ласын да ҡоштоң балаһы,
Имәндә була ояһы,
Ел өргән һайын
Боролор ҙа булыр уның атаһы.

Шунан хушлаша ла алдына ҡояш, артына томан төшөрөп, ғәйеп тә була. Таймаҫ хан илап ҡала.

Таҙ егет Маҡтымһылыуҙы атаһына алып барып тапшыра. Һарыбай ҡарт ҡыҙын шул егеткә бирә. Туғыҙ тыу бейә һуйып, туғыҙ батман бал әсетеп, ат еткән, хат еткән ерҙән кешеләр саҡыртып, барыһын ҡыуандырып, үҙе лә ҡыуанып туғыҙ көнлөк туй үткәрә. Туй һуңынан тегеләрҙе ике тирмә менән, бер өйөр йылҡы менән башҡа сығара. Таҙ егет менән Маҡтымһылыу бер күл буйында ҡартайғансы матур ғүмер иттеләр, ти.

Иртәгем ары китте, үҙем бире ҡалдым. Лоҡманға туғарҙым, уға тау менән таш йөкмәттем, үҙем аш йөкмәп ҡайттым.

## УҘАҠ МЕНӘН ТУҘАҠ — БАЛАБӘШНӘК ЯРСЫҒЫ

Борондан да боронораҡ, әүәлдән дә әүәлерәк Йәноҙаҡ ҡарт менән Уралбикә атлы ҡарсыҡ йәшәгән, ти. Был икәү Балабәшнәк тигән ырыуҙан ҡалған аҡтыҡ өй* булған, ти. Балабәшнәк ырыуы элек ер ситендә, Аҙаҡ* диңгеҙе менән Ҡалҡа* йылғаһы араһында мал утлатып, тормош кискән икән.

Балабәшнәктәрҙе Олобәшнәк бейҙәре лә, бейҙәренең олуғбейе лә бик ҡыҫынҡы, илау-һыҡтаулы йәшәткән, ти. Уныһына ғына түҙерҙәр ине лә, ти, Ҡояш тыуышынан Балауҫа-талаусы, Балауҫа ғына тип йөрөтөлһә лә, бик уҫал бер һуғышсан ҡәбилә[83] килеп сыҡҡан, ти. Дала ҡаплап килгән Балауҫа яуы Олобәшнәктәрҙең ныгытмаһы-ҡапҡаны емереп, баҫып алып, ыңғайға бик күп Балабәшнәктәрҙе лә ҡырған икән. Ҡалғандары, йыйналышып, был ҡара ҡайғы иленән ҡасырға булған. Ҡайҙа китергә? Йыйылышып кәңәшләшкәндәр, күбеһенең иҫенә ата-бабаларының тәмләп һөйләгән ере хәтергә килгән. Ауырлыҡтар килгән һайын, ҡарт бәшнәктәр Урал тигән ерҙе күккә күтәреп һөйләгәндәр. Имештер, бәшнәктәр ҡайҙалыр Алатау яғынан, Аҙаҡ диңгеҙ буйы тигән, үткенселәр өмөткә саҡматаш һуҡтырған ер-һыуға күсә килә ятҡанда, оҙаҡ ҡына Урал тауы итәгендә йәйләп ятҡандар, йәйләп алғандар. Хәҙер килеп аҡһаҡалдар Уралды кемуҙарҙан маҡтай башлағандар. Олатайҙар һөйләүенсә, Уралдың дүрт һырты бар, ти, дүрт һыртының теҙмә беренсә дүрт ерҙә дүртәр түбә бар, ти. Кеше ҡулы күтәрмәһә лә, дүрт түбәнең теҙмә бере дүрт ҡалҡан ныгытмаһына торорлоҡ, ти. Һәр түбәне утын да йығасташ ҡаплаған, ти.

Бындағылай яҙын, көҙөн дымлы, тоҙло ел дә, йәйен-ҡышын эҫе, һыуыҡ ел дә юҡ, ти, Уралда. Һыуығын унда һыуығыраҡ, ти. Тик ундағы урман — үҙе бер ҡуй туны, ти. Унда мәшәрҙәр көн итә, ти ҙә, ебәрә булалармы улар беҙҙе яндарына.

— Эй-й-й! Ер-һыу беҙҙеке! Мәшәр-мәжәренә лә етер, күңелең генә киң булһын.

Бәлә килһә бәндә башына,
Берәү килмәҫ, биш килер! —

тиме. Иҙел кисеп, Ҡәрәлеккә етеүгә, Ырғыҙға етеүгә иҫән ҡалғандарҙы ҡара киҙеү тигән йот харап иткән. Ырыуҙан тик Йәноҙаҡ менән Уралбикә генә ҡалған, ти. Уларҙың тыуымдан ҡалмай килгән балалары сабый саҡтан уҡ үлемдән дә ҡотола алмай барыр булған, ти. Олоғайған көндәрендә:

Оя төбө — һуңғы тыуым —
Нигеҙ була күрһен ине,
Береһе үлһә, береһе ҡалыр —
Игеҙ була күрһен ине! —

тип, имәнес инәлеп, яҙмыштарына ялынып, күҙҙәрен күккә терәп теләгәндәр, ти. Ике бала табабыҙ, тип икеләтә теләгәндәр, икеләтә мал тапҡандар, икеләтә аш ҡаҡҡандар, ти.

Бабай ике сәңгел* йыҡҡан, әбей ике биләү һуҡҡан, бабай ике бишек бөккән, әбей ике бышым теккән*. Бабай кисен мөңөрәй икән:

Ҡулдарым да ҡуш икәү бит,
Улдарым да икәү булһын.

Әбей иртән сеңләй икән:

Имсәгем дә ике тулан*,
Ике улан тыуһа икән.

Тилереп тулаһаң, диндерәк тә тояҡҡа төйөрөмләнә, ти, илереп илаһаң, һуҡыр күҙҙән дә йәш сыға, ти. Тилмереп теләһәң, ҡыҫыр теләк тә түл йыя, ти. Көндәрҙән бер көндө әбейҙең көткәне, ҡарттың өмөт иткәне тыу ҙа ҡуй, ти! Әбей киткән, ти, төйәҙәләнеп, ҡарт киткән, ти, сәбәләнеп, ике исем әҙерләгән, ә унан берәү генә тыуған, бер исеме Уҙаҡ, ти, икенсеһе Туҙаҡ, ти. Һунар сыҡһам, һунарҙа, йорт йүнәтһәм, йортта үҙемә иш уҙаҡ булыр тип, Уҙаҡ исемен шайҙап* ҡуйған, ти, ҡарт.

Ат-исеменән үлем өркһөн, пыр туҙҙырып тормош көтһөн, тип, Туҙаҡ исемен йөрәк бауырына индергән, ти, ҡарсығы. Үҙе Уҙаҡ, үҙе Туҙаҡ — бер уланға ике ат, үҫә биргән, ти, малайың. Йыл үҫәһен ай үҫмәһә лә, ай үҫәһен көн үҫмәһә лә, Уҙаҡ өсөн дә, Туҙаҡ өсөн дә икеләтә-кушлата арта барған, ти, улан, алға барған, ти, улан. Һыпа-һыны, күренеше бабайға ла тартҡан, ти. Әбейҙән дә отҡан, ти. Аяҡтары ҡыр кәзәһендәй һикерәндәп, толпарҙыҡылай талмаҫ, ти. Ҡыҫала бармаҡ бөркөт ҡарашлы, юлбарыҫ беләк, арыҫлан күкрәк, һағыҙаҡ билле, елкә — елле, көслө табанлы, эт-ҡош танаулы, ҡолан ҡолаҡлы, болан сираҡлы бер төрлө төйөрөм бала булған, ти, ул. «Уҙаҡ!» — тиһәләр ҙә: «Ә!» — тигән. «Туҙаҡ!» — тиһәләр ҙә: «Ә!» — тигән. Эш ҡушһалар: «Йә!» — тигән. «Бир!» — тиһәләр: «Мә!» — тигән. Инде лә илгәҙәк, оло күңелен күргәҙәк тыңлаусан бер йән булып яратылған, ти, балаҡайың. Ҡемселәрҙең кемселәренә ығышып ҡына ырыҫ килә, килгәндә лә ҡырыҫ килә. Унға уҙҙым тигәндә, Уҙаҡҡа ла ҡайғы ҡаныға. Тәүҙә ҡарсығалай ҡурсылап

торған инәһе ҡарсығы аяҡ һуҙа. Унын артынса атай ҡарты ла торнаҡ түшәгенә тартыла. Моронон мыш-мыш килтереп, танау япраҡтарынан ярһып тамған йәшкә мансылып торған Уҙаҡты атаһы ымлап саҡырып алған да:

Илап ҡайғыны ҡыумайҙар,
Уйлап ҡайғыны ҡыуалар, —

тигән. Шунан һамаҡлап улына һуңғы һүҙҙәрен теҙеп киткән, ти:

Ҡайғың бик ҙур, улым,
Аяҡланып тор, улым.
Ҡешегә тиңле кешеләр —
Һинең дә, минең ишеләр —
Ҡайғынан буш тыумайҙар,
Илап ҡайғы ҡыумайҙар,
Уйлап ҡайғы ҡыуалар,
Уйлар өсөн тыуалар.
Атай-инәй кем булыр?
Кем юғалта — шул белер,
Атай — уңдан терәгең,
Инәй — һулдан терәгең,
Икеһе бер йөрәгең.
Инәй наҙы — сыуаҡ нур,
Шундай яҡты йылыһы.
Инәй юғалтыу — мең ҡайғы,
Белә кесе, олоһо.
Атай наҙы — селлә ел,
Үтеп бара елеккә,
Тыштан ҡырыҫ, шифа ел —
Үтеп кереп елеккә,
Ғәйрәт бирә йөрәккә,
Таһыл бирә беләккә.
Арты дауа, ҡырыҫ ел —
Аҡыл өҫтәй мейеңә,
Дәүләт өҫтәй өйөңә.
Атай һөймәҫ аҡылдан,
Эшкә егер таһылдап.
Атай улды һөйөүе
Үпәс булмаҫ, эш булыр,
Атай — улға, ул — атаға
Эш өҫтөндә иш булыр.
Ярты яҡтан яҡламаҫ ул,
Ете яҡтан яҡлар ул.
Ауырлыҡтан һаҡламаҫ ул,
Сир-сырхауҙан һаҡлар ул.
Инәй наҙы — йөҙ дауа,
Йөҙ ауырыуҙан ҡотҡара,
«Балам!» — тиеп, «Балам!» — тиеп

Йөҙ ауырлыҡ атҡара.
Атай үлһә, аһ, ауыр!
Инәй үлһә, иң ауыр!
Бүтән инәй табылмай шул,
Өҙөлә йөрәк-бауыр.
Инәй наҙы — күҙ алда,
Атай наҙы — төптәрәк.
Атай наҙын аңлар өсөн
Атай булырға кәрәк.
Атай наҙы — әсе үлән,
Мең ауырыуҙан мең дауа,
Малды атаһыҙҙар түгел,
Ата балаһы таба.
Инәй үлһә, иҫ ҡала,
Атай үлһә, төҫ ҡала.
Төҫөм булып, улым, һиңә
Ер-һыу тигән көс ҡала.
Уҙаҡ яңғыҙ булмай ул,
Уҙаҡтың ише була,
Ише булған кешенең
Донъяһы беше була.

Тағы ниҙер әйтергә тип ауыҙын аса ла ҡарт, тик йөрәге туҡтап, күҙе йомола. Ярҙан алыҫыраҡ, ҡалҡыуға, инәһенең ҡәбере йәнәшенә, йылғаға буй итеп, соҡор ҡаҙып, башын һыу үренә ҡаратып ерләп ҡуйған, ти, Уҙаҡ атаһын.

Ҡороған Балабәшнәк ырыуының ярсығы шулай Урта Уралда япа-яңғыҙ ҡала. Күңеле тулып, сеңләп ала:

Инде яңғыҙ нишләйем,
Нисек итеп йәшәйем,
Нисек ишем табайым,
Ҡалай аҙыҡ ҡабайым?
Ете яғым — ете ят,
Яттан нисек ҡасайым,
Ырыҫ ишегем ҡайҙа,
Уны нисек асайым?

Иңрәп-сеңләп туҡтағас, атаһының һүҙҙәрен ҡолаҡ төбөндә сыңлатып, уйлана башлаған, ти, Уҙаҡ.

— Туҡта! — тигән ул үҙенә, — атайым, төҫөм булып, Ер-һыу тигән көс ҡала тигәйне лә, шул көс миңә ярҙамлашмаҫмы? Тик Ер-һыу ҡайҙа ул, нимә ул! Уны нисек табырға? Тағы иш табырға кушҡайны. Уныһы ҡайҙа икән? — Шулай уйланып, уҡ-һаҙағын ҡулға алып, йылға буйына төшкән, ти, был:

Йылға, йылға, әйт әле,
Миңә ярҙам ит әле!
Ҡайҙа сабаһың ярһыу,

Һин булаһыңмы Ер-һыу?
Йылға яуап биргән, ти:
Мин булам да, мин дә түгел —
Бары мин генә түгел.
Ер-һыу эҙләп ҡантыраған —
Бары һин генә түгел.
Сарсаһаң, һыуым йәл түгел,
Артығын һөйләр мәл түгел.
Күҙең ысын булһа, күрерһең,
Күргәнде күңелгә үрерһең.
Ағымы тулы ажау бар,
Табының тулы суртан бар,
Ҡомлоғомда ҡомай күп,
Ятыуымда йәйен күп,
Бәргел һайын бәрҙе күп,
Һарғыл һайын һаҙан күп,
Өйөрөм ерҙә өйрәк күп,
Сөйрөм ерҙә сүрәгәй күп,
Серен белһәң — бары күп.
Күктә күпме йондоҙ бар —
Миндә шунса ҡондоҙ бар.
Шәшкеләрем, һыуһарҙарым
Иҫәпһеҙҙәр, һанһыҙҙар,
Тик берәһе лә буш булмаҫ,
Хаҡы — ялһыҙ эш булыр.
Шунда ғына йылға-һыу
Һиңә терәк, иш булыр.

Шунан Уҙаҡ йылға ярынан ситкә киткән икән дә, ти, ҡуянды тап килтергән, ти:

Ҡуян, ҡуян, әйт әле,
Миңә ярҙам ит әле.
Ҡайҙа сабаһың ярһыу,
Һин түгелһеңме Ер-һыу?

Оҙон ҡолаҡ ашыҡ-бошоҡ яуап ҡайтарған, ти:

Мин — уның бер осколағы,
Осколағы, ҡайсы ҡолағы.
Ун йыл буйы уңғанһың,
Атай-инәйле булғанһың.
Мин донъяға килгәнсе,
Атаң тайған уң яҡҡа,
Тыуып күҙем күргәнсе,
Инәң шылған һул яҡҡа.
Ярты аҡылым ҡолаҡта,
Ярты аҡылым аяҡта.
Яҙын ерҙе һыу баҫһа,

Ҡоткар мине таяҡта,
Затыбыҙҙы ҡоротмаһаң,
Мөрхәт ҡуйһаң ирекке,
Тиребеҙҙе йәлләмәбеҙ
Бейәләйгә, бүреккә.
Бик тырышһаҡ — тун булыр,
Үрсеп китһәк — ун булыр,
Мин — урмандың бер йәне.
Урмандың бар мең йәне,
Оло аҡылды оло урмандың
Үҙенән һора һин йәме!

Шунда Уҙаҡ ҡуян аҡылын ҡуш итеп, үҙ күңеленә хуш итеп, ҡолаҡтарын ҡарпайтҡан икән, шаулай, ти, урман шау менән, ғәскәр килгәндәй яу менән!

Урман, урман, әйт әле!
Миңә ярҙам ит әле!
Ниңә шаулайһың ярһыу?
Һин булаһыңмы Ер-һыу?

Урман тағы геүләп-дыулап ҡуйған да, ти, йырлай башлаған, ти, йырын:

Мин — Ер-һыуҙың бер яғы,
Тау-таш булыр аръяғы.
Буранда бура бирермен,
Малыңа ҡура бирермен,
Өй кәрәкһә, өй — минән,
Сөй кәрәкһә, сөй — минән.
Өшөһәң, мине яҡ ҡына.
Бушҡа яҡма, ҡаҡ ҡына.
Айыуымдан — тун минән,
Уҡ кәрәкһә, юн минән.
Атып алһаң, бер мышым —
Туҡ сығырһың бер ҡышын.
Саналыҡҡа йылам бар,
Сәңгелдәккә һылам* бар,
Сыраҡлыҡҡа ҡарағай бар,
Сыралыҡҡа ҡарағай —
Унынһы ла бар, ағай!
Утлыҡсаға — уҫағым,
Етмәҫ бер ҙә ҡосағың.
Яғалыҡҡа төлкөм бар,
Һаҡлап һуҡһаң, иркең бар.
Юҡ нәмәләр юҡ миндә,
Барыһы ла туҡ миндә.
Мине ҡат-ҡат йөрөп сыҡ,
Барыһын да күреп сыҡ.

Шулай иткән дә, ти, Уҙаҡ урман буйын иңләп-буйлап йөрөй биргән, ти. Һәр бер йән эйәһе, һәр үҫем-тором үҙ кәңәшен биргән, үҙ аҡылын өйрәткән, ти. Айыуҙан көс йыйырға, солоҡ балын табырға, шифалы емеш ҡабырға өйрәнгән, ти. Себендән — сабаҡ тоторға, гөлйемеш сәскәһе тырантай* менән ҡорман ҡаптырырға шәпләндергән, ти. Урман телен аңлап бөткәс, Уҙаҡ тау-таш яғына киткән, ти. Шунда уға бер һалҡын таш һүҙ ҡушҡан, ти.

Уҙаҡ-Туҙаҡ, уҙма әле,
Сабыр төбө һары алтын,
Сабыр булсы, ҡыҙма әле!

Уҙаҡ:

Эй, һалҡын таш, һалҡын таш,
Ҡөсөң етһә, ҡалҡын, таш.
Нишләп ятаһың моңһоу,
Һин түгелдер ҙә Ер-һыу?

Таш шартлап, сатнап телгә килгән, ти:

Мин Ер-һыуҙың бер яғы,
Түбән түгел, үр яғы.
Мин гел бында ятамын,
Мин гел тарҙа ятамын,
Мин гел елдә ятамын,
Мин гел ҡарҙа ятамын.
Һалҡынында һалҡынмын,
Ҡәрәк саҡта ялҡынмын.
Саға белһә, утмын — мин,
Белмәгәнгә — туҡмын мин.
Тыуыу менән, ал ҡояш
Тәүҙә миңә ҡарайҙыр,
Уттан уҙған торамын —
Төҙө әйҙә һарайҙар.
Аш-һыуына тәм биреп,
Ҡәрәк саҡта ялҡын бул!
Ҡәрәкмәһә — һалҡын бул!
Туҙаҡ булһаң, белеп туҙ!
Уҙаҡ булһаң, белеп уҙ!
Таш шикелле ҡата бел,
Ҡәрәкһә, уҡ ата бел,
Ҡәрәкмәһә, сабыр ғына
Таш шикелле ята бел.
Бейеклекте тоямын,
Бөркөттәргә оямын.
Һалҡындан һәм ялҡындан
Бөйөклөктө ҡоямын.

Шулай ер-һыуҙы күреп сыҡҡас, һәр бер таштың тынын тыңлап, һәр ағастың моңон отоп, һәр йәнлектең һүҙен тотоп, һәр себендең серен йотоп, үҙ атаһынан алты тапҡыр аҡыллыраҡ, ҡырҡ тапҡыр ҡырыҫыраҡ ата төҫөн — Ер-һыуҙы тапҡан, ти, Уҙаҡ. Шунан үҙе лә ер-һыу кеүек аҡыл мән һамаҡлап ебәргән, ти:

Ер-һыу — йөрәк тибешем,
Ер-һыу — минең йоп ишем,
Атайымдың төҫө ул,
Беләгемдең көсө ул,
Йөрәгемдең хисе ул,
Зиһенемдең көсө ул.
Тик шулай ҙа эҙләгәнем —
Үҙем ише кеше ул.
Ер-һыу менән әҙәм йәне —
Мин Уҙаҡтың ише ул.

Шунан тағы ла бер Уҙаҡ йәшәгән тирәгә, Туҙаҡ торған тирәгә, Аҙаҡ диңгеҙе яғынанмылыр, Ҡаҙаҡ диңгеҙе яғынанмылыр, бер ырыу кешеләре килеп сыҡҡан, ти. Ер-һыуҙы арыу белгән, кәрәк икән, дарыу белгән, кәрәкмәһә, һарыу белгән Уҙаҡ шул ырыуҙа иш тә тапҡан, ти, көш* тә тапҡан, ти. Һөйләшергә һанаш* та тапҡан, ти, көйләшергә кәңәш тә тапҡан, ти. Көйәләшергә кәләш тә тапҡан, ти.

Шунда Уҙаҡ һуңғы һамағын әйткән, ти:

Ер-һыу тәне — кеше ул.
Ер-һыу мән кеше көслө ул.
Ер-һыуға кеше мән йәм керә,
Ер-һыуға кеше мән тәм керә,

Кешегә ер-һыу мән ғәм керә.
Ер-һыу кешенең ише ул.
Ер-һыуҙың ише — кеше ул!





*«Алпамыша»*



*«Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»*



*«Зөһрә менән Алдар»*



*«Мактымһылыу»*



*«Уҙаҡ менән Туҙаҡ — балабәшнәк ярсығы»*



*«Һуңғы һартай»*



*«Күсәк бей»*



*«Бабсаҡ менән Ҡараҡөләмбәт»*

## ҺУҢҒЫ ҺАРТАЙ

Барыһын да уйлай башлаһам, башым яна! Шулай ҙа мин бөтә булғанды һөйләп бирергә телемде мәжбүр итермен.

Бөтәгеҙ ҙә тыңлағыҙ!

— Исемем — Ялык. Ташҡай улы Бурнаҡтың улымын. Һартай* ырыуынан. Тамғам — төлкө ҡойроғо. Ҡасандыр мин дә һуңғы яу* түгел инем. Эйе, мине аҡһаҡал тип тә, бей тип тә йөрөтәләр ине. Элек мин дә шәп йәшәнем. Минең тирмәм бейек Сейәлетүбә эргәһендә ине. Малдарыма оло көтөүсе бағауыл булды, уны мин башҡаларына башлыҡ итеп ҡуйҙым. Ул жуңғар* халҡынан ине. Һурпаны тоҙһоҙ эскәнгә, төнөн яҡшы күрә ине. Ул миңә әсиргә эләкте. Ҡасмаҡ булды — тоттом. Ат эсерә торған ағас улаҡҡа ҡолағынан ҡаҙаҡлап ҡуйҙым мин уны. Үҙемә ҡол иттем. Был — яҡшы!

Йәш тә, көслө лә инем мин. Уйнаҡлап торған тайҙы ҡулға күтәреү миңә бер ни ҙә түгел ине. Тәүге улым тыуғанда, һигеҙ тапҡыр дүрт тә тағы бер йыл нисә булһа, миңә шунса йәш ине.

Минең өс ҡатыным булды. Ҡымыҙ эсеп ял итергә ятҡанда улар аҫтыма йомшаҡ балаҫ йәйә торғайны. Ауға сығып ыласын сөйҙөм. Ҡымыҙ эстем. Күңел астым. Эйе, мин йәшәй белдем. Мәнгү түрә баҫмаһын* ебәрҙе — кире ҡайтарҙым. Уға тағы һынған уҡ менән үле сысҡан өҫтәнем[84]. Унан көлдөм. Минең үҙ ҡошом, үҙ тамғам бар ине[85]. Үҙ хөкөмөм үҙ ҡулымда ине. Аҡһаҡал да, бей ҙә булдым.

Һа! Быҫраҡҡа ҡанды Мәнгү түрә! Ус алмаҡ булып, сарбаздарын* йыйҙы, яу асты. Йомран! Ул Аҡһыуҙың* уң яҡ башында туҡтап, аңра сарбаздарына: «Ур! Ур!» — тип һөрәнләргә ҡушты. Минең кешеләр уларҙы мыҫҡыллап көлдө, бармаҡтарын ҡабып һыҙғырып яуап бирҙе. Шунан... минең уғым Мәнгү түрәнең боғаҙына барып ҡунды, ул йылғаға батты. Шулай булды.

Мырҙалары, атабәктәре* менән Тимер килгәнгә тиклем мин шулай йәшәнем.

* * *

Тыңлағыҙ барығыҙ ҙа!

Һеҙгә балаларым хаҡында һөйләйем. Улар икәү ине. Икеһе лә ул ине. Тәүгеһе тыуғас, мин уға Ҡармасан тип исем ҡуштым. Икенсеһен атайымдың ағаһы иҫтәлегенә Сәрмәсән тип атаным.

Хәҙер юҡ инде улар.

Улар яҡты донъянан китте. Ә исемдәре йөрәгемә ут менән яҙылып ҡалды!

Үлем — бер ҡапҡа ул, һәр кем унан инергә тейеш! Илаһи! Уларҙың ҡәберен рәхмәтен илә тултыр!

Мин әйтәйем, Өлкөн тигән бер әсә балалары булһалар ҙа, улар һис тә бер-береһенә оҡшамағандар ине. Олоһо энеһенән бер ҡарышҡа бейек ине, күҙҙәре унең ямғырға сыланған сөм ҡара ҡарағат төҫлө ине. Ул яралы бөркөт кеүек ҡыйыу, ҡурҡыу белмәҫ батыр булды.

Аҙаҡ күрҙем: Тимер барластары* унең менгән атын йыҡты. Ҡотлобәк мырҙаның боғалы муйынына төшкән ерҙән, ул ырғып тороп, Ҡотлобәкте матҡып тотоп алды ла ҡаянан һыуға һикерҙе.

Унең киҫтәне* атабәктәрҙең тимер торҡа* кейгән баштарын бешкән сәтләүектәй итеп онтаны. Үҙ ғүмерендә унең алты ғына уғы яҙа китте. Ул егет ине.

Инде — Сәрмәсән!

Эй, ағайҙарым! Йылға буйында үҫкән йәш күрәнде күргәнегеҙ бармы? Ул шундай төҙ, зифа. Эйе. Ел иҫкәндә лә ул талғын ғына сайҡалып китә. Ул һәр ваҡыт һылыу. Шулай. Бына шунең кеүек ине минең Сәрмәсәнем. Ул ҡурайға оҫта ине, йырлап йөрәгемде ойота ине. Ул йырсы ла, ҡурҡыу белмәҫ яу ҙа булды. Был да яҡшы. Уны яраттым. Икеһен дә ярата инем мин уларҙың. Улар минең балаларым, данлы батырҙарым булды, исемдәре лә мәңгегә ҡалды. Я хоҙай! Уларға рәхмәтең киң ҡыл!

Тыңлағыҙ!

Аҡһаҡал Ҡара Абыздың* йәйге яҡты айҙан да һылыу бер ҡыҙы бар ине. Ҡоҙғон ҡанатынан да ҡара ине унең сәстәре. Ә йөҙө һарыҡ һөтөнән яһалған йәш ҡороттан да аҡ ине. Күтәрелеп бер ҡараһа, күҙҙәренән нур сәсә ине.

Хур ҡыҙы!

Исеме унең Айбикә ине. Ул ҡашына һөрмә тартмай, тырнағына ҡына яҡмай ине. Йәш тә матур ҙа ине.

Уны күргәс, улым Ҡармасанға:

— Улым! — тинем, — энең әле йәш. Һин Аҡһыу аръяғында аҡһаҡал Ҡара Абыз торғанын беләһең. Унең Айбикә тигән ҡыҙы бар. Үҙенә донъяла иш ҡалдырыу өсөн, ҡатындан тыуған йән ҡатын эҙләр! — тинем.

Ҡармасанға мин шулай тинем. Ул мине аңланы, «белмәйем» тип торманы. «Ҡәрәкмәй» тип тә әйтмәне. Ул бит минең улым ине.

Шунан...

Мин Ҡара Абызға өс көтөү һарыҡ, ярты өйөр бейә ебәрҙем. Ҡармасанға кәләш алып бирҙем.

Ҙур итеп туй яһаным. Ҡунаҡтар бал эсте, ҡымыҙ эсте, төрлө йыр йырлашты. Шунан сапҡынсы килеп төштө.

Я хоҙай, сабырлыҡ бир.

Ҡорсанғы аттың еүеш ҡойроғо кеүек, уйҙарым сейәлә. Әммә миңә түҙергә, бөткәнсә һөйләргә кәрәк.

Шулай итеп беҙ, бал, ҡымыҙ эсеп, туй итеп ултырабыҙ. Бик һәйбәт. Кис булды. Йыр тынған арала ҡайҙалыр сыңлатып бейә һауғандары, сиңерткә сырылдағаны ишетелә. Торҙом да тышҡа сыҡтым. Тып-тыныс. Күккә ҡараным — салт айҙ. Бейектә, түнкәреп ҡуйған ижау һымаҡ ҡына булып, Етегән йондоҙ йымылдай. Сәрсәк* оҫталары ҡылыс һабына ҡуйған аҡыҡ таштар һымак, йондоҙҙар яна. Эйе, тирә-яҡ тын, ә мин ниҙер көтәм, ниҙәндер шомланам.

Көткәнем килде. Тәүге сапҡынсы. Хәтеремдә: менгән айғыры арыған, бауырынан әсе күбек аға.

— Түрә! — тине. — Ябыҡ Ҡарағай һырты эргәһендәге Бараҡ аймағынан мин. Хәбәр алып килдем. Абау! Тимер хан, күҙе сыҡҡыры, төшлөк яҡтан бында килә. Сарбаздары, барластары бик күп. Эйе. Йәйге эҫелә себен ни тиклем булһа, былар ҙа шул тиклем. Эргәһендә унын мырҙалары, атабәктәре. Улар тауҙар аша артылып килә. Йәшел байраҡтары Яйыҡтың был яғында күренә башлаған.

Бына ниндәй хәбәр ишеттем мин унан. Был меҫкен сапҡынсыға мин асыуланманым, уға утлы күҙҙәрем менән ҡараманым. Насар хәбәре өсөн телен ҡырҡып алып муйынына тағырға бойороҡ бирмәнем.

Юҡ! Мин уны тирмәмә алып индем, ашаттым. Ҡунаҡ иттем. Яҡшы эшләнем!

Дөрөҫ! Сапҡынсы бушты һөйләмәгән. Ысынлап та шулай булды. Улар килде.

Был хәл урмандағы ояһыҙ кәкүктең һаҡауланған сағында булды.

Эттәр, эттәр! Улар иҫәпһеҙ-һанһыҙ булып, ер ябып килә ине. Улар күмәк ине. Минең жуңғар ҡолом — исеме яҙыҡ булһын! — Аҡһыу кисеүен күрһәтер өсөн шулар яғына ҡасты. Улар турһыҡтарына тын тултырып, ике яҡтан эйәрҙәренә бәйләнеләр. Аҡһыуҙы сыҡтылар.

Мин уларҙың шығырлаҡ арбаларын тәү тапҡыр Сейәлетүбәнән уңда, төбәк аръяғында күрҙем. Өс уҡ атымы ерҙә булһалар ҙа, уларҙың йөҙө миңә асыҡ күренә ине. Мин аңланым: улар үлем дә ҡоллоҡ алып килә.

Уларҙың аттары менән дөйәләре беҙҙең һыуҙы эсеп, далаларҙы тапап бысратырын мин белә инем.

Мин киттем. Төркөстан еренән килгән Хөсәйенбәк[86] әүлиәгә барып зыярат ҡылдым — ҡабул итмәне. Ҡадир әл-Исламға* сәж ҡылдым — беҙҙең тирмәләрҙе яҡларға килмәне. Беҙ яңғыҙ инек.

Шуны күргәс, мин торҙом да: «Үлем дошманға!» — тип ҡысҡырҙым.

Ҡаршымда Ҡармасан менән Сәрмәсән тора. Икеһенең дә һулышы ҡайнар. Уларҙың күҙҙәре: «Алға!» — ти ине. Беҙ киттек.

Сейәлетүбәнән алыҫка, төньякка табан, тирмәләребеҙҙе оҙаттык, малдарыбыҙҙы кыуҙык. Беҙ, оран һалып, сукмар менән кылыс тота алған бөтә ирҙәрҙе йыйҙык. Беҙ алай* төҙҙөк. Беҙ Акһак Тимер барластары һымак күп түгел инек, әммә һәр кайһыбыҙ батыр яу* ине.

Мин беләм: һәр беребеҙҙең йөрәгендә ғәйрәт менән нәфрәт урғый ине. Беҙ ул урмандарыбыҙҙы, үҙ далаларыбыҙҙы һаклар өсөн яуға сыктык. Беҙ кол булырға теләмәй инек. Тимерҙең баскағы* килеп беҙҙең ер-һыуҙы талап иткәс, мин уны кире ебәрмәнем. Юк, уны балға буяп кырмыҫка иләүенә ултыртырға куштым. Һай! Эй сыйылданы ла инде! — Таяк менән һуккан көсөк кеүек! Ә беҙҙең һуғышканды күрһәң!

Мин атабәктәрҙең корос калканына бәреп нисәмә һөңгө һындырҙым. Улар минең алда тупрак ашап, ер тырнап ятты. Кылысымдың үткерлеген йөҙбаштар ҙа, меңбаштар ҙа, ябай сарбаздар ҙа татыны[87].

Тимер үҙе — йылан саккыры! — минең уғым һыҙғырғанын ишетте.

Ай-һай! Тәүәккәллектең дә, һулдан һелтәгән кылыстың да ышаныслы икәнен мин белә инем шул!

Кармасанды күрәм: ул Торғот бейҙең корос кейемен дөйә йөнөнән һуккан иҫке күлдәк һымак итеп йыртып ырғытты. Эйе. Унын кулы мышы тояғынан да каты ине. Ул Тимерҙең бик күп батырын юк итте.

Сәрмәсән! Ул да минең янда булды. Унын кылысы дошман кылыстары араһында ялтлап торҙо. Атына хәтле үрәпсеп-һикереп дошмандың битенән тешләй ине.

Беҙ айбарлы һуғыштык.

Беҙ барыбыҙ ҙа какшамаҫ, кыйыу булдык. Беҙ ысын яу булдык. Беҙҙең хакта йыр сығарып йырланылар. Тик беҙ әҙ инек. Беҙ сигендек.

Юк, юк! Беҙ касманык!

* * *

Мин һеҙгә әйтәйем: эстәге йә күкрәкгәге яра — үлем. Ат булһынмы, батыр яу булһынмы — барыбер.

Кармасан менән Сәрмәсән! Һеҙҙең нисек үлгәнегеҙҙе һөйләп тороу кәрәкмәй!

Белегеҙ: мин һеҙҙең исемегеҙҙе халык хәтеренән юйылмаҫлык иттем. Һеҙҙең исемегеҙ мәңгегә калды. Тегендә, Акһыу аръяғында, Ғази мәсетенең[88] ишек яктауҙарына көмөш менән яҙылған Көрьән һүҙҙәре кеүек бормаланып ике йылға аға. Ул сакта был йылғаларҙың исеме әле юк ине, беҙ уларҙы бер нисек тә атамай инек. Шул йылғаларға һеҙҙең исемегеҙҙе бирҙем, үҙегеҙҙе шунда ерләнем!

Балаларым! Аллаһы тәғәлә һеҙҙе шәфкәтенән айырмаһын!

Ә унан һуң мин киттем. Һеҙҙең коноғоҙҙо кайтарҙым. Эйе, мин бер генә әсир ҙә алманым, гел үлтерҙем.

Ауған дошмандың иңрәүе — һуғышсыға рәхәтлек бирә. Шәфҡәт һораған һүҙҙәре күңелен кинәндерә. Улай түгел тип кем әйтер?

Минең ике ҡолағым нәфрәт менән томаланғайны, ике күҙем үс теләге менән ут булғайны. Әсир алманым, гел үлтерҙем. Күҙҙәрен соҡоп тоҙ һалдым, тереләй ергә күмдем. Яҡшы булды. Шуның өсөн дошмандарым мине юлбаҫар тип атаны.

Ай-һай! Минең нисек үс алғанды күрһәгеҙ! Белегеҙ бөтәгеҙ ҙә: яҙғы ташҡында, ҡараңғы бер төндә Тәтегәс менән, Димде йөҙөп сығып, Улуҡайҙы үлтерҙек! Ул үҙенең батырҙары менән ут эргәһендә ята ине. Ул заман беҙҙең ҡулдарҙа уларҙы үлтерерлек кенә көс бар ине. Улар беҙгә ҡарағанда биш тапҡырға күберәк ине. Ә беҙ икәү ҙә ҡара төн генә.

Һа! Шул хәтле ҡыҙыҡ булды беҙгә ул саҡта! Барыһын да үлтерҙек, ҡолаҡтарын ҡырҡып, усаҡтың эҫе көлөнә ырғыттыҡ. Беҙ уларҙы еңдек!

Бер ваҡыт мин Туғай бейҙе осраттым. Ул йәш жуңғар менән ҡайҙалыр китеп бара ине. Ҡәһәр! Миңә ул, баҙнат итеп, аҡһырғаҡ тамырынан да ыулыраҡ яман һүҙ әйтте. Кәрәген бирҙем. Мин уны ян-фарман ҡыуып еттем дә башын ҡырҡып ташланым. Шунан, — белегеҙ, кешеләрем! — был башты аяғы сатан булғанға Аҡһаҡ тип аталған Тимерҙең — урыны тамуҡта булғыр! — үҙенә ебәрҙем.

Мин шулай иттем.

Үс алдым. Дошмандарым ҡарағоштан ҡурҡкан урғуяндан яманыраҡ ҡурҡа ине минән. Суҡмарымды һелтәмәҫ борон һырт биреп ҡасалар ине. Бүре олоуын ишетеп ҡалтырай башлаған йәш аңра ҡолон кеүек, улар минең исемемде ишетеү менән ҡалтырап төшәләр ине.

Ха-ха! Улар мине юлбаҫар тинеләр. Ҡурҡаҡтар! Әбрәкәй соҡоро һеҙгә ҡәбер булһын.

Барс йылында тыуған кешенең яҙмышы яҙғы ел һымаҡ була: уның йылыһы ла, һыуығы ла бар. Шулай. Тик мин һеҙгә әйтәйем: әсе менән татлыны татыған ғына белә. Яҙмышым мине ғүмеремдең эңеренә килтерҙе. Миңә хәҙер бер ни ҙә кәрәкмәй. Минән үтте. Мин тирмәләремдән дә, көтөү-көтөү малымдан да — барыһынан да яҙҙым. Хәҙер мин мөнйөп ташлаған һөйәктәрҙе йыйып йөрөүсе эйәһеҙ эт, өңөн юғалтҡан бурһыҡ кеүекмен.

Хәҙер мин йәйләүҙән-йәйләүгә ҡыҙырып, кеше яҡҡан ут янында йылынып йөрөйөм. Миңә ят ҡаҙандан һарыҡтың ҡолаҡ һөйәген генә бирәләр. Мин кеше еләнен кейәм, кеше кейеҙенә йоҡларға ятам.

Минең бер нәмәм дә юҡ!

Мин — байғош!

Ҡасандыр ҡулға-ҡул тотошоп килгән дуҫтарым ҡайҙа? Улар юҡ. Ҡайҙа батыр Сарым? Ҡайҙа Тәтегәс? Ҡайҙа Хан — Уғлан?!.

Улар киттеләр. Уларҙың күҙҙәре күптән ергә һарҡкан.

Мин бер үҙем. Мин — иң һуңғы һартай.

Ләкин белегеҙ: мин һуңғы яу булманым!

Элек мине аҡһаҡал тип тә, бей тип тә йөрөтәләр ине! Эйе. Хәҙер мин ҡарт. Мин үләм. Булһын шулай.

# ҠОБЛАН БАТЫР

Борон заманда ҡара ҡыпсаҡ илендә бер әбей менән бабай йәшәгән. Ҡартайғансы бер генә лә балалары ла булмаған. Ҡадирбай ҡарт һикһән йәшенә еткәндә, алланан ялбарып-ялбарып, бала һораған, хәйер-саҙаҡалар биргән, им-том иттергән. Үҙе ҡанатһыҙ шоңҡар, тояҡһыҙ ат шикелле тоҡом-затһыҙ үлербеҙ тип ҡайғырған.

Бер мәл әбей менән бабай бер ҙур туйға барһа, быларҙы, кемдең бала-сағаһы юҡ, туйҙа ултырырға хаҡтары юҡ, тип яман ғәрләндергәндәр. Оят-ғәрлектәренән әбей менән бабай туйға йыуаса итеп алып килгән ҡымыҙҙарын түгеп, ҡайтып китергә мәжбүр булған.

Әбейе Миңһылыу ошо ғәрлегенән ситкә сығып киткән. Сәфәрендә бер мәл төш күргән. Төшөндә бер әүлиә осраған, имеш. Уға, игеҙ балаң тыуыр, тигән. Миңһылыу ҡыуанысынан кире иленә әйләнеп ҡайтҡан. Ауырға ҡалған. Оҙаҡламай Миңһылыу игеҙәк бала тапҡан. Береһе ул, береһе ҡыҙ икән. Улына Ҡоблан, ҡыҙына Ҡолансәс тип исем ҡушҡандар. Ҡыуаныстарынан бик ҙур итеп бала туйы уҙҙырғандар, ҡара ҡыпсаҡ ырыуҙарын саҡыртып. Ауырлы сағында арыҫлан ите ашағанға, улы арыҫландай батыр булып киткән, ти.

Ҡоблан ай үҫәһен көн үҫеп, йыл үҫәһен ай үҫеп, батыр егет булып еткән. Арыҫландай Ҡоблан алты йәшендә толпар эйәрләп менгән, етеһендә — далалар буйлап елгән. Атаһының йылҡысыһы уны һунар, яу һөнәренә өйрәткән.

Бер ваҡыт, йылҡысы менән һунарҙа йөрөгәндә, Ҡоблан тау аръяғында туҙан бағанаһын күргән. «Ниндәй туҙан ул?» — тип һораһа, йылҡысы һамаҡлабыраҡ шундай яуап биргән:

Арғы яҡта был тауҙан  
Ҡыҙылбаш тигән бер ил бар,  
Уның бик күп халҡы бар,  
Халҡына бер ханы бар,  
Хандың күркәм ҡыҙы бар,  
Күркәм икән исеме лә.

Хан ҡыҙы Күркәмгә күптәр ғашиҡ икән. Тик ул шундай шарт ҡуйған: кем дә кем баҡанға* элгән алтын алҡаға уҡтан атып тейҙерә, шуға ғына кейәүгә сыға. Күптәр бәхетен һынап ҡараған, тейҙерә алмаған алтын алҡаға. Әлеге туҙан — ана шул хан ҡыҙын алыр өсөн ярышҡан батырҙар сығарған туҙан, тигән йылҡысы.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, Ҡоблан ҡыуанып киткән. Ул үҙ бәхетен һынамаҡ булған. Тик йылҡысы ғына быға күнмәгән, йәш батырҙы уйынан кире дүндерергә тырышҡан. Ай-вайына ҡуймай, батыр үҙенекен иткән. Яҡшы атҡа атланып, уҡ-һаҙаҡтарын тағып, киткән был алыш майҙанына. Барған. Үҙен таныҡкан. Уҡтан атып, алтын алҡаны уртаға яра бүлеп төшөргән. Хан ҡыҙы батыр егеттең мәргәнлегенә ҡыуанып: «Эҙләгән тиңем таптым», — тип, егеттең килеп ҡулын ҡыҫҡан. Хан әйткән вәғәҙәһендә тороп, Ҡоблан менән ҡыҙы Күркәм хөрмәтенә утыҙ көн уйын-мәжлес, ҡырҡ көн туй үткәргән.

Был туйҙы үткәреүгә хандың ҡырҡ аршынлы бер батыры ғына ризалыҡ бирмәгән. Ҡобланды алышта үлтермәк булып, үҙенә саҡыртҡан. Барған Ҡоблан. Ингән өйөнә. Ҡырҡ аршынлы батыр түшәктә йәйелеп ятыр, ти. Ятҡан көйө, мыҫҡыллап, ул йәш батырға: «Ана башта аяғым менән көрәш», — тигән икән, Ҡоблан элеүле торған арҡанды тегенең аяғынан эләктереп, аты менән һөйрәтеп алып сыҡҡан да киткән. Тегене һөйрәткеләп, эштән сығарған. Аҙаҡтан таш менән ороп үлтергән. Шулай итеп, егет тә, ҡыҙ ҙа дошмандарынан ҡотолоп, иркен тын алғандар. Туй тағы гөрләп киткән.

Ҡырҡ көн туйҙан һуң хан ҡыҙы Күркәм менән кейәүе Ҡобланды, ҡырҡ дөйәгә мал-мөлкәт тейәп, ҡырҡ хеҙмәтсе биреп, кейәү иленә оҙатҡан.

Юлда ҡайтып барғанда быларға бик ҙур йылҡы өйөрө осраған. Күркәм ҡыҙҙың күҙе шунда бер күк ала бейәгә төшкән.

— Кемдең йылҡы өйөрө был? — тип һораған ҡыҙ.

— Атайымдың бер туған энеһенеке, — тигән егет.

— Шуны миңә күрҙемдеккә* һора, — тигән ҡыҙ.

Мал баҡҡан Ҡара-Ҡужаҡты ағаһына ебәрткән. Ағаһы «Ҡобланға йәнем дә йәл түгел», — тип, күк ала бейәне бүләк иткән күрҙемдеккә киленгә. Күркәм килен күк ала бейәне өйөрҙән айырып алғас, бынан иң шәп толпар тыуасағын әйткән. «Батырға — үҙең менгән ат ҡот түгел, ысын толпар ҡот», — тигән.

Бейәне алып ҡайтып, ул бик яҡшылап тәрбиәләгән, сит-ят күҙенә әллә ни күрһәтмәгән. Бейәнең ҡолонлар сағы еткән. Уны, килеп, үҙе ҡарап ҡолонлатҡан. Ҡолон бер туры ине, ти, арҡаһында кескәй генә ике ҡанаты бар икән. Тыуғас та, яҡшы тунға ураҡкан, иң шәп бейәләрҙән имеҙҙерткән. Турыҡайҙы бала кеүек тәрбиәләп үҫтергән. Ҡолонсаҡ тайға, тайҙан ҡонанға, ҡонандан дүнәнгә, дүнәндән ажғырып торған туры толпарға әйләнгән.

Күркәм, туры толпарҙың арҡаһына алтын-көмөш менән биҙәлгән эйәр һалып, кикел ялдарын тарап, ҡарағай һаплы һөңгө һаплатып, алмас ҡылыс һуктырып, көмөштән ҡынын нағышлап, Ҡоблан батырға тоттора: батырына тиң толпар ир-ат ҡанаты булһын, ти.

Бер заман ҡыҙылбаштарҙың Ҡазан тигән ханы ҡыпсаҡ иленә яу сапҡаны хәбәре тарала. Ҡырҡ нуғайлы батыры Ҡараман тигән ба-

тыр менән яуға сыға. Улар икәүләп Ҡоблан батыр йәйләүенә етә. Ҡараман Ҡоблан батырҙы яуға өндәп былай ти:

Мин буламын Ҡараман,
Ҡазан китеп барамын,
Ҡырҡ нуғайлы батыр менән,
Ҡырҡ мең ғәскәрем менән,
Замандашым, ҡорҙашым,
Беҙҙең менән ҡырҙа бул,
Ҡазан ханға яу менән
Беҙҙең менән юлда бул.
Ҡара ҡыпсаҡ илең бар,
Ҡоблан тигән затың бар,
Туры толпар атың бар,
Ҡурсаларҙай халҡың бар,
Беҙҙең менән бергә бул,
Бергә-бергә яуҙаш бул.
Ир аралар батыр бул,
Ил ҡурсалар батыр бул.

Ҡырҡ нуғайлы батырҙары шулай тигәс, Ҡоблан батыр яуға ҡушылмаҡ булып, йорт-илен, туған-тыумасаларын йыйҙырған. Һөңгө-уҡтарын әҙерләп, ҡылысын тағып, туры толпарын эйәрләп алған Ҡоблан батыр йорт-ил менән кәңәш төйнәгәс, яуға әҙерләнеп бөткәс, ата-әсәһе, бисәһе, ҡәрендәше менән хушлашҡан. Башта Ҡолансәс һыҡтай-һыҡтай былай тигән:

Яңғыҙ ағам, йән күркем,
Бергә тыуған ҡолоном,
Ҡәрәк саҡта терәгем,
Бергә тибәр йөрәгем!
Ҡара торған ҡороңдо,
Уны кемгә тапшырҙың?
Елегә* һыймаç йылҡыңды,
Уны кемгә тапшырҙың?
Туҡһандағы атаңды,
Уны кемгә тапшырҙың?
Алтмыштағы анаңды,
Уны кемгә тапшырҙың?
Ҡарындашың Ҡоланды,
Уны кемгә тапшырҙың?
Кәләшкәйең Күркәмде,
Уны кемгә тапшырҙың?

Ҡәрендәше Ҡолансәскә Ҡоблан былай тип яуап биргән:

Тауҙа ятыр тарғыл таш,
Тарыҡҡа сығыр күҙҙән йәш,
Ҡултығыма уҡ тейһә,

Дауалар, тим, ҡарындаш.
Ҡарындашым булмаһа,
Яуҙа ҡалыр ғәзиз баш.
Ҡарындашым Ҡолансәс,
Арҡаңды япҡан ҡолан* сәс,
Һүҙкәйемә ҡолаҡ һал,
Минән шуны ишетеп ҡал:
Ҡора торған ҡоромдо
Һеҙҙең ҡулға тапшырҙым.
Елегә һыймаҫ йылҡыны
Ел ҡулына тапшырҙым.
Туҡһандағы атамды
Ил ҡулына тапшырҙым,
Алтмыштағы анамды
Ир ҡулына тапшырҙым.
Ҡарындашым, һине мин
Туғандарыма тапшырҙым.
Ҡәләшкәйем Күркәмде
Һеҙҙең ҡулға тапшырҙым.

Ҡәләше Күркәм былай тигән:

Арыҫланым, алтыным,
Имен йөрөп, аман ҡайт!
Илгә ингән дошманды
Юлын бүлеп, ҡырып ҡайт!
Туры атың бар саҡта,
Дошман һине еңә алмаҫ,
Туры атың һау саҡта,
Илгә дошман инә алмаҫ.
Шуны ла һин иҫтә тот:
Ҡараман атлы ҡорҙашың,
Ҡазан хандың ҡалаһын
Аламын тип, алалмаҫ,
Алты ҡатлы үр үтеп,
Ҡарғыл эскә инәлмәҫ,
Ҡапҡаны ул асалмаҫ,
Дошман яуын баҫалмаҫ.
Ҡараман һиңә ҡарар,
Ғәскәр өмөтөн һалар,
Шунда таян тураҡҡа,
Ул еткерер мораҡҡа.
Минең һүҙемде тотһаң,
Ҡәҙеремде белерһең,
Ҡөҙрәтемде күрерһең.
Аман бул, солтанҡайым,
Һау-хуш бул, солтанҡайым!

Әсә улы менән хушлашҡанда былай тигән:

Улыҡайым, арыҫланым,
Беләгеңә ныҡ ышан,
Ер ғәйрәтен алған ул;
Йөрәгеңә ныҡ ышан,
Ил ҡөҙрәтен йыйған ул;
Туратыңа ныҡ таян,
Килен баҡкан йылҡы ул;
Ғәскәреңә ныҡ таян,
Илдән йыйылған ялпы ул.
Ошо барған яуыңда
Имен йөрөп, һау ҡайтһаң,
Игеҙ бәрәс ҡорбанға,
Игеҙ быҙау ҡорбанға,
Игеҙ ҡолон ҡорбанға.
Хуш, улҡайым, арыҫланым,
Аман булһын юлдарың!

Шулай ил-йорт, туған-тыумасалар менән хушлашып, ҡырҡ меңлек ғәскәр башында Ҡоблан яуға киткән. Менгән толпары елдәй елеп күп ерҙәрҙе үткәп, ғәскәренән ун ике көн элек дошман алдына килеп еткән. Тураттың толпарлығы шунда беленгән.

Ғәскәрҙе көтөп, хәл алырға ятһа, Ҡоблан бик ҡаты йоҡлап киткән. Ун ике көн, ун ике төн йоҡлаған. Ул арала Ҡараман ҡырҡ нуғайлы батыр менән килеп етеп, Ҡобланды уятмай ғына, үҙе Ҡазан ханды ҡыйратып ташларға уйлаған. Хан ҡалаһына сабыуыл яһаған. Тик алты ҡат урҙы үтә алмай, ҡала ҡапҡаһын астыра алмай, кире сигенгән.

Килеп Ҡоблан батырҙы уятҡандар. Ҡаланы ала алмауҙарын һөйләп биргәндәр.

Ҡоблан туратын эйәрләп яуға әҙерләнгән. Турат баҫҡан ерендә ут уйнатып, ел һелкетеп тора икән. Батыр атының ҡабырғаһына типкеһе* менән саҡ ҡына тибеп ҡуйған икән — турат ҡоштай атылып сабып киткән, хан ҡалаһын бер итеп әйләнеп сыҡҡан. Тураттың тояҡ еленән ел-дауыл ҡупҡан, хан ҡалаһы, ғәскәре аяҡҡа баҫҡан.

Ҡазан хан ҡырҡ мең ғәскәре менән алышҡа сыҡҡан. Ҡоблан батырҙы күреп, Ҡазан хан былай тигән:

Алыҫ юлдарҙан килгәнгә,
Йән-фарманға сапҡанға,
Ҡайҙалыр күҙ атҡанға
Оҡшағанһың, юламан,
Ҡайҙа таба юл алдың?
Ғәскәр менән юлландың?
Туры атлы йәш егет,
Кемдең улы булаһың?
Һөмһөрөң бик ҡойолған
Уйың ҡайҙа бараһың?

Мин Ҡазан хан буламын.
Туры һүҙең әйт, тимен.

Ҡоблан батыр шулай яуап биргән:

Ҡазан хан икәнеңде
Күптән инде беләбеҙ,
Ил-халыҡтарҙы талап
Йөрөгәнеңде күрәбеҙ.
Малға-ҡанға туймаһаң,
Туйҙыртырға килдем мин,
Ҡыпсаҡ иленең ҡонон
Алдыртырға килдем мин.
Яман атың сыҡҡанда,
Атам атын һорама,
Яман атың ташҡанда,
Минең затым һорама.
Яуға сабыр ир-егет
Ямандан аҡыл һорамаç.
Кемдең кем икәнлеген
Ҡылыс әйтер, турағас.
Ҡылыс менән үлтерһәм,
Ҡыйып киçте, тиәрһең;
Һөңгө менән үлтерһәм,
Сәнсеп үтте, тиәрһең;
Уҡтан атып үлтерһәм,
Ҡапыл булды, тиәрһең,
Алыштың ҡайһы ҡулай,
Шуны һайла һин үҙең.

Алыш алдынан шулай һүҙ көрәштереп киҙеү ташлашҡас, үлемесле алыш башланған. Һөңгөләр һөңгөгә бәрелешкән, сатрашлап ҡылыстар сабышҡан, ҡалҡанға һөңгөләр терәшкәндә, аттар үрәпсегән. Тирә-яҡ ҡанға, туҙанға буталған. Ер-күк тетрәп торған. Иртәнән кискә хәтле алышҡас, ханды хәлдән тайҙырып, аҙаҡта һөңгө менән сәнсеп, атынан ҡолатҡан. Яман йән шулай йән биргән.

Хандың ҡырҡ меңлек ғәскәре нуғайлының ҡырҡ батыры, ҡырҡ мең ғәскәре менән ҡыйратып ташланған. Хандың ҡалаһын алғандар. Ул көн еңеү туйын ҡорғандар. Аҙаҡ хандың мал-мөлкәтен алып, ҡайтыр юлға сыҡҡандар.

Бик күп мал-мөлкәт тейәп, өйөр-өйөр йылҡы, төрлө мал ҡыуып ҡайта ятҡанда, Ҡараман батырҙың нәфсеһе ҡуҙғалып, Ҡоблан батырҙы күршеләге бер хан мал өйөрөн ҡыуалап алып ҡайтырға ҡотортҡан. Ҡоблан батыр ҙа еңеү шауҡымынанмы, нисектер быға еңел күнгән. Юлдағы хандың мал өйөрөн дә үҙ яҡтарына ҡыуып алып киткәндәр. Юлда хандың бер Тарлан тигән шәп аты өйөрҙән бүленеп кире сабып киткән. Ҡоблан батыр тураты менән ҡыуа төшкән. Тик ҡырҡ көн буйы йүнләп хәл йыймаған, тамам йонсоған турат хан атын ҡыуып етә алмаған. Батыр кире боролған. Йән-фар-

ман сабып ҡайтҡан Тарлан атын күреп, хан йылҡы, мал өйөрөнөң таланыуын аңлаған. Баҫҡынсыларҙы ҡыуа сыҡҡандар. Ҡыуып етеп, үҙ малдарын һалдырып алғандар. Ҡараман батырҙар саҡ ҡасып ҡотолған.

Был саҡта Ҡоблан батыр йоҡларға ятҡан булған. Ул уяна алмай ҡала. Йоҡола көйө уны тотоп алып, аяҡ-ҡулын бәйләп, әсир итеп алып ҡайталар. Зинданға ташлайҙар. Туратты ла ҡулға төшөрәләр.

Ҡоблан батыр ер зинданда бик оҙаҡ ята. Ҡайғынан эсе бошоп, ҡайҙандыр бер ҡамыш киҫәге табып, шуны эстән шымартып ҡурай яһай. Эсе бошҡанда, туҡалдарын* һағынып, шул ҡурайын уйнай. Бер саҡ ҡурай моңон ишетеп, хан ҡыҙы ер зиндан янына килә. Килһә, зиндан төбөндә бер егет ҡурай уйнап ултыра. Хан ҡыҙы егеткә ғашиҡ була. Ҡыҙ егеткә мөхәббәтен төрлөсә белдермәк, ышандырмаҡ була. Батыр быға башта һис иғтибар итмәй. Аҙаҡ әйтә: «Әгәр һөйөүең раҫ булһа, мине был зиндандан ҡотҡар», — ти. Ҡыҙ: «Нисек итеп?» — тигәс, Ҡоблан әйтә: «Минең яҡында ғына хан зинданында туратым бығаулы тора. Шуны нисек тә бығауын һалдырып, ошо ер зиндан янына килтер, оҙон арҡан тап. Уны атҡа урап бер осон миңә төшөр», — ти.

Хан ҡыҙы ҡарауылсыларҙы алтынға һатып алып, быны эшләтә. Туратты килтерәләр. Арҡанға йәбешеп батыр ҙа зиндандан сыға. Ҡасып китер сағында ҡыҙ иҫкәртә: «Атайым Тарлан менән һине ҡыуа сығыр. Ҡыуып етһә, һинең имен ҡалыуың икеле, — ти. — Һин атайым ҡыуып етә башлағас, уның ҡалҡанының бер кескәй генә тишек урыны булыр, шуны табып, төҙәп ат», — ти.

Ҡоблан тураты менән ҡасып китә. Һиҙеп ҡалып, уны ҡыуа төшәләр. Хан Тарланы менән иң алдан сабып килә. Бер саҡ быны ҡыуып етте тигәндә, ҡыҙҙың өйрәтеүе буйынса батыр был хандың ҡалҡанындағы теге кескәй генә тишекте күреп алып, уғын ебәрһә, уҡ үтә сығып ханға килеп тә тейә, хан атынан тәгәрәп тә төшә. Шулай итеп, батыр тотҡонлоҡтан ҡотола. Хан ҡыҙы ла батырҙан ҡалмай. Бер ат менән уға килеп ҡушыла.

Юлда бер төн ҡуна ҡалғанда, Ҡоблан батыр бер ауыр төш күрә: имеш, ҡыпсаҡ илен Аҡсахан тигән хан килеп баҫҡан. Малын, илен талаған, барыһын туҙҙырып, ҡырып бөткән. Күркәмде үҙенә бисәлеккә алыр өсөн алып ҡайтып киткән. Атаһын тотҡон итеп ҡара эшкә ҡушҡан. Әсәһен көтөүсе иткән.

Ҡоблан батыр был яман төштән бик шомланып уянған. Быны хан ҡыҙына һөйләгән, ул төштө ысынға юрап, тағы шомландырған.

Илдәренә яҡынайып килгәндә, бер мал көтөүенә тап булғандар. Көтөүсеһен абайлабыраҡ ҡараһа, ҡартайып, сәсе ағарып бөткән ҡарсыҡтың әсәһе икәнен танып алған Ҡоблан. Әсәһе янына килеп атынан төшһә, уның ярым һуҡыр икәнен күргән. Уға улыңмын тип килеп күрешһә лә, әсә кеше улын танымаған. Әсә, батырҙың һул яурындағы һөйәлле миңен һыйпап ҡарағас ҡына, улы икәненә ышанған. Илап ебәргән. Аҡсахандың илде талауын, атаһын ҡол итеүен, үҙен көтөүсе хәленә ҡуйыуын, Күркәмде бисәлеккә алырға көслә-

шеүен илай-илай һөйләп биргән. Ҡолансәс тә йәберләтелеп ҡайҙалыр оҙатылғанмы, нисек, унан һис хәбәр-хәтер юҡ икән.

Шунда үс алырға ант иткәндәй Ҡоблан батыр шулай әйткән:

Ситтәргә яу сапҡанда,
Ҡыпсаҡ илем туҙғанда,
Үҙем тотҡонда ҡалыу —
Батыр өсөн шул хурлыҡ.
Туҡһандағы атаңды,
Һынҡайҙарын ҡатырып,
Билкәйҙәрен бөктөрөп,
Дошмандың ҡол яһауы —
Улы өсөн шул хурлыҡ.
Алтмыштағы анаңды,
Сәскәйҙәрен ағартып,
Йөҙкәйҙәрен ҡаралтып,
Дошманға теҙ сүктереп,
Ҡол итһәләр, шул хурлыҡ,
Ҡәләшкәйем Күркәмде,
Йән-бәғерем, иркәмде,
Хур итеп, зар илатып,
Һарайҙарға бикләтеп,
Йәбер итеп, мингәтеп,
Ҡан илатһалар — хурлыҡ.
Ҡәрендәшең бергенәң,
Ҡолан Ҡолансәсеңде,
Ата-әсәнән айырып,
Ҡанаттарын ҡайырып,
Сит ерҙәрҙә йөрөһә,
Ят ҡулында тилмерһә,
Ағаһы өсөн шул хурлыҡ.

Шунан туҙҙырылған иленән төрлө ерҙә ҡасып-боҫоп ҡалған әҙмәҙ ир-егеттәрҙе йыйып, бәләкәй генә ғәскәр менән Ҡоблан батыр Аҡсаханға ҡаршы яу әҙерләй. Уға Ураҡ батыр килеп ҡушыла. Сығалар былар яуға. Аҡсахандың ҡалаһына етәләр. Аҡсахан менән Ҡоблан батыр ҡара-ҡаршы алышҡа йыйына. Шул саҡ Ҡоблан батыр ҡаты ҡысҡырып шулай ти:

Әй, Аҡсахан, Аҡсахан!
Батыр юҡта батыр хан.
Илде төндә баҫыр хан.
Яу килгәндә ҡасыр хан.
Әйтер һүҙемә ҡолаҡ һал:
Минең атым Ҡобландыр,
Тыуған илем ҡыпсаҡтыр,
Илем-көнөм туҙҙырыуға
Ҡоном алыр был саҡтыр.
Туҡһандағы атамды

Ҡол итеүсе һин икән;
Алтмыштағы анамды
Ҡол итеүсе һин икән;
Һөйгән йәрем Күркәмде
Бисә итмәксе һин икән;
Бала-саға, ҡарт-ҡороно
Ер итмәксе һин икән.
Ярай, алышып ҡарайыҡ,
Алдың-артың ҡарап сыҡ,
Башын-ахырын уйлап сыҡ,
Барын-юғын ҡармай сыҡ,
Үкенескә ҡалмай сыҡ.

Аҡсахан да эре генә былай тигән:

Һин икәнһең Ҡоблан ир,
Ситтә яуҙар сапҡан ир,
Мал-мөлкәттәр тапҡан ир,
Үҙ иленән яҙған ир,
Үҙ көнөнән ҡалған ир.
Мин барғанмын яу менән,
Һин килгәнһең дау менән,
Алыш барға — алыш бар,
Сабыш барға — сабыш бар.
Үҙеңде бер сабырмын,
Ураҡты бер сабырмын,
Йәреңде бер сабырмын —
Шунан нисең ҡалыр һуң?
Шуны яҡшы бел, батыр:
Өҫтөмдәге кейемем
Атһаң, уғың үтәлмаҫ,
Сапһаң, ҡылысың киҫалмаҫ*,
Аҫтымдағы буҙ ҡашҡа
Ятты яҡын ебәрмәҫ.
Минең кәңәш шул һиңә:
Ҡыҙма, башың эй миңә.
Ҡәҙер-хөрмәт күрерһең,
Яу башлығы булырһың.
Атаң-анаң һау ҡалыр,
Тейеш мөлкәт — мал алыр.
Күркәм менән икегеҙ
Күркәм ғүмер итегеҙ.

Ҡоблан батыр яман аҡырып Аҡсахандың мәғәнәһеҙ өгөтөн бүлгән. Ауяһыҙ алыш башлаған. Аҡсахан, ысынлап та, бер ҙә бирешер ир түгел икән. Сапһа, тимер кейемен ҡылыс киҫмәй, атһа, уҡ алмай. Буҙ ҡашҡа һыбайлы батырҙы ике-өс һөңгө буйы яҡын ебәрмәй. Ажғырып, ел-дауыл уйнатып тора. Турат — толпар, буҙ ҡашҡа — толпарға толпар.

Ҡояш ауалағансы алышып хәлдән тая Ҡоблан батыр. Бер мәл атынан ҡолап төштө тигәндә,Ураҡ менән хан ҡыҙы араға килеп ҡыҫылып, батырҙы саҡ үлемдән аралап ҡала. Өсәүләп кенә Аҡсаханды яйлап ҡыҫмаҡлап алып китәләр.

Аҡсахан батырҙан еңелә. Ул ант иткәс, төрлө вәғәҙәләр биргәс, дуҫ-туған булырға тәүбәләр әйткәс, уны иҫән ҡалдыралар. Ҡоблан батыр ата-әсәһен ҡотҡарып, Күркәмде алып, Ҡолансәсте табып, хандың байлығын алып үҙ илдәренә ҡайта.

Донъялар именләнеп, бер аҙ йәшәгәс, Ҡыпсаҡ илендә ҡалған хан ҡыҙы яратҡан батыры Ҡобланға бер саҡ һамаҡлап шулай тип өндәшә:

Әй, Ҡобланым, Ҡобланым,
Минең һөйгән батырым!
Ниңә мине һарғайтаһың,
Ник итәһең бахырың?
Ҡол булырға әҙермен,
Юл булырға әҙермен
Һинең өсөн мин батыр.
Йәнем атып, һин тиеп,
Илем ташлап килдем бит,
Атам йәнен ҡыйҙырып,
Һиңә ҡушылып киттем бит.
Зиндандан тартып алдым,
Яттарҙан ҡарғып ҡалдым,
Ҡайғыларың бүлештем;
Яу-сәйерең бүлештем
Һинең өсөн мин, батыр,
Ғишҡым өсөн мин, батыр.

Шунан, ата-әсәһенең, Күркәмдең фатихаһын, батаһын алып, Ҡоблан батыр хан ҡыҙын икенсе бисә итеп алған. Бик ҙур итеп туй үткәргәндәр. Уға бөтә Ҡыпсаҡ иле йыйылған. Ҡобланды маҡтап сәсәндәр ҡобайыр әйткән, йырсылар йыр сығарған.

Был йәш бисәһенән Ҡоблан батырҙың бер улы тыуған. Уға Кейекбай тип исем ҡушҡандар. Кейекбай атаһы кеүек батыр ир-егет булып үҫеп еткән. Илен-йортон һаҡлап, атаһының юлын ҡыуған.



## КҮСӘКБЕЙ

Мәсем хан Иҙел башының уң яғындағы ерҙәрҙе биләп торған. Шүлгәндән артабанғы ерҙәр Мәсем хандыҡы булған, бирьяғы — Бабсаҡ бейҙеке булған. Урман эстәре Ҡарағөлөмбәт бейҙең ерҙәре (бөрйәндәрҙеке) булған.

Өфө, Стәрле яҡтары, унан ары ерҙәр Ырымбурға хәтле Тура хандыҡы булған. Иң көслө, иң ғәйрәтле хан Тура хан була. Уның уландары булмай. Бүләкбикә исемле берҙән-бер ҡыҙы була.

Беҙҙең башҡорт еренә бик яман янур килеп сыҡҡан, барҫ тип атала ул йәнлек. Малды, кешене бик ныҡ ҡыра башлаған, һис тә иркенләп йөрөп булмаған, бер аусы ла уға ҡаршы тора алмаған — бөтә халыҡҡа ҡурҡыу һалған был йәнлек. Шунан һуң инде Турахан халыҡҡа хәбәр һала:

— Кем дә кем шул янурҙы үлтереп, илде афәттән ҡотҡара, шуға берҙән-бер ҡыҙымды бирәм! — тигән. Был хәбәрҙе ишетеп, бик күп батырҙар барҫты аулай сығалар, ләкин һәләк булалар. Тап булған бер аусыны барҫ ашап торған.

Уҫаллығы менән даны сыҡҡан Мәсем хандың 12 бейе — батыры була: Бабсаҡ бей, Ҡарағөлөмбәт бей, Тамъян, Түңгәүер һәм башҡалар. Уларҙың башында шул иң тәүге икәүһе тора, иң батыры, иң мәргәне шул икәү була. 12 батыр бергә йыйылалар, шунан барыһы ла ауға сығып китәләр теге йәнлекте ауларға, аңдып атып үлтерергә. Һәр береһе төрлө яҡҡа китә. Бабсаҡ бей, бер үҙе йөрөп ятҡанда, барҫтың саңдауын табып ала. Бейек кенә ағас башына таҙғаҡ яһап алып, шунда ултырып, барҫты аңдый башлай. Ә барҫ инде кешенең еҫен һиҙеп, анда һикереп, мында һикереп, сабауыллап йөрөй башлай. Бабсаҡ бер атып ебәрә, уҡ үтеп сығып китһә лә, теге янур үлмәй, Бабсаҡ ултырған ағасҡа һикерә, үрмәләп менә башлай. Бабсаҡ тегенең асыҡ ауыҙына атып ебәрә — янур гөрҫ итеп ергә барып төшә. Барҫ үлгәс, Бабсаҡ төшөп тегенең бәләкәй генә тырнағын киҫеп ала ла ауыҙына атҡан уғын бөтөнләй эскә тығып ҡалдырып китә.

Унан һуң Бабсаҡ саба Тураханға. Ул киткәс, барҫ өҫтөнә Ҡарағөлөмбәт бей килеп сыға. Барҫ үлтерелгән, йып-йылы көйөнсә ята.

Был үҙенең уғы менән бер-ике ата ла Тураханға саба. Бабсаҡ бей артынан был да барып етә.

Ике батыр дәғүәләшә башлай, талаш китә. Ҡарағөлөмбәттән һорайҙар:

— Үҙең үлтергәнде нисек күрһәтә алаһың? Ниндәй билдәң бар?

— Ошо уҡ менән аттым да үлтерҙем, башҡа бер ниндәй билдә юҡ.

— Ә минең билдә бар, барып тикшереп ҡарағыҙ! — ти Бабсаҡ бей.

Турахан барҫ янына кешеләр ебәрә, барҫты барып тикшерәләр. Бабсаҡ бей янурҙың иң ситке тырнағын күрһәтә, ә уғын тегенең эсенән алып бирә. Янурҙың тәүге йәрәхәте уҡҡа тура килә. Барған кешеләр быны дөрөҫләйҙәр.

Шулайтып, ҡыҙҙы Бабсаҡ бейгә бирәләр. Турахан бөтә ерен, халҡын Бабсаҡ бейгә бүлеп ҡуя. Ҡарағөлөмбәттең быға бик ныҡ асыуы ҡалҡа.

Бабсаҡ бей йәш бисәһен алып Мәсем ханлығына ҡайтып китә. Шүлгән буйына йәйләү ҡороп, шунда ултыра. Шул ваҡытта Ҡарағөлөмбәт Мәсем хандан мең кеше алып, урман эсенән Бабсаҡ бей йәйләүе өҫтөнә килеп сыға. Ул заманда бер низам* булған: килгән кеше аяҡ өҫтө торорға ҡушыу белән — торҙониһә, ул кеше буйһонған була.

Ҡарағөлөмбәт килеп сыға ла Бабсаҡ бейгә бойора:

— Тор, Бабсаҡ! — ти.

Бабсаҡ бей был ваҡыт мәжлес ҡороп, кешеләрен һыйлап ултырған икән. Ҡарағөлөмбәт килеп шулайтып ҡысҡырып ебәргәс, ул башын ғына бороп яуап биргән:

— Тормайым, Ҡарағөлөмбәт. Түрәлекте һиңә лә, Мәсем ханға ла бирмәйем, кит, йөрөмә бында! — ти ҙә тыныс ҡына ултыра биргән.

— Бирмәһәң, бына һиңә, ал! — тип Ҡарағөлөмбәт ҡырҡма башаҡлы уҡ* менән Бабсаҡ бейҙең билен өҙә ата ла ҡуя. Булған кешеләрҙе барын ҡырып, Бабсактың улдарын, ике ҡатынын үлтереп, байлығын талап, Бүләкбикәне алып, Ҡарағөлөмбәт Мәсем ханлығына ҡайтып китә.

Был турала хәбәр Тураханға барып етә. Турахан былай ти:

— Инде мин ҡартайғанмын, кеше ҡанын ҡойор хәлем бөткән. Ҡыҙым ғоманлы булып, ул тыуып, үҫеп, атаһының ҡонон ҡайтармаһа, башҡа сарам юҡ.

Бүләкбикә, ысынлап та, ғоманлы булған. Ҡарағөлөмбәт Бүләкбикәне күрәҙәләргә күрһәтә. Күрәҙәләр, сихырсылар:

— Бикәнең буйында бар, төшөртөргә кәрәк! — тип, Ҡарағөлөмбәткә хөсөт ҡоялар. Ҡарағөлөмбәт яралғыны күҫәк менән иҙеп төшөрөргә ҡуша. Бер өйгә алып инеп, Бикәнең өҫтөндә күҫәк тәгәрәтәләр, меҫкенде бик ныҡ ыҙалайҙар, күҫәк менән бөтә тәнен иҙеп сығалар. Ҡарағөлөмбәт үҙе лә ҡатнаша. Иҙеүсе ирҙәр әйтә:

— Күҫәк булмаһа, бөткәндер инде! — тип сығып китәләр. Ләкин ҡатын бик ҡеүәтле була, үҙе тәнен ҡуҙғата алмай, аяғына баҫа ал-

май ятһа ла, балаға зарар килмәй, бала имгәнмәй ҡала. Бүләкбикә һауыға, ҡорһағы ҙурая башлай. Бисара ҡатын уйлай:

— Былар һиҙеп ҡалһалар, мине тағы яфаларҙар инде. Йәһәтерәк үҙ йүнемде үҙем күрәйем, был ғазаптан ҡотолоу юлын эҙләйем, — ти.

Турахан ҡыҙын оҙатҡан саҡта ун ике елеле бейә[89] бирә. Ул ун икенең араһында бер бейә була. Аның ялы ла, ҡойроғо ла, маңлай сәсе лә булмай — ҡап-ҡашҡа, тап-тайыҙ бейә була. Әммә үҙе яҡшы заттан була.

Оҙатҡан саҡта атаһы Турахан ҡыҙына әйтә:

— Берәр хәл була ҡалһа, ошо бейәне мен дә, башын тартҡыламай ыңғайына ебәр ҙә ҡуй. Ул һине туп-тура мында алып ҡайтыр, — ти.

Емеш ваҡыттары еткәс, Бүләк ҡасырға уйлай башлай. Аттарҙы әҙерләтеп ҡуя ла Ҡарағөлөмбәткә бара:

— Емеш бешкән ваҡытта бер емешкә барып киләйем, — тип рөхсәт һорай. Ҡарағөлөмбәт яҡын да килмәй:

— Юҡ, юҡ! Һиңә емешкә йөрөп ятмаға! Теләгәнеңде һора — яраштырып алып килерҙәр. Үҙең ыҙаланып йөрөмә! — ти.

— Ярар инде алай булғас, — ти ҙә Бүләк сығып китә.

Ҡискеһен Ҡарағөлөмбәт килә. Йоҡларға яталар. Ҡарағөлөмбәт шунда уҡ йоҡлап китә, Бикә ипләп кенә тора, ҡашҡа бейәгә менә. Ҡашҡа бейә Турахан йәйләүенә саба.

Икенсе көн Ҡарағөлөмбәт Бикәнең артынан төшә, китәләр юлын ҡыуып. Ләкин Турахан ерҙәренә барып еткәс, ҡурҡып, кире әйләнәләр. Ҡарағөлөмбәт эсенә үс һалып ҡайтып китә.

Бикә атаһына ҡайтып, тынысланып, иркенләп бала көтә башлай. Бүләкбикә ир бала таба. Уға Күсәкбей[90] тип исем ҡушалар. Бала бик мыҡты, ғәйрәтле була. Урамда малайҙар менән уйнағанда ла тегеләрҙе имгәтеп алып бара икән. Шулайтып, Күсәкбей 20 йәшендә үҙенә тиң табалмаған батыр булып китә.

Бер ваҡыт Күсәкбей бер башҡорттоң берҙән-бер улының ҡулын аңһыҙ сығарып ҡуя. Тегенең аталары ханда хеҙмәттә була. Шуға егеттең атаһы Тураханға инә.

— Ханым, балаңды тый. Улымдың ҡулын сығарҙы, балаларға һис көн юҡ. Шәп булғас, атаһының ҡонон алһын! — тип зарлана.

Күсәкбей Турахандың эргәһендә барыһын да тыңлап эсенә һалып ултыра.

Быға хәтле ул Тураханды атай тип йөрөгән икән. Теге башҡорт сығып киткәс, Күсәкбей ҡобараһы осоп әсәһенә бара.

— Ней булды, балам! Ниңә ҡобараң осҡан? Әллә ауырыйһыңмы? — тип әсәһе ҡурҡып китә.

— Әсәй, минең атайым кем, ҡайҙа ул? — тип һорай Күсәкбей.

— Балаҡайым, ул ней тигән һүҙең? Атаң Турахан бит һинең, — тип тынысландырырға уйлай, үҙе бик борсола. Күсәкбей әсәһенән ҡурмас һорай. Әсәһе ҡурмас ҡура ла һауытҡа һалып алып бирә.

— Юҡ, әсәй, ҡулың менән эпир! — ти Күсәкбей. Әсәһе бер нәмә лә төшөнмәй ҡулы менән алып бирә. Күсәкбей тегенең ҡулын эҫе ҡурмасы менән бергә ҡыҫа ла ебәрмәй:

— Әсәй, әйт, кем минең атам, ҡайҙа ул? — тип ныҡыша.

Әсәһе ҡулы яныуға сыҙамай, теләмәһә лә, һөйләп бирә.

— Атайымдың ҡонон ҡайтарам! Ҡарағөләмбәтте ырыуы менән ҡырып бөтөрәм! — тип ырғып тора Күсәкбей.

Әсәһе шунан ғына ҡурҡып һөйләмәй килгән икән, балаһының һөйәге нығынһын тип уйлаған. Ләкин Күсәкбей әсәһенең һүҙен ҡолағына ла элмәй сығып китә.

Тураханға барып саламғула* ултыра. Хан аптырап китә: бик ҙур үтенес менән килгәндә генә кеше шулай ултыра. Ә баланың ниндәй ҙур үтенесе булһын инде?

Турахан улынан һорай:

— Ни булды, балам, ниндәй ҙур уй башыңа төштө? Әллә берәй хандың ҡыҙына күҙең төштөмө? Тор, балам, теләһә ниндәй ҙур үтенесеңде лә үтәрмен, — ти.

— Миңә кешеләр кәрәк. Барып Ҡарағөләмбәттән атайымдың үсен алам. Үҙемдең йәнемде һалам — атайымдың ҡонон ҡайтармай ҡайтмайым! — ти Күсәкбей.

Турахан вәзирҙәрен, аҡһаҡалдарын йыйып кәңәш тота. Вәзирҙәр, аҡһаҡалдар:

— Ханым, берҙән-бер улың, әйҙә барһын, үтенесен ашырайыҡ, — тиҙәр.

Хан иң яҡшы, иң батыр, аҡыллы кешеләрен йыйып, мең кешенән торған ғәскәр, иң тәжрибәле, аҡыллы аҡһаҡалын бирә. Улын саҡырып алып:

— Улым, бер шарт ҡуям, әгәр шул шартымды үтәһәң генә, ебәрә алам: ошо олатайыңдың һәр бер кәңәшен тот, бер һүҙенән дә сыҡма, — ти.

Күсәкбей һүҙ бирә.

Бер аҙнанан һуң Күсәкбей ғәскәре менән яуға сыға. Был хәбәрҙе ишетеп Ҡарағөләмбәттең бөтә кешеләре урман эсенә, тау-таш араларына ҡаса.

Бер ҙә кеше инә алмаҫлыҡ дөм ҡараңғы урман араһында Ҡарағөләмбәт 40 улы, 12 бисәһе, ғәскәре менән ҡасып ята. Күсәкбей бөтә ғәскәрен урманда ҡалдырып, үҙе насар ғына кейенеп алып, урман араһында йөрөй башлай. Бер кешене тотоп ала ла ғәскәренә алып килә. Тегенән иләп кенә һорашалар, кеше һис бер нәмә өндәшмәй. Аҡһаҡал олатаһы был кешене үлтергәнсе һуҡтырырға бойороҡ бирә. Шунан ғына теге ҡурҡып, Ҡарағөләмбәттең йәшенеп ятҡан ерен әйтеп бирә.

— Һин йә беҙгә юл башлап бар, йә үҙеңде үлтерәбеҙ! — ти Күсәкбей.

— Ярар, юл күрһәтеп барырмын, үлтермәгеҙ, — ти Ҡарағөләмбәттең кешеһе.

Ҡарағөләмбәт төйәгенә Күсәкбей үҙе генә китә. Тәүҙә уның иң баш бисәһенә барып инә. Ә Ҡарағөләмбәт өйҙә юҡ икән, һунарға киткән булған.

— Инәй, бик асыҡҡанмын, тамағымды туйҙырып ебәрсәле? — ти Күсәкбей.

Ҡатын йылы ғына ҡуликмәк, май, ҡымыҙ килтерә лә икмәкте бүлергә була.

— Инәй, икмәкте бүлмәй, бөтөн көйөнсө һал! — ти Күсәкбей.

— Юҡ, балам, бабайың һунарҙан асығып ҡайтыр, уға ла кәрәк булыр, — тип дүрттән бер өлөшөн Күсәкбейгә бүлеп бирә, тағы һөҙмә килтереп ултырта.

Күсәкбей хәнйәрен сығарып һөҙмәне өскә бүлә лә береһен эткә ташлай, бер өлөшөн ағаска сәсрәтә һуға (ҡош-ҡорт ашаһын тип), бер өлөшөн теге инәйгә бирә.

— Бына быныһы һинең өлөш, һинең ризығың бар әле, — тип сығып китә.

Бер заман кис Ҡарағөлөмбәт ҡайтып килә. Әлеге өс өлөш икмәкте әбейе алып килеп һала.

— Әллә берәү килдеме?

— Эйе, бер йәш кенә кеше ишектән саҡ һыйып килеп инде, күҙҙәре уттай янып тора, инде үтә ҡарай ҙа ҡуя — шул хәтле күҙе үткер. Ашарға һорағас, әҙерәк икмәк бирҙем, һөҙмә ултырттым, — тип әбейе һөйләп бирә.

Ҡарағөлөмбәт ырғып тора:

— Ай, эттәгенәһе, әбей, икмәкте бөтөн көйө бирһәңсе! Ул Күсәкбей булырға тейеш. Бөтә донъябыҙҙы туҙҙырып, кешеләребеҙҙе ҡырып бөтөрөргә килгән ул. Теймәһә, һиңә генә теймәҫ, һине үлтермәҫ, уландарыңды ҡырып бөтөрөр! — тип йүгереп сығып китә. Тирә-яҡты, урман араһын ҡараштыралар, бер нәмә лә таба алмайҙар.

— Бөгөнгә ошонда ҡунайыҡ та иртәгә икенсе ергә күсербеҙ, — тип йоҡларға яталар.

Төнөн Күсәкбей ғәскәре менән былар ҙы килеп баҫа. Бөтә кешеләрен ҡыра башлайҙар, уландарын, ҡатындарын үлтереп бөтөп, Ҡарағөлөмбәтте һөйрәтеп сығарып бәйләп ҡуялар.

Ҡарағөлөмбәт кешеләрен ҡырып, үлтереп, хатта Мәсем ханға барып етәләр.

Ҡарағөлөмбәттең иң кесе улы ҡатыны менән атҡа менеп ҡаса. Быны белеп ҡалып, юлынан ҡыуып китәләр. Бер көн ҡаскандан һуң ҡасҡындар туҡтап, ашап-эсеп китәләр. Теге егет имәндән дүрткелләп бармаҡ яһай ҙа шуға уғын ата, уҡ үтә сығып китә — шул хәтле көслө була был.

Күсәкбей кешеләре ошо ергә килеп еткәс, аҡһаҡал әйтә:

— Йә, улым, үҙең атып ҡара әле, үтә сығарырһыңмы икән? — ти. Күсәкбей атып ебәрә, башағы юғалып ҡаҙалып тора, уғы үтә сыҡмай. Күсәкбейҙәр тегеләрҙе артабан ҡыуып китәләр. Икенсе көн ҡасҡындар тағы тамаҡ туйҙырып киткән булалар. Теге егет был юлы ташҡа атып киткән, уғы ташҡа ҡаҙалып торған. Ул заманда батырҙар уҡ башағын алмастан яһаған булғандар. Аҡһаҡал Күсәкбейгә әйтә:

— Йә, улым, һин дә шул ташҡа атып ҡара әле.

Күсәкбей кирелеп китеп атып ебәрә теге ташҡа — уҡ сәрпәкләнеп сәсрәп китә.

Бабай шунан Күсәкбейгә былай ти:

—Улым, ҡасҡанды ҡыумайыҡ, ҡаршы торғанды ҡуймайыҡ. Был бәндәләр һаман ҡасалар. Ҡурҡаҡты күп ҡыума — батыр сығар, тигәндәр. Бер йән икән, әйҙә китһен!

Күсәкбей олатаһының кәңәшен тотоп, кире боролоп ҡайтып китә. Шул бер йәндән ишәйеп китеп, бөрйән ырыуы үҫеп киткән.

Күсәкбей Ҡарағөлөмбәтте туҡмап, һөйрәтеп, Ҡайраҡлы йылғаһы буйлап алып ҡайта. Байтаҡ барғас, бер яланға килеп сығалар. Шул ерҙә Ҡарағөлөмбәт түҙмәй, Күсәкбейгә инәлә:

— Атай, сал һин мине ошонда! Ыҙалатып йөрөтмә мине ҡарт көнөмдә... Түҙәр хәлем ҡалманы! — тип, Күсәкбейҙе ололап «атай» ти. Күсәкбей унын һүҙен тыңламай.

Шул ергә Атайсал тип исем ҡушҡандар.

Бара биргәс, бер бейек тау башына мендереп, Ҡарағөлөмбәтте тәгәрмәс һымаҡ бөгөп бәйләп, шул тау башынан тәгәрмәләтеп төшөрөп ебәрәләр. Ҡарағөлөмбәт һөйәктәре һынып, һуғылып-ҡыйралып барып төшкәс, тау аҫтында йән көсө менән ҡысҡырып ебәрә.

— Ай, аллам, күтәнем өҙөлдө! — ти.

Шул тауҙы «Күтәне өҙөлгән тау» тип йөрөтәләр.

Шунан Ҡарағөлөмбәтте тағы ҡара һыйырға ултыртып алып китәләр. Ул хәлдән тайған, йәне ҡул осонда ғына килә. Олатайы быны күреп, Күсәкбейгә:

— Улым, бының хәле бөткән, үлеп ҡалыр, һин уны салып кит, — ти.

Ләкин Күсәкбей Ҡарағөлөмбәттең яһил булыуын иҫендә нык тота, үҙе лә рәхимһеҙ була. Ул олатайына ҡаты ғына яуап бирә.

— Олатай, ошоға хәтле бер һүҙеңдән сыҡманым. Был юлы бер мәртәбә рөхсәт ит — үҙемсә эшләйем, — ти.

— Ярар, әйҙә үҙеңсә булһын!

Ҡарағөлөмбәтте Ағиҙел буйына алып килеп, ҙур ҡаҙандың аҫтына ут яғып, шул ҡаҙан эсенә ултыртып ҡуралар. Шул тауҙы Ҡурыуҙы тауы* тиҙәр.

Күсәкбей шунан һуң ҡайтып, әсәһе менән тора башлай. Турахан үлеп китә.

Бер мәл Темәс менән Күсәкбей араһында дошманлыҡ китә. Күсәкбей үҙенең яҡын кешеләренә кәңәш тота:

— Беҙ бер нык ҡала төҙөйөк. Берәр хәл булып, баҫып килә башлаһалар, инә алмаҫлыҡ булһын, — тип ҡала төҙөргә булалар. Ҡаланы төҙөп, имән ҡойма менән уратып алып, ул ҡалаға Имәнтүш* ҡалаһы исеме биргәндәр.

Бер заман был Имәнтүш янып киткән.

Бер аҡыллы ҡарт, күренекле аҡһаҡал, ҡаланың эргәһендәге таптаҡыр тау башына менеп ултырған да:

— Уф, алла, янып киттек бит, әрәм булды бит ҡалабыҙ, уф, алла! — тип уфтанып, ҡайғырып ултырған, ти. Шунан ул ҡаланы Уфа тип йөрөткәндәр.

Күсәкбей Мәсем хан менән Темәс бейҙең үс алырға әҙерләнеүен, яу менән килергә ятыуын ишетеп, аҡһаҡалдарын йыйып кәңәш тотҡан:

— Мин аҡ бей падишаһына бармаҡ булам, шуның менән бергә донъя көтмәк булам. Әтү тегеләр беҙҙе ҡыҫырыҡлап йонсоторҙар, — тигән.

Шулайтып, Күсәкбей яҡын кешеләре менән ҡағыҙ яҙып алып Иван Грозный батшаға китә. Аҡ батшаға барып һөйләшә. Үҙенең шартын ҡуя:

— Падишаһым, үҙ ҡул аҫтыңа ал! Һинең дуҫыңа дуҫ булам, дошманыңа дошман булам! — тигән.

Унан башҡа башҡорт бейҙәре лә берәм-берәм аҡ батшаға баш һала башлай. Тик аҡ батшаға баш һалмай урман эсендә Мәсем хан тороп ҡала, Шағәле Шаҡман хан ҡала, Аҡһары, Дидовка, Ҡаширин, Яҡуп ауылдары, Ырымбур юлының уң яҡ буйҙары ҡала.

Иван Грозный үҙенең ғәскәрҙәре менән килә.

— Урыҫ яу килтерә, имеш, ҡасайыҡ! — тип Шағәле Шаҡман хазинаһын, алтынын ергә күмеп, үҙе ҡасып ситкә китә.

Иван Грозный һиҙеп ҡала ла Шағәле Шаҡманды тотоп ала, унан һуң үлтерә. Хазинаһы Яманһарыла (Ҡашириндан бирерәк) ҡалған тиҙәр. ... күлендә ҙур кәмә булған. Шағәле Шаҡман хазинаһы ул кәмәгә һыймай. Үгеҙҙе һуйып, тиреһенә тултырып төрөп... тауға күмдерә. Шағәле Шаҡман хазинаһын табабыҙ тип, күп кешеләр килгән, тиҙәр. Ҡешеләр ҡаҙырға килһә, тау тишегенән ауыҙынан уттар сәсеп, ер йыртып үкереп үгеҙ килгән, имеш. Ҡешеләр, ҡурҡып, бара алмағандар. Шул хазинаны берәү ҙә тапмаған, тиҙәр.



## ҠАРАҒӨЛӨМБӘТ МЕНӘН АҠҠОЛОМБӘТ

Бик борон саҡта, батша ҡул һуҙмаҫ, олатайҙар яңы төйәк һайлап, кем уҙарҙан ер биләгән, көслө ырыу көсһөҙ ырыуҙы тибәргән осорҙа бер туған Ҡарағөлөмбәт менән Аҡҡоломбәт тигән ике бай йәшәгән. Былар икеһе ике ерҙә бай булып, береһе береһенән уҙҙырып көн иткәндәр. Аҡҡоломбәттең Аҡйегет, Бабсаҡ тигән ике улы булған, Ҡарағөлөмбәттең, йыл һайын дүрт бисә алып, дүрт бисә айырып торһа ла, балаһы тыумаған, ти. Ағаһы Аҡҡоломбәт ҡустыһы Ҡарағөлөмбәттең ошо хәленә бик эсе бошоп, һәр саҡ был турала әйтә килгән.

Берҙән бер көн Аҡҡоломбәт, бөтә тирә-яҡҡа оран һалып, күҙ күргән, ҡолаҡ ишеткән ерҙән ала бөтә ырыуҙы йыйып, ҙур туй яһаған. Бейҙәр батырҙарын, йүгерек аттарын йыйып килгәндәр, ти. Ағаһының туйына Ҡарағөлөмбәт тә батырҙарын эйәртеп, дүрт бисәһен янына ултыртып, ер һелкетеп килеп төшкән, Аҡҡоломбәт ҡаршы алғанда:

— Ҡустым, сәскә утлаған мал һымаҡ, йыл һайын сәскәнән сәскәгә һикереп, килендәрҙе алыштырып ҡына тораһың, бәй, бәй... килендәрҙе тағы ла яңыртҡанһың. Был эшең ҡыҙыҡлыҡтанмы? Әллә сараһыҙҙанмы? — тип һораған, ти, Ҡарағөлөмбәт:

— Ағай, уныһы минең эш. Мин ни теләйем, шуны эшләйем, — тип яуап биргәнен Аҡҡоломбәттең улы Аҡйегет тыңлап торған да:

— Атай, ниңә уға аптырайһың? Донъяла бар йәндең ире, бисәһе бар. Үлеп айырылғансы шуның менән көн итә, бала үҫтерә. Тик әттең генә айырым билдәләнгән бисәһе юҡ. Теләгән саҡта осраған берәү менән ҡауыша. Ағайым да шулай йәшәргә уйлағандыр, — тип көлгән, ти. Аҡйегеттең был һүҙенә Ҡарағөлөмбәт бик ғәрләнгән, шулай ҙа ағаһына ла, Аҡйегеткә лә һиҙҙермәгән, уйынға һабыштырып ҡына ҡуйған, ти.

Бер нисә көндәр ҡунаҡ булғандар. Туй бөткәс, Ҡарағөлөмбәт батырҙарын, сабарҙарын бер көн алда ҡайтарып ебәргән. Дүрт бисәһе менән үҙе ҡалған, ти. Иртән тороп, аш-ни ашап, һыуһын эсеп, ат-маҙарҙы егеп, ҡайтырға йыйынған саҡта Ҡарағөлөмбәт:

— Ағай, ҡустыларымды миңә ҡунаҡҡа ебәр. Аяҡ аҫтынан ел уҙғарып ҡайтырҙар, — тигән, ти. Бабсаҡ ауырыҡһыныу арҡаһында

бара алмаған. Аҡйегет Ҡарағөлөмбәт менән киткән, ти. Юлда ҡайтып барғанда, былар бер туғайлыҡҡа төшөп, аттарына тын эсереп, үҙҙәре һыуһын эсеп, ял итеп китергә булғандар, ти. Ашаған, эскәндәр, уйнаған, көлгәндәр. Бисәләре еләк ҡарарға киткән. Ҡарағөлөмбәт менән Аҡйегет ял итергә ятҡандар, ти. Туйҙа уйнап, ҡунаҡ һыйлап йөрөгән Аҡйегет ятҡас та йоҡоға киткән, ти. Ҡарағөлөмбәт быныҡ йоҡоға киткәнен белгән дә, ҡынынан хәнйәрен сығарып, Аҡйегетте сәнсеп үлтергән.

— Минең араға төшөп, мин алаһы ҡыҙҙы алдың, етмәһә, мине эткә оҡшатып, атайың алдында ауыҙ йырып көлдөң. Бына хәҙер көл... Хәҙер бисәңде лә алырмын. Бабсаҡты үлтерһәм, ағайым ҡарт, ул оҙаҡламай үлер, уның бейлеге лә үҙемә ҡалыр, — тип үҙ-үҙенә һөйләнеп, Аҡйегеттең үлеген күлгә ташларға маташҡанда бисәләренең еләктән ҡайтып килгәнен күргән дә: «Былар күрҙе, берәһе әйтмәһә, берәһе әйтер, быларҙы ла үлтерәйем», — тип, бисәләрен дә һуйып, барын да күлгә һалып, ҡайтып киткән, ти.

Аҡйегетте атаһы аҙна көткән, ай көткән, һаман ҡайтмағас, белер өсөн бер һыбай ебәргән, ти. Тегеһе барһа, исмаһам, белгән-күргән кеше лә юҡ, ти. Ҡарағөлөмбәт Аҡҡоломбәт кешеһенә:

— Аҡйегет яртылыҡ юлға еткәс, «ҡайтам», тип, кире уйлап ҡайтып киткәйне. Яман артаҡҡа осрамаһа ярар ине. Минең үҙемде айыуҙар уратып, ат-тунымды, бисәләремде ашап китте, — тигән, ти.

Аҡҡоломбәттең ебәргән кешеһе ҡайтып бөтә күргән-белгәнен баштан-аяҡ һөйләп биргән, ти. Аҡҡоломбәт аптыраған. «Ҡайҙа китер икән?» — тип уйлаған. Был эштең осона-ҡырына сыға алмай, эҙләү-һорашыу өсөн илгә кеше тараткан, ти. Ебәргән кешеләр аҙна, ай йөрөп, бер нәмә лә белмәй, аптырап, ҡайтып килгәндә, бер көтөүсегә осрап, һораша башлағас, көтөүсе:

— Ундай-бындай кеше бер ҙә осраманы. Бер айҙар самаһы була инде, Ҡарағөлөмбәт бай бер егет, дүрт бисәһе менән ошо күл туғайына килеп төшкәйне, күреп-нитеп ҡалһа, бай һуҡраныр тип, тиҙ генә көтөү малдарын Сауҡа аръяғынараҡ ситләттем. Бер аҙҙан һуң сыр-сыу килгән бисәләр тауышы ишеткәс, ошо күл яғына йүгереп килдем. Килһәм, ни күҙем менән күрәйем, бай, ҡабаланып, бер атына менеп, саң-томан булып сабып китеп бара. Ике атын һуйып киткәндәр. Шунан бүтән бер кеше лә күргәнем юҡ, — тигән. Быға бай кешеләре:

— Ана шул бай менән киткән егет ғәйеп, бай менән бармаған, кире әйләнеп ҡайтып киткән, ошо көнгә саҡлы өйгә лә ҡайтҡаны юҡ. Бына шул егет яңғыҙ-яба ҡайтып килгәндә осраманымы? — тигәндәр, ти. Көтөүсе:

— Юҡ шул. Ундай яңғыҙ-ярым йөрөгән бер кеше лә күҙгә салынманы. Улай икән!.. Ул егет бай менән бармағандыр шул, — тип һүҙен бүлгән дә: «Һеҙ Аҡҡоломбәт кешеләреме ни?» — тип һораған, ти. Былар:

— Эйе, эйе. Беҙҙе ул бына шул егетте эҙләргә сығарып ебәрҙе. Бер ҙә эҙенә төшә алмай, арманһыҙ булып ҡайтып киләбеҙ. Кеше һынлы нәмәне таба алмай ҡайтҡас, бай күҙенә лә күренеү оят.

Юғалһа, егет әрәм була инде, ил өсөн арыу ине. Илгә атаһы ҡаты оронһа, һәр саҡ илде ҡурмып, тел ҡыҫтырып бара торғайны, — тигәс, көтөүсе, тирә-яғына ҡаранып, былай тигән:

— Егеттәр, байҙың уландарын үҙем күргәнем юҡ. Илдең маҡтауын һәр саҡ ишетә йөрөйөм. Улай булһа, бына нимә: күбәләктәй йәнем, бер ҡалаҡтай ҡаным шаһит булһын. Ҡайҙан ишеттек, шунда ҡалһын. Ҡартайған көнөмдә күргәнемде йәшереп тормайым, белгәнемде аҡ күңелемдән һөйләйем, улай булһа, атығыҙҙан төшөгөҙ, — тигәс, бары ла аттарынан төшөп, аттарын ағаска бәйләп, түңәрәкләп ултырғас, көтөүсе ҡарт һөйләргә керешкән:

— Мин, бай күрмәһен тип, малдарымды Сауҡа аръяғынараҡ ситләттем. Бай киткәс, күлгә барып балыҡҡа һалған мурҙамды ҡараған булып, һаман шәйләп йөрөнөм. Бер аҙҙан һуң сыр-сыу килгән бисәләр тауышы ҡолағыма салынды. Был ни хәл, мин әйтәм, байҙың аты-маҙары болоҡһоп, берәй бәләгә дусар булдылармы әллә, тип күлгә йүгерҙем. Килһәм, ни күҙем менән күрәйем, бай бер атына менгән дә ат фарманына саң-томан булып, сабып китеп бара. Аптыраным, алйыным, нимә эшләргә белмәнем. Ары йүгереп, бире йүгереп ҡараным, тирә-яҡта бер йән әҫәре юҡ. Айыу килеп ҡыйратҡан тир инем, һыйыр, һарыҡ һис еҫ алманы, улар һиҙә торғайны, аптырағас, байҙың арбаһы янына барҙым, ике атының аяғы бәйле, икеһен дә салып ташлағандар, арба тирәһендә ҡатынҡыҙ сәсенең, кейем-һалымының өҙөктәре, тапалған үлән өҫтәре шыр ҡан, күл тирәһен уратып-сабып ҡараным, һис үлгән-ниткән кеше юҡ. Нимә тиергә лә белмәнем, берәүгә лә һөйләмәнем, бисмилла, башлап бына һеҙгә һөйләп ултырам, — тигәс, бары ла аптырашҡандар, ти. Бай кешеләре үҙ-ара һөйләшкәндәр, бейгә үҙебеҙ генә ҡайтып һөйләһәк, бай ышанмаҫ, көтөүсе ҡартты ла бергә алып ҡайтайыҡ, тип уйлашҡандар, ти. Был уйҙарын көтөүсе ҡартҡа әйткәс, ул барырға ҡурҡһа ла, егеттәр димләп, ҡартты күндергәндәр, ти.

Көтөүсе ҡартты алып, күмәкләшеп, Аҡколомбәт бейгә барғандар, былар үҙ белгәнен, ҡарт үҙ белгәнен бейгә баштан-аяҡ, әнәһенән-ебенә саҡлы һөйләп биргәндәр, ти. Бай был эшкә аптыраған. Сер һыйған аҡһаҡалдарын йыйып кәңәшкән дә, күл төбөн барып ҡарарға булғандар, ти.

Аҡколомбәт батырҙарҙы йыйып, балыҡсыларҙы эйәртеп, ауға сыҡҡан кеше һымаҡ әҙерләнеп, көтөүсе ҡарт һөйләгән күл буйына киткән, ти. Ау аулаған, балыҡ һөҙгән булып маташһалар, ни күҙҙәре менән күрһендәр, бер бисә үлеге килеп сыҡҡан. Аҡколомбәт быны күргәс тә таныған, тағы һөҙгәндәр, һөҙә торғас, бишеһен дә тапҡандар, ти.

Аҡколомбәт ҡустыһы Ҡарағөлөмбәттең эше икәнлеген белгән, тик уның ни өсөн был эште эшләүенә төшөнә алмай аптырап, өйгә ҡайтҡан, ти. Бисәләренән, улы Бабсаҡтан һорашҡан, күмәкләп уйлашҡандар, һис йәбешкеһен таба алмағандар. Аҙаҡ сиктә Аҡйегеттең кәләшен саҡырып һорашҡан. Килене:

— Ай, ҡайным, Ҡарағөлөмбәт ҡайнаға килгәс тә мин бейә һауырға барғайным, артымдан эйәреп барҙы ла: «Аҡйегеткә килеп

түш киреп йөрөйһөңмө? Етмәһә, мине әткә оҡшатып көлә. Туҡтағыҙ әле, көлһәгеҙ, бер саҡ иларһығыҙ. Минән һине һалдырып алып бер көлдө, эт һымаҡ тип, атаһы алдында ике көлдө», — тигәс, мин бер һүҙ ҙә әйтмәнем, бының эсендә һаман дошманлығы бар икән тип уйланым. Аҡйегеткә ҡайтҡас та әйттем. Бахырым, аҡ күңел ине бит: «Һине минән айырып ала алмаҫ инде», — тип көлдө лә ҡуйҙы. Етмәһә, Ҡарағөлөмбәт ҡайнаға саҡырғас: «Бына ағайым үпкәләй ти инең, беҙҙе ҡунаҡҡа саҡырҙы әле», — тип, һаман атына менеп киткәндә лә көлөп китте. Мин, эс тартып, шул саҡлы ебәрмәҫкә уйланым, тыңламаны. Бахырым үлергә генә киткән икән, — тип үкһеп илаған, ти.

Аҡколомбәт бөтә эштең Ҡарағөлөмбәттең эше икәнен аңлаған, барса батырҙарына атҡа менергә ҡушып, бер төн Ҡарағөлөмбәттең йәйләүен баҫып, үҙен бәйләп алырға һүҙ ҡуйып сығып киткәндәр, ти.

Ҡарағөлөмбәт, ағаһының күлдән үлектәрҙе тапҡанын ишеткәс тә, ағаһы ҡон юлларға барыбер килер тип, ағаһы килеүенә батырҙарын йыйып:

— Аҡколомбәт ағайым мине ҡунаҡҡа саҡырып хурлап әрләүе етмәй, артымдан ҡыуа сығып үҙемде саҡ үлтермәнеләр, бисәләремде, еккән атымды тартып алып ҡалдылар. Бисәләремде мыҫҡыл итеп, аҙаҡтан үлтереп, күлгә һалғандар. Әле шуларҙы күлдән алып күмгәндәр тип ишеттем. Ағай булһа ла, мин был хурлыҡҡа түҙә алмайым, — тип һөйләп, бөтә ырыуын аяҡҡа баҫтырған, ти. Бөтә батырҙары атҡа менеп, Аҡколомбәт йәйләүен баҫабыҙ, хаин бейлекте бөтөрәбеҙ, тип теш ҡайрап яуға сыҡҡандар, ти.

Икеһе ҡара-ҡаршы осрашып һуғышҡандар. Аҙаҡ сиктә Аҡколомбәт еңелеп, ҡулға алынған. Уның башын киҫкәс, бисәләрен күлгә ташлап, бөтә тоҡомон бөтөрәм, ике бейлеккә лә үҙем баш булам, тип Ҡарағөлөмбәт Аҡколомбәттең төйәгенә киткән, ти.

Был хәлде ишеткәс, Аҡколомбәттең бисәләре, килене күп кешеләрҙе, Бабсаҡты эйәртеп, ер-һыуын, мал-тыуарын ташлап ҡасҡандар, ти. Ҡарағөлөмбәт эҙләткән, таба алмаған. Бөтә эште һорашып, үҙе тураһында сыҡҡан хәбәрҙе төпсөп, көтөүсенән сыҡҡанын белгәс, көтөүсене лә тотоп алған, ти. Ҡарағөлөмбәт, ике бейлеккә лә баш булып, Иҙел тамағынан Иҙел башына саҡлы бей булып, алдынан ҡош, юлынан кеше уҙҙырмай, берәүҙе лә тиң күрмәй маҭҡурып* йәшәгән, ти.

Бабсаҡ әсәләре, үҙенә эйәргән кешеләре менән тыуып үҫкән илен ташлап, сит хандың ҡулы аҫтына барып һырышҡан, ти. Унда барып, егет булып, батырлыкта дан алып йәшәһәләр ҙә, тыуған илен, ер-һыуын, йәй күсеп йөрөгән йәйләүҙәрен һағынып йырлағандар. Бабсаҡ йәштән үк йырсы, ҡурайсы булған. Ул илен, ер-һыуын һағынып, былай тип йырлаған:

Ап-аҡ булып тирмә, ай, теҙелгән,
Иҙел ине уның да һыулауы,
Йән биреүкәйҙәрҙән ауыр була
Тыуып үҫкән илде уйлауы.

Ҡилтерһәнә, әсәй, ҡурайымды,
Йәйләүҙәге көйҙө тартайым.
Яландары саңлы, сағылы ҡырлас,
Үҙ еремә нисек ҡайтайым, —

тип йырлағас, әсәһе улын йыуатып, былай тип йырлаған:

Ялан ғына ерҙә, ай, аҡ татыр,
Аҡ татырҡайҙарҙа мал ятыр.
Илаһаң да, балам, һыҡтаһаң да,
Тупраҡ яҙған ерҙә баш ятыр.

Бабсаҡ әсәһенә:

Атҡа ғына менһәң, ай, ат яҡшы,
Ергә генә төшһәң — ер яҡшы.
Алтын сыҡҡан ерҙә йөрөүемдән
Ҡайғы баҫҡан тыуған ил яҡшы.

Яйыҡ буйҡайының, ай, йәйләүе,
Ҡоштары юҡ, бигерәк һил кеүек,
Һыуҙары ла тәмһеҙ, иле йәмһеҙ,
Бер көн тороуҙары йыл кеүек.

Һырғаҡ ҡына буран, ай, әсе ел,
Ышыҡ тапмай меҫкен йылҡылар,
Тыуған йәйләүҙәрем иҫемә төшһә,
Ҡистәремдә алмай йоҡолар.

Әсәһе:

Ап-аҡ ҡына еләк, ай, сәскәһе
Ята ла ғына ерҙә бәйләнеп.
Батыр ғына булһаң, балаҡайым,
Бер ҡайтырһың илгә әйләнеп.

Бабсаҡ:

Алма сыбар ғына атым булһа,
Менмәҫ инем һис тә туратҡа,
Башҡайҙарым әсәй, йәш булмаһа,
Илдән боҫмаҫ инем йыраҡҡа.

Әсәһе:

Сал бөркөт тә ятмай саң-саң итә,
Күрһәтә ул үҙенең ғәйрәтен.
Ирмен генә тигән ир-егеттәр
Күрһәтә ул үҙенең һиммәтен.

Көмөш кенә эйәр, ай, килешә,
Менгән генә атың кир булһа,
Ир-егеткәй етмәҫ һис нәмә юҡ,
Йөрәкле лә батыр ир булһа.

Ай, тау ҙа ғына яҡшы, ай, тау яҡшы,
Тау яғалай уҙған юл яҡшы.
Сит еркәйҙәрҙең алтынынан
Тыуып үҫкән ерҙә лә таш яҡшы.

Алтын да ғына эйәр атҡа тейәр,
Эйәләре белмәҫ тә, ат белер.
Батыр егеткәйҙең, ай, ҡәҙерен
Үҙ туғаны белмәҫ, ят белер.

Бабсаҡ:

Урал тауҡайҙарын, ай, буйлаһам,
Ултырып уйҡайымды уйлайым.
Йәйләүҙәрем иҫкә төшкән саҡта,
Йырлау түгел, ултырып илайым.

Әсәһе:

Урал кейегенең араһынан
Әҙәм ашар кейек тапманым.
Ҡарағөлөмбәттәй яуыз йыртҡыс
Уралымда эҙләп тапманым.

Ҡарағөлөмбәт беҙҙе үгәй күрҙе,
Ҡайын ырыуым — барын арбаны.
Ҡарағөлөмбәт беҙгә бүре йән булды,
Йәйләүлеккә тынғы бирмәне.

Балаҡайым, инде буйың үҫте,
Аҡылыңды үҫтер ир булып.
Ҡыпсаҡ илдәренә ырыуың туҙҙы,
Йыйнар сағың етте бей булып.

Атаң тоҡомон, балам, әрләй тимә,
Бүре йән булды беҙгә барыһы.
Ҡарағөлөмбәттең, ай, тауында
Үгәйһетте беҙҙе күбеһе.

Ҡарағөлөмбәткә атаң, балам,
Имсәктәш булып тыуғансы,
Өләсәйеңә, балам, ваба тейеп,
Буйлы* көйгә ятып үлһәсе.

Бабсаҡ:

Әсәкәйем, мамыҡ түшәк йәймә,
Ҡая булһын минең түшәгем.
Ҡан-яу асам, әсәй, бүре йәндәргә,
Уралымда ҡалһын ашығым.

Бабсаҡ әсәһе менән кәңәш-төңәшкән дә, Ҡыпсаҡ яҡтарына таралған ырыу туҙғындарын йыйып, үҙе яу башы булып, Уралға — атаһы йәйләүенә ҡайтырға сыҡҡан, ти.

Ҡарағөлөмбәт, Бабсаҡтың ҡайтып килгәнен ишеткәс, ат-хат еткән ерҙән батырҙарын саҡыртҡан, ти. Бай саҡыртҡас, батырҙары, бер-бер хәл булғандыр, тип, ат фарманына саптырып килә һалғандар, ти. Былар кәңәш итешеп ултырғанда, яуын яғалай ҡуйып, Бабсаҡ һәм әсәһе бер нисә кеше менән Ҡарағөлөмбәт янына килеп ингәндәр, ти.

Бабсаҡтың әсәһе Ҡарағөлөмбәткә:

Йөҙөңдө лә һытма, Ҡоломбәт,
Асҡа киҫелеп тә ҡайтҡан тип;
Һуғымын да һуйма, Ҡоломбәт,
Ҡунаҡтар уҡ булып ҡайтҡан тип.

Сит илдәргә йөрөп тә ҡаңғырып,
Тилмереп тә ҡайтҡан тимәгеҙ,
Ҡатын да башын ҡаҡайтып,
Үркә лә һөйләй тимәгеҙ.

Киҫелгән дә ағас төбөнән.
Ҡыуғын да* үҫмәҫ тимәгеҙ;
Бишектә лә ятҡан ир бала
Атҡа ла менмәҫ тимәгеҙ.

Тубарылып та тыуған шәр бала,
Әүелдәп тә күлдәк кейә икән;
Атаһынан да күреп, ир бала
Уғын да юнып үҫә икән.

Атанан тыуған да күп ирҙәр
Һайыҫҡандай төҫтәш тыумай икән,
Йыртҡыс та тигән күк бүре
Тоҡомо ҡанын да эсмәй икән.

Аҡыллы ла булған ир батыр
Бүре иләүе янында мал бағыр.
Аҡыллы ла булған ир батыр
Һыҡтаусынан үҙенә ил йыйыр.

Балаҡайым килде лә ил йыйып,
Тыуған да үҫкән ил тиеп;
Атаһы ла ҡонон юлламай
Имсәктәш тә бауыры юйған тип.

Урал да бите ҡырлас тау,
Ҡанға ла һыуһар ер түгел,
Минең дә улым Бабсаҡ бей
Яуға ла сапмаҫ ир түгел.

Ҡарағөлөмбәттең батырҙары үҙ-ара һөйләшкән-һөйләшкәндәр ҙә Ҡарағөлөмбәткә:

— Сит ерҙә мал ерһенмәй, илен ташлап Бабсаҡ әлдә күп йөрөнө. Ҡайтһын, үҙ ырыу-йәйләүенә хужа булып, бей булһын, һуғышмайыҡ. Беҙҙән барымта ла, ҡарымта ла юлламай бит, — тигәндәр, ти. Ҡарағөлөмбәт батырҙарынан был һүҙҙе ишеткәс, бик асыуланған, батырһыҙ яу ҡайтарып булмаҫ, тип уйлаған да, яу асмаған, ти. Бабсаҡ үҙ ырыу йәйләүенә ҡайтҡан. Ҡарағөлөмбәт ырыуын «бүре йән» ырыуы тип, кәмһетеп һөйләп килгәс, атаһының ырыуы булһа ла, уларға ҡушылмаған. Үҙе менән бергә Ҡыпсаҡ* яғынан ҡайтҡан халыҡтар исеме менән ырыуын «Ҡыпсаҡ» тип атаған. Бөтә ырыу йыйыны йыйылып, туй яһағандар. Бабсаҡты Ҡыпсаҡ ырыуына бей итеп ҡуйғандар, ти.

Бабсаҡтың әсәһе менән ҡасып йөрөгән сағында йырлаған йырын, көйөн «Йәйләү» көйө тип, күп йылдарға саҡлы атап йөрөткәндәр.



# КҮСӘК БЕЙ

*(Ҡыпсаҡ версияһы)*

**Дүрт ырыу булғаны; һәр ҡайһыһы, үҙ эсенән батыр һайлап, ғүмер һөргәне**

Борон бер Мәсем[91] атлы хан булыпты*,
Үҙе аҡыллы, данышман* йән булыпты,
Ғәҙеллеге, байлығы берҙәй булып,
Һәр ерҙә мөһабәтле дан булыпты.

Ун ике бей булған бер үҙендә[92],
Уйын-көлкө — кис һәм көндөҙөн дә;
Бәһлеүән ғәскәре бихисап* күп,
Бынан үткән хан булмаған ер йөҙөндә.

Мәсем хан — мосолман хан, төрки
заты*,
Талай* хандан артыҡ булған
солтанаты;
Ҡарағайлы ҡара урман, төрлө сәхрә,
Ағиҙелдең буйы булған мәканәте*.

Ғәскәр менән сәхрәлә сауыҡ ҡылған,
Үҙе уйын уйнауға зауыҡ* булған;
Ул заманда тыныслыҡ һис булмаған,
Һәр ерҙә ҡурҡынысты яу күп булған.

Беренең малын бере алған зурлыҡ*
менән.
Кисергән ғүмерҙәрен урлыҡ[93] менән;
Мыҡтылары* насарҙарын* ороп-һуғып,
Үлтергән берен-бере хурлыҡ менән.

Шул заманда дүрт төрлө ырыу булған
икән,
Донъяға бәлә-фетнә тулған икән;
Һәр ҡайһыһы, үҙ эсенән батыр һайлап,
Мәсем хандан бүләк ерҙә торған икән.

Дүрт ырыуҙың дүрт башҡа булған аты,
Бәһлеүән һәр ҡайһының ата заты,
Ырыу башҡа булған менән дине берҙәй,
Милләте барының да — төрки заты.

Түңгәүер* — бер ырыуҙың исеме булған,
Иген икмәк — уларҙың кәсебе булған;
Тимерҡотло исемле эстәрендә
Ғәйәт мыҡты бәһлеүән кешеһе булған.

Тамъян* — икенсе ырыу атын әйтһәм,
Төшөнөрһөң, барыһын атап әйтһәм;
Батырының исеме Тамъян булған,
Белерһегеҙ, тигеҙ ҡылып таҡлап* әйтһәм.

Өсөнсө ырыу исеме булыр ҡыпсаҡ*,
Белерһегеҙ, баян итеп* яҙып ҡуйһаҡ;
Эстәрендә бер батыр булған икән —
Фил мөсәлле*, арыҫлан йөрәк, исеме Бабсаҡ.

Дүртенсе ырыу аты хаин* булған,
Мәсем ханға ерҙәре яҡын булған;
Бары берҙәй намыҫлы, осҡалаҡ* халыҡ,
Нисә әйтһәң дә, аҙыраҡ таҡым* булған.

Башлыҡтары Ҡарағөлөмбәт батыр булған,
Хаин ырыуын ҡарауыллап ятыр булған;
Көнө-төнө үҙҙәре урлыҡ ҡылып,
Берәүҙекен икенсегә һатыр булған.

Ул ваҡыт хаин ырыуы туп булыпты,
(«Туп» тигәндең мәғәнәһе «күп» булыпты);
Ул заманда мылтыҡ ҡорал һис булмаған,
Ҡоралдары ҡылыс менән уҡ булыпты.

Һәр халыҡтың үҙ эсенән батыр булған,
Илен-йортон ҡарауыллап ятыр булған;
Ул батырға хисапһыҙ күп фирҡә* биреп,
Өйҙә-төҙҙә ҡороулы сатыр булған.

Дүрт ырыу батыр булып сыҡҡан данға,
Билгеле ер йөҙөндә һәр бер йәнгә;
Был дүрт ырыу шул көйөнсә ята торһон,
Хикәйәтте килтерәйек Мәсем ханға.

## Мәсем хан йортона афәт* килгәне, дүрт ырыуҙың дүрт батырынан ярҙам һорап, хандың хәбәр иткәне, әмер хаты ебәргәне

Мәсем хан ғәскәр менән ауға сыҡҡан,
Ау аулап, төрлө-төрлө тауға сыҡҡан.
Ау аулап, өс көндән һуң ҡайтып килһә,
Шәһәрендә ҡурҡыныслы ғауға сыҡҡан.

Бер ваҡыт халыҡ йыйылды Мәсем ханға,
Пәйҙә* булды бер бәлә, тип беҙҙең янға,
Берәү әйтте: «Тәксир*, һеҙ ауҙа саҡта,
Талай мәхлүк* буялды, — тип, — ҡыҙыл ҡанға».

Быны ишеткәс, Мәсем хан шыуышып китте,
Башынан түбәтәйе осоп китте;
Ҡурҡыныслы, яман хәбәр ишетелгәс,
Тәхетенән, сыҙай алмай, төшөп китте.

Шул ваҡыт берәү килгән илай-илай,
Аяғына баҫа алмай, ҡолай-ҡолай,
Һөйләшергә Мәсем хандан иҙен* һорап,
Башлаған һүҙ һөйләргә инде былай:

«Дөйәләрем Муйынсаҡлы* тауҙа булған,
Балаларым бары ла сайҙа* булған;
Ҡырҡ биш бала шул сайҙа ҡарап торһа, —
Ҡурҡыныслы бер йыртҡыс пәйҙә булған.

Килгән дә мең дөйәмдең эсен ярған,
Барын да түбә ҡылып өйөп һалған;
Шул ваҡыт ҡырҡ биш бала һуҡкы алып,
Баяғы йыртҡыс менән һуғыш һалған.

Ҡырҡ биштең ҡырҡын берҙән үлтерепте,
Баштарына ҡиәмәт* килтерепте;
Ҡалған бише яраланып, ҡасып ҡайтып,
Был хәбәрҙе беҙгә көскә еткерепте».

Халайыҡ бары ла әйтте Мәсем ханға,
Илап-һыҡтап бары ла ҡалып таңға:
Был йыртҡыска бер-бер әмәл тапмаһағыҙ,
Барыбыҙҙы ҡырып ташлар иртән таңда.

Был аңдан бар халыҡтың ҡото ҡасҡан,
Өйҙә-төҙҙә хайуанат ҡурҡып ҡасҡан;
Дүрт ырыуҙың батырынан ярҙам һорап,
Шул ваҡыт Мәсем хан бер хәбәр асҡан.

Хат яҙған: «Батырҙарым, килегеҙ, — тип, —
Туҡтамаҫтан атҡа менеп елегеҙ, — тип, —
Сыраҡтарым*, һеҙҙән ярҙам булмағанда,
Бөтөнләй харап була илебеҙ», — тип.

Түңгәүерҙең атаһы Тимерҡотло,
Үҙе бер батыр икән ғәйәт мыҡты;
Хан хәбәрен ишеткәс, сыҙай алмай,
Аманлашып, ил-йорт менән юлға сыҡты.

Был батырҙың йәше килепте егермегә,
Бәһлеүән булып йөрөптө һәр бер ергә;
Аяндап* атһыҙ, йәйәү йөрөгәндә,
Тубығынан керепте ҡара ергә.

Тимерҡотло бер ваҡыт китмәк булған,
Мәсем ханға бер ваҡыт етмәк булған;
Күк павозка көймәгә тройкалап,
Ҡанатлы ҡара юрға екмәк булған.

Тағы бер һүҙ әйтә, ти, Тимер батыр,
Күкрәгән күктәй булып дөбөр-шатыр;
Көймә менән барыу беҙгә оҡшамай, тип,
Инде йәйәү йөрөүгә уйлай, ти, ахыр.

Таңдап-таңдап* йөҙ һикһән балуан алған,
Ҡарыуяраҡ*, сайман* һайлап алған;
Ил-йорт менән хушлашып, аманлашып,
Тимерҡотло Мәсем ханға китеп ҡалған.

Хан хәбәре килепте Тамъянға,
Быны ишеткәс, Тамъян батыр ҡалған таңға;
Йөҙ илле үнгәр* батыр йыйып алып,
Тиҙ генә китмәк булған Мәсем ханға.

Һайлап-һайлап йөҙ илле балуан алған,
Ҡарыуяраҡ, сайманын һайлап алған;
Хушлашып, аманлашып, ил-йорт менән
Тамъян батыр Мәсем ханға китеп ҡалған.

Мәсем хандан хаинға килепте хат,
Хатты алып уҡыпты бер әҙәм зат;
Йыйылып халыҡтың бары, уҡып белгән,
Ҡулдан ҡулға йөрөтөп ҡабат-ҡабат.

Шул ваҡыт Ҡарағөлөмбәт килеп кергән,
Туптың эсен уртанан телеп кергән;
Һис берәүе әйтмәһә лә хан хәбәрен
Ғәрәсәт зиһене* менән белеп кергән.

Ҡарағөләмбәт хисапһыҙ батыр булған,
Бер уғын биш пар үгеҙ тартыр булған;
Билгеле, Ҡарағөләмбәт йоҡлағанда,
Биш көн, биш төн нәмә белмәй ятыр булған.

Шул ваҡыт Ҡарағөләмбәт аҡыра, ти:
«Ил-йортом йыйылһын!» — тип саҡыра, ти:
Илендәге аҡһаҡалдың барын йыйып,
Мәсем ханға бармаҡ булып аҡылдай*, ти.

Эйәрләтте бәйге бүртә атын шунда,
(Уҡыу менән Мәсем хандың хатын шунда);
Һайлап-һайлап аҙаматын айыра, ти,
Үҙенә табиғ* булған халҡын шунда.

Таңдап-таңдап өс йөҙ алтмыш балуан алған;
Ҡарыуяраҡ, сайманын һайлап алған;
Аманлашып, хушлашып, ил-йорт менән,
Ҡарағөләмбәт Мәсем ханға китеп ҡалған.

Мәсем хан менән Ураз хан[94] ҡатар булған,
Нәҫеле икәүенең дә башҡорт булған;
Йыл һайын бәйге яһап, балуан һайлап,
Икәүе уйын уйнап ятыр булған.

Ураз хан ҡыпсаҡ ырыуын яратыпты,
Барына инғам-ихсан* таратыпты;
Ҡыпсаҡтарҙың батыры Бабсаҡҡа
Тапшырып, илен-йортон ҡаратыпты.

Ҡараған батыр Бабсаҡ хандың илен,
Эйәрләп менеп алған Ҡарагирен;
Бер айҙай ялан-төҙҙә гиҙеп йөрөп,
Тигеҙләп ҡарап сыҡҡан хандың ерен.

Ураз хан Бабсаҡты күргән икән,
Батырлығын, матурлығын белгән икән;
Хоҙай ҡушһа, ҡыҙымды бирәм, тиеп
Күңеленән ниәт ҡылып йөрөгән икән.

Был хандың яңғыҙ ҡыҙы булған икән,
Йөҙҙәре айҙай булып тулған икән;
Бабсаҡ батыр хан илендә йөрөгән саҡта,
Берен-бере күреп, ғашиҡ булған икән.

Ҡосаҡлашып, күрешеп үбешкәндәр,
Икәүенең хәлен-яйын белешкәндәр;
Бере алмаҡ, бере бармаҡ һүҙ ҡуйышып,
Илай-илай айырылышып китешкәндәр.

Ураз хандың Йәмилә атлы ҡыҙы булған,
Ҡуй эсендә алтын тояҡ ҡуҙы булған,
Ҡыпсаҡтарҙың батыры Бабсаҡҡа
Ҡыҙымды бирәм, тигән һүҙе булған.

Ураз хан Бабсаҡты саҡырышты,
Никах уҡып, ҡыҙын ҡушып яҡтырыпты;
Бер ай буйы туй яһап, көрәш яһап,
Бәйге яһап, йүгерек һайлап саптырыпты.

Ир Бабсаҡ Йәмиләне алып ҡайтҡан,
Уйын-көлкө тамашаға ҡанып ҡайтҡан;
Ебәк, келәм, мамыҡ күрпә, алтын, көмөш —
Барын да алып, батыр байып ҡайтҡан.

Бабсаҡ батыр ун һигеҙҙә, ғәйәт мыҡты,
Һуғышып, күп дошманды ергә тыҡты;
Бер көн ҡатыны менән ултырғанда,
Бер ят әҙәм алыҫ ерҙән килеп сыҡты.

Аҫтына ҡара юрға атын менгән,
Алыҫ ергә туҡталмаҫтан ҡаты елгән;
Бабсаҡ батыр ҡаршыһына тура килеп,
Ҡулына мөһөрләнгән* хатты биргән.

(Был әҙәм Мәсем хандан килгән икән,
Көнө-төнө аяндамай елгән икән;
Мәсем хандың ебәрмеш хат-хәбәрен
Ҡулы менән Бабсаҡҡа биргән икән.)

Шул ваҡыт батыр хатты уҡып күргән,
Ни яҙғанын күңеленә туҡып белгән;
Йөрәгенә ҡурҡынысл ы ғауға төшөп,
Өйөнә ҡатыны менән ҡайтып кергән.

Мәсем хандан килепте бер хат Ҡыпсаҡҡа,
Ҡыпсаҡтарҙың батыры Бабсаҡҡа;
Хан ярлығын ишеткән һуң ултырһынмы? —
Уйлаған бармаҡ булып Мәсем яҡҡа.

Хәбәр килгәс, китмәк булған батыр Бабсаҡ,
(Лайыҡмы белгән һүҙҙе яҙмай ҡалһаҡ?)
Уйлаған: «Хан саҡырғас, барайым, — тип, —
Күңеленә яман булыр, бармай ҡалһаҡ».

Уйлаған: «Хоҙай ҡушһа, мин барайым,
Ул аңға заман ахыры мин һалайым;
Ундай йыртҡыс януарҙарҙың мыҡтыларын
Ғүмеремдә ҡырғайным мин талайын».

Быны ишеткәс, барлыҡ халыҡ йыйылыпты,
Ашап-эскән аштарынан тыйылыпты;
Күҙәтсе балуаныбыҙ китә икән, тип,
Күҙҙәренән ҡанлы йәш ҡойолопты.

Ҡатыны Йәмилә лә илай икән,
Бармағаның яҡшы, тип теләй икән;
Был юлға киткәндән һуң, батыр Бабсаҡ
Ҡайтанан килә алмаҫын белә икән.

Шунан батыр ҡатынына әйтте һүҙен:
«Һылыуым, Йәмиләм, — тип һөйөп үҙен, —
Ҡара ҡашым, ҡолағың менән тыңлап ултыр,
Бына былар һиңә әйтә торған һүҙем:

Хоҙай ҡушһа, мин сәфәр йөрөрмөн, тип,
Тәҡдирҙә* ҡушҡанын күрермен, ти;
Эсер һыу, ейә торған ризыҡ бөтһә,
Өйҙә ятҡан менән дә үлермен, ти[95].

Ике айҙан һуң беҙҙең бер бала тыуыр,
Ул бала атаһының юлын ҡыуыр;
Ҡылыс, һөңгө ҡулына бирҙәй алып,
Ваҡытында дошмандарҙың юлын быуыр.

Мин үлһәм, һиңә шәрик* шул булады,
Хоҙай ҡушһа, дәүләтең мул булады;
Иртәле-кис тамаша, уйын-көлкө,
Ҡашыңдан тарҡалмаҫ, туй булады».

Шул һүҙҙе әйтеп, кейемен кеймәк булды,
Мәсем хандың яғына йөрөмәк булды;
Ҡашына һигеҙ кеше юлдаш алып,
Хоҙаның ни яҙғанын күрмәк булды.

Таңдап-таңдап һигеҙ мыҡты балуан алған,
Ҡарыуяраҡ, сайманын һайлап алған;
Аманлашып, хушлашып, ил-йорт менән,
Батыр Бабсаҡ Мәсем ханға китеп ҡалған.

## Дүрт ырыуҙың дүрт батыры Мәсем ханға килгәне

Мәсем хан батырҙарға хәбәр һалған,
Был донъяның вафаһы* юҡ, үҙе ялған;
Туй яһап, батырҙарҙы ҡаршы алам, тип,
Һый өсөн йөҙ дөйә ҡорбан салған.

Мәсем хан туй яһап ятҡан ваҡыт,
Төшкә табан ҡояш ҡыҙып ҡалҡҡан ваҡыт;

Күҙҙәренә бер өлкән саң күренде,
Төрлө ҡыҙыҡ тамашаға батҡан ваҡыт.

Ханға хәбәр бирҙеләр: «Саң күрҙек, тип,
Саң эсендә бер талай йән күрҙек, тип,
Эстәрендә манаралай бер әҙәм бар,
Бик ғәжәйеп ҙур икән, — таң күрҙек», — тип...

Быны ишеткәс, хан тороп күҙен һалды,
Дүрт батырҙың бере икәнен белеп алды;
Түңгәүерҙең атаһы Тимерҡотло
Йөҙ һикһән балуан менән килеп ҡалды.

Атаһы түңгәүерҙең борон килде,
Шуның өсөн юғарынан урын бирҙе;
Хан менән батыр һөйләшеп ултырғанда,
Ҡарайып килгән саңды күҙе күрҙе.

«Саң үҙе ҡарамаҡҡа алыҫ тине,
Алыҫ булған менән дә таныш, тине;
Мәйле* яу, мәйле бүтән булһа, булһын,
Хоҙайҙан була торған бар эш», — тине.

Был һүҙҙе әйтеп икәүһе тора ҡалды,
Саңға табан күҙҙәрен бора һалды;
Йөҙ илле балуан егет юлдаш ҡылып,
Шул ваҡыт Тамъян батыр килә ҡалды.

Ике батыр ике ырыуҙан килде инде,
Күңеленә хандың шатлыҡ тулды инде;
Өсәү-ара һөйләшеп ултырғанда,
Йыраҡтан бер саң пәйҙа булды инде.

Ул саң яҡынланы тупҡа табан,
Уйнап-көлөп ултырған күпкә табан;
Аяндамай, ҡаты елеп килә ятыр,
Сығарып туҙандарын күккә табан.

Ике батыр хан менән ҡарап торҙо,
Ашығып, бәйге атындай ярап торҙо*;
Алыҫты яҡын ҡылыр күҙгә менән
Ҡанса әҙәм бар икәнен һанап торҙо.

Ҡарағөлөмбәт икәнен хан танып белде,
Һөйләй торған ҡыҙыҡ ере яңы килде;
Аҫтында менгән аты бәйге бүртә,
Тупҡа кергәс, сыҙамай янып килде.

Өс йөҙ алтмыш балуан шәриҡ алған,
Бәйге бүртә януарына менеп алған;
Ике батыр хан менән торған саҡта,
Хаин ырыуы Ҡарағөлөмбәт килеп ҡалған.

Батырҙар өсәү булды килә-килә,
(Табылыр һүҙҙең яйы уйлап килә);
Бабсаҡтан бер хәбәр ҙә белә алмайҙар,
Уның килер-килмәҫен хоҙай белә.

Батырҙар килә-килә өс булыпты,
Был арала бер талай эш булыпты;
Уйын-көлкө, тамаша менән көн үткәреп,
Ҡояш шул батып, ваҡыт кис булыпты.

Йоҡларға ятты халыҡтың барыһы ла,
Ҡалмаҫтан йәштәре һәм ҡарыһы ла*;
Йоҡоға халыҡтың күҙе киткән саҡта,
Дөбөр тауыш килә, ти, алыҫ ерҙә.

Был тауыш уята, ти, халыҡтың барын,
Батырҙар кейенә, ти, ҡарыуҙарын;
Таңдан-таңдан балуандарын алып ҡалып
Ҡайтара, ти, кәреүҙәрен*, ямандарын.

«Яландағы анау көнгө аң микән был?
Булмаһа, ҡанығып килгән яу микән был? —
Халайыҡ бер-беренә ҡысҡыра, ти, —
Булмаһа, тәгәрләгән тау микән был?»

Шунда бер ҡарт әйтә, ти: «Туҡтағыҙ, тип,
Бер ҙә юҡ нәмә өсөн ҡурҡмағыҙ, тип;
Иртән таңда үҙе лә килер ул, тип,
Тыныс ятып йоҡоғоҙҙо йоҡлағыҙ, тип.

Ул килгән — аң да түгел, яу ҙа түгел,
Тағы ла тәгәрләгән тау ҙа түгел;
Үҙегеҙҙәй бер әҙәмдең балаһылыр,
Ул әҙәм яу булырҙай бәндә түгел.

Бабсаҡ батыр көнлөк юлын килә икән,
Менгән аты ер тетрәтеп елә икән;
Ҡарагир атының аяҡ тауышы
Көнлөк юлдан ана шулай килә икән».

Был хәбәрҙе ишеткәс, халыҡ ята, ти,
Ҡараңғы бөтөп, инде таң ата, ти;

Баяғы дөбөр тауыш ҡабатланып,
Халайыҡтың барын да уята, ти.

Бер ваҡыт бар халайыҡ ҡарап торҙо,
Бары ла бәйге атындай ярап торҙо;
Килгәнен Бабсаҡтың һигеҙ ир менән
Мәсем хан үҙ күҙе менән ҡарап торҙо.

Аҫтына менеп алған Ҡарагире
Килә, ти, дерелдәтеп ҡара ерҙе;
Мәс булған филдәй булып ир Бабсаҡ
Килде лә Мәсем ханға сәләм бирҙе:

«Әссәләмәғәләйкүм, ханым, — тине, —
Йәйелгән ер йөҙөнә даның, — тине; —
Риза бул һуңға ҡалып килгәнемә,
Юлыңда фиҙа булһын йәнем», — тине.

Быны әйтеп бары менән күрешә, ти,
Бер-беренең хәлен-яйын белешә, ти;
Дүрт батыр, Мәсем хан, булған ғәскәр, —
Бары барып, шәһәргә керешә, ти.

Шәһәрҙә Мәсем хан туй ҡыла, ти,
Батырҙарға бик өлкән һый ҡыла, ти;
Бер аҙ уйнап-көлөп алғандан һуң,
Шул ваҡыт Мәсем хан бер уй уйлай, ти.

Шул ваҡыт саҡыра, ти, батырҙарын,
Тектереп алтын-көмөш сатырҙарын;
Шунан хан һүҙ һөйләргә керешә, ти:
«Тыңлағыҙ ҡолаҡ һалып, яҡындарым!»

Батырҙар көн батҡан һуң килде бары, —
Ни әйтерен Мәсем хандың белде бары;
Батырҙарға хан ҡандай һүҙ әйтер, тип,
Һырт яҡтан тыңлап торҙо халыҡтың бары.

## Йырткыс арыҫланды үлтергән батырға өлкән туй ҡыламын, дәүләтемдең яртыһын һый ҡыламын, тип, Мәсем хандың батырҙарға мөрәжәғәт иткәне

«Батырҙарым, минең яҡҡа ҡараң, — тине, —
Минең бер хөрмәтемә яраң! — тине; —
Һеҙҙәргә минең бер ҙур йомошом бар,
Яр* булһын һәр ҡайһыңа Аллаң, — тине. —

Сығындар дүртегеҙ ҙә ялан-төҙгә,
Ҡылындар бер ҙур хеҙмәт инде беҙгә;
Ил-йортомдо бер йырткыс йөҙәтә, тип,
Әллә ҡасан әйткән инем уны һеҙгә.

Шул йыртҡысҡа инде һеҙҙәр барың, тимен,
Ҡылыс менән ҡарынын ярың, тимен;
Хоҙай ҡушһа, залимде дал-дал ҡылып,
Башына заман ахыр һалың, тимен.

Ҙур мөкафәт* ҡыламын, үлтерһәгеҙ,
Тиреһен һуйып миңә килтерһәгеҙ;
Ҡото осоп ҡурҡып ҡалған ил халҡымды
Ҡыуандырып, йөрәктәрен терелтһәгеҙ.

Ул батырға бик өлкән туй ҡыламын,
Дәүләтемдең яртыһын һый ҡыламын;
Наҙлы ҡыҙым Гәүһәрҙе ҡушып биреп,
Ун ике бей өҫтөнән бей ҡыламын».

Быны әйтеп батырҙарҙы тарата, ти,
Һарғайып ул ваҡытта таң ата, ти;
Ауыҙынан хандың былдай һүҙ ишеткәс,
Батырҙар барыһы ла ярата, ти.

Был дүрт батыр бер-беренә яҡынлашты,
Йыртҡысҡа китмәк булып аҡыллашты;
Һәр ҡайһыһы аҙаматын йыйып алып,
Хуш, аман булығыҙ, тип баҡыллашты.

Дүрт батыр дүртәүһе лә китте инде,
Арала талай көндәр үтте инде;
Дүртәүһе лә бер талай бергә йөрөп,
Дүрт айырлы юл башына етте инде.

Ҡарағөлөмбәт менән Тамъян батыр,
Тимерҡотло менән Бабсаҡ батыр;
Был дүртәүһе бер айҙай бергә йөрөп,
Шунан һуң берәм-берәм киткән ахыр.

Дүрт бәһлеүән дүрт юлға киткән шунда,
Батыр Бабсаҡ ҙур бер тауға еткән шунда;
Ғуд-ғәмбәр*, мисек-йофар*, гәүһәр-яҡут,
Алтын-көмөш, аҫыл таштың бары шунда.

### Бабсаҡ батырҙың арыҫланды үлтергәне

Ул тауҙа ир Бабсаҡ бик күп йөрөгән,
Һәр төрлө емештәрҙе ейеп йөрөгән;

Емеш ейеп, шишмә буйлап килә ятһа,
Йоҡлап ятҡан арыҫланды күҙе күргән.

Арыҫланды күреү менән батыр шашҡан,
Күҙҙәре уттай янып, үте ташҡан;
Йә хоҙай, үҙең ярҙам бирә күр, тип,
Ҡарыуын ҡулына алып яҡынлашҡан.

Бер өлкән ҡара ташты ҡулына алған шунда,
Йоҡлап ятҡан арыҫланға һалған шунда;
Орған таш арыҫланға теймәйенсә,
Уба ҡылып, ҡара ерҙе ярған шунда.

Ер һелкенгәс, шул ваҡыт арыҫлан торған,
(Манаралай ҙурлығы, хоҙай орған!);
Батырҙы байҡаған тороу менән,
Ҡашындағы ҡара ташҡа күҙен борған.

Хисапһыҙ ҡурҡыныслы, көслө яман,
Услап алып ташты атҡан күккә табан;
Шул ваҡытта арыҫланды батыр Бабсаҡ
Уҡ менән һалып ҡалған һанға табан.

Уҡ тейгәндән һуң, арыҫлан йығыла, ти,
Үпкәһе ауыҙына тығыла, ти;
Батырҙың атҡан уғы үтә сығып,
Шунда бер яр ташҡа* кереп юғала, ти.

Ҡашына арыҫландың килде батыр,
Үлгәнен аныҡлап белде батыр;
Быға инде бер билге һалайым, тип,
Арыҫландың шунда телен телде батыр.

Шул ваҡыт батыр уйға ҡала инде,
Бер уғын уртаһынан яра инде;
Билге ҡылып, шул ваҡытта ярты уғын
Арыҫландың эсенә тығып һала инде.

Ярты уғын үҙе менән алмаҡ булды,
Тиҙ йөрөп Мәсем ханға бармаҡ булды;
Дошман булған яуыңды үлтерҙем, тип,
Ҡыуаныслы хәбәрҙе һалмаҡ булды.

Шунда уҡ батыр Бабсаҡ йөрөп китте,
Ике итәген биленә төрөп китте;
Көнө-төнө туҡтамай ҡаты йөрөп,
Мәсем хандың иленә барып етте.

Ир Бабсаҡ Мәсем ханға килде инде,
Туҡтамаҫтан өйөнә керҙе инде;
Ҡуркыныслы яуыңды үлтерҙем, тип,
Ни ҡылғанын барын һөйләп бирҙе инде.

Быны ишетеп, Мәсем хан торҙо инде,
Түңәрәккә муйынын борҙо инде;
Майҙан төҙөп, халыҡ йыйып, ат саптырып,
Төрлө ҡыҙыҡ тамаша ҡылды инде.

**Ҡарағөлөмбәт батырҙың үле арыҫланға атҡаңы, үҙем үлтерҙем, тип ҡайтҡаны; Тимерҡотло батыр менән Тамъян батырҙың быны кире ҡаҡҡаны**

Мәсем хан инде туйын ҡыла торһон,
Йыйылған халайығын һыйлай торһон;
Беҙ киләйек Ҡарағөлөмбәт әхүәленә,
Бүтән ҡыҙыҡ әңгәмә була торһон.

Ул тағы күп ерҙәргә йөрөгән икән,
Ҡыҙыҡтырып бүртәне елгән икән;
Ир Бабсаҡ үлтергән арыҫланға
Туп-тура яҡынлашып килгән икән.

Килеү менән арыҫланды күргән икән,
Йоҡлап ята икән, тиеп белгән икән;
Үлеп ятҡан арыҫланды йоҡлайҙыр, тип,
Уҡ менән шул ваҡытта биргән икән!

Ҡарағөлөмбәт уҡ менән атты шунда,
Арыҫлан ҡуҙғалмаҫтан ятты шунда;
Атҡан уҡтың яртыһынан күбе кереп,
Күкрәгенә был йыртҡыстың батты шунда.

Ҡарағөлөмбәт арыҫлан яҡҡа килде инде,
Үлгәнлеген арыҫландың белде инде;
Алмас башлы ниндәйҙер уҡ зәрдабынан*
Үлеп ҡалған икән, тип, белде инде.

Ҡаҙалған уғын алды килеү менән,
Үлгәнлеген аныҡлап белеү менән;
Билгегә һул ҡолағын киҫеп алып,
Ҡайта, ти, туҡтамаҫтан елеү менән.

Ҡарағөлөмбәт Мәсем ханға килеп етте,
Туҡтамаҫтан сатырына кереп китте;
Хан янына кереү менән, кисектермәй,
«Арыҫланды үлтерҙем!» тип ғарыз* итте.

Мәсем хан бынау һүҙгә таң ҡала, ти,
Урынынан сыҙай алмай, ҡуҙғала, ти;
Туҡтамай йылдам килһен ҡаршыма тип,
Бабсаҡҡа кеше арҡылы һүҙ һала, ти.

Һүҙҙе ишеткәс, Бабсаҡ килде инде,
Ҡарағөлөмбәт ултырғанын күрҙе инде;
Бер шомлоҡ менән ултырғанын Ҡоломбәттең
Төҫөнә ҡарау менән белде инде.

Килде лә ир Бабсаҡ өйгә керҙе,
— Саҡырҙың, тәксир ханым, ниңә? — тине;
Тиҙ әйтсе, ишетәйем сапсанырак,
Бер-бер йомош бармы әллә миңә? — тине.

— Бынау батыр килеп ултыра беҙгә, тине,
Арыҫланды үлтерҙем, тип төҙҙә*, тине;
Бында бер хикмәтле эш барҙыр тиеп,
Шул сәбәптән саҡырҙым һеҙҙе, — тине.

Хан әйтә, ти: «Саҡырғаным белдегеҙ, ти,
Икегеҙ ҙә үлтерҙек тип килдеңеҙ, ти;
Икәүең дә үлтергәне раҫ булһа,
Күрһәтендер инде миңә билгегеҙҙе?»

Бабсаҡ әйтте: «Саҡырғас, килдем, — тине, —
Был хикмәттең асылын белдем, — тине;
— Аңды үлтереп, һалып килгән билгеһене
Әллә ҡасан үҙегеҙ белдең, тине.

Ышанмаһаң, ҡарайыҡ барып, тине,
Кәүҙәһен арыҫландың ярып, тине;
Инде, тәксир, икәүбеҙҙең билгеһене
Тикшерә күр аҡылыңа һалып», — тине.

Ҡарағөлөмбәт ултырҙы уйға ҡалып,
Ханға яуап бирә, ти тора һалып;
Билгеһен шунда ханға күрһәтә, ти,
Арыҫландың һул ҡолағын ҡулға алып.

«Арыҫланды, — Ҡарағөлөмбәт, — үлтерҙем, ти,
Ҡолағын киҫеп, һеҙгә килтерҙем, ти.
Кәүҙәһендә бүтән һис бер билгеһе юҡ,
Һүҙемдең асылын инде белдерҙем», — ти.

Өсәүһе лә өйҙән сыҡты шул һүҙҙе әйтеп,
Нишләһен, кәрәкмәгән күп һүҙҙе әйтеп;
Ҡарағөлөмбәт килеп халыҡҡа ғауға һалды,
Донъяла булмаған бер юҡ һүҙ әйтеп.

Мәсем хан был һүҙҙе инде ҡуйырға уйлай,
Барын да халайыҡтың йыйырға уйлай;
Бабсаҡтың эшен раҫҡа ҡуйып,
Ун ике бей өҫтөнән бей ҡылырға уйлай.

«Бабсаҡтың раҫ, — тине, — ҡылған эше, —
Арыҫланды тәфтиш* итеп килгән кеше, —
Бабсаҡтың һүҙенең бары дөрөҫ,
Ҡоломбәттең ялған, — тине, — ҡылған эше».

Шул ваҡыт Ҡарағөлөмбәт ояла, ти,
Тәненән даръялай тире ҡойола, ти;
Ҡара әкәнең* өс йөҙ алтмыш азаматы
Барыһы ла шау-шыу килеп йыйыла, ти.

Тимерҡотло менән Тамъян — ике батыр
Йыртҡысты эҙләп таба алмай ҡайтты ахыр:
Халайыҡтың яҡ-яҡ булып талашҡанын
Күргәндән һуң, хайран булып килә ятыр.

Ғауғаның асылып инде белде былар,
Туҡтамаҫтан Мәсем ханға килде былар
Бабсаҡтың һүҙенең бары раҫ, тип,
Тоғролоҡ менән ғыуаһлыҡ бирҙе былар.

Әйттеләр: «Тәксир ханым, килдек, тине,
Ғауғағыҙҙың асылын белдек, тине;
Батыр Бабсаҡ үлтергән арыҫланды
Ҡоломбәттән бер көн борон күрҙек, тине.

Үлеп ятҡан арыҫланды күрҙек, тине,
Шул ваҡытта ҡашына килдек, тине;
Билге ҡылып һалып киткән хикмәттәрен
Бабсаҡтың икәүен дә күрҙек, тине.

Ауыҙынан ҡан килгәнгә, ауыҙын астыҡ,
Билге ҡылып телен телгән әүүәл баштук.
Боғаҙында бер тимер тағы күреп,
Ҡулды тығып ҡарарға аҡыллаштыҡ.

Бер уғын уртаһынан ярған икән,
Яртыһын эсенә тығып һалған икән;
Оҙон уҡ арыҫландың эсенә һыймай,
Уҡтың башы боғаҙына барған икән...»

Быны ишеткәс, Мәсем хан туй ҡыла, ти,
Барын да батырҙарҙың һый ҡыла, ти;
Бабсаҡҡа ҡыҙын инде бирмәк булып,
Шул ваҡыт Мәсем хан бер уй ҡыла, ти.

## Ҡарағөлөмбәттең Бабсаҡ батырҙы атҡаны, ҡыпсаҡ ырыуын ҡырып ҡайтҡаны

Ҡарағөлөмбәт азаматын йыйып алған,
Шәһәрҙән ситкә аулаҡҡа барып ҡалған;
«Ҡыпсаҡтарҙың батыры Бабсаҡты
Үлтерәйек, халҡым», — тип кәңәш һалған.

Шул һүҙҙе әйтеп уҡ-һаҙағын ала инде,
Азаматтарын шул ергә һала инде;
Күҙҙәренә ҡан тулып, асыуланып,
Туп-тура тупҡа табан бара инде.

Шул ваҡытта Бабсаҡ батырҙы Мәсем хан ун ике бей өҫтөнән бей ҡылып, уға ҡыҙы Гәүһәрҙе никах уҡып ҡушып, бик ҙур туй яһап яталар икән. Ҡарағөлөмбәттең, күҙенә ҡан тулып, асыуланып килгәнен халыҡтың барыһы ла күрә. Быны Бабсаҡҡа әйтәләр: «Батыр, урыныңдан тор, ҡаршы бар, ул бер-бер шомлоҡ менән килә!» — тиҙәр. Бабсаҡ: «Бер ултырған урындан тороу — ҡатындар эше. Урынымдан тормайым, уға ҡарамайым!» — ти. Тағы ул ошо һүҙҙәрен әйтә:

Бер ултырған урынымдан тормайым, ти,
Һеҙҙең әйткән һүҙегеҙгә булмайым, ти;
Атһа инде, ата бирһен залим[211] хаин,
Унан ҡурҡып муйынымды бормайым, — ти...

Ҡарағөлөмбәт керешкә уғын кейә инде,
Бабсаҡтың биленә төҙәй инде;
Алмас башлы уғын атҡас, ундырһынмы, —
Батырҙың билен шунда өҙә инде.

Ҡарағөлөмбәт килде лә атты инде,
Ир Бабсаҡ ҡыҙыл ҡанға батты инде;
Бил өҙөлгәс, бисара сыҙаһынмы, —
Йәнен хаҡҡа* тапшырып ятты инде.

Маҡтана, ти: «Алдым, тип, үсемде мин,
Белгеҙҙем, тип, ҡыпсаҡтарға көсөмдө мин».
Был һүҙҙе әйтеп, азаматын саҡыра, ти.
Ҡоторған ишәктәй баҡыра, ти;
Залим хаин ҙур шомлоҡ ҡылды, тиеп,
Әҙәм булған бары ла аптырай, ти.

Был хәлдән һуң Тимерҡотло менән Тамъян батыр, икәүһе һүҙ берләшеп, Ҡарағөлөмбәтте үҙенең өс йөҙ алтмыш кешелек ғәскәрение менән бергә ҡырып ташларға уйлай. Әммә Мәсем хан әмер

итмәй: «Хоҙаның бер тәҡдире булғандыр, сабыр итегеҙ», — тигәс, һис берәү Ҡарағөлөмбәткә һүҙ әйтмәй.

Бабсаҡтың һигеҙ азаматы батырҙы ерләмәк булалар. Шул ваҡытта Ҡарағөлөмбәт: «Еремде ҡаҙытмайым, еремдән тупраҡ бирмәйем, теләһә ҡайҙа ҡуйығыҙ!» — тип мәйетте ерләргә рөхсәт бирмәй. Бабсаҡ батырҙың азаматтары үҙҙәренең көн ярымлыҡ ҡыпсаҡ еренә ҡайтып, батмандар менән тупраҡ ташып, батырҙың өҫтөнә өйәләр[96].

Тимерҡотло менән Тамъян килде ханға,
Ҡара әкәнең эшенә ҡалып таңға;
«Бер әҙәмдең ҡанына баттыҡ, — тине, —
Киләбеҙ тип бынау йыртҡыс аңға.

Тәҡсир хан, беҙгә рөхсәт бирең, тине,
Ғәскәрең менән аман йөрөң, тине;
Теләһәң яу, теләһәң дуҫ бул үҙең,
Ҡара әкәнең яйын үҙең белең», — тине.

Шул ваҡыт ҡайтарҙы хан батырҙарын
Тейәтеп алтын-көмөш сатырҙарын;
Гәүһәр, яҡут, аҫыл ташы, — барын биреп.
Хуш ҡылып һәммәһенең хәтерҙәрен.

Батырҙар ҡайтып китте аманлашып,
Хеҙмәтен Мәсем хандың тамамлашып;
Ҡарағөлөмбәт үҙ яйына йөрөй бирҙе
Мәсем хан менән дошман булып, яманлашып.

Ике батыр ҡайтты, халҡын башлап йөрөп,
Күргән ҡыҙыҡ әңгәмәһен фашлап йөрөп;
Беҙ киләйек Бабсаҡ батыр әхүәленә,
Бүтән ҡыҙыҡ әңгәмәне ташлап тороп.

Бисара батыр Бабсаҡ донъя һалды,
Ҡатыны, бала, барсаһы етем ҡалды;
Ураз хандың алтын баулы шоңҡары ине,
Бер көндә ғәйеп булып китеп ҡалды.

Күптәрҙе донъя шулай алдай икән,
Бынан һис кем ҡотолоп ҡалмай икән;
Бай булһын, батыр булһын, батша булһын, —
Барын да рәхимһеҙ ялмай икән.

Был донъяның үҙен бер ҡатын, тине,
Һәр кемде саҡыралар яҡын, тине;
Тағәт менән ғибәҙәтте ник ҡылаһың,
Тынысланып йоҡла йоҡоң ятып, тине.

Бер-бер әҙәм донъяны ҡыуа икән,
Тағәт* менән ғибәҙәтте* ҡуя икән;
Алдап йөрөп, сихырлап бисараны,
Ахырында иманынан юя икән.

Егеттәр, был донъяға алданмағыҙ,
Яҡшы ҡылып көтәйем, тип, ҡанданмағыҙ*;
Тапҡан малың аҙ булһын — хәләл булһын,
Ҡыҙығып, харам мал менән малданмағыҙ*.

Ҡарағөләмбәт батыр, Мәсем хандан ҡайтып, бер аҙна өйҙә тороп, һәммә булған халҡын алты йәштән ҡырҡ йәшкә тиклем йыйып, ҡыпсаҡ ырыуын ҡырырға, Бабсаҡтан тоҡом ҡалдырмаҫҡа ниәт ҡылып, ҡыпсаҡ ырыуына яуға киткән.

Ҡарағөләмбәт менә атҡа, йөрөйөм, тип,
Язаһын ҡыпсаҡтарҙың бирәйем, тип;
Бабсаҡтың бер тоҡомон ҡалдырмаҫтан,
Ҡыпсаҡ атлы барын да ҡырайым, тип.

Был һүҙҙе әйтеп, халҡын йыйып алды инде,
Еренә ҡыпсаҡтарҙың барҙы инде;
Ҡатын, бала, ҡарт-ҡороно аямаҫтан,
Осраған берҙең ҡарынын ярҙы инде.

Шулай итеп халайыҡты үлтерә, ти,
Баштарына ҡиәмәт килтерә, ти;
Рәхимһеҙ, шәфҡәтһеҙ Ҡарағөләмбәт
Ҡыпсаҡтарҙың тоҡомон бөтөрә, ти.

Тоҡомон ҡыпсаҡтарҙың өҙә инде,
Ҡанында халайыҡтың йөҙә инде;
Бабсаҡтың ҡатыны Йәмиләнең
Бер өйгә йәшенгәнен һиҙә инде.

Йәмилә Ҡара әкәне белгән икән,
Ҡырғанын халайыҡты күргән икән;
Рәхимһеҙ мине лә үлтерер, тип,
Йәшеренеп бер өйгә кергән икән.

Йәмиләнең йәшенгәнен белде батыр,
Ҡашына баяғы өйҙөң килде батыр:
«Ватып, дал-дал ҡылмаҫ борон, сапсан ас!» — тип,
Асыу менән аҡыра, ти, дөбөр-шатыр.

Йәмилә ҡурҡҡандан ишекте аса инде,
Бисараның төҫтәре ҡаса инде;
Һылыулығын Йәмиләнең батыр күргәс,
Ғашиҡ булып, асыуын баҫа инде.

Ҡарағөлөмбәт Йәмиләгә: «Ҡейен, тине,
Ваҡ-төйәк нәмәләрең йыйың, тине.
Мин һине үҙ өйөмә алып ҡайтам,
Һиңә яңғыҙ донъя көтөү ҡыйын, тине.

Мин һине ҡатынлыҡҡа алам, тине,
Булмаһа эсеңдә әгәр балаң, тине;
Һиңә ҡатын булмайым, тип, әйтер булһаң,
Ошо урында бысаҡ менән салам!» тине.

Йәмилә ҡурҡыуынан ҡалтырай, ти,
Ни эшләргә лә белмәйенсә аптырай, ти;
«Бабсаҡтың ҡатынын алам үҙемә», — тип,
Ҡара әкәнең күҙҙәре уттай ялтырай, ти.

Шул ваҡыт Йәмилә лә кейенә, ти,
Бер яратҡан аллаһына һыйына, ти;
Алтын һөйәк Бабсаҡтың өйҙәренән
Китәмен, тип, күҙенән йәш ҡойола, ти.

Шул ваҡыт Ҡарағөлөмбәт, Йәмилә һылыуҙы үҙенең толпарына мендереп, хаин ырыуына ҡаратып ебәрә, ти. Арала әллә нисә көндәр үтеп, Ҡарағөлөмбәт үҙенең өйөнә ҡайта. Өйҙәге ике ҡатыны Йәмиләне күргәс, көнсөлөк менән: «Был ҡатын — йөклө ҡатын, уның эсендә Бабсаҡтан бер тоҡом ҡалған, әгәр ул тыуа торған булһа, башыңа бер бәлә булыр», — тип Ҡарағөлөмбәтте арбайҙар. Ҡарағөлөмбәттең күңелен ҡурҡыу ала. Ул, ҡарындағы баланы үлтереү уйы менән, Йәмиләнең бөтә тәнен ҡыл дилбегә менән ыуырға керешә. Шул ваҡыт Йәмилә, ғазаплауға сыҙай алмай: «Үлтерә торған булһаң, тиҙерәк үлтер, мине былай бикәргә ғазаплама, мин йөклө түгел», — ти. Ҡарағөлөмбәт быны раҫларлыҡ дәлил һорай. Йәмилә, ни булһа ла булыр тип, дәлил итеп тышта ҡасып йөрөгән бер ҡара тананы күрһәтә: «Әгәр анау тана быуаҙ булһа, мин йөклө булырмын, тыу булһа — мин йөкһөҙ», — ти. Ҡарағөлөмбәт тананы салып, эсен ярып ҡарарға ҡуша. Тана, Йәмиләнең бәхетенә ҡаршы, тыу булып сыҡҡан, ти. Шунан һуң барыһы ла Йәмиләнән: «Һине бикәргә яфалағанбыҙ!» — тип ғәфү һорайҙар. Һүҙенең дөрөҫлөгөн дәлилең раҫланы тип, Ҡарағөлөмбәт Йәмиләне өсөнсө ҡатын итеп ала. Йәмилә, үлемдән ҡотолоп, Ҡарағөлөмбәт йортонда донъя көтә башлай.

## Күсәк батыр тыуғаны, атаһы юлын ҡыуғаны

Көндәрҙән бер көн, Бабсаҡтың үлтерелеүенә ике ай тигәндә, Йәмиләнән бер ир бала донъяға килә. Балаға Күсәк[97] тип исем ҡушалар. Хаин халҡы барыһы ла уны Ҡарағөлөмбәттәндер тип уйлай, ти. Йәше туҡһанға еткән бер белемсе ҡарсыҡ баланың Бабсаҡтан ҡалған тоҡом икәнен белә. Шулай булһа ла һис берәүгә

әйтмәй. Ҡусәк тыуғанда, Ҡарағөлөмбәттең күңеленә бер төрлө ҡурҡыу төшөп, йөрәге ҡубып, өс көн, өс төн ауырып ятҡан, ти. Ауырыуҙың сәбәбе шул булған: Ҡарағөлөмбәт, сәңгелдәктә ятҡан бала янына барып, битенән үбергә уйлаһа, бала ҡулын һуҙып, һаҡалынан тотоп һелкеткән, ти. Был ваҡиға Ҡарағөлөмбәттең тәрән уйға, ҡурҡыуға төшөүенә сәбәпсе булған. Ҡусәк бик күркәм сифатлы, бәһлеүәнлеге йөҙөндә күренеп торған бала булған, ти. Бер йәшендә ваҡытында ун йәштәге бала көсө булған. Имсәк имергә, тамағына ашарға теләп, ҡәҙимге балалар кеүек тулап илаған ваҡытында күлдәк-ыштан һалмалыҡтан туралып, йыртылыр булған. Шуға күрә уның күлдәк-ыштанын йәшәгән үгеҙ тиреһенән тегеп биргәндәр.

Донъяға Ҡусәк бала тыуҙы инде,
Биленә алмас ҡылыс быуҙы инде;
Бәһлеүән, йөҙө күркәм, кәүҙәһе ҙур,
Атаһының юлын тағы ҡыуҙы инде.

Һөйләшкән алты айҙа Ҡусәк бала,
Әсәһенән яңы тыуған имсәк бала,
Алтын һөйәк Бабсаҡтан мираҫ ҡалып,
Йәмиләнән тыуҙы инде ҡыпсаҡ бала.

Бер йәшкә Ҡусәк бала етте инде,
Балалар менән уйнарға китте инде;
Ун йәшәр балаларҙың берен ҡуймай,
Барын да көрәшкәндә йыҡты инде.

Еткән һуң, йәшкә, ир булыпты,
Ите үҫеп, кәүҙәһе ҙур булыпты;
Өс менән дүрт йәшендә көрәш һалып,
Бик күп мыҡты балуанды хур ҡылыпты.

Биш йәшендә ҡаршы әҙәм тора, алмаған,
Батырҙар күҙен уға бора алмаған;
Йөҙҙәре айҙың ун дүрт кисәһендәй,
Талай ҡыҙҙар ғашиҡ булған, борандаған.

Бер заман алты йәшкә килде Ҡусәк,
(Табылыр һүҙҙең йүне, яҙа бирһәк;
Әүәлдә бала ине, хәҙер батыр,
Һуңынан бей ҙә булыр, яҙа бирһәк.)

Бер көндө балалар менән түҙгә сыҡҡан,
Йәй бөтөп, ул ваҡытта көҙгә сыҡҡан;
Бер-беренә әллә ниңә асыуланып,
Балаларҙың араһында һүҙҙәр сыҡҡан.

Шул ваҡыт Күсәк батыр әйләнә, ти,
Һүҙ әйтеп, балаларға бәйләнә, ти;
Бала бөткән бары ла бер яҡ булып,
Күсәкте үлтерергә хәйләләй, ти.

Шул ваҡыт асыуланды батыр Күсәк,
(Табылыр һүҙҙең йүне, яҙа бирһәк.)
Барын да балаларҙың ҡыйрата, ти,
Тотоп алып, өҙгөләп берсәк-һәрсәк.

Быларҙың керҙе, ти, Күсәк араһына,
Ҡайтарҙы ҡыуып-әйҙәп ҡалаһына;
Күсәктең ҡул елпеүе тейеп ҡалды
Әлеге ҡарт әбейҙең балаһына.

Йығылды шунда бала иҫтән тайып,
Күсәккә һүҙ һөйләне, ибен табып:
«Күп рәхмәт, егет, һиңә ҡылыр инем,
Әсәмә, алып барһаң, йөкмәп алып».

Бала әйтте: «Атам үлгән, етем инем,
Һине күргәс, ҡыҙығып китеп инем;
Хоҙай һаҡлап, йоҙроғоң теймәй ҡалды,
Тейгәндә — әллә ҡасан бөтөп инем».

Батырҙың асыуы инде таркала*, ти,
Баланы ерҙән алып аркалай, ти;
Һорашып был баланың торған өйөн-көйөн,
Шул ваҡыт әсәһенә апара, ти.

Шул ваҡытта илай инде әбей меҫкен,
Иҫенән тайып ҡалған бала меҫкен;
Күсәкте әбей шунда шелтәләй, ти;
«Рәхимһеҙ, күргәнем юҡ һиндәй һис кем!»

Күсәк әйтте: «Хата миндә булды, тине,
Күҙемә ҡанлы йәштәр тулды, тине;
Зинһар, инәй*, яуыз доға ҡыла күрмә,
Булған эш күптән инде булды, тине».

Әбей: «Нишләп улай балама тейҙең? — тине.
— Сабыйымдың ниңә йәнен ҡыйҙың? — тине.
— Изгелек иткән әбейеңдең быҒаса
Ҡапыл кәйефен килеп юйҙың? — тине.

— Мин инем ул — әсәңә ярҙам иткән,
Тере булып тыуыуыңды берҙәм көткән;
Хәйер, был хәл һинең өсөн яңы нәмә:
Тыуыуыңа бик әҙ әле ваҡыт үткән».

Шунан инде әбей: «Тыңла, балам, әгәр белмәгән булһаң, мин һиңә ысын хәлде һөйләп бирәйем», — ти.

Күсәк: «Һөйлә, мин һис бер нәмә белмәйем!» — ти.

Шул ваҡыт әбей Күсәккә: «Балам, һин көслө булһаң, атаң ҡонон*ал!» — ти. Күсәк: «Мин атайымдың ниндәй ҡонон алайым, ул тере бит? Уны берәү ҙә үлтермәгән, һис кем язаламаған», — ти.

Әбей: «Юҡ, балам, һин Ҡарағөлөмбәт бейҙең балаһы түгелһең, ә Бабсаҡ бейҙең балаһы!» — ти. «Ниндәй Бабсаҡ бей?» — тип һорай Күсәк.

Шунан инде әбей Күсәктең атаһы ҡыпсаҡ ырыуы батыры Бабсаҡ бей икәнен, уның ҡайҙа һәм нисек Ҡарағөлөмбәт ҡулынан үлгәнен, Бабсаҡ бей һәләк булғандан һуң, Ҡарағөлөмбәттең яу менән барып, ҡыпсаҡ ырыуын ҡырып киткәнен, Йәмиләне үҙенә өсөнсө ҡатынлыҡҡа алғанын, шунан һуң Йәмилә ниндәй дәлил менән Күсәкте ҡорһаҡта саҡта үлтертмәй алып ҡалғанын, — бөтәһен дә әбей нисек булған, шулай һөйләп төшөндөрөп бирә. Күсәк бей әбейҙең һүҙҙәрен күңеленә алып ултыра. Ул әбейҙән: «Инәй, һин быларҙы ҡайҙан беләһең, ниңә Ҡарағөлөмбәтте үлтерергә димләйһең?» — ти.

Әбей: «Мин үҙем ҡыпсаҡ ырыуында тыуып-үҫкәнмен. Элек, ҡыпсаҡ менән хаин ырыуҙары татыу йәшәгән саҡта, бында ҡыпсаҡ ырыуынан оҙатылып килгән килен инем. Хәҙер ырыуҙар бер-береһе менән дошманлашты. Шуның өсөн миңә лә асыл йорт* ғәзиз күренә, балам! — ти. Һуңынан әбей: «Мин әйткәндәрҙе әсәйеңдән дә һорап ҡара, ул һиңә тағы ла анығыраҡ итеп төшөндөрөп бирер», — ти. Күсәк: «Әсәйем әйтмәҫ булһа, нишләрмен?» — тип һорай. «Улай булғас, — ти әбей, мин һиңә бер хәйлә өйрәтәйем. Кәрәк мәлдә шундай бер хәйләне мин әсәңдең үҙенә лә өйрәткәйнем, шул арҡала һин тере ҡалдың. Әгәр әсәң һин белергә теләгәнде әйтмәһә, үҙеңә ҡурмас ҡурҙырып бирергә ҡуш. Ул быны эшләр, тик ҡурмасты ҡашыҡ менән бирһә, алма, усы менән бирһен. Шул ваҡыт һин уның эҫе ҡурмаслы усын ҡуша баҫырһың да: «Минең атам Ҡарағөлөмбәтме, Бабсаҡмы? Дөрөҫөн әйт!» — тип һорарһың.

Күсәк әбей менән хушлаша ла, өйгә ҡайтып, әсәһенән ҡурмас ҡыҙҙырып биреүен һорай. Йәмилә ҡурмасты ҡашыҡ менән килтерә, Күсәк алмай. Шунан, яланғас ус менән бирәм тигәндә, эҫе ҡурмасты усы эсенә баҫа ла: «Минең атам Ҡарағөлөмбәтме әллә Бабсаҡмы? Дөрөҫөн әйт!» — ти. Йәмилә ҡурмас ҡыҙыуына сыҙай алмай: «Балам, атаң Бабсаҡ батыр ине!» — тип булған хәлдең дөрөҫөн һөйләп бирергә, серҙе асырға мәжбүр була. Серҙе белгәндән һуң, Күсәк әсәһенә: «Мин үҙемдең олатама — Ураз ханға ҡасып китәмен. Мин киткәнде белмә лә, күрмә лә. Киләһе йыл ошо ваҡытта килермен һәм нишләргә икәнен үҙем белермен», — ти. Йәмилә, күҙҙәренән ҡанлы йәш ағыҙып, балаһын ебәреүгә ҡыймаһа ла, сараһыҙҙан рөхсәт бирҙе, ти. Был ваҡытта Күсәк ни бары алты йәшендә генә була. Ул берҙән-бер көн Ураз ханға ҡасып китеп, ғәйеп була.

Көндәрҙән бер көн Күсәк батыр Ураз ханға барып етә. Уның янына инеп сәләм бирә. Ураз хан Күсәктең сәләмен ала ла атын-

йүнен* һораша: Күсәк: «Мин ҡыпсаҡ ырыуы батыры Бабсаҡ бейҙең улы Күсәк батырмын», — ти. Ураз хан баланы теҙе өҫтөнә алып, әсәһен, йәғни ҡыҙы Йәмиләне һораша. Бала әсәһенең һаулығын белгертә. Шунан һуң ул, Ҡарағөләмбәттән атаһының ҡонон алыу өсөн, олатаһынан ғәскәр һорай. Ураз хандың, быны ишетеп, күңеле хуш була. «Бер йыл беҙҙең ҡулыбыҙҙа тәрбиәлән. Шунан һуң ғына минең ырыуҙан бер аҙ ғәскәр алып, атаң ҡонон алырға барырһын», — ти.

Беҙ киләйек Ҡарағөләмбәт әхүәленә. Ҡарағөләмбәт, Күсәк ҡасып китеүгә өс көн үткәндә, Йәмиләнән: «Беҙҙең бала ҡайҙа?» — тип һорай. Йәмилә уға: «Белмәйем, кисә йөҙ бала менән ҡырға уйын уйнарға киткәйне, шунан ҡайтып килгәне юҡ», — тип яуап бирә.

Ҡарағөләмбәт бик күп кешеләр сығарып, тау-таш араларынан, урмандарҙан Күсәкте эҙләтә, тик уны бер ҡайҙан да таба алмайҙар. Ахырҙа уны йыртҡыс һәләк иткәндер, йә булмаһа үҙе берәй яҡҡа ҡасып киткәндер, тип тәкбир ҡылалар* ҙа эҙләүҙе ҡуялар.

## Күсәк батырҙың атаһы ҡонон алғаны, дүртенсе ырыуҙан бер йән тороп ҡалғаны

Күсәк батырыбыҙ Ураз ханда бер йыл торғандан һуң, һайлап-һайлап уның һикһән бәһлеүәнен алып, хаин ырыуы халҡын ҡыра башлай. Шул һикһән кеше араһында Һигеҙәкә исемле батыр ҙа була.

Күсәк батыр ҡараңғы бер төндә Ҡарағөләмбәттең шәһәренә килеп, үҙенең әсәһе менән күрешә. Ул әсәһен, туҡһан йәшлек ҡыпсаҡ әбейен балаһы менән шәһәрҙән алып сыға һәм: «Минең әсәйемде һин Ураз ханға алып бар, былларҙы ла бергә алып бар!» — тип уларҙы Һигеҙәкә батыр ҡулына биреп оҙатып ебәрә. Әсәһенә ул: «Атамдың ҡонон алырмын. Биш айҙан һуң ҡайтырмын!» — тип вәғәҙә биреп ҡала. Һигеҙәкә Йәмиләне, балаһы менән әбейҙе алып Ураз ханға йөрөй торһон. Беҙ киләйек Күсәк батыр әхүәленә.

Күсәк бей янында ҡалған етмеш туғыҙ батыры менән хаин ырыуын ҡырырға тотондо, ти. Осраған бер әҙәмде ҡалдырмай ҡырҙы, ти. Күсәктең батырҙарынан да етмеш һигеҙ кеше һәләк була. Ул бер генә батыр менән ҡала. Ошо бер батыр менән Күсәк бей һәммә булған хаин ырыуы халҡын ҡылыстан үткәрә, Ҡарағөләмбәттең ҡатындарын, балаларын үлтерә. Бер йән эйәһен ҡалдырмай ҡыра, хатта имсәк балаларҙы ла аямай. Әммә Ҡарағөләмбәтте тапмай ҡаңғыра. Күсәк батыр, Ҡарағөләмбәтте эҙләп килә ятҡанда, бер балаға юлыға. Шул баланан: «Ҡарағөләмбәтте күрмәнеңме?» — тип һорай.

Күсәк батыр хаин ырыуын сабып алды,
Яңғыҙ бала ҡалған икән, — табып алды.
— Ҡара әкәнде күрҙеңме, ҡарағым*! — тип,
Күсәк батыр был үҫмерҙән яуап алды.

Бала әйтә: «Мин үҙем бер етем инем,
Яуҙан ҡасып иртә таңдан китеп инем,
Ҡара әкәмдең йәшеренгән ерен күреп,
Әйтәйем, тип, батыр, һине көтөп инем.

Мин үҙем Ҡара әкәмдең көттөм ҡуйын,
Талай яман михнәтте күрҙем ҡыйын;
Биш йыл буйы хаҡымды һис бирмәне,
Тәҡсирем, инде һеҙ бирегеҙ һыйын.

Ҡарағөләмбәт ҡуйға һалды зурлыҡ менән,
Биш йыл буйы ҡуй баҡтым хурлыҡ менән;
Көнө-төнө аслыҡка сыҙай алмай,
Туйҙырҙым тамағымды урлыҡ менән.

Ҡарағөләмбәт, ҡасып һеҙҙән, тороп китте,
Алдын-артын ҡарамаçтан, йүгереп китте;
Үҙ күҙҙәрем менән күреп торҙом,
Ошо эçкерт аçтына кереп китте.

Әйткән һүҙем ялған түгел бер ҙә, тине,
Ҡарағөләмбәт бына ошо ерҙә, тине.
Мәғлүм булһын: ул унда яңғыҙ түгел,
Бер ҡыҙҙы алды үҙе менән бергә, тине.

Ҡарағөләмбәттең күҙенә ҡан тулған, тине,
Биленә алмас хәнйәр быуған, тине;
Һис булмаһа, бер тоҡом ҡалдырам, тип,
Ҡыҙҙы ҡатын ҡылмаҡсы булған, тине.

Уйы яман Ҡара әкәмдең, тәҡсир, тине,
Тәүәккәлде хоҙаға тапшыр, тине,
Хоҙай уңлап, ҡулыңа төшөрә алһаң,
Йәнен инде хаҡ юлына тапшыр», — тине.

Шул ваҡыт һүҙ әйтә, ти Күсәк батыр,
Әйткән һүҙе батырҙың балдай татыр:
«Етем бала, һине азат ҡылам, тине,
Ҡайҙа барһаң, сырағым, бәхетең артыр.

Мин һине ҡылдым, бала, азат, тине,
Илама, күҙ йәшеңде таҙарт, тине;
Ҡотолдо күбәләктәй йәнең һинең,
Беҙҙәрҙән булмаç һиңә ғазап, тине.

Ҡыуандым Ҡарағөләмбәтте әйткәнеңә,
Ҡарауыллап ошо ерҙә ятҡаныңа;
Ни һораһаң, теләгең ҡабул, тине,
Мин дә инде күнәмен әйткәнеңә».

Бала әйтә: «Улай тиһәң, батыр, миңә,
Әйтәйем мин бер теләкте инде һиңә;
Анау ҡыҙҙы үлтермәй ҡалдырһаңсы,
Юлдаш булып йөрөр инек бергә-бергә.

Ул ҡыҙ үҙе быйыл һигеҙ йәштә,
Мин үҙем, тәксир батыр, туғыҙ йәштә;
Ҡуй бағып*, икәүебеҙ таныш булып,
Уйнап-көлөп үҫкәйнек кесе йәштән.

Ул ҡыҙ — күрше ҡыҙы Ҡоломбәттең,
Уны мин йәндән артыҡ яратамын;
Теләгән теләгем шул, батыр, һеҙҙән;
Шул ҡыҙҙы ҡатынлыҡҡа һоратамын».

Күсәк батыр: «Һүҙеңде раҫ күрҙем, тине,
Әйткән һүҙ ике булмаҫ ирҙең, тине;
Биш йыл буйы ҡуй көткән хаҡында булһын,
Шул ҡыҙҙы ефетлеккә* бирҙем», — тине.

Шул һүҙҙе әйткәс, Күсәк батыр баҡыра, ти,
— Ҡарағөлөмбәт, ҡайҙаһың! — тип, аҡыра, ти, —
Ҡыҙҙы алып, яныма сапсан кил! — тип,
Күкрәгән күктәй булып, саҡыра, ти.

Ҡулына ул алмас ҡылыс тотоп алды,
Ике һаба ҡымыҙҙы йотоп алды;
Ҡыҙҙы ташлап, Ҡарағөлөмбәт сыҡҡан ине,
Бесәй тотҡан сысҡандай, тотоп алды.

Ҡоломбәттең өҙҙө тәүҙә һул ҡолағын,
Ҙурлығы тибенгеләй* мул ҡолағын;
Былар бары атайымдың ҡоно өсөн, тип,
Тағы йолоп алды уң ҡолағын.

Ҡолағын икеһен дә йолоп алды,
(Батырҙың күҙенә ҡан тулып алды);
Өҫтөндә бер нәмә лә ҡалдырмаҫтан,
Ҡара әкәнең кейемен һыпырып алды.

Күлдәк, ыштан барыһын да систерә, ти,
Тағы үҙен аттай ҡылып бестерә, ти;
Ҡәҙимге ҡаҙаҡтарҙың дөйәһендәй,
Моронон биҙәләп тиштерә, ти*.

Биҙәләп Ҡара әкәне бәйләп ҡуйҙы,
Ҡарыуяраҡ, сайманын һайлап ҡуйҙы;
— Етем бала баяғы ҡайҙа һин? — тип,
Айҡайлап бала яҡҡа күҙәп ҡуйҙы.

Шул ваҡыт бала килде йылдам баҫып,
Батырҙан ҡурҡҡанынан ашып-шашып;
Ҡарағөлөмбәт батырҙы күҙе күргәс,
Баланың төҫө китте, ҡото ҡасып.

Балаға батыр әйтте: «Йөрөң, — тине,
Бынау эҫкерт аҫтына керең, тине;
Биш йыл буйы хаҡһыҙ ҡуй көткән өсөн
Теге ҡыҙҙың саҙайын* бирең», — тине.

Быны ишеткәс, бала китте эҫкерт ҡарап,
Туҡтамаҫтан инеп китте эскә ҡарап;
Йәше туғыҙ, үҙе етем булған менән
Ғәйәт мыҡты бала икән, көсө һарап.

Баҫтырҙы ул Ҡоломбәтте арты менән,
Атам ҡонон алам, тиеп, шарты менән;
Ҡарағөлөмбәт ухылдап ҡоланы, ти,
Биленә тоҫҡап, алмас уҡты тартыу менән.

Шунан һуң Күсәк бей баяғы етем балаға ҡарап былай тип әйткән, ти:

«Ул һаман да йәшәр ине аман ғына,
Ҡыпсаҡтарҙы ҡыйратмаһа заманында;
Был ырыуҙан ҡалдырамын яңғыҙыңды,
Бер йән[233] булып йәшәй бир тау-яланында».

Шунан Күсәк: «Эшем бөттө, китәм, — тине,—
Атта елеп, Бабсаҡ иленә үтәм, — тине;
Тыныс булыр бынан ары ҡыпсаҡ ырыуы,
Ҡарымтаға[98] килә алмаҫ бүтән», — тине...

Был хикәйәт тамам булды ошо урында,
Даим ырыуҙар ҡырылышҡан бик боронда.
Ниһайәт, аҡ батшаға табиғ булғандан һуң,
Баҫылыр булды ундай хәлдәр ил түрендә.



# БАБСАҠ БЕЙ МЕНӘН ҠАРАҒӨЛӨМБӘТ БЕЙ

*(Бөрйән версияһы)*

Борон-борон заманда ҡайһы тирәләрәктер ҙур бер хан булған. Берҙән-бер көн был хан ҡиммәтле йәнлек тиреһенән бик матур яғалы тун тектермәксе булған, ти. Ул әҡлим* башлыҡтарына тиҙ генә килеп етергә саҡырған. Уға тамъяндарҙың олатаһы*, Ҡарағөлөмбәт бей шулай уҡ башҡа батырҙар киләләр. Хан әҡлим башлыҡтарын йыйып ала ла: «Кем дә кем, һунарға сығып, миңә яҡшы йәнлек тиреһе килтерһә, шул кешене ҙур түрә итәм!» — ти. Шунан һуң хан, батырҙарҙы, билдәле бер ваҡытҡа тирeләрҙе килтерергә ҡушып, ҡайтарып ебәрә.

Батырҙар таралышып һунарға сығып китәләр. Ҡарағөлөмбәт бей йөрөй торғас тиреһе йымйылдап торған бик матур һеләүһенгә тап була. Ул һеләүһенде атып ала ла, уң ҡолағын ҡырҡып алып, ҡумыраҡ аҫтына йыйып билдәләй ҙә ҡайтып китә.

Һунарға Бабсаҡ бей ҙә сыға. Ул, йөрөй торғас, һеләүһен эҙенә төшә. Эҙ буйынса юллап килеп, ул Ҡарағөлөмбәт бейҙең ҡумыраҡ аҫтына йыйған һеләүһенен табып алып ҡайта.

Бер ни тиклем ваҡыт үткәндән һуң, һунарсылар билдәләнгән көнгә ханға баралар. Һеләүһене урланған Ҡарағөлөмбәт бей ханға ҡоро ҡул менән килә. Тамъяндарҙың олатаһы, ниндәйҙер бик ҡиммәтле йәнлек тиреһе алып килеп, түрәлектә беренсе урынды ала, ә Ҡарағөлөмбәт бейгә тик өсөнсө урын ғына тейә.

Түрәлекте бүлешкәндә Ҡарағөлөмбәт бей: «Бабсаҡ бейҙең килтергән йәнлеге минеке. Уны мин үлтереп, уң ҡолағын ҡырҡып алып, билге һалып, ҡумырыҡ төбөнә йыйып киткәйнем. Бабсаҡ бей уны урлап алып киткән, мин уны билгеһенән таныйым!» — тиһә лә, уның әйткәненә ышанмайҙар. Шулай итеп, Ҡарағөлөмбәт бей Бабсаҡ бейгә буйһонған ярҙамсы булып ҡала.

Хан янында бер ни тиклем булғандан һуң, тамъяндарҙың олатаһы үҙ иленә ҡайтып китә. Бабсаҡ бей менән Ҡарағөлөмбәт бей ҙә Ағиҙел буйлап ҡайтырға сығалар. Бабсаҡ бейҙең юлы Ҡарағөлөмбәт бей ерe аша үткән була. Ҡайтып килгәндә, Бабсаҡ бей: «Түрә булғаным өсөн Ҡарағөлөмбәт бей араһында* туй яһап ҡайтам», — тип киң туғайға янаптан булған* бөтә халыҡты йыйып, ит, ҡымыҙ, уйын-көлкө менән туй башлай. Ул әллә ҡайҙан күҙ күреме ерҙән уратып алған халыҡ араһында ултырғыс менән ултырған.

Ҡарағөләмбәт бей майҙан эсенә инмәй, уҡ-һаҙағын муйынына элеп, түңәрәп торған халыҡты өс-дүрт мәртәбә урай ҙа, майҙан эсенә инеп, ҡалаҡ башаҡлы уҡ менән Бабсаҡ бейҙе биленән өҙә атып үлтерә. Ошонан һуң ике яҡлап халыҡ араһында ыҙғыш, талаш-тартыш, шау-шыу башлана.

Ҡарағөләмбәт бей Бабсаҡ бейҙе күмеү өсөн тупраҡ та, биле өҙөлгән кәүҙәне лә бирмәй.

Бабсаҡ бейҙең ҡауымдары* Маңка*, Сорғояз* тирәһенән ишәккә, дөйәгә мәрке* менән тупраҡты артып алып килеп, тау шикелле итеп күмеп, ҡайтып китәләр.

Бабсаҡ бейҙең ҡатыны Гөлғәйшә — Түрә хан[100] ҡыҙы була. Ҡарағөләмбәт бей, Бабсаҡ бейҙе үлтергәс, Гөлғәйшәне үҙенә дүртенсе ҡатын итеп ала. Ҡарағөләмбәт: «Бабсаҡ бейҙән эсеңдә бала булып ҡалмаһын, ул ҡалһа, ҙурайғас мине бөтөрөр», — тигән уй менән үҙ кешеләренән Гөлғәйшәне ҡамыт яғына һалдырып туҡмата. Гөлғәйшә, был тиклем ыҙалауҙарға түҙә алмайынса, хәйлә ҡорорға мәжбүр була. Бер тананы күреп ҡала ла ул Ҡарағөләмбәт бейгә: «Ошо ҡыҙыл тананы һуйып ҡарағыҙ. Әгәр ул быуаҙ булһа, мин дә ауырлы булырмын. Әгәр тыу булһа, мин дә ауырһыҙ булырмын», — ти. Гөлғәйшәнең һүҙенә ышанып, тананы һуялар. Тана тыу булып сыҡҡас, Ҡарағөләмбәт, Бабсаҡ бейҙән тоҡом ҡалмаған икән, тип уйлай. Ҡарағөләмбәт Гөлғәйшә менән ай ярым самаһы торғас, уны атаһына ҡайтарып ебәрә.

* * *

Түрә хан йортонда Гөлғәйшәнән ир бала тыуа. Уға Күсәк бей тип исем бирәләр. Малай ҙурайғас, балалар менән уйнағанда, балаларҙы туҡмап, ҡырып алып бара икән. Быны ауыл кешеләре лә, балалар ҙа: «Һин тыума, атайың юҡ!» — тип әрләгәндәр. Күсәк бей олатаһынан да, әсәһенән дә: «Минең атайым бар инеме? Булһа, ул ҡайҙа?» — тип һорап ҡараған. Тик уға береһе лә дөрөҫөн әйтмәй. Бер ҙә атаһының барын-юғын әйтмәгәс, Күсәк бей уйындан ҡайтып килә лә әсәһенә: «Әсәй, ҡурмас ҡыҙҙыр, ҡурмас ашағым килә» — ти.

Гөлғәйшә ярыҡ ҡурғы ҡаҙанда ҡурмас ҡыҙҙырып ултырғанда: «Әсәй, ҡурмас ҡыҙмаймы икән, алып бир әле?» — ти. Әсәһе уға ҡашыҡ менән алып һуҙа башлағас: «Юҡ, әсәй, ҡулың менән алып бир!» — ти. Гөлғәйшәнең ҡулы менән алып биреүе була, Күсәк бей уның усына эҫе ҡурмасты ҡыҫа ла: «Атайым ҡайҙа, әйт?» — ти. Ҡулы бешеүгә сыҙай алмай, әсәһе: «Атайыңды Ҡарағөләмбәт үлтерҙе», — тип ысынын һөйләп биргән, ти.

Күсәк бей ҡурмасты ла ашамай, әсәһенең ҡулын ебәреп, сығып китә. Ул олатаһына инә лә: «Олатай, мин атайымды үлтергән кешене, шулай уҡ атайымдың ҡәберен күреп киләм, ғәскәр бир», — ти. Олатаһы: «Ҡуй, балам, юҡ менән булма. Һин бәләкәсһең, кәүҙәң ҙур булһа ла, йәшең ун икелә генә бит әле. Ҙурайып, бәләкәс бауырың ҡатыңҡырағас, барырһың», — ти.

Күсәк бей, Түрә хандың ҡаршы килеүенә ҡарамаҫтан, биленә ҡынлы бысаҡ тағып, Ағиҙел буйлап һораша-һораша Мәсем менән Баҙал* тауҙары араһынан аҡкан Күжә* йылғаһы буйына китә. Ҡарағөлөмбәт бей шунда өс ҡатыны менән йәйләүҙә ятҡан була.

Икенде* менән аҡшам* араһында Ҡарағөлөмбәт бей намаҙ уҡып, бер ҡатыны һалма баҫып торған мәлдә, малай килеп инә. Күсәк бей килеп инеү менән, ҡатын баҙыян сеүәтәгә ойотҡан ҡойоп бирә.

Малай, билендәге бысағын сығарып, ойотҡанды әүернә тартып* дүрт өлөшкә бүлеп, бер өлөшөн «аш хаҡы өсөн» тип эсә лә өс өлөшөн ҡалдырып сығып китә[110]. Бабай намаҙын уҡып бөткәс, ҡатыны: «Бер малай килгәйне, йәлләп ойотҡан ҡойоп биргәйнем, уны бысағы менән дүрткә ҡырҡып бер өлөшөн эсте лә сығып китте», — ти. Ҡарағөлөмбәт, был һүҙҙе ишеткәс: «Ай, әбей, нишләп миңә шунда уҡ әйтмәнегеҙ! Ул Бабсаҡ бейҙең берәй ярсығылыр!» — тип бик уйлана башлай.

Күп тә ваҡыт үтмәй, бесән баштарында, Күсәк бей, Түрә ханға ҡайтып: «Атайымды үлтергән кешене таптым, миңә ғәскәр бир», — ти. Ул, олатаһынан йөҙләп ғәскәр алып килеп, бабайҙы ҡулға ала. Бабайҙың ике ҡулын артҡа ҡайырып, Ҡойонсаҡ[251] башына килтереп, ҡайынға сырмап бәйләп, ултыртып ҡуялар. Кис, ҡояш байып барғанда, Ҡарағөлөмбәт бейҙең ырыуҙаштары: «Беҙ бабайҙы бирмәйбеҙ!» — тип уны ҡотҡарып алып ҡалырға баралар. Ҡарт уларға: «Мин бер кеше, бер йән өсөн ыҙаламағыҙ, хәҙер бик ҡартайғанмын, үлергә лә ваҡыт еткән, арағыҙҙа маҙа-татыулыҡ ебәреп һуғышмағыҙ!» — ти.

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, улар кис булғас Күсәк бей ғәскәрҙәренең бер нисәһен, менеп килгән аттарын, дөйәләрен урлайҙар. Имамай*, Сыҡмамай, Татамай тип аталған ер исемдәре Күсәк бейҙең үлтерелгән һуғышсылары исеменә аталғандар. Ҡыҙылер* яланы, ғәскәр ҡырылып, күп ҡан түгелеп, ер өҫтө ҡыҙарып ятҡанлыҡтан аталып ҡалған. Ә инде Күсәк бей ғәскәренең менеп килгән дөйә, аттары урлап һуйылған ергә Буҙбейә*, Дөйәһуйған* исемдәре биргәндәр. Үлтерелгән бөтә кешеләрҙе Ҡарағөлөмбәттең ырыуҙаштары ҡумырыҡ* аҫтына тыҡҡандар.

Күсәк бей иртә тороп ғәскәрҙәрен теүәлләп ҡараһа, ғәскәрҙәре тулмаған. Аттары, дөйәләре лә юғалғанлығын белгән. Эҙләп-эҙләп тә таба алмағас: «Ә былар һаман да боҙоҡлоҡтарын ҡуймайҙар икән, был бабайҙы ҡалдырайыҡ тип уйлаһаҡ», — тип Ҡарағөлөмбәтте алып китәләр. Уны бейек тау-ташлыҡ, шыр урмандан алып барғанда, бер ҡара һыйыр тап була. Ҡара һыйырҙы күмәкләп ҡамап тотоп, ҡул тирмәненең ташы тиклем ике ташты ике аяғына тағып, Ҡарағөлөмбәтте шул һыйырға ултыртып алып китәләр. Ағиҙел аша сыҡҡас, бик ҙур бер туғайҙа туҡтайҙар. Ошо кисеү ауыҙында йәйелеп ятып, тамаҡтарына ашап-эсеп алалар. Был урынды Йәйпе кисеүе* тип атайҙар. Теге малай ошо урында бер аҙна тирәһе туҡтап, атаһының халҡын йыйып, уйнап-көлөп еңеү туйы уҙғара. Туйҙа ҙур-ҙур һабалар менән ҡымыҙ килтереп тулты-

ралар. Малай: «Был урынды Туҡһаба* тип исемләйек, сөнки һабалар ҡымыҙ менән туйынып, ашап ултырҙылар», — тигән.

Туйҙы үткәреп бөткәс, малайҙар ҡауымдарынан: «Был бабайҙы нишләтәбеҙ, ҡотҡарабыҙмы, үлтерәбеҙме?» — тип һораған. Халыҡтары: «Үлтереп, бешерәйек», — тиҙәр. Шуға риза булып, Ҡарагөлөмбәт бейҙе бейек тау түшенә сығарып, энә менән һуйып, һөйәген ҡаҙанға һалып ҡуралар. Ит ҡайнап сығыу менән, малай сәтәкәй бармағын һурпаһына манып бер ялай ҙа: «Инде атайымдың ҡонон алдым, итен teләһә нишләтегеҙ!» — ти ҙә үҙ ғәскәре менән ҡайтып китә. Шунан бирле ошо бейек тауҙы Ҡурыуҙы* тауы тип атайҙар.

Күсәк бей, ҡайтыу ыңғайында бер йылға янына килеп еткәс, ҡыуанысынан ғәскәренең бер өлөшөнә ҡайтырға ҡуша. Шунлыҡтан был йылғаны Тарҡауалы* тип атайҙар. Тағы ла килә биргәс, Күсәк бей ғәскәренә: «Яҡын ауылдағылар ҡайтығыҙ, беҙ үҙебеҙ ҙә ҡайтырбыҙ!» — тип бик күп кешеләрен ҡайтарып ебәрә. Был урынды Тарҡанай яланы* тип атайҙар. Шулай итеп Күсәк бей юл буйында кешеләрен тарата-тарата Түрә хан янына ҡайтып етә.

Ҡыпсаҡтар Бөрйән һүҙенең ҡайҙан килеп сығыуын дөрөҫ һөйләмәйҙәр. Улар беҙҙе: «Беҙ һеҙҙе аҙаҡҡы яуҙа ҡырып бөтөргәнбеҙ, барлығы бер генә йән урманда ҡасып ҡалған. Уны әйҙә, ул бер кеше бер йән булып ҡалһын тип, ҡалдырғанбыҙ. Ана шунан «бер йәндән» сығып үҙгәртеп «бөрйән» тип атайбыҙ», тиҙәр. Был улай түгел. Дөрөҫө былай: Олатабыҙ ҡулға алынғанда, «ҡуйығыҙ, юҡ менән булмағыҙ, мин бер кеше өсөн булышмағыҙ», — тигән. Уны, шуның һүҙҙәренән сығып, «бер оло кешебеҙ юғалған» һүҙенән сығып, беҙҙе «бөрйән» тип йөрөтәләр.

Бына бөрйән, ҡыпсаҡ ауылдарының исемдәре ошондай ваҡиғаларҙан килеп сыҡҡандар.



## ШАРТЛЫ ҠЫҪҠАРТМАЛАР

**БД БӘФК ФФ** — Башҡорт дәүләт университетының башҡорт әҙәбиәте һәм фольклоры кафедраһының фольклор фонды.

**БР** — Башҡортостан Республикаһы.

**БХИ, 1973** — Башҡорт халыҡ ижады: Эпос, 2-се китап / Төҙ., баш һүҙ яҙыусы, аңлатмалар биреүсе Мөхтәр Сәғитов; яуап. ред. Ә И. Харисов. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1973.

**Вар.** — вариант.

**ҒА** — Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең ғилми архивы.

**Ғәр.** — ғәрәпсә.

**д.** — дело.

**ҡаҙ.** — ҡаҙаҡса.

**оп.** — опись.

**р-н** — район.

**рус.** — русса.

**ТТӘИ** — Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты.

**ф.** — фарсыса.

**ф. ф.** — фольклор фонды.

**һаҡл. б.** — һаҡлау берәмеге.

## АҢЛАТМАЛАР

Башта китапҡа ингән әҫәрҙең кем тарафынан, ҡасан, ҡайҙа, кемдән яҙып алыныуы, архив сығанағы йәки ҡульяҙманың башҡа һаҡланыу урыны, шифры, тәү башлап ҡайҙа баҫылыуы хаҡында мәғлүмәт бирелә.

Артабан текстағы тәртип һандары менән билдәләнгән һүҙҙәргә, строфаларға, мотивтарға, эпизодтарға асыҡлыҡ индерелә. Варианттарҙың айырымлыҡтары күрһәтелә, улар араһында текстологик сағыштырыу үткәрелә. Ошонда уҡ әҫәрҙе яҙып алыусының текстҡа ҡарата иҫкәрмәләре бирелә.

Текста йондоҙ менән билдәләнгән һүҙҙәргә, төшөнсәләргә, географик атамаларға аңлатмалар китаптың һүҙлек өлөшөндә бирелә (алфавит тәртибендә).

### АЛПАМЫША

1968 йылда М. М. Сәғитов Бөрйән районы Яңы Мәсет ауылында 76 йәшлек Өммөхаят Ҡолдәүләтованан яҙып алған. ҒА: ф. 3, оп. 63/6, 1—17-се биттәр. Башҡа варианттарҙан йөкмәткеһенең байыраҡ булыуы менән, сюжет төҙөклөгө, эпизодтарының, мотивтарының тулылығы һәм поэтик йәһәттән шактай өҫтөнлөгө менән айырыла, шуға ла төп вариант итеп һайланды. Тәүләп баҫылды: БХИ, 1973.

[1]Боронғо халыҡ ижадында тылсымлы бер ысул. Өс бөртөк ҡыл яндырып толпарҙы саҡырыу айырыуса киң таралған. Ҡыл яндырыу «Алпамыша» әҫәрендә *ҡульяулыҡ яндырыу менән алмашынған.*

[2]Таҙ төкөштөрөү — боронғо уйын төрө. Уйындың тәртибе буйынса, ике «таҙ» (гәҙәттә ике үҫмер) дүрт аяҡланып төкөшә — маңлайҙарын терәшеп, этешә. Ҡайһы яҡ, төкөшөп, сигендереп алып китһә, шул еңеүсе һанала.

### ВАРИАНТТАРЫ

1-се вариант. Мөхәммәтша Буранғолов үҫмер сағында Һамар губернаһы Быҙаулыҡ өйәҙе Үрге Ильяс ауылында (хәҙерге Ырымбур өлкәһе Люксембург районы) итексе Хәсән Буранғоловтан ишетеп отоп ала һәм 1938 йылда «Алтыйәшәр Алпамыша әкиәте» исеме менән ҡағыҙға төшөрөп,

Башҡортостан Тарих, тел һәм әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институтына тапшыра. ҒА: ф. 3, оп. 12/18, 127—132-се биттәр. Баҫыла: БХИ, 1973.

[3]«...батырлыҡ үңгәненә һалып алып китәләр» — ...батырлыҡ күрһәтеү арҡаһында ғына алып китәләр.

[4]Наҫыры ҡоромаһын — өмөтө һүнмәһен, күңеле ҡайтмаһын мәғәнәһендә. «Наһыр» ғәрәпсә нәһер (йылға) һүҙенән үҙгәртеп алынған булһа кәрәк.

[5]Барсынһылыуҙың атаһы был урында ни өсөндөр Байҙубай тип алынған. Тексттың башында Байдәүләт аталғанлыҡтан, бында ла шул исем ҡалдырылды.

2-се вариант. «Алпамыша» исеме менән С. Ф. Миржанова тарафынан 1971 йылда Башҡортостандың Күгәрсен районы Сәлих ауылында аҙ грамоталы Нәғимә Байғаҙаҡованан (1915 йылда тыуған) яҙып алынған. Яҙҙырыусы «Алпамыша»ны карһүҙгә, ҡобайыр әйтеүгә оҫта атаһынан бала саҡта уҡ отоп алған булған. Баҫыла: БХИ, 1973.

[6]Ҡайһы бер урындарҙа яҙҙырыусы Ҡара Туҡай тип тә аталған. Тексттың һәр урынында ла Ҡарыниле Ҡара Туҡай ҡалдырылды.

[7]Тексттың ҡайһы бер урындарында Алар хан тип әйтелгән булһа ла, бөтә осраҡта ла Әләр хан ҡалдырылды.

[8]Ҡайһы бер урында Барсин исеме Барсынһылыу тип аталып та киткән. Шул көйө үҙгәрешһеҙ ҡалдырылды.

3-сө вариант XIX быуаттың аҙаҡтарында тәү башлап А. Г. Бессонов «Алпамыша» эпосының әкиәтләшкән вариантын яҙып алған. Башҡортса ҡульяҙмаһы һаҡланмаған. А. Г. Бессонов тарафынан рус теленә әҙерләнгән, әммә ярты быуат үткәс кенә донъя күргән башҡорт халыҡ әкиәттәре йыйынтығында («Башкирские народные сказки». Под редакцией Н. К. Дмитриева. Уфа, 1941) баҫылған.

Сюжет һыҙығы төп варианттан артыҡ айырылмай. Шулай ҙа йөкмәткеһендә айырма ҙур ғына. Алпамыша менән Барсынһылыу тыумаҫ элек үк аталары тарафынан бер-береһенә әйттереп ҡуйылған булалар. Ләкин, егеттең атаһы Әйләр хан үлеү сәбәпле, был килешеү бойомға ашмай: Бүләр хан белеп ҡалған етем Алпамышаға ҡыҙын бирергә риза булмай.

Ҡолтаба Әйләр хандың көтөүсеһе итеп һүрәтләнә. Барсынһылыуҙың ата-әсәһенә Алпамышаны кейәү итеп таныуҙарын һорап үтенеү эпизоды юҡ. Алпамыша үҙе менерлек атты көтөүсе Ҡолтабанан ала. Ат өсөн үҙенең байлығынан, ырыуынан, Барсынһылыуынан баш тартыуы һәм аҙаҡ Ҡолтабаға биргән вәғәҙәһен кире алыу эпизоды һаҡланған. Барсынһылыуҙы көс менән яулап алыу өсөн һуғыш асҡан хандың исеме әйтелмәй. Алпамыша һуғыш майҙанына етмәҫ элек үк, йоҡо баҫыуын тойоп, йоҡоға тала. Дошмандар йоҡоло батырҙы тәрән соҡорға ауҙаралар, ә уның атын таш һарайға ябып ҡуялар. Ҡыр ҡаҙҙары аша тыуған иленә сәләм-хат ебәреү һаҡланған. Алпамыша зинданда ҡурай түгел, ә думбыра уйнай (соҡорға ел осортоп төшөргән таҡтанан думбыра яһап ала). Ошо думбыра ярҙамында ул хан ҡыҙҙарының иғтибарын ҡарата һәм тотҡонлоҡтан ҡотола.

Алпамышаның әсирлектән ҡасыуы һәм уны ҡыуа сыҡҡан ғәскәр менән көрәшеүе бик үҙенсәлекле хикәйәләнә: батырҙың ҡасҡанлығын белеп, хан уның артынан бик күп ғәскәр ебәрә. Хан ғәскәре Алпамышаны бейек тау

түбәһендә ҡыуып етә. Улар батырға уҡ яуҙыра башлайҙар. Алпамыша үҙенә атылған уҡты бөрәм-бөрәм тотоп алып һындыра ла утҡа ташлай. Шулай ул үҙенә аш бешерә. Ашап туйғас ҡына һуғыша башлай. Алпамыша бер йыуан уҫаҡты тамыры-ние менән йолҡоп ала ла хан ғәскәрен ҡыра.
Көтөүсе ҡиәфәтендә туйға ҡайтып төшкән Алпамышаны таныу эпизодында үҙенсәлек бар: Барсынһылыу, уның ата-әсәһе көтөүсенең түбәтәйен алып, түбәһендәге алтын йондоҙ буйынса Алпамышаны танылйҙар. Барсынһылыуҙы алырға йөрөгән Ҡолтабаны үлтереү ваҡиғаһы ла икенсерәк: уны ҡырҡ тыу бейә ҡойроғона бәйләп өҙгөләп үлтерәләр. Әҫәр икенсе тапҡыр туй үткәреүҙе һүрәтләү менән тамамлана.

4-се вариант. «Алпамыша» исеме менән Әхмәт Исламғолов тарафынан 1939 йылда Башҡортостандың Краснокама районында яҙып алынған. Әҫәрҙең ҡайһы ауылда һәм кемдән яҙып алыныуы хаҡында мәғлүмәттәр бирелмәгән. ҒА: ф. 3, оп. 12/247, 174—182-се биттәр. Текст һирәкләп шиғыр аралашып киткән прозанан тора. Әҫәрҙең сюжеты төп вариантҡа яҡын. Айырма ҡайһы бер персонаждар исеменә, айырым деталдәргә, мотивтарға ҡайтып ҡала. Эпостың экспозиция өлөшөндә ваҡиғаларҙың «борон заманда Урал тауында Аҡбай батша менән Ҡарабай батша ерендә» барғанлығы әйтелә. Башҡа варианттарҙан айырмалы рәүештә, ике батша дошманлашып йәшәйҙәр. Ҡарабай батша ҡыҙы Барсынһылыуға Аҡбай батша улы Алпамышаға кейәүгә сығырға тәүҙә ризалыҡ бирмәй. Ул нисек булһа ла икенсе батша улына кейәүгә бирмәк була, әммә Барсынһылыу атаһы теләгәненә ҡаршы төшә, үҙенең шартын ҡуя. Бында ла, шарт буйынса, Барсынһылыуҙы еңгән батыр ғына үҙенең кейәүе булырға тейеш була. Алпамыша Барсынһылыуҙы еңә. Ләкин Ҡарабай уны кейәү итеп танымай. Шул сәбәпле Барсынһылыу Алпамыша батшалығына барып никахһыҙ торорға мәжбүр була.

Ул атаһынан яңынан рөхсәт һорағас ҡына ризалыҡ ала. Тик туй барған ғына ваҡытта Барсынһылыуҙы улына алып бирмәк булып та ниәтенә ирешә алмаған бер батша Ҡарабайға һуғыш аса. Алпамышаның һуғышҡа сығыу, йоҡоло килеш әсиргә эләгеү, зинданда думбыра яһап уйнау, батша ҡыҙҙарын әүрәтеп, улар ярҙамында әсирлектән ҡотолоу эпизодтарында төп варианттан айырма юҡ тиерлек. Был вариантта Алпамыша менән бер үк ваҡытта икенсе таш һарайға уның толпарын да бикләп ҡуялар. Толпарҙың ҡолағына, Алпамышаның тауышын ишетмәһен өсөн, ҡурғаш иретеп ҡоялар. Алпамыша юҡлыҡтан файҙаланып, Барсынһылыу ҡулына дәғүә итеүсе булып Аҡбай батшаның вәзире Ҡолтаба һүрәтләнгән. Ә. Исламғолов яҙып алған вариант Фазыл Юлдаштан яҙып алынған үзбәк дастаны «Алпамыш» вариантына бик яҡын тора.

5-се вариант. Сәғит Мирасов тарафынан яҙып алынған һәм «Башҡорт бейҙәре һәм хандары миҙгелендәге матур әҙәбиәттән үрнәктәр» исеме менән «Сәсән» журналының 1928 йылғы 11—12-се һанында баҫылған. Текст проза менән шиғырҙан тора. Ҡульяҙма һаҡланмаған, ҡасан, ҡайҙа кемдән яҙып алыныуы хаҡында ла мәғлүмәттәр юҡ. Вариантта һүрәтләнгән ваҡиғаларҙың тарихи ерлеге күрһәтелмәй. Сюжет байтаҡ ҡыҫҡартылған.

Балалары тыуғас та ике дуҫтың ҡоҙа булышырға вәғәҙәләшеү эпизоды юҡ. Алпамыша бей улы тип күрһәтелә. Барсынһылыуҙы матурлығын иде-

аллаштырыуға ҙур иғтибар бирелә. Барсынһылыуҙың тауҙан таш тәгәрәтеүе, уның Алпамышаны кейәү итеп таныуҙарын һорап ата-әсәһенә мөрәжәғәт итеүе, шулай уҡ Алпамышаның дошмандарға ҡаршы көрәше, әсиргә эләгеү күренештәре бында юҡ. Төп иғтибар Алпамышаның Барсынһылыуҙы көрәшеп еңеп, үҙенә кәләш итеп алыныуын хикәйәләнеүгә бирелгән.

6-сы йыйылма вариант. Ә. Н. Ҡирәев тарафынан төҙөлгән һәм беренсе башлап 1956 йылда «Әҙәби Башҡортостан» журналында (№ 8) баҫылған. Эпостың төрлө варианттарын билдәле бер күләмдә эшкәртә бирәп берләштерелгән был йыйылма текст артабан «Башҡорт халыҡ ижады»ның 2-се томына индерелгән (Өфө, 1959).

7-се вариант. 1960 йылда Ә. Н. Ҡирәев тарафынан Ырымбур өлкәһе Ново-Сергеев районы Мерәс ауылында 65 йәшлек Хәтирә Селәүсенованан яҙып алынған. FA: ф. 3, оп. 12/3, 19—27-се биттәр. Текст шиғыр менән проза аралашыуынан тора.

Әҫәрҙә ике дуҫтың балалары тыумаҫ элек үк ҡоҙалашырға вәғәҙәләшеү мотивы урын алмаған. Барсынһылыу менән Алпамыша аталарының исемдәре аталмай. Алпамышаның бала саҡтан уҡ ғәҙәттән тыш батыр булыуы һыҙыҡ өҫтөнә алына. Батыр егет ҙур ташты тау башына тибеп мендерә, уҡ менән алтын балдаҡ аша ата, Барсынһылыуҙы көрәшеп еңә. Ошо өс шартты үтәүенә ҡарамаҫтан, ҡыҙ яғындағылар уны кейәү итеп ҡабул итмәйҙәр. Шул сәбәпле Барсынһылыу менән Алпамыша тауға китеп йәшәргә мәжбүр булалар.

Алпамышаның әсиргә төшөү эпизодында бер аҙ айырма бар. Батыр йоҡлап ятҡан мәлдә дошман килеп сыға. Барсынһылыуҙың күҙ йәше Алпамышаның битенә тәгәрәп төшөп, көйҙөрөп ала, ул уянып китә. Ул, тора һалып, дошман ғәскәрен ҡыйратып ташлай. Шунан һуң тағы йоҡоға тала һәм әсиргә эләгә. Зиндандан ул хан ҡыҙҙары ярҙамында ат ҡойроғона йәбешеп сыға. Алпамышаның үҙен оҡшатмаған көтөүселәрҙе, шулай уҡ яуыз Ҡолтабаны үлтереү эпизодтары бирелмәгән.

8-се вариант. «Алпамыша» исеме менән 1960 йылда Н. Д. Шоңҡаров тарафынан Ырымбур өлкәһе Ново-Сергеев районы Мерәс ауылы 50 йәшлек Төхфәт Сөләймәновтан яҙып алынған. FA: ф. 3, оп. 21/3, 26—34-се биттәр. Текста шиғыр менән проза аралашып килгән. Әҫәр сюжет һәм йөкмәткеһе менән төп вариантҡа бик яҡын. Үҙенсәлекле күренештәр түбәндәгеләргә ҡайтып ҡала. Барсынһылыу менән Алпамышаның аталарының исеме — Күсәр хан менән Күсмәҫ хан. Алпамыша менән Барсынһылыу бер көндө тыуған. Алпамыша тау башынан Барсынһылыу тәгәрләткән ҙур ташты кире тибеп ебәрә; тәгәрәүҙән ҡупҡан ғәрәсәттән һауаға осоп киткән Барсынһылыуҙы, ергә төшөп имгәнеп ҡуймаһын, тип Алпамыша тотоп ала. Шунан һуң ғына Барсынһылыу үҙенең еңелгәнлеген һәм батырға бирелгәнен белдерә. Ҙур ғәскәр менән яуға сыҡҡан хандың исеме — Әстрәхан-Күстерхан. Алпамыша, ике пар үгеҙ егеп, дошман ғәскәренә ҡаршы көрәшкә сыға. Бер пар үгеҙ егелгән арбаға өс уғын һала һәм бер малайҙы ултырта. Өс уғын берәм-берәм атып, дошман яуын ҡыйрата.

Һуғыш бик ҡаты була, Алпамышаның ҡылысы тупарланып бөтә, ул бик ныҡ арый. Хәлһеҙләнгән батырҙы Әстрәхан-Күстерхандың бәһлеүәндәре,

арҡан менән бәйләп, тәрән соҡорға ташлайҙар. Был ваҡытта Алпамышаның йоҡоға талыу эпизоды әсиргә эләккәндән һуң була. Батырҙың тыуған иленә ҡайтыуы, ҡатынының туй мәжлесендәге бәйгеләрҙә ҡатнашыу эпизодтары төп варианттағыса. Төхфәт Сөләймәнов вариантында Алпамышаның үҙе юҡта улы тыуыуы әйтелә.

9-сы вариант. «Алтыйәшәр Алпамыша» тигән исем менән 1960 йылда С. Ә. Галин тарафынан Ырымбур өлкәһе Переволцк районы Ғәбдрәфиҡ ауылында 60 йәшлек Нәзифә Байтимерованан яҙып алынған. ҒА: ф. 3, оп. 21/3, 36—42-се биттәр. Текст шиғыр менән проза ҡушылышында тора. Йөкмәткеһе төп вариантҡа яҡын торһа ла, ҡайһы бер мотивтарының бирелешендә үҙгәреш бар. Барсынһылыу батшаның, хандың, байҙың кәләшлеккә һоратыуына риза булмай, кейәүҙе үҙе һайлай. Ул майҙанда көрәш тотоп, Зәйтүн батырҙы, шулай уҡ түбәтәйлегенә һикһән, ә тунлығына туҡһан ҡуй тиреһе етмәгән ғәйәт ҙур кәүҙәле бәһлеүәнде еңә. Барсынһылыу, аҙаҡ килеп, алтыйәшәр Алпамышанан еңелә һәм уның ҡатыны булып ҡала.

Батырҙың менгегә ат һайлауында яңылыҡ бар: Алпамыша атаһының йылҡы өйөрөндә үҙен күтәрерлек ат тапмай. Атаһының кәңәше буйынса, Ҡолтабаға бара. Алпамыша, йылҡы өйөрөнә сығып, атты һыртына ауыр ҡулын һалып һынай. Ҡулын күтәрә алған йылҡыны һайлап ала. Батырҙың әсирлеккә төшөү эпизодында үҙенсәлек бар: Алпамыша ҡорос кейемдәрен кейеп, бер малайҙы эйәртеп, дошманға көрәшкә сыға. Һуғыш яланына етер алдынан, малайға дошман күренә ҡалһа, уятырға ҡушып, йоҡларға ята. Малай үҙе лә йоҡлап китә. Дошмандар килеп малайҙы үлтерәләр, ә Алпамышаны етмеш аршын тәрәнлегендә соҡорға ташлайҙар. Атын тимер һарайға бикләйҙәр. Алпамыша һигеҙ йыл тотҡонда йәшәй. Хан ҡыҙҙарын әүрәтеү өсөн, оҙон сәсенән эшләнгән скрипка уйнай.

10-сы вариант. «Алтыйәшәр Алпамыша» исеме аҫтында 1960 йылда С. Ә. Галин тарафынан Ырымбур өлкәһе Александров районы Ҡотос ауылынан 75 йәшлек Шәрәфи Юлыевтан яҙып алынған. ҒА: ф. 3, оп. 21/3, 46—53-сө биттәр. Текста шиғыр менән проза аралашып килгән.

Төп геройҙар — шул уҡ Алпамыша менән Барсынһылыу. Башҡа образдар — Алпамышаның атаһы (исеме әйтелмәй), һеңлеһе — Алмашикәр, ағаһы — Ҡолтаба, Барсынһылыуҙың атаһы — Йәһүд.

Алпамыша ғәйәт ҙур кәүҙәле бәһлеүән итеп һүрәтләнә: уның буйы алтмыш аршын, ә яурыны — алты аршын. Осо әләгеп ыштан төбөн йырта тип, ул эре ҡарағайҙарҙы тамыры менән йолҡоп, үҙенә юл һала. Үгеҙ егеп ер һөрөүсе кешеләрҙең бәләкәйлегенә аптырап ҡарап тора. Ул, һабансыларҙы үгеҙе-һабаны менән бергә ҡеҫәһенә һалып алып ҡайтып, атаһына: «Бынауы ваҡ ҡына ҡорттар ер ҡыртышын ашап йөрөйҙәр», — ти. Атаһы быларҙың кеше икәнлеген әйтә һәм уларҙы кире илтеп ҡуйырға ҡуша. Вариант Алпамышаның ата-әсәһен, һеңлеһен, үҙе юҡта тыуған улын Ҡолтаба йәберенән ҡотҡарыу, Ҡолтабаны ҡылған яуызлыҡтары өсөн үлтерергә хөкөм итеүе менән тамамлана.

11-се ҡыҫҡа вариант. 1960 йылда С. Ә. Галин тарафынан Ырымбур өлкәһе Александров районы Ҡотос ауылынан 63 йәшлек Рәхилә Теләкәеванан яҙып алған. ҒА: ф. 3, оп. 21/3, 43—45-се биттәр. Текст шиғыр менән прозанан тора.

Яҙмала сюжет бөтөнлөгө һаҡланмаған: ҡыҫҡа-ҡыҫҡа айырым өҙөктәрҙән генә торғанлыҡтан, йөкмәткe ниндәйҙер бер тулылыҡты дәғүә итмәй. Күп кенә образдар бөтөнләй төшөп ҡалған (Әйләр хан, Аҡкүбәк хан, йылҡысы Ҡолтаба, дошман хан ҡыҙҙары, Алпамышаның һеңлеһе һ. б.). Барсынһылыуҙы алам тип йөрөгән ике ирәбе бәһлеүән генә күренеп ҡала (исемдәре әйтелмәгән). Кейәү һайлау өсөн үткәрелгән ярышта көрәшеү юҡ. Батырҙың дошманға ҡаршы яуға сығыу, тәрән йоҡоға талыу күренештәре һүрәтләнмәгән. Шулай уҡ әсирлеккә төшөү мотивы һаҡланған. Алпамышаның ҡыр ҡаҙы аша ҡатынынан мөрәжәғәт рәүешендә хат яҙыу эпизоды бар. Аҙаҡта Алпамышаның тыуған иленә ҡайтыуы, Барсынһылыу менән осрашыуы хикәйәләнә.

12-се ҡыҫҡа вариант. 1960 йылда Н. Д. Шоңҡаров тарафынан Ырымбур өлкәһе Ново-Сергеев районы Мерәс ауылы Орҡиә Ильясованан (73 йәштә) яҙып алынған. FA: ф. 3, оп. 21/3, 35-се бит. Текст шиғыр һәм прозанан тора.

Етенсе варианттағы һымаҡ уҡ, эҙмә-эҙлекле сюжеты, ваҡиғаларҙың тейешенсә хикәйә ителеше юҡ. Бында ла күп эпизодтар, мотивтар төшөп ҡалған. Шулай уҡ Барсынһылыуға өйләнеү өсөн Алпамышаның ярлылығы кәртә булып тороуы ныҡ ҡына һиҙелеп тора.

Алпамышаның ирәбе һәм ғәйрәтле батыр булыуы ошо рәүешле тасуир ителгән:

Туҡһан ҡуйҙың тиреһе
Күкрәгенә тун булмаған;
Алты һарыҡтың тиреһе
Таҡыялай бүрек булмаған.
Ултырғанда уй емергән,
Таянғанда тау емергән.

13-сө вариант. «Алпамыша» исеме менән 1960 йылда Башҡортостандың Ейәнсура районы Үрге Муйнаҡ ауылы 80 йәшлек Мөслимә Ваһапованан яҙып алынған. Ҡульяҙма БДУ-ның (Башҡортостан дәүләт университеты) фольклор фондында 1960 йылғы экспедиция материалдары йыйылмаһында һаҡлана, күләме — 6 бит. Текста проза шиғыр менән аралашып килгән. Йөкмәткеһе менән төп вариантҡа яҡын. Көтөүсе Олтан исеме менән алынған. Барсынһылыу кейәү һайлау өсөн көрәш майҙанына атаһы теләге буйынса сыға. Алпамышаның әсирлеккә төшөүендә бер аҙ үҙгәреш бар: ул ултырған зинданға ҡарауылға бер әбей менән бер бабайҙы ҡуялар; һөтөн әсеп йән аҫрарһығыҙ тип, уларға бер кәзә лә бирәләр. Алпамышаның таш һарайға ябылған атының ҡолағына ҡурғаш иретеп ҡоялар. Зинданда ҡурай уйнау күренеше думбыра уйнау менән алмашынған. Аҙаҡта әсирлектән тыуған иленә ҡайтып килеүсе Алпамыша урманда утын йыйып йөрөгән ата-әсәһе менән осраша. Шунда ла көтөүсе Олтандың Барсынһылыуға өйләнергә йөрөгәнен белә.

14-се вариант. 1961 йылда С. Ғ. Сафуанов тарафынан Ырымбур өлкәһе Медногорск районы Беләүтамаҡ ауылы 65 йәшлек Лоҡман Юлдашевтан һәм уның 51 йәшлек ҡатыны Ғәйникамал Юлдашеванан яҙып

алынған. FA: ф. 3, оп. 21/3, 20-22-се биттәр. Текст эпизодтың ҡыҫҡаса йөкмәткеһен проза формаһында һөйләп биреүгә ҡала. Бында ла сюжет бөтөнлөгө юҡ, эпизодтарҙың эҙмә-эҙлеге һаҡланмаған. Йөкмәтке, нигеҙҙә, Алпамышаның Барсынһылыуҙы еңеп, үҙенә кәләш итеп алыуын бик ҡыҫҡа итеп хикәйәләүҙән тора. Алпамыша алтмыш йәшлек ярлы ҡарттың ҡырҡ биш йәшлек ҡатынынан тыуа. Социаль тигеҙһеҙлек бик асыҡ сағыла: Алпамышаның ата-әсәһе байға хеҙмәт итәләр, аслы-туҡлы йәшәйҙәр. Алпамыша менән Барсынһылыуҙың туй үткәреүен ишетеп, яу менән килгән дошман итеп ҡалмыҡ батшаһы һүрәтләнә. Әҫәр ҡалмыҡ ханының еңелеүе менән тамамлана. Был йәһәттән вариант эпостың үзбәк версияһына (Фазыл Юлдашевтан яҙып алынған вариантына) бик яҡын тора.

15-се ҡыҫҡа вариант. 1961 йылда С. F. Сафуанов тарафынан Саратов өлкәһе Перелюб районы Ҡунаҡбай ауылы 59 йәшлек Байрамғолованан яҙып алынған. FA: ф. 3, оп. 21/6, 23—25-се биттәр. Текст шиғыр менән проза аралашыуынан тора.

Был ҡыҫҡа ғына вариантта ла эпостың төп йөкмәткеһенә бәйле хәлваҡиғалар тасуир ителә. Үҙенсәлек итеп Алпамышаның менгегә ат һайлау эпизодындағы яңылыҡты күрһәтергә мөмкин. Алпамыша өсөн атты Барсынһылыу табып бирә. Ул Ҡолтаба ағаһынан батыр өсөн ат һорай, ат хаҡына көтөү-көтөү һыйыр, һарыҡ, дөйә малы бирмәк була. Атты алғас, ул вәғәҙә иткән малдарынан Ҡолтабаны көслөк менән баш тарттыра.

16-сы ҡыҫҡа вариант. 1961 йылда С. F. Сафуанов тарафынан Һамар өлкәһе Алексеев районы Ташбулат ауылынан 46 йәшлек Әхәт Дәүләтшиндан яҙып алынған. FA: ф. 3, оп. 21/6, 23—25-се биттәр. Текст шиғыр менән проза аралашыуынан тора.

Был варианттың да үҙенә хас үҙенсәлектәре бар. Барсынһылыуҙың исеме Балсынбатыр, ә уның атаһы Сарыбай аталған. Алпамышаның атаһы — Ҡарабай.

Алпамышаның һеңлеһе — башҡа күп кенә варианттарҙағыса — Ҡарлуғас; улы — Йәҙгәр.

Варианттың сюжетында «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосы менән бер ни тиклем уртаҡлыҡ бар. Алпамышаның әсиргә төшөүе бик үҙенсәлекле һүрәтләнә. Беренсе һуғышта уҡ ғәскәре ҡырылған Әйләрхан-Бүләрхан, Алпамышаға илсеһен ебәреп, бер аҙнаға һуғыштан туҡтатып тороуҙы һорай. Алпамыша батырҙарына, дошман килә ҡалһа, аяғына алмас ҡылысын сәнсеп уятырға ҡуша ла йоҡларға ята. Батырҙар, дошман яҡынлашҡас, Алпамышаның аяғына сәнсергә баҙнат итмәй, ҡасып китәләр. Әйләрхан-Бүләрхан йоҡлап ятҡан батырҙы тәрән соҡорға ташлата.

17-се вариант. «Алпамыша» исеме менән 1965 йылда яҙып алынған (ҡайҙа, кемдән, кем тарафынан яҙылғанлығы әйтелмәгән). БДУ-ның фольклор фондында, 1965 йылғы экспедиция материалдары йыйылмаһында һаҡлана (1-се киҫәк, 158—165-се биттәр).

Ҡулъяҙмала проза шиғыр менән аралаш килгән. Алпамыша менән Барсынһылыу (бында Барһынһылыу) аталарының исемдәре әйтелмәгән. Йылҡы көтөүсеһенең исеме — Ҡолтан. Алпамыша яңғыҙ ул түгел, үҙе кеүек үк ҙур кәүҙәле, бәһлеүән ағаһы бар. Ағаһының ҡатыны — Ҡарлуғас. Был вариантта ла Барсынһылыуҙың ата-әсәһе Алпамышаны кейәү итеп та-

нымаҫҡа тырыша. Әсәһе, ҡыҙының ир кеше эйәртеп ҡайтҡанына намыҫланып:

Тормаҫ атаң, тормаҫ атаң,
Бур-сыбарын менмәҫ атаң,
Билдәләрен дә быумаҫ атаң;
Йылан ҡатын, сая ҡатын,
Салпа ҡатын, тип әйтте, ти.

Башҡа варианттарҙан айырмалы рәүештә, бында Алпамышаның әсирлеккә эләккән ағаһын ҡотҡарыу өсөн юлға сығыу ваҡиғаһы бирелгән. Әсәһе, уны ебәрмәҫкә тырышып, юлға осрар һәр төрлө хәүефтәр һанап сыға. Әҫәрҙең был мотивы «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» хикәйәтендәге эпизодҡа бик оҡшаш. Алпамыша юлда осраған «бейек-бейек ҡаяларҙы ары ышырып, бире ышырып үҙенә юл ярып сыға», «Ҡарлуғас үтмәҫ урмандарҙы» ярып үтә. Яңылыҡ булып Алпамышаның үҙ ағаһы менән һуғышҡа сығыуы тора. Батырҙың яу менән килеүен белгән батша, үҙ ғәскәренең көсө етмәҫен һиҙенеп, Алпамышаға ҡаршы уның зинданда ятҡан ағаһын көрәшкә сығара. Көрәштә ике батыр бер-береһен еңә алмай һәм аҙаҡ, үҙҙәренең бер туған икәнлектәрен белеп, алышты туҡтата.

Алпамышаның әсирлеккә эләгеүе ваҡиғаһы икенсе төрлө аңлатыла. Ул ағаһын тыуған иленә оҙатҡандан һуң бер аҙ йөрөмәксе була. Алпамыша йоҡоға талыу менән (ә ул ете төн, ете көн йоҡлар булған) уның дошмандары бығаулайҙар һәм ятҡан еренә зиндан ҡоралар.

18-се вариант. «Алпамыша» исеме менән 1967 йылда Н. Д. Шоңҡаров тарафынан Башҡортостандың Йылайыр районы Мәксүт ауылында Сәлиха Бикбулатованан (1904 йылда тыуған) яҙып алынған. ТТӘИ ФФ. Шиғыр аралаш прозанан тора. Күләме машинкала 5 бит. Сюжеты нигеҙҙә бер үк булһа ла, әҫәрҙәрҙә байтаҡ үҙгәрештәр бар. Алпамыша балаһыҙ ҡартайған әбей менән бабайҙан тыуған тип әйтелә. Әбей ул тыуасағын төшөндә күрә. Ун ике айҙан һуң әбей сулпан йондоҙо кеүек янып торған күҙле, киң маңлайлы ул таба. Уға Алпамыша тип исем бирәләр. Ул йыл үҫәһен көн үҫә. Өс йәшендә ян яһап алып, ҡош-ҡортто ҡыра башлай. Ете-һигеҙ көнлөк сағынан эт, ыласын алып һунарға, балыҡҡа йөрөй. Бер кеше Алпамышаның балығын үҙенә алыу өсөн боҙ аҫтына сумып ярышыуҙы тәкдим итә. Һыу аҫтына сумып та боҙҙо тишеп сыға алмаһа, уның башы киҫелергә тейеш була. Алпамыша боҙҙо тишеп сыға, ә теге кеше уны булдыра алмай. Алпамыша килешеү буйынса тегенең башын киҫеп, тотҡан балығын үҙенә ала.

Был вариантта Алпамышаның Барсынһылыуҙы көрәшеп еңеүе һәм туй яһауы менән бөтә. Барсынһылыуҙы көс менән Алпамышанан тартып алырға тырышыу, шулай уҡ Алпамышаның һуғышҡа сығыуы, әсирлеккә төшөү күренештәре юҡ. Аҙаҡта Алпамышаның һунарға сығыуы һәм унда осраған өс булдыҡһыҙ һунарсыға бер ҡуян хаҡына осаларына саҡма тамға һалыу ваҡиғаһы бирелгән. Был өс кеше түңгәүер менән үҫәргән ырыуынан булған һәм шул хәлдән һуң саҡма тамға шул ике ырыу тамғаһы булып ҡалған, ти.

## ҠУҘЫЙКҮРПӘС

*(Т. Беляев версияһы)*

Башҡорт халҡында киң таралған «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосы, Тимофей Беляев тарафынан руссаға тәржемә ителеп, 1812 йылда Ҡазанда айырым китап булып баҫылып сыға. Китаптың русса тулы исеме: «Куз-Курпяч, башкирская повесть, писанная на башкирском языке одним курайчем и переведенная на российский в долинах гор Рифейских, 1809 года». Быға йөҙ йылдан артыҡ ваҡыт үтеүгә, 1961 йылдың аҙағында, Беляев тәржемәһендәге эпос икенсе тапҡыр баҫыла (Ҡарағыҙ: «Башкирия в русской литературе» том I. Составление, предисловие, библиографические справки, комментарии и библиография М. Г. Рахимкулова). Ә дүрт йылдан һуң ул, беренсе тапҡыр башҡорт теленә ҡайтарылып, «Ҡуҙыйкүрпәс» исеме менән баҫылып сыға (Әхнәф Харисов редакцияһында, русса баҫманан башҡортсаға ҡайтарыусылары: Баязит Бикбай менән Нәжип Иҙелбай, Өфө, 1965).

«Башҡорт халыҡ ижады»ның был томына «Ҡуҙыйкүрпәс»тең ана шул 1965 йылғы башҡортса баҫмаһы алынды. Ул баҫма киң ҡатлам уҡыусыларына тәғәйенләнгәнлектән, ҡайһы бер эпизодтар ҡыҫҡартыбыраҡ бирелгән. Ҡыҫҡартылған урындар томды төҙөүсе тарафынан башҡортсаға ҡайтарылып, текст тулы көйө индерелде. Баҫылды: БХИ, 1973.

«Ҡуҙыйкүрпәс»тең 1812 йылғы русса баҫмаһында, әҫәр башланып китер алдынан «Ҡурайсының һигеҙенсе ырыу улына арнау һүҙе» бирелгән. Был текст, 1965 йылғы башҡортса баҫмаһындағыса, аңлатмалар бүлегенә күсерелде. Сөнки арнауҙың туранан-тура эпос сюжетына бәйләнеше юҡ.

Бына ул «ҡурайсының һигеҙенсе ырыу улына арнау һүҙе»:

«Тартынмайынса ҡабул ит
Ошо яҙмаларымды.
Юҡҡа маҡтау, ярһаҡлыҡ
Тыуҙырманы уларҙы.
Был хикәйәтте яҙҙым мин,
Бәлки, ирмәк табырһың,
Башҡорттарҙы яратып,
Буш саҡ уҡып алырһың.
Уҡып ошо хикәйәтте,
Күтәрелһә күңелең,
Йәйрәп йәйҙә йөрөгәндәй,
Мин дә кинәнер инем.
Ата-баба һүҙҙәренән
Йыйып яҙҙым барын да,
Был хикәйәт һөйләп бирер
Ике батыр хаҡында.
Уларҙың ябай ҡылығын
Мин уйлап сығарманым.
Алсаҡ күңелдәрен дә
Мин буяп күрһәтмәнем.
Ҡурайсыға эйәреп,

Ҡәрәк ерҙә көйләнем;
Башҡорт күңелен күрәм тип,
Мәҙәк һүҙ ҙә һөйләнем.
Атаң һөйгән халыҡты
Мин һиңә һөйләп бирҙем,
Ул халыҡтың дуҫы ине,
Ошонан да артығыраҡ
Яратыуҙар юҡ ине.
Халҡым етегә бүленә,
Ете ырыуылы тип атала.
Һигеҙенсе ырыу мин тип
Өндәшәмен атаңа.
Алланың ожмахында ул
Рәхәтлеккә сумһын,
Ә һиңә аҡ батшанан
Оло бүләктәр булһын.
Олоғайған көндәреңдә
Үҙең дә ҡыуанырһың,
Тоҡомоң артып уғата,
Олатай ҙа булырһың.
Биләп торған йорт-ереңдә
Тыуыр йәне өс батыр,
Улар ҡалын имәндән ныҡ,
Сәскәнән булыр матур.
Улар һине һөйөндөрөп,
Намыҫ, даның булырҙар,
Аҡ батшаға тоғро булып,
Ил һағында торорҙар,
Өйөр йылҡың уйнаҡлап,
Ҡойроҡ сәнсеп торорҙар,
Ял ялбыратып сапҡанда,
Боланды ла уҙырҙар.
Мал-тыуарың ишәйер,
Ҡөрлөктә үҙенә тиң тоймай,
Ҡорот, ҡаймаҡҡа туймайҙыр,
Бирер батман-батман май.
Тин-төштәрең менән һин
Килгән саҡта йыйынға,
Иң һимеҙ йәш мал иттәре
Әҙерләнер һыйыңа.
Ергә сәскән ашлыҡтарың
Ишелешеп уңырҙар.
Бөгөнгө лә зарар күрмәй,
Йөҙәр бөртөк булырҙар.
Умарталарың күк ҡаплап,
Күс-күс бала айырыр,
Ҡәрәҙҙәрен шыплап тултырып,
Һиңә татлы бал бирер».

[9] Дөрөҫө ҡырғыҙ түгел, ә ҡаҙаҡ. Сөнки элек, Октябрь революцияһына тиклем, ҡаҙаҡтарҙы рәсми документтарҙа ла, телдә лә ҡырғыҙ, ҡырғыҙ-ҡайсаҡ йәки ҡыр ҡаҙаҡ тип атап йөрөткәндәр. «Ҡуҙыйкүрпәс»тә осраған ҡырғыҙ һүҙен бөтә ерҙә лә ҡаҙаҡ тип аңларға кәрәк.

[10] «Ҡуҙыйкүрпәс»тең 1812 йылғы баҫмаһында ауыл менән йәйләү атамалары икеһе лә бер мәғәнәлә ҡулланыла.

[11] **Мөхәммәт (570—632)** — ислам динен башлап ебәргән ғәрәп, дини тәғлимәт уны «һуңғы пәйғәмбәр» тип иғлан иткән.

[12] Элек ҡайһы бер урҙа ҡаҙаҡтары башҡорттарҙы истәк тип йөрөткәндәр.

[13] Табында иң хөрмәтле кешегә баш тоттороу борондан килгән йола.

[14] Башҡорт һәм башҡа төрки халыҡтар фольклорына һис кем еңә алмаҫ мифик януарҙың үлемесле урыны булып уның үксәһе һаналған. Былдай ышаныу боронғо грек мифологияһынан үк килә. «Илиада» поэмаһында, мәҫәлән, Парис Ахилды тик үксәһенә генә атып үлтерә алған.

[15] Һүҙ Көньяҡ Башҡортостан территорияһында татар-монгол яуына тиклем үк ойошҡан ете башҡорт ҡәбиләһе хаҡында бара.

[16] Башҡорт мифологияһында дейеү ише яуыз януарҙы үлтереп тә яндырмай ҡалһаң, унан яңылары ярала тип ҡаралған.

[17] Боронғо төрки халыҡтарҙа, шул иҫәптән башҡорттарҙа ла, үлгән кешене уба өйөп ерләү йолаһы булған. Эйәһе менән бергә ҡоралын, атын, шулай уҡ «тегe донъяла» кәрәге буласаҡ һауыт-һаба менән ашамлыҡтарҙы ла бергә күмә торған булғандар.

[18] Дини легендаларҙа күктәге Ҡош юлы Мөхәммәт алтын мөгөҙлө һарыҡ тәкәһе менеп үткән юл тип аңлатыла. Боронғо халыҡ аңындағы Ҡош юлының фольклорҙа «Алтын мөгөҙлө һарыҡ тәкәһе үткән юл» менән алмашыныуы дин йоғонтоһо менән һуңыраҡ килеп ингән күренеш булырға тейеш.

[19] Башҡорт ҡурайсылары — боронғо грек йырсылары кеүектәр. Борон, яуыз барлыҡҡа килгәнгә тиклем, грек йырсылары үҙҙәренең иҫтәлекле ваҡиғаларға бәйле батырҙарын маҡтап йыр сығарыр булғандар һәм уларҙы киләсәк быуынға ҡалдырғандар (Т. Беляев иҫкәрмәһе).

[20] **Искәндәр** — Александр Македонский (беҙҙең эраға тиклем 356—323 йылдарҙа йәшәгән) — боронғо донъяның атаҡлы полководецы, дәүләт эшмәкәре.

[21] **Батый** — Көнсығыш Европаны баҫып алған монгол ханы Бату (1255 йылда үлгән).

[22] **Аҡһаҡ Тимер** — Тимурленг, Тимерлан (аҡһаҡ булыуына ҡарап әйтелгән ҡушамат исем: ленг — фарсы телендә аҡһаҡ) — Урта Азияның илбаҫар әмире (1336—1405).

[23—24] Мосолман дине аңлатыуы буйынса, кешегә алла тарафынан һанаулы ғына ғүмер бирелгән, ашар-эсер ризығы ла (нәфәҡә) алдан билдәләнгән була. Үҙенә тейешле ризығы ашалып бөткәс, кешегә әжәл (үлем) килә тип ҡаралған.

[25] Элек башҡорттарҙа үлгән батырҙы тау башына мендереп уба яһап, йыш ҡына таш менән бурап күмеү йолаһы булған. Тау башына яһалған таш убалар һуңғы йылдарҙа ғына археологтар тарафынан Башҡортостандың таулы райондарында табылды.

[26] Ислам динен ҡабул иткән халыҡтарҙа кеше үлеүгә өс көн үткәс — өсөн, ете көн үткәс — етеһен, ҡырҡ көндән һуң ҡырҡын үткәреү йолаһы

урынлашҡан. Ошо көндәрҙә мәрхүмде иҫкә алып, рухын ризаландырыу өсөн мулла саҡыртып Ҡөрьән уҡыталар, табынға йыйылған кешеләргә хәйер тараталар.

[27]**Муйнаҡ аҡһаҡал** — легендаларҙа Үҫәргән ырыуы батыры. 1967 йылда СССР ФА Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты үткәргән фольклор экспедицияһы тарафынан яҙып алынған «Өмбәт батыр» легендаһында Муйнаҡ Өмбәттең улы, үҫәргән ырыуының данлы батыры итеп һүрәтләнә. Улар бер нисә тапҡыр ҡаҙаҡ, ҡалмыҡ баҫҡынсыларын ҡыйрата. Башҡортостандың Ейәнсура районында «Муйнаҡ» тигән тау һәм бер нисә ауыл бар. (Оло Муйнаҡ, Урта Муйнаҡ, Бәләкәй Муйнаҡ).

[28]«Ҡуҙыйкүрпәс»тең 1812 йылғы баҫмаһында Ҡуҙыйкүрпәс атының исеме «Йондоҙ юлаусы» тип бирелгән, башҡортсаға ҡайтарылғанда Йондоҙ ҡашҡа тип алынған.

[29]**Мәскәй** — башҡорт халҡының бигерәк тә әкиәт жанрында киң таралған мифик әбей образы. Ул, ғәҙәттә, кешеләргә дошманлыҡ ҡылып, өйҙә яңғыҙ ҡалған ҡыҙҙарҙың ҡанын һурып, балаларҙы ашап йөрөүсе итеп һүрәтләнә. Мәскәй «Ҡуҙыйкүрпәс»тә ыңғай образ итеп алынған.

[30]«Башҡорттар йыртҡыс януар үлтереүҙе егетлек һәм дан эше итеп иҫәпләгәндәр, януар ни тиклем көслөрәк һәм йыртҡысыраҡ булһа, уны үлтереүсегә шул ҡәҙәр ҙурыраҡ дан килгән» (Т. Беляев иҫкәрмәһе.)

[31]Тылсымлы көҙгө ярҙамында күрәҙәлек итеү, киләсәкте күреү бигерәк тә әкиәттәргә хас алым. Шулай ҙа ул эпос әҫәрҙәрендә лә осраштыра. Мәҫәлән, «Ҡуҙыйкүрпәс»тәге кеүегерәк тылсымлы көҙгө «Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙа бар (Унда Заятүләк Һыуһылыуҙың көҙгөһөндә күл ситендә ҡалған толпарын, эйәр ҡашында моңайып ултырған шоңҡарын, тыуғанүҫкән ерен күрә).

[32]Бөрйән, үҫәргән, тамъян, ҡыпсаҡ, бошмаҫ, ҡараҡыпсаҡ, түңгәүер — көньяҡ Башҡортостан территорияһында йәшәүсе башҡорт ҡәбиләләре. Әҫәрҙә ошо ете башҡорт ҡәбиләһе, йәнәһе, Ҡуҙыйкүрпәс ейәндәренән таралған тип аңлатыла.

[33]**Аҡ хан йәки аҡ батша** — Иван Грозный (1530 — 1584).

[34]**Ҡараһаҡал** — 1740 йылғы башҡорт восстаниеһы етәксеһе.

[35]**Аҡай** — Аҡай Күсемов — 1735—1736 йылғы башҡорт восстаниеһы етәкселәренең береһе.

[36]**Килмәк** — Килмәк Нурушев — 1735—1736 йылғы башҡорт восстаниеһы етәкселәренең береһе.

[37]**Батырша** — Батырша Алиев (1710—1762) —1755 йылғы башҡорт восстаниеһы етәксеһе.

[38]Был абзацта әйтелгәндәр, Мәскәйҙең башҡа тарихи күренештәрҙе аңлатҡаны кеүек үк, реаль ысынбарлыҡҡа тура килмәй. Батырша восстаниеһында бөрйән башҡорттары менән бергә башҡа ырыу башҡорттары, хатта бүтән халыҡтар (удмурт, мари) ҙа ҡатнашҡан.

[39]Бында 1773—1775 йылғы крәҫтиән һуғышында башҡорттарҙың Салауат Юлаев етәкселегендә ҡатнашыуҙары иҫтә тотола.

[40]Бында һүҙ Яйыҡ буйында нығытмалы ҡәлғәләр, линиялар төҙөүсе генерал-губернатор И. И. Неплюев тураһында бара.

[41]Ырымбур ҡалаһы иҫтә тотола.

[42]**Һарттар** — элек үзбәктәрҙе шулай атай торған булғандар.

[illegible] татарҙарынан булған руханиҙар һәм сауҙагәрҙәр [illegible]

[illegible] күҙе бер ниндәй тылсымға ла, сихырға ла бирелмәй, [illegible] (Т. Беляев иҫкәрмәһе.)

[illegible] бер йылғанан һыу эскән егет менән ҡыҙҙың күңел[illegible] уйлағандар» (Т. Беляев иҫкәрмәһе.)

## ВАРИАНТ

Был версияның хәҙергә яҙып алынған берҙән-бер варианты «Ҡорман батыр» исеме менән 1966 йылда Н. Д. Шоңҡаров тарафынан Башҡортостандың Архангель районы Бәпес ауылында 56 йәшлек Зәкиә Ҡотлоәхмәтованан яҙып алынған. FА: ф. 3, оп. 61/2, 8—11-се биттәр. Текст прозанан һәм ике строфа шиғырҙан тора. Баҫылды: БХИ, 1973.

Вариант йөкмәткеһе, тамамланышы менән төп вариантҡа яҡын тора. Персонаждарҙың бирелешендә, исемдәрҙә, ҡайһы бер эпизодтарҙа айырма бар.

Һунарға сығыусы ике дуҫтың исемдәре әйтелмәй. Төп геройҙар Ҡуҙыйкүрпәс менән Баян тип атамайынса, Ҡорман батыр менән Зөлхизә тип исемләнгән. Атаһы үлгәндән һуң, Ҡорман батыр ярлыланып ҡала. Ҡорманға ҡыҙын бирмәҫ өсөн, Зөлхизәнең атаһы Ҡаф тауы артына бөтә йәйләүе менән күсеп китә.

Т. Беляев вариантынан айырмалы рәүештә, егеттең ҡыҙ тураһындағы серҙе әсәһенең имсәгенә эҫе бутҡа баҫып әйттереү эпизоды бар.

Изгелекле Мәскәй образы һынсы ҡарсыҡ образы менән алмашынған. Һынсы ҡарсыҡ Ҡорман батырға аҡыл өйрәтә. Бында тылсымлы көҙгө ярҙамында көрәшәлек итеү һаҡланмаған.

Хан улы Алтан Ҡарағол образы менән алмашынған. Ҡарағол Зөлхизәне алырға дәғүә итә. Вариантта һүрәтләнгән туй уҡ атыу, йүгерешеү, ҡурай тартыу ярыштары менән үткәрелә. Ҡорман батыр һәр ярыш төрөнән еңеүсе булып сыға һәм йәштән әйттерелгән Зөлхизәне ала. Зөлхизә атаһының егеттән ҡотолорға тырышыуы һаҡланған. Ул ҡаты йоҡлап ятҡан Ҡорман батырҙы Ҡарағол ярҙамында үлтерергә килә. Ҡорман батырҙың аты, хәүефте аңлатып, егеттең танауына яҡын килеп бышҡыра. Шунан ғына егет *уянып китә. Ул* Ҡарағолдо үлтерә, ә ҡайныһын Зөлхизә хаҡына ғәфү итә. Вариант Ҡорман батыр менән Зөлхизәнең илдәренә ҡайтып, иҫән-һау бергә донъя көтөүҙәре менән бөтә.

## ҠУҘЫЙКҮРПӘС МЕНӘН МАЯНҺЫЛЫУ

*(F. Сәләм версияһы)*

«*Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу*» әҫәренең Ҡоншаҡ версияһына ҡараған был төп вариантты 1938 йылда күренекле шағир F. Сәләмов үҙенең әсәһе Өммөгөлсөм Fәлимованан (1891 йылда тыуған) Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ районы Тәгеш ауылында яҙып алған. Тәүҙә 1939 йылда «Башҡорт халыҡ әкиәттәре» китабында, икенсе тапҡыр «Башҡорт халыҡ әкиәттәре»

йыйынтығында (Өфө, 1956), өсөнсө мәртәбә «Башҡорт халыҡ ижадының» 2-се томында (Өфө, 1959), һәм 1973 йылда баҫылды (БХИ, 1973)

Өммөгөлсөм Ғәлимованың варианты Ҡоншаҡ версияһын тәшкил иткән башҡа 12 варианттан үҙенең ҙур күләмле булыуы, эпизодтарҙың төрлөлөгө һәм художество йәһәтенән камиллығы менән айырыла. Шуның өсөн ул төп вариант итеп алынды ла.

Ҡоншаҡ версияһына ҡараған варианттарҙың Т. Беляев версияһынан төп айырмаһы шунда: уларҙа Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыуҙың яҙмышы фажиғәле үлем менән бөтә.

[46]Ике күлдең йәки диңгеҙҙә йөҙөп йөрөмәле ике ҡаяның юлсыны һағалап тороуы һәм йоторға итеүе фольклорҙа элек-электән киң таралған. Мәҫәлән, боронғо грек эпосы «Одиссея»ла йөҙөп йөрөүсе Сцилла менән Харибда тигән ике ҡаяның үтеп барыусы карап тарҙы йотоуҙары тураһында әйтелә. Эпостың төп геройы Одиссей, күгәрсен осороп ебәреп, ҡаялар шул күгәрсенде ҡыуып йөрөгән арала үҙенең юлдаштары менән хәүефле урынды үтеп китә. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»ҙа был мотив икенсерәк аңлатыла. Егет, ике күл янына килеп еткәс, береһенең һыуын икенсеһенә ҡоя. Был эшкә күлдәр яуап итеп: «Бик ҙур рәхмәт, егет. Ете йыл бергә ҡушыла алмай зарығып ята инек, бик һәйбәт иттең әле. Үҙеңә лә шулай Маянһылыу менән ҡушылырға яҙһын», — тип ҡалалар.

## ВАРИАНТТАРЫ

1-се вариант. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» исеме менән 1959 йылда Ә. Н. Кирәев тарафынан Курган өлкәһе Сафакүл районы Һарт-Әптерәш ауылында 118 йәшлек Бәҙерниса Әфләтунованан яҙып алынған. FA: ф. 3, 32/31, 56—76-сы биттәр. Текст шиғыр менән проза ҡушылыуынан тора.

Әҫәрҙең сюжеты төп вариантына яҡын, эпизодтарҙың эҙмә-эҙлелегендә ҙур үҙгәрештәр һиҙелмәй. Шулай ҙа түбәндәге үҙенсәлектәр күҙгә ташлана: ике дуҫ хандың исемдәре Т. Беляев вариантындағыса, Ҡарабай менән Һарыбай тип аталған. Маянһылыуҙың ике ағаһы барлығы әйтелә. Әҫәрҙә Ҡуҙыйкүрпәстең бала сағы, уйында ҙур тиҫтерҙәрен ҡыйратып алып барыуы бик ентекле тасуирлана. Әсәһе, юлға әҙерләнгән Ҡуҙыйкүрпәсте китмәҫкә өгөтләй, уның юлына кәртәләр ҡуясағын белдертеп, түбәндәге һамаҡтарҙы әйтә:

Меңәр ҙә меңәр йылҡың бар, балам,
Уларҙы ҡайҙа итерһең, балам,
Итерһең, балам?
Меңәр ҙә меңәр ҡуйың бар, балам,
Уларҙы ҡайҙа итерһең, балам,
Итерһең, балам?
Меңәр ҙә меңәр һыйырың бар, балам,
Уларҙы ҡайҙа итерһең, балам,
Итерһең, балам?
Меңәр ҙә меңәр кәзәң бар, балам,
Уларҙы ҡайҙа итерһең, балам,
Итерһең, балам?

Унда ла ун бүре дәл булыр, балам,
Унан да ҡалай үтерһең, балам,
Үтерһең, балам?
Ҡырҙа ла ҡырҡ бүре дәл булыр, балам,
Унан да ҡалай үтерһең, балам,
Үтерһең, балам?
Минең дә аҡ һөтөм аҡ диңгеҙ булыр, балам,
Унан да ҡалай үтерһең, балам,
Үтерһең, балам?
Минең дә күҙ йәшем күк диңгеҙ булыр, балам,
Унан да нисек үтерһең, балам,
Үтерһең, балам?
Минең дә ҡара сәсем ҡара урман булыр, балам,
Унан да ҡалай үтерһең, балам,
Үтерһең, балам?

Тылсымлы ҡаршылыҡтарҙы Ҡуҙыйкүрпәс толпары ярҙамында үтеп сыға. Әммә әсәһе үлеп ҡала. Сөнки, боронғо ышаныуҙар буйынса, батыр алдында тылсымлы көстәр, сихри кәртәләр еңелә, емерелә торған булһа, тылсым көсө шуны ойоштороусының үҙенә төшөр тип ҡаралған.

Әҫәрҙең финалында мөһим бер үҙенсәлек бар. Маянһылыу Ҡуҙыйкүрпәстең ҡырҡылған башын муйынына кире тегеп ҡуя һәм алланан ете көн, ете төнгә егеттең терелеүен үтенә. Уның теләге ҡабул була: Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу ете көн, ете төндө диңгеҙ буйында уйнап-көлөп үткәрәләр. Ҡуҙыйкүрпәс яңынан үлгәс тә Маянһылыу хәнйәр менән үҙен-үҙе сәнсә.

2-се вариант. «Баян менән Ҡуҙыйкүрпәс» исеме менән 1930 йылдарҙа яҙып алынған. Әҫәрҙе яҙып алыусы, шулай уҡ уны яҙҙырыусы хаҡында мәғлүмәттәр юҡ. ҒА: ф. 3, оп. 32/31, 44-55-се биттәр. Текст проза менән шиғыр аралашыуынан тора.

Әҫәр сюжеты образдар бирелеше, композицияһы яғынан төп вариантҡа яҡын тора. Үҙенсәлектәр ҙур булмаған деталдәргә, персонаждар исеменә, ҡайһы бер эпизодтар бирелешенә генә ҡайтып ҡала. Экспозиция өлөшөндә һүрәтләнгән ике дуҫ Күсәр хан менән Күсмәҫ хан исеме менән аталған. Ҡуҙыйкүрпәсте үлтереүсе бында Ҡарағәрәп тип аталған. Үҙенсәлектәр нигеҙҙә әҫәрҙең һуңғы өлөшөндә һиҙелә. Баянһылыу Ҡуҙыйкүрпәсте баҡсала йоҡлап ятҡан килеш осрата һәм таный. Ул егетте күҙ йәшен тамыҙып уята. Баянһылыу Ҡуҙыйкүрпәсте һарайында йәшереп тота. Балалары тыуғас ҡына сер асыла. Ҡуҙыйкүрпәсте үлтереү өсөн, Күсәр хан туй яһаған була. Баянһылыу хәйләһе менән үлемдән ҡасып киткән Ҡуҙыйкүрпәс хәүефһеҙ урынға барып етмәй, баҡсала ятып йоҡлай. Күсәр хан Ҡуҙыйкүрпәсте эҙләп таба, ләкин, уның һылыулығына һоҡланып, үлтерергә баҙнат итмәй, ҡайтып ҡыҙын бирмәк була. Әммә Баянһылыуға күҙе төшөп йөрөгән Ҡарағәрәп баҡсала йәшенеп ҡалып егетте үлтерә.

Әҫәрҙә Ҡуҙыйкүрпәстең аты Баянһылыуға хужаһының үлтерелеүен хәбәр итә. Бында ла Баянһылыуҙың теләге, ялбарыуы арҡаһында егет өс көнгә терелеп тора. Өс көндән һуң Баянһылыу ҙа үлә. Ҡуҙыйкүрпәстең аты соҡор ҡаҙып Баянһылыуҙы күмә, етем ҡалған баланы егеттең әсәһенә алып ҡайта.

3-сө вариант. «Ҡуҙкүрпәс» исеме менән Ғәйнан Әмири тарафынан 1939 йылда Башҡортостандың Хәйбулла районы Аҡъяр ауылында урта мәктәп уҡытыусыһы Ғәбиҙә Ҡаипованан яҙып алынған. ҒА: ф. 3, оп. 12/203, 3—7-се биттәр. Текст проза һәм бер строфа шиғырҙан тора.

Персонаждарҙың исемдәрендә бер аҙ үҙенсәлек күренә: һунарға сыҡҡан ике дуҫтың береһе Ҡарабай, икенсеһе Һарыбай аталған. Төп геройҙарҙың исемендә лә ҙур булмаған айырма бар: Ҡуҙыйкүрпәс был вариантта Ҡуҙкүрпәс тип, ә Маянһылыу Миңнебаян тип алынған. Миңнебаян алмаҡ булып йөрөгән егет Ҡырҡолас исемләнгән.

Әҫәрҙең сюжеты нигеҙҙә төп варианттағыса булһа ла унда ҡайһы бер эпизодтарҙа, деталдәрҙә айырма һиҙелә. Мәҫәлән, башҡа варианттарҙан айырмалы рәүештә, бала саҡта уҡ йәрәшелгән Миңнебаяндың ҡайҙа киткәнлеген әйттереү өсөн Ҡуҙкүрпәс эҫе ҡурмасты әсәһенең түшенә баҫа.

Әҫәрҙә әсәнең Ҡуҙкүрпәсте Миңнебаян артынан ебәрмәҫкә тырышыуын һүрәтләү ҙур урын алған, унда улының юлына ҡуйған тылсым кәртәләре лә күберәк. Юлға сығырға йөрөгән улына: «Балам, күҙ йәшем — аҡ даръя, имсәгемдең һөтө күк даръя булыр, түшем заяташ булыр, сәсем ҡара урман булыр, ҡул-аяғым бармаҡтары ҡырҡ бүре булыр», — ти. Егет бер мәртәбә ошо кәртәләрҙе үтә алмай кире ҡайта. Ул икенсе тапҡырында ғына, аты өйрәтеүе буйынса, тылсым кәртәләре аша сыға.

Алдағы варианттарҙан айырмалы рәүештә, Ҡуҙкүрпәс Һарыбай йәйләүенә, ҡуй көтөүсеһен үлтереп, уның кейемен кейеп килә. Миңнебаян туйында барған көрәштә Ҡырҡколасты еңә. Әммә бында Ҡуҙкүрпәс менән Миңнебаяндың туйҙарын үткәреү эпизоды юҡ. Шулай ҙа Ҡуҙкүрпәсте мәкерле рәүештә үлтереү күренеше бар. Финалда ҙур ғына яңылыҡ бар: үлеп ятҡан Ҡуҙкүрпәс янына башына салма ураған, аҡ сапан кейгән кеше килеп, уны таяғы менән төртөп терелтә. Ҡуҙкүрпәс унан өс көн, өс төн ғүмер һорай. Ул Миңнебаян менән өс көн, өс төн серләшеп ултыра. Ошо ваҡыт үтеү менән икеһе лә үләләр һәм береһе ҡыҙыл, икенсеһе һары гөлгә әүерелеп, үрелеп үҫеп китәләр. Вариантта әкиәт жанрына хас булған деталдәр ҙә юҡ түгел. Мәҫәлән, алыҫ сәфәргә сығырға йыйынған Ҡуҙкүрпәстең әсәһенән «туҙмаҫ кейем тектереп», «бөтмәҫ аҙыҡ бешертеп алыу» деталдәре әкиәт традицияларынан килә.

4-се вариант. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» исеме менән 1955 йылда талибә Йәмилә Хәлимова тарафынан Башҡортостандың Баймаҡ районы Моҡас ауылында Мөхтәрәмә Яҡшымбаеванан яҙып алынған. (Йәше күрһәтелмәгән). БДУ-ның фольклор фондында, «төрлө йылдарҙа йыйылған материалдар томы»нда һаҡлана. Текст прозанан тора. Вариант асылда төп варианттың ҡыҫҡартылған (ике битлек) яҙмаһы. Айырма бер генә деталдә күренә: Ҡуҙыйкүрпәс һыуға китеп барыусы еңгәһенең күнәген яра ата. Асыуы килгән еңгәһе: «Әгәр яҡшы булһаң, Маянһылыу ҙа ташлап китмәҫ ине», — тип, йәрәштерелгән ҡыҙы барлығын әйтә һала.

5-се вариант. 1959 йылда Ә. Н. Кирәев тарафынан Курган өлкәһе Сафакүл районы Һарт-Әптерәш ауылында 118 йәшлек Бәҙерниса Әфләтуновананан яҙып алынған. ҒА: ф. 3, оп. 21/1, 1—15-се биттәр. Текст шиғыр менән проза ҡушылышынан тора.

Әҫәрҙең сюжеты төп вариантка яҡын, эпизодтарҙың эҙмә-эҙлегендә ҙур үҙгәрештәр һиҙелмәй. Шулай ҙа унда түбәндәге үҙенсәлектәр күҙгә ташлана.

Ике дуҫтың һунарҙа балалаған болан менән осрашыуы юҡ. Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу аталарының исемдәре үҙгәртелгән: Күсмәҫ хан Ала Борған тип, ә күсәр хан Ҡара Борхан тип аталған. Маянһылыуҙың исеме ҡыҫҡартылып, Маян тип кенә бирелгән. Маянды алырға йөрөгән ҠараҒол образы бирелмәгән. Уның урынына Маяндың һайыҫкандан һаҡ еңгәһе һүрәтләнгән. Ҡара Борхандың күсеп китеүенә сәбәп булып атаһы үлгәндән һуң ярлы булып ҡалған Ҡуҙыйкүрпәскә ҡыҙын бирергә теләмәү тора.

Бында ла Ҡуҙыйкүрпәстең, эҫе ҡурмасты әсәһенең усына ҡыҫып, йәрәштерелгән ҡыҙы хаҡындағы серҙе һорау эпизоды бар. Әсәһе, ҡулы бешеүенә түҙә алмайынса, былай ти:

Әйттереүең бар ине, балам,
Исемдәре булғандыр Маян;
Алыҫ киткәндер Маян,
Күңелдәреңде ярһытма, балам,
Йөрәккәйеңде ярһытма, балам,
Әсәйеңде кәмһетмә, балам,
Һүҙкәйемде ят һуҡма, балам,
Алыҫ ерҙәргә киткәндер Маян, —
Ҡара Борхандың түрендә Маян,
Ҡара юрғаның билендә Маян,
Ҡара йылғаның буйында Маян,
Ҡыҙҙар янында уйында Маян.

Әҫәрҙә финал икенсерәк: туйҙа Ҡуҙыйкүрпәс, Маяндың тыйыуына ҡарамаҫтан, эсеп иҫерә һәм менеп ҡасыр өсөн үҙ атын танымай. Эйәһе өсөн хәүефләнгән ат, егет алдына килеп аҡ бәкәлле аяғын күтәреп, үҙен таныта. Егет атҡа менеп ҡаса, ләкин уны уҡ менән атып йығалар. Ул Маян ҡулында үлә. Шунан һуң Маян үҙен үҙе сәнсеп үлтерә. Уларҙы тәүҙә икеһен бергә күмәләр, аҙаҡ, Ҡара Борхандың ҡушыуы буйынса, йылғаның ике яҡ ярына айырып ерләйҙәр. Ике ҡәберҙән ике ағас үҫеп сыға һәм йылға аша бер береһенә ынтыла.

6-сы вариант. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» исеме менән 1959 йылда Н. Д. Шоңкаров Курган өлкәһе Сафакүл районы Баҡай ауылында Борис Дәүләтшиндән (йәше күрһәтелмәгән) яҙып алынған. FA: ф. 3, оп. 21/1, 110—112-се биттәр. Текст прозанан тора.

Төп варианттан бик ныҡ айырыла. Ике дуҫтың һунарға сығыуы, болан осратыуҙары, Ҡуҙыйкүрпәс атаһының үлеүе, Маянһылыу атаһының күсеп китеүе бөтөнләй юҡ.

Маянһылыуҙың атаһы бай итеп һүрәтләнә. Ҡуҙыйкүрпәс — ошо байҙың көтөүсеһе. Ике йәш бер береһен яратыша. Атаһы Маянһылыуҙы күрше бай улына бирмәксе була. Бай малайы Ҡуҙыйкүрпәсте, Маянһылыуҙан баш тартмаһа, юҡ итеү менән ҡурҡыта. Ҡуҙыйкүрпәс айғырымды урланы, тип зинданға яптыра. Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу ҡарлуғас аша хат-

лашып торалар. Маянһылыу уға нисек итеп зиндандан ҡасыу юлын өйрәтә. Зинданды һаҡлаусы яуыз ҡарсыҡ ярҙамында бай улы ҡарлуғасты тотоп ала һәм ҡасып тотолған Ҡуҙыйкүрпәстең ҡайҙа йәшенеп ятҡанын белә. Суҡ тирәк янында йәшенеп ятҡан Ҡуҙыйкүрпәсте бай улы аты менән тапатып үлтерә. Егетенең һәләкәтен ишеткән Маянһылыу бай улын сәнсеп үлтерә, ә аҙаҡ үҙен-үҙе сәнсә. Бай үҙенең улын Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу ҡәберҙәре араһына күмдерә. Ике ғашиҡтың ҡәбере өҫтөнә сәскәләр, ә бай улы ҡәберенән дегәнәк үҫеп сыға.

7-се вариант. 1960 йылда Ә. Н. Кирәев Ырымбур өлкәһе Ново-Сергеев районы Мерәс ауылында 65 йәшлек Селәүсенованан яҙып алынған. ҒА: ф. 3, оп. 21/3, 135—141-се биттәр. Текста шиғыр менән проза аралашып килгән.

Әҫәрҙә образдарҙың исемдәрендә, ҡайһы бер эпизодтарҙың бирелешендә төп варианттан тайпылыш күренә: Күсәр хан — Күсей хан тип, ә Күсмәҫ хан Күсмәй хан тип аталған. Күсей хан төшөндә күк күгәрсен, ә Күсмәй хан аҡ күгәрсен күрә. Төш юраусы уларға береһенең ул, икенсеһенең ҡыҙ балаһы тыуасағын әйтә. Ҡуҙыйкүрпәстең юлына ҡыйынлыҡтарҙы әсәһе түгел, ә атаһы тыуҙыра. Геройҙың һәләкәте икенсе төрлө хикәйәләнә: Ҡуҙыйкүрпәс кешегә күренмәй генә Маян тирмәһендә йәшәй. Уларҙың улдары тыуа. Шунан һуң Маяндың ата-әсәһе Ҡуҙыйкүрпәстең килгәнлеген белә. Маяндың атаһы егетте үлтереү өсөн кеше яллай. Ул Ҡуҙыйкүрпәсте юрый һунарға алып сыға. Уны шунда үлтерәләр. Маян буҙ турғай аша һөйгән егетенең үлтерелеүе хаҡында белә лә үҙен бысаҡ менән сәнсеп үлтерә. Икеһен йәнәш ҡәбергә күмәләр. Ике ҡәберҙән ике ағас бер-береһенә уралып үҫеп китә.

8-се вариант. 1960 йылда Ф. А. Нәҙершина Ырымбур өлкәһе Люксембург районы Егәнлек ауылы 70 йәшлек Ынйыбикә Мәмбәтованан яҙып алған ҒА: ф. 3, оп. 21/3, 141—144-се биттәр. Текст шиғыр менән прозанан тора. Йөкмәткеһе, төп мотивтары менән юғарыла әйтелгән Хәтирә Селәүсенова вариантына яҡын тора.

Айырма тик түбәндәгеләрҙә генә күренә:

Күсәр хандың илен ташлап күсеп китеүенең сәбәбе аңлатылмай; Ҡуҙыйкүрпәстең үлтерелеү эпизоды үҙгәргән (Ҡарағол, арттан килеп, Ҡуҙыйкүрпәсте бысаҡ менән сәнсеп үлтерә); Маянһылыу һөйгән егетенең үле кәүҙәһен таба һәм үҙен-үҙе бысаҡ менән сәнсеп үлтерә.

9-сы вариант. 1960 йылда Н. Д. Шоңҡаров районы Ҡотломбәт ауылы 67 йәшлек Нәзифә Әбүбәкированан яҙып алынған. ҒА: ф. 3, оп. 21/3, 146—149-сы биттәр. Текст, нигеҙҙә, прозанан тора. Ҡуҙыйкүрпәстең һөйгән ҡыҙына мөрәжәғәтен һүрәтләгән урында ғына дүрт юллыҡ шиғыр бар.

Яҙма үҙенең йөкмәткеһе һәм төп мотивтары менән Өммөгөлсөм Ғәлимова вариантына яҡын тора. Үҙенсәлек түбәндәгеләрҙә күренә:

Күсәр хан менән Күсмәҫ хан бай һунарсылар итеп һүрәтләнә. Ике дуҫтың болан менән осрашыуы инә ҡуянға тап булыу менән алмашынған. Күсәр хандың, вәғәҙәһен боҙоп, ҡыҙын Ҡуҙыйкүрпәскә бирмәҫкә ҡарар итеүенең сәбәбе егеттең бик ярлы булыуына ҡайтып ҡала. Ҡуҙыйкүрпәстең бала саҡтан йәрәшкән ҡыҙын эҙләп юлға сығыуына әсәһе ҡаршы килмәй, ә ҡулынан килгәнсе ярҙам итә.

10-сы вариант. 1960 йылда Н. Д. Шоңҡаров Ырымбур өлкәһе Александров районы Ҡайыпҡол ауылы 68 йәшлек Миңлебулат Әбдрәзәковтан яҙып алынған. ҒА: ф. 3, оп. 21/3, 150—156-сы биттәр. Текстың шиғри өлөшө дүрт юллыҡ бер строфанан ғына тора.

Төп геройҙар Ҡуйкүрпәс, Ҡуйһылыу исемдәре менән алынған. Уларҙың аталары — Күсәр хан менән Күсмәҫ хан — һунарҙа балаларға йөрөгән ҡуянға тап булалар һәм уны үлтерәләр. Был хәл ике дуҫтың балаларын фажиғәле яҙмышлы итеүгә сәбәбсе була.

Ҡуйкүрпәстең Ҡуйһылыу менән осрашыуы бик үҙенсәлекле бирелгән. Егет Күсәр ханға эшкә яллана ла ҡыҙы янына аҡылға самалы таҙ көтөүсе ҡиәфәтендә килә. Ҡуйһылыу үҙенең йәштән йәрәшелгән егетен таный. Егеттең һәләкәте лә икенсе төрлөрәк һүрәтләнә: Күсәр хан суҡ тирәк төбөндә йоҡлап ятҡан Ҡуйкүрпәстең башын ҡылыс менән сабып өҙә. Ҡуйһылыуҙың фажиғәһе төп варианттан айырылмай.

11-се вариант. 1961 йылда М. М. Сәғитов Һамар өлкәһе Больше-Черниговский районы Ҡыпсаҡ ауылы 62 йәшлек Хәмит Ғарифуллиндан яҙып алған. ҒА: ф. 3, оп. 21/6, 45—48-се биттәр. Текст прозанан тора.

Төп геройҙар — Ҡуҙыйкүрпәс менән Баян. Беренсеһенең атаһы ярлы, икенсеһенең — бай. Вариантта Ҡуҙыйкүрпәс атаһының үлеүе әйтелмәй. Егеттең ҡыҙ артынан юлға сығыуына ата-инәһе ҡаршылыҡ күрһәтмәй. Яңы эпизод — Ҡуҙыйкүрпәстең изгелекле ҡарсыҡ менән осрашыуы индерелгән. Был ҡарсыҡ Баянды табыу юлдарын өйрәтеп ебәрә. (Т. Беляев вариантындағы Мәскәй образын хәтерләтә.) Баяндың атаһы, Ҡуҙыйкүрпәстең килгәнен ишетеп, уны үлтерер өсөн ғәскәр ебәрә. Ҡуҙыйкүрпәс аяғына һөңгө тейеп яралана, ләкин ҡасып ҡотола. Егет менән ҡыҙ буҙ турғай аша бәйләнеш тота. Баян буҙ турғай аша Ҡуҙыйкүрпәскә хатта яра ташы ла ебәрә. Баяндың атаһы кешеләр ебәреп Ҡуҙыйкүрпәсте үлтертә. Финалда ҡайһы бер үҙенсәлек бар. Ҡуҙыйкүрпәс менән Баянды икеһен ике ҡәбергә күмәләр, ләкин кешеләр китеү менән үк, ике ҡәбер бергә ҡушыла. Уларҙың ҡәбере өҫтөндә суҡ тирәк үҫеп сыға.

12-се вариант. «Алмабикә менән Алмабатыр» исеме менән 1961 йылда М. М. Сәғитов тарафынан Һамар өлкәһе Алексеев районы Моратша ауылы 35 йәшлек Ҡорманғәле Фазлиәхмәтовтан яҙып алынған. ҒА: ф. 3, оп. 21/6, 141—145-се биттәр. Текст прозанан тора.

Экспозиция өлөшө бик үҙенсәлекле: ике дуҫ һунарсы балаһыҙ ғүмер итәләр. Улар балалары булған тәҡдирҙә ҡоҙа булышырға вәғәҙә бирешәләр. Һунарҙа йөрөгәндә болан осратыу изге ҡарсыҡты осратыу менән алмашынған. Ҡарсыҡ уларға ярҙам итмәк була: икеһенә бер алманы уртаға телеп бирә һәм уны ҡатындарына ашатырға ҡуша. Ике ҡатын да бер юлы ауырға ҡала һәм береһе ул, береһе ҡыҙ бала табалар.

Ир балаға Алмабатыр тип, ҡыҙға Алмабикә тип исем ҡушалар.

Вариантта изге ҡарсыҡтан башҡа тағы Алмабикәнең атаһына хеҙмәт итеүсе ғәрәп образы ла индерелгән. Алмабатырҙың үлеү эпизодында бер аҙ үҙгәреш бар: бай һунарсы ебәргән ҡоралды кешеләр егеттең башын ҡылыс менән сабып өҙәләр һәм уны тоҡҡа һалып алып ҡайталар. Алмабикә егеттең башын алып суҡ тирәк янына килә һәм үҙен сәнсеп үлтерә. Ике

ғашиҡты йәнәш күмәләр. Уларҙың ҡәберенә сәскәләр үҫеп, бер-береһенә баштарын эйә.

13-сө вариант. «Күсәр хан менән Күсмәҫ хан» исеме менән 1961 йылда М. М. Сәғитов тарафынан Һарытау өлкәһе Перелюб районы Ҡунаҡбай ауылы 76 йәшлек Рабиға Әбүталипованан яҙып алынған. ҒА: ф. 3, оп. 21/6, 40—44-се биттәр. Текст прозанан ғына тора. Әҫәр йөкмәткеһе менән беренсе вариантҡа яҡын. Әммә образдарҙы һүрәтләүҙә үҙгәрештәр бар. Күсәр хан менән Күсмәҫ хандан башҡа персонаждарҙың исемдәре әйтелмәй. Әҫәр айырылышып торорға мәжбүр булған ике йәштең ҡушылыуы, бәхетле тормош көтөүҙәре менән тамамлана. Бына ошо яғы менән вариант Т. Беляев версияһы варианттарына яҡын тора. Башҡа варианттарҙан айырмалы рәүештә, Күсмәҫ хан үлмәй. Күсәр хан ҡыҙын Күсмәҫ хан улына бирмәҫ өсөн ситкә күсеп китә. Йәрәшелгән ҡыҙы барлығын егеткә еңгәләре әйтә.

Күсмәҫ хандың өс улы булған, ти. Хан, мал биреп, улдарын баҙарға сауҙа итергә ебәрә. Был эпизод башҡа варианттарҙа күренмәй. Оло улы мал һатып, гармун уйнарға, уртансы улы скрипка уйнарға өйрәнеп ҡайта. Кинйә улы, ҡуй һатып, атаһына кәфенлек, салмалыҡ һ. б. нәмәләр ала. Юлда ул ике кешенең зыяратта ҡәбер ҡаҙып ятҡанын күрә. Улар бурысын түләмәйенсә үлеп киткән кешенең кәфенен алыу өсөн ҡаҙыған булалар. Егет, атаһына алған кәфенлекте ҡаҙыусыларға биреп, үлгән кешене борсорға ирек ҡуймай. Артабан, был үлек кеше ҡәберенән сығып, йәш егет ҡиәфәтендә Күсмәҫ хандың улын һәр төрлө хәүефтән һаҡлап йөрөй. Тағы бер ҡыҙыҡлы деталь бар: егет йәрәштерелгән ҡыҙы артынан юлға сығыу өсөн рөхсәтте әсәһенән түгел, ә атаһынан һорай. Эпик әҫәрҙең был вариантында әкиәт жанрына хас поэтик деталдәр бик ҙур урын алған. Әкиәт традициялары йоғонтоһо образдар бирелешендә лә, ваҡиғаларҙы һүрәтләүҙә лә сағыла. Күсмәҫ хан улы теләгенә ирешкәс, теге егет кире ҡәберенә инеп ята. Әҫәр Күсмәҫ хан улының иҫән-һау өйгә ҡайтыуы менән бөтә.

14-се вариант. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Баян» исеме менән 1962 йылда Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Иҫке Субыл ауылында 72 йәшлек Ғәйшә Ғәлимованан Н. Д. Шоңҡаров яҙып алған. ҒА: ф. 3, оп. 21/8, 21—25-се биттәр. Текст шиғыр менән прозанан тора.

Персонаждарҙың исемдәрендә үҙгәреш бар: Маянһылыу Баян исеме менән бирелгән. Ҡуҙыйкүрпәстең атаһы Ҡарабай хан, ә Баяндың атаһы Ҡыҙылбай хан тип аталған. Икеһе лә ырыу башлыҡтары итеп һүрәтләнә. Ҡыҙылбайҙың алты улы барлығы, уның тағы ҡыҙ бала теләүе әйтелә. Ҡыҙылбай, һунарға сығыр алдынан, әгәр мин юҡта ҡыҙ бала тыуһа, орсоҡ, ул тыуһа, ҡанға манылған уҡты бейек урынға сәнсеп ҡуйығыҙ, тип бойора.

Ҡыҙылбайҙың ҡыҙын Ҡуҙыйкүрпәскә бирмәҫ өсөн күсеп китеүе икенсе төрлө аңлатыла. Баян еңгәһенең хәйлә өйрәтеүе буйынса, Ҡыҙылбай ҡунаҡҡа килгән ваҡытта Ҡуҙыйкүрпәс юрамал шылағайын да йыя алмаған йүнһеҙ малай булып ҡылана. Ҡулына тотҡан итте таҫҡа төшөрөп ебәргән була, шунан кире алып ашай. Быны күҙәтеп торған Ҡыҙылбай уны үҙ ҡыҙына лайыҡлы кейәү һанамай, күсеп китергә мәжбүр була.

Ҡуҙыйкүрпәстең ҡыҙ эҙләп юлға сығыуын һүрәтләүҙә әкиәт жанрына хас элементтар, деталдәр күп.

Ел арба менән Ҡуҙыйкүрпәс Ҡыҙылбай еренә килеп етә. Ул Баянға көтөүсе аша балдаҡ биреп ебәрә. Балдаҡтағы яҙыуҙы уҡып, Баян егеттең килгәнен белә. Ҡуҙыйкүрпәс менән Баяндың осрашыуы һүрәтләнмәй. Ҡыҙылбай тарафынан ебәрелгән кешеләр егетте үлтерәләр. Баян һөйгән егетенең килеүен атаһына барып әйткән өсөн, Ҡарағолдо үлтерә, һуңынан үҙенә бысаҡ менән сәнсә.

Баян менән Ҡуҙыйкүрпәс ҡәберендә сәскәләр, ә Ҡарағол ҡәберенә дегәнәк үҫеп сыға.

15-се вариант. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» исеме менән 1962 йылда С. Ә. Галин Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ районы Сабаҡлы ауылында 85 йәшлек Һибәт Даяновтан яҙып алған. ҒА: ф. 3, оп, 21/8, 26—31-се биттәр. Текста шиғыр менән проза аралашҡан.

Бында Ҡуҙыйкүрпәс атаһының исеме — Ҡарабай, ә Маянһылыу атаһының — Һарыбай. Икеһе лә хан. Т. Беляев версияһындағыса, Ҡарабайҙың һунарға йөрөгән мәлдә һәләк булыуы һүрәтләнә.

Варианттың финалында ла үҙенсәлек бар. Маянһылыу менән осрашыуға килгән Ҡуҙыйкүрпәсте Һарыбай хан ярандары яралай. Һарыбай, егеттең матурлығына хайран ҡалып, үлтерергә баҙнат итә алмай. Уның башын Ҡолтан таҙ сабып өҙә һәм Маянһылыуға алып ҡайта. Һарыбай хан Ҡуҙыйкүрпәсте тирәк төбөнә күмергә бойора. Үҙен-үҙе үлтергән Маянһылыуҙы йылғаның икенсе яҡ ярына күмәләр. Башҡа варианттағыса, ике ҡәберҙән ике тирәк үҫеп сығып, бер-береһенә ынтыла. Аҙаҡ килеп, улар бергә ҡушылып үҫә.

16-сы вариант. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» исеме менән 1962 йылда Ф. А. Нәҙершина Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Байғазы ауылында 68 йәшлек Шәрәфетдин Шиһаповтан яҙып алған. ҒА: ф. 3, оп, 21/8, 32—34-се биттәр. Текст прозанан тора.

Һунарҙан ҡайтып килгән ике дуҫ юл сатында уҡ менән орсоҡ сәнсеп ҡуйылғанын күрәләр һәм береһенең ҡыҙы, икенсеһенең улы тыуғанлығын беләләр. Маянһылыу атаһының күсеп китеүе, Ҡуҙыйкүрпәстең ҡыҙ артынан эҙләй сығыуы бирелмәгән. Был вариантта Ҡуҙыйкүрпәстең атаһы үлмәй, ә Маянһылыуҙыҡы үлә. Атаһының энеһе Ҡолтан таҙ Ҡуҙыйкүрпәсте үлтереп, Маянһылыуҙы үҙе алмаҡ була. Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыуҙың яҙмышы, тап бүтән варианттарҙағыса, үлем менән бөтә.

17-се вариант. 1961 йылда Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Ҡадир ауылында 36 йәшлек Рәзифә Йомағолова һәм Нурия Галинанан (31 й.) Ф. А. Нәҙершина яҙып алған. ҒА: ф. 3, оп, 21/8, 35—39-сы биттәр. Текста шиғыр менән проза аралашҡан.

Был варианттың бөтөмөндә ҡайһы бер үҙенсәлектәр бар. Маянһылыуҙың атаһы, Ҡуҙыйкүрпәстең ҡайҙа йәшенгәнен белеп, уны үлтереү өсөн Ҡарағолдо ебәрә. Бының өсөн ул Ҡарағолға ҡыҙын бирмәк була. Ҡарағол Ҡуҙыйкүрпәстең башын сабып өҙә. Маянһылыу Ҡарағол менән егетенең үлгән еренә бара. Йылға ярына килгәс, Маянһылыу һыу төбөндә Һыуһылыу барлығын әйтә. Ҡарағол һыуға эйелеү менән, ҡыҙ уның башын өҙә саба, кәүҙәһен һыуға ташлай. Ҡалған күренештәр башҡа варианттарҙағыса.

18-се вариант. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» исеме менән 1962 йылда талибә М. Янбухтина тарафынан Ырымбур өлкәһе Александров районы Ҡотос ауылында Шәрәфи Юлуевтан яҙып алынған (яҙҙырыусының йәше күрһәтелмәгән). Ҡулъяҙма БДУ-ның фольклор фондында, 1963 йылғы экспедиция материалдары менән бергә һаҡлана (1-се киҫәк, 75—79-сы биттәр). Текст шиғыр аралаш прозанан тора. Сюжет ҡоролошонда, йөкмәткеһендә төп варианттан ҙур айырма юҡ. Үҙенсәлек итеп ошоларҙы күрһәтергә мөмкин. Ҡуҙыйкүрпәстең сәкән уйнағанда бер әбейҙең күнәген яра һуғыуы, был әбей аша үҙенең йәрәштерелгән ҡыҙы хаҡындағы серҙе белеүе, шулай уҡ Ҡуҙыйкүрпәстең Маянһылыуҙы эҙләп юлға сығыр алдынан әсәһе өсөн иҫтәлек билдәһе итеп уҡ ҡаҙап китеүе әйтелгән. Бында Ҡуҙыйкүрпәсте Күсәр хандың яҡыны Ҡарағол айбалта менән сабып үлтерә. Маянһылыуҙың Ҡараголдан үс алыуы ла үҙенсәлекле: ҡыҙ Ҡарағолға Ҡуҙыйкүрпәс өсөн ҡәбер ҡаҙырға ҡуша, шунан ҡәберҙең тәрәнлеген үлсәргә төшкән Ҡарағолдоң башын сабып өҙә.

19-сы вариант. «Ҡуҙыйкүрпәс» исеме менән 1967 йылда Н. Д. Шоңҡаров тарафынан Башҡортостандың Йылайыр районы Мәҡсүт ауылында Сәлихә Бикбулатованан (1904 йылда тыуған) яҙып алынған. Ҡулъяҙма Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фольклор фондында һаҡланған. Күләме машинкала 6 бит. Текста проза шиғыр менән аралашып килгән.

Һунарға сыҡҡан ике дуҫ хандың исемдәре, Т. Беляев вариантындағы кеүек, Ҡарабай менән Һарыбай тип алынған. Оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, Ҡарабай ат ярышында ҡатнаша һәм аттан йығылып һәләк була. Етемлектә үҫкән Ҡуҙыйкүрпәс йәрәштерелгән ҡыҙы барлығын бура һуғып йөрөүсе малайҙарҙан ишетә. Бында ла Ҡуҙыйкүрпәстең әсәһе улының Маянһылыуҙы эҙләп юлға сығыуына ҡаршы төшә. Улын ебәрмәҫ өсөн әсәһе былай ти:

Ҡарлуғас үтмәҫ ҡара урман,
Уны ҡалай итеп үтәрһең, балам?
Имсәгем һөтө — күк даръя,
Уны ҡалай итеп сығарһың, балам?

Ҡуҙыйкүрпәс әсәһенә:

Ҡарлуғас үтмәҫ ҡара урманды
Ҡылысым менән ҡыйып үтәрмен, әсәй,
Ҡылысым менән ҡыйып үтәрмен, әсәй.
Имсәк һөтө — күк дарьяны
Ҡоштай осоп үтәрмен, әсәй,
Ҡоштай осоп үтәрмен, әсәй.
Атым ырғыһа, таш ташлармын,
Үтерем, әсәй, үтерем, әсәй.

Ҡуҙыйкүрпәстең бер-бер артлы землянкала йәшәүсе ике кешене осратыуы һәм Һарыбайҙың ҡайһы яҡҡа үтеп киткәнлеге хаҡында кинәйәле итеп һорашыуы бик үҙенсәлекле бирелгән.

Туҡмаҡ яллы һары айғыр,
Һары айғырҙың һары бейәһе,
Һары бейәнең һары тайы,
Һары тайҙың һары ҡолононан
Күрмәнеңме, ағай? —

тип һамаҡлап һорай.

Әҫәрҙең бөтөмө 13-сө варианттағыса тип әйтерлек. Маянһылыу, өс кенә көнгә булһа ла Ҡуҙыйкүрпәс терелһен ине, тип, һамаҡлап илай. Теләге ҡабул була: Ҡуҙыйкүрпәс терелеп тора ла яңынан үлә. Маянһылыу үҙен-үҙе сәнсеп үлтерә. Вариантта Маянһылыуҙың Ҡуҙыйкүрпәстән улы булғанлығы хаҡында әйтелмәй.

20-се вариант. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» исеме менән 1967 йылда Н. Д. Шоңҡаров тарафынан Башҡортостандың Салауат районы Иҫке Ҡаратау ауылында 80 йәшлек Нәбиулла Фәрхиевтән яҙып алынған. Ҡулъяҙма Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фольклор фондында һаҡлана. Күләме — машинкала 5 бит. Текста проза шиғыр менән аралашып килгән.

Бында һунарға сыҡҡан ике хандың исемдәре — Бүребай менән Һарыбай. Ҡуҙыйкүрпәс атаһы Бүребайҙың үлеүе хаҡында әйтелмәй. Егет менән ҡыҙ бик дуҫ булып үҫәләр, бергәләп мәҙрәсәгә уҡырға йөрөйҙәр. Берҙән-бер көн Ҡуҙыйкүрпәс Маянһылыуҙы халыҡ араһында тотоп үбеп ала. Ошо хаҡта ауыл буйынса һүҙ тарала. Һарыбай хан был хәлгә бик ғәрләнә һәм бөтә йәйләүе менән баш һуҡҡан яҡҡа күсеп китә.

Егеттең Маянһылыу менән осрашыуы ла үҙенсәлекле. Маянһылыу иҫен юғалтҡан кеше булып йығылған Ҡуҙыйкүрпәстең бүркен сисеп ҡарай. Ул бер бите көндәй, бер бите айҙай һылыу егетте күрә. Ошо билге буйынса Ҡуҙыйкүрпәсте таный. Беляев вариантынан башҡа яҙмаларҙа осраусан яуыз Ҡолтор таҙ бында Һарыбайҙың күсере Ҡарасөнәк исеме менән алынған.

21-се вариант. «Ҡуҙыйкүрпәс» исеме менән 1968 йылда Н. Д. Шоңҡаров тарафынан Башҡортостандың Салауат районы Арҡауыл ауылында 67 йәшлек Зада Ямалетдин ҡыҙынан (фамилияһы бирелмәгән) яҙып алынған. Ҡулъяҙма Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фольклор фондында һаҡланған. Күләме — машинкала 4 бит. Күпселек өлөшө прозанан тора.

Экспозиция өлөшөндә варианттарҙың күбеһендә осраусан балалы болан быуаҙ тейен менән алмашынған. Һунарға сыҡҡан ике дуҫтың исемдәре әйтелмәй. Бында ла, Н. Фәрхиев вариантындағы кеүек, Маянһылыу менән Ҡуҙыйкүрпәстең бергә үҫеүҙәре, мәҙрәсәлә уҡыуҙары күрһәтелә. Маянһылыу Ҡуҙыйкүрпәстең ете диңгеҙ, ете иҙел аръяғына күсеп киткәндә, үҙе менән ете йөҙ баш һыйыр, ете йөҙ баш ҡуй алып киткәнлеге әйтелә. Ҡуҙыйкүрпәс Маянһылыуҙы эҙләп тапҡанда инде, Ҡарасөнәккә — Маянһылыу атаһының күсәренә — кейәүгә бирелгән була. Фажиғәле үлем менән үлгән Маянһылыуҙы Ҡарасөнәк менән диңгеҙҙең был яғына, икеһен бер ҡәбергә күмәләр, ә Ҡуҙыйкүрпәсте диңгеҙҙең аръяғына күмәләр.

22-се вариант. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» исеме менән 1968 йылда Н. Д. Шоңҡаров тарафынан Башҡортостандың Ишембай районы Биксән ауылында Маһинур Шәрипованан (1906 йылда тыуған) яҙып алынған. Ҡулъяҙма Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фольклор фондында һаҡлана. Күләме — машинкала 5 бит. Текст шиғыр аралаш прозанан тора. Был варианттың иң характерлы үҙенсәлеге шунан тора.

Күсәр хандың Маянһылыу Ҡуҙыйкүрпәскә биреүҙән баш тартыуына төп сәбәп итеп социаль тигеҙһеҙлек күрһәтелгән. Күсәр хан атаһы үлеп бөлгөнлөккә төшкән егеткә ҡыҙын биргеһе килмәй, шуға ла ете диңгеҙ аръяғына күсеп китә. Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу, ҡауышҡас, йәшерен генә осрашып йөрөйҙәр. Маянһылыуҙың улы тыуғас ҡына, Ҡуҙыйкүрпәстең килгәнлеге бирелә. Суҡ тирәк төбөндә Күсәр хан көтөүсеһе менән бергә ит ашап ултырған Ҡуҙыйкүрпәстең башын өҙөп, ат ҡойроғона тағып алып ҡайталар. Уның һыу буйында ятып ҡалған тәне янына Маянһылыу килеп илап ултырған ваҡытта, йәшел таяҡ таянған, салма кейгән бер ҡарт килеп сыға. Маянһылыуҙың үтенеүе буйынса, ул Ҡуҙыйкүрпәсте өс көнгә терелтә. Өс көндән һуң Ҡуҙыйкүрпәс янынан үлә. Уның ҡайғыһын күтәрә алмаған Маянһылыу улын күтәреп һыуға ташланып үлә. Күсәр хан кешеләре Ҡуҙыйкүрпәсте диңгеҙҙең бер яғына, Маянһылыуҙы улы менән бергә икенсе яғына күмәләр. «Ике яҡта ике тирәк үҫеп сыҡҡан, араларында бер матур үҫемлек сырмалап үҫеп тоташтырған — уныһы малайҙары булған», — тиелә. Бында күпселек варианттарҙа һүрәтләнгән Күсәр хандың вәзире — ҡутыр башлы Ҡолтор таҙ образы бирелмәгән.

23-сө вариант. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Барсынһылыу» исеме менән 1971 йылда С. Ф. Миржанова Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районы Бесмән ауылында 70 йәшлек Нәбирә Сөләймәнованан яҙып алған. Ҡулъяҙма Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фольклор фондында һаҡлана. Текст прозанан һәм һигеҙ юллыҡ бер шиғыр строфанан тора.

Әҫәрҙең экспозиция өлөшөндә һүрәтләнгән ике дуҫтың исемдәре әйтелмәгән. Уларҙың береһе — хан, икенсеһе — вәзир. Уларҙың һунарҙа балалы боланға осрауы, шуға ҡарап, өйҙә балалары тыуғанлығын белеү эпизоды хикәйәләнә. Бер көн һунарҙа саҡта, сапҡын килеп, хандың улы, ә вәзирҙең ҡыҙы тыуғанлығын хәбәр итеп, һөйөнсө ала. Алдағы варианттарҙан айырмалы рәүештә, хан (Ҡуҙыйкүрпәстең атаһы) яңы тыуған улын күрә алмай: ҡайтып килгән саҡта аты өркөп китә лә йығылып үлә. Был вариантта ла ике дуҫтың балалары тыуа ҡалһа, туғанлашыу хаҡындағы килешеүҙәре боҙола. Әҫәрҙә вәзирҙең Ҡуҙыйкүрпәсте һәм уның әсәһен бик ауыр хәлгә ҡалдырғанлығы, бөлгөнлөккә төшөргәнлеге әйтелә. «Малай меҫкен, ҡайҙа етте шунда, эт ашаған ерҙә этаяҡтан да ашап йөрөй». Вәзир, Барсынһылыуҙы (был вариантта ҡыҙҙың исеме шулай) етем егеткә бирмәҫ өсөн, бик алыҫҡа күсеп китә.

Ҡуҙыйкүрпәстең бала сағын, уның әйттерелгән ҡыҙы барлығын ишетеүен, уны эҙләп юлға сығыуын һүрәтләгән эпизодтар төп варианттағыса. Ат һайлау бик ентекле һүрәтләнә. Алама ғына тайға әйәр һалыу менән, ул толпарға әйләнә. Ҡуҙыйкүрпәс, күп ауырлыҡтар үтеп, вәзирҙе килеп таба һәм көтөүсе булып ялланырға: «Улһыҙға ул булырға, ҡолһоҙға ҡол булырға килдем», — ти. Барсынһылыуҙы Япар таҙ алмаҡ булып йөрөй, һәм ул Ҡуҙыйкүрпәсте үлтереүҙә ҡатнаша. Әҫәрҙең финалы бик үҙенсәлекле:

Ҡуҙыйкүрпәсте үлтермәй, юрамал туй яһау эпизоды юҡ. Барсынһылыу өс көнгә булһа ла башы киҫелгән Ҡуҙыйкүрпәстең терелеүен алланан һорай. Уның теләге ҡабул була: өҙөлгән башты кире тегеп ҡуйыу менән, егет терелә. Бер нисә көн бергә үткәргәндән һуң, Ҡуҙыйкүрпәс үлә. Барсынһылыу үҙен-үҙе үлтерә. Уларҙың икеһен дә бер ҡәбергә күмәләр. Кешеләр төн уртаһы еткәс, төндә яҡтыртып егет менән ҡыҙҙың уйнағанын күрәләр. Халыҡ был ғәжәп хәлдән ҡурҡып, быларҙы ҡәберенән ҡаҙып алып, икеһен юлдың ике яғына күмәләр. Шулай булһа ла былар көн дә тороп бергә уйнай торған булғандар тиелә.

24-се вариант. «Ҡарабай менән Һарыбай» исеме менән 1971 йылда С. Ф. Миржанова Башҡортостандың Ейәнсура районы Бәйдәүләт ауылында Абдулла Сәйфуллиндан (1896 йылда тыуған) яҙып алған. Ҡулъяҙма Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фольклор фондында һаҡлана. Текст прозанан һәм ҙур булмаған бер нисә шиғри һамаҡтан тора. Сюжет һыҙығы — төп варианттағыса тиерлек. Айырма ҡайһы бер персонаждар исемендә, айырым эпизодтарҙа, деталдәрҙә күренә.

Ике дуҫ Ҡарабай менән Һарыбай исемле. Төп образдар: Ҡуҙыҡан (Һарыбай улы) менән Баян (Ҡарабай ҡыҙы). Быларҙан тыш, Баянды кәләшлеккә алам тип дәғүәләшеп йөрөгән Ҡарағол, шулай уҡ Баяндың ике ағаһы (исемдәре әйтелмәгән), ике еңгәһе (Һөйөнсө менән Көйөнсө) образдары бар.

Ҡуҙыҡандың Баянды эҙләп юлға сығырға әҙерләнеүендә үҙенсәлек бар. Ул әсәһенән «бөтмәҫ аҙыҡ бешертә, тиренән туҙмаҫ кейем тектерә». Өйөрҙән ҡороғон ҡылтырҙатып, йүгәнен сылтырҙатып ат һайлай. Уға ҡараған насар ғына тай, һыртына үндек, эйәр һалыу менән, кешеләрсә һөйләшә, кәнәш бирә ала торған толпарға әйләнә. Юлға ҡылыс, уҡ-ян алып сыға.

Ҡарабайға көтөүсе булып ялланған Ҡуҙыҡанды бер ваҡыт ат тибеп ебәргән ыңғайға, уның бүрке төшөп китә. Егеттең түбәһендәге айын күреп ҡалған Һөйөнсө уның Ҡуҙыҡан икәнен таный һәм Баянға был хаҡта хәбәр итә.

Әҫәрҙең финалында ла үҙенсәлекле деталдәр бар. Баяндың үтенеүе буйынса, ап-аҡ һаҡаллы, аҡ кейемле изгелекле ҡарт Ҡарағол тарафынан үлтерелгән Ҡуҙыҡанды өс көнгә терелтә. Баян Ҡуҙыҡандың киҫелгән башын кире беркетеү менән, уға йән керә.

Һынаулы көн үтеп, егет менән ҡыҙ үлгәндән һуң, уларҙың икеһен бер күлдең ике яҡ ярына күмәләр. Ике ҡәберҙән ике ағас сығып, бер-береһенә үрелеп үҫеп китә. Шул ике ағасты сапһаң, ҡан тамыр, ә Ҡарағол ҡәберенә үҫкән дегәнәктән ҡара ҡан сығыр булған. Әҫәрҙең аҙағында Ҡуҙыҡан менән Баян араһында, хат ташып йөрөгән турғайҙың шул ваҡиғаларҙан һуң, Баян турғай аталып ҡалыуы, ә уны белмәгән кешеләрҙең генә ҡарабаш турғай тип йөрөтөүҙәре әйтелә.

## ЗӨҺРӘ МЕНӘН АЛДАР

Русса тәржемәлә «Мои вечера. Сказки башкирские» тип аталған был эпик әҫәр 1961 йылда СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми хеҙмәткәре М. Ғ. Рәхимҡолов тарафынан Ленинградтағы М. Е. Салтыков-Щедрин исемендәге ки-

тапхананың кулъяҙмалар фондында табылды (ОСРК F. XV № 45). Фотокүсермәһе Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең ғилми китапханаһында һаклана: ф — 107808. Вакытлы матбуғатта ошо табыш хакында мәкәлә лә баҫылып сыкты (С. Галин. Кыҙбатыр һәм Кырбатыр. «Совет Башкортостаны», 1968, 13—16 август). Әҫәрҙең башкортса нөсхәһе һакланмаған. Темаһы һәм йөкмәткеһе яғынан ул 1812 йылда рус телендә баҫылып сыккан «Куҙыйкүрпәс»тең логик дауамы булып тора. Бында ла башкорттар менән эш иткән рус түрәһенә арнау өлөшө бар: әҫәр Н. Н. Бахметьевка арналған. Н. Н. Бахметьев 1798—1803 йылдарҙа Ырымбурҙа генерал-губернатор булып торған. Төҙөлөшөнә, стиленә, аңлатмаларҙың бирелеү рәүешенә һәм башка үҙенсәлектәренә карағанда, «Зөһрә менән Алдар»ҙың да рус теленә, «Куҙыйкүрпәс» кеүек үк, Т. Беляев тарафынан тәржемә ителгәнлеге раҫлана. Тәржемәсенең арнауынан күренеүенсә, әҫәр Конка, йәки Конкас (русса текста Конка) исеме сәсәндән алынған булырға тейеш. Әммә сәсәндең үҙе хакында бер ниндәй ҙә мәғлүмәт бирелмәгән.

Кулъяҙма оҙак вакыт кулдан кулға күсеп йөрөгәнгә окшай. Өсөнсө битендә: «Эта книжка принадлежит Петру Шишкину. 1870 год. Декабрь, 20 числа», тип яҙылған. Ошо ук биттә тағы ла бер беҙгә билдәһеҙ кеше «Эта книжка принадлежит Александру Синягину. 1871 года, февраль 23 числа. Подписал Александр Синягин. 1871 года. Февраль, 24 дня» тип яҙып куйылған. Шуныһы асык билдәле: Кулъяҙма аҙак килеп 1887 йылда китапхана фондына ингән.

Әҫәрҙең русса тәржемә тексы 56 кистән тора. Әммә был кистәрҙең әҫәрҙәрҙең композицияһы өсөн бер ниндәй ҙә әһәмиәте юк, улар бүлек йәки бүлексә ролен дә үтәмәйҙәр. Тәржемәсе сюжет ебен кайҙа теләһә, шунда өҙгән дә хикәйәтте кистәргә бүлгән: Көнсығыш әҙәбиәтендә «кисә»ләргә бүленгән әҫәрҙәрҙе байтак осратырға мөмкин (мәҫәлән, уның иң атаклыһы «Мең дә бер кисә» китабы) «Зөһрә менән Алдар»ҙағы кистәрҙе тышкы яктан көнсығыш әҫәренә окшатырға тырышыуҙың күренеше тип карарға кәрәк. Шулай ҙа был «кистәр» үҙ урындарында тулыһынса һакланды.

«Зөһрә менән Алдар» эпосы шағир Рәми Ғарипов тарафынан руссанан башкортсаға кайтарылды һәм томға шул текст алынды. Беренсе тапкыр баҫыла.

Русса текста тәржемәсе тарафынан бирелгән аңлатмаларҙың, иҫкәрмәләрҙең күбеһе, башкорт укыусылары өсөн һүҙҙәр, төшөнсәләр унһыҙ ҙа аңлайышлы булғанға күрә, башкортса кайтармала алынманы. Тәржемәсенең Н. Н. Бахметьевка арнау һүҙен, әҫәрҙең үҙенә туранан-тура бәйләнеше булмағанлыктан, аңлатмалар өлөшөндә биреү урынлы табылды. Ул арнауҙың төп өлөшө түбәндәгесә:

«Кәҙерлеләрҙән кәҙерлем Николай Николаевич, яңғыҙлык емештәре булған был «кистәремде» мин һиңә арнайым. Консак — һармак, мин дә һүҙ оҫтаһы түгел; шулай булғас, беҙҙән ни игелек көтмәк кәрәк! Һин «кистәрҙән» элек үҙеңдән ял вакыттарында ишеткәндәреңде табырһың. Уларҙы укығанда, үҙең дә яраткан Ете ырыулыларыңдың ғөрөф-ғәҙәттәрен, зан-йолаларын иҫкә төшөрөрһөң; улар һине әле булһа ла яраталар: «Һай, ир-егет ине Бахметьев!» — тип куялар.

Йәки: Юк, кайлус* та үрмәй бында шәрек дастанын,
Юк, Шәһрәзада[47] ла йоклатмай үҙ солтанын;

Тик хужаһы менән бер күңелдән яраткас,
Үҙен һөйгән башҡорт гәбен һиңә тип Ҡонҡас
Бүләк итә, — юҡтан һүҙ булһын өсөн түгел,
Ә уларға һинең киң булған өсөн күңел.
Бар башҡорттар һине ир-егет итеп күрә,
Яҡлаусыбыҙ ине, тиҙәр, беҙгә ул түрә.

[47]**Шәһрәзада** — ғәрәп фольклорында данлы әкиәтсе ҡатын. «Мең дә бер кисә» әкиәттәрен Шәһрәзада тарафынан сығарылған тиҙәр.

[48]Хикәйәттең «Беренсе кис» тип билдәләнгән бите, ғөмүмән уның баш өлөшөн тәшкил иткән бер нисә бите юғалған.

[49]**Ете ят** — Борондан килгән заң буйынса, ҡәрҙәшлек ете быуынға тиклем генә иҫәпләнгән, унан һуң ул «ете яҡта» әйләнә тип ҡаралған.

[50]Башҡорт фольклорында, башҡа күп кенә Урта Азия, Яҡын Көнсығыш халыҡтары ижадындағы кеүек, Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең хөкөмөн мосолмандарға еткереүсе илсе образы (Хызыр Ильяс) ғәҙәттә йәшел таяҡҡа таянған, оҙон сапан кейгән, башына сәллә ураған аҡ һаҡаллы изгелекле ҡарт — әүлиә ҡиәфәтендә һүрәтләнә. Была ошо традицион ҡарт «Зөһрә менән Алдар»ҙың был урынында баштан-аяҡ ҡоралды һыбайлы батыр ҡиәфәтендә һүрәтләнгән.

[51]«Башҡорттар өйөр айғырын ғәҙәттә йәй көнө яҡын арағa барыу өсөн генә менеп йөрөйҙәр. Барып етеү менән ҡунаҡ, эйәрен, йүгәнен һыпырып ала ла, айғырын ебәрә. Айғыр үҙенең бейәләр өйөрөнә ҡайтып китә. Ҡунаҡ ҡайтыр мәл еткәс, хужа уға үҙенең берәй өйөр айғырын мендереп ебәрә. Ул да ҡайтып етеү менән айғырҙы, кире китһен өсөн, үҙ иркенә ысҡындырып ебәргән». — Хикәйәтте рус теленә тәржемә итеүсе аңлатмаһы. Артабан тәржемәсе аңлатмаһы, тип атала.

[52]«Башҡорттар бәлә- ҡаза килгән саҡтарҙа кешеләргә ярҙам күрһәтә торған изгелекле ҡоштар барлығына ышаналар, ул ҡоштар ҡайһы саҡта хатта кешесә һөйләшә, имеш, тиҙәр». — Тәржемәсе аңлатмаһы.

[53]«Башҡорттар ҡойоп бирелгән ҡымыҙҙы тәүҙә хужа ауыҙ итмәй тороп эсеүҙе әҙәпһеҙлек һанайҙар. Ҡайһы ваҡытта ҡунаҡ тәүге аяҡты хужаның үҙе эсеүен, ә икенсеһен генә уға биреүен һорар булған». — Тәржемәсе аңлатмаһы.

[54]«Йола буйынсамылыр, әллә ислам законы буйынсамылыр, мосолман ҡатын-ҡыҙҙары бер ниндәй ҙә мал салмайҙар». — Тәржемәсе аңлатмаһы.

[55]Дини тәғлимәттә һәр кешенең яҙмышы алдан уҡ алла тарафынан билдәләнеп тәҡдир (яҙмыш) таҡтаһына яҙып ҡуйылған тип өйрәтелә.

[56]Русса текста тәржемәсе толпар һүҙенә ошондай аңлатма биргән: «Башҡорттар йылҡы малынан толпар бик һирәк тыуа, тиҙәр. Уны үтә етеҙ, йылғыр һәм көслө хайуан тип һанайҙар. Толпар үҙе өҫтөндәге егетте белеп еткәндән һуң ғына уға хеҙмәт иткән, уның телен аңлай һәм бөтә бойороғон үтәй, тиҙәр».

[57]«Башҡорт ҡыҙҙары ат сабышалар, бер-береһен эйәрҙән тартып төшөрәләр. Уларҙың был уйынына егеттәр ҙә ҡушылып китә». — Тәржемәсе аңлатмаһы.

[58]Русса тәржемәлә ҡорот һүҙе үҙгәртмәйенсә алынған һәм башҡорт ҡатындарының уны нисек яһауы хаҡында белешмә бирелгән.

[59]Тәржемәсе был һүҙгә рус уҡыусыларына аңлашылһын өсөн: «Һаба ике өс тиренән, ә байҙарҙа дүрт тиренән дә ыҫлап яһалған һауыт. Шуға яңы һауған бейә һөтөн һалып әсетәләр, шунан төн үтеүгә ҡымыҙ яһала», — тип аңлатма биргән.

[60]Тәржемәсе рус текста мәскәй һүҙен — «чародей», ә күрәҙәсәне — «ворожей» тип аңлатып киткән.

[61]Бында һүҙ VIII быуатта Азов диңгеҙе буйынан Урта Волга һәм Каманың түбәнге ағышына күсеп килгән болғарҙар хаҡында бара. Болғарҙар сығышы яғынан төрлө-төрлө күсмә һәм ултыраҡ тормош кисергән ырыуҙар берекмәһе башында торалар, X быуатта үҙ дәүләттәрен төҙөйҙәр. Көнбайыш башҡорт ырыуҙары Болғар дәүләте ҡулы аҫтына эләгә. Волга һәм Кама буйында табылған ҡәбер таштарындағы яҙмалар болғар теленең хәҙерге сыуаш теленә яҡын булыуын раҫлай. Болғар дәүләте рустар, хазарҙар, башҡорттар, Урта Азия халыҡтары менән ныҡлы сауҙа мөнәсәбәттәрен инеп үҫешә. Болғар сауҙагәрҙәре хатта Көнбайыш Европа, Иран, Ҡытай һ. б. илдәргә лә үтеп инер булғандар.

«Зөһрә менән Алдар» эпосында Болғар дәүләтенең тамам нығынып, күрше халыҡтарға йоғонтоһон арттырырға ынтылған, уларҙың ерҙәрен баҫып алыу сәйәсәтен көсәйткән осоро сағылған булырға тейеш. Эҫәрҙәге болғар илсеһенең һөйләгәненән болғарҙарҙың күрше халыҡтарға ҡоралл көс менән һөжүм итеүҙәре күренә. Шуға болғар илсеһенең маҡсаты «төрлө халыҡтарҙы күреп, бөтә күргән-белгәндәрен үҙ батшаһына еткереү» менән генә сикләнмәйенсә, күршеләренең хәрби ҡеүәтен, байлығын байҡап, белешеп ҡайтыу ҙа ингән тип әйтергә мөмкин. Артабан башҡорт батырҙарының ҡаһарманлығын һүрәтләү аша күреп ышанырға мәжбүр була. Хикәйәтте болғар илсеһе үҙе ҡурҡаҡ, үҙе хәйләкәр һәм маҡтансыҡ итеп һүрәтләнгән. Батырҙар йыш ҡына уның был сифаттарын мыҫҡыллап көләләр.

Болғар дәүләтен татар-монгол яуы бик ныҡ ҡаҡшата. Ә инде XV быуатта көсәйеп алған рустар Болғар дәүләтен бөтөнләйгә ҡыйраталар һәм ул башҡаса аяҡҡа баҫа алмай.

[62]Борон башҡорттар бер ырыуҙан булһалар ҙа ике халыҡҡа бүленеп йәшәгәндәр. Урал тауының төньяғында йәшәгәндәре урман халҡы тип, ә төшлөк яғындағылары ялан (дала) халҡы тип аталған. — Тәржемәсе аңлатмаһы.

[63]Йөҙ ҙә алтмыш ете мөсәл ике мең дә дүрт йылға тиң.

[64]Бында һүҙ өс ҙур йылға — Иҙел (Волга), Кама, Ока йылғалары ҡушылған ерҙәге Болғар дәүләте төҙөлөү хаҡында бара булһа кәрәк.

[65]Сихыр эйәһенең һүҙҙәренә ҡарағанда, көньяҡтан Урта Волга — Урал территорияһына, шулай уҡ Башҡортостандың төньяғына ниндәйҙер баҫҡынсы халыҡтың (Азов диңгеҙе буйынан килгән болғар ҡәбиләләре булыуы бик ихтимал) үтеп инеп, дәүләт төҙөүе һәм үҙ хакимлығын башҡа күрше халыҡтарға ла таратырға тырышыуы, уларҙан яһаҡ йыйыуы күренә. Бында, әлбиттә, боронғо тарихи ваҡиғалар һуңғараҡ осор ваҡиғалары менән бергә үрелеп киткән булһа кәрәк. Сихырсы һөйләүе буйынса, был дәүләт рус дәүләте менән оҙайлы көрәш алып бара һәм аҙаҡ бөтөнләй тармар ителә, уның баш ҡалаһы — Брахим емертелә. Сихыр эйәһе башҡорттарҙың бер диндән булыуынан файҙаланып, уларҙы башҡа дин тотоусы урыҫтарға ҡаршы ҡүтәрергә маташа, ләкин уның хыялы бойомға ашмай.

[66]Аҡ бей (аҡ кенәз, аҡ батша) — рус батшаһы.

[67]Орҡандың реаль шәхес булыу-булмауы асыҡланмаған.

[68]Бында һүҙ Ҡазан ҡалаһын баҫып алыуҙы еңелләштереү уйы менән Иван Грозный тарафынан төҙөлгән нығытмалы Свияжеск ҡалаһы тураһында бара.

[69]Бына ошонан һуң «Ун етенсе кисә»нең аҙағы, ә «Ун һигеҙенсе кисә»нең тәүге биттәре юғалған.

[70]Алдар беренсе күреүҙә үк батыр ҡыҙҙың тап үҙе эҙләп сыҡҡан Зөһрә икәнен белһә лә, белмәмешкә һалышып (ҡыҙҙың ирҙәрсә кейенеүенә ирҙәрсә баштан-аяҡ ҡоралланғанына ышанған булып), уға юрамал батыр егет тип өндәшә, уның менән ирҙәрсә һөйләшкән була. Ә артабан, күреүебеҙсә, был үҙенән-үҙе асыла.

[71]**Шанхай салбары** — башҡорт эпик фольклоры әҫәрендә беренсе тапҡыр осрай. Әммә осраҡлы рәүештә килеп инмәгәндер. Ҡытай сауҙагәрҙәре IX— XI быуаттарҙа уҡ Башҡортостандың бер өлөшөн биләп торған Болғар дәүләтенә үтеп ингәнлектәре билдәле. Шанхай салбары шул юл менән, күрәһең, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары араһында ла әҙме-күпме таралған булыуы мөмкин.

[72]«Утыҙ икенсе кис»тә Алдар батыр ырыуынан ҡунаҡтар килеү эпизодының тәүге өлөшө өҙөлгән.

[73]Русса текста тәржемәсе мал бөтөүен шулай аңлатҡан: «Бетеү-ҡытай туҡымаһына йәки мәлләгә һалып өсмөйөшләп тегелгән доғалыҡ. Уны аттың муйынына тағалар йәки ялына ҡушып үрәләр.

[74]**Үзбәк** — Алтын Урҙа ханы (1312—1342). Уның хакимлыҡ итеү осоронда Алтын Урҙа ҡеүәтле ханлыҡҡа әүерелә. Үзбәк хан рәсми рәүештә ислам динен дәүләт дине итеп иғлан итә.

[75]Бында һүҙ Урта Азия һәм Көнсығыш Европаның ҙур территорияһын берләштергән Алтын Урҙа дәүләте барлыҡҡа килгән һәм уның тарҡалыу осоронда (XV быуат башында) үҙаллылыҡ иғлан алған Нуғай Урҙаһы хаҡында бара.

[76]Октябрь революцияһына тиклем ҡаҙаҡтарҙы ҡара-ҡырғыҙ йә булмаһа ҡырғыҙ ғына тип атап йөрөткәндәр.

[77]«Башҡорттар борон йәнлектәрҙең үҙ башлыҡтары йәки эйәләре була тип уйлар булғандар. Бөтәһенән дә көслөрәк булған арыҫланды бигерәк тә шундай эйә тип күрһәткәндәр. Йәнлектәр эйәһе ҡайһы саҡта кеше ҡиәфәтенә лә кереп йөрөй ала, имеш, әммә, ен-пәрейҙән айырмалы рәүештә, күпселектә зыянһыҙ була, имеш. Тик ҡатын-ҡыҙ затынан ғына улар хуш күңелле түгел икән. Уларҙан хатта балалары ла була, имеш. Ул балалар, кәрәк саҡта, арыҫланға ла әйләнә ала икән». — Тәржемәсе аңлатмаһы.

[78]Ошо урында Зөһрәнең һөйләүе русса ҡулъяҙмала өҙөлә: бер нисә бит етешмәй (юғалған). Унда Алдар ырыуҙаштарының, йәш-елкәнсәктең Алдар менән Зөһрәне нисек итеп ҡаршы алыуҙары хикәйәләнгән булырға тейеш.

[79]Ошо урында хикәйәт өҙөлә. Уның аҙағы 1887 йылға тиклем үк юғалған. Сөнки тәржемәнең һуңғы битенә: «Был ҡулъяҙмала йөҙ ҙә утыҙ алты (136) бит. 1887 йыл, № 96», — тип бер китапханасы ҡул ҡуйған (ҡултамғаһы асыҡ түгел).

## МАҠТЫМҺЫЛЫУ

1962 йылда С. Галин тарафынан Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районының Сабаҡлы ауылында Даянов Һибәтулланан (85 йәштә, грамотаһыҙ) яҙып алынған. ҒА: ф. 3, оп. 21, һ. б. 8. Тәүге тапҡыр баҫыла.

Информатор был әҫәрҙе иртәк тип атаған. Уныңса — «иртәк — ул боронғо ил батырҙарының башынан үткәнде һөйләү, ғәҙәттә, йыр менән аралашып килә». Иртәккә ул шулай уҡ «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»ҙы ла индергән.

Заманында Маҡтымһылыу образы киң таралған булһа кәрәк. Ырымбур яҡтарында яҙып алынған ҡайһы бер сюжеттарҙа, мәҫәлән, «Ҡара юрға»ла Маҡтымһылыу исемле герой хәрәкәт итә. Үҙ мәлендә эпосҡа Дауыт Юлтый ҙа иғтибар итә һәм шул нигеҙҙә драма әҫәре яҙа. Эпостың башҡа варианттары ҡағыҙға теркәлмәгән.

[80]Уҡ башына ҡауырһын ҡуя.

[81]Элек хөрмәтле кешегә, ҡунаҡҡа баш ите ашатыу йолаһы булған.

[82]Токомдо ҡоротоу маҡсатында ҡылған саралар.

## УҘАҠ МЕНӘН ТУҘАҠ — БАЛАБӘШНӘК ЯРСЫҒЫ

1981 йылда Н. Шоңкаров тарафынан Мәсетле районы Йонос ауылында Рәшит Әхтәровтан (1931 йылғы) яҙып алынған. — ҒА: ф. 3, оп. 12, д. 70 (?)

Рәшит Әхтәров һөнәре буйынса уҡытыусы, БДУ-ның башҡорт филологияһы факультетын тамамлаған. Һәүәҫкәр фольклорсы, крайҙы өйрәнеүсе, сәсән һәм шағир. Күп мәҡәләләре, шиғырҙары республика матбуғатында донъя күрҙе. 1996 йылда вафат булды.

«Уҙаҡ менән Туҙаҡ — балабәшнәк ярсығы» тигән был эпик әҫәрҙе Р. Әхтәров тәүләп 1942 йылда Мәсетле районы Инәле ауылында һуҡыр Мөхәмәдулла ҡарт менән һуҡыр Ғәйнел ҡарсыҡтан ишетә. 1948 йылда Әбдрәхим ауылында Мөхәмәҙиев Йосоптан (1864 йылғы), Айып ауылында Зәһиҙуллин Зәғәфурандан (1880 йылғы) һәм Сибәғәтуллин Ғәлләмдән (1886 йылғы), 1964 йылда Балаҡатай районы Оло Билән ауыл Советына ҡараған Ҡәкәй ауылында бер әбейҙән (исемен оноткан), 1965 йылда шул уҡ районындағы Айғыръял ауылында Муллаяр ҡарттан (1896 йылғы) яҙып ала һәм тулыландырылған текст төҙөй.

[83]Эпос тәүге тапҡыр 1983 йылда «Ағиҙел» журналының һанында баҫылып сыға. Уны баҫмаға фольклорсы Мөхтәр Сәғитов әҙерләй. Ҡыҙғаныска ҡаршы, этнографик әҙәбиәттә бындай этноним осрамай. Шулай ҙа, X—XI быуаттарҙағы тарихи ваҡиғалар теҙмәһенән сығып ҡарағанда, һуғышсан балауҫалар — бәшнәктәрҙең дошманы ҡыпсаҡ — половсылар булыуы ихтимал. XI быуат башында ҡыпсаҡтарҙың ҡыҫымы арҡаһында бәшнәктәрҙең бер өлөшө көнбайышҡа, ә ҙур булмаған өлөшөнөң (балабәшнәктәрҙең) төньяҡ-көнсығышҡа күсенеп, Уралда төпләнеүе мөмкин. Әҫәрҙә балабәшнәктәрҙең Урта Уралға күсенеү юлдары ентекле һүрәтләнә.

##ҺУҢҒЫ ҺАРТАЙ

Был хикәйәт 1935 йылда археолог, крайҙы өйрәнеүсе Максим Ильич Касьянов (1944 йылда вафат булған) тарафынан урыҫсаға тәржемә ителеп Башҡортостан Үҙәк башкарма комитет Президиумы янындағы Башҡортостанды ғилми өйрәнеү йәмғиәтенә тапшырылған булған. Хәҙерге көндә ул Рәсәй фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең ғилми архивында һаҡлана: ф. 3, оп. 12, е/х. 259. Паспорты булмағанлыҡтан, уның ҡайҙа, кемдән, ҡасан яҙып алыныуы билдәле түгел. Уның башҡортса нөсхәһе лә әле табылмаған. Бәлки, ул мәрхүм М. И. Касьяновтың туғандарында йә таныштарында һаҡлана торғандыр. Нисек кенә булмаһын, был әһәмиәтле ҡомартҡы беҙгә урыҫ телендә генә килеп еткән. М. И. Касьянов әҫәрҙе тәржемәләгәндә уның рухына, йөкмәткеһенә, лексик үҙенсәлегенә зыян килтермәҫкә тырышҡан. Урыны-урыны менән айырым һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе башҡортса биргән. Урыҫсанан кире башҡортсаға М. Сәғитов менән Ә. Биишев тәржемә иткән. 1-се тапҡыр «Ағиҙел» журналында баҫыла (1971 йыл, 2-се һан). Йәнә «БХИ, 1980. Легендалар, риүәйәттәр» китабының аңлатмалар өлөшөндә баҫыла.

Эпос яҙыусыларҙы ла әҫәрләндерҙе. Мәҫәлән, шағир һәм прозаик Роберт Паль ошо әҫәр нигеҙендә «Джалык» исемле поэма яҙҙы. Унда әҫәрҙең идеяһын асҡан ошондай юлдар бар:

...Когда выпита чаша до дна,
Понял я, умудренный годами скитаний,
Что она,
Золотая,
На всех нас — одна,
Всенародная чаша борьбы и страданий.

Пить ее в одиночку — не лучший удел.
Только вместе ее мы наполним свободой:
Вот и все,
Что сказать напоследок хотел
Вам бездомный байгуш
Из Сартаева рода.

«Һуңғы һартай» урыҫса «Последний из Сартаева рода» тип атала. Бында һүҙ төрлө башҡорт ҡәбиләләре составына инеп, хәҙерге көндә лә йәшәп ятҡан һарт ырыуы башҡорттары хаҡында бара (һарт әйле, һарт бөрйән һ. б.).

[84]Боронғо халыҡтарҙа төрлө мәғәнә бирелгән әйберҙәр аша хатлашыу, аңғартыу ғәҙәте булған. Ялыҡ бей, һыныҡ уҡ менән үле сыҫҡан ебәреп, миңә ҡаршы яуға сыҡһаң, ҡулыңдағы ҡоралың һыныр, һәләк булырһың, тигәнде аңғартҡан.

[85]Башҡорт ырыуҙарының билдәле ағасы, ҡошо, тамғаһы, ораны булған. Ялыҡ бей шуның менән үҙ ырыуының бойондороҡһоҙ, үҙаллы булыуын аңғарта.

[86]Хөсәйенбәк — Башҡорттарға ислам динен таратып йөрөгән миссионер (XIII быуат). Уға Башҡортостандың Шишмә районы Шишмә ауылы эргә-

һендә Дим буйында кәшәнә ҡуйылған. Хөсәйенбәк кәшәнәһе әлегә тиклем һаҡланған.

[87]Татар-монгол ғәскәре унарлы системаға ҡоролоп, ун, йөҙ, ун мең кешелек төркөмдәрҙән торған. Йөҙ кешелек ғәскәр башында — йөҙбаш, мең кешелектекендә — меңбаш, ун меңлек ғәскәр башында төмән торған.

[88]Бында һүҙ татар-монгол яуына тиклем үк ислам динен таратып йөрөгән миссионерҙар тарафынан Башҡортостанда төҙөлгән мәсет хаҡында бара. Ғази мәсете күп йылдар үткәндән һуң янып юҡҡа сыҡҡан булһа кәрәк.

## ҠОБЛАН БАТЫР

80-се йылдар башында Ғ. Б. Хөсәйенов Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районында тыуып үҫкән Фәсхетдин Илбулдиндан нуғайлы батырҙарына һәм шул иҫәптән Ҡоблан батырға бәйләнешле легендаларҙың айырым сюжет схемаларын яҙып ала. Ф. Илбулдин бала һәм йәш сағында ҡарттарҙан был сюжеттарҙың тулы һәм шиғыр менән һөйләгәндәрен ишеткәнлеге хаҡында әйтә. Ул хәҙер шуларҙың хәтерендә ҡалған тотмарын ғына иҫләй.

1984 йылда Ғ. Б. Хөсәйеновҡа Һөйөндөкова Сабира (1905 йылғы) «Ҡоблан батыр» эпосының бер күсермәһен тапшыра. Уны Ырымбур өлкәһе хәҙерге Красногвардеец районы Юлтый ауылында бер дәфтәрҙән күсереп алған була. Әммә Ғ. Б. Хөсәйенов ошо ауылдың элекке мәктәп директоры Юлтыев Зәкәриә ҡулына ингән был дәфтәрҙең осона сыға алмай. З. Юлтыев әйтеүенсә, был дәфтәрҙе уға бер уҡыусыһы тапшырған булған. Һуғыштан һуң, өй һүткәндә дәфтәр юғалған.

Күсермәнең теле хәҙерге башҡорт әҙәби телендә, орфографияһының шаҡтай камил булыуына ҡарағанда (ул 20-се йылдарҙан икенсе яртыһында камиллаштырылған ғәрәп шрифты нигеҙендәге башҡорт орфографияһы), дәфтәр 20-се йылдар аҙағынан йәки 30-сы йылдарҙа күсерелгән булырға тейеш.

Был «Ҡоблан батыр» версияһы сюжеты менән ҡаҙаҡ версияларына яҡын. Ләкин ул шаҡтай ябайлашҡан, йыйнаҡланған һәм шиғыр менән проза аралашып килеүенә ҡоролған яҙма. Шуныһы характерлы, шиғыр өлөштәре ҡобайыр менән булып, ул бүтән башҡа героик эпостар тибында, поэтик әйтелмәләре (клише) бер төрлөрәк.

Ҡулъяҙма әлеге көндә академик Ғ. Б. Хөсәйеновтың шәхси архивында һаҡлана. Беренсе тапҡыр 1995 йылда «Ағиҙел» журналының ? һанында баҫылып сыға. Ғ. Б. Хөсәйенов әҫәргә инеш мәҡәлә лә бирә.

## КҮСӘКБЕЙ

1960 йылда С. Ф. Миржанова тарафынан Баймаҡ районы Иштуған ауылында 82 йәшлек Өмөтбаев Мөхәммәттән яҙып алынған. ҒА: ф. 3, оп. 23, һ. б. 5. Тәүге тапҡыр баҫыла.

[89]Ун ике еленле бейә — ҡолон сағынан ун икеһен дә бергә тотоп, бергә тәрбиәләгәндәр. Береһен менеп сапһаң, ун бере лә артыңдан саба.

[90]Дөрөçө — Күсәкбей. Күçәкбей — халыҡ этимологияһы (Күçәк тәгәрәткәндән һуң да имен ҡалған яралғы, йәнәһе).

## ҠАРАҒӨЛӨМБӘТ МЕНӘН АҠҠОЛОМБӘТ.

Исеме шартлы бирелде. М. Буранғолов тарафынан яҙып алынған һәм «Йәйләү» тип исемләнгән (ҡасан, ҡайҙа, кемдән икәне әйтелмәгән) был әçәр «Дөйөм тарихи ваҡиғаларға ҡарай сығарылған башҡорт көй йырҙарының тарихы, IV киçәк, 1917—1940 йылдар» тигән, М. Буранғол тарафынан төҙөлгән ҡулъяҙма йыйынтыҡҡа индерелгән. Йыйынтыҡ Өфө дәүләт сәнғәт институтының фольклор кабинетында һаҡлана. Инв. № 49, т. 3.

Беренсе тапҡыр Б. Байымов тарафынан төҙөлгән «М. Буранғол. Сәсән аманаты» (Өфө, 1995) тигән китапта баçыла.

Эпос ҡыпсаҡ версияһына ҡарай, әммә әçәргә үҙәнсәлекле сюжет һыҙығы, яңы мотивтар һәм образдар хас. Иртәктең идея асылында ырыу-ара талаштарҙың һәләкәткә килтереүен күрһәтеү, уларҙы фашлау ята. «Бөрйән» ырыу атамаһын «бүре йән» һүрәтенән сыҡҡан тип аңлатыуы менән дә башҡа варианттарҙан айырыла.

## КҮСӘК БЕЙ

*(«Бабсаҡ менән Күсәк» эпосының ҡыпсаҡ версияһы)*

«Ҡиссаи Күсәк бей» исеме менән 1928 йылда Ә. Исмәғилев тарафынан Башҡортостандың Йылайыр кантоны Бөрйән волосы (хәҙерге Бөрйән районы) Ҡыпсаҡ (Үҙән) ауылы Сабирйән сәсән Мөхәммәтҡоловтан яҙып алынған. ҒА: ф. 3, оп. 12/247, 1—59-сы биттәр. Баçылды: БХИ, 1973.

Был вариант ҡыпсаҡ версияһына ҡараған башҡа варианттарҙан үҙенең тулылығы, художество йәһәтенән шаҡтай камиллығы менән айырылып тора. Шуға ул төп текст итеп алынды һәм томға тулы килеш индерелде.

Сабирйән сәсән Мөхәммәтҡолов 1890 йылда Ырымбур губернаһы Орск өйәҙе Ҡыпсаҡ ауылында хәлле крәçтиән ғаиләһендә тыуған. Ул Ырымбур мәҙрәсәһендә уҡый. Тәүҙә ҡаҙаҡтар араһында, һуңыраҡ хәҙерге Бөрйән, Баймаҡ яҡтарында балалар уҡытып йөрөй. Сабирйән бер үк ваҡытта оçта ҡурайсы, бейеүсе, шулай уҡ данлы бәйетсе лә була. Ул бик күп ҡобайырҙарҙы, хикәйәттәрҙе яттан белгән һәм уларҙы яратып башҡарыр булған. Ҡаҙаҡ өләндәрен, йырҙарын да яҡшы белгән. Ул яҙып алған ҡайһы бер фольклор әçәрҙәре, шулай уҡ уның үҙ ижады ҡулъяҙма дәфтәр рәүешендә халыҡ араһында ҡулдан ҡулға күсеп йөрөгән. Сәсән 1934 йылда вафат булған.

[91]Мәсем — эпик фольклорҙа һәм легендаларҙа йыш осраусан хан образы. «Аҡбуҙат» эпосында ул кире образ итеп һүрәтләнә. Башҡортостандың Бөрйән районында Мәсем тауы бар. Легендаларға ҡарағанда, ошо тау тирәһендәге Ҡараһыйыр яланы элек Мәсем хан йәйләүе булған. Мәсем хандың реаль шәхес булғанын раçларлыҡ тарихи мәғлүмәттәр билдәле түгел.

[92]Фольклор материалдарында Мәсем хан ун ике башҡорт ырыуын берләштереүсе хан итеп һүрәтләнә. «Бабсаҡ менән Күсәк»тең 1928 йылда Сәғит Мирасов тарафынан Йылайыр кантоны Таналыҡ волосы Иҙелбай

ауылында яҙып алынған тексында Мәсем — бөрйән ырыуынан сыҡҡан хан итеп күрһәтелә («Башҡорт аймағы», 1929, № 7, 73-сө бит).

[93]Бер ырыу кешеләренең малын икенсе ырыуҙан килеп көслөк менән ҡыуып алып китеү, йәғни барымтаға йөрөү, иҫтә тотоп әйтелгән.

[94]Башҡортостандың Бөрйән районында Ураз хан тураһында байтаҡ легенда таралған. Байғаҙы ауылына яҡын Уразы тигән тау ҙа бар, шул тау битләүендә элек Ураз хан йәйләүе булған, ти. Ул Мәсем хан менән бер дәүерҙә йәшәгән, тиелә.

[95]«Эсер һыу, ейә торған ризыҡ бөтһә, өйҙә ятҡан менән дә үлермен, ти»: ислам дине өйрәтеүенсә, эсер һыу, ашар ризыҡ бөтөн (нәфәҡә) кешегә Алла тарафынан үлсәп бирелгән, шул бөтөү менән үлем килә.

[96]Бабсаҡ батырҙың убалы ҡәбере Башҡортостандың Бөрйән районы Аҡбулат ауылына яҡын Үлебар менән Батран йылғаһы ҡушылған ерҙә тип иҫәпләнә.

[97]Ҡусәк төрки исем, боронғо формаһы Ҡәүсәк — һылыу, ыҫпай. (Ҡара: С. Е. Малов. Памятники древнетюркской письменности. М. Л., 1951. С. 396).

[98]Легендаларҙа, эпик әҫәрҙәрҙә ана шул «бер йәндән» бөрйән ырыуы таралып киткән, тип аңлатыла. Был, әлбиттә, тарихи дөрөҫлөккә тап килмәй. «Ҡусәк бей» эпосы ижад итеүҙән бик күп элек, VII быуатта уҡ бөрйәндәрҙең ҙур һәм көслө ҡәбилә булып йәшәүҙәре тарихҡа билдәле.

## ВАРИАНТТАРЫ

1-се вариант. «Хикәйән Ҡусәк бей» исеме менән 1916 йылда Сабирйән сәсән Мөхәммәтҡолов тарафынан Ырымбур губернаһы Орск өйәҙе Икенсе Этҡол ауылында (Башҡортостандың хәҙерге Баймаҡ районы) яҙып алынған. ҒА: ф. 3, оп. 12/303, 60—90-сы биттәр. Текст ара-тирә проза аралашып килгән шиғырҙан тора.

Был вариант, Ғәббәс Дәүләтшин тарафынан бер аҙ ҡыҫҡартылып, 1929 йылда «Башҡорт аймағы» журналының 7-се һанында баҫылған, артабан «Башҡорт халыҡ ижады» йыйынтығының 1-се томына индерелгән (Өфө, 1954).

Әҫәр йөкмәткеһе яғынан ғына түгел, шиғри тексы менән дә төп вариантҡа бик яҡын тора, күп урында унан айырылмай. Үҙенсәлек ҡайһы бер эпизодтарҙа һәм әҫәрҙең аҙағында күренә. Ҡыпсаҡ батыры Бабсаҡ бейҙе ерләү күренешенән һуң батыр ҡәберенең урыны хәҙерге Бөрйән районы үҙәге Иҫке Собханғолдан бер нисә саҡрым алыҫлыҡта булыуы хаҡында аңлатма бар. Йәшәү һәм үлем хаҡында философик шиғыр юлдары индерелгән. «Хикәйән Ҡусәк бей»ҙең борондан халыҡ араһында һөйләнеп килеүе һәм, киләсәк быуынға ла һаҡланып ҡалһын өсөн, уны ҡағыҙға төшөрөүҙең кәрәклеген ҡеүәтләгән фекерҙәр әйтелгән.

Ҡульяҙманың аҙаҡҡы биттәре юйылып бөткәнлектән, унда яҙылғанды таныу мөмкин булманы. Әҫәрҙең ахырында һуңғы осор шауҡымы ныҡ ҡына һиҙелә. Мәҫәлән, Ҡарағөлөмбәт ырыуынан яңғыҙ ҡалған етем көтөүсе малайҙың, туҙҙырылған илен ташлап, көньяҡ-көнбайышҡа, Танып йылғаһы буйына китеүе һәм унда сыуаш, мари байҙарында ялсылыҡта йөрөүе, унан һуң Иҙел башына ҡайтып, балалары ишәйеп донъя көтөүе, бөрйән ырыуы-

ның артыуы хаҡында әйтелә. Сыуаш, мари һәм башҡа халыҡтарҙы Башҡортостан еренә күсеп килеүе һуңғы күренеш, һәм боронғо әҫәр сюжетында был тарихи яҡтан анорхизм булып тора.

2-се вариант. ҒА: (ф. 3, оп. 12/300, 8—48-се, 57—74-се биттәр, шулай уҡ ф. 3, оп. 12/299, 1—19-сы биттәр. Был фондта бер үк вариантҡа ҡараған өс текст бар. Улар йөкмәткеләре менән төп вариантҡа тура киләләр. Өсөнсө текст 19-сы биттә өҙөлә (артабанғы биттәре йыртылған).

3-сө вариант. 1938 йылда шағир Ғ. Сәләм тарафынан Башҡортостандың Бөрйән районы Байғаҙы ауылында яҙып алынған. Кемдән яҙып алыныуы хаҡында мәғлүмәттәр юҡ. ҒА: ф. 3, оп. 10/32, 16-сы бит. Текст прозанан тора һәм әҫәрҙең мөһим эпизодтарын һанауҙан ғибәрәт.

## «БАБСАҠ БЕЙ МЕНӘН ҠАРАҒӨЛӨМБӘТ БЕЙ»

*(«Бабсаҡ менән Күсәк» эпосының бөрйән версияһы)*

1939 йылда яҙыусы Али Ҡарнай Башҡортостандың Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылында Рәхмәт сәсән Исламғоловтан яҙып алған. Сәсән тураһында мәғлүмәттәр бирелмәгән. ҒА: ф. 3, оп. 12/300, 1—17-се биттәр. Текст тик прозанан ғына тора. Ҡулъяҙма бөрйән версияһына ҡараған варианттар араһында үҙенең сюжет бөтөнлөгө, мотивтарҙың сағыштырмаса тулылығы менән айырыла. Баҫылды: БХИ, 1973.

[99]Ҡарағөлөмбәт бейҙең, уҡ-һаҙағын муйынына элеп, уртаһында Бабсаҡ бей ултырған халыҡты өс-дүрт мәртәбә әйләнеп сығыуы —уның дошманын үлтерергә йыйыныу ниәте. Был борондан килгән һунарсылар йолаһы. Ҡырпаҡ ҡар яуыу менән, һунарсылар, таралышып, айыу өндәрен ҡарайҙар. Һунарсы, айыу ятҡан өң ауыҙына бик үк яҡын бармайынса, ҡырҙан түңәрәтеп, ҡарҙы ташлап сыға. Был «айыу ятҡырыу» тип атала. Ятҡырылған, йәғни өнө тирәләп өҫтән тапалған, айыуҙы тик шул тәүҙә тапҡан кеше генә үлтерергә хаҡлы була. Ул кеше үҙе ҡасан теләһә, шул ваҡытта барып, өндән айыуҙы ала. Быға башҡа кешенең хаҡы булмай. Бына ошо һунарсылар йолаһы менән Ҡарағөлөмбәт Бабсаҡ бейҙе үлтерергә ишара яһай.

[100]«Бабсаҡ бей менән Күсәк» — бик ҡатмарлы эпос. Унда башҡорт тарихының урта быуаттар осоро өсөн хас элементтар ҙа шулай уҡ сағыштырмаса һуңғараҡ, мәҫәлән, Алтын Урҙа дәүләтенең емерелеү осоро ла сағылып ҡала. Тарихсыларҙың (мәҫәлән, Р. Г. Кузеевтың) иҫбатлауынса, XV быуаттың икенсе яртыһында Үҙәк һәм Көньяҡ Башҡортостанда ике эре нуғай феодалы — Басман мырҙа менән уның Түрә исемле туғаны хакимлыҡ итә. Басманға Яйыҡ, Ҡыҙыл, Таналыҡ, Ағиҙел, Дим буйы башҡорттары буйһоноп йәшәйҙәр. Түрә биләмәһенә үҙәк Башҡортостан территорияһы инә. Ана шул тарихи шәхес Түрәнең эпоста образ булып инеүе бик мөмкин.

[101]Яу менән килеп ҡон алыуҙы аңғартыу йолаһы.

## hҮҘЛЕК

*Абсая баҫты* — тарбайып кирелеп баҫты.

*Аҙаҡ диңгеҙ* — Азов диңгеҙе.

*Аҡ диңгеҙ* — Каспий диңгеҙе.

*Аҡhыу* — Ағиҙел.

*Аҡшам (фар.)* — эңер төшкән ваҡыт. Шул мәлдә уҡыла торған намаҙ (дүртенсе).

*Аҡылдай* — аҡыл итә, уйлай, кәңәш итә.

*Аҡтыҡ өй* — hуңғы ғаилә мәғәнәhендә.

*Алай* — полк.

Алымсағым — ала торған, кәләш була торған ҡыҙ.

*Араhында (аралыҡта)* — ерендә мәғәнәhендә.

*Асыл йорт* — төп йорт.

*Асылы* — Башҡортостандың көнбайышындағы ҙур күл.

*Атабәк (төрки)* — оло бей.

*Атама балдаҡ* — исеме йәки тамғаhы төшөрөлгән шәхси балдаҡ.

*Атын-йүнен hораша* — исемен, хәлен hораша.

*Афәт (ғәр.)* — бәлә-ҡаза, бәхетhеҙлек.

*Аяндап* — аушанлап.

*Баҙал* — Мәсем тауының бер артымы.

*Баҡан* — бағана, ҡолға.

*Барлас* — монгол ырыуының береhе. Аҡhаҡ Тимер төркиләшкән барлас ырыуынан. Бында hүҙ уның гвардияhы хаҡында.

*Бабсаҡ* — Алтын Урҙа хандары тарафынан билдәләнгән айырым өлкәләрҙәге хаким.

*Баҫма* — яҙып тапшырылған әмер.

Барымсыҡ — бара торған, ир була торған кеше.

*Бауырлыҡ* — йәш мал өшөмәhен өсөн бауырынан аша тартып бәйләнгән япма (септә).

*Баян итеү* — хикәйәләү, hөйләү.

*Бихисап (фар.)* — иҫәпhеҙ, хисапhыҙ.

*Боҫмаҫ* — йәшенеп ятмаҫ.

*Бөлдөргөhөнә тиклем* — ҡанатына тиклем.

*Бөрө* — Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышындағы йылға, Ағиҙелдең уң ҡушылдығы.

*Брахим* — Волга — Кама болғарҙары, йәки монголдар тарафынан төҙөлөп, аҙаҡ емерелгән ҡала булыуы ихтимал.

*Буҙбейә* — Бөрйән районындағы ялан исеме.

*Булыпты* — үткән заман хәбәр ҡылым формаhы — булды. Ҡаҙаҡ теле йоғонтоhо hиҙелә.

*Буйлы* — йөклө, ауырлы ҡатын.

*Бүре иләүе янында мал бағыр* — бүре бер ҡасанда балалары яткан иләүе янындағы малға теймәй.

*Бышым тегеү* — hуғылған киндерҙән тегелгән ике ҡатлы бишек төбө сепрәге.

*Вафа (ғәр.)* — тотанаҡлыҡ, ышаныс.

*Ғарыз итте* — белдерҙе.

*Ғибәҙәт (ғәр.)* — табыныу.

*Ғиффәтле* — саф, тоғро.

*Ғуд-ғәмбәр (ғәр.)* — янғанда хуш еҫ сығара торған мускус үҫемлеге.
*Ғәйнә* — Башҡортостандың төньяғында һәм Пермь өлкәһенең көньяғында йәшәүсе башҡорт ҡәбиләһе.
*Ғәрәсәт зиһене (ғәр.)* — көслө, иҫ китмәле зиһене, аҡылы.
*Данышман (фар.)* — ғалим, уҡымышлы.
*Дарман (фар.)* — дарыу, дауа.
*Дөйәһуйған* — Бөрйән районындағы бер ялан исеме.
*Дәл булы* — тап булыу.
*Дәғүәт* — доғалыҡ. Мосолмандар уны һул яҡ ҡултыҡ аҫтында тағып йөрөткәндәр.
*Дәң килеп* — тап килеп, тура килеп.
*Жуңғар* — ҡалмыҡ.
*Залим (ғәр.)* — ҡанһыҙ, яуыз.
*Заты* — нәҫел-ырыуы.
*Зауыҡ булған (ғәр.)* — әүәҫ булған.
*Зурлыҡ (фар.)* — көслөк, ирекһеҙләү.
*Зәрдабынан* — дөрөҫө зәрбавынан булырға тейеш. (Зәрба — ғәрәпсә килеп тейеү, бәреү, һуғыу).
*Еле* — ҡолондар бәйләй торған урын, кәртә
*Ете иҡлим* — ете климат, боронғо ғилемдә ерҙең, экваторҙан төньяҡ ҡотопҡа тиклемге ете бүленеше.
*Ефетлеккә* — кәләшлеккә, ҡатынлыҡҡа.
*Иҙен (ғәр.)* — рөхсәт.
*Икенде* — ҡояш байыр алдынан уҡыла торған намаҙ. Баш намаҙҙың өсөнсөһө.
*Ике мөсәл* — 24 йыл. Бер мөсәл 12 йылдан тора. Һәр йыл хайуандар исеме менән йөрөтөлә.
*Имамай* — Бөрйән районындағы ялан исеме.
*Иман (дини)* — ышаныу, инаныу.
*Имән-түш* — хәҙерге Өфө.
*Инәй* — Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш райондарында атаәсәңдән өлкән ҡатындарға өндәшеү.
*Инғам-иҡсан (ғәр.)* — бүләк, ярҙам.
*Ирәмәл* — Көньяҡ Уралдағы тау.
*Ирәндек* — Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышындағы тау.
*Йәйле кисеү (Бей кисеүе)* — Бөрйән районындағы Байназар ауылы янындағы Ағиҙел кисеүе.
*Касной* — кәмә.
*Кисә* — бында төн мәғәнәһендә.
*Киҫтән* — һуғыш суҡмарының бер төрө.
*Киттең* — киттең мәғәнәһендә.
*Көш* — ултырҙаш, кәңәштәш, серҙәш.
*Көҫәй* — теләй.
*Күжә* — Башҡортостандың Бөрйән районындағы йылға. Нөгөшкә ҡоя.
*Күрҙемдек* — нимәнелер күҙ ҡараһылай күреп тәрбиәләү.
*Кәреү* — ҡолаҡҡа ҡаты, һаңғырау.
*Кәрәмәтле (ғәр.)* — мөғжизәле.
*Ҡайлус (ғәр.)* — әйтеүсе, һөйләүсе, башҡарыусы.
*Ҡадир әл-Ислам* — Хызыр Ильяс булыу ихтимал.
*Ҡалҡа* — Азов диңгеҙенә ҡойған йылға.
*Ҡалта* — һунар кәрәк-ярағы тағылған ҡайыш билбау; кеҫә.
*Ҡалъян* — йәйә һауыты.
*Ҡанданмағыҙ* — ҡаныҡмағыҙ.
*Ҡандра* — Башҡортостандың көнбайышындағы ҙур күл.
*Ҡара Абыз* — Благовещен районындағы Ағиҙелдең уң яғында Ҡара Абыз күле бар. Шундай исемле ауыл да булған. Улар ошо исемдән килеүе мөмкин.
*Ҡарағым (ҡаҙ.)* — күҙ ҡарам.
Ҡараһыу — Арал диңгеҙенә ҡойған йылға.
Ҡарғып ҡалдым — һаҡлап, ҡурсылап ҡалыу.
*Ҡармасан* — Башҡортостандың көнбайышындағы йылға, Ағиҙелдең һул ҡушылдығы.
*Ҡарымта* — ҡанға-ҡан ҡойҙороп үс алыу йолаһы.
*Ҡарыуяраҡ* — яуҙа һаҡланыу ҡоралы.
*Ҡарыһы ла* — ҡарты ла.

*Ҡауым (ғәр.)* — ҡәбилә, ырыу, нәҫел.
*Ҡашҡа батыр* — данлыҡлы, атаҡлы батыр.
*Ҡиәмәт (ғәр.)* — дини легенда буйынса, донъя бөткән көн. Бында үлем мәғәнәһендә.
*Ҡойонсаҡ* — Бөрйән районындағы бәләкәй бер йылға.
*Ҡолан сәс* — һорғолт һары (каштан төҫөндәге).
*Ҡонон* — үсен.
*Ҡуй бағып* — ҡуй көтөп.
*Ҡумырыҡ* — тупрағын һыу ашаған ағас тамыры.
*Ҡурыуҙы* — Бөрйән районындағы Байназар ауылы эргәһендәге тау.
*Ҡыҙылер* — Бөрйән районындағы ялан исеме. Легенда буйынса, ошонда ҡыпсаҡтар менән бөрйәндәр һуғышҡан.
*Ҡылысың киҫалмаҫ* — йәғни тимер кейемдә, колчугала була.
*Ҡыуғын* — ҡырҡҡан ағастар төбөнән үҫкән йәш ағастарға әйтелә.
*Ҡыпсаҡ* — иң эре башҡорт ҡәбиләләренең береһе. Урыҫтар уларҙы половецтар, европалылар — кумандар тип йөрөткәндәр.
*Ҡырҡма башаҡлы уҡ* — ике яғы үткер, ялпаҡ тимер башаҡ.
*Ҡәлғә* — нығытмалы ҡала, крепость.
*Малданмағыҙ* — маллы булмағыҙ.
*Маңҡа (һыртлап)* — Башҡортостандың хәҙерге Мәләүез районындағы ауыл.
*Матҡурып* — ҡомһоҙланып, ҡурҡытып, айҡап йөрөү.
Маян күле — хәҙерге Силәбе өлкәһендәге Ҡоншаҡ районындағы Мур ауылы эргәһендәге күл.
*Мисек-йофар* — мускустың бер төрө.
*Моронон биҙәләп тиштерә* — моронон ҡыҙҙырылған тимер менән тиштерә.
*Мөҡәфәт (ғәр.)* — бүләк, хаҡ.
*Мөсәлле (ғәр.)* — миҫле, рәүешле, шикелле, төҫлө.
*Муйынсаҡлы* — Башҡортостандың Бөрйән районындағы тау исеме.
*Муҡшы* — мордва.
*Мөслимә* — мосолман ҡатын-ҡыҙ.
*Мөһөрләнгән (ғәр)* — мисәтләнгән, тамғаланған.
*Мыҡтылары* — көслөләре.
*Мырҙа* — кенәз, ырыу башлығы.
*Мәғәрә* — мәмерйә, тау ҡыуышы.
*Мәйле (ғәр.)* — теләһә, кәрәк.
*Мәканәте* — торған ере, биләгән урыны.
*Мәрҙәс (фар.)* — мәрдәнә, дан, маҡтау.
*Мәрке* — аҙыҡ-түлек, ғәҙәттә, ҡорот һалыу өсөн ҡабыҡтан яһалған һауыт.
*Мәхлүк (ғәр.)* — йән эйәһе, терек-лек, хайуан.
*Насарҙарын* — бында «көсһөҙҙәрен» мәғәнәһендә.
*Низам* — ҡағиҙә.
*Нөгәр* — *нөғәр* — төркөм — төркөм.
*Нәфәҡәң (ғәр.)* — ризығың бөтөү.
*Осҡалаҡ* — еңел, еңелерәк холоҡло.
*Өршәк* — Башҡортостандың көньяҡ-көнбайышындағы йылға. Ағиҙелдең һул ҡушылдығы.
*Өфө йылғаһы* — Ҡариҙел.
*Пәйҙә булды (фар.)* — килеп сыҡты, күренде.
*Раа йылғаһы* — *Волга.*
*Сажин* — 2 метр ҙа 13 сантиметрға тиң үлсәм.
*Саҙай* — әжер, хаҡ; кәрәк.
*Сай* — соҡор.
*Сайман* — һеңгөнөң бер төрө.
*Саҡмаһыу* — Иртышҡа ҡойған йылға.
*Саламғула* — тубыҡланып, ике ҡулың тубығына ҡуйып, башын эйеп ултырыу.
*Сарбаз (фар.)* — ябай һуғышсы.
*Сауаб (ғәр.)* — дөрөҫ, дөрөҫлөк.
*Сирмеш* — мари.
*Сорғояз* — Күгәрсен районындағы ауыл. Ағиҙел буйында.
*Сөрөк* — ҡаранғыла яҡтыһы сағылып торған серек ағас. Рустарҙа «мышиный огонь» тип атала.
*Сулманиҙел* — Ҡама йылғаһы.
*Сыраҡтарым (ҡаҙ.)* — күҙ нурҙарым.
*Сәрмәсән* — Башҡортостандың көнбайышындағы йылға. Ағиҙелдең һул ҡушылдығы.

*Сәңгел* — бишек ағасы.
*Сәрсәк* — Үзбәкстандағы Черчек ҡалаһы. Ташкентҡа яҡын.
*Табиғ булған (ғәр.)* — буйһонған.
*Тағәт (ғәр.)* — аллаға буйһоноу, бирелеү.
*Таҡым булыу* — наҡыҫ булыу, етеңкерәмәү.
*Таҡлап (фар.)* — берәмләп, айырып.
*Талай* — байтаҡ, хәтһеҙ.
*Тамъян* — күбеһенсә хәҙерге Белорет районындағы йәшәгән боронғо башҡорт ҡәбиләһе.
*Тамъяндарҙың олатаһы* — тамъян ырыуы башлығы, бейе.
*Таңдап-таңдап* — һайлап-һайлап.
*Тарҡанай* — Бөрйән районындағы Байназар ауылына яҡын ялан.
*Тарҡала* — тарала.
*Тарҡауалы* — Бөрйән районындағы Байназар ауылы эргәһендәге йылға.
*Тибенге* — шпор.
*Тиҫбе* — намаҙ уҡып бөткәндән һуң 102 тапҡыр әйтеләсәк бисмилланы яңылышмай һанап барыу өсөн епкә теҙелгән махсус төймә — таштар.
*Торҡа* — яугирҙың баш кейеме, шлем.
*Төҙ* — ялан, дала.
*Төшлөк ил* — көньяҡ. Был осраҡта Ырымбур крайы (уға Башҡортостан да ингән).
*Туҡһаба* — Бөрйән районындағы туғай.
*Тулан* — йомро ҡыяр.
*Туҡалдарын* — ҡатындарын.
*Түңгәүер* — көньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда йәшәгән боронғо ҡәбилә.
*Тырантай* — сурағай, суртан балаһы.
*Тәкбир ҡылалар (ғәр.)* — «аллаһи әкбәр» тип, алла хөкөмөнә ҡуялар.
*Тәҡдир (ғәр.)* — яҙмыш.
*Тәксир (ғәр.)* — ололап өндәшеү һүҙе.
*Тәфтиш (ғәр.)* — тикшереү.
*Уар* — төньяк башҡорттары телендә ар-удмурт.
*Ульба* — Иртыш йылғаһының уң ҡушылдығы. Семипалатинск ҡалаһы янында. Иртышҡа ҡоя.
*Үнгәр (мон.)* — нәүкәр, ҡоралы төркөм, һуғышсы.
*Фирҡә (ғәр.)* — төркөм, ғәскәр. Бында һүҙ һәр батырға биргән ҡоралы төркөм (дружина) хаҡында бара.
*Хаҡҡа (ғәр.)* — Аллаға.
*Хаин (ғәр.)* — хыянатсы, вәғәҙәһен боҙоусы.
*Һанаш* — һанға һуғыусы, иптәш, ултырҙаш.
*Һарайта (лат.)* — хәрби кейем.
*Һармаҡлап* — һамаҡлап, көйләп әйтеү.
*Һартай* — башҡорттарҙағы һарт ырыуы булһа кәрәк. Урыҫса текста «Сартаев род» тип бирелгән.
*Һарттар* — элек үзбәктәрҙе шулай атағандар.
*Һыла* — 4—5 йәшлек миләш һайғауы.
*Һынсы* — һынап белеүсе үтә һиҙгер, күрәҙәсе.
*Шайҙап* — алдан әҙерләп.
*Шәриҡ (ғәр.)* — иптәш.
*Эстәрендә* — бында «араһында» мәғәнәһендә.
*Әйттереү* — әйттерелгән, вәғәҙәләшкән ҡыҙ.
*Әкә (ҡаҙ.)* — ағай.
*Әклим (ғәр.)* — географик бүлеңеш. Был осраҡта әклим башлыҡтары — ҡәбилә-ырыу башлыҡтары мәғәнәһендә алынған.
*Әүернә тартып киҫеү* — сатраш, арҡыры-буй тартып киҫеү.
*Яйыҡ* — Урал йылғаһы.
*Янаптан (ғәр.)* — жәнаб һүҙенән — хөрмәткә лайыҡ булған.
*Яр* — дуҫ, иптәш, һөйгән кеше.
*Ярап торҙо* — ярһып торҙо.
*Яр таш* — яр буйындағы таш; ҡая таш.
*Яу* — һуғышсы, яуҙа ҡатнашҡан кеше.
*Япан* — яңғыҙ.
*Яһил* — рәхимһеҙ, яуыз.

# ҠОБАЙЫРҘАРҘЫҢ КӨЙ ӨЛГӨЛӘРЕ

## 1. АЛПАМЫША

**Уртаса тиҙлектә**




я_ та бир гел, я_ та бир гел, я_ та бир гел;
ҡыр_ ҙа_ ғы_ быҙ_ ҙы ҡы_ рып өй_ ҙөң,
өй_ ҙә_ ге_ беҙ_ ҙе ө_ йөп өй_ ҙөң, ө_ йөп өй_ ҙөң.
Ҡол_ тап а_ ғай, Ҡол_ тап а_ ғай,
сыҡ_ һаң, а_ ғай, сыҡ_ һаң, а_ ғай, сыҡ_ һаң, а_ ғай;
бер ҡу_ ра йыл_ ҡым һи_ ңә бул_ һын,
Ҡол_ тап а_ ғай, сыҡ_ һаң, а_ ғай, сыҡ_ һаң, а_ ғай;
Ҡол_ тап а_ ғай, Ҡол_ тап а_ ғай,
сыҡ_ һаң, а_ ғай, сыҡ_ һаң, а_ ғай, сыҡ_ һаң, а_ ғай,


ҡар_ лу_ ға_ сым, ҡа_ рын_ да_ шым
һи_ ңә бул_ һын, сыҡ_ һаң, а_ ғай, Ҡол_тап а_ғай.
Тор_ һаң, а_ тай, тор_ һаң, а_ тай,
то_роп та би_ лең быу_һаң, а_ тай, быу_ һаң, а_ тай.
Алт_ мыш ар_ шын аҡ_ бу_ ҙын_ ды
йыр_тыш и_ теп бир_ һәң, а_ тай. Бе_ рәү ки_ лә,
и_ кәү ки_ лә, ө_ сәү ки_ лә, дүр_ тәү ки_ лә,
би_ шәү ки_ лә; ал_ тын_ сы_ һы буҙ_ тур_ ғай_ ҙай
уй_ най ки_ лә, уй_ най ки_ лә, уй_най ки_ лә.

Ҡара ҡаҙым, ҡара ҡаҙым,
Ҡилсе, ҡаҙым, килсе, ҡаҙым,
Ҡилсе, ҡаҙым;
Ҡанатына хат яҙайым,
Ҡилсе, ҡаҙым, ҡара ҡаҙым,
Ҡара ҡаҙым.

Алпамыша, Алпамыша,
Һиндермеһең, һиндермеһең,
Һиндермеһең.
Һин дә былай булыр булһаң,
Ята бир гел, ята бир гел,
Ята бир гел;
Ҡырҙағыбыҙҙы ҡырып өйҙөң,
Өйҙәгебеҙҙе өйөп өйҙөң,
Өйөп өйҙөн.

Ҡолтап ағай, Ҡолтап ағай,
Сыҡһаң, ағай, сыҡһаң, ағай,
Сыҡһаң, ағай;
Бер ҡура йылҡым һиңә булһын,
Ҡолтап ағай, сыҡһаң, ағай, сыҡһаң, ағай;
Ҡолтап ағай, Ҡолтап ағай,
Сыҡһаң, ағай, сыҡһаң, ағай,
Сыҡһаң, ағай,
Ҡарлуғасым, ҡарындашым
Һиңә булһын, сыҡһаң, ағай,
Ҡолтап ағай.

Торһаң, атай, торһаң, атай,
Тороп та билең быуһаң, атай,
Быуһаң, атай.
Алтмыш аршын аҡбуҙыңды
Йыртыш итеп бирһәң, атай.
Берәү килә, икәү килә,
Өсәү килә, дүртәү килә,
Бишәү килә;
Алтынсыһы буҙ турғайҙай
Уйнай килә, уйнай килә,
Уйнай килә.

«Алпамыша менән Барсынһылыу» героик ҡобайырының көйө һүҙҙәре менән 1961 йылда Н. Д. Шоңҡаров тарафынан Һамар өлкәһе Алексеев районы Ташбулат ауылы 46 йәшлек Әхәт Дәүләтшиндан магнитофонға яҙып алынған һәм пластинкаға күсерелгән. Яҙма Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фольклор фондында һаҡлана (инв. № 2/89). Шул уҡ көйҙө композитор Ҡ. Й. Рәхимов нотаға һалған. — Рәсәй ФА Башҡортостан филиалының ғилми архивы, ф. 3, оп. 23/6, 3—4-се биттәр.

## 2. АЛПАМЫША


Уртаса тиҙлектә
А_ тай, а_ тай, ал_па ки_лә, ал_ па (э)сен_дә
бе_рәү ки_лә, бе_рәү ки_лә; ул_тыр_ған_да.
уй е_ ме_ рә, уй е_ ме_рә, та_ ян_ған_да
тау е_ ме_ рә, тау е_ме_ рә. И_ нәй, и_ нәй,
ал_ па ки_ лә, ал_ па ки_ лә, ал_ па (э)сен_дә
бе_ рәү ки_лә, бе_ рәү ки_лә; ул_ тыр_ ған_да
уй е_ ме_ рә, уй е_ ме_ рә, та_ ян_ ған_ да
тау е_ ме_ рә, тау е_ ме_рә. А_ ғай, а_ ғай,


ал_па ки_лә, ал_ па ки_лә, ал_ па (э)сен_ дә
бе_ рәү ки_ лә, бе_ рәү ки_лә; ул_тыр_ған_да
уй е_ ме_ рә, уй е_ ме_ рә, та_ ян_ ған_ да
тау е_ ме_ рә, тау е_ ме_ рә. Еңгә, еңгә,
ал_ па ки_ лә, ал_ па ки_ лә, ал_ па (э)сен_ дә
бе_ рәү ки_ лә, бе_рәү ки_ лә; ул_ тыр_ған_да
уй е_ ме_ рә, уй е_ ме_ рә, та_ ян_ ған_ да
тау е_ ме_ рә, тау е_ ме_ рә. Тор_ со, би_ кәс,
тор_ со, би_ кәс, һа_лын_ ған_ ла сәс_ лә_ рең_де
йый_сы, би_кәс, йый_сы, би_кәс; бил_ лә_ рең_ де
быу_сы, би_ кәс, быу_сы, би_ кәс, тау_ ла_ ры_ ңа


бар_сы, би_кәс, бар_сы, би_кәс. Ҡол_тап а_ғай,
Ҡол_тап а_ғай, ҡо_л(а)ай_ғыр_ҙы бир_се, а_ғай,
бир_се, а_ғай; тау_ла_ры_ма ба_рам, а_ғай,
ба_рам, а_ғай. Ҡол_тап а_ғай, Ҡол_тап а_ғай,
ҡо_л(а)ай_ғыр_ҙы бир_се, а_ғай, бир_се, а_ғай;
тау_ла_ры_ма ба_рам, а_ғай, ба_рам, а_ғай.
Ҡол_тап а_ғай, Ҡол_тап а_ғай, ҡо_л(а)ай_ғыр_ҙы
бир_һәң, а_ғай, бир_һәң, а_ғай; көтөү - кө_төү
йыл_ҡы_ла_рым, кө_төү - кө_төү һы_йыр_ла_рым
би_рәм, а_ғай, би_рәм, а_ғай; кө_төү - кө_төү
һа_рыҡ_ла_рым би_рәм, а_ғай, би_рәм, а_ғай.

Атай, атай, алпа килә,
Алпа (э)сендә берәү килә, берәү килә;
Ултырғанда уй емерә, уй емерә,
Таянғанда тау емерә, тау емерә.
Инәй, инәй, алпа килә, алпа килә,
Алпа (э)сендә берәү килә, берәү килә;
Ултырғанда уй емерә, уй емерә,
Таянғанда тау емерә, тау емерә.
Ағай, ағай, алпа килә, алпа килә,
Алпа (э)сендә берәү килә, берәү килә;
Ултырғанда уй емерә, уй емерә,
Таянғанда тау емерә, тау емерә.
Еңгә, еңгә, алпа килә, алпа килә,
Алпа (э)сендә берәү килә, берәү килә;
Ултырғанда уй емерә, уй емерә,
Таянғанда тау емерә, тау емерә.
Торсо, бикәс, торсо, бикәс, һалынғанла
Сәсләреңде йыйсы, бикәс, йыйсы, бикәс;
Билләреңде быусы, бикәс, быусы, бикәс,
Тауларыңа барсы, бикәс, барсы, бикәс.
Ҡолтап ағай, Ҡолтап ағай,
Ҡол (а) айғырҙы бирсе, ағай, бирсе, ағай,
Тауларыма барам, ағай, барам, ағай.
Ҡолтап ағай, Ҡолтап ағай,
Ҡол (а) айғырҙы бирһәң, ағай, бирһәң, ағай,
Тауларыма барам, ағай, барам, ағай.
Ҡолтап ағай, Ҡолтап ағай,
Ҡол (а) айғырҙы бирһәң, ағай, бирһәң, ағай,
Көтөү-көтөү йылҡыларым,
Көтөү-көтөү һыйырларым,
Бирәм, ағай, бирәм, ағай;
Көтөү-көтөү һарыҡларым,
Бирәм, ағай, бирәм, ағай.

«Алпамыша менән Барсынһылыу» ҡобайырының көйө һүҙҙәре менән «Алпамыша» исеме аҫтында 1961 йылда Н. Д. Шоңҡаров тарафынан Һарытау өлкәһе Перелюб районы Ҡунаҡбай ауылында 59 йәшлек Гөләйшә Байрамғолованан магнитофонға яҙып алынған. Көйҙөң магнитофондан пластинкаға күсермәһе Рәсәй ФА Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фольклор фондында һаҡлана (инв. № 21). Композитор К. Й. Рәхимов уны нотаға күсергән. — (Рәсәй ФА Башҡортостан филиалының ғилми архивы, ф. 3, оп. 23/6, 76—78-се биттәр).

## ҺЫҒЫМТА

Был томға феодализмдың башланғыс дәүеренә хас ырыу-ара мөнәсәбәттәрҙе, көндәлек тормош ваҡиғаларын сағылдырған тормош-көнкүреш эпостары тупланды. Был әҫәрҙәрҙең күбеһендә эре ырыу-ҡәбилә ойошоу тенденцияһы, ырыуҙар берҙәмлеге, тыуған илде сит дошмандарҙан һаҡлау темаһы өҫтөнлөк итә («Алпамыша», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Алдар менән Зөһрә»).

Борон ил эсендәге мәсьәләләрҙе хәл иткәндә, ырыу башлыҡтары йәмғиәттең иң абруйлы кешеләренә, аҡһаҡалдарға, сәсәндәргә, батырҙарға таяныр булған. Томға ингән эпостарҙа ла шаҡтай тулы сағылыш тапҡан.

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йорт эштәрен башҡарыу, балалар тәрбиәләү менән генә сикләнмәгән, йәмәғәт һәм йәмғиәт тормошонда әүҙем ҡатнашҡан, хатта ирҙәр менән бер ҡатарҙан яу сапҡан. «Алпамыша», «Алдар менән Зөһрә» эпостарының героинялары — ана шундайҙарҙан.

## РЕЗЮМЕ

Данный том составлен из произведений, в которых отражаются межплеменные отношения, события поаседневной жизни, относящиеся ко времени раннего феодализма, прослеживаются зов к единению племен, призыв к защите Родины («Алпамыша и Барсынхылу», «Кузыйкурпес и Маянхылу», «Алдар и Зухра»).

В былые времена в башкирской общине все наиболее важные вопросы решались на йыйынвах (собраниях) аксакалов, сэсэнов-сказителей, батыров. Все эти социальные картины нашли отражение во многих эпосах, вошедших в том.

У башкир женщина была почитаемым, уважаемым членом общества. Она была не только хранителем очага, но и принимала активное участие в общественной жизни, иногда даже воином, наряду с мужчинами — в отражении нашествий врагов. Эти качества их наиболее полное отражение нашли в сказаниях «Алпамыша и Барсынхылу», «Кузыйкурпес и Маянхылу», «Алдар и Зухра».

## SUMMARY

The present volume is composed of works rohish reflect inter-tribal relations, events of daily life referring to early feudal times. There one can trace a call to tribal unity, and the call to defend the Motherland *'Alpamysha and Barsynhylyu,.'Kunhyirpas and Majanhylyu'*, *'Aldar and Zykhra'*..

In the days of yore all major issues to be decided at congregations {yeyyns) of the aldermen, bards and heroes.genus chieflains {*aqsaqal, batyr* in Bashkir}. All these social phenomena have found their reflection in many epic intered into the volume.

The woman was an esteemed and respected member of the Bashkir society. Not only was she the hearth keeper but also took an active part in social life, at times even as a warrior along roith men rebuffing the enemies onslaught. These qualities found their fullest reflection in such epics as *'Alpamysha and Barsynhylyu, 'Kunhyirpas and Majanhylyu'*, *'Aldar and Zykhra'*.



## ÖZET

Bu cilde hayat ile ilgilidestanlar girmiştir. Onlar feodalizmin erken devirlerine ait olayları, kabileler arasi münasebetleri anlatiyorlar. Destanlarin çodunda kabileierin birleşmesine ve vatani kurtarmaya çaðri bulunmaktadir.

Eski zamanlarda Başkurt toplumunum önemli meseleleri (askeri seferler, yaðmalara kars, savas, kabileler arasindaki problemler) aşiret ve soylarin saygili şhislar (aksakallar, sesenler ve batirlar) toplansitisinda (yiyinda) hal edilmiştir. Bunlar destanlarin çoðunda anlatilmiştir.

Başkurt destanlarinda kadinlara büyük yer ayrilmiştir. Eski tarihi kaynaklara göre, Başkurtlarda kadinlar toplumun saygili ferdleri olmuştur. Onlar sadece ev hanimi deðil, gerekli zamanlarda erkeklerle berader düşmanlara karşi da savaşan asker de olmuşlardir. «Alpamişa», «Aldar ve Zühre», «Kuziykurpes ve Mayanhiliw» adli destanlarda kadinlarin bu vasitlari gösterilmiştir.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


Башҡорт халҡының тормош-көнкүреш эпосы. (*Мөхтәр Сәғитов, Берйән Байымов, Салауат Галин*) . . . . . . 6
Алпамыша . . . . . . 35
Алтыйәшәр Алпамыша (*1-се вариант*) . . . . . . 46
Алпамыша (*2-се вариант*) . . . . . . 51
Ҡуҙыйкүрпәс (*Беляев версияһы*) . . . . . . 68
Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу (*Ғ. Сәләм версияһы*) . . . . . . 126
Зөһрә менән Алдар . . . . . . 150
Маҡтымһылыу . . . . . . 277
Уҙаҡ менән Туҙаҡ — балабәшнәк ярсығы . . . . . . 281
Һуңғы һартай . . . . . . 289
Ҡоблан батыр . . . . . . 294
Күсәк бей . . . . . . 304
Ҡарағөлөмбәт менән Аҡкəломбəт . . . . . . 311
Күсәк бей (*Ҡыпсаҡ версияһы*) . . . . . . 319
Бабсаҡ бей менән Ҡарағөлөмбәт бей (*Бөрйән версияһы*) . . . . . . 345
Шартлы ҡыҫҡартмалар . . . . . . 349
Аңлатмалар . . . . . . 350
Һүҙлек . . . . . . 385
Ҡушымта: Ҡобайырҙың көй өлгөләре . . . . . . 389
Һығымта . . . . . . 397
Резюме . . . . . . 397

*«Башҡорт халыҡ ижады» йыйынтығы*
*Рәсәй Фәндәр академияһы*
*Өфө ғилми үҙәге*
*«Почет Билдәһе» орденлы*
*Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында*
*әҙерләнде һәм институттың*
*ғилми советы тарафынан баҫырға раҫланды*

The p
daily life
call to def
*'Aldar an*
In th
aldermen.
phenomen
The
was she t
rior along
reflection
*'Aldar an*

Bu c
lari, kabil
ve vatani
Eski
kars, sava
sesenler
anlatilmiş
Başk
Başkurtla
gerekli za
«Alpamiş
bu vasitla

Литературно-художественное издание

**БАШКИРСКОЕ НАРОДНОЕ ТВОРЧЕСТВО**

Том IV

**ЭПОС**

*(на башкирском языке)*

Рәссамы һәм биҙәүсе мөхәррире *А. Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *З. Сыңғыҙова*
Корректорҙары *Г. Рустиева, Ә. Кәримова*

Нәшр. лиц. № 0168. 10.04.96. Йыйырға бирелде 22.02.99. Баҫырға ҡул ҡуйылды 14.07.99. Ҡағы
форматы 60×90$^{1}/_{16}$. Офсет ҡағыҙы. Әҙәби гарнитура. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы
баҫма таб. 25,0+0,25 форзацы+0,5 йәбештермә. Шартлы буяу отт. 27,5. Иҫәп-баҫма таб
26,07+0,45 форзацы+0,55 йәбештермә. Тиражы 4000 дана. Заказ № 152.

Башҡортостан «Китап» нәшриәте. 450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.
Өфө полиграфия комбинаты. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.